Азат Ярмуллин

БАШҠОРТ АРМИЯҺЫ ТАРИХЫНАН

Азат Ярмуллин

БАШҠОРТ АРМИЯҺЫ ТАРИХЫНАН

Зәйнәб
Биишева
исемендәге
"КИТАП"
нәшриәте

ӨФӨ · 2012

УДК 355/359 (470.57)
ББК 68.4 (2 Рос.Баш)
Я 78

Рецензенттар:

С. Ф. ҠАСИМОВ, тарих фәндәре докторы, профессор,
Ә. З. ӘСФӘНДИӘРОВ, тарих фәндәре кандидаты, профессор.

Ярмуллин А. Ш.

Я 78 Башҡорт армияһы тарихынан. – Өфө: Китап, 2012. – 280 бит.

ISBN 978-5-295-05503-4

Был китап 1917–1919 йылдарҙағы Башҡорт милли хәрәкәтенең хәрби көсө, терәге булған, Башҡортостанға автономия яулаған башҡорт милли армияһының данлы тарихына бағышланған. Бында архив документтары, хәтирәләр нигеҙендә Башҡорт корпусы, Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы, Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы, Муса Мортазиндың атлы бригадаһының Граждандар һуғышы фронттарында күрһәткән батырлыҡтары, башҡорт хәрби символикаһы, башҡорт һалдаттары йырлаған йырҙар тураһында бәйән ителә. Шулай уҡ Башҡорт армияһы сардарҙары, полк муллалары, комиссарҙарының ҡыҫҡаса биографияһы, Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнгән яугирҙарҙың исемлеге бирелгән.

Бынан тыш китапта Башҡортостан Республикаһы Милли музейы, Санкт-Петербург, Өфө архивтары фондтарында һәм дә ғаилә архивтарында һаҡланған башҡорт ғәскәрҙәренең алтмыштан ашыу фотоһүрәте тупланған.

Китап башҡорт халҡының тарихы менән ҡыҙыҡһыныусы киң ҡатлам уҡыусыларға тәғәйенләнә.

ТП - 130/12

УДК 355/359 (470.57)
ББК 68.4 (2 Рос.Баш)

ISBN 978-5-295-05503-4

© Ярмуллин А. Ш., 2012
© Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы, 2012

ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Баш һүҙ. Башҡортостанға автономия яулаған ғәскәр 4
Башҡортостан Республикаһының тыуған көнө 9
Башҡорт корпусы – Башҡорт милли армияһы 16
Башҡорт армияһының символикаһы: униформа һәм байраҡтар 28
Башҡорт хәрби шураһы – Башҡорт армияһының штабы 38
«Беҙҙәр ғәскәр, әйҙә, алға марш!» Башҡорт һалдаттары йырлаған йырҙар 42
Орск ҡалаһын алған башҡорт батальоны 48
Нестеров музейында бар бер картина 54
Айырым Башҡорт Ҡыҙыл Армияһы 56
Башҡорт кавалерия дивизияһы Көньяҡ фронтта 64
Башҡорт ғәскәрҙәре Петроградта 81
Комбриг Мортазин һәм уның атлы бригадаһы 91
Йырлап килә Мортазиндың эскадрондары. Мөғәлләм Мирхәйҙәров хәтирәләре 110
Башҡорт армияһы сардарҙары 117
Полк муллалары һәм комиссарҙар 175
Мортазиндың ыласындары 195
«Бәхет көнө» 212
Күсәрбай 228
Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнгән башҡорт ғәскәрҙәре яугирҙары 236

Кушымта
Башҡорт армияһы тарихы. Ваҡиғалар хронологияһы 252
Башҡортостан автономияһының хәрби учреждениелары 265
Башҡортостан автономияһының ҡоралһы көстәре 266
Автономиялы Башҡорт Совет Республикаһының хәрби учреждениелары 268
Автономиялы Башҡорт Совет Республикаһының ҡоралһы көстәре 269
Ҡулланылған сығанаҡтар 273

Баш һүҙ

БАШҠОРТОСТАНҒА АВТОНОМИЯ ЯУЛАҒАН ҒӘСКӘР

Ҡыуан аңлап, әй Ватан,
Беҙ аңланыҡ хәлеңде;
Һине һалып ҡулбашҡа,
Беҙ йөкләнек ғәмеңде.

Ш. Бабич. «Башҡортостан». 1918 йыл

Башҡорт халҡы өсөн милли ғәскәр борон-борондан үҙаллылыҡтың бер факторы булып торған. Уның тамырҙары сал тарих төпкөлдәренә барып тоташа. Мәҫәлән, XIII быуатта башҡорттар күпләп монгол-татар ғәскәренә хеҙмәткә йәлеп ителгән. Монголдар, үҙ сиратында, башҡорттарҙың аҫабалыҡ хоҡуғын таныған. Шул уҡ осорҙа Иранда илһаниҙарҙа (XIII–XIV быуаттарҙа монгол династияһы) хәрби хеҙмәттә йөрөгән Ғазанхан һәм Сыраҡан Башҡорт исемле ике башҡорт генералының исеме билдәле. «Башҡорттарҙың бер өлөшө ҡыпсаҡтар менән бергә Мысырҙа һәм Сүриәлә мәмлүктәр сифатында хеҙмәт иткәндәр, һәм араларынан күренекле дәүләт эшмәкәрҙәре сыҡҡан. Шуларҙан айырыуса Насретдин әл-Насыри әл-Башҡурди, Сәнжәр әб-Руҡны әл-Башҡурди, Алаитдин Башҡурд әл-Насыри, Ғилметдин әл-Башҡурди Берҡундарҙың бөйөк әмир булыуҙары, йәнә Сарын әл-Дин әл-Бшҡурди тарихи сығанаҡтарҙа күп иҫкә алына», – тип яҙа Зәки Вәлиди. Ғилметдин әл-Башҡурдиҙың Ҡылауын солтандың Сүриәләге наместнигы булғанлығы билдәле.

XVI быуат уртаһында Башҡортостан үҙ ирке менән Рус дәүләте составына инеү менән башҡорттоң хәрби тарихында яңы осор башлана. Билдәле булыуынса, Рус дәүләтенә ингән саҡта башҡорттар Аҡ батшанан аҫабалыҡ хоҡуғы ала, үҙ сиратында, батша уларға хәрби хеҙмәт бурысы йөкмәтә. Иван IV заманынан алып, 455 йыл эсендә башҡорт ғәскәре Рәсәй өсөн ниндәй генә һуғыштарҙа, хәрби походтарҙа ҡатнашмай. Башҡорттар 1558–1583 йылдарҙа Ливон орденына, 1570–1572 йылдарҙа Ҡырым ханлығына ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнаша. 1611–1612 йылдарҙа Кузьма Минин һәм Дмитрий Пожарский ополчениеһы составында поляктарҙы Мәскәүҙән ҡыуып сығара. 1687, 1689 йылдарҙа Ҡырым

походтарында, 1695, 1696 йылдарҙа Петр I ойошторған Азов походтарында башҡорт ғәскәре әүҙем ҡатнаша.

1700–1721 йылдарҙағы Төньяҡ һуғышында 1000 башҡорт яугиры була. 1756–1763 йылдарҙа Пруссияға ҡаршы һуғышта (Ете йыллыҡ һуғыш) 531 башҡорт атлыһы ҡатнаша. 1772 йылда өс меңлек башҡорт ғәскәре Польшала Бар конфедерацияһы ғәскәрҙәрен ҡыйратыуға йәлеп ителә. 1788–1790 йылдарҙа башҡорттар рус-швед һуғышында була.

1805–1807 йылдарҙа Францияға ҡаршы һуғыш өсөн 20 башҡорт полкы (10 мең яугир) ойоштoрола. 1812 йылғы Ватан һуғышы мәлендә 28 башҡорт полкы төҙөлгәне билдәле. Шул полктарҙың егермеһе һуғыштарҙа туранан-тура ҡатнаша. 1828–1829 йылдарҙағы Рус-төрөк һуғышына ике башҡорт полкы йәлеп ителә. 1839–1840 йылдарҙа башҡорт яугирҙары Хиуа, 1853 йылда Коканд (Аҡмәсет) походтарында ҡатнаша. 1853–1856 йылдарҙа Ҡырым һуғышы мәлендә 2 башҡорт полкы инглиз һәм француз ғәскәрҙәре десанты һөжүменән Балтика буйын һаҡлай.

XIX быуаттың 20–30-сы йылдарынан батша хөкүмәте башҡорт ғәскәрен бөтөрөргә ниәтләй. Әммә башҡорттарҙың ризаһыҙлығынан хәүефһеҙләнеп, улар милли ғәскәрҙе әкренләп юҡҡа сығарырға ҡарар итә. Шул рәүешле 1865 йылда башҡорт ғәскәре тамам бөтөрөлә. Милли ғәскәр һәм хәрби хеҙмәт төшөнсәһе башҡорттоң аңына ғына түгел, ҡанына һеңгәнгә күрә, уның юҡҡа сығарылыуы үҙаллылыҡтың һуңғы бер остоғон юғалтыу менән бер була. Ләкин быға ҡаршы сығырға бөлгөнлөккә төшкән башҡорт халҡының хәле лә, көсө лә булмай.

Ә инде 1917 йылда батша власы ҡолатылғас, башҡорт халҡы автономия төҙөү менән бер рәттән Башҡорт ғәскәрен тергеҙеү мәсьәләһен күтәреп сыға. Башҡорт Мәркәз шураһы үҙенең 1-се фарманында (1917 йыл, 11 ноябрь): *«...Һеҙ, башҡорттар, үҙегеҙҙең Мәркәз шурағыҙға үтә лә ауыр бурыстар йөкмәттегеҙ... Һеҙ Мәркәз шураға ярты быуат элек бөтөрөлгән эскадрондарығыҙҙы тергеҙергә ҡуштығыҙ. Был мәсьәлә менән Мәркәз шураның вәкиле Керенский хөкүмәтенең хәрби бүлегенә инеп сыҡты. Әммә мәсьәлә хәл ителмәй ҡалды...»* – тип башҡорт халҡына хәбәр итә.

1917 йылдың 8–20 декабрендә үткән Дөйөм Башҡорт ойоштороу ҡоролтайы инде 15 (16) ноябрҙә иғлан ителгән Башҡортостан автономияһын раҫлау, Башҡортостан хөкүмәтен һайлау менән бер рәттән башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороу буйынса 13 пункттан торған ҡарар ҡабул итә.

1918 йылдың башында Башҡорт хөкүмәте уны тормошҡа ашырыу эшенә тотона. 1918 йылдың ғинуарында хөкүмәт тарафынан Баймаҡҡа ебәрелгән башҡорт офицерҙары Әмир Ҡарамышев, Ғабдулла Иҙелбаев, Ғимран Мағазовтар 400 кешенән торған беренсе башҡорт отрядын ойоштора. Әммә 4 февраль Ырымбурҙа Башҡорт хөкүмәте большевиктар тарафынан ҡулға алына. Ә Баймаҡта торған башҡорт отряды бындағы коммунистар дружинаһы тарафынан мәкерле рәүештә тар-мар ителә. Большевиктарҙы дошман тип күрмәгән, йоҡлап ятҡан башҡорт отрядын

Баймаҡ эшселәре төндә килеп баҫа һәм ҡоралһыҙландырып, командирҙарын ата.

1918 йылдың июнендә Силәбе ҡалаһында яңынан тергеҙелгән Башҡорт хөкүмәте, тәү сиратта, үҙ ғәскәрҙәрен – Башҡорт армияһын ойоштороу эшенә тотона. Сөнки хәрби көсһөҙ башҡорт халҡының мәнфәғәттәрен яҡлап булмаясағына яҡшы төшөнә улар. 1918 йылдың 10 июлендә башҡорт халҡына дөйөм мобилизация иғлан ителә. Ике-өс ай эсендә Башҡорт хөкүмәте 6 йәйәүле һәм 1 атлы полктан торған башҡорт ғәскәрҙәрен төҙөүгә өлгәшә. Улар ике дивизиянан торған Айырым Башҡорт корпусын тәшкил итә. Корпустың командиры итеп батша армияһында хеҙмәт иткән башҡорт генералы Хажиәхмәт Ишбулатов тәғәйенләнә. Бынан тыш кантондарҙа (13 кантон) 3 мең кешелек ирекле башҡорт отрядтары ойошторола (һәр бер кантонда 300 кеше тирәһе).

Башҡорт ғәскәрҙәре менән командалыҡ итеү өсөн Башҡорт хөкүмәтенең Зәки Вәлиди етәкселегендәге Хәрби бүлеге янында Башҡорт хәрби шураһы – Башҡорт ғәскәренең штабы (Штаб Башкирского войска) булдырыла. З. Вәлиди уның рәйесе итеп һайлана. 1918 йылдың авгусындағы фарманы менән Башҡорт хәрби шураһы башҡорт ғәскәрҙәре өсөн милли униформа индерә. Шулай итеп, башҡорт полктары ысын мәғәнәһендә милли армияға әүерелә.

Әммә хәрби-оператив яҡтан Аҡ армияға буйһонған башҡорт ғәскәрҙәрен аҡ генералдар нисек тә булһа таратырға, бөтөрөргә тырыша. Башҡорт полктарын төрлө фронттарҙа тота. Ә инде Колчак, килеү менән, Башҡортостан автономияһын һәм уның ғәскәрҙәрен бөтөнләй бөтөрөргә тигән фарман бирә.

Ләкин Зәки Вәлиди төрлө фронттарға һибелгән башҡорт ғәскәрҙәрен бер урынға туплауға ирешә. Йәғни, аҡ командованиеның ҡаршы булыуына ҡарамаҫтан, башҡорт полктары төрлө фронттарҙан Башҡортостанға йүнәлә һәм улар яңынан ике дивизиялы Башҡорт корпусына берләшә. Башҡорт ғәскәрҙәренең командующийы итеп Зәки Вәлиди тәғәйенләнә.

Кантондарҙа торған ирекле отрядтар Башҡортостан автономияһының урындағы власть органдары – кантон башҡармаларының эшмәкәрлеген тәьмин итә. Йәғни Граждандар һуғышы барған осорҙа ла Башҡорт хөкүмәтенең, Башҡорт армияһының тылы ныҡ була.

Колчак яғында автономияға өмөт булмаясағын аңлаған Башҡорт хөкүмәте һәм башҡорт ғәскәрҙәре 1919 йылдың февралендә ҡыҙылдар яғына сыға. 20 мартта Мәскәүҙә Башҡорт хөкүмәте вәкилдәре Үҙәк совет власы менән Башҡортостан Совет автономияһы тураһында килешеү төҙөй. Икенсе һүҙ менән әйткәндә, Колчак танымаған автономияны Совет власы таный. Большевиктар башҡорт халҡына үҙаллылыҡ бирергә теләгәндән түгел, башҡорттарҙың яҡшы һуғышҡан 8 полклы үҙ ғәскәре булғанға ғына уларҙың автономияһын танырға мәжбүр була. Сөнки башҡорт ғәскәрҙәрен үҙ яғына сығарып советтар, беренсенән, Колчактың фронтын көсһөҙләндерә (башҡорт ғәскәрҙәре ҡыҙылдарға сыҡҡас, аҡтарҙың йөҙ саҡрым тирәһе фронты асыҡ тороп ҡала). Ә аяуһыҙ һуғыш барған осорҙа был беренсе пландағы мәсьәлә була. Икенсенән,

һуғышта үҙҙәрен ойошҡан һәм яусыл ғәскәр итеп күрһәткән башҡорттарҙы үҙ файҙаһына ҡулланырға теләй.

Шуға күрә лә 1919 йылдың 20 мартындағы килешеү буйынса Башҡортостан автономияһына киң хоҡуҡтар бирелә. Башҡортостан – Рәсәйҙә федерация иткән тәүге республика була. Ысын мәғәнәһендә, большевиктар теләмәһәләр ҙә, ошо тарихи килешеү менән Рәсәйҙә федерализмдың тәүге нигеҙҙәре һалына.

Килешеү буйынса дүрт полкы кавалерия дивизияһынан, өс полкы уҡсы бригадаһынан, артдивизиондан торған Айырым Башҡорт Ҡыҙыл Армияһын ойоштороу ҡарала. Зәки Вәлиди Башҡортостандың хәрби комиссары һәм Айырым Башҡорт армияһының командующийы итеп тәғәйенләнә.

Колчак армияһы 1919 йылдың яҙында һөжүмгә күсә, Башревком (Башҡортостандың ваҡытлы революцион хөкүмәте) менән башҡорт ғәскәрҙәре Саранскиға эвакуациялана. Килешеүгә ярашлы бында ике йәйәүле һәм ике кавалерия полкынан торған Башҡорт дивизияһы ойошторола башлай. Әммә июнь айында Реввоенсовет әле ойошторолоп та бөтмәгән башҡорт полктарын Көньяк фронтҡа, Деникинға ҡаршы ебәрергә бойора. Килешеү буйынса Колчакка ҡаршы һуғышырға, Башҡортостанды азат итергә тейешле башҡорт ғәскәрҙәре Украинаға ташлана. Харьковта гарнизон хеҙмәте генә үтәйәсәк тигән һылтау менән оҙатып, ә ысынында ярты юлда яңы приказ менән башҡорт полктарын ут эсенә алып барып тығалар. Большевиктар, шулай итеп, башҡорт ғәскәрҙәрен Зәки Вәлиди ҡулынан тартып ала.

Ҡорал, төрлө кәрәк-яраҡтар етешмәһә лә, Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы Көньяҡ фронтта иҫ китмәле батырлыҡ өлгөләре күрһәтә. Харьков янында 14-се армияның бөтә ҡыҙыл ғәскәрҙәр сигенгәндә бер Башҡорт дивизияһы ғына Деникинға ҡаршы тора. Шул арҡала күп осраҡта ҡамауҙарға эләгә.

Көньяҡ фронттан Башҡортостанға ҡайтып, үҙ ере өсөн һуғышырға теләгән башҡорт һалдаттарының өмөтө аҡланмай. Байтаҡ юғалтыуҙар кисергән Башҡорт кавалерия дивизияһының дүрт полкынан йыйылма полк яһалып, 1919 йылдың сентябрендә Петроградҡа оҙатыла. Бында дивизия яңынан тулыландырыла. Бынан тыш Бәләбәйҙә ойошторолған Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы ла Үҙәктең бойороғо менән Петроградҡа оҙатыла. Бында 10 меңдән ашыу башҡорт ғәскәре туплана. Кавалерия дивизияһы менән уҡсы бригадаһынан берешәр полк бүленеп, улар Башҡорт артдивизионы менән Петроград фронтының Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмөн тәшкил итә. Башҡорт ғәскәрҙәре Юденич армияһы һөжүменең төп йүнәлешенә ҡуйыла. Шулай итеп, башҡорт ғәскәрҙәренә Башҡортостан автономияһы өсөн Граждандар һуғышының төрлө фронттарында ҡан түгергә тура килә.

Юденич армияһы ҡыйратылғас, 1920 йылда Петроградтағы башҡорт ғәскәрҙәренән Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы Рәсәй менән Финляндия сиген һаҡларға ҡала. Ә Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһынан ҡалған бер полкты Польша фронтына, Урал фронтынан сираттағы

һуғышҡа, поляктарға ҡаршы ташланған Муса Мортазиндың Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһына ҡушалар. 1921 йылда Башҡорт кавалерия бригадаһы һәм Башҡорт уҡсы бригадаһы ла таратыла. Шулай итеп, башҡорт ғәскәрҙәренең береһе лә Башҡортостанға ҡайтарылмай. Фронттан фронтҡа ташланып, бөтөрөлә.

Башҡорт армияһы үҙенә 1918 йылда уҡ йөкмәтелгән төп маҡсатҡа ирешә – Башҡортостан автономияһын һаҡлап алып ҡала. Әммә автономия өсөн башҡорт һалдаттарына ниндәй генә фронттарҙа һуғышырға тура килмәй, ғәзиз тыуған ере – Башҡортостаныбыҙҙың үҙаллылығы өсөн күпме ир-егеттәр башын һала ҡанлы яуҙарҙа.

Ләкин Зәки Вәлиди советтарҙан киткәс, уға «буржуаз милләтсе» ярлығы тағылып, ул етәкселек иткән башҡорт ғәскәрҙәренең Башҡортостанға автономия яулауы ла онотола, тарихтан бөтөнләй алып ташлана. Совет власы, коммунистар партияһы арҡаһында ғына башҡорт халҡы автономиялы булды тигән тарих 70 йыл буйы беҙҙең аңға һеңдерелде.

Үҙгәртеп ҡороу заманы менән Зәки Вәлидиҙең яҡты исеме халыҡҡа ҡайтты. Әммә Зәки Вәлиди етәкселегендәге Башҡортостанға автономия яулаған Башҡорт милли армияһының тарихы әле яҡшылап өйрәнелмәгән, ҡаһарман башҡорт сардарҙарының, ябай башҡорт һалдаттарының Ватан алдында күрһәткән хеҙмәттәре лайыҡлы баһа алмаған. Республикала Башҡорт корпусы, Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы, Муса Мортазиндың Башҡорт кавалерия бригадаһы, Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы һалдаттарының яҡты иҫтәлегенә бағышланған бер һәйкәл дә, музей ҙа юҡ, үкенескә ҡаршы.

Бөгөн Башҡортостан исемле республика бар икән, беҙ уның өсөн тәүге сиратта ауыр һынылыш осоронда ғәскәр туплап, халҡыбыҙҙың мәнфәғәттәрен яҡлап сыҡҡан ата-бабаларыбыҙға рәхмәтле булырға, уларҙың фиҙаҡәрлеге алдында баш эйергә тейешбеҙ.

Мин был китабымда бөгөнгө Башҡортостан Республикаһына нигеҙ һалған 1917–1921 йылдарҙағы Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең хәрби көсө – Башҡорт милли армияһының данлы тарихын архив документтары, хәтирәләр, музей экспонаттары, фотографияларҙы өйрәнеү нигеҙендә бәйән итмәксемен. Китапта тәүге тапҡыр башҡорт ғәскәрҙәре тарихы буйынса бай иллюстратив материал – алтмыштан ашыу фотография тупланған. «Башҡорт армияһы тарихынан» китабы уҡыусыларға данлы тарихыбыҙҙың тағы бер битен яҡындан танып белергә ярҙам итер, тип ышанам.

Башҡортостан Республикаһының тыуған көнө

Шатландырҙың, Тәңрем, һибеп нурың,
Башҡортостан халыҡ донъяһын.

Ш. Бабич. «Олуғ шатлыҡ». 1917 йыл

Рәсәйҙең федератив дәүләт булараҡ үҫеше Башҡортостан автономияһының тарихы менән тығыҙ бәйләнгән. 1917 йылдың тәүге яртыһындағы дөйөм мосолман хәрәкәтендә ҡатнашҡан башҡорттар Рәсәйҙең федератив ҡоролошо өсөн сығыш яһаусыларҙың алғы рәтендә була. 1917 йылдың 1—11 майында Мәскәүҙә үткән I Бөтә Рәсәй мосолман съезында 55 кешенән торған башҡорт делегацияһы милли-территориаль автономия идеяһы менән сығыш яһай, ер мәсьәләһен күтәреп сыға. Ошо съезда уҡ Башҡортостан автономияһын тормошҡа ашырыу өсөн эшсе орган – Башҡорт мәркәз шураһы ойошторола. Уның менән Башҡорт милли хәрәкәте лидеры Әхмәтзәки Вәлиди, Аллабирҙе Йәғәфәров һәм Сәғит Мерәҫовтар етәкселек итә.

1917 йылдың май-июнь айҙарында Башҡорт мәркәз шураһының урындағы органдары ойошторола, ике тапҡыр кәңәшмә-конференция үткәрелә. Ә инде 1917 йылдың 20—27 июлендә Ырымбурҙа I Башҡорт ҡоролтайы йыйыла. Бында Башҡорт үҙәк шураһының башҡарма комитеты һайлана. Ҡоролтай Башҡортостандың милли-территориаль автономияһын тормошҡа ашырыу юлына ныҡлы йүнәлеш ала. Ҡоролтайҙың Ҡазан ҡалаһына, Мосолмандарҙың Бөтә Рәсәй милли шураһына ебәргән телеграммаһында былай тиелә: *«Всеобщий съезд башкир... приветствует решение своих волжских братьев о приступлении к проведению в жизнь, не дожидаясь Учредительного собрания, национально-культурной автономии.*

Перед башкирским народом стоит еще более трудная задача – завоевание территориальной автономии Башкурдистана...»

1917 йылдың 25—29 авгусында Өфөлә үткән II дөйөм башҡорт ҡоролтайы Башҡорт үҙәк шураһының 12 кешенән торған яңы составын һайлай. Бынан тыш Өфө һәм Силәбе ҡалаларында шураның өлкә сәркәтиптәре тәғәйенләнә.

Икенсе мөһим мәсьәлә булып 1918 йылдың башында үтәсәк Рәсәйҙең Ойоштороу йыйылышында (Учредительное собрание) ҡатнашыу тора. Ҡоролтай башҡорт халҡы мәнфәғәттәрен алға һөрөүсе делегаттарҙы

һайлау мәсьәләһен ҡәтғи ҡуя: *«...башкиры в избирательных округах, с ведома Центрального шуро, могут войти в блок с партиями и национальностями, согласными с платформой башкир.*

Кандидатам должен быть дан наказ и взято от них слово, что они будут служить нашей платформе». Сөнки Ваҡытлы хөкүмәт Рәсәйҙең алда торған дәүләт королошо мәсьәләләрен ошо йыйылышта хәл итергә ниәтләй. Шуға күрә лә Башҡорт милли хәрәкәте был оло йыйынға ҙур өмөттәр бағлай.

Әммә 1917 йылдың көҙөндә Рәсәйҙең үҙәгендә сәйәси хәл ҡырҡа үҙгәреп китә. 25 октябрь (яңыса 7 ноябрь) Петроградта большевиктар Ваҡытлы хөкүмәтте ҡолатып, власты үҙ ҡулына ала. Әммә күптәр большевиктарҙың власын танымай, уларҙың сәйәсәтенә ҡаршы сыға. Башҡорт үҙәк шураһы, илдә башланған боларыш мәлендә башҡорт халҡы үҙ яҙмышын үҙ ҡулына алырға тейеш, тигән аныҡ фекергә килә. 1917 йылдың 11 ноябрендә (яңыса 24 ноябрь) башҡорт халҡына, башҡорт район һәм өйәҙ шураларына ҡарата сығарылған 1-се фарманда былай тиелә: *«...Распустив Временное правительство в Петрограде, большевики, хотя и захватили в свои руки Москву, Казань, Харьков, Саратов, Самару, Уфу и другие губернские города внутренней России, но тем не менее многие страны (местности) их не признают, им не поддаются, а, наоборот, каждая из них управляется самостоятельно (само собой), поэтому теперь нельзя и определить, кто в России является главой (властью) и кто подвластным, подданым...»* Ошо хәлдә башҡорт халҡы өсөн берҙән-бер юл — тиҙ арала Башҡортостанда власты үҙ ҡулына алыу, үҙенең хәлен үҙе күреү, үҙен үҙе һаҡлау, тиелә фарманда.

Дүрт көндән, 15 ноябрҙә (яңыса 28 ноябрь), Ырымбурҙа урынлашҡан Башҡорт үҙәк шураһы Ырымбур, Өфө, Пермь, Һамар губерналарының башҡорт ерҙәрен Рәсәй Республикаһының автономиялы өлөшө, йәғни Башҡортостан автономияһы тип иғлан итеү тураһында ҡарар сығара. Ә иртәгеһенә, йәғни **16 ноябрҙә (яңыса 29 ноябрь)**, Үҙәк шура үҙенең 2-се һанлы фарманы менән **Башҡортостан автономияһын иғлан итә:**

Фарман № 2

ВСЕМ НАРОДАМ БАШКИРИИ, ВСЕМ БАШКИРСКИМ РАЙОННЫМ СОВЕТАМ, БАШКИРСКИМ ВОЛОСТЯМ ОРЕНБУРГСКОЙ ГУБЕРНИИ, А РАВНО ШАДРИНСКОГО И ЕКАТЕРИНБУРГСКОГО УЕЗДОВ ПЕРМСКОЙ ГУБЕРНИИ ОТ БАШКИРСКОГО ОБЛАСТНОГО СОВЕТА

Башкирский областной совет объявляет башкирскую территорию Оренбургской, Уфимской, Самарской и Пермской губерний с сего 15 ноября автономной частью Российской республики и до окончательного установления границ областным учредительным съездом (курултаем),

созываемым в г. Оренбурге 8 декабря с. г., приступает к фактическому осуществлению автономного управления Башкирией в пределах пока одной башкирской территории, именно в 44 башкирских волостях Оренбургской губернии, 8 волостях Пермской губернии, смежных с челябинскими башкирскими волостями (Оренбургской губ.), с выделением этой территории от тех частей губерний, в которых преобладают немусульманские элементы.

Во всей этой территории вся гражданская, судебная и административная власть, за исключением тех отраслей хозяйственной жизни, немедленный переход которых от одной власти к другой (отрицательно) отразился бы на их нормальном течении, переходит к революционным организациям Башкирии во главе с Башкирским областным советом.

В автономной Башкирии мелкие земские единицы сохраняются. Изменения в «Положение о волостных земствах», согласно условиям жизни и быту башкир, будут проведены учредительным курултаем.

В автономной Башкирии не будет разделения на губернии и уезды. Взамен их Башкирия разделяется на отдельные кантоны, которые находятся в непосредственном ведении высшей власти Башкирии. В Оренбургской и части Пермской губернии образуются следующие кантональные единицы:

Всего 8 кантональных объединений волостей с перечислением последних.

Немедленно с объявлением автономии в указанной территории к ведению высшей власти Башкирии, а также кантональных и волостных властей, переходят следующие функции: сохранение общественной безопасности, сбор и расходование прямых налогов (земские и окладные), суд, распоряжение народным достоянием Башкирии – землей, недрами, лесами, водами и проч. и охрана их, народное образование, содержание милиции и народное продовольствие.

В ведении существующих общегосударственных и губернских – административных и хозяйственных – учреждений остаются: производство выборов в Учредительное собрание; продовольствие войска и их семей; почта, телеграф; железные дороги; банковские и вексельные дела; страхование; косвенные налоги; производство народной переписи и статистика.

Для координирования действия властей и учреждений башкирских и русских территорий учреждается временный Оренбургский башкирский комиссариат.

Башкирские гласные в губернских и уездных земствах сохраняют свои полномочия впредь до особого распоряжения.

Существующий порядок ведения дел, подлежащих ведению волостных земств, установленный новым положением о земствах, – сохраняется.

Кантональная власть организуется из уездных башкирских гласных и районных башкирских советов, которые должны руководствоваться положением об уездных и губернских земствах Архангельской губернии

и в областях Сибири, по особо изданной для этого областным советом инструкции.

Институт мировых судей остается с ограничением круга их деятельности в башкирских волостях. Для апелляции мировых судей учреждается кантонный съезд мировых судей, а для апелляции решений последних – временная высшая судебная инстанция при Башкирском областном совете, ведению которых подлежит также функция административного суда.

Все эти судебные учреждения, впредь до издания особых законов об управлении Башкирией, должны руководствоваться существующими судебными установлениями. Разбор дела (между) населением русской и башкирской территории подлежит ведению общего суда (суда смешанного состава – башкир и русских).

С момента объявления Башкирии автономной все земельные угодия, имущества, отобранные от башкир царской властью в казенную и частную собственность, а также все башкирские мирские, хозяйственные, продовольственные, запасные и пр(очие) капиталы и суммы переходят в распоряжение областного Башкирского совета.

В заключение Башкирский областной совет объявляет во всеобщее сведение, что все меры, предпринятые им по осуществлению автономии в Оренбургской и Пермской губерниях, являются временными впредь до учредительного съезда, на коем будут выработаны основные положения о конституции Башкирии.

Объявление автономии точно так же ни в коем случае не должно сопровождаться нарушением общественного порядка и спокойствия, почему самочинные выступления на местах под флагом осуществления автономии ни в коем случае не допустимы.

Местные башкирские организации с данного момента должны подчиняться исключительно указаниям областного совета.

Председатель (Башкирского областного) шуро: Шариф Манатов
Тов. председателя: Ахмед-Заки Валидов;
Зав. военным отделом: Ильдерхан Мутин;
Зав. экономическим отделом: Джангирей Амиров;
Зав. отделом просвещения: Муса Смаков;
Зав. отделом статистики: Алимбед Хасанов;
Зав. земельным и лесным отделом: Галиахмед Аитбаев;
Зав. финансовым отделом: М. Давлетов;
Секретарь: Шайх-Зада Бабич.

Оренбург, Караван-Сарай, 16 ноября 1917 года

Ошо ук көндө Башҡорт үҙәк шураһы Ырымбурҙағы башҡорт халыҡ йорто булған Каруанһарай бинаһын үҙ ҡарамағына алыуға өлгәшә. Автономия иғлан ителеү һәм Каруанһарай бинаһы ҡайтарылыу башҡорт халҡы өсөн ысын мәғәнәһендә тарихи ваҡиға, оло бәхет көнөнә әүерелә. Киләсәккә яҡты өмөттәр уята. Үҙәк шурала сәркәтип булып эшлә-

гән бөйөк башҡорт шағиры, азатлыҡ йырсыһы Шәйехзада Бабич ошо ваҡиға айҡанлы үҙенең «Олуғ шатлыҡ» исемле шиғырын яҙа:

Яңғырап, шаулап сыҡҡан шатлыҡ йырын
Фәрештәләр һөйөнөп тыңлаһын.
Шатландырҙың, Тәңрем, һибеп нурың,
Башҡортостан халыҡ донъяһын.

Ябраил мәләк, елпеп ап-аҡ ҡанат,
Осоп йөрөһөн Башҡортостанда.
Хәбәр бирһен тиеп: «Булдың азат,
Сыҡтың йәмле, гөллө бостанға».

Азат булды ғәзиз Каруанһарай,
Азат булды барлыҡ ерҙәрең...
Йырлап ебәр һөйөнөп, уйнап ҡурай,
Сыҡһын тиҙерәк шатлыҡ йырҙарың...

Теләктәрең алға килеп тора,
Азатлыҡҡа ошо ғәләмәт.
Инеп тора «дәүләт», ҡунып тора,
Киләсәгең яҡты, сәләмәт...

«Бәхет ҡыҙы» матур йөҙөн асып,
Һиңә табан көлөп боролдо...
Шатлан, уйна, һикер ярһып-ярһып!
Күпме шатланһаң да урынлы...

Үләм... Ташам... Тормайым, ашам күккә...
Үкенмәйем инде үлһәм дә...
Үкенмәйем инде тыуған йортҡа
Күктән ҡарап көлөп торһам да...

1917 йылдың 8–20 декабрендә Ырымбурҙа, Каруанһарай бинаһында үткән III Дөйөм башҡорт ҡоролтайында Үҙәк шураның Башҡортостан автономияһын иғлан итеү тураһындағы фарманы бер тауыштан раҫлана. Башҡорт хөкүмәте ойошторола. Ҡоролтай Башҡортостандың ерле мөхтәриәтен иғлан ҡылынған көнгә бағышлап киләсәктә тантаналар үткәреп торорға ҡарар итә.

Ҡоролтай Башҡортостан автономияһын ике этапта тормошҡа ашырырға ҡарар итә:

«В той части Башкирии, где новое автономное управление уже вводится в жизнь, а именно: на башкирской территории Оренбургской губернии, Шадринского, Екатеринбургского и Красноуфимского уездов Пермской губернии и Юмран-Табынской волости Бузулукского уезда Самарской губернии, — правительство Башкурдистана

взамен уездных и губернских земств учреждает кантональные думы, присоединяя к этой территории и восточную часть Уфимской губернии, тоже населенной башкирами.

Для введения автономного управления в западной Башкирии, а именно: в западных частях Уфимской, Самарской и Пермской губерний – должны быть созваны там не позже января 1918 года уездные съезды. На этих съездах мусульмане западной Башкирии должны организовать кантональные управления и тем взять бразды правления в свои руки. Правительство же Башкурдистана, со своей стороны, должно употребить все усилия к тому, чтобы Уфимская губерния присоединилась целиком к Башкирии без особой ломки, с готовым государственным аппаратом и механизмом» (Башҡортостан автономияһының икенсе этабы 1922 йылда Совет власы тарафынан тормошҡа ашырыла – Өфө губернаһы Башҡортостанға ҡушыла, әммә губернаның 150 мең башҡорт йәшәгән ике өйәҙе – Минзәлә менән Бөгөлмә өйәҙҙәре – 1920 йылда Татарстанға бирелә).

Ә инде Башҡортостандың автономия идаралығы бойомға ашырыла башлаған өлөшөн 9 кантонға бүлеү ҡарала, кантондар, үҙ сиратында, элекке башҡорт олоҫтарын тәшкил итә.

Әммә 1918 йылдың февраль айындағы Ырымбур ҡалаһындағы ваҡиғалар Башҡортостан дәүләтселеген ойоштороу эшенә ҙур зыян килтерә. Ғинуар айында Ырымбур ҡыҙылдар ҡулына күсә. Башҡортостан автономияһына ҡаршы булған Мосолман хәрби-революцион комитеты 17 февралгә ҡараған төндө большевиктар исеменән Башҡортостан хөкүмәте һәм Башҡорт үҙәк шураһы ағзаларын ҡулға алып, төрмәгә яба. Урындарҙа ла, Башҡортостан автономияһы вәкилдәре лә репрессияға дусар ителә. Баймаҡта автономияның хәрби көстәрен ойоштороу эше менән йөрөгән башҡорт офицерҙары тотоп атыла, улар ойошторған отряд таратыла.

1918 йылдың апрелендә Әмир Ҡарамышев етәкселегендәге башҡорт партизан отрядтары казактар ярҙамында Ырымбур төрмәһенән Башҡортостан хөкүмәте ағзаларын азат итә. Әммә автономияны тормошҡа ашырыу өсөн форсат тик май айының аҙаҡтарында ғына тыуа. Силәбе ҡалаһындағы Чехословак корпусы большевиктарға ҡаршы баш күтәрә һәм власты үҙ ҡулына ала. Ошонан файҙаланып, Башҡортостан хөкүмәте Силәбе ҡалаһында яңынан үҙенең эшен башлай. Хөкүмәт һуғыш барған осорҙа, тәү сиратта, автономияның мәнфәғәттәрен яҡлай алырлыҡ үҙ хәрби көстәрен булдырыу эшенә тотона. Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә автономия етәкселеге милли армия – 8 полктан торған Айырым Башҡорт корпусы – ойоштороуға өлгәшә. Бынан тыш автономияның урындағы власть органдары эшмәкәрлегенең хәүефһеҙлеген тәьмин итеү маҡсатында һәр бер кантонда ирекле отрядтар ойошторола.

Тап хәрби көстәре – милли армияһы арҡаһында Башҡорт хөкүмәте Граждандар һуғышы шарттарында автономияны һаҡлап ҡалыу маҡсатына ирешә. 1919 йылдың мартында Үҙәк совет хөкүмәте Башҡортостан хөкүмәте менән Автономиялы Башҡорт Совет Республикаһы тураһында

килешеүгә ҡул ҡуя, ысынында иһә был акт менән большевиктар 1917 йылдың 16 ноябрендә (яңыса 29 ноябрҙә) иғлан ителгән Башҡортостандың автономия хоҡуҡтарын таный. Ошо тарихи килешеү менән Рәсәй федерализмына нигеҙ һалынған тиһәк, бер ҙә яңылыш булмаç. Сөнки ошо тарихи килешеү нигеҙендә Рәсәйҙе федератив дәүләт иткән беренсе милли субъект – Автономиялы Башҡортостан Совет Республикаһы барлыҡҡа килә.

Шулай итеп, бөгөнгө Башҡортостан Республикаһының тарихи нигеҙҙәре 1917 йылдың 16 (29) ноябрендә иғлан ителгән Башҡортостан автономияһына ҡайтып ҡала.

Башҡорт корпусы –
Башҡорт милли армияһы

Беҙҙәр ғәскәр, әйҙә, алға марш!
Тетрәп торһон ер-күк асманы.

Ш. Бабич. «Ғәскәр маршы».
1918 йыл

1918 йылдың майында Силәбе ҡалаһында Чехословак корпусы большевиктарға ҡаршы баш күтәрә һәм ҡаланы үҙ ҡулына ала. Апрель башында Ырымбур төрмәһенән ҡотолған Башҡорт хөкүмәте ағзалары Силәбегә йыйыла һәм 1 июндә үҙенең эшмәкәрлеген яңынан башлап ебәрә. Рәсәйҙә Граждандар һуғышы тоҡанған осорҙа, Башҡортостан автономияһын тик хәрби көс ярҙамында ғына ҡурсаларға мөмкин икәнлегенә яҡшы төшөнгән милли хәрәкәт лидерҙары тәү сиратта Башҡорт армияһын төҙөү эшенә тотона.

1918 йылдың июненән башҡорт лидерҙары Чехословак корпусы командалығы, Һамар һәм Себер хөкүмәттәре менән килешеп, башҡорт полктарын ойоштора башлай. Ғәскәрҙе ойоштороу өсөн 12 июнь Башҡорт хөкүмәтенең хәрби бүлеге янында Хәрби шура (штаб) булдырыла. Хөкүмәттең хәрби бүлеге 13 июндә үҙенең 217-се һанлы фарманы менән Силәбе, Шадрин, Троицк һәм Екатеринбург өйәҙҙәренең башҡорт олоҫтарында (хәҙерге Силәбе, Ҡурған башҡорттары) Башҡорт армияһына мобилизация иғлан итә. Фарманда: **«Мобилизуются башкиры призывов: 1919, 1918, 1917, 1916, 1915 годов, а также те из не мобилизованных годов, которые сами пожелают вступить в ряды башкирской армии»**, – тиелә.

Башҡорт хәрби шураһы Башҡорт милли армияһын тәүҙән үк корпус сифатында ойоштороорға планлаштыра һәм 5 йыл эсендә уның һанын 31 мең һалдатка еткерергә ниәтләй. Башҡорт корпусы ете пехота һәм ике кавалерия полктары, ике запас пехота, бер запас кавалерия полкы һәм ике артиллерия дивизионынан торасаҡ, тип күҙаллана. Бынан тыш корпусҡа ҡайһы бер ҡаҙаҡ частарын индереү һәм Бәләкәй Башҡортостандағы мишәр, типтәр һәм татарҙарҙан бер полк ойоштороу ҡарала. Ошо маҡсатта 1918 йылдың 18 июнендә ҡыҫҡаса мобилизацион план эшләй:

Краткий мобилизационный план Башкирского Военного Совета

Башкирское население Малой Башкирии должно лечь в основу семи пехотных полков и других конных полков и одной артиллерийской бригады в следующем виде:

а) Шадринский уезд Пермской губ. нас. обоего пола 27 655, призыв 550 чел.

Екатеринбургский уезд .... 9 327 .... 200 чел.
Троицкий уезд .... 15 000 ...... 300 чел.
Челябинский уезд .... 7 000 .... 1 400 чел.
Итого .... 121 982 ..... 2 450 чел.,

кои будут составлять 1-й и 2-й пехотные полки.

б) Златоустовский уезд Уфимской губ. нас. обоего пола 49 721..995 чел.
Красноуфимский уезд Пермской губернии .... 12 981 .... 260 чел.
Уфимского уезда волости: Иглинская, Илекская,
Булекей-Кудейская, Урман-Кудейская .... 21 028 .... 421 чел.
Итого .... 83 730 .... 1 676 чел.,

которые составят 3-й пехотный полк.

в) Оренбургский уезд нас. обоего пола .... 65 000 .... 1 300 чел.
Бузулукского уезда Юмран-Табынской вол. .... 15 000 .... 300 чел.
Итого .... 30 000 .... 1 600 чел.,

кои составят 4-й пехотный полк и два эскадрона кавалерийского полка.

г) Верхнеуральский уезд Орен. губ. нас. обоего пола ...5 300 ..1 060 чел., кои составят 5-й пехотный полк и два эскадрона 1-го кавалерийского полка.

д) Стерлитамакский уезд Уфим. губ. нас. обоего пола ....100 305...2 006 чел.
Уфимского уезда волости: Бишаул-Унгаровская,
Биштекинская нас. обоего пола .... 11 524 .... 230 чел.
Итого .... 111 829 ..... 2 236 чел.,

кои составят 6-й пехотный полк и четыре эскадрона 1-го кавалерийского полка.

е) Орский уезд Оренбургской губ. нас. обоего пола...135 000...2 700 чел., которые составят 7-й пехотный полк и четыре эскадрона 2-го кавалерийского полка.

Башкиры других уездов и районов, не входящих в Малую Башкирию, отдельных полков не составят, а пойдут на пополнение указанных полков в следующем порядке:

а) Белебеевский уезд Уфимской губ. нас. обоего пола ...212 860....4 260 чел. пополнят 1-й, 2-й и 5-й пехотные полки.

б) Бирский уезд Уфимской губ. нас. обоего пола .....232 869....4 657 чел.
Осинский уезд Пермской губ. нас. обоего пола ...43 819....876 чел.
Итого ....276 688.....4 533 чел.,
кои пойдут на пополнение 3-го и 6-го пехотных полков.

в) Мензелинский уезд Уфимской губ. нас. обоего пола ...154 325 ...3 086 чел.
Уезды Самарской губернии....................................60 000.......1 200 чел.
Итого ....214 324.....4 286 чел.,
кои пойдут на пополнение 4-го и 7-го пехотных полков.

Всего башкирского населения приблизительно 1 240 000, которое за 4 года даст 24 800 солдат.

Из всех уездов формируется два артиллерийских дивизиона.

Из башкир призывов 1915 и 1919 годов формируется два пехотных запасных и один кавалерийский запасный полк.

Мобилизация 1919 года даст 6 200 молодых людей, а всего мобилизация в 5 лет даст приблизительно 31 000 солдат.

Предполагается также, что некоторые Киргизские части тоже войдут в состав Башкирской дивизии.

Из мещеряков, тептярей и татар Малой Башкирии войдет в состав Башкирского корпуса один полк.

1918 года июня 18 дня.

Председатель Башкирского Военного Совета ***Валидов***

и. д. начальника Мобилизационного Отдела
Полковник ***Янышевский***

Башкорт армияһының тәүге булып ғәскәри берәмеге булып 1-се Башкорт пехота полкы ойошторола башлай. Уның командиры итеп поручик Харис Туймаҡаев тәғәйенләнә. Июнь урталарында 1-се полк Екатеринбург фронтында ҡыҙылдарға ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнашып өлгөрә. *«Полк төҙөй башлауыбыҙға бер аҙна ваҡыт үткәндер. Екатеринбург яғында Арғаяш кантонында большевиктарҙы ҡыуып сығарырға тотонған чехтарға ярҙамға ике батальон ебәрҙек. Был ғәскәр хәрәкәте хаҡында тәүге хәбәрҙәрҙе алғандың иртәгеһенә беҙ Сәйетгәрәй Мағазов менән бергә, чех офицеры йөрөткән автомобилгә ултырып, Силәбенән сығып киттек. Көҙәш тигән ерҙә бик ҡаты бәрелеш булды. Арҡадашым Әбделҡадир Инандың ауылынан 8 саҡрым ер ине. Сәйетгәрәй менән, винтовкалар тотоп, һуғышта ҡатнаштыҡ. Ниһайәт, большевиктар Екатеринбург йүнәлешендәге Төбәк станцияһына сигенде. Беҙҙең ғәскәр ҡулына байтаҡ ҡорал һәм һуғыш кәрәк-ярағы эләкте»,* – тип яҙа был хаҡта Зәки Вәлиди.

Июнь айында шул уҡ Силәбе ҡалаһында 2-се Башҡорт пехота полкы ойошторола. Уның командиры итеп Силәбе башҡорттарынан булған офицер (подпоручик) Ғәбделхаҡ Ғәбитов тәғәйенләнә. Полктың бер батальоны Екатеринбург тарафына ҡыҙылдарға ҡаршы һуғышҡа ебәрелә. Башҡорт ғәскәрҙәре 1918 йылдың июль аҙағында Екатеринбург ҡалаһын азат итеүҙә ҡатнаша. Ҡала халҡы рәхмәт йөҙөнән 2-се Башҡорт пехота полкына байраҡ бүләк итә.

10 июлдә Башҡортостан хөкүмәтенең хәрби бүлеге башҡорт халҡына дөйөм мобилизация иғлан итә. Ошондай иғлан һәр ауылға таратыла.

1918 йылдың июнь-июль айҙарында Верхнеуральск өйәҙендә 1-се Башҡорт кавалерия һәм 5-се Башҡорт пехота полктары ойошторола. 1-се полкка Зәки Вәлидиҙең дуҫы, милли хәрәкәттең башында йөрөгән башҡорт офицеры, Әмир Ҡарамышев етәкселек итә. 1918 йылдың июлендә Әмир Ҡарамышев үҙенең полкы менән Блюхерҙың отрядына ҡаршы һуғыша. Ҡаты алыштар Ә. Ҡарамышевтың тыуған ауылы Маҡарҙан (хәҙерге Ишембай районы) йыраҡ түгел ерҙә булып үтә.

Ошо уҡ осорҙа Златоуст өйәҙендә 3-сө Башҡорт пехота полкы төҙөлә. Уның командиры итеп тәүҙә подполковник Тереғолов, һуңынан Ғәлимйән Таған ҡуйыла.

16 июлдә Сәғит Мерәҫов етәкселегендә (ағзалары штабс-капитан Ҡасим Еникеев, подпоручик Әхмәҙулла Бейешев, Хәбибулла Ғәбитов һ. б.) Башҡорт хөкүмәте хәрби бүлегенең Ырымбур ҡалаһындағы бүлеге төҙөлә. Бүлек тарафынан Ырымбур өйәҙе башҡорттарынан 4-се Башҡорт пехота полкы ойошторола башлай. Полктың командиры итеп Ҡасим Еникеев тәғәйенләнә.

8 август Башҡорт хөкүмәте Силәбенән Ырымбурға, Каруанһарайға ҡайта. Хөкүмәт менән бергә 1-се Башҡорт пехота полкы килә. Яңы килеп төшкән башҡорт полкы Ырымбурҙың 2-се кадет корпусы бинаһында урынлаша. 11 август көнө полкты атаман Дутов килеп ҡарап китә. Башҡорт полкындағы тәртипкә, дисциплинаға хайран ҡалып, иртәгәһенә түбәндәге фарман менән башҡорт һалдаттарына рәхмәт белдерә:

Приказ

по Оренбургскому военному округу

№ 107–12 августа 1918 г. гор. Оренбург

(по отделу Генерал-Квартирмейстера)

11 августа я посетил только что прибывший в г. Оренбург 1-й батальон 1-го Башкирскаго полка, расквартированный на Маячной горе, в лагере 2-го кадетскаго корпуса. В момент моего прибытия батальон обедал. Из всего виденнаго мною в батальоне, я вынес самое отрадное впечатление. Несмотря на праздник, все г.г. (господа. – *А. Я.*) офицеры были при батальоне. Солдаты хорошо одеты, имели отличный воинский вид. На приветствие отвечали сноровисто и умело. Меня порадовала выправка и молодцеватость солдат Башкирскаго полка.

Не оставляет желать лучшаго и внутренний распорядок в батальоне: помещения содержатся в чистоте, в канцелярии полный порядок, во всем чувствуется опытная и твердая рука командира полка, заботящагося о своей части в общем и в подробностях.

За все виденное считаю долгом благодарить Командира полка поручика Туймакаева, Начальника пулеметной команды поручика Жукова и всех г.г. офицеров этой молодой части. Так же сердечно благодарю и молодцев солдат.

Родина наша, раздираемая когтями врагов и призывающая истинных сынов своих к спасению ея, давно ждеть таких строевых частей, каким является только что осмотренный мной батальон славнаго Башкирскаго полка.

Я уверен, что часть эта послужит надежным кадром для нарождающихся новых Башкирских частей, а образцовая их служба, опирающаяся на сознательную дисциплину, веру в правое дело Свободы и Родины и победу над врагом, послужит примером для других частей Народной Армии, формирующихся в Оренбурге.

Да здравствует нарождающаяся народная армия!

Да здравствует первый Башкирский полк!

Приказ этот прочесть во всех ротах, сотнях, батареях и командах.

Подлинный подписал: Командующий Войсками Округа
Генерал-майор ***Дутов***

Шулай итеп, 1918 йылдың авгусына Башҡорт хәрби шураһы тырышлығы менән биш башҡорт полкы барлыҡҡа килә. Шуларҙың өсәүһе әҙер булһа, ҡалған икәүһендә әүҙем ойоштороу эштәре бара.

Милли хәрәкәт етәкселеге мобилизация планына ярашлы рәүештә башҡорт полктарын ҙурыраҡ ғәскәри берәмектәргә туплау этабына күсә. 13 август Башҡорт хәрби шураһы башҡорт полктарын ике дивизияға берләштереүгә тураһында фарман сығара. Уның буйынса 1-се дивизияға 2-се, 3-сө һәм 5-се Башҡорт полктары инһә, 2-се дивизияны 1-се һәм 4-се Башҡорт полктары тәшкил итә.

Хәрби шура 28 августа Башҡорт армияһы өсөн милли униформа индерә: ярым ай менән йондоҙ билдәһе һүрәтләнгән, күк төҫтәге нашивкалар (звание буйынса айырыу билдәләре), погондар һ. б.

1918 йылдың сентябрь башына Башҡортостан автономияһы етәкселеге үҙ полктарын корпуска берләштереү, йәғни ысын мәғәнәһендә милли армияға әүерелдереү мөмкинлеген ала. Быны ул Һамар хөкүмәте (Комуч) ярҙамында тормошҡа ашыра. 7 сентябрь Башҡорт хәрби шураһының 37-се фарманы менән Айырым Башҡорт корпусы төҙөлә. Корпус 1-се, 2-се Башҡорт пехота дивизиялары һәм 1-се Башҡорт кавалерия полкын үҙ эсенә ала. Башҡорт корпусының командиры итеп элекке батша армияһы генералы Хажиәхмәт Ишбулатов тәғәйенләнә.

Башҡорт корпусы ғәскәрҙәренең командирҙары һәм полк муллалары

Соединение һәм частарҙың исеме	Дивизия начальниктары һәм полк командирҙары	Дивизия һәм полк муллалары
1-се Башҡорт уҡсы дивизияһы	1918 й. августан — подполковник **Тереғолов,** 1918 й. сентябренән — вазифаны ваҡытлыса башҡарыусы подполковник **Савельев,** 1918 й. ноябрендә — генерал-лейтенант **Х. И. Ишбулатов,** 1918 й. ноябренән – генерал-майор **Г. А. Савич-Заболоцкий,** 1919 й. февраленән – штабс-капитан **Ә. Ғ. Ишмырҙин**	1918 й. октрябренән 1919 й. февраленә тиклем **Нуриәғзәм Таһиров,** 1919 й. февраль-март айҙарында — **Хәлилбәк Юлдашев** булыуы ихтимал
2-се Башҡорт уҡсы дивизияһы	1918 й. август—октябрендә — подполковник **А. Емельянов,** 1919 й. ғинуар—февралендә — поручик **Набоков,** 1919 й. февралендә — штабс-капитан **Ә. Ғәбиҙуллин**	Билдәһеҙ
Ә. Б. Карамышев исемендәге 1-се Башҡорт кавалерия полкы	1918 й. июленән — ротмистр **Ә. Б. Ҡарамышев,** 1918 й. сентябрендә — хорунжий **Ганага,** 1918 й. сентябренән — ротмистр **М. Б. Ҡарамышев,** 1919 й. ғинуар—июнендә — корнет **М. Л. Мортазин**	1918 й. ноябренән **Бәхтийәров**
Ғ. С. Иҙелбаев исемендәге 2-се Башҡорт кавалерия полкы	1918 й. октябренән 1919 й. ғинуарына тиклем штаб-ротмистр **Ә. Ә. Бейешев,** 1919 й. ғинуар-февралендә — штаб-ротмистр **Х. Ф. Әлишев**	1918 й. октябренән **Әбүбәкир Хәмитов,** 1919 й. февраленән **Хәлилбәк Юлдашев**
1-се Башҡорт уҡсы полкы	1918 й. июненән — поручик **Х. Туймаҡаев,** 1918 й. сентябренән — подполковник **И. Якубовский,** 1918 й. ноябренән 1919 й. февраленә тиклем штабс-капитан **С. Ғ. Ишмырҙин**	1918 й. ноябренән **Хәбибулла Ғәбитов**

2-се Башҡорт уксы полкы	1918 й. июнь–ноябрендә — штабс-капитан **Ғ. Ғәбитов,** 1918 й. ноябренән 1919 й. февраленә тиклем штабс-капитан **И. Е. Исхаҡов**	1918 й. октябренән 1919 й. февраленә тиклем **Нуриәғзәм Таһиров**
3-сө Башҡорт уксы полкы	1918 й. июнь–сентябрендә – подполковник **Тереғолов,** 1918 й. сентябренән – 1919 й. февраленә тиклем поручик **Ғ. Ғ. Тағанов**	Билдәһеҙ
4-се Башҡорт уксы полкы	1918 й. июненән 1919 й. февраленә тиклем подполковник **Ҡ. Еникеев,** 1919 й. февраленән – штабс-капитан **Байрашевский**	Билдәһеҙ
5-се Башҡорт уксы полкы	1918 й. июленән октябренә тиклем капитан **Цветков,** 1918 й. октябренән 1919 й. ғинуарына тиклем штабс-капитан **Ҡ. Н. Низаметдинов**	1918 й. ноябренә тиклем **Бәхтийәров**
6-сы Башҡорт уксы полкы	1918 й. октябренән 1919 й. февраленә тиклем штабс-капитан **Ә. Ғ. Ишмырҙин,** 1919 й. февралендә — поручик **У. Н. Тереғолов**	Билдәһеҙ

Әммә Башҡорт корпусы ойошторолоуға ҡарамаҫтан, ғәмәлдә төрлө фронттарҙа һуғышҡан башҡорт полктарын бер урынға туплау ауыр мәсьәләгә әүерелә. Сөнки 1918 йылдың сентябрендә 1-се, 4-се Башҡорт полктары ғына Ырымбурҙа тора. Аҡ командование уларын да фронтҡа ебәрергә бойора. Ошо айҡанлы, үҙҙәренең борсолоуын белдереп, Илдархан Мутин менән генерал Ишбулатов Өфөгә, Дәүләт кәңәшмәһенә (Государственное совещание) киткән Зәки Вәлидигә түбәндәге телеграмманы һуға:

«Получено приказание военного ведомства подготовить два наших оренбургских полка к выступлению в поход. Полки ничем не снабжены. Разбросанность башкирских войск на всех фронтах тормозит создание нашего корпуса, желательно, чтобы хотя бы половина наших войск сражалась на территории Башкирии и более крупными боевыми единицами, неисполнение чего ведет к быстрому незаметному уничтожению наших лучших войск».

1918 йылдың сентябрендә Ырымбурҙа торған башҡорт полктары һуғышҡа йәлеп ителә башлай. 4-се полктың частары Орск ҡалаһын алыуҙа ҡатнаша. Ҡыҙылдар Орскиҙан киткәндән һуң, һуғыш Аҡтүбәгә күсә. Башҡорт полктары частары (1-се, 2-се, 4-се, 5-се полктарҙың батальондары) Аҡтүбә фронтына күсерелә.

1918 йылдың октябрендә кантондарҙағы ирекле отрядтарҙан ойошторолған 2-се Башҡорт кавалерия полкы ла фронтҡа ташлана. Ошо уҡ мәлдә 6-сы Башҡорт пехота полкын ойоштороу тамамлана.

Ноябрь башында фронтта аҡтар менән башҡорттар араһында хәл ҡырҡыулаша төшә. Мәҫәлән, 1-се Башҡорт уксы полкы һалдаттары һуғышҡа барыуҙан баш тарта. Ҡыҙылдарҙың тәүге артиллерия тауыштары ишетелеү менән күрше казактар яу яланын ташлап ҡаса, нишләп беҙ уларҙың ауылдарын һаҡларға тейеш әле, тиҙәр башҡорт һалдаттары. Ошо хаҡта полк командиры 2-се Башҡорт уксы дивизияһына яҙған йәшерен рапортында (1918 йылдың 4 ноябре) асыҡ бәйән итә:

«Вверенный мне 1-й Башкирский полк, находясь в боях со дня сформирования, т. е. с начала июня месяца, заслужил неувядаемую славу на всех фронтах, что свидетельствовали их непосредственные начальники. Безропотно перенося все тяготы и лишения боевой обстановки во время четырехмесячных беспрерывных боев, утомленная походами и тяжелыми условиями жизни, плохо снабженная одеждой и обувью, энергия этих войск постепенно угасала.

Были случаи проявления неудовольствия отдельными лицами, хотя только лишь в пределах, не переходящих границу допустимого. Но с передвижениям полка на Сагарчинскую позицию, где работа полка стала особенно интенсивной, при неблагоприятной сырой погоде, в массах появилась потребность отдыха. По докладу, объявленный таковой отдых был обещан, о чем солдатам было сообщено, и полк получил распоряжение для отправки в Ак-Булак. Когда же это распоряжение было отменено по оперативным причинам, то среди солдат ясно обнаружилось недовольство, развившееся громкими заявлениями, протестом и отказом несения очередной строевой работы.

Обращение генерала Красноярцева желаемого результата не дало, и солдаты продолжали настойчиво требовать отдыха. Причем на предложение генерала идти в наступление они дали отрицательный ответ.

Самой главной причиной их отказа от боевых действий является неоднократный самовольный уход пластунских частей, действующих совместно с башкирами, с позиции, со сторожевого охранения во время боя, когда от первых артиллерийских выстрелов противника пластуновцы пачками самовольно уходили в тыл и таким образом оголяли фланг башкир на большом пространстве (состав пластунских сотен 250—300 человек).

Будучи оставленными соседними пластунскими частями самим себе, башкиры, за их малочисленностью, не в силах были противодействовать противнику, и им приходилось отступать.

По заявлению солдат, они не желают защищать казачьи станицы, каковые сами же казаки не защищают, а хотят ехать в Челябинск защищать родовые земли».

1918 йылдың октябренән Аҡ командование Башҡортостан автономияһы һәм башҡорт армияһын юҡҡа сығарыу эшенә тотона. Ул башҡорт частарына мобилизацияны туҡтатыу, ә бөтә башҡорт полктарын дөйөм ғәскәри берәмектәргә ингән бер дивизияға туплау тураһында бойора. Бер үк ваҡытта Башҡорт корпусы штабы, Башҡорт хәрби шураһы, Башҡорт ғәскәри идаралығын бөтөрөү тураһында ҡарар ҡабул итә. Ә ноябрь башында Өфө директорияһы Башҡортостан хөкүмәтенең бөтөрөлөүе тураһында ҡарар сығара.

Ауыр хәлдә тороп ҡалған Башҡортостан автономияһы етәкселеге Аҡ командованиеның ҡарары менән риҙалашырға мәжбүр була. 1918 йылдың 10 ноябрендәге фарманы менән Зәки Вәлиди Башҡорт корпусын бөтөрөп, полктарҙы 1-се Башҡорт уҡсы дивизияһына туплай. Башҡорт етәкселеге рәсми рәүештә аҡтарҙың бойороғон үтәһә лә, ғәмәлдә, уларға буйһонорға уйламай.

Артабан, Колчак власҡа килеү менән, 20 ноябрҙә 1-се Башҡорт уҡсы дивизияһын бөтөнләй ябай дивизия кимәленә күсерергә тигән бойороҡ бирә. Дивизияның командиры итеп үҙенең генералы Савич-Заболоцкийҙы тәғәйенләй. Артабан башҡорт уҡсы полктары 9-сы уҡсы дивизияһына берләштерелә.

Әммә 1918 йылдың декабрендә фронтта аҡтарҙың сигенеүе арҡаһында башҡорт полктарына Башҡортостан территорияһында туплау мөмкинлеге тыуа. 14 декабрь көнө фронтҡа, башҡорт командирҙары Солтанов, Ишмырҙин, Ибраһим Исхаҡов һәм полк муллалары Әбелхайыр, Мөхәмәҙей, Әбделнасир һәм Нуриәғзәм Таһировтарға Зәки Вәлиди йәшерен хат ебәрә. Хатында ул, беҙҙең алда торған маҡсат – нисек тә булһа бөтә полктарҙы бер урынға йыйыу, тип яҙа.

1919 йылдың ғинуар башына Зәки Вәлиди башҡорт полктарын Башҡортостандың көньяҡ өлөшөндә туплауға өлгәшә. 9 ғинуар Башҡорт корпусын бөтөрөү тураһында Аҡ командованиеның бойороғо ғәмәлдән сыҡҡан тигән фарман бирә. Ошоноң менән Башҡорт корпусын яңынан тергеҙеү эше башлана. Аҡтар тарафынан ҡуйылған командирҙар әкренләп кенә вазифаларынан ситләтелә. Уның урынына башҡорттар ҡуйыла. Мәҫәлән, 1-се дивизия начальнигы итеп штаб-ротмистр Әүхәҙей Ишмырҙин тәғәйенләнһә, штабс-капитан Ҡазыхаҥ Низаметдинов дивизияның штаб начальнигы вазифаһын биләй. 3-сө Башҡорт уксы полкы ғына башҡорт ғәскәрҙәренә ҡушыла алмай ҡала, мартта Аҡ командование уны тарҡатып, һалдаттарын башҡа рус частарына тарата.

24 ғинуарҙа Зәки Вәлиди Башҡорт ғәскәрҙәре менән етәкселекте туранан-тура үҙ ҡулына ала. Артабан башҡорт полктарын ике дивизияға туплау тураһында фарман сығара:

«Для более удобного управления и лучшего действия башкирских частей образовываю две дивизии: в состав 1-й Башкирской стрелковой дивизии должны войти: 1-й Башкирский стрелковый полк, 2-й Башкирский стрелковый полк, 4-й Башкирский стрелковый полк и 1-й Башкирский кавалерийский имени Амира Карамышева полк.

В состав 2-й Башкирской стрелковой дивизии должны войти: 5-й Башкирский стрелковый полк, 6-й Башкирский стрелковый полк, 2-й Башкирский кавалерийский имени Абдуллы Идельбаева полк и 3-й Башкирский стрелковый полк, по прибытии его с Уфимского фронта. Маклиновская батарея будет придаваться той или иной дивизии в зависимости от обстановки».

26 ғинуарҙа Башҡорт ғәскәри идаралығы начальнигының фарманы менән дивизиялар корпусҡа берләштерелә

«Из Башкирских частей формируется 1-й Башкирский корпус двухдивизионного состава.

В состав 1-й дивизии входят три пехотных полка (а именно 1-й, 2-й и 3-й полки) и один кавалерийский (а именно 1-й кавалерийский полк).

В состав 2-й дивизии входят три пехотных полка (а именно 4-й, 5-й и 6-й полки) и один кавалерийский полк (а именно 2-й кавалерийский полк).

Временно до прибытия 3-го полка:

1-й дивизии — 1-й пехотный полк, 2-й пехотный полк, 4-й пехотный полк и 2-й кавалерийский полк.

2-й дивизии — 5-й пехотный полк, 6-й пехотный полк и 1-й кавалерийский полк».

1919 йылдың ғинуар–февраль айҙарында Башҡорт корпусы частары, ҡорал-патрондарға ҡытлыҡ кисереүгә ҡарамаҫтан, йөҙ саҡрымға тиклем һуҙылған фронтта ҡыҙылдарҙы тотоп тора. Архив документтарынан күренеүенсә, был ваҡытта башҡорт ғәскәрҙәренең составы түбәндәгесә була:

Состав Башкирских войск

1-й Башкирский стрелковый полк – 800 человек, 12 пулеметов.
2-й Башкирский стрелковый полк – 700 человек, 10 пулеметов.
3-й Башкирский стрелковый полк – 275 человек, 6 пулеметов (на Уфимском фронте).
4-й Башкирский стрелковый полк – 650 человек, 14 пулеметов.
5-й Башкирский стрелковый полк – 720 человек, 10 пулеметов.
6-й Башкирский стрелковый полк – 450 человек, 1 пулемет.
1-й Башкирский кавалерийский имени Карамышева полк – 1500 человек, 2 пулемета.
2-й Башкирский кавалерийский имени Идельбаева полк – 1650 человек, 6 пулеметов.

Легкая трехдюймовая батарея – 2 орудия.
Маклановская батарея – 1 орудие.

Алты мең ярым тирәһе кешенән торған Башҡорт корпусына Ҡыҙыл Армияның яҡшы ҡоралланған, һәйбәт артиллериялы 12 меңдән ашыу

һалдаты (20-се Пенза һәм 24-се «Тимер» дивизиялары) ҡаршы тора. Йәғни ҡыҙылдарҙың ғәскәре башҡорттарҙыҡына ҡарағанда ике тапҡырға күберәк һәм ҡорал менән яҡшы тәьмин ителгән була. Шуға ҡарамаҫтан, башҡорт полктары ҡыҙылдарға бирешеп бармай. Мәҫәлән, 17 ғинуар улар Нуҡай ауылы эргәһендә (хәҙерге Күгәрсен районы) 24-се дивизияның кавалерия полкын ҡыйрата.

Башҡорт корпусы командующийы Зәки Вәлиди һалдаттарға рәхмәт белдереп үҙенең фарманында былай тип яҙа:

«Объявляю всем солдатам, участникам боя под Нукаевой, сердечную благодарность, как стойким борцам за правое народное дело, смело и храбро доказавшим врагу силу и способность борьбы со своим противником. Надеюсь и уверен, что солдаты и в будущем в боевых действиях против предателей Родины – красных окажутся такими же героями и не посрамят своего правого дела, за которое льется кровь лучших сынов дорогой Родины. И вы, солдаты, помните, что кровь, пролитая вами, вашими братьями и отцами, не забудется Родиной, настанет время, когда восторжествует справедливость, засветит яркое солнце порядка и счастья, и тогда вы со спокойной советью сможете отдохнуть от переносимых вами страданий, и Родина скажет вам свое материнское, теплое, ласковое Спасибо. С Аллахом вперед на страдания за будущее счастье Ваше и Вашей Родины – Автономной Башкирии и свободной России».

Нуҡай янында яуҙа күрһәткән батырлыҡтары өсөн 12 офицерға яңы званиелар бирелә.

Бер үк ваҡытта Башҡортостан хөкүмәте ғинуар айында Өфө большевиктары менән бәйләнешкә инеп, Совет власы менән килешеү мәсьәләһе тураһында һөйләшеүҙәр башлай. Мәскәүҙән ризалыҡ алыу менән Өфө губревкомы Башҡорт хөкүмәте вәкилдәре менән тәүге (предварительный) килешеү төҙөй. Ә инде хөкүмәт 8 февралдә советтар яғына сығыу тураһында ныҡлы ҡарарға килә. Бер аҙнанан Зәки Вәлидиҙең башҡорт ғәскәрҙәренең ҡыҙылдар яғына сығыуы тураһындағы фарманы сыға:

Военная секретная

ПРИКАЗ

По Башкирскому войску

№ 70

с. Темясово Штаб Башвойска 16 февраля 1919 г. 20 ч.

Объявляю всему Башкирскому войску и Башкирскому народу, что Башкирские войска с 10 часов 18 февраля 1919 года переходят на сторону Советской власти и начинают совместно с Советской

Красной Армией беспощадную борьбу с врагами революции, свободы самоопределения наций – Колчаком, Дутовым и всеми мировыми империалистами.

Всех лиц в составе Башвойска, пытающихся бежать и уклониться от службы революции и борьбы с ее врагами, приказываю задержать и представить в Штаб Башкирского войска (корпуса) в с. Темясово.

Неприкосновенность же личностей офицеров, считающихся в рядах Башкирского войска для дальнейшей службы, гарантируется мною, о чем договорено с Советской властью.

Приказ этот прочесть во всех полках, ротах, эскадронах и командах.

З. Валидов

Ҡыҙылдар яғына сығыу тураһындағы фарманды иғлан итеү һәм уның сәбәптәрен аңлатыу өсөн һәр бер полкка башҡорт эшмәкәрҙәре ебәрелә. *«Ғәскәр был ҡарарҙы тыныс ҡаршыланы. Офицерҙарҙы йыйҙым. Күсергә теләмәүселәр булһа, мәжбүр итмәйем, ундайҙарҙы бер айлыҡ жалованиеларын, ат һәм ҡоралдарын биреп, үҙҙәре теләгән аҡ генералдарға ебәрәм, тинем. Ныҡ яҡын күргән арҡадаштарымдан Шаһибәк Үзбәков, Ғәни Ҡарамышев, Исмәғил Шәрипов һәм башҡа ҡайһы берәүҙәр рөхсәт алып китте»,* – тип яҙа хәтирәләрендә Зәки Вәлиди.

Шулай итеп, Башҡорт милли хәрәкәте лидерына еңел булмаған ҡарар ҡабул итергә, Башҡортостан автономияһының, башҡорт халкының киләсәге өсөн, кисә генә йән аямай һуғышҡан дошмандың, ә бөгөн башҡорттарға автономия вәғәҙә иткән большевиктарҙың яғын һайларға тура килә. 1919 йылдың 20 февралендә хәҙерге Йылайыр районының Кананикольск ауылы янында башҡорт ғәскәрҙәре ҡыҙылдар яғына сыға.

Әммә ҡыҙылдарҙың 1-се армияһы башҡорттарҙы ҡолас йәйеп түгел, ә, киреһенсә, ҡан ҡөҫәп ҡаршы ала. Һөҙөмтәлә, 1919 йылдың февраль–март айҙары беҙҙең ғәскәрҙәр өсөн фажиғәле мәлдәрҙең береһенә әүерелә. Автономия хаҡына күпме утты-һыуҙы кискән башҡорт һалдаттарына тағы бер оло һынау аша үтергә тура килә.

Башҡорт армияһының символикаһы: униформа һәм байраҡтар

Тарихтан билдәле булыуынса, 1917 йылдың декабрендә королтайҙа Башҡортостан автономияһы раҫланып, тәүге хөкүмәт һайлана. Уның артынса 1918 йылдың ғинуарында автономияның дәүләт символдары: милли гербы, флагы һәм ғәскәри байрағы барлыҡҡа килә. Символика тураһында «Бәләкәй Башҡортостан автономияһы тураһындағы положение»ла ентекле бәйән ителгән: *«Правительство Башкирии имеет свои национальные: большую печать, герб, флаг и войсковое знамя, описание которых при сем прилагается.*

Большая печать хранится у председателя правительства, герб, флаг и войсковое знамя находятся в зале Присутствия Правительства, охраняемые почетным караулом, который оставляет охрану во время заседаний правительства.

При закрытии сессии курултая печать вручается председателю курултая, а герб, флаг и войсковое знамя с воинскими почестями переносятся в зал заседаний курултая и по окончании сессии, обратно с таким же почестями, — в зал Присутствия Правительства».

Үрҙә яҙылғандарҙан күренеүенсә, 1918 йылдың башында уҡ Башҡортостандың дәүләт атрибуттары барлыҡҡа килгән, шул иҫәптән – ғәскәри байраҡ. Әммә, үкенескә ҡаршы, уларҙың һүрәтләмәһе һаҡланмаған. Тәүге милли символика ниндәй булған? Әйтеүе ҡыйын.

Шул уҡ осорҙа Бөрйән-Түңгәүер кантонында тәүге башҡорт отряды ойошторола. Отрядтың йәшел төҫтәге байраҡтары булғанлығы билдәле. Әммә 1918 йылдың 17 февралендә Ырымбурҙа Башҡортостан хөкүмәте ағзалары ҡулға алынып, төрмәгә ябыла. Уның артынса, большевиктар Баймаҡтағы ҡоралһыҙ башҡорт отрядын тарҡатып, уның офицерҙарын ата (Ғ. Мағазов, Ғ. Иҙелбаев һ. б.).

Ошо ваҡиғалар арҡаһында Башҡорт хөкүмәте башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороу эшенә тик июнь башында ғына тотона. 1918 йылдың 1 июнендә Башҡорт армияһына мобилизация иғлан ителә. Тәүҙән үк милли хәрәкәт лидерҙары башҡорт ғәскәрҙәренең хәрби атрибутикаһына иғтибар бирә. Уларға ысын мәғәнәһендәге милли армияһы төҫөн биреү

маҡсатында эш итә. Әле 1918 йылдың июнендә үк тәүге башҡорт полкы ойошторолоу менән бергә ғәскәр өсөн милли символика булдырыла. 1918 йылдың 14 июнендә Башҡорт хәрби шураһы үҙенең 218-се һанлы фарманы менән 1-се Башҡорт пехота полкы һалдаттарына күк төҫтәге ромб (ҡалҡан) рәүешендәге нашивка тағып йөрөргә ҡуша.

Нашивканың уртаһында ярым ай менән йондоҙ һүрәтләнгән. Уның аҫтында звание буйынса айырыу билдәләре (галун, йондоҙҙар) ҡуйылған. Ә инде ҡалҡандың аҫтында полктың номеры – «1» һаны тегелгән булған, тип яҙа тарих фәндәре кандидаты Рөстәм Таймасов.

Башҡорт хәрби шураһы 1918 йылдың авгусында башҡорт полктары өсөн ентекле рәүештә эшләнгән хәрби форма индерергә ҡарар итә. Хәрби шура үҙенең 13 августағы фарманы менән башҡорт ғәскәрҙәренә униформа эшләү өсөн комиссия тәғәйенләй. Фарманда: *«Для выработки формы башкирских частей войск назначается комиссия на 13-е сего августа под председательством Начальника Штаба 2-й Башкирской дивизии подполковника Емельянова в составе членов: старшего адъютанта Башкирского Военного Совета поручика Мухлио, Заведующего Мобилизационного отдела прапорщика Терегулова и члена Военного Совета Магазова.*

Означенной комиссии разработать проект формы и представить на утверждение Башкирского Военного Совета», – тиелә. Башҡорт хәрби шураһы башҡорт һалдаттарының тышҡы ҡиәфәтенә ныҡ иғтибар бирә. Мәҫәлән, 1-се Башҡорт уксы полкы командиры Туймаҡаев, һалдаттарға погон тағырға бойороҡ биргәне өсөн 15 августа Хәрби шураның фарманы менән шелтә ала. Шул уҡ фарманда башҡорт ғәскәрендә Аҡ армияның погондарын тағып йөрөү ҡәтғи тыйылыуы хаҡында әйтелә: *«...Теперь же распорядиться, чтобы ни один офицер и ни один солдат башкирских частей войска не был при погонах. Нарукавную нашивку пока носить впредь до выработки комиссией и утверждения Башкирским Военным Советом формы ношения одежды башкирским частям»*, — тиелә.

Униформа эшләү тураһындағы фармандан һуң, бер аҙна үтеүгә, 1918 йылдың 20 авгусында, 4547-се һанлы фарман менән Башҡортостан автономияһының өс төҫлө (күк, йәшел һәм аҡ) милли флагы ҡабул ителә. Был фарманда башҡорт ғәскәрҙәре яугирҙарының погондары һәм нашивкалары күк төҫтә булырға тейешлеге һыҙыҡ өҫтөнә алына. Ә инде тағы 8 көндән, 1918 йылдың 28 авгусында, комиссия үҙ эшен тамамлап, Башҡорт хәрби шураһы 29-сы һанлы фарманы менән Башҡорт армияһының хәрби формаһын раҫлай. Фармандың махсус ҡушымтаһында хәрби форма, ундағы айырыу билдәләренең һүрәтләмәһе килтерелә. Китап уҡыусыларға уны тулыһынса тәҡдим итәм:

Приложение к приказу № 29
Башкирского Военного Совета
от 28 августа 1918 г.

ОПИСАНИЕ

ФОРМА ОДЕЖДЫ ВОЕННОСЛУЖАЩИХ БАШКИРСКИХ ВОЙСК

1. Походной формой одежды для частей, штабов, управлений и заведений Башкирской армии устанавливается:

а) рубашка защитного цвета с узкими того же цвета погонами, однообразными для всех чинов и родов войск с гладкими металлическими номерами частей войск;

б) шаровары: для пехоты и инженерных частей – цвета хаки, для артиллерии – черные и кавалерии – серо-синие, с синими лампасами шириною три сантиметра для всех родов войск;

в) головной убор будет разработан особо;

г) шинель серо-шинельного сукна с узкими погонами. Погон у основания (у рукава) шириною 1 вершок, верх конца 3/4 вершка, из того же сукна и гладким металлическим номером части на погоне;

д) пояс желтой сыромятной кожи с белой металлической пряжкой;

е) сапоги или обмотки;

ж) шпоры – кому положено быть в строю верхом;

з) для отличия военнослужащих по их званию установить нарукавные знаки на левом рукаве, чертежи коих, натуральной величины, при сем прилагаются.

Ефрейторы, бомбордиры, унтер-офицеры и фейерверкеры носят на нарукавном знаке нашивку из галунной тесьмы по цвету прибора: одну, две, три нашивки. **Фельдфебель** – одну широкую галунную нашивку.

Подпрапорщик, кроме фельдфебельской нашивки, имеет из нашивного галуна продольную нашивку от внутренней стороны угла к нижнему краю щита. **Обер-офицеры** – галун по прибору тот же, что и для солдата. **Прапорщик** – одна звездочка выше галуна, **подпоручик** – две звездочки, согласно чертежу; **поручик** – три звездочки: две звездочки по чертежу, одна выше галуна, одна ниже. **Капитан** – без звездочек, внизу под углом дополнительная нашивка тоже углом из того же галуна.

Штаб-офицеры: подполковник по чертежу три звездочки, **полковник** без звездочек.

Генералы: генерал-майор по чертежу две звездочки, **генерал-лейтенант** – три звездочки: две по чертежу и одна ниже галунного угла.

Полный генерал – без звездочек.

На нарукавном щите выше галунной нашивки у всех чинов Башкирских войск помещается изображение полумесяца и звезды, по цвету прибора. На погонах выше части устанавливается отличие по родам войск: стрелки — два скрещенных ружья, артиллерия — две скрещенные пушки.

Инженерные войска (авиация, авторота) и все прочие специальные части имеют на погонах присвоенное им внешнее отличие.

Нарукавные знаки состоят: из щита, натуральная величина коего указана на прилагаемом чертеже. Щит темно-синего цвета.

Выпушка на погонах для всех строевых частей, кроме кавалерии — красная, для кавалерии — оранжевая.

Для строевых штабов, начиная со штабов дивизии — белая, прочих учреждений и заведений военного ведомства и для нестроевых команд и рот — черная.

Форма врачей из военных чиновников будет объявлена дополнительно.

Оружие: солдаты по роду войск — штыки, бебуты (тесаки) и шашки. **Офицеры и подпрапорщики** — шашки кавказского образца или кортики.

Темляки при шашках: **солдаты** — кожаные; **офицеры и подпрапорщики** — тесьма с серебряным наконечником.

Аксельбанты по должности: **офицерам** генерального штаба и **топографам.**

Шулай итеп, башҡорт армияһында 1918 йылдың йәйендә үк тулы мәғәнәһендәге милли униформа эшләнә. Ғәскәрҙәр өсөн погондар индерелә, унда йылтыр тимерҙән полктарҙың номерҙары беркетелгән була. Башҡорт хәрби шураһы үҙ ғәскәрҙәре өсөн униформа эшләгәндә Халыҡ армияһы (Комуч, йәғни Һамар хөкүмәтенең ғәскәре) хәрби формаһын үрнәк итеп ала (сөнки Комуч башҡорт ғәскәрҙәренә ыңғай ҡарай һәм матди ярҙам күрһәтә. Был осорҙа башҡорт полктары Халыҡ армияһы сафында була). Әммә аҡтарҙыҡынан айырмалы рәүештә, башҡорт нашивкалары ярым ай менән йондоҙ биҙәлгән һәм милли күк төҫтә эшләнгән була.

Ә инде баш кейемен эшләү мәсьәләһе айырым хәл ителергә тейеш, тиелә. Тарих фәндәре кандидаты Рөстәм Таймасов, башҡорт ғәскәрендә кокарда урынына күк таҫма таҡҡандар, тип яҙа. Бында ла Халыҡ армияһы униформаһы өлгө итеп алына. Комуч армияһы яугирҙары фуражкаға Георгий таҫмаһын тағып йөрөгән.

28 сентябрҙә Башҡорт хәрби шураһы башҡорт ғәскәрендәге чиновниктар һәм табиптарҙың хәрби формаһын эшләү буйынса комиссия булдыра.

Шулай итеп, Башҡорт корпусы 1918 йылдың сентябренә ысын мәғәнәһендәге милли армия төҫөн алған ғәскәргә әүерелә. Үкенескә ҡаршы, милли хәрби кейемдәге башҡорт яугирҙарын һүрәтләгән 1918 йылғы бер фотодокумент та һаҡланмаған (һәр хәлдә миңә осраманы). Сәбәбе

ябай: 1919 йылда башҡорт ғәскәрҙәре ҡыҙылдар яғына сыҡҡас, аҡтар яғында булған осорҙағы фотолар юҡҡа сығарылған. Әммә Башҡортостандың Үҙәк тарих архивында ошо йәһәттән бик тә ҡыҙыҡлы бер документҡа осраным. Унда Ырымбур ҡалаһындағы башҡорт ғәскәрҙәре һүрәтләнә. Билдәле булыуынса, 1918 йылдың август башында Башҡортостан хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Силәбенән Ырымбурға күсә. Каруанһарай яңынан Башҡорт милли хәрәкәтенең үҙәгенә әүерелә. Иң ҡыҙығы шунда: Өфө директория вәкиле Н. Стариков үҙенең йәшерен донесениеһында Ырымбурҙағы казактар менән башҡорттарҙы сағыштыра. Башҡорт яугирҙары менән һоҡланыуын йәшермәй:

«В Оренбурге я пробыл с 14 по 27 октября...

...Много говорят о стойкости и дисциплинированности казацких частей, хотя и здесь больше подразумевают те будущие полки, куда войдут старики. Мое впечатление от казаков, которых я видел на улицах города, маршировавших взводами и ротами, таково, что они не радуют глаз военного человека, нет, так сказать, вида, выправки, стройности, такая же расхлябанность, к какой уже привыкли мы за последнее время, когда видим наши русские войсковые части.

Совершенно другое впечатление от башкирских частей. Хорошо одетые, молодцеватые – они всегда обращают на себя внимание, когда проходят частями по городу со своим оркестром, со своими национальными значками на фуражках и погонах. Видел башкирскую кавалерию, которой можно было полюбоваться...»

Бына шулай итеп, башҡорт ғәскәрҙәренең ойошҡанлығы, матур милли хәрби кейем, оркестр менән Ырымбур урамдарынан ғорур баҫып йөрөүҙәре хатта башҡорттарҙы күҙәтергә ебәрелгән шымсыны ла һоҡландырған икән.

Башҡорт армияһы ғәскәри байрағының һүрәтләмәһе һаҡланмаһа ла, башҡорт полктарының байраҡтары хаҡында бер аҙ мәғлүмәт бар. Мәҫәлән, 1918 йылдың июлендә 2-се Башҡорт пехота полкы Екатеринбург ҡалаһын большевиктарҙан азат итеүҙә ҙур батырлыҡтар күрһәтә. Ҡала халҡы ла башҡорт яугирҙарының батырлығын юғары баһалай һәм полкка исемләп байраҡ бүләк итә. Бүләкте тапшырыу тантанаһы 1918 йылдың 7 авгусында Силәбе ҡалаһында (2-се полктың дислокация урынында) үтә. Ошо ваҡиғаның шаһиты уны бына нисек һүрәтләй: *«К нашему появлению солдаты 2-го Башкирского полка уже были выстроены возле вокзала <...> Спустя некоторое время со стороны вокзала были вынесены два знамени, завернутые вокруг древков, увенчанных специально изготовленными полумесяцами. <...> Отдав солдатам команду «смирно», командир в сопровождении двух безоружных и двух вооруженных солдат направился в сторону комиссии, которая была прислана для вручения знамени как подарка. Приставив саблю ко лбу, он подошел к комиссии и, поцеловав знамя и саблю, получил знамена и, передав их находящимся рядом с ним безоружным солдатам, вернулся к строю солдат. Когда он по-*

ставил в строй тех, со знаменами, солдат, заиграла музыка, по окончании которой солдаты, развернув знамя и флаг, выставили их перед собравшейся публикой.

Изготовленное из дорогого белого кумача с зеленой каймой, с изображением цветка, вышитого золотом по краям, знамя прикреплено к древку, увенчанному специально отлитым из серебра полумесяцем. На знамени сверху по-мусульмански, снизу по-русски выписано «Доблестным освободителям – благодарный Екатеринбург». Между двумя текстами помещено весьма красиво вышитое изображение полумесяца и звезды. После того, как зачитали надписи публике, снова музыка заиграла (вместе со знаменем вручается и флаг из голубой материи с изображением полумесяца посередине и мусульманскими цифрами «2» по углам)».

Үрҙә яҙылғандарҙан күренеүенсә, 2-се Башҡорт пехота полкына байраҡ Екатеринбург халҡы тарафынан исемләп тапшырылһа, йәғни тәғәйен батырлыҡтар өсөн «2» һаны һүрәтләнгән зәңгәр флаг полк байрағы рәүешендә Башҡорт хәрби шураһы (Башҡорт ғәскәре штабы) тарафынан бирелгән, күрәһең. Ошонан сығып, бындай номерлы байраҡтар (флаг) һәр башҡорт полкына тапшырылған, тигән һығымта яһарға була. Почетлы байраҡ менән полк байрағының үрҙәге һүрәтләмәгә таянып эшләнгән реконструкцияһын ҡарағыҙ (11–12-се һүрәттәр).

Башҡорт армияһының дөйөм ғәскәри байрағы ла күк (зәңгәр) төҫтә, уртаһында ярым ай менән йондоҙ (йәки ярым ай) һүрәтләнгән әләм рәүешендә булғандыр, моғайын. Байраҡ һабының осон ярым ай менән йондоҙ биҙәгән тип, һығымта яһарға урын бар. Сөнки Башҡортостан Республикаһының Милли музейы фондында һаҡланған байраҡ башы ошоно раҫлай (13-сө һүрәтте ҡарағыҙ). Был комартҡы ҡасандыр бер башҡорт полкының байрағын биҙәгәндер.

1919 йылдың февралендә башҡорт ғәскәрҙәре советтар яғына сыға. Башҡорт хөкүмәтенең Үҙәк совет власы менән 20 мартта килешеү төҙөй. Уның буйынса, Ҡыҙыл Армия составында Айырым Башҡорт армияһы ойоштороу ҡарала. Апрель башында хатта РСФСР Реввоенсоветы ҡарар ҙа сығара. Ҡарарға ярашлы, Әхмәтзәки Вәлиди Айырым Башҡорт армияһының командующийы һәм Башҡортостандың хәрби комиссары итеп тәғәйенләнә. Башҡорт хәрби комиссариаты тураһындағы положениела: *«...установление формы Башкирской армии и внутреннего распорядка в ней»*. Йәғни башҡорт армияһының яңы униформаһын эшләү Зәки Вәлидигә йөкмәтелгән булған.

Әммә 1919 йылдың йәйенә ҡарай Ҡыҙыл Армия командалығы айырым Башҡорт армияһын ойоштороу планынан баш тарта. Ошоноң менән башҡорт армияһының униформаһын булдырыу хоҡуғы юҡҡа сыға. Хәҙер инде башҡорт ғәскәрҙәре РСФСР Реввоенсоветы раҫлаған Ҡыҙыл Армияның мосолман частары өсөн эшләнгән билдәне тағып йөрөйҙәр. Ул йәшел төҫтәге ромб формаһында булған (19-сы һүрәтте ҡарағыҙ), уның ситтәре алтын еп менән сигелгән. Ромбтың уртаһында алтын ептәр менән сигелгән ярым ай менән йондоҙ һүрәте торған. Был бил-

дәне Петроградты һаҡлауҙа ҡатнашҡан Башҡорт кавалерия дивизияһы менән Башҡорт уҡсы бригадаһы яугирҙарының ҡулында күрергә мөмкин. Мәҫәлән, Башҡорт кавалерия дивизияһының комиссары Нуриәғзәм Таһировтың һул ҡулындағы нашивкала ярым ай менән йондоҙ билдәһе бик тә яҡшы күренә (18-се һүрәтте ҡарағыҙ). Ромбтың ситтәре лә һәм мосолман эмблемаһы ла алтын ептәр менән сигелгән. Бер мемуарҙа Петроградтағы башҡорт ғәскәрҙәренең батальон командиры былай тип һүрәтләнә: *«...на голове шапочка пирожком с зелеными кантами, на рукаве на зеленом фоне красная звезда и полумесяц»*. Мәҫәлән, ҡайһы бер яугирҙар гимнастеркаларына ромбһыҙ, ҡыҙыл төҫтәге ярым ай менән йондоҙ тағып йөрөгән.

Фотоларҙан күренеүенсә, нашивкаларҙы күберәк башҡорт ғәскәрҙәренең комсоставы (командир һәм комиссарҙар) таҡҡанлығы күренә. Был аңлашыла, сөнки хатта ҡорал етешмәгән, ҡаты һуғыштар барған осорҙа 10 меңдән ашыу тәшкил иткән Башҡорт армияһын шеврон, нашивкалар менән тәьмин итеү мөмкин булмаған, әлбиттә. Икенсе сәбәбе: 1919 йылдың август айына тиклем Башҡортостан аҡтар ҡулында була, ә Башревком алыҫ Саранскиҙа эвакуацияла, башҡорт полктары йыраҡ фронттарҙа...

Шулай итеп, ҡыҙылдар яғына сыҡҡас та башҡорт ғәскәрҙәренең милли символикаһы әҙерәк кенә үҙгәреш кисереп, һаҡланып ҡалған. Был башҡорт полктарының байраҡтарында ла күҙәтелә. Ғәскәри байраҡтарҙың төп элементы – ярым ай менән йондоҙ булған.

Архив документтарынан күренеүенсә, ҡыҙылдар яғындағы башҡорт ғәскәрҙәрендә тәүге байраҡтар әҙерләү мәсьәләһе 1919 йылдың июль башында күтәрелә. Көтмәгәндә Реввоенсовет Саранскиҙа торған Башҡорт кавалерия дивизияһын Көньяҡ фронтҡа (Украинаға) ебәрергә бойора. 1919 йылдың 6 июлендә Башревкомдың ултырышында Зәки Вәлидиҙең бойороғо буйынса түбәндәге ҡарар сығара:

а) Члену Ревкома тов. Ишмурзину поручить выработать и представить на утверждение лозунг и эмблемы знамен.

б) Зав. хозяйственным отделом тов. Каримову принять все меры к изготовлению в кратчайший срок знамен для всех полков.

Был байраҡтарҙы эшләп өлгөрмәгәндәр, күрәһең. Дивизияның байраҡтары хаҡында документтарҙа мәғлүмәт юҡ. Башҡорт республикаһы хөкүмәте үҙ ғәскәрҙәренә байраҡтар тапшырыу мәсьәләһенә 1920 йылда кире әйләнеп ҡайта. Байраҡтар Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһының өс полкына һәм Башҡорт кавалерия дивизияһынан ҡалған бер полкка тапшырыла. Бригада полктарына байраҡтар тапшырыу тантанаһы 1920 йылдың 27 майында Петроград ҡалаһында үтә. Шул байраҡтарҙың икеһе – 1-се һәм 2-се Башҡорт уҡсы полктарының байраҡтары – бөгөн Милли музей фондында һаҡлана. 2-се полктыҡы ярайһы уҡ яҡшы һаҡланған. Миңә тап ошо байраҡты фотоға төшөрөп алырға насип булды (14–15-се һүрәттәрҙе ҡарағыҙ). Күреп тороуығыҙса, байраҡ ҡыҙыл бәрхәт туҡыманан тегелгән. Байраҡтың бер яғында ғәрәп хәрефтәре менән иҫке төрки телендә һәм икенсе яғында рус телендә текст бирелгән: үрҙә – *«Бөтөн донъя юҡһылдары, берләшегеҙ!»* – тигән

большевиктар лозунгыһы. Ярым ай менән йондоҙҙо уратып: *«Рәсәй Федерацияһының Башҡортостан Совет Социалистик Республикаһы»*, — тип яҙылған. Был инде Башҡортостандың яңы статусын һәм башҡорт ғәскәрҙәренең нимә өсөн көрәшкәнен күрһәтеп тороусы яҙыу. Аҫта ғәскәри берәмектең исеме *«Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһының»* һәм ҡырҙа полктың һаны күрһәтелгән. Байраҡтың икенсе яғында ошондай уҡ текст рус телендә яҙылған. Ә инде Башҡорт армияһының эмблемаһы — ярым ай менән йондоҙҙоң эсендә большевиктарҙың символы ураҡ-сүкеш менән урынлаштырып, башҡорт етәкселеге бик тә аҡыллы идеологик компромисс тапҡанлығы күренә.

1919 йылда ҡыҙылдарға ҡушылмай, Колчак армияһы менән киткән башҡорт ғәскәрҙәренең (улар ике меңдән ашыу булған) символикаһына туҡталып китмәй булмай. Билдәле булыуынса, Ғәлимйән Таған, Ғәбделхәй Ҡорбанғәлиевтәр тырышлығы менән Рәсәйҙең Көнсығыш сигендә (Российская Восточная окраина) казак ғәскәрҙәре составында Башҡорттарҙың хәрби-милли идараһы ойошторола. Казактар сифатында Башҡорт ғәскәре булдырыла. Атаман Семеновтың түбәндәге фарманы менән Башҡорт ғәскәренә униформа индерелә. Был униформаны Семенов янында башҡорттарҙың вәкиле булып хеҙмәт иткән полковник Солтангәрәй Бикмәев эшләй. Хәрби форма Башҡорт ғәскәренең 1857 йылда ҡабул ителгән униформаһы нигеҙендә булдырыла:

ПРИКАЗ

Главнокомандующего всеми вооруженными силами и походного атамана всех казачьих войск

№ 543

11 августа 1920 г.

г. Чита

В дополнение к приказу моему от 12 февраля с/г № 154 объявляю вновь установленную мною форму одежды для башкирского войска в соответствии со значением цветов: зеленого — общего для всех мусульман и синего — национального цвета башкир, применительно к бывшей форме одежды башкирского войска 1862 года.

Наименование предметов обмундирования для офицеров и солдат (джигитов)

Папаха: (нарядная). Низкая, черная, по образцу прежней башкирской с синим верхом и выпушкой по швам, у джигитов с зеленой тесьмой, у офицеров, соответственно, с галуном серебряным, вседневная — произвольного цвета.

Описание: приказы по В. В. 1920 г. № 433.

Мундир: (бешмет) из темно-синего сукна покроя кавказского бешмета с оторочкою по краям воротника (верхнему и нижнему), верхнему и нижнему бортам-разрезам с боков, нижнему краю рукавов и их разрезам; у джигитов – зеленой шерстяной тесьмою, шириною, равной наплечной урядничьей: у офицеров – серебряным галуном с синим просветом (обер-офицер, штаб-офицер – 2-й генеральский...). На груди, по образцу черкески, патронташные гнезда на 15 патронов с каждой стороны, обшитые по верхнему и нижнему краю той же тесьмой (галуном). Длина бешмета – до колен.

Мундир: (вседневный). Тот же бешмет произвольного цвета сукна, без обшивки тесьмою (разрешается для сбережения обшивать тонким черным шнурком, по образцу черкесок), у урядника и вахмистра разрез рукавов и воротника по верхнему краю обшивается общепринятым галуном серебряным.

Рубаха: (походная). Описание: согласно приказа по В. В. 1920 г. № 218 со следующими изменениями: ворот прямой, на груди патронташные гнезда по 15 патронов с каждой стороны, обшлаг обшивается зеленой тесьмой.

Шинель: общепринятого образца с зелеными петлицами. Описание: приказ по В. В. 1892 г. № 305, 1907 г. № 621, 1909 г. № 518.

Шаровары: общеказачьего типа. Описание: приказ по В. В. 1909 г. № 51 со следующими изменениями. На наружных боковых швах нашивается кант из зеленой тесьмы у джигитов, у офицеров – серебряного галуна. Вседневные – разрешается вместо галуна иметь выпушку из зеленой тесьмы.

Кушак: зеленый ластиковый у джигитов (у офицеров шелковый). При вседневной форме кавказского образца произвольным набором. Описание: приказ по В. В. 1881 г. за № 31 и 1881 г. за № 72.

Погоны: пристежные к походной рубахе. Описание: согласно приказа по В. В. 1912 г. № 218, но со следующими добавлениями: с зеленым кантом, трафаретный знак полумесяца со звездой и арабской буквой «Б» – желтой краской у джигитов (у офицеров зеленый кант, синий просвет-зигзаг, знак полумесяца со звездой и прописная арабская буква «Б», шитые шелком желтым). К мундиру у джигитов темно-синего сукна с зеленой выпушкой (кант, трафаретный знак полумесяца со звездой и прописная арабская буква «Б» под знаком желтой краской). У офицеров – серебряного галуна с синим просветом и зеленым кантом, знак полумесяца со звездой и прописная арабская буква «Б» под знаком, шитые золотом. У урядников нашивки из зеленой тесьмы. У вахмистров серебряного галуна нашивка.

Шашка: (азиатская). Описание: приказ по В. В. 1903 г. № 363 образца приказа по В. В. 1883 г. № 37.

Башлык: Азиатский.

Портупея: Кавказская.

Примечание: а) бурка при парадной форме. Описание мундира черкесского покроя будет объявлено дополнительно; б) при парадной форме разрешается носить национальный головной убор «тюбетейка»

Генерал-лейтенант атаман **Семенов**

Фармандан күренеүенсә, Башҡорт ғәскәренә казак формаһы нигеҙендә хәрби кейем индерелгән. Был униформала башҡорттоң милли символикаһы элементтары ҡулланылған. Мәҫәлән, погондарҙа ярым ай менән йондоҙ билдәһе һәм Башҡорт ғәскәрен аңлатҡан «Б» хәрефе ҡуйылған. Хәрби форма йәшел һәм күк төҫтәрҙән торған.

Шулай итеп, Граждандар һуғышы осорондағы башҡорт хәрби символикаһының үҙенсәлекле һәм бай тарихы бар, тип һығымта яһарға мөмкин. Ул башҡорт халҡының милли үҙаңы үҫешенең сағыу бер күренеше, тип әйтергә була. 1917–1920 йылдарҙа ярым ай менән йондоҙ башҡорттарҙың мосолман икәнлеген күрһәткән билдә генә түгел, ә ысын мәғәнәһендә Башҡорт милли хәрәкәтенең символына әүерелгәнен күрәбеҙ. Ярым ай менән йондоҙ ғәскәри символика булараҡ ҡына түгел, ә Башҡортостан автономияһының дәүләт атрибутикаһы булараҡ ҡулланылған (мәҫәлән, хөкүмәт, урындағы кантон идараһы мисәттәрендә күрергә була). Бөгөнгө көндә ярым ай менән йондоҙ билдәһе, етe тажлы ҡурай менән бер рәттән, республика кимәлендә башҡорттоң милли символдарының береһе булараҡ ҡулланырға тейеш.

Башҡорт хәрби шураһы – Башҡорт армияһы штабы

1918 йылдың июнендә, Силәбе ҡалаһында башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороу эшенә идара итеү органы булараҡ, Башҡорт хөкүмәтенең Хәрби бүлеге янында Башҡорт хәрби шураһы (Башкирский военный совет) төҙөлә. Хәрби шура 1918 йылдың октябренә тиклем Башҡорт армияһының штабы ролен үтәй.

Башҡорт хәрби шураһына милли хәрәкәт лидеры Зәки Вәлиди етәкселек итә. Уның ярҙамсыһы итеп поручик Әбделхаҡ Ғәбитов тәғәйенләнә. Тәүге мәлдә Хәрби шураның ағзалары булып прапорщик Ғәлимйән Таған, прапорщик Ғариф Мөхәмәтйәров, Тәки Ғисмәтуллин, Ғәбделхай Иркәбаевтар тора.

1918 йылдың авгусында Башҡорт хәрби шураһы хөкүмәт менән бергә Ырымбурға ҡайта. Каруанһарай бинаһы Башҡорт хөкүмәте резиденцияһына һәм Башҡорт армияһының штабына әүерелә. Бында Хәрби шураның ете бүлеге: Строевой, Хужалыҡ, Интендант, Мобилизация, Ирекле отрядтар, Суд, Артиллерия һәм Инженер бүлектәре барлыҡҡа килә.

Хәрби шура менән идаралыҡ төп «Строевой бүлектә» туплана. Бында ғәскәрҙәр буйынса төп фармандар сыға. Төрлө вазифаларға тәғәйенләү һ. б. Хужалыҡ бүлеге аша ғәскәрҙәргә аҡса, жалование бирелә, ә Артиллерия бүлеге уларҙы ҡорал менән тәьмин итә. Был бүлек менән прапорщик Мөхтәр Ҡарамышев етәкселек итә. Мобилизация бүлеге Башҡорт армияһына һалдаттар мобилизациялау эше менән шөғөлләнә. Уның мөдире прапорщик Тереғолов була. Һәр кантонда хәрби-табиби комиссиялар эшләй.

Кантондарҙа ирекле отрядтар ойоштороу, уларҙы кәрәк-яраҡ менән тәьмин эше Ирекле отрядтар бүлегенә йөкмәтелә. Уның мөдире итеп подпоручик Әхмәҙулла Бейешев тәғәйенләнә.

Интендант ғәскәрҙәрҙе кейем-һалым һәм башҡа кәрәк-яраҡтар менән тәьмин итеп тора. Суд бүлеге хөкөм итеү менән шөғөлләнһә (етәксеһе – башҡорт тарханы, мөфтөй Мөхәмәтйәр Солтановтың улы Искәндәр Солтанов), Инженер бүлеге маҡсаты – төҙөлөш була.

1918 йылдың 12 авгусында Башҡорт хәрби шураһы янында Махсус тәғәйенешле команда (Команда особого назначения) ойошторола. Был команданың бурысы Башҡорт хөкүмәтен һәм Хәрби шураһын һаҡлау була. Улар Каруанһарай бинаһында ҡарауыл хеҙмәтен үтәй. Махсус

командаға һалдаттарҙы Ырымбурҙағы 1-се Башкорт пехота полкынан йәлеп итәләр. Әйткәндәй, Хәрби шура үҙенең фарманында Махсус команданың тулы исемлеген бирә. Мин китап уҡыусылар иғтибарына ошо исемлекте тәҡдим итмәксемен. Бәлки, кемдеңдер атаһы, ҡартатаһы йәки ҡартатаһының атаһы ошо командала хеҙмәт иткәндер.

СПИСОК

солдат команды особого назначения при военном совете

№№	Звание	Фамилия, имя	Занимаемая должность
1.	Подпоручик	Атланов	Начальн. ком.
2.	Прапорщик	Тихомиров	Мл. офиц. ком.
3.	Мл. унтер-оф.	Исмәғилев Мөхәмәтвафа	Фельдфебель
4.	Рядовой	Кирәев Йыһанша	Ком. 1-го отд.
5.	Рядовой	Йәләлетдинов Һиҙиәтулла	Ком. 2-го отд.
6.	Ефрейтор	Әбдрәшитов Әхмәтшәриф	Ком. 3-го отд.
7.	Мл. унтер-оф.	Зәкирйәнов Фәйзрахман	Ком. 4-го отд.
8.	Рядовой	Ғүмәров Усман	
9.	— // —	Мөхәмәҙиев Әхмәҙей	
10.	— // —	Кәримов Мөхәмәтйән	
11.	— // —	Шәрәфетдинов Ғәббәс	
12.	— // —	Ғәбитов Динмөхәмәт	
13.	— // —	Фазлетдинов Ситдыҡ	
14.	— // —	Изгин Хисам	
15.	— // —	Кәлимуллин Насретдин	
16.	— // —	Ғәликәев Йыһанбай	
17.	— // —	Нуруллин Садыҡ	
18.	— // —	Ҡурамшин Ғәҙелша	
19.	— // —	Хәмиҙуллин Нәбиулла	
20.	— // —	Йомағолов Зәйнулла	
21.	— // —	Йосопов Сиғәтулла	
22.	— // —	Саматов Шәмғун	
23.	— // —	Фәхрединов Ғиләжетдин	
24.	— // —	Йосопов Хәсән	
25.	— // —	Мөхәмәтнуров Мөхәмәтнух	
26.	— // —	Ҡотлоғужин Садыҡ	
27.	— // —	Әхмәтханов Солтан	
28.	— // —	Хәлиуллин Сөләймән	
29.	— // —	Сөнәғәтуллин Носратдин	
30.	— // —	Ҡолмөхәтов Ғәтиәтулла	
31.	— // —	Йосопов Мөхәмәтвәли	

32.	—//—	Абдрахманов Хәлиулла	
33.	—//—	Зәйнуллин Хәкимйән	
34.	—//—	Хәйбуллин Хисаметдин	
35.	—//—	Хужахмәтов Әбүбәкир	
36.	—//—	Ҡоләхмәтов Сабир	
37.	—//—	Ибенйәминов Мөхәмәтәмин	
38.	—//—	Ҡорманғәлиев Шәкир	
39.	—//—	Иҙрисов Ямалетдин	
40.	—//—	Ҡайыпов Мөхәмәтзариф	
41.	—//—	Камалов Зәкир	
42.	—//—	Надыров Мөхәмәтфәйез	
43.	—//—	Сәхәүетдинов Насретдин	
44.	—//—	Ғәлиуллин Фәйзулла	
45.	—//—	Ямалкаев Мәүлит	
46.	—//—	Мөхәмәтшин Ғиззәтулла	
47.	—//—	Әбделғәлимов Мөхәмәтғәлим	
48.	—//—	Шәңгәрәев Дәүләткирәй	
49.	—//—	Садыҡов Хәсән	
50.	—//—	Әбделғәниев Әхмәҙиә	
51.	—//—	Сөләймәнов Хәлим	
52.	—//—	Ишбулатов Садир	
53.	Ефрейтор	Сәйфелмөлөков Абдрахман	В госпитале

Махсус команда һалдаттары Башҡорт хәрби шураһының рәйесе Зәки Вәлидиҙең тән һаҡсылары бурысын да башҡарған. Мәҫәлән, 1918 йылдың 17 авгусында Вәлиди Комуч хөкүмәте менән һөйләшеү өсөн Һамар ҡалаһына юллана. Уны был командировкала Махсус команданан подпоручик Атланов етәкселегендәге 10 һалдат оҙатып йөрөй.

Шуныһы ҡыҙыҡлы, Башҡорт хәрби шураһының фармандарынан күреүенсә, Беренсе донъя һуғышында әсиргә төшкән дошман һалдаттары 1918 йылдың көҙөндә Каруанһарай бинаһында эшкә йәлеп ителгән булғандар икән. Мәҫәлән, 1918 йылдың 2 сентябрендәге фарманда былай тиелгән: *«Шесть военнопленных, поименованных в списке ниже сего, прикомандированных к Башкирскому Военному Совету для работ от коменданта лагеря военнопленных на Меновом дворе г. Оренбурга, полагать в прикомандировании с сего числа и зачислить на провиантское, приварочное и чайное довольствие с 31 августа и мыльное с 14 сего сентября.*

СПИСОК

1) Файгель Адраш, 2) Веце Альберт, 3) Люрц Вильмаш, 4) Кемари Ференц, 5) Визи Лаеш, 6) Бергезен Фриц».

Иртәгеһенә тағы туғыҙ әсирҙе Каруанһарайҙа эшкә ҡушалар. Бына улар: Вейс Кароль, Штубнер Кароль, Кемеш Юзеф, Кригер Густав,

Менгер Леон, Алексик, Славко, Смаин Гибрахим, Шульц Рутгерт, Абдул Мустафа.

Исем-шәрифтәренән күренеүенсә, хәрби әсирҙәр араһында немецтар ғына түгел, венгр, төрөк, австрийҙар ҙа күп булған. Уларҙың лагеры Ырымбур ҡалаһының Алыш-биреш һарайында (Меновой двор) урынлашҡан булған.

1918 йылдың сентябрендә башҡорт ғәскәрҙәренән Айырым Башҡорт корпусы ойоштороло. Башҡортостан етәкселеге милли армия менән идара итеүҙең структураһын үҙгәртеп ҡорорға, уның мөмкинлектәрен киңәйтергә тотона. 11 октябрҙә Башҡорт хөкүмәте үҙенең сираттағы ултырышында башҡорт ғәскәрҙәре менән етәкселек итеүсе яңы орган – Башҡорт ғәскәри идаралығы (Башкирское войсковое управление) булдырыу тураһында ҡарар ҡабул итә. Ғәскәри идаралыҡ менән етәкселек итеү бурысы Башҡорт хәрби шураһының рәйесе Зәки Вәлидигә йөкмәтелә. Идаралыҡ башлығының махсус башҡортса атамаһы Нойон (русса документтарҙа «Нуюн» тип бирелгән) тип алына. Күп кенә документтарҙа «нуюну З. Валидову», тиелә.

1919 йылда Башҡорт корпусы ҡыҙылдар яғына сыҡҡас, Башҡорт ғәскәри идаралығының, йәғни Башҡорт армияһы штабы бурыстары Башҡорт республикаһы хәрби комиссариаты ҡулына күсә. Зәки Вәлиди Совет власы тарафынан Башҡортостандың хәрби комиссары итеп раҫлана. Был хаҡта «Башҡорттар тарихы» китабында Вәлиди: *«Мин элек етәкселек иткән Башҡортостан ғәскәре идараһы (Башкирское войсковое управление) исемен үҙгәртеп, Башҡорт хәрби халыҡ комиссарлығы (Башкирский военкомат) тип аталды һәм тағы ла мөкәммәлерәк бер хәлгә килде»*, – тип яҙа.

«Беҙҙәр ғәскәр, әйҙә, алға марш!» Башҡорт һалдаттары йырлаған йырҙар

Караһана, дуҫкай, караһана,
Урал тауы тора күгәреп.
Уралтауға карап, бер йырлайыҡ,
Уйҙарҙы ла алыҫ ебәреп.

Башҡорт халыҡ йыры «Эскадрон»

Башҡорт халкының йыр сәнғәте һуғыш һәм хәрби походтарҙа тыуған тарихи йырҙар, көйҙәргә бай. Мәҫәлән, «Любизар», «Ҡаһым түрә» йырҙары 1812 йылғы Ватан һуғышы менән бәйле булһа, «Һыр», «Уйыл» йырҙары 1853 йылда Аҡмәсет походында тыуған. «Порт-Артур» – 1904–1905 йылдарҙағы Рус-япон һуғышының йыры икәнлеге һәр кемебеҙгә билдәле. Әммә бына Граждандар һуғышы осорондағы башкорт ғәскәрҙәренең йырҙары тураһында нимә беләбеҙ һуң? Башҡортостан автономияһы өсөн йәнен-тәнен аямай һуғышҡан башкорт һалдаттары ниндәй йырҙар йырлаған? Ғөмүмән, Башҡорт милли хәрәкәте осоронда ниндәй йырҙар тыуған? Үкенескә каршы, әлегә тиклем башҡорт ғәскәренең йырҙары менән бәйле тарихыбыҙҙың данлы бер өлөшө әлегә тиклем өйрәнелмәй килә. Миңә башкорт ғәскәрҙәре тарихын өйрәнгәндә улар башкарған йырҙар тураһында байтаҡ кына хәтирәләр, архив документтарына осрарға тура килде. Ошоларҙан сығып, Граждандар һуғышы осоронда башҡорт ғәскәрендә тыуған йырҙар тураһында ла яҙып үтергә булдым.

1918–1919 йылдарҙа тыуған ғәскәри йырҙарҙың ҡайһы берҙәре бөйөк шағир, Башҡорт милли хәрәкәтенең йырсыһы Шәйехзада Бабичтың ижады менән бәйле. Мәҫәлән, 1918 йылда яҙған «Башҡортостан» шиғырын йырға һалып, Башҡорт армияһы һалдаттары йырлап йөрөгәнлеге билдәле. Был йырҙы бөгөн беҙ «Каруанһарай» төркөмө башҡарыуында ишеткәнебеҙ бар.

Башҡортостан

Арыҫландар үҙ ерен
Залимдарҙан таптатмаҫ,
Таптайым тип атлаһа,
Башҡорт ҡаны атлатмаҫ.
Ил өҫтөнә сапкан яу
Башҡорт йәнен ҡаҡшатмаҫ,

Бысраҡ табан аҫтында
Башҡорт намыҫы ятмаҫ.
Башҡортостан — гөлбостан,
Сөнбөлөстан, нурбостан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт атлы арыҫлан!
Башҡортостан баҡсаһы —
Арыҫландар торған ер;
Арыҫландар бабаһы —
Ҡаһармандар йөрөгән ер;
Ҡаһармандар ҡәүҙәһен
Ҡосаҡлаған, күмгән ер;
Хәләл ҡандар шәүләһен
Күккә тәрсим ҡылған* ер.
Башҡортостан — гөлбостан,
Былбылыстан, нурбостан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт тигән арыҫлан.

Башҡорт халҡы тарихта
Ғәйрәт менән фаш булған;
Киң иреккә ашҡынған
Күңелдәге ташҡындан;
Һәр ваҡытта намыҫын
Үҙ башына баш ҡылған;
Тыуған илен һаҡлауға
Үҙе булған таш ҡурған.
Башҡортостан — гөлбостан,
Рәйханыстан, нурбостан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт улы арыҫлан.

Көслө намыҫ, ташҡын йән
Торҙо, тағы ҡалҡынды;
Тағы башҡорт халҡында
Иҫке ялҡын балҡыны.
Мең йәһәннәм тыуҙырыр
Бер башҡорттоң ялҡыны;
Миллион ожмах яратыр
Бер Уралдың алтыны!
Башҡортостан — нурбостан,
Рәйханыстан, гөлбостан.
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт улы арыҫлан.

* Тәрсим ҡылған — һүрәтләндергән.

Уралҡайҙың аҫты алтын,
Өҫтө шиғыр, үҙе нур;
Киләсәктә был ергә
Хоҙай үҙе ҡыҙығыр;
Фирҙәүестәр төҙөләр,
Әлуан ниғмәт* теҙелер;
Күкте ташлап мәләктәр,
Был ерҙәргә гиҙенер.
Башҡортостан – йәмбостан,
Илһамыстан, шиғырстан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт намлы арыҫлан!

Ҡыуан аңлап, әй, Ватан,
Беҙ аңланыҡ хәлеңде;
Һине һалып ҡулбашҡа,
Беҙ йөкләнек ғәмеңде.
Ғәреш әғлә** өҫтөнә
Мендерербеҙ даныңды;
Беҙ фидаи һинеңсөн –
Йәшәтербеҙ намыҫыңды!
Башҡортостан йәшәһен!
Сөнбөлөстан йәшәһен!
Шунда тыуып, шунда үҫкән
Арыҫлан йәшәһен!

Шәйехзада Бабичтың шиғырҙар йыйынтығында башҡорт ғәскәрҙәренә бағышланған «Ғәскәр маршы» исемле шиғыры бар. Ул «Эскадрон» көйөнә башҡарыла, тиелгән. Тимәк, башҡорт һалдаттары Бабичтың «Ғәскәр маршы» шиғырын «Эскадрон» көйөнә һалып йырлап йөрөгәндәр, тип фекер йөрөтөргә була. «Ғәскәр маршы»нда ысын мәғәнәһендә автономия өсөн көрәште, башҡорт ғәскәрҙәренең батырлығын сағылдырған, һалдаттарҙы яуға рухландырған, тәрән мәғәнәле һүҙҙәр һалынған:

Ғәскәр маршы

(«Эскадрон» көйөнә)

Тайярбыҙ беҙ Ватан фарманына,
Ысын ихлас биреп, баш ороп;
Тыуған илебеҙҙең ҡорбанына
Йәнде-тәнде һөйөнөп тапшырып.
Илебеҙ – түшәк, еребеҙ карауаттай,
Ҡары-боҙо эсе юрғандай;

---

* Әлуан ниғмәт – төрлө ашамлыҡ-эсемлек.
** Ғәреш әғлә – юғары кимәлгә.

Түҙемлебеҙ батыр Салауаттай,
Күкрәк ғәйрәт менән тулғандай.
Утлы беләк беҙҙең утын яҡһа,
Кибер төҫлө өлкән диңгеҙ ҙә;
Ныҡлы беләк беҙҙең уғын атһа,
Тейер төҫлө Сулпан йондоҙға!
Беҙ йөрөйбөҙ илде һаҡлайбыҙ тип,
Һаҡларбыҙ һәм Башҡортостанды;
Тураҡлайбыҙ, илде таптайбыҙ тип,
Каршы килгән яуыз дошманды!
Илкәй өсөн сыҡһын ғәзиз йәндәр,
Кунһын шәһит рухтар талына;
Хәләл ергә аҡһын хәләл ҡандар,
Бабайҙарҙың ҡаны янына.
Беҙҙәр ғәскәр, әйҙә, алға марш!
Тетрәп торһон ер-күк асманы.
Беҙ арыҫлан, беҙ бит юлбарыҫ,
Яңы Башҡортостан ғәскәре.

Хәтирәләрҙән күренеүенсә, башҡорт ғәскәренең йырҙары 1918 йылда тыуып, артабан 1919–1920 йылдарҙа, ҡыҙылдар яғына сыҡҡас та башҡорт һалдаттары тарафынан Граждандар һуғышының фронттарында йырланыр булған. Тәүге йыр 1918 йылдың башында уҡ тыуған. Ул ҡаһарман башҡорт сардары Әмир Ҡарамышевтың исеме менән бәйле. Башҡорт хөкүмәте ҡарары буйынса, 1918 йылдың башында башҡорт офицерҙары Әмир Ҡарамышев, Ғимран Мағазов, Ғабдулла Иҙелбаевтар Бөрйән-Түңгәүер кантонында тәүге башҡорт отрядын ойоштора. Тап ошо мәлдә Әмир Ҡарамышев үҙе сығарған «Ватан» йырын һалдаттар менән йырлап йөрөүе тураһында күренекле милли хәрәкәт эшмәкәре Хәбибулла Ғәбитов яҙа. Үкенескә ҡаршы, был йырҙың көйө лә, һүҙҙәре лә билдәһеҙ.

Әбйәлил районы Асҡар ауылы кешеһе Мөғәлләм Мирхәйҙәровтың үҙенең хәтирәләрендә 1919 йылдың февралендә ҡыҙылдар яғына сыҡҡан Башҡорт корпусының Муса Мортазин етәкселек иткән 1-се кавалерия полкы һалдаттары йырлаған йырҙар тураһында ҡыҙыҡлы мәғлүмәт бирә: *«28 февралдә Асҡарға Муса Мортазин полкы килә тип хәбәр таралды. Темәс яғы юлынан төштән һуңыраҡ үрге ауыл осонан килгәндәре күренде. Муса Мортазиндың атлылары «Эскадрон», «Күгәрсен», «Ф(Х)иҙалам», «Марш» көйҙәренә һалынған йырҙарҙы йырлап, шаулатып, тын ғына ултырған Асҡарҙы яңғыратып килеп инделәр»*. Мортазиндың һалдаттары «Эскадрон» көйөнә һалып йырлаған йыр Шәйехзада Бабичтың «Ғәскәр маршы» йыры түгелме икән?

Икенсе бер хәтирәнән күренеүенсә, был йырҙы башҡорт һалдаттары 1919 йылдың көҙөндә Петроград урамдарында ла яңғыратҡан. Айырым Башҡорт уксы бригадаһының сәйәси бүлеге хеҙмәткәре З. А. Шәрәфетдинов бына нимә тип яҙа: *«Приезд бригады в Петроград превратился*

в дружескую демонстрацию. Когда воины-башкиры на привокзальной площади и на Невском проспекте затянули любимую песню «Эскадрон», встречающие их петроградцы, как морская волна, запрудили улицы и кричали: «Да здравствует Башкирия!», «Ура, Башкирия!».

М. Мирхәйҙәров телгә алып үткән «Күгәрсен» йыры ла хәтирәләрҙә йыш осрай. Мәсәлән, күренекле журналист Мостафа Солтанов Ғабдулла Ибраһимов хаҡында мәҡәләһендә Башҡорт уҡсы бригадаһы составында Петроградта булып ҡайтҡан яугир Хисам Хисамовтың һөйләгәндәрен яҙып үтә: *«Петроград вокзалында беҙҙе сафҡа теҙеп, ҡала урамы буйлап алып киттеләр. Кемдер берәү беҙҙең «Күгәрсен» көйөн яңғыратып ебәрмәһенме! Патрон заводы янына барып туҡтаныҡ, халыҡ беҙҙе ҡапҡа төбөнә тиклем оҙатып килде».* «Күгәрсен» йырын Мортазин атлылары 1921 йылда алыҫ Украина яҡтарында ла йырлап йөрөгәндәре билдәле. Мәсәлән, Слатин И. И. «Из боевого прошлого башкирского народа» исемле яҙмаһында былай тип яҙа: *«Первое время появление всадников-башкир на низких степных лошадях и с незнакомой речью вызывало в украинских, а особенно в приграничных селах, настороженность. Откуда еще такие? Спрашивали крестьяне. Вскоре недоверие уступило место дружбе...*

Кружки художественной самодеятельности подразделений проводили постановки местными силами. И часто воинственный башкирский «Хугарчин» (народная песня) звучал после задорной украинской песни «Гандзи» на вечерах...»

Билдәле ғалим Риф Сөләймәнов төҙөгән «Башҡорт халыҡ музыка сәнғәте» йыйынтығында «Күгәрсен» исемле ике халыҡ йыры телгә алына. Береһе шаян, ә икенсеһе фәлсәфәүи йөкмәткеле йыр. Икенсеһенең һүҙҙәре түбәндәгесә:

Күгәрсенде шунан беләм,
Аҡ йөнө бар түшендә.
Тағы ниҙәр күрәм инде:
Һыуҙа йөҙҙөм төшөмдә?

Аҡ күгәрсен, күк күгәрсен
Оса күктә, бейектә.
Күгәрсен кеүек гөрләшеп,
Беҙ йәшәйбеҙ иректә!

«Күгәрсен» тип башҡорт һалдаттары 1919 йылда Петроград урамдарында, 1920 йылда Польша фронтында, 1921 йылда Украина сигендә тап ошо йырҙы башҡарғандыр, бәлки.

Башҡорт ғәскәрендә «Ирмәк» исемле йыр булғанлығы билдәле. Шулай уҡ Йылайыр районы Мәксүт ауылында йәшәүсе Вәлиулла Бикбулатов (1932 йылғы) йәш сағында ауылдашы Айса Байғоловтан (Башҡорт ғәскәрендә хеҙмәт иткән, күрәһең) Зәки Вәлидиҙең йырын ишеткән булған. Өс куплеттан берәүһе генә хәтерендә ҡалған:

Һаҡмар ғына буйы, һай, ҡыҙыл яр,
Ҡыҙыл ғына туры атым юшайҙыр, юшайҙыр,
Иһей!
Ир-егеткәйләрҙең, ай, ел-дауа
Ҡаты хәсрәт менән бушайҙыр, бушайҙыр.

1918–1921 йылдарҙағы башҡорт ғәскәрҙәренең йырҙары – башҡорт йыр сәнғәте тарихының әлегә өйрәнелмәгән, асылмаған бер бите. Бында тарихсылар, йыр, сәнғәт белгестәре, фольклорсылар өсөн ҙур эш ята.

Орск ҡалаһын алған башҡорт батальоны

Граждандар һуғышы осоронда Башҡорт армияһы полктарының дошман менән аяуһыҙ һуғышыуы, башҡорт һалдаттарының ҡурҡыу белмәҫ яугир булыуҙары, аҡтар яғында ла, һуңынан ҡыҙылдар яғында ла башҡорт ғәскәре бүтәндәрҙән үҙенең ҡыйыулығы менән айырылып торғанлығы билдәле. Беҙ Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһының Ҡыҙыл Армия составында Урал һәм Польша фронттарындағы ҡаһарманлыҡтары хаҡында Муса Мортазиндың «Башҡортостан һәм башҡорт ғәскәрҙәре Граждандар һуғышында» китабынан беләбеҙ. Шулай уҡ башҡорт ғәскәрҙәренең 1919 йылда Петроградты һаҡлауҙа күрһәткән батырлыҡтары тураһында ишеткәнебеҙ бар. Әммә бына ҡыҙылдар яғына сыҡҡанға тиклем, 1918 йылда, аҡтар яғында, Айырым Башҡорт корпусы полктарының яуҙарҙа күрһәткән батырлыҡтары, стратегик әһәмиәткә эйә булған хәрби операцияларҙа мөһим роль уйнауҙары хаҡында артыҡ яҙылғаны юҡ.

Билдәле булыуынса, Башҡорт армияһының яңы ғына ойошторолған полктары 1918 йылдың йәйендә үк ҡаты яуҙарҙа ҡатнашып, үҙен данға күмеп өлгөрә. Мәҫәлән, Екатеринбург йүнәлешендә ҡыҙылдарға ҡаршы һуғышҡан чех ғәскәрҙәренә ярҙамға ике башҡорт батальоны ебәрелә. Улар Арғаяш кантонындағы Көҙәш тип аталған урында башҡорттар менән чехтар ҡыҙылдарҙы тар-мар итә. Был һуғыштарҙа Башҡорт милли хәрәкәтенең лидеры, Башҡортостан хөкүмәтенең Хәрби бүлеге етәксеһе Әхмәтзәки Вәлиди ҙә ҡатнаша: *«Сәйетгәрәй Мағазов менән, винтовкалар тотоп, һуғышта ҡатнаштыҡ. Ниһайәт, большевиктар Екатеринбург йүнәлешендәге Төбәк станцияһына сигенде. Беҙҙең ғәскәр ҡулына байтаҡ ҡорал һәм һуғыш кәрәк-ярағы эләкте. Большевиктарҙың ҡамалып ҡалған бер төркөмө, Көҙәш янындағы күлдең ҡамышлығына боҫоп, атышты дауам итте. Ҡараңғы төшкәнсе шунда йәшенеп, төндә ҡасып ҡотолорға уйланылар. Әммә бөтәһе лә һәләк булды»*, — тип яҙа ул үҙенең хәтирәләрендә.

Август башында 2-се Башҡорт пехота полкы Екатеринбург янында ҡаты һуғыштарҙа ҡатнаша. Башҡорт ғәскәрҙәренең ҡыйыу һөжүмдәре Екатеринбург ҡалаһын ҡыҙылдарҙан азат итеүҙә ҙур булышлыҡ итә. Ҡала халҡы башҡорт яугирҙарының Екатеринбургты азат итеүҙәге хеҙмәтен юғары баһалай. 1918 йылдың 7 авгусында Екатеринбург вәкилдәре 2-се Башҡорт пехота полкының дислокация урыны булған Силәбегә

килеп, ҡала халҡы исеменән рәхмәт белдереп, полкка тантаналы рәүештә матур итеп биҙәлгән аҡ ебәктән, уртаһында Башҡорт армияһының билдәһе – ярым ай менән йондоҙ сигелгән байраҡ менән күк төҫтәге флаг бүләк итә. Байраҡта *«Доблестным освободителям – благодарный Екатеринбург»* тигән һүҙҙәр яҙылып ҡуйылған була.

1918 йылдың сентябрендә башҡорт полктары Аҡтүбә һәм Орск фронттарында һуғыштар алып бара. Бында ла башҡорт ғәскәрҙәре үҙҙәренең ҡыйыулығы, оҫталығы, арыу-талыу белмәҫ һәм түҙемлелек кеүек сифаттары менән яуҙарҙа уңыштарға өлгәшә. Башҡорт һалдаттарының ошо сифаттары 1918 йылдың сентябрендә Аҡ армияның уңышлы хәрби операцияларының береһе – Орск ҡалаһын алыу операцияһында асыҡ сағыла. Был ҡаланы алыуҙа башҡорт ғәскәрҙәре хәл иткес ролде уйнай. Улай ғына ла түгел, башҡорт яугирҙары ҡалаға беренсе булып бәреп инә.

1918 йылдың сентябрендә Орск ҡалаһында ҡыҙылдарҙың 5–6 меңлек ғәскәре тупланған була һәм, һәр яҡтан көслө нығытылғанға күрә, казактар ала алмай.

14 сентябрь Ырымбурҙа торған 4-се Башҡорт пехота полкының 1-се батальоны (ул өс ротаны тәшкил итә) казактарға ярҙамға Орск фронтына ебәрелә. Батальонды тантаналы рәүештә һуғышҡа оҙаталар. Тимер юл станцияһында Башҡорт хәрби шураһы вәкилдәре һәм Айырым Башҡорт корпусының командиры генерал Ишбулатов һалдаттар алдында сығыш яһай.

«Мәхмүт имам Ҡөрьән аяттарын уҡып, доға ҡылып яугирҙарға уңыштар теләне. Башҡорт хөкүмәте ағзаһы Аллабирҙе Йәғәфәров башҡорттар өсөн Орск фронтының әһәмиәте тураһында телмәр тотто. Ул үҙенең телмәрен «Йәшәһен автономиялы Башҡортостан! Йәшәһен федератив нигеҙҙә ҡоролған Рәсәй республикаһы!» тигән һүҙҙәр менән тамамланы. Генералдың сығышын яугирҙар «Ура!» ҡысҡырып ҡаршы алды. Иртәгә Ғәйет байрамы тигәндә юлға сығыу һалдаттар өсөн, әлбиттә, бер аҙ ҡыйыныраҡ. Шуға ҡарамаҫтан, «Аллаһы Тәғәлә ярҙамы менән Орскиҙы һис шикһеҙ аласаҡбыҙ», тигән күтәренке рухта юлға сыҡты башҡорт роталары. Офицерҙар араһынан батальонда – прапорщик Ғабдулла Собханғолов, Йосоп Әхмәтов һәм Мөьминовтар», – тип тасуирлай был ваҡиғаны «Башҡортостан хөкүмәте теле» гәзите.

Иртәгеһенә башҡорт батальоны Һары станцияһына килеп төшә. Бынан фронт һыҙығына барып етер өсөн 25 саҡрым йәйәү үтергә кәрәк була. Ә Орск ҡалаһына станциянан 45–50 саҡрымдар тирәһе ара. Башҡорт һалдаттары изге Ҡорбан ғәйетен Һары станцияһында һый әҙерләп байрам итә. Кискә ҡурай моңо тыңлап, бейеп күңел аса. *«Ғәйет байрамы айҡанлы беҙҙең батальон һалдаттары бер аҙ күңел асып алыу ниәте менән уртала бейеү өсөн майҙан ҡалдырып, бер түңәрәккә йыйылды. Майҙан уртаһында беҙҙең батальондың ҡурайсыһы Төлкөбай урын алған. Ул башҡорт бейеү көйҙәрен ҡурайҙа ғәжәйеп матур уйнай. Уртала елеп йөрөп башҡорт егеттәре*

бейей. Төлкөбай бейеү көйҙәренән оҙон көйҙәргә күсә. Уның ҡурайынан ата-бабаларҙың башынан үткән ҡайғы, аһ-зарҙарын сағылдырған «Тәфтиләү», «Ашҡаҙар» көйҙәре ағыла. Һәр кем башын түбән эйеп, һағышлы уйҙарға сума», — тип яҙа башҡорт батальонының бер яугиры.

Башҡорт һалдаттары иртәгеһенә фронт һыҙығына килеп етә. Күптән ҡамауға алыуға ҡарамаҫтан, казактар Орск ҡалаһын инде ике ай буйы ала алмай (ҡаланан Аҡтүбә яғына ғына юл асыҡ була). Сөнки оборона өсөн ҡаланың урыны бик уңайлы һәм алдан уҡ көслө итеп нығытылған була. Бынан тыш Орскиҙа 5–6 мең тирәһе ҡоралллы кеше, күп кенә пулемет, пушкалар тора. Большевиктарға һөжүм итергә ашығып бармай, казактарҙың атакаһын кире ҡағыу менән генә сикләнә.

26 сентябрь Ырымбур хәрби округы командующийы Дутов Орскиҙағы большевиктарға 24 сәғәт эсендә ҡорал һалығыҙ тигән ультиматум ҡуя. Ҡыҙылдар, ҡалала оҙаҡ тора алмаясаҡтарын аңлап, икегә бүленергә ҡарар итә. Бер өлөшө Аҡтүбәгә китергә ниәтләй. Казактар менән башҡорттар һиҙмәһен өсөн, большевиктарҙың икенсе өлөшө (3–4 меңләк, күпселеге Ырымбур эшселәренән торған отряд) 27 сентябрҙә казактар тотҡан фронт һыҙығын йырып, Һары станцияһына яҡынлаша. Улар көтмәгәндә Ырымбурға һөжүм итергә ниәтләй. Ошо мәлдә Орск янында торған башҡорт батальоны ҡалаға һөжүм башлай.

Башҡорттарҙың Орск ҡалаһын алыуын 4-се Башҡорт полкының өлкән унтер-офицеры Лотфулла Ҡасҡын былай итеп һүрәтләй: *«27 сентябрь сәғәт иртәнге һигеҙҙә 4-се Башҡорт полкының 1-се батальонынан 300 яугир Орскиға һөжүм итеү маҡсатында Күлмәк исемле казак ауылынан сыҡты. 15 саҡрым үткәндән һуң, сәғәт 11 тирәһендә ҡаланан 10 саҡрымда ятҡан тәүге окоптарға һөжүм иттек. Бер сәғәт атышҡандан һуң, Ҡыҙыл Армия һалдаттары окоптарын ҡалдырып ҡасырға мәжбүр булды. 300 башҡорт 3 мең тирәһе большевиктың артынан бер туҡтауһыҙ ҡыуып, Орскиға барып етте. Сәғәт 4-тәргә тимер юл янындағы территорияны баҫып алды. Сәғәт 7-ләр тирәһендә яңынан һөжүм башлап, Орскиҙың көнсығышындағы территорияны ҡамауға алып, ҡаланан 400 сажин (900 метр тирәһе) алыҫлыҡта ятҡан Таштауҙың үренә 4 пулемет ҡуйҙыҡ. Ҡыҙылдарҙың 30 пулеметы булһа ла, улар бер ни эшләй алманы. Сөнки пулеметсы башҡорт һалдаттары большевиктарҙың окоптарына тура ғына атып, уларға баш ҡалҡытырға ла ирек бирмәне. Дәртләнеп киткән башҡорт һалдаттары тағын да алға ынтылды һәм бер ҡаршылыҡһыҙ тигәндәй ҡыҙылдарҙың ҡаланан 10–15 сажин алыҫлыҡта урынлашҡан окоп, блиндаждарын баҫып алды.*

Эңер төшкәс, төнгө ҡараңғылыҡта яңылыш үҙ-ара атышыу ихтималлығын күҙ уңында тотоп, һөжүмде иртәнгә тиклем туҡтатып торҙо. Иртән 28 сентябрь сәғәт 6-ла башҡорттар яңынан һөжүмгә күтәрелеп, «Ура!» ҡыҫҡырып ҡалаға барып инделәр.

Орск янында бик ҡаты алыштар булып, бер туҡтауһыҙ атышыуға ҡарамаҫтан, башҡорттар яғынан 25 кеше генә яраланған ине, башҡа юғалтыуҙар булманы. Ә бына окоптарҙан ятып атышыуҙарына ҡарамаҫтан, ҡыҙылдар яғынан үлгән һәм яраланғандарҙың иҫәбе-һаны юҡ ине. Имен ҡалғандары төндә, төрлө ҡиммәтле әйберҙәрен тейәп, Аҡтүбә яғына һыпыртҡандар. 4-се Башҡорт полкының бер ротаһы менән казактар ҡыҙылдарҙы ҡыуып етеп, урланған әйберҙәрҙе кире ҡалаға алып килде.

Орскиға ингән башҡорт һәм казак ғәскәрҙәрен ҡала халҡы ҙур шатлыҡ менән ҡаршыланы. Орск мосолмандары башҡорт һалдаттарын икмәк-тоҙ менән ҡаршы алды. Беҙ хөрмәт күрһәткәндәре өсөн рәхмәт белдерҙек».

Башҡортостан Республикаһының ижтимағи ойошмаларының үҙәк архивында һаҡланған бер яҙмала Зәки Вәлиди башҡорт батальонының Орскиҙы алыуы тураһында ентекле итеп бәйән итә. Ул башҡорт һалдаттарының ҡыйыулығын, тиҫтәләгән дошман пулеметтары ут яуҙырыуына ҡарамаҫтан, атакаға барыуҙарын билдәләп үтә: *«Несмотря на огонь более 15 пулеметов со стороны противника и его сильный ружейный огонь, цепи башкир стремительно шли вперед. Башкиры заняли кладбище и сад и ввиду наступившей темноты — окопались. С рассветом 28-го сентября, возобновив наступление и преследуя уже бежавшего противника, в 5 часов утра батальон под командой штабс-капитана Я. Кальметова ворвался в гор. Орск, противник был уничтожен, и было захвачено много пленных».*

Башҡорттарҙың Орск ҡалаһын алыуҙа мөһим роль уйнауы тәү сиратта Башҡорт милли хәрәкәте өсөн ҙур сәйәси әһәмиәткә лә эйә була. Орскиҙың мосолмандары рәхмәт йөҙөнән Екатеринбург халҡы кеүек үк башҡорт һалдаттарына байраҡ бүләк итә. Башҡортостан автономияһына һалҡын ҡараған татар эшмәкәрҙәренең мөнәсәбәте ҡырҡа үҙгәрә. Зәки Вәлиди үҙенең хәтирәләрендә лә тап ошоно һыҙыҡ өҫтөнә ала: *«Калала ҡыҙылдар ҡулы аҫтында булып, ҡотолоп ҡалған милләтсе татар мөнәүәрҙәре (эшмәкәрҙәре) башҡорт ғәскәрен байраҡтар менән ҡаршыланы.*

Орскиҙы яулағас, Башҡортостан менән Ҡаҙағстан араларындағы эшмәкәрлек тағы ла көсәйә төштө. Ҡыҙылдар Башҡортостандағы милли хәрәкәткә ҡушылған милләтсе татар мөнәүәрҙәре Ғабдулла Сарукинды, 50-ләп һалдаттан засада ҡороп, үлтергән. Орскиҙағы татар мөнәүәрҙәре (хәҙерге совет тарихсылары уларҙы кәмһетеберәк «татар эсерҙары» тип атай) бының ҡоһорон Совет яҡлы булған татарҙар Нуриманов, Шәфиев һәм Сөйәһи исемле кешеләргә төшөрөп, уларҙы үлтергәндән һуң, беҙгә ҡушылды.

Ошо хәл беҙгә әлегә тиклем мөнәсәбәттәре һалҡын ҡалған татар мөнәүәрҙәренең тотош беҙҙең яҡҡа сығыуына сәбәп булды».

Аҡтарҙың командованиеһы башҡорт ғәскәрҙәрен бигүк өнәп бармаһа ла, башҡорттарҙың Орскиҙы алыуҙа күрһәткән батырлыҡтарын Ырымбур хәрби округы штабы начальнигы, Дутовтың өлкән адъютанты

подполковник Вагин юғары баһалай. Ул Башҡорт корпусы командиры генерал-лейтенант Хажиәхмәт Ишбулатовҡа рәхмәт хаты ебәрә. Был хаттың тулы тексын килтерәм:

Начальник Штаба Оренбургского военного округа
9 октября 1918 года
№ 414
гор. Оренбург

Х. И. Ишбулатову командиру Отдельного Башкирского корпуса

Милостивый Государь,
Хаджи-Ахмет Исхакович

Командующий Войсками Округа, руководя действиями строевых частей Округа на Орском фронте, лично убедился в доблестной службе башкир, работающих рука об руку с казаками, грудью отстаивающими свободу не только казаков, но и всей России.

Таковые же местные отзывы о работе башкирских частей неоднократно получались и от командующих фронтами.

С чувством глубокого удовольствия передаю Вашему Превосходительству искреннюю благодарность Командующего Войсками Округа доблестным сынам Башкурдистана за их вызывающую общее удовлетворение службу на пользу дорогой нашей Родине.

Уважающий Вас и преданный А. Вагин
и. д. старшего Адъютанта подполковник

Әммә шуны әйтергә кәрәк, Ырымбур хәрби округының командующийы атаман Дутов Орскиҙы алыуҙы, тәү сиратта, казактарҙың батырлығы тип күрһәтә. Башҡорт ғәскәрҙәрен маҡтарға ашығып бармай. Атамандың бындай ҡылығы башҡорттарҙың ризаһыҙлығын арттыра. Башҡортостан хөкүмәте менән Дутов араһындағы былай ҙа еңел булмаған мөнәсәбәттәр тағы ла ҡырҡыулаша.

1918 йылдың 14–27 октябрендә Ырымбурҙа булып киткән Өфө директорияһы вәкиле Н. Стариков та: *«Точно знаю, что башкиры сильно раздражены дутовским освещением боев на Орском фронте – Орск был взят почти исключительно башкирами («Казаки чай пили в это время», как говорят башкиры), а между тем честь взятия Орска Дутовым была приписана прежде всего «доблестным» казакам»*, — тип Дутовтың был ҡылығына үҙенең кире фекерен белдерә. Әйткәндәй, Дутов уға Башҡортостанда контрразведка эшен алып барырға, башҡорттарҙың аҡтарға ҡарата мөнәсәбәтен белергә ҡушҡан була. Ә Стариков, киреһенсә, башҡорттар менән талашмаҫҡа, ә бергәләп эш итергә кәрәк, тип яҙа.

Шулай итеп, актар яғында, шулай уҡ ҡыҙылдар яғында ла башҡорт ғәскәрҙәренең батырлығын, ҡыйыулығын танып, баһалап бармағандар.

Ә, киреһенсә, фронттарҙың иң ауыр урындарына ташлап, Башҡорт милли ғәскәрен юҡҡа сығарырға ғына тырышҡандары яҡшы билдәле. Ә инде совет заманында данлы Башҡорт милли армияһы тураһындағы хәтерҙе халыҡ аңынан бөтөнләйгә юйып ташларға тырыштылар. Лайыҡһыҙ рәүештә онотолоуға дусар ителгән милли ғәскәребеҙҙең тарихының ғорурланырлыҡ, данлы биттәрен бөгөн беҙ архив документтары һәм хәтирәләр ярҙамында яңынан асабыҙ. 1918 йылдың 28 сентябрендә Орск ҡалаһын алған 4-се Башҡорт полкының 1-се батальоны һалдаттарының батырлығы шул тарихтың бер данлы бите.

Нестеров музейында
бар бер картина

Республиканың Нестеров исемендәге художество музейының фондында башҡорт ғәскәрҙәре тарихына ҡағылышлы бер үҙенсәлекле картина һаҡлана. Уның авторы – рәссам Борис Пискунов. Картина акварель буяу менән эшләнгән. Һүрәттең аҫтында автор: «Переход Башкирских белых войск на сторону красных у д. Темясово 19 февраля 1919 года», – тип яҙып ҡуйған. Картинаның ҙурлығы 46х63,5 сантиметр. Был картинаға мин осраҡлы рәүештә генә юлыҡтым: «Акварель яҙ» исемле күргәҙмәнең каталогында. Бында картинаның бәләкәй генә, аҡлы-ҡаралы төҫтәге һүрәте һәм ҡыҫҡаса мәғлүмәт бирелгән: *«Из акварельного наследия, оставленного художниками первого поколения, (интересен не столько своей художественной ценностью, сколько самим фактом появления в башкирской акварели редкого опыта исторической композиции) «Переход башкирских войск на сторону Красной Армии» Б. Пискунова».* Каталогты төҙөүселәр менән килешмәй булмай. Ысынлап та был картина тәғәйен тарихи ваҡиғаға бағышланыуы менән ҡыҙыҡлы. Иң мөһиме шунда: беренсенән, башҡорт ғәскәрҙәренең ҡыҙылдар яғына сығыу мәлен һүрәтләгән берҙән-бер картина (ошо тарихи ваҡиғаны сағылдырған башҡа бер картина ла күргәнем юҡ әле). Икенсенән, был һүрәт 1930 йылда, Зәки Вәлидигә «буржуаз милләтсе», ә ул етәкләгән Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтен «контрреволюцион» тигән ярлыҡ тағылған осорҙа ижад ителеп, беҙҙең көндәргә килеп етеүе менән ҡиммәтле. Картинаның авторы Борис Пискунов әлеге ваҡиғаның шаһиты булманымы икән? Әллә хөкүмәт ҡушыуы буйынса төшөргәнме? Быны әйтеүе ҡыйын, сөнки Нестеров музейында рәссам тураһында бер ниндәй ҙә мәғлүмәт юҡ, тинеләр. Уның 1942 йылда вафат булғанлығы ғына билдәле.

Рәссам башҡорт һалдаттарын ҡыҙылдар яғына шат йылмайып, бүректәрен күккә сөйөп яҡынлашып килә тип һүрәтләгән. Был тарихи дөрөҫлөккә бер ҙә тап килмәй, әлбиттә. Беренсенән, ҡыҙылдар башҡорт ғәскәрҙәрен ҡолас йәйеп ҡаршыламағанлығы тарихтан яҡшы билдәле. Башҡорт халҡының бөйөк улы Әхмәтзәки Вәлидиҙең хәтирәләренә күҙ һалайыҡ: *«...18 февраль иртәһендә фронт аша сығыуҙың мотлаҡ бер юл икәнен төшөндөрмәйенсә, һис бер ғәскәри часты фронт һыҙығына йүнәлтеп булмаясаҡ, күрәләтә ут аҫтына ебәрелгән кеүек күренәсәк. Фронт һыҙығын үҙем башлап сығырға булдым.*

Әхмәтйән исемле бик ышанычлы әмер тапшырыусымды, ике унтер-офицерҙы һәм аҙ ғына һаҡсы алып, ун кеше сәғәт унда Совет-тарҙың 1-се Армияһы фронтына яҡынлаштыҡ һәм килеүебеҙ хаҡында полк сардарына хәбәр ебәрҙек. Совет офицерҙары килде. Минең артымдан 1-се кавалерия полкының беренсе батальоны сыҡты... 19 февраль төштән һуң 1-се Армия командармы Гай менән күрештем. Командарм миңә полктарҙың был яҡҡа сығыуын үҙемә күҙәтеп торорға тәҡдим итеп, бәғзе офицерҙар менән кире фронтҡа ебәрҙе. 20 февралдә полктар үҙ күҙ алдымда ҡыҙылдар яғына сыҡты.

Ян-яғына эйәрле ике атым бәйләнгән егеүле санала ултырған килеш ғәскәр хәрәкәтен күҙәттем. Күҙ йәштәремде көскә тыйып, уларҙы сәләмләнем, һалдаттар илаша. Улар үтеп бөткәс, янымдағы Әхмәтйәндең яурынына башымды эйеп үкһеп иланым. Былай үкһеүем ғүмеремдә, күп булһа, ике-өс тапҡыр булғандыр. Барыбыҙ ҙа инанған демократия һәм азатлыҡ фекерен фиҙа итеп, шәхси, милли һәм ижтимағи ихтыярыбыҙҙы беҙгә билдәһеҙ маҡсатта ҡулланасаҡ Тоболин, Колесовтар ҡулына тапшырыу, аяуһыҙ һуғышҡан дошмандың аяғы аҫтында ҡалыу, милләтебеҙҙең киләсәге ҡараңғылығы, яратҡан ғәскәрҙәребеҙҙең башына һәләкәт төшөү мөмкинлектәре күҙ алдыма килә ине».

Пискуновтың картинаһында тағы бер деталь күҙгә ташлана: башҡорт ғәскәрҙәре аҡ флаг тотҡан, һалдаттарҙың бүректәренә аҡ таҫмалар тағылған. Былар ҙа тарихи дөрөҫлөккә бөтөнләй тап килмәй. Сөнки 1918 йыдың йәйендә үк башҡорт армияһының хәрби символикаһы, милли униформаһы барлыҡҡа килә.

Тарихи дөрөҫлөктән йырағырак торһа ла, Борис Пискуновтың «Переход Башкирских белых войск на сторону красных у д. Темясово 19 февраля 1919 года» тип исемләнгән был картинаһы бөгөнгө көндә үҙе бер тарихи ҡомартҡы (уның үҙенә 82 йыл бит). Икенсенән, башҡорт ғәскәрҙәренең ҡыҙылдар яғына сығыу вакиғаһын сағылдырған бөгөнгө көндә берҙән-бер картина булып тора. Рәссамдар республика тарихының 1917–1919 йылдарҙағы данлы һәм шанлы осорон, атап әйткәндә, бөгөнгө Башҡортостан Республикаһының барлыҡҡа килеү тарихына бәйле ваҡиғаларҙы үҙҙәренең ижадында сағылдырырға ашығып бармай шикелле.

Айырым Башҡорт Ҡыҙыл Армияһы

1919 йылдың февралендә Башҡорт корпусы ҡыҙылдар яғына сыҡҡас, 4-се уҡсы, 1-се һәм 2-се кавалерия полктарынан торған айырым удар төркөмө ойошторола. Улар Тамъян-Ҡатай кантоны (хәҙерге Әбйәлил районы) территорияһында аҡтарға ҡаршы фронт тота. Әммә март башында бөтә башҡорт полктары 1-се армияның бойороғо буйынса Пенза дивизияһы тылына күсерелә. Фронт һыҙығында Муса Мортазиндың 1-се кавалерия полкы ғына ҡалдырыла.

Башҡортостан хөкүмәте менән Үҙәк совет власы араһында килешеү булыуға ҡарамаҫтан, 1-се армия командирының өнһөҙ ризалығы менән Пенза дивизияһы командалығы башҡорт полктарын ҡоралһыҙландырырға тигән бойороҡ бирә. Ошо рәүешле, Пенза дивизияһы башҡорттарҙан үс алырға була. *«Разоружение и отправка Башвойска в тыл Красной армии сопровождались грубыми издевательствами, избиением башкирских солдат (и его командного состава при его же присутствии), ограблением у башкир последнего одеяния (зимой многие башсолдаты шли босыми и раздетыми)»*, – тиелә архив документында.

Ҡайһы бер башҡорт частары ҡыҙылдарҙың фарманына буйһонмай. 1-се уҡсы полкының бер батальоны һәм 2-се кавалерия полкының бер эскадроны кире аҡтар яғына сығып китә. Һуңыраҡ 1-се Башҡорт кавалерия полкы ла аҡтарға сыға. Ҡалған ғәскәрҙәр Мәләүез һәм Стәрлетамаҡҡа күсерелә. Бында Башҡорт корпусы тамам тарҡатыла. *«Из находящихся в тылу 20-й дивизии Башчастей (Башкорпуса) по распоряжению бригады Зеленкова и 20-й дивизии (начдив Воробьев), около 75 % были распущены по домам. Вслед за этим же роспуском оставшаяся часть Башкорпуса, около 25 %, немедленно была снята с тыла 20-й дивизии и направлена в село Тоцкое Бузулукского уезда Самарской губернии»*, – тиелә бер документта.

Ошо осорҙа, 1919 йылдың 20 мартында, Мәскәүҙә Башҡорт хөкүмәте вәкилдәре Совет хөкүмәте менән Автономиялы Башҡорт Совет Республикаһы тураһында Килешеү төҙөй. Зәки Вәлидиҙең ныҡышмалылығы һөҙөмтәһендә большевик етәкселәре башҡорт ғәскәрҙәрен Ҡыҙыл Армияның айырым ғәскәри берәмеге сифатында ойошторорға, йәғни айырым Башҡорт армияһын булдырырға риза була. 16 пункттан торған автономия тураһындағы килешеүҙең 3 пунктында башҡорт ғәскәрҙәре тураһында һүҙ бара:

IX. В целях укрепления Советской власти в Башкирской Советской Республике и борьбы как с российской, так и мировой контрреволюцией, организуется отдельная башкирская армия в составе одной четырехполковой кавалерийской дивизии и одной трехполковой стрелковой бригады, подчиняющаяся общему командованию и управляемая согласно положению о Красной Армии.

X. Полное вооружение и содержание отдельной башкирской армии производится на общих основаниях Красной Армией, из общероссийского военного фонда.

XI. Внутренняя охрана и порядок Автономной Башкирской Советской Республики поддерживаются вооруженным пролетариатом республики.

Март аҙағында Реввоенсовет рәйесе Л. Д. Троцкий Пенза дивизияһына элекке Башҡорт корпусының ҡорал, кәрәк-яраҡтарын Башревкомға ҡайтарып бирергә ҡуша. Ә инде 5 апрелдә Троцкий Килешеүгә ярашлы Башҡорт хәрби комиссариатын һәм Айырым Башҡорт Ҡыҙыл Армияһын ойоштороу тураһында түбәндәге фармандар сығара:

ПРИКАЗ

Реввоенсовета Российской Республики

№ 615

Москва 5 апреля 1919 г.

5 апреля 1919 года Реввоенсовет Российской Республики на основании соглашения Рабоче-Крестьянского Правительства РСФСР с Башкирским Правительством, объявленного в «Известиях ВЦИК» от 23 марта сего года № 63/615, постановил:

1) Сформировать из граждан Башкирской Республики трехполковую стрелковую бригаду по штату приказа Реввоенсовета Российской Республики № 220 при одном легком артиллерийском дивизионе, одной гаубичной батарее, роте связи, роте саперов.

2) Сформировать одну четырехполковую кавалерийскую дивизию по штату приказа Р.В.С.Р. 1918 года № 460; при дивизии сформировать один конный артиллерийский дивизион, конно-гаубичную батарею и патронный резерв.

3) Для пополнения частей, указанных в параграфе первом и втором сего приказа, по окончании их формирования сформировать запасный стрелковый и запасный кавалерийский полки.

4) Обслуживающие бригаду и дивизию вспомогательные учреждения формировать по мере действительной необходимости по указанию Всероссийского Главного Штаба. Проведение в жизнь этих формирований возложить на Башкирский Военный Комиссариат в составе: 1) Военного Комиссара Башкирии тов. Валидова, 2) трех политических

комиссаров, 3) Военного Руководителя Военного Комиссариата Башкирии и 4) Начальника отдела снабжения Башвоенревкома.

5) Ответственность за своевременное и надлежащее качество формирования возложена на тов. Валидова.

6) Пополнение людьми и лошадьми Башкирских формирований Башкирским Правительством принимается полностью на себя.

7) Обмундирование, вооружение и снабжение всеми необходимыми предметами довольствия возлагается на Центральное Управление снабжения.

8) Необходимое средство на содержание Башкирских войск на приобретение лошадей ЦУСу отпустить по сметам, предоставляемым Башкирским Военным Комиссариатом.

9) Центром формирования этих войск назначить Оренбург с тем, чтобы по мере формирования части выводить из Башкирии по указанию Реввоенсовета Российской Республики.

Председатель Реввоенсовета
Российской Республики Л. Троцкий
по Организационному Управлению
Всероссийского Главного Штаба

ПРИКАЗ

Реввоенсовета Российской Республики

№ 616

Москва 5 апреля 1919 г.

Согласно соглашения Рабоче-Крестьянского Правительства РСФСР с Башкирским Правительством, опубликованного в «Известиях ВЦИК» 23 марта 1919 г. № 13/615, в Башкирии утвердить прилагаемое при сем приложение о Башкирском Военном Комиссариате.

Положение о Башкирском Военном Комиссариате

1) Органом Военно-Административного Управления Башкирии является Башкирский Военный Комиссариат и его местные органы.

2) Башкирский Военный Комиссариат соответствует губернскому военному комиссариату и формируется согласно положения о губернском военном комиссариате, утвержденным приказом Реввоенсовета Республики 16 января 1919 г. № 106.

3) В каждом кантоне организовывается кантонный военный комиссариат, соответствующий уездному военному комиссариату и формиру-

емый применительно к штатам уездных военных комиссариатов, утвержденных приказом Р.В.С.Р. 16 января 1919 г. № 106.

4) Во главе военного комиссариата Башкирии стоит Военный Комиссар (по-башкирски Нуюн), выбираемый исполкомом советов Башкирии.

5) Военный Комиссариат Башкирии в отношении Военно-Административного Управления пользуется правами окружного военного комиссариата; военный комиссар Башкирии пользуется правами командующего отдельной армии.

6) Военный Комиссариат Башкирии, без различия нации, подчиняется непосредственно Всероссийскому Главному Штабу. Все виды довольствия, предметы снабжения, вооружение, снаряжения получает из Центральных организаций снабжения Российской армии.

7) На Башкирский Военный Комиссариат возлагается формирование отдельной Башкирской армии по особому расписанию.

8) Мобилизация башкир не входящих в состав Малой Башкирии областей производится при помощи местных учреждений по соглашению Всероссийского Главного Штаба с Военным Комиссаром Башкирии.

9) Весь наличный конский состав населения Малой Башкирии находится на учете Башкирского Военного Комиссариата, который приобретает по вольным ценам, в случае необходимости реквизирует их. При Башкирском Военном Комиссариате учреждается конский запас Башкирской армии.

10) Командующий отдельной Башкирской армией и члены Реввоенсовета Армии, начальник кавалерийской дивизии, командир стрелковой бригады, политкомы армии, дивизии и бригады назначаются и увольняются Реввоенсоветом Республики по соответствующему представлению комиссариата Башкирии. Командиры полков, дивизионов, батальонов и отдельных команд назначаются Реввоенсоветом Башкирской Армии, который в каждом отдельном случае сообщает об этом Военному Комиссариату Башкирии.

11) Установление формы Башкирской армии и внутреннего распорядка в ней поручается военному комиссару Башкирии.

Председатель Реввовенсовета Республики Л. Троцкий
по Организационному Управлению
Всероссийского Главного Штаба

Шулай итеп, ҙур ҡыйынлыҡтар менән Зәки Вәлиди башҡорт ғәскәрҙәренең үҙаллылығын һаҡлап алып ҡала. Үҙәк совет власы башҡорттарға дүрт полктан торған кавалерия дивизияһы (атлы артиллерия дивизионы, атлы гаубица батареяһы), өс полклы уҡсы бригадаһы (еңел артиллерия дивизионы, гаубица батареяһы) һәм ике запас полктарҙы тәшкил иткән Айырым Башҡорт Ҡыҙыл Армияһын ойошторорға ризалыҡ бирә.

Армияны ойоштороу эше Зәки Вәлидигә йөкмәтелә. Ул Үҙәк тарафынан Башҡорт армияһының командующийы итеп раҫлана.

Әммә 1919 йылдың яҙына Көнсығыш фронтта ҡыҙылдарҙың хәле мөшкөлләнә төшә. Колчак армияһы уларҙы Башҡортостан территорияһынан ҡыҫырыҡлай башлай. Көнсығыш фронты командованиеһы Волганың көнбайыш яғына сигенергә була. Зәки Вәлиди тиҙ арала башҡорт ғәскәрҙәрен тәртипкә килтереп, Колчакка ҡаршы ҡуйырға, Башҡортостанды азат итергә теләй. Әммә большевиктар бөтөнләй икенсе ниәттә булып сыға. *«Беҙ Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәр менән Һамарға йәки Сызранға сигенергә, бер аҙ тәртипкә килтереп алғас, көнсығыштағы хәрәкәттәрҙә ҡатнашырға теләй инек. Троцкий менән Вацетис иһә беҙгә ышанманы. Улар хөкүмәтебеҙгә көнбайышҡа, Мәскәүҙән алыҫ булмаған Саранск ҡалаһына сигенергә әмер бирҙе. Байтаҡ һөйләшеүҙәрҙән һуң был бойороҡҡа буйһонорға мәжбүр булдыҡ»*, — тип яҙа З. Вәлиди хәтирәләрендә.

Ошо рәүешле, 1919 йылдың май башында Башревком (Башҡорт хөкүмәте) һәм элекке Башҡорт корпусынан ҡалған әҙ-мәҙ ғәскәрҙәр Саранск ҡалаһында урынлаша. Башҡортостан территорияһы аҡтар ҡулында ҡалған осорҙа, әлбиттә, тәү сиратта ғәскәрҙәрҙе тәртипкә килтереп, тиҙ арала Көнсығыш фронтҡа, тыуған ерҙе азат итергә кәрәк була. 15 май Башвоенкомат Троцкийҙың фарманына ярашлы дүрт полклы кавалерия дивизияһын ойоштороу эшенә тотона. Бында килгән өс башҡорт полкы (174-се Башҡорт уҡсы полкы, 5-се Башҡорт уҡсы полкы һәм 1-се Көнбайыш Башҡорт полкы) яңы дивизияға нигеҙ булып ята. Кеше етешмәү сәбәпле, дивизияны тәүге мәлдә бригада кимәлендә ойошторорға ҡарар ителә. Әлеге өс полктың һалдаттары (яҡынса 1200 кеше) яңы төҙөлгән ике уҡсы һәм ике кавалерия полкына бүленә. Бынан тыш яңы килгән 800 кеше менән бригада тулыландырыла.

1-се уҡсы полкы командиры итеп — Сөләймән Ишмырҙин, 2-се уҡсы полкына — Ибраһим Исхаҡов, 1-се кавалерия полкына — Усман Тереғолов, 2-се кавалерия полкына — Николай Петров ҡуйыла. Бригаданың сәйәси комиссары вазифаһына Хәлим Әмиров тәғәйенләнә.

1918 йылда аҡтар башҡорт ғәскәрҙәрен эре ғәскәри берәмеккә туплауға ҡаршы сығып, уларҙы фронтта һәр ваҡыт бер-береһенән айырып торорға тырышҡанға күрә, башҡорт етәкселеге ҡыҙылдар яғында ошо хәлде булдырмау өсөн бөтөн көсөн һала. Бөтә ғәскәрҙәрҙе бергә туплаған айырым армия ойоштороу, тиҙ арала уның штабын булдырыу көнүҙәк мәсьәләгә әйләнә.

Әммә Реввоенсовет рәйесе Троцкийҙың фарманы сығыуға ҡарамаҫтан, Ҡыҙыл Армияның баш командованиеһы Башҡорт армияһы штабын ойошторорға ашыҡмай. Ошо айҡанлы Башҡорт республикаһының ВЦИК янындағы вәкиле Харис Йомағолов Ҡыҙыл Армияның баш штабы начальнигына былай тип хат яҙа: *«Согласно 9 параграфа соглашения, состоявшегося 20 марта с. г. Рабоче-Крестьянского правительства с Башкирским правительством о советской автономии Башкирии, в целях укрепления советской власти Башкирской советской*

республики и борьбы с российской и мировой контрреволюцией должна быть создана отдельная башкирская армия, во главе которой, вполне естественно, должно находиться управление этой армии.

Между тем приказами Революционного военного совета Республики от 5 апреля с. г. №№ 615 и 616, отданными в развитие этого договора, не установлено формирование подобного управления, как возглавляющего высшее военное командование и водительство на театре военных действий, так и объединяющего планомерную политическую работу в башкирской армии.

Казалось бы, что с формированием войсковых частей этой армии одновременно следует формирование и управления ее, имея в виду чрезвычайные технические трудности в деле создания управления и то обстоятельство, что по отданному распоряжению наркомвоена т. Троцкого формируемые башкирские войска должны быть незамедлительно отправляемы на фронт, а отнюдь не предназначаются для гарнизонной службы. Между тем, до сего времени еще не отдано приказа о формировании управления башкирской армии...

...испрашиваю сделать внеочередное распоряжение Всероссглавштабу о формировании управления отдельной башкирской армии...»

Ләкин Ҡыҙыл Армияһы командалығы башҡорт армияһы идаралығын (штабын) ойоштороу урынына 1919 йылдың июнь башында Саранскиҙағы башҡорт полктарын гарнизон хеҙмәте үтәү өсөн Көньяҡ фронтҡа, Украинаға ебәрергә бойора.

Зәки Вәлиди башҡорт ғәскәрҙәренең Башҡортостанды Колчак армияһынан азат итеүҙә ҡатнашыуы ҙур сәйәси әһәмиәткә эйә булыуын аңлатып, Ҡыҙыл Армияның баш командующийы Вацетистың үҙенә мөрәжәғәт итә: *«Колчак и казаки мстят отцам и братьям наших солдат за их переход на сторону советской власти. Местные переселенцы-крестьяне вооружились, образовали добровольческие советские полки и идут с крайней злобой на башкир ввиду исторических условий. До сего времени мы говорили солдатам, что пойдем выручать своих братьев от Колчака и от казаков и покажем крестьянам-переселенцам, что башкиры дерутся на стороне Советов и все киргизы и башкиры после нашего появления на фронте перейдут к нам и т. д. Вообще создание Башкирской армии вообразить себе отдельно от задач советского строительства в Башкирии и Киргизии невозможно. Посылка наших солдат в этом положении Башкирии и Киргизии [на Южный фронт] в их глазах равносильна отправлению их в концентрационный лагерь, она означает полное к ним недоверие на Восточном фронте. Мы ведь еще совершенно новые для советской России. Посылка на неожиданный фронт окончательно расстроит наших солдат морально, может быть, этим потеряете башкир, как организованную и дисциплинированную армию, навсегда, потому что его последствия будут.*

Наконец, советское высшее командование должно обратить внимание на политическое значение появления башкирских частей в южной части Восточного фронта, а именно для степных областей и Южного Урала. Много киргиз и башкир ждут в Саранске наше выступление на Восточный фронт.

Просим ради общих для нас – степняков и вас целей направить нас на Восточный фронт; если наше действие в районе Стерлитамака и в Башкирии найдете нецелесообразным, то просим отправить к югу от Оренбурга на участок между Первой и Четвертой армиями.

После освобождения Башкирии и передней Киргизской степи с Ташкентской железной дороги отправляйте нас куда хотите, на Петроград, Архангельск и Тифлис, все пойдут с охотой...»

Башҡортостан территорияһын Колчак армияһынан азат итеүҙә башҡорт ғәскәрҙәрен йәлеп итеүҙе Көнсығыш фронттың Көньяҡ төркөмө командующийы Фрунзе ла хуплап сыға. Әммә Вацетис: *«Отправить в Харьков. Приказано, дальнейшее формирование будет в Харькове»*, – тигән ҡәтғи фарман бирә.

Шулай итеп, Айырым Башҡорт армияһы ойоштороу эше хәл ителмәй тороп ҡала. Шуға ҡарамаҫтан, Башҡортостан хәрби комиссариаты Троцкийҙың фарманына ярашлы, башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороуҙы дауам итә. Июнь айында аҡтарҙан азат ителгән Бәләбәй ҡалаһында өс полктан торған Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы ойошторола башлай. Уның командиры итеп Көнсығыш фронттың Көньяҡ төркөмөндәге башҡорт вәкиле полковник Хәсән Әхмәров тәғәйенләнә. Комиссары – Ғабдулла Ибраһимов. Зәки Вәлиди яҙыуынса, бригадаға ҡорал, төрлө кәрәк-ярактар менән Фрунзе ҙур ярҙам күрһәткән.

Ләкин оҙаҡламай Реввоенсоветтың ялан идаралығы (полевое управление) штабы начальнигы Костяков Серпухов ҡалаһынан Башҡортостан хәрби комиссариатына: *«Приказом Революционного военного совета Республики сего года номер 616, пункт 7, на Башкирский Военный Комиссариат было возложено формирование отдельной башкирской армии. Ныне, согласно постановления Совета обороны, национальные армии как таковые формироваться не будут, что же касается снабжения башкирских частей, указанных приказом, [то оно осуществляется] по установленным табелям»*, – тип хәбәр итә.

1919 йылдың 20 мартындағы Килешеүҙе 5 апрелдәге Троцкийҙың фарманына ҡаршы килгән был хәбәр Башҡортостан етәкселеген тамам хайран ҡалдыра. Улар: *«...действительно ли распространяется на Башкирскую армию такое постановление Совета обороны, если таковое состоялось, действительно ли изменяется пунт 9 Соглашения...»* – тип Мәскәүгә Үҙәк совет власының башлыҡтары Ленин, Сталин һәм Троцкийға мөрәжәғәт итә. Башҡортостан етәкселеге Мәскәүҙән яуап алмаған, күрәһең.

9 июль Башревком рәйесе һәм ВЦИК янында Башҡортостан вәкиле вазифаһын үтәүсе Харис Йомағолов РСФСР Оборона советына былай тип мөрәжәғәт итә:

«Просим Совет обороны дать ясный ответ: будет ли формироваться отдельная башкирская армия или нет...

При этом считаем нужным указать, что:

1) неразрешение формирования отдельной башкирской армии является нарушением п. 9 «Соглашения».

2) Нарушение «Соглашения» очень неблагоприятно отразится на настроении башкирского населения, охлаждается симпатия башкир к Советской власти, затрудняется предполагаемая мобилизация, открывается широкое поле для контрреволюционной агитации среди башкирского населения.

3) Объяснение неудач на некоторых фронтах существованием национальных армий считаем ошибочным, ибо неудачи бывают и там, где нет национальных армий.

Ввиду вышеизложенного просим Совет обороны дать возможность формировать отдельную башкирскую армию, не разбрасывая ее отдельными частями в различные фронты, что имеет много нежелательных сторон также тем, что отдельные инородческие войсковые части некоторым высшим командованием несправедливо расходуются, что фактически разбивается формируемая армия, имея только название армии.

Центральная советская власть, дав башкирам автономную республику, обещав дать возможность создать отдельную башкирскую армию для защиты своей республики, обещав поддержку молодой республике, завоевала симпатии всего башкирского населения. Разочарованные результатом «учредилки», царским генералом Колчаком, башкиры, увидев в обещаниях центральной советской власти много надежд, с энтузиазмом перешли на советскую сторону, так не нужно убивать в зачатке эту надежду».

Хат юлдарынан күренеүенсә, Башҡортостан етәкселеге большевиктарҙың да, аҡтар кеүек үк, башҡорт ғәскәрҙәрен бергә туплауға теләмәүен күреп, уларҙың сәйәсәтенә ризаһыҙлыҡ белдерә башлай. Был сәйәсәттең ниндәй һөҙөмтәләргә килтерәсәген дә асыҡ әйтеп бирә Х. Йомағолов.

Шулай итеп, Үҙәк совет власы тәүге мәлдә (1919 йылдың март — апрелендә) башҡорт ғәскәрҙәрен айырым армияға туплауға ризалығын бирһә лә, хатта ошо айҡанлы махсус фарман сығарһа ла, артабан был ниәттән баш тарта. Килешеү буйынса, Башҡортостанды Колчак армияһынан азат итеүҙә ҡатнашырға тейеш башҡорт полктарын Саранскиҙан Көньяҡ фронтҡа (Украинаға) ташлайҙар. Быны большевиктар башҡорт ғәскәрҙәрен буржуаз «милләтсе» Башҡортостан етәкселегенән айырып алыу һәм йыраҡ тотоу маҡсатында эшләй.

Башҡорт кавалерия дивизияһы Көньяҡ фронтта

Ойошторолоп бөтмәгән башҡорт полктарын Көньяҡ фронтҡа ебәреү тураһында фарман килгәс, Зәки Вәлиди Ҡыҙыл Армияның баш командующийы Вацетисҡа ошо турала аңлатып былай тип яҙа: *«Посылаете башкирские части на Южный фронт, но они еще не сформированы: на 2 стрелковых и 2 кавалерийских полка имеется только менее 100 лошадей, в 4-х полках со всеми хозяйственными командами, командным составом всего 3 200, т. е. не больше 2 000 штыков. На 4 полка всего 40 винтовок, винтовки только что получили из Бежецка, они еще до Саранска не дошли. Командного состава не хватает. Например, в 2-х кавалерийских полках всего 11 человек. Полагали формирование продолжать на фронте, где мобилизуются все освобожденные волости, люди и лошади, обозное имущество. Большую часть полученных обмундирований отправили в Южгруппу для вновь мобилизованных башкир (Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы частары. — А. Я.), которых мы в Саранск не отправляли ввиду близости нашего выступления. Теперь все дело формирования расстроится».*

4 июнь Башҡортостан хәрби комиссариаты Саранскиҙағы башҡорт полктарының ойошторолоу кимәле тураһында ҡыҫҡаса белешмә лә (таблица менән ҡуша) әҙерләй:

Название частей	Число людей			Рота-эскадрон	Оружие	Лошади	Повозок	Примечание
	Ком.	Солдат						
		Бойцов	Всего					
1-й Стрелковый Башкирский полк	32	305	419	3	—	52	1	
2-й Стрелковый Башкирский полк	32	256	400	2	—	52	1	Из них 39 в командировке за обмундир., снар., фуражем

1-й Кавалерийск. Башкирский полк	17	229	311	2	—	46	1	
2-й Кавалерийск. Башкирский полк	19	215	285	2	—	33		Собственность красноармей-цев-башкир
Красный батальон (карауль.-конный)	14	—	161	1	10	35	—	Расформирован для формир.
В комплек-товании находящихся в карантине	—	—	Око-ло 800	—	—	—	—	Карантин кончился 3 мая
Всего	**100**	**995**	**2215**			**183**	**3**	

Таблицанан күренеүенсә, бригаданың дүрт полкы кеше һаны буйынса ике полкка ғына торошло булған. Фронтҡа сығырға торған ғәскәрҙең ҡоралдары ла бөтөнләй булмаған, ҡараул батальонындағы 10 мылтыҡты иҫәпкә алмағанда. Аттар, ылау тураһында әйтеп тораһы ла юҡ. *«По числу людей из всей бригады можно было бы составить пехотные полки — слабого состава, использовав весь командный состав, но опять и в этом случае отсутствие оружия, обоза и лошадей ставит преграду к выдвижению на фронт полка»,* — тигән һығымта яһай.

Әммә Вацетис башҡорт полктары Харьковта гарнизон хеҙмәтен генә үтәйәсәк һәм шунда ойоштороу эштәрен тамамларҙар, тип Башҡортостан хәрби комиссариатын тынысландыра.

11 июнь Башҡорт бригадаһының полктары Саранскиҙан Көньяҡ фронтҡа, Харьков ҡалаһына юллана. Зәки Вәлиди Ленин, Троцкий һәм Сталинға: *«...нахождение наших башкирских частей в Харькове, в распоряжении 14-й армии, просим считать краткосрочной командировкой для выполнения специальных задач и скорее вернуть их на Восточный фронт»,* — тип яҙа. Башҡортостан етәкселеге үҙ ғәскәрҙәренең Көньяҡ фронтта оҙаҡ булмауына һәм тиҙ арала ҡайтыуына ышанып, гарнизон хеҙмәтен генә үтәйәсәген иҫәпкә алып, Башҡорт бригадаһының штабын Саранскиҙа ҡалдыра. Бригаданың сәйәси комиссары Хәлим Әмиров ҡына особоуполномоченный сифатында башҡорт полктары менән Харьковҡа ебәрелә.

Гарнизон хеҙмәтенә киткән ҡоралһыҙ, ярым-ярты тупланған башҡорт полктары Көньяҡ фронтта һуғыштың ҡап уртаһына барып эләгә. Сөнки

был осорҙа ҡыҙылдарҙың тәртипһеҙ рәүештә сигенгән, аҡтарға тейешле ҡаршылыҡ күрһәтә алмаған 14-се армияһы ғәскәрҙәре дошмандан йән-фарман ҡасып, Харьков янына килеп еткән була. Көньяҡ фронтта 1-се Башҡорт кавалерия полкы командиры булған Усман Тереғолов үҙенең хәтирәләрендә бына нимә тип яҙа:

«...Беҙҙең полктар шул тиклем тиҙ барҙы, өсөнсө тәүлек тигәндә, 1919 йылдың 13 июненең иртәһендә, Харьков станцияһында инек. Беҙ Александрия ҡалаһына барырға тейешбеҙ. Харьков станцияһында бер нисә сәғәткә туҡталдыҡ. Мин фронттағы хәлдәрҙе белеү һәм патрондар алыу өсөн (сөнки беҙҙең патрондар юҡ тиерлек, 1-се кавалерия полкында ни бары 520 патрон), оборона штабына юлландым. Штаб Харьковта урынлашҡан.

Хәтерләүемсә, оборона штабы начальнигы элекке полковник (йәғни батша армияһында полковник булып хеҙмәт иткән. – *А. Я.*) Березовский тигән бер әҙәм ине. Ул, фронтта хәлдәр яҡшы тора, Александрияға бара торған юлда дошман юҡ, тип аңлатты.

Штаб начальнигының һүҙҙәренә ышанып, патрондар һорап тормаһым. Тиҙерәк станцияға ашыҡтым. Беҙҙең бөтөн частарға ла был полковник бер үк һүҙ һөйләгән, күрәһең. Беренсе булып килгәс, мин үҙемдең полкым менән тәү башлап Александрия яғына йүнәлдем.

13 июндең кисенә мин эшелон башында Лозовая станцияһына етеп киләм (Лозовая – көньяҡта күп кенә тимер юлдарҙы тоташтырып торған (узловая) станция). Лозовая янында ятҡан һуңғы станцияға килеп еткәндә ҡараңғы төштө. Бында беҙҙе туҡтаттылар. Мин вагондан сығып, станция начальнигына барырға, эшелонды Александрияға ебәреүҙе талап итергә булдым. Вагондан сыҡҡас, аптырап ҡалдым. Сөнки Ҡыҙыл Армия частары Лозовая станцияһы яғынан йән-фарман ҡаса. Бында тығылыш, этеш, төртөш. Станция хеҙмәткәрҙәре һәм эшселәр һуңғы аппарат һәм телефондарҙы һүтеп алып йөрөй. Бер һүҙ менән әйткәндә, бөтәһе лә бынан тиҙерәк һыпыртыу яғын ҡарай.

Күпмелер ваҡыт бер нәмә лә аңламай ҡарап торҙом. Аҙаҡ бер төркөм ҡыҙылармеецтарҙы туҡтатып, һораша башланым. Сәғәт иртәнге 12-лә үк Деникин ғәскәрҙәре Лозовая станцияһын алды, күп кенә ҡыҙылдар һәләк булды, әсиргә төштө. Бынан тыш беҙҙең бронепоездар, эшелондар, ҡорал, кейем-һалым һәм аҙыҡ-түлек запасы аҡтар ҡулында ҡалды, тип һөйләп бирҙеләр улар.

Беҙҙең дә, сигенеп, ҡасып барған ғәскәрҙәрҙең дә хәле мөшкөл икәнен аңлап, үҙемдең һалдаттарыма паникаға бирелеп ҡасҡан ҡыҙылармеецтарҙы туҡтатырға бойорҙом. Бурыс бик еңелдән түгел. Сөнки йән-фарман ҡасып барған һалдаттарҙы туҡтатырға һәм уларҙың артынан килгән аҡтарға ҡаршы торорға кәрәк. Берәй сәғәттән аҡтар менән һуғышырға тура килер, ахыры. Ә беҙҙә ни бары 520 патрон ғына. Көтөлмәгән хәлдә тороп ҡалыуға ҡарамаҫтан, ҡыҙылармеец-башҡорттар ҡурҡып ҡалманы. Бер һүҙһеҙ ҡушылған бойороҡтарҙы үтәргә тотондо.

Морзе аппаратын ҡора һалып, беҙҙең арттан килгән башҡорт полктарына бындағы хәлде хәбәр иттем. Был станцияға килмәҫкә үҙҙәренә

лә, минең полкка ла тиҙерәк ҡорал-патрондар табырға кәрәклеген аңлаттым. Шуны әйтергә кәрәк, бында килгәнгә тиклем беҙҙең дүрт башҡорт полкын берләштергән уртаҡ штаб юҡ ине. Минең полк көтөлмәгән хәлгә ҡалып, арттағылар хәбәр итеү менән, улар тиҙ арала бригада штабы төҙөгәндәр. Бригада командиры итеп Сөләймән Ишмырҙин, ә комиссар итеп Хәлим Әмировты ҡуйғандар. Хәҙер инде бөтөн хәрби операциялар менән идара итеү яңы ойошторолған бригада штабы иңенә һалынды. Уртаҡ штабтың булмауының сәбәбе былай: беҙҙе Саранскиҙан Харьковҡа гарнизон хеҙмәтенә ебәргәйнеләр. Ә юлда Александрия ҡалаһына 14-се армия штабы ҡарамағына барырға тигән фарман тотторҙолар.

Беҙҙең беренсе полк төнө буйы тарҡалған фронт һыҙығын тәртипкә килтереү менән булды. Сигенгән частарҙы туҡтатһа ла, улар дошманға бөтөнләй ҡаршы торорлоҡ хәлдә түгел ине. Иртәгә дошман беҙ торған станцияға һөжүм итәсәге билдәле. Сөнки кисәге уңыштарҙан һуң улар бөтөнләй шашҡандар.

Төн сыҡҡансы мин үҙемдең полкка күпмелер патрон таптым. Таң атыуға инде разведка отрядтары ебәреп, дошман ғәскәренең яҡынса һанын, ҡайҙан һөжүм итәсәген асыҡланыҡ. Ошо мәлдә бригада штабынан мине хәрби участкаһың етәксеһе итеп тәғәйенләүҙәре һәм дә 2-се Башҡорт кавалерия полкын да минең ҡарамаҡҡа биреүҙәре тураһында хәбәр иттеләр.

Таң атыуға беҙгә ярҙамға ҡырҡ пулеметлы, алты орудиелы «Гром и молния» исемле бронепоезд килде. Ошоноң менән полктың хәле яҡшырҙы һәм фронттың ярылған урынын ябып ҡуйҙыҡ.

Мереф станцияһы менән Лозовая станцияһына етә яҙырлыҡ араны бер төн эсендә Башҡорт дивизияһы тимер стенаға әүерелдерҙе. Был стенаға Деникин армияһының нисәмә полкы һөжүм итеп ҡараманы, шул иҫәптән генерал Шкуроның атлы корпусы үҙенең тешен һындырҙы. Сөнки был участок Деникин армияһының Совет Украинаһының баш ҡалаһы Харьковҡа һөжүм итә торған төп йүнәлешендә ята ине.

Ҡояш сығыу менән 1-се Башҡорт кавалерия полкы һөжүмгә күскән аҡтарҙың частары менән һуғыша башланы.

Өс сәғәт барған ҡаты бәрелештә башҡорттар Деникиндың казактарын сигенеп ҡасырға мәжбүр иттеләр. 1-се кавалерия полкының эскадрондары аҡтарҙың артынан ҡыуып, төнгә генә тимер юл линияһына ҡайттылар. Был һуғышта «Гром и молния» бронепоезының ярҙамы ныҡ тейҙе. Алыҫҡа ата торған орудиелары дошмандың эскадрондарын әллә нисә саҡрымдан уҡ туҙҙыра ине.

Дошман Ҡыҙыл Армияның бик тә етди көстәренә килеп эләккәнен һиҙҙе булһа кәрәк. Улар украиндар араһында «ҡыҙылдар яғында ҡырағай, кеше ашаусы башҡорттар бар» тигән ҡолаҡҡа ятмаған хәбәр тарата башланылар. Шуның менән халыҡты ҡурҡытырға теләнеләр. Шуға күрә лә ауылдарҙа беҙҙең ҡыҙылармеецтарҙы халыҡ ҡырағай кешеләр килде тип ҡурҡып ҡаршы ала ине. Әммә артабан улар башҡорт-

тарҙың кеше ашаусылар түгел, ә киреһенсә бер кемгә лә теймәгән, йәберләмәгән киң күңелле халыҡ икәненә шаһит булдылар.

Деникин частары Башҡорт бригадаһының көслө ҡаршылыҡтарына осрауға ҡарамаҫтан, Харьков йүнәлешенә ҡарай һөжүмде туҡтатманылар. Дошман башҡорт полктарына туп-тура һөжүм итеүҙән тайпылып, беҙҙең частарҙы урап сығыу тактикаһына күстеләр.

Шуға ҡарамаҫтан, беҙ киң фронт һыҙығында дошмандың юлын быуып торҙоҡ. Даими рәүештә һөжүм итеп, кәрәк саҡта оборонаға тороп, Харьков янында һуғыштыҡ. Дөйөм фронтта Ҡыҙыл Армия дошмандың ҡыҫымына сыҙамай бер нисә аҙна буйы Харьковҡа сигенде. Был мәлдә башҡорт ғәскәрҙәре ысын мәғәнәһендә ғәжәйеп батырлыҡтар күрһәтте. Беҙҙең полктар дошманға бик ҡаты ҡаршылыҡ күрһәтеп сигенде. Сигенмәҫ ине, бөтөн Ҡыҙыл Армия сигенгәнгә күрә, Башҡорт дивизияһы ла Харьков яғына сигенергә мәжбүр булды. Армияның былай бер туҡтауһыҙ сигенеүен юғары командованиеның йүнһеҙлеге һәм аҡтарға һатылғанлығылыр тигән уйҙа булды башҡорт ғәскәрҙәре етәкселеге. Ә юғары командование Харьков оборона штабында булды. Уларҙың һатылғанлығы бик тә яҡшы күҙгә ташлана ине. Беренсенән, фронт шул тиклем тарҡау, Ҡыҙыл Армия частары араһында элемтә юҡ, дошмандың ҡыҫымы аҫтында улар тәртипһеҙ рәүештә бер ниндәй етәкселекһеҙ сигенгәйне. Оборона штабының Харьков йүнәлешендәге тарҡау Ҡыҙыл ғәскәрҙәрҙе тәртипкә килтерерлек йүнле фарманы булманы. Икенсенән, Зайцево станцияһына дошман һөжүм иткән мәлдә, 1-се Башҡорт кавалерия полкы оборона штабынан тиҙ арала патрондар ебәреүҙе һораныҡ. Беҙҙең патрондар бөтөп бара, патрондар килмәһә, дошман беҙҙе тиҙҙән юҡ итәсәк, тип 10 минут һайын тиерлек Харьковҡа хәбәр итеп торҙоҡ. Бына, ниһайәт, иртән ебәргән ике вагон боеприпастар сәғәт 3-тәргә килеп етте. Вагондарға «взрывчатые вещества», «при маневрах не толкать» тип яҙылған пломбалар ҡуйылған. Вагондарҙы асһаҡ, унда патрон урынына мең бот тирәһе шина тимере һалып ебәргәндәр булып сыҡты. Асыуымдың сиге юҡ. Оборона штабы менән тағы бәйләнешкә инеп, хәлде һөйләп бирҙем. Улар килеп сыҡҡан хәлгә үкенестәрен белдерҙе һәм тикшереп, ғәйеплеләрҙе атасаҡбыҙ, тинеләр. Бер нисә сәғәттән вагондарҙы яңылыш тағып ебәргәндәр, тип хәбәр иткән булдылар. Патронһыҙ, снарядһыҙ ҡалған ҡыҙылармеец-башҡорттар штыктар һәм прикладтар менән һуғышты. Өсөнсөнән, башҡорт полктарын бер-береһенән айырып, эскадрон, роталарға бүлгеләп, бөтөн фронтҡа тиерлек таратырға бойорған оборона штабының мәғәнәһеҙ фармандары беҙҙе һағайтты. Оборона штабының бына ошондай ҡылыҡтарын күреп, беҙ Харьковтағы юғары командованиеның аҡтарға һатылғанлығына шигебеҙ ҡалманы. Шуға күрә Башҡорт дивизияһы етәкселеге оборона штабының бойороҡтарына ҡолаҡ һалманы. Баҡтиһәң, берҙәм һәм ойошҡан Башҡорт дивизияһы Деникин армияһының Харьковҡа инеүенә ныҡ ҡамасаулаған. Шуға күрә лә оборона штабында ултырған һатлыҡ йәндәр беҙҙең дивизияны тарҡатырға теләгәндәр икән.

Эшселәр дружинаһы һәм коммунистик отрядтарҙан тыш Ҡыҙыл Армияның бөтөн частары Харьков районынан бер туҡтауһыҙ сигенде. Беҙҙең дивизия Харьков ҡалаһы янында ҡулсала тороп ҡалды. Беҙҙең юлды ҡырҡыу өсөн, Харьковҡа ябырылған дошмандың һөжүмен туҡтатыу маҡсатында сигенеп ҡалаға барып ингәндә, бында бер ҡыҙыл ғәскәри часть та ҡалмағайны. Тик оборона штабы ғына тороп ҡалған. Харьковтың буржуазияһы байрамса кейенеп, тантаналы рәүештә Дениминдың килеүен көтә. Ҡалалағы күренеш минең күңелгә бик ауыр тәьҫир итте. Сәғәт төнгө 12 булыуға ҡарамаҫтан, мин Харьков буржуазияһына ҡыуанырға әле иртәрәк, Ҡыҙыл Армия әле ҡаланы ташлап китмәгән икәнен күрһәтергә булдым. Ун пулемет ултыртып, өс эскадрон һыбайлы башҡорттарҙы ҡала урамдары буйлап сығарып ебәрҙем. Бер эскадрондың башында үҙем киләм. Ҡала халҡының кәйефен белеү маҡсатында. Беҙҙең эскадрондар Харьковтың үҙәк урамдарынан дәртле башҡорт йырҙарын йырлап йөрөйҙәр. Урамдағы «публика» һәм бай ҡатындар беҙгә яман итеп ҡарайҙар. Ҡайһы бер йорттарҙың тәҙрәләренән револьвер һәм винтовкаларҙан бер нисә тапҡыр аттылар. Сәғәт төнгө икегә буржуазия өйҙәренә таралышып бөттө һәм ҡала тағын да үҙ яйына ҡайтты.

Оборона штабының бойороғон тыңламайынса, бригада штабы ҡушыуы буйынса, мин 1-се кавалерия полкы менән ҡаланан 6 саҡрым тирәһендә ятҡан Новая Бавария станцияһын алдым. Позицияға урынлашып, һуғышырға әҙерләнә башланым. Шул мәлдә 2-се Башҡорт пехота полкынан һалдаттар килеп етте. Исхаҡов етәкселек иткән (ул Петроград фронтында ауыр яраланды, һуңынан Урта Азияла баҫмасылар тарафынан үлтерелде) 2-се полк аҡтарҙың ҡамауына эләккән икән. Полктың бер өлөшө һәләк ителгән, тигән хәбәр алдым.

Ҡояш сығыу менән дошман 1-се кавалерия полкына артиллерия һәм мылтыҡ уты асты. Ошоноң менән ҡаты алыш башланып китте. Һуғыш кискә тиклем барҙы. Тирә-яҡтағы частар күптән Харьковты ҡалдырып киткәйне. Бында бер нисә эшсе дружина ғына беҙгә ярҙам итте. Кискә минең полк ҡамауҙа ҡалды. Хәҙер инде беҙҙең өҫкә снаряд һәм пулялар дүрт яҡтан да яуа. Берҙән-бер ҡотолоу юлы — тимер юл линияһы ине. Әммә унда ла дошман барып еткән. Бер казак эскадроны беҙҙең штабтан өс саҡрымда тимер юл полотноһын һүтә башлаған.

Дошмандың ҡулсаһын тимер юл линияһында йырып сығырға кәрәк, шуға мин полктың бөтөн көсөн бер ергә йүнәлттем, йәғни тимер юлы линияһына. Резервта булған 5 пулеметты паровозға ҡуйып, алға киттек. Полотноны һүтеп йөрөгән казак эскадронын туҙҙырып, дүрт яҡҡа ла ата-ата беҙҙең полк алға ынтылды. Ошо рәүешле 1-се кавалерия полкы иң һуңғы булып дошман ҡамауын йырып сыҡты. Харьков аҡтар ҡулында тороп ҡалды. Минең ярҙамсым Байышев яраланып, аҡтар ҡулына эләкте. Әммә һауыҡҡас, нисектер ҡасып дошман тылында партизан отрядтары ойоштороған. Аҙаҡ ҡыҙылдарҙың Кавказ армияһына барып ҡушылған.

Элекке батша полковнигы Березовский етәкселегендәге оборона штабы Харьков янында һуғыштар башланыу менән алтын погондарын тағып дошман яғына ҡасҡан.

Башҡорт дивизияһы тар ғына ҡулсаны йырып сыҡты, әммә ҙур ҡамауҙа ҡалды. Беҙҙең һуңғы һуғыш еренән алып Сумы ҡалаһына тиклем юл асыҡ, әммә дошман ҡамауында инде. Шуға беҙгә эшелондар менән ошо хәүефле юлды үтергә кәрәк. Сумы ҡалаһына тиклем арала бер ҡыҙылармеец та күренмәй. Бөтәһе лә күптән инде Сумының арьяғына сигенгән. Бер беҙҙең дивизия ғына көслө һөжүм менән килгән дошмандың юлына кәртә булып тора. Башҡорт полктары сигенгән 14-се армия частарының артын ҡаплап, һәр ваҡыт иң һуңғы булып позицияларынан сигенә. Беҙ юл буйында Ҡыҙыл Армия частары ҡалдырып киткән бихисап ҡорал, кейем-һалым, провиант һәм башҡа хәрби кәрәк-яраҡтарҙы йыйып барҙыҡ. Был 14-се армия частарының шул тиклем һалдаттарҙың деморализованный булыуҙары һәм паникаға бирелгәнлеген, бөтөнләй ойошҡанлығын юғалтыуҙары хаҡында һөйләй ине. Был командованиеның һәм күп кенә командирҙарҙың дошманға һатылғанлығы арҡаһында килеп сыҡҡайны. Командованиеның һатылғанын раҫлаусы тағы бер миҫал: Харьков янында беҙ Ҡыҙыл Армия ҡалдырып киткән бер вагон ҡағыҙ аҡсаға юлыҡтыҡ. Был аҡсаларҙы вагонға алып барырға паровоз юҡ тигән һылтау менән армияға таратмағандар. Беҙҙең командование бөтөн армияны жалованиеһыҙ һәм аҙыҡ-түлек алырлыҡ аҡсаһыҙ ҡалдырыу өсөн эшләгәнлеге көн кеүек асыҡ. Улар һалдаттар араһында ризаһыҙлыҡ һәм бола тыуҙырырға иҫәп тотҡандар.

Ошо рәүешле Сумы ҡалаһына тиклем беҙ барған юлда иҫәпһеҙ-һанһыҙ хәрби припастар һибелеп ята ине. Мин үҙемдең полкым менән генә юлдан 10000-гә яҡын трехлинейка винтовкалар, 30 миллион патрон, ике вагон өр-яңы «максим» системаһындағы пулеметтар (иҫәбен хәтерләмәйем) йыйып алдыҡ. Бынан тыш ылауҙар, тотошлай артиллерия батареялары булды. Шулай итеп, мин Сумы ҡалаһына 100 вагон хәрби кәрәк-яраҡтар килтерҙем. Үҙе дошман тарафынан тар-мар ителеү ҡурҡынысы аҫтында булыуға ҡарамаҫтан, Башҡорт дивизияһы ике мөһим эш атҡарып сыҡты. Беренсенән, теләһә ҡайһы рәүештә сигенгән, ҡасҡан, деморализацияға бирелгән ҡыҙылармеецтарҙың артын ҡаплап, казак кавалерияһы ҡылыстары, пуляларынан ҡурсалап, меңәрләгән һалдаттың ғүмерен ҡотҡарҙы. Икенсенән, киләсәктәге һуғыштар өсөн бихисап хәрби кәрәк-яраҡтарҙы дошман ҡулына бирмәне.

Тағы шуны әйтеп үтергә кәрәк: Сумы ҡалаһына килеп еткәс, бында оборона штабы комиссары ла килгәнен ишеттем. Ул тотошлай дошманға һатылған оборона штабынан автомашинаға ултырып саҡ ҡасып ҡотолған икән. Фамилияһын хәтерләмәйем, әммә революция эшенә тоғро һәм ғәскәрҙә абруйы булған бер әҙәм ине. Үкенескә ҡаршы, командалыҡ составына кешеләрҙе белекһеҙ рәүештә тәғәйенләүе арҡаһында, Харьковты һаҡлау эшен юҡҡа сығарҙы».

Шулай итеп, башҡорт полктары әҙерлекһеҙ, ҡоралһыҙ Деникин армияһына ҡаршы һуғышҡа барып инә. Гарнизон хеҙмәте үтәргә килгән

полктарҙың дөйөм командованиеһы ла булмай. Тиҙ арала полктарҙы берләштергән бригада штабы ойошторола. Уның командиры итеп 1-се Башҡорт уҡсы полкының командиры Сөләймән Ишмырҙин һайлана, бригада комиссары итеп Хәлим Әмиров ҡуйыла.

Харьковтың Оборона советы штабы бойороғо буйынса башҡорт полктары Деникин армияһына ҡаршы һуғыша башлай. Ауыр шарттарҙа һуғышҡа инергә тура килһә лә, башҡорттар үҙҙәрен бер ҙә һынатмай, киреһенсә, башҡорт полктарының көслө ҡаршылығына осраған Деникин ғәскәрҙәре уларға тура һөжүм итергә баҙнат итмәй башлай. Флангылағы ҡыҙылдарҙың частарын ҡыйратып, урап үтеп, башҡорттарҙы әллә нисә тапҡыр ҡулсаға ала, юҡ итергә маташа. Ошондай ҡулсаға эләгеп, 2-се Башҡорт уҡсы полкының байтаҡ яугирҙары һәләк була. Бынан тыш, аҡтарға һатылған Оборона советы штабы башҡорт полктарын нисек тә булһа тарҡатырға тырыша, аҡылға һыймаған бойороҡтар бирә. Шуға күрә лә бригада командованиеһы уның фармандарын үтәмәй башлай. Үҙ аллы фронт тота.

Йәнен-тәнен аямай һуғышҡан башҡорт ғәскәрҙәренә рәхмәт әйтер урынға Оборона советы штабы Харьковтың дошман ҡулына күсеүендә бөтә ғәйепте башҡорттарға япһара. Сумы ҡалаһында Башҡорт бригадаһының штабы командирҙары һәм комиссарҙары ҡулға алынып, һаҡ аҫтында ултыртыла. *«16 сәғәт буйы тотҡонда булған командирҙарын һәм офицерҙарын башҡорт һалдаттары көс ҡулланып ҡотҡарған. Быны күреп, Ҡыҙыл ғәскәр командующийы Башҡорт бригадаһы командирын һәм офицерҙарын ғәйепләүҙән ваз кисеп, ғәфү үтенгән. Мин был ваҡиғанан һуң шунда уҡ Көньяҡ фронтҡа юл тоттом»,* — тип яҙа Зәки Вәлиди.

Командованиеның бойороғо буйынса Башҡорт бригадаһы Сумы ҡалаһынан сығып, Бахмач станцияһына барып урынлаша. 2 июль көнө Зәки Вәлиди килеү менән башҡорт ғәскәрҙәренең митингыһы үтә. Хәрби комиссар Харьков өсөн һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн башҡорт яугирҙарына рәхмәт белдерә:

ПРИКАЗ

По Башкирским войскам
№ 0642-I

2-го июля 1919 г. **Станция Бахмач**

§ 1

Прибыв на Южный фронт, ознакомился с боевыми действиями 1-го и 2-го Стрелковых и 1-го и 2-го Кавалерийских Башкирских полков и их героическими подвигами при обороне Харькова, от имени Революционного Комитета Башкирской Советской Республики приношу благодарность всем красноармейцам-башкирам; принимавшим участие в этих

тяжелых боях, вынесенных при крайне неблагоприятных условиях, которыми была обставлена оборона Харькова вообще.

Особенно благодарю Командира 1-го Стрелкового Башкирского полка Ишмурзина, 2-го временно исполнявшего обязанности командира Бригады за умелое ведение операции с малым для войска ущербом; командира 2-го Стрелкового полка Исхакова за самоотверженность.

§ 2

Кавалерист 3-го Башкирского Кавалерийского полка Ишбулатов Саит 25 июня сего года во время разведки под станцией Люботин на Харьковском фронте, будучи окруженным со всех сторон неприятелем и вступив с ними в неравный бой, сумел вырваться и вернуться в свой полк; приношу кавалеристу Ишбулатову благодарность за неустрашимость и за его преданность делу – делу Революции.

§ 3

Командир 2-го Башкирского Стрелкового полка Исхаков 29 сего июня производил лично разведку под городом Змеевка, который был окружен с трех сторон неприятелем; посланный им красноармеец Мардан Халитов, несмотря на пулеметные и оружейные огни, пробрался в город и сумел связаться в городе с Советскими частями. На обратном пути, не находя командира, кроме убитой лощади, и подумав, что командир взят в плен неприятелем, поскакал в стан неприятеля, где, встретившись с 14-ю всадниками неприятельской разведки, вступил с ними в беседу, притворившись белым, когда разузнал, что командир Исхаков успел убежать, а убита только лощадь, и своей ловкостью обманув их, поскакал обратно. Предупредив заставу и командовав ей, дал догоняющим всадникам противника сильный отпор. За такой героизм, изворотливость и за храбрость красноармеец Халитов награждается мною серебряными часами из подарков тов. Троцкого с надписью.

Военный Комиссар Башкирской
Советской Республики
Валидов

Зәки Вәлиди менән бергә Көньяҡ фронтҡа Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһының штабы килә. Башҡорт бригадаһы яңы килгән һалдаттар, командирҙар менән тулыландырылып, дивизия итеп үҙгәртелә. Уның составында 2972 кеше иҫәпләнә. Дивизияның начальнигы итеп Ахлау Ахлов (Зәки Вәлиди уны Төньяҡ Кавказ яҡлабаш нуғайҙарынан, тип яҙа) тәғәйенләнә, сәйәси комиссары итеп Нуриәғзәм Таһиров ҡуйыла. Элекке бригада етәкселеге – Сөләймән Ишмырҙин менән Хәлим Әмиров Башҡортостанға ҡайтарыла.

1-се һүрәт. Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте лидеры һәм Башҡорт армияһы етәксеһе Әхмәтзәки Вәлиди. 1919 – 1920 йылдар

2-се һүрәт. 3-сө Башҡорт кавалерия полкы яугирҙары Лейб-гвардия атлы полкы майҙанында. 1919 йыл, сентябрь

3-сө һүрәт. Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы командирҙары. Петроград. 1919 йыл, сентябрь

4-се һүрәт. Башҡорт кавалерия дивизияһы Петроград урамында. Алғы планда дивизияның комиссары Н. Таһиров. 1919 йыл



5-се һүрәт. Зәки Вәлиди тарафынан эшләнелгән Башҡортостан автономияһының картаһы. 1917 йыл

6-сы һүрәт. Ҡаһарман сардар, 1-се Башҡорт кавалерия полкы командиры Әмир Ҡарамышев *(һулда)* хеҙмәттәштәре менән. Ырымбур. 1918 йыл

7-се һүрәт. 3-сө Башҡорт полкы командиры Ғәлимйән Таған



Военный отдѣлъ Правительства Башкиріи.

Ферманъ № 288.

___ іюня 1918 г.

Въ ______ ______________ Волостную Управу

______________ уѣзда

Симъ объявляется призывъ башкирскаго населенія на защиту родной Башкиріи отъ власти насильниковъ:

1) [illegible]
2) [illegible] 1918, 1917, 1916 и 1915 [illegible]
3) [illegible]
4) [illegible]
5) [illegible]
6) [illegible]
7) [illegible]
8) [illegible]
9) [illegible] 1918, 1917, 1916 и 1915 [illegible]
10) [illegible]

[illegible]

Члены | [illegible]

№ ______
Іюня 1918 г.

8-се һүрәт. Башҡорт армияһына мобилизация тураһындағы Башҡорт хөкүмәтенең Хәрби бүлеге фарманы. 1918 йыл



9-сы һүрәт. Башҡорт армияһының айырыу билдәләре (знаки различия). 1918 йылдың 29 авгусында индерелгән. 1. Тулы генерал; 2. Генерал-лейтенант; 3. Генерал-майор; 4. Полковник; 5. Подполковник; 6. Капитан; 7. Штабс-капитан; 8. Поручик; 9. Подпоручик; 10. Прапорщик; Подпрапорщик; 12. Фельдфебель; 13. Унтер-офицер; 14. Бомбардир; 15. Ефрейтор; 16. Рядовой

10-сы һүрәт. 1-се Башҡорт пехота полкының подпоручигы. (Р. С. Таймасовтың «Участие башкир в Гражданской войне» китабынан алынды)

11-се һүрәт. 2-се Башҡорт пехота полкына Екатеринбург халҡы тарафынан бүләк ителгән байраҡ. 1918 йыл. Реконструкция

12-се һүрәт. 2-се Башҡорт пехота полкының байрағы. 1918 йыл. Реконструкция

13-сө һүрәт. Байраҡ башы. Башҡортостан Республикаһының Милли музейы фонды-нан

14-се һүрәт. Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһының 2-се полкы байрағы. Байраҡта ғәрәп графикаһы нигеҙендәге башҡортса текст

15-се һүрәт. Байраҡтың икенсе яғында рус телендәге текст. Башҡортостан Республикаһының Милли музейы фондынан

16-сы һүрәт. Башҡорт кавалерия дивизияһы комиссары Н. Таһиров *(уңдан өсөнсө)* һәм дивизияның тәьминәт бүлеге комиссары Ә. Ағишев *(уңдан беренсе)*. Петроград. 1919 йыл, октябрь

17-се һүрәт. Уңдан беренсе торған яугирҙың гимнастеркаһында үҙенсәлекле ярым ай менән йондоҙ билдәһе

18-се һүрәт. Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы комиссары Н. Таһиров *(уңда)*. Уның һул ҡулында башҡорт ғәскәренең билдәһе

19-сы һүрәт. Ҡыҙыл Армияның башҡорт ғәскәрҙәре билдәһе (нарукавный знак)

Копія.

Приказъ

БАШКИРСКАГО ВОЕННАГО СОВѢТА

(Штабъ Башкирскаго войска)

№ 37.

7 сентября 1918 года гор. Оренбургъ

Отдѣлъ строевой.

§ 1.

[illegible]

СПРАВКА: Телеграмма № 1226.

§ 2.

[illegible]

§ 3.

[illegible]

§ 4.

[illegible]

§ 5.

[illegible]

§ 6.

[illegible]

20-се һүрәт. Башҡорт хәрби шураһының фарманы. 1918 йыл

Свидѣтельство

о явкѣ къ исполненію воинской повинности

БЕЗСРОЧНОЕ

Кантональнаго округа

волости деревни

на основаніи фермана 191 года

Военнаго отдѣла Правительства Башкиріи явился на переосвидѣтельствованіе во врачебную комиссію при Башкирскомъ Военномъ Совѣтѣ, но по переосвидѣтельствованію комиссией

признанъ совершенно неспособнымъ въ военной службѣ, а потому освобожденъ навсегда отъ службы

Выдано врачебной комиссіей при Башкирскомъ Военномъ Совѣтѣ

Предсѣдатель комиссіи

Члены

Врачи

21-се һүрәт. Башҡорт хәрби шураһының табип комиссияһы таныҡлығы. 1918 йыл

22-се һүрәт. Башҡорт кавалерияһы

23-сө һүрәт. Петроградҡа килгән башҡорт һалдаттарының Морская урамы буйлап казармаларға китеп барған мәле. 1919 йыл, сентябрь

24-се һүрәт. Петроград халҡы башҡорт ғәскәрҙәрен фронтҡа оҙата. 1919 йыл, октябрь

25-се һүрәт. Башҡорт ғәскәрҙәре Революция ҡорбандары майҙанында смотр ваҡытында. 1919 йыл, 28 ноябрь

26-сы һүрәт. Башҡорт яугирҙары. Петроград. 1919 йыл

27-се һүрәт. Башҡорт һалдаттары фронтҡа юллана. 1919 йыл

28-се һүрәт. Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы штабында Петроградҡа яҡынлашҡан генерал Юденич ғәскәрҙәренең һөжүмен кире ҡағыу өсөн план төҙөлгән ваҡыт. *(Һулдан уңға ултыралар)*: РСФСР-зың ВЦИК янындағы Башҡортостан вәкиле Ә. Бикбауов, дивизия командиры А. Ахлов, дивизия комиссары Н. Таһиров, дивизия комиссарының урынбаҫары Передерей. *(Һулдан уңға баҫып торалар)*: дивизияның сәйәси бүлеге мөдире Һ. Сәғәҙиев, полк командиры Чанышев, Башҡорт республикаһының башҡорт ғәскәрҙәрендәге махсус вәкиле Х. Әмиров, дивизияның табибы Козловский. Петроград. 1919 йыл, октябрь

29-сы һүрәт. Петроградҡа килгән Башҡорт кавалерия яугирҙары аттарын вагондарҙан сығара. 1919 йыл, сентябрь

30-сы һүрәт. Башҡорт ғәскәрҙәре командирҙары Петроградтың нығытма районы (укрепрайон) вәкилдәре менән «Астория» ҡунаҡханаһы янында. *(Уңдан һулға беренсе)* – 2-се Башҡорт полкы командиры Ибраһим Исхаҡов, *(икенсе)* – Башҡорт кавалерия дивизияһының тәьминәт бүлеге комиссары Әхмәҙулла Ағишев, *(дүртенсе)* – дивизияның комиссары Нуриәғзәм Таһиров. 1919 йыл, сентябрь

31-се һүрәт. Петроградҡа килгән Башҡорт уҡсы бригадаһы һалдаттары. 1919 йыл, сентябрь

Ҡыҙыл командованиеның башҡорттарға ҡарата кире мөнәсәбәте быны менән генә сикләнмәй. 10 июль Башҡорт кавалерия дивизияһын ялға сығарып, Полтава губернаһындағы Ромодан станцияһында әҙәм торғоһоҙ шарттарҙағы бараҡтарға алып барып урынлаштыралар. Усман Тереғолов үҙенең хәтирәләрендә былай тип яҙа:

«Бер туҡтауһыҙ ҡаты алыштарҙан һуң беҙ ял итер өсөн Ромодан станцияһындағы ярым емерек һәм ҡараңғы, шомло бараҡтарға килдек. Бында беҙҙең өсөн ялыбыҙ ял булманы, киреһенсә, ғазапҡа әүерелде. Бараҡтар шул тиклем емерек хәлдә һәм унда әҙәм торғоһоҙ һаҫыҡ еҫ ине. Һаҫыҡ бараҡтарға бер кем дә инергә баҙнат итмәне. Күпме күсереүҙе һораһаҡ та, командование теләмәне. Ахырҙа ошо ҡот оскос бараҡтарҙа ҡалырға тура килде. Беҙ килгән саҡта көндәр матур торғайны. Һалдаттар тышта йәшәне, йоҡланы. Әммә көслө ямғырҙар башланғас, бараҡтарға инергә мәжбүр булдыҡ. Бараҡтарҙың ҡыйығы ла шәптән түгел – иләк кеүек. Бөтә еренән ямғыр һыуы тама. Ямғыр үтмәгән бер мөйөш тә тапмаҫһың. Бындай әҙәм торғоһоҙ йәшәү шарттары һалдаттарҙың рухи тормошона ныҡ тәьҫир итте. Уларҙың күңелдәре бөтөнләй төштө, бөтәһе лә тиҙерәк фронтҡа сығыр көндө түҙемһеҙләнеп көтәләр. Ә ваҡыт үтмәй, көндәр аҙналар кеүек оҙон тойола. Тамам түҙемлектәре бөткән һалдаттар фронтҡа ебәреүҙе талап итә башланылар. Әҙәм торғоһоҙ бараҡтарҙағы тормошҡа сыҙай алмай һалдаттар үҙ-үҙҙәренә ҡул һалыуға барып етте. 1-се полктан шундай өс кеше булды. Полктың фельдшеры һәм фуражиры атылып үлде, ә бер һалдат бысаҡ менән сәнселеп үлергә йыйынғайны, уны, күреп ҡалып, ҡотҡарҙылар. Бигерәк тә фельдшерҙың атылыуы үҙе бер ҡот осмалы хәл. Үҙенең бүлмәһенә бикләнеп, трехлинейка винтовканы ауыҙына терәп атҡан. Башы аҡтарылып, бөтә ерҙә мейеһе сәселеп ята. Яҫтығы аҫтында: «Минең үлемемдә бер кемде лә ғәйепләмәгеҙ, үлемем тураһында әсәйемә хәбәр итегеҙ. Һау булығыҙ, минең һөйөклө әсәйемә сәләм күндерегеҙ», – тигән записка ҡалдырған».

Бынан тыш, Ромодан бараҡтарында үткәргән ике аҙна эсендә Башҡорт дивизияһына аслы-туҡлы йәшәргә тура килә. Аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеү оло бәләгә әйләнеп китә. Өҫтәүенә, урындағы власть органдары Башҡорт дивизияһына дошмандарса ҡарай. Хәлим Әмиров бына нимә тип яҙа: «*В отношении снабжения продовольствием, фуражом испытываем полный недостаток: до сего времени с 9-го по 13-е снабжены лишь на одни сутки продовольствием, без мяса, фуража. Каждый полк организовывает закупочные комиссии. Этот исход проходит следующим образом: арестовывают, разружают и отбираются у наших людей из комиссии лошади, вооружение. Этот случай был вторым десятого числа с миргородским военкомом. Второй случай закупочной комиссии первого кавполка: местные кулаки во главе с одним офицером задержали одного члена комиссии и нанесли шашкой на него удары по голове и руке. Пострадавший, еле спасшись, прибыл в барак и сейчас находится в*

тяжелом положении. Местные конторы занимаются направлением башкир на русских, рождается антогонизм».

23 июлдә Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһының торошо буйынса яһалған сәйәси сводкала ла былай тиелә: *«Отношение красноармейцев-башкир к местному населению доброжелательное, но со стороны последнего замечается весьма неприязненное отношение к красноармейцам».*

Бына ошондай ауыр шарттарҙа һуғышырға тура килә Башҡорт кавалерия дивизияһына. 1-се Башҡорт кавалерия полкы командиры Усман Тереғоловтың хәтирәләренә ҡарағанда, башҡорт ғәскәрҙәре Миргород районындағы ҡанлы яуҙарҙа ҡатнаша. Бында ла 14-се армия частарының көсһөҙ һуғышыуы, һәр ваҡыт сигенеп ҡасыуы арҡаһында Башҡорт кавалерия дивизияһы күп тапҡырҙар аҡтарҙың ҡамауына эләгеп, ауыр юғалтыуҙар менән йырып сығырға тура килә:

«Беҙҙең юл Полтава яғына ҡарай бара. Годяч станцияһында (Годяч ҡалаһы) 1-се кавалерия полкы эшелондарҙан төшөп, хужалыҡ частарын станцияла ҡалдырып, поход тәртибе менән алға китте. Годяч – йәшеллеккә күмелеп ултырған бәләкәй бер ҡала. Тимер юлының бер тармағы ҡалаға барып тоташа. Беҙҙе урындағы власть вәкилдәре һәм ҡала халҡы ихлас ҡаршыланы. Митингыла дошман Полтаваға етеп килә, уларҙы Украинаның эсенә үткәрмәҫкә, бөтөн көстө йыйып ҡаршы торорға, тип һөйләнеләр. Годячта ғәскәри частар юҡ ине. Бында дошмандың яҡынлашҡаны тойола. 1-се полк иртәнгә тиклем ҡалала ҡалды. Иртән эскадрондарға теҙелеп, артабан Гоголевка (Гоголдең тыуған яғы) ауылына табан китте. 50 саҡрым үткәс, 2-се кавполк менән бергә бер ауылға барып урынлаштыҡ. Бында беҙ һағауыл (сторожевая служба) хеҙмәтенә күстек. Дошман беҙҙән йыраҡ түгел. Тиҙҙән ошонда, йәшеллекә күмелеп ултырған ауылдар тирәһендә, бик ҡаты һуғыштар башланасағын һәр кем тоя ине. Әкрен генә йәшәп ятҡан утарҙарҙың тынлығын пушкаларҙың гөрһөлдәүе ҡаплаясаҡ. Бында өс аҙна тирәһе торғандан һуң, артабан ҡуҙғалдыҡ. Күренекле яҙыусы Гоголдең тыуған яҡтары, Диканька утары аша үтеп, Башҡорт дивизияһы Полтава тимер юл магистраленә сыҡты. Украиндар уны «на левобережную залезныцу» тип атай. Ул Решетиловка станцияһынан 10–12 саҡрымдарҙа ята. Был яҡтағы бөтә ауылдар фронттан ҡасҡан, сигенгән дезертирҙар менән шығырым тулы. Дезертирҙар ауылдарҙы талау, халыҡты йәберләүҙең арьяғына сыҡҡандар. Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә беҙ байтаҡ дезертирҙарҙы тотток. Әммә уларҙың иҫәбе-һаны юҡ, меңәрләгән кеше, үҙе бер армия. Шуға улар менән бер нәмә эшләй алманыҡ. 14-се армияның тылындағы ойоштороу эше шул тиклем насар ҡоролғайны. Тылда ойошторолған частарҙа бер ниндәй ҙә тәртип тигән нәмә күренмәй. Көн һайын меңәрләгән кеше килеп китеп тора. Уларҙың ҡайҙа киткәнен берәү ҙә белмәй. Бында, фронт һыҙығында яҡшы ойошҡан хәрби берәмектәрҙең булмауы бик асыҡ күренә. Полктар ҙа, кешеләр ҙә күп, әммә уларҙан бер файҙа ла юҡ.

Тағын да, Харьков янындағы кеүек күрше частарҙың көсһөҙ булыуы арҡаһында, беҙҙең полктарға ауырға төшәсәк икәнлеге көн кеүек асыҡ.

Тап шулай булды ла. Беҙҙең хәрби операциялар районында 14-се армияның частары тотошлайы менән украиндарҙан тора ине. Улар бөтөнләй хөрт һуғыштылар. Украиндар ҡурҡаҡ йәки һуғыша белмәйҙәр, тимәҫ инем. Уларҙың ғәскәри частарында ойоштороу эше, тәртип бигерәк тә бушаҡ ине. Төп сәбәбе шунда.

Килгән көндөң иртәгәһенә Башҡорт дивизияһы штабынан беҙгә фарман килде. Аҡтарҙың ҙур ғына ғәскәре Полтава ҡалаһын алып, тимер юл һыҙығы буйлап килә икән. Башҡорт дивизияһына контрһөжүмгә күсергә тура киләсәк. Дивизия командирының бойороғо буйынса, 1-се кавполк 1-се пехота полкы менән берлектә юлдың уң яғынан, ә 2-се кавполк 2-се пехота полкы менән һул яҡтан һөжүм итергә тейеш. Башҡорт дивизияһының уң яҡ флангыһынан 55-се Украин пехота полкы аҡтарға ҡаршы һөжүм итәсәк. Уң яҡ хәрби участканың командиры итеп мине, һул яҡҡа 2-се кавалерия полкы командиры Г. Әлишевте тәғәйенләнеләр. Шулай итеп, 55-се полк минең участкаға инде. Ошо рәүешле тимер юл һыҙығы буйлап аҡтарға ҡаршы биш полк һәм дүрт орудиенан торған бер батарея һөжүм итергә тейеш ине.

Эңер төшөүҙән файҙаланып, бөтөн полктар Решетиловка станцияһының янына яҡынлашты. Решетиловка дошман ҡулында ине. Хәрби участкаға урынлашҡас, мин тиҙ генә һағауыл ҡуйҙырып, разведка отрядын ебәрҙем. Төн тыныс үтте. Разведка яҡын тирәлә бер дошманды ла осратмай ҡайтты. Шулай ҙа төн эсендә дошман тураһында әҙмекүпме мәғлүмәт алдыҡ. Беҙгә ҡаршы тимер юл һыҙығында Деникиндың гвардия дивизияһы тора икән. Һуңынан асыҡланыуынса, Деникин командованиеһы башҡорттарға ҡаршы үҙенең иң яҡшы, иң көслө ғәскәрҙәрен — гвардия дивизияһын ҡуйған булған.

Был дивизия студент, кадеттарҙан тупланған. Ә ҡайһы бер роталарын тотошлайы менән офицерҙар тәшкил итә икән.

Таң атыуға ҡаты һөжүм менән Решетиловка станцияһы һәм ауылынан дошманды бәреп сығарырға тигән өҫтәмә фарман алдым. Һөжүмгә күсер алдынан, беҙҙең разведка Решетиловкала дошмандың ҙур ғына ғәскәре тора, уның һағауылдары менән беҙҙекеләр бәрелешкә лә инеп өлгөргән, тип хәбәр итте.

Беҙҙең полктар тәүҙә бер ҡаршылыҡһыҙ алға барҙы. Унда-бында ғына фронт һыҙығында атыштар ишетелә. Полктар араһында элемтә яҡшы һаҡланғайны. Әммә сәғәт өстәргә беҙ аҡтарҙың төп көстәре менән бәрелештек. Решетиловка ауылының ситендә ҡаты һуғыш башланды. 1-се Башҡорт кавалерия полкы районында дошмандың ҡаршылығы һынды, гвардия дивизияһы ҡаса башланы, аҡтарҙың ылау һәм артиллерияһы тәртипһеҙ рәүештә сигенергә тотондо.

1-се кавполк йәшен тиҙлеге менән алға барҙы. Мәрхүм Тихомиров (ул Петроград фронтында һәләк булды) етәкселегендәге 1-се эскадрон ауылға бәреп инде һәм дошманды тураҡлай башланы.

Бик тиҙ һөжүм иткәнгә күрә, беҙ аҡтарҙың тылына барып ингәнбеҙ. Ошо мәлдә башҡа күрше полктар менән элемтә лә юғалды. Мин дошмандың ҡамауына эләкмәҫ өсөн йәйыраҡ барырға бойорҙом. Икенсе

яҡтан ҡасып барған дошманды ла ебәргә килмәй. Сигенгән ғәскәрҙәрҙә үҙенең уты менән ярҙам итеп торған дошман бронепоезының һәм ылауҙарҙың сигенеү юлын киҫергә күп ҡалмағайны. Йылап торорға ваҡыт юҡ. Бер нисә минуттан ылауҙарҙың һәм бронепоездың ҡулдан ысҡыныуы бар. Уны алыу өсөн ике пулемет һәм бер нисә кеше кәрәк ине. Ярҙамсыма һөжүмде дауам итергә ҡушып, поезды ҡулға алыу эшенә үҙем тотондом. Тачанкаға ултыртылған ике «максим» пулеметын, запас патрондар һәм тимер юл полотноһын шартлатыу өсөн пироксилин шашкалар алып, урап киттем. Ярты саҡрым китеп өлгөрмәнек, ике офицер ике пулеметтан ут асты. Күрәһең, уларҙы сигенеүсе ылауҙарҙы һаҡларға ҡалдырғандар. Мин бер пулеметтан сигенеүсе ылауҙарға атырға, ә икенсеһенән әлеге ике пулеметҡа ҡаршы ут асырға ҡуштым. Сөнки улар ылауҙарҙың, ҡасып барған пехотаның юлын ҡырҡып, тимер юлға сығырға ирек бирмәйҙәр. Минең пулеметтар эшкә тотондо. Беҙҙең пулеметтың уты ҡасып барған дошман араһында ҙур паника тыуҙырҙы. Шул уҡ мәлдә һул флангынан ауылға бәреп ингән 1-се эскадрон был паниканы тағы ла көсәйтте. Мин бронепоезды алыу операцияһының һуңғы стадияһына килеп еткәйнем. Әммә ситуация үҙгәреп китте.

Минең пулеметтар тынып ҡалды. Бәхетһеҙ, ике пулеметта ла гильза шартлаған икән. Мин яңы пулемет алып килер өсөн кирегә йүгерҙем. Дошман пулеметсылары миңә ҡарай көслө ут асты. Дошман утына эләкмәҫ өсөн мин атымдан төшөп, ергә ятырға мәжбүр булдым. Пулялар баш осонан шыжлап үтеп тора. Миңә башты ла ҡалҡытырға ирек бирмәйҙәр. Бына бер саҡ пуля уң ҡулымдың терһәк тирәһен тишеп үтте. Яраланып ятҡанда минең полктың һалдаттары килеп етте һәм дошман пулеметсыларын дөмөктөрҙөләр. Әммә һуң ине. Мине лә яралап өлгөрҙөләр. Шуға ҡарамаҫтан, мин атыма атланып, фронт һыҙығын урап сыҡтым. Артабан һөжүм итергә бойороп, командалыҡ итеүҙе үҙемдең ярҙамсыма тапшырҙым. Ярамдан ҡан нығ аға башлағанға күрә, тылға яраны бәйләү пунктына саптым. Нығ ярһығанға күрәлер, ауыртыу ҙа тоймайым. Тиҙҙән яраны бәйләү пунктына килеп еттем, унан дивизия штабына барҙым. Башҡорт дивизияһы штабы фронт һыҙығынан алыҫ түгел бер разъезда тора ине. Бында штаб начальнигы Яҡуп Кәлмитовты осраттым. Уға үҙемдең хәрби участкалағы хәлде тасуирланым. Фронт һыҙығында өҙөлмәй ҡалған элемтәһе аша аҡтарҙың һөйләшкәнен тыңланым, Полтаванан бер генерал гвардия дивизияһы командирына Решетиловканан сигенергә рөхсәт итте, тип һөйләп бирҙе Кәлмитов. Улар, башҡорттар ҡаты һөжүм итә, Решетиловканы тоторға хәлебеҙ юҡ, тип хәбәр иткән Полтавалағы Баш штабҡа, тип өҫтәне. Шулай уҡ 2-се кавполк командиры Әлишев снаряд шартлауҙан нығ контузия алған, уны тылға алып сыҡҡандар икән. Дошман тар-мар ителеп, уны артынан ҡыуырға кәрәк ваҡытта икебеҙҙең дә яраланыуыбыҙға нығ йәнем көйҙө. Санитар поезына барып, ҡулымды бәйләткәс, ярты сәғәттән тағы штабҡа килдем. Фронтта хәлдәр нисек, минең полкым ни хәлдә икәнен белгем килә. Дивизия командиры Ахлау Ахлов: «Башҡорт дивизияһының флангылары асыҡ тороп ҡалған, күрше частарҙың бөтәһе лә фронттан ҡас-

ҡан, дивизиябыҙҙы тиҙерәк ҡамауҙан сығарырға кәрәк», – тип хәбәр итте. Былдай хәл мине шаңҡытты. Бәктиһәң, беренсе атыштар башланыу менән 55-се полк артын да ҡарамай ҡасҡан, ошоноң һөҙөмтәһендә бөтөн күрше частар менән элемтә өҙөлгән. Ә Башҡорт дивизияһы дошманды ҡыуып, фронтты йырып төпкә үтеп ингән икән. Күрше частар ҡасҡан, ә беҙҙекеләр алға барып, флангылары асыҡ тороп ҡалған. Беҙҙең частарға ярҙамға барырға яңы ғына килгән бронепоезды һораным. Рөхсәт алыу менән юлға сыҡтым. Решетиловкаға тиклем тимер юл һыҙығы беҙҙең полктар ҡулында ине. Алты орудиелы бронепоезд төндә утһыҙ, тауыш-тынһыҙ ғына фронт һыҙығына килде. Беҙҙең полктарҙы ҡамауҙан алып сығырға кәрәк. Көндөҙ мин фронтты яҡшы өйрәнеп өлгөргәйнем.

Беҙҙең полктарға тимер юл һыҙығы буйлап тауыш-тынһыҙ ғына сигенергә ҡушылды. Бронепоезд туптарҙан тирә-яҡҡа ут асты. Ошонан файҙаланып, беҙҙең полктар имен-аман дошман ҡулсаһынан сыҡты. Иртәгеһенә бөтә частарыбыҙ тағын да һуғыш сафына теҙелде. 55-се полк та үҙенең урынын алды.

Иртән мин санитар вагонда уянғанда, артиллерия һәм пулеметтар гөрһөлдәй ине. Беҙҙең уң флангыла дошман снарядтары шартлағаны бик асыҡ күренә. Тиҙҙән хужалыҡ частарының эшелондар менән санитар поезы Миргородҡа китте.

Беҙҙең дивизия көнө буйы дошманға ҡаты ҡаршылыҡ күрһәтте, бер нисә тапҡыр контрһөжүм яһаны. Әммә күрше частарҙың сигенеүе, бигерәк тә 55-се полктың паникаға бирелеп ҡасыуы арҡаһында, тағын да ҡамауҙа ҡалмаҫ өсөн Башҡорт дивизияһы сигенергә мәжбүр булды. Алыш барған мәлдә 1-се полктың эскадрондары бер нисә тапҡыр үҙенекендә лә һәм шул уҡ ваҡытта 55-се полктың участкаһына барып дошмандың һөжүмен кире ҡаҡты. Бер нисә мәртәбә 55-се полктың ҡасып барған һалдаттарын туҡтатып ҡараны, әммә файҙаһы булманы. Улар фронтты ташлап ҡасып, бер көн эсендә Миргород янына тиклем барып етте. Мин хужалыҡ частары менән Ромодан станцияһына сигендем, унан Лубны ҡалаһына.

Мин артабанғы һуғыштарҙа туранан-тура ҡатнашманым. Дивизияның хужалыҡ частарына етәкселек иттем. Дивизия штабы менән полк штабтары араһында бәйләнеш тоттом. Шуға ла фронттағы хәрби операцияларҙы күҙәтеп барырға мөмкин булды.

Төнгә тиклем хужалыҡ частары эшелондары менән Ромодан станцияһында торҙом. Беҙҙең дивизия кискә тиклем бер аҙым да артҡа сигенмәй дошман менән алышты. Күрше частарҙың тылға ҡасыуы арҡаһында, дивизия тағы дошман ҡулсаһында ҡалды. Кисен беҙҙең полктар Гоголевка станцияһы яғына сигенде. Дивизия штабы Миргород станцияһына күсте. Төн сығыуға беҙҙекеләр тағы һуғыш участкаһында урын алды. Таң атыу менән шашҡан дошман бөтөн фронт буйынса һөжүмгә күсте. Әҙерәк атышып өлгөрмәҫтән 55-се полк фронт һыҙығынан һыпыртты. 1-се полк уларҙы туҡтатырға маташып ҡараны, әммә файҙаһы булманы.

Хәҙер инде бер кемдән дә ярҙам көтөү юҡ. Фронт һыҙығында дүрт башҡорт полкы ғына тороп ҡалды. Беҙҙекеләр дошманға бик ҡаты ҡаршы торҙолар. Тик кискә генә Миргородҡа сигенделәр. Миргородтан Ромодан станцияһына сигенеү — иң яҡшы стратегик пунктты һәм узловая станцияны дошманға ҡалдырыу тигәнде аңлата ине.

Башҡорттар Миргородтан сигенмәнеләр. Дошман нисек кенә тырышып ҡарамаһын, көсәнеүе файҙаһыҙ булды. Башҡорттар ҡурҡаҡтарҙан түгел, улар дошмандың гвардия кавалерия дивизияһының бөтөн атакаларын кире ҡаҡты. Күршеләр күптән ҡасҡан, Башҡорт дивизияһының флангылары асыҡ. Шуға күрә дошман беҙҙең дивизия һәм Миргород ҡалаһын уратып үтергә булды. Икенсе тәүлек тигәндә украин частары йөҙ саҡрымға тиерлек тылға сигенгәндәр. Ә башҡорттар һаман Миргород янында һуғыша. Дошман Башҡорт дивизияһын дүрт яҡтан да ҡамауға алды. Әммә тар-мар итә алмай. Дивизияның штабы 30 вагонлы эшелонда тора ине. Штабтың тылындағы тимер юл күптән аҡтар ҡулында. Әле телефон сымдары өҙөлмәгән, шуға мин Лубны ҡалаһынан дивизия штабы менән бер туҡтауһыҙ бәйләнештә торам. Кәлмитов менән Ахлов дивизия ҡамауҙа ҡалды, ҡулсаны нисек йырып сығырға белмәйбеҙ, тип миңә хәбәр иттеләр. Ярҙамға берәй бронепоезд һәм пехота частарын ебәреүҙе һорайҙар. Сөнки Миргород менән Ромодан араһындағы тимер юлды дошмандан таҙартырға кәрәк. Был бик тә ауыр мәсьәлә булып сыҡты, сөнки Башҡорт дивизияһының тылында резерв частар юҡ ине.

Мин ниндәйҙер армия штабынамы, әллә Реввоенсоветтың штабынамы шылтыратып, Башҡорт дивизияһына ярҙам итеүҙәрен һораным. Пехота йә кавалерия менән ярҙам итә алмаҫбыҙ, бер бронепоезд ебәрәбеҙ, тинеләр. Тиҙҙән бронепоезд килеп тә етте. Хужалыҡ частарында булған барлыҡ һалдаттарҙы ултыртып, Ромодан – Миргород юлына ебәрҙем. Оҙаҡ тормай бронепоезд кире ҡайтты. «Юлда дошмандың ҙур ғына ғәскәренә тап булдым, әҙерәк атышҡандан һуң кире боролорға тура килде. Сөнки ҡараңғы төштө, ә поезды арттан ҡаплаусы юҡ», — тип аңлатты бронепоезд начальнигы.

Телефон элемтәһе әле өҙөлмәгән. Мин, бронепоезд ярҙамға килә алманы, тип дивизияға хәбәр иттем. Яҡын тирәлә һеҙгә ҡаршы торорлоҡ дошмандың частары юҡ, шуға үҙегеҙ ҡамауҙан сығып ҡарағыҙ, тип кәңәш бирҙем. Егерме минуттан телефон бәйләнеше лә өҙөлдө. Ҡамауҙа ҡалған дивизияның яҙмышы билдәһеҙ ине.

Мин Лубнылағы власть вәкилдәре менән бәйләнешкә инергә булдым. Әммә бөтәһе лә ҡаланан киткән. Станцияла милиция начальнигын ғына осраттым. Ул, ҡаланан бөтәһе лә китте инде, дошмандың разведка отрядтары яҡын-тирәләге ауылдарҙы ала башлаған, беҙҙең частар күптән Лубны ҡалаһының аръяғына сигенде, тине. Мин тиҙ генә хужалыҡ частарына ҡаланан китергә бойорҙом.

Бер нисә тәүлек буйына хужалыҡ частары менән дивизия араһында элемтә булманы. Өсөнсө тәүлек киткәндә, мин хужалыҡ частары менән Бахмач станцияһына килдем. Был мәлдә бөтөн Башҡорт дивизияһы

дошман тылының төбөндә ҡамауҙа ине. Өсөнсө тәүлектә дивизия бер туҡтауһыҙ ҡаты бәрелештәр менән ҡулсаны йырып сыҡҡан. Дивизия штабының Миргород яғынан тылы ҡамалғас, вагондарҙан ылауҙарға күсеп, дүрт полкты ла үҙенең тирәһенә туплап алға ынтылған. Дошман Башҡорт дивизияһын туҙҙырып, тар-мар итеү өсөн нисек кенә тырышып ҡарамаһын, башҡорттар ҡурҡып-ҡаушап ҡалмаған, аҡтарҙың һәр һөжүмен кире ҡағып торған. Башҡорттар алдында йә һәләк булыу, йә юғалтыуҙарға ҡарамай ҡулсаны йырып сығыу тигән дилемма тора. Ҡулында ҡоралы булған саҡта башҡорт меҫкенләнеп әсирлеккә бирелә торғандарҙан түгел. Командирҙар, комиссарҙар, һалдаттарҙың берҙәмлеге, полктарҙың ойошҡанлығы арҡаһында ҡыйынлыҡтар кисереп, байтаҡ юғалтыуҙар менән дошмандың үлемесле тырнағынан ысҡына алды.

Бына ошондай ҡаты һуғыштар арҡаһында дивизияның составы күпкә кәмене. Яңы һалдаттар менән тулыландырыу юҡ. Сөнки был осорҙа Башҡортостан территорияһы яңы ғына дошмандан азат ителгәйне. Унда яңы башҡорт частары ойошторолоп ятҡан мәл. Юғары командование ни өсөндөр, Башҡорт дивизияһын расформировать итеп, берәй украин дивизияһына ҡушыу уйына килгән.

Һуғышсан ғәскәри берәмекте 55-се украин полкы кеүек тарҡау частарҙың араһына таратырға ниәтләүҙәре – үҙең ултырған ботаҡты сабыу менән бер күренде».

Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы 1919 йылдың июль – август айҙарында Көньяҡ фронттағы ҡанлы һуғыштарҙа байтаҡ ҡына юғалтыуҙар кисерә. Өҫтәүенә, 14-се армия август аҙағында Башҡорт дивизияһын ике йыйылма полкка, кавалерия һәм уҡсы полктарына берләштереп, үҙ ҡарамағына алып ҡала. Ә дивизияның штабын Башҡортостанға ебәрә.

Шулай итеп, өс ай буйы алһыҙ-ялһыҙ ҡанлы яуҙарҙа йөрөп, күпме ыҙалар кисереп, бына, ниһайәт, Башҡортостанға ҡайтырбыҙ, тип йөрөгән башҡорт һалдаттарының өмөтөн тамам һүрелтә, рухын төшөрә. Уларҙың нисек тә булһа рухын күтәреү, өмөтөн уятыу, килеп сыҡҡан сәйәси хәлде аңлатыу маҡсатында Башревком ағзалары ошондай хат менән мөрәжәғәт итә:

Товарищам Башкирским красноармейцам, сражающимся на Южном фронте

Дорогие товарищи!

...Главкомом тогда еще состоял Вацетис, который мало считался с национальными частями и немного обращая внимание на политическую сторону своего решения – решение перебросить Вас на Юг; к тому же дела на Восточном фронте быстро поправлялись, а на Юге враг угрожал Харькову; тут, конечно, очень было естественным перебросить в опасное место башкирские части, о героических подвигах которых все знали. А ведь и мы говорили, что Вы будете сражаться на Восточном фронте, выходило как будто и мы Вас обманываем; нет, товарищи,

ни Центральная Советская власть, ни мы, ни Вас, ни, тем более, весь Башкирский народ обманывать не можем. Переброска Вас на Юг явилась как бы испытанием, экзаменом революционности, верности башкир, и этот экзамен башкирские красноармейцы и весь башкирский народ в Вашем лице, товарищи, блестяще выдержал. Слава Вам, Орлы Южного Урала, доблестные герои Великой Революции! Вас история не забудет!

Не думайте, товарищи, – когда Вас бросают в опасные места и Вы сквозь огонь врага, оставленные другими частями, храбро пробиваетесь опять к своим, что все это остается ни при чем, – нет, товарищи, все Ваши подвиги всем известны – все видят, знают это и оценивают. Товарищи, в настоящее время башкирские красные части центром очень высоко ценятся, почти каждый день пишут о башкирских красных героях в газетах; шлют им приветствие тов. Троцкий, Зиновьев и другие. Отдельная Башкирская армия, товарищи, безусловно, будет сформирована, и Вы будете совместно с другими товарищами красноармейцами-башкирами составлять единую часть этой Армии. О Вашем переводе с Юга мы здесь еще сильнее похлопочем...

...Муртазин 27-го августа перешел опять к нам с Башкирской кавбригадой и сражается на фронте (в бригаде было около 2 000 башкир). С мобилизованными и частями Муртазина теперь у нас имеется до 20 000 войска, надеемся довести до 40 000. Есть, конечно, у нас и артиллерийские части».

Әммә Көнсығыш фронт урынына Троцкий бөтә башҡорт ғәскәрҙәрен Петроградҡа тупларға бойора. 1919 йылдың август аҙағында Башҡорт кавалерия дивизияһы штабы ҡайтып барған еренән Петроградҡа оҙатыла. Ә инде октябрҙә Көньяҡ фронттағы йыйылма башҡорт полктары ла Петроградҡа ташлана.

Башҡорт ғәскәрҙәре Петроградта

1919 йылдың 30 авгусында Реввоенсовет рәйесе Троцкий Мәскәүҙәге Башҡортостан вәкилдәрен саҡыртып алып, бөтә башҡорт ғәскәрҙәре Петроградҡа күсереләсәге тураһында хәбәр итә. *«Он заявил, что РВСР считает необходимым и почему предлагает Башревкому и Башвоенкомату о переброске одной башкирской бригады на Петроград для охраны революционного порядка столицы. Эту переброску он мотивирует, кроме военной и политической точки зрения, как то: ознакомление башкир с революционной массой рабочих города Петрограда и расширение их умственного кругозора. С своей стороны, мы подробно и ярко описывали положение башкирского элемента на Востоке и том терроре, который производится над башкирами, и о значении башкирского Востфронта. Но, несмотря на это, нам не удалось отстоять своего»,* — тип хәбәр итә Стәрлетамаҡҡа, З. Вәлидиҙең урынбаҫары Әүхәҙи Ишмырҙинға, Әбдрәшит Бикбауов.

Бынан тыш Троцкий Башҡортостанға ҡайтып барған Башҡорт кавалерия дивизияһы штабын Петроградҡа борорға ҡуша. 30 августың кисендә Петроградҡа дивизия начальнигы Ахлау Ахлов менән комиссар Нуриәғзәм Таһиров килеп етә. Шул төндә үк Әбдрәшит Бикбауов Ахлов һәм Таһиров менән бергә тағы бер тапҡыр Троцкийға инеп сыға. Ләкин улар Троцкийҙы уйынан кире ҡайтара алмай. Реввоенсовет рәйесе башҡорт ғәскәрҙәре Петроградҡа күсерелеп, унда дивизия һәм бригаданы ойоштороу эше ошонда башҡарыласаҡ, тип хәбәр итә.

Тәүге мәлдә Петроградта 10 мең тирәһе башҡорт ғәскәрен тупларға, артабан уларҙың һанын 20 меңгә еткерергә уйлай Троцкий.

1 сентябрь «Правда» гәзитендә Троцкий былай тип яҙып сыға: *«В числе тех дивизий, какие мы теперь перебрасываем на петроградский фронт, башкирская конница займет не последнее место, и, в случае покушения буржуазных финнов на Петроград, красные башкиры выступят под лозунгом — на Гельсингфорс! (Хельсинки. — А. Я.)».*

Ә инде 11 сентябрь Үҙәк совет хөкүмәте башлығы Ленин Башревкомға башҡорт ғәскәрҙәрен Петроградҡа ебәрергә ҡушып, телеграмма һуға:

«Сейчас, когда решающие победы Красной Армии на Востоке обеспечили свободное развитие башкирского народа, решение Реввоенсовета Республики о переводе некоторых башкирских частей

в Петроград приобретает исключительное политическое значение. Хищные империалисты увидят, что пробужденные народы Востока поднялись на защиту центров пролетарской революции. В то же время тесное общение вооруженных башкир с рабочими Петрограда обеспечит тесную связь и взаимное уважение в духе коммунизма. Выражаю глубокую уверенность в том, что ревком Башкирской республики и все передовые товарищи башкиры приложат все усилия к тому, чтобы переброска башкирских частей была проведена в кратчайший срок и с наименьшим обременением для железнодорожного транспорта. Прошу передать братский привет красноармейцам-башкирам».

1919 йылдың сентябрь айында Петроградта Башҡортостандан килгән ғәскәрҙәр менән Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы яңынан тулыландырыла. Дивизияның составында 1-се, 2-се, 3-сө кавалерия полктары һәм техник эскадрон ойошторола. Бынан тыш Бәләбәйҙә ойошторолған Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы ла сентябрь айында Петроградҡа оҙатыла. Уның составында 1-се, 2-се, 3-сө уҡсы полктар һәм бер артдивизион була. *«Атлы дивизия боронғо конный казармаға (лейб-гвардия Атлы полктың казармаһында.* – А. Я.*), дивизия штабы боронғо батша заманында булған япон консуллығына урынлашты. Уҡсы бригада ғәскәрҙәре Выборг яғында патрон заводында, штабы тәүҙә Литейный урамында, унан һуң ҡаршы урамда бер граф йортонда урынлашты»*, – тип яҙа «Петроград өсөн көрәштә башҡорттар» китабында Башҡорт уҡсы бригадаһы комиссары Ғабдулла Ибраһимов. Петроградҡа тупланған башҡорт ғәскәрҙәренең һаны 11 меңгә барып баҫа. Бөтә башҡорт ғәскәре Петроград гарнизонында тора һәм Петроград нығытылған районының хәрби советына буйһондорола. *«11 меңлек был көстөң 6233 һалдаты һуғышты, ҡалғандары ярҙамсы, йөк ташыусылар һәм башҡалар ине»*, – тип яҙа Зәки Вәлиди.

Юденич армияһы ҡыҙылдарҙы ҡыйратып, Петроградҡа яҡынлашҡан осорҙа башҡорт ғәскәрҙәренең килеүенә Петроград советы ныҡ ҡыуана. Был хаҡта Троцкий Зәки Вәлидигә ебәргән телеграммаһында былай тип яҙа: *«Мое сообщение на заседании Петроградского совета о том, что в состав Петроградского гарнизона войдут башкирские части, вызвало бурное приветствие по адресу Башкирского трудового народа. От имени Петроградского совета товарищ Зиновьев провозгласил, что башкиры будут приняты как братья».*

Ысынлап та, Петроград халҡы башҡорт ғәскәрҙәрен яҡшы ҡаршылай. *«Петроград вокзалында беҙҙе сафҡа теҙеп, ҡала урамы буйлап алып киттеләр... Патрон заводы янына барып туҡтаныҡ, халыҡ беҙҙе ҡапҡа төбөнә тиклем оҙатып килде»*, – тип яҙа Башҡорт уҡсы бригадаһы яугиры. Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры А. Ахлов та: *«Отношение Петрограда выше всякого ожидания. Вообще Петроград встретил нас, исключая буржуазию, очень и очень радушно, не как на Украине»*, – тип хәбәр итә Башҡортостанға.

Башҡорт кавалерия дивизияһы комиссары Нуриәғзәм Таһиров Петроградҡа килеү менән «Салауат» исемле башҡорт ғәскәрҙәре гәзитен сығарыуҙы юлға һала. Дивизияның сәйәси бүлеге Петроградҡа килгән башҡорт ғәскәрҙәрен вокзалда «Салауат» гәзите менән ҡаршылай.

Алда әйтелгәнсә, Троцкий башҡорт ғәскәрҙәрен Петроградҡа туплауҙың ҙур сәйәси әһәмиәткә эйә булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала. Уларҙы ошо йәһәттән ҡулланырға тырыша, һәр ерҙә башҡорттарҙы фотоға төшөрәләр, гәзиттәрҙә яҙалар. *«Башҡорттарҙы тәүге айҙарҙа Юденич ғәскәренә ҡаршы бер пропаганда сараһы хәлендә файҙаландылар. Сөнки башҡорттар һуғышсан, мәшһүр ҡәүем. Шуға ҡыҙылдар аҡтарға башҡорт ғәскәрҙәре килеүен ҙурайтып күрһәтергә тырышты»,* — тип яҙа Зәки Вәлиди. Әйтергә кәрәк, ошо пропаганда һөҙөмтәһендә башҡорт ғәскәрҙәре тарихын өйрәнеү өсөн ҡиммәтле ҡомартҡылар, күп фотоһүрәттәр һаҡланып ҡалған.

Ҡыҙылдар башҡорт ғәскәрҙәрен Петроградҡа туплап, Финляндия һуғыш асҡан осраҡта, фин армияһына ҡаршы ҡуйырға уйлайҙар. Мәҫәлән, 7-се армияның Башҡорт кавалерия дивизияһы һалдаттары ебәргән мөрәжәғәтендә һүҙ тап ошо турала бара:

КРАСНЫМ СОЛДАТАМ БАШКИРСКОЙ ДИВИЗИИ

Братья!

Вы пришли на защиту Красного Петрограда. Вы пришли для того, чтобы рука об руку, плечом к плечу с Петроградскими рабочими отстаивать Петроград от белых разбойников.

Несколько месяцев назад под стенами Петрограда уже стояли озверелые белые шайки. Вожаки белых банд уже надеялись, что вот-вот возьмут Петроград. Но Красная Армия дала им достойный отпор. Белые банды отогнаны от Петрограда. Красные полки взяли два главных оплота белых, города Ямбург и Псков, и ведут наступление на последнее разбойничье гнездо – Гдов.

Но опасность для Петрограда еще не миновала. В 30-и верстах от Петрограда находится граница с Финляндией. На этой границе белые собрали свои войска и грозят ударить на Красный Петроград. Эти негодяи еще не решаются выступить против нас, но они то и дело открывают огонь по нашим цепям в границе. Они посылают свои аэропланы на младшего брата Петрограда, его ближайшего соседа – Кронштадт, сбрасывают бомбы, убивают мирных жителей, детей, женщин и стариков.

Нет больших негодяев и убийц, чем финские буржуи! Полтора года тому назад финские рабочие восстали, подняли над Финляндией красное знамя, стали так же, как и мы, сами управлять своей страной. Но они были еще слишком слабы. А финские буржуи продали свою страну и позвали на помощь войска германского царя. Германские батальоны

раздавили красных финских рабочих. Белая шайка торжествовала победу. Финские буржуи, как звери, расправлялись с нашими братьями – финскими рабочими. Они перекололи, перестреляли, перевешали 20 000 рабочих. Они убили множество стариков, женщин и детей. Они послали на каторжные работы всех взятых ими в плен красных. Они снова стали давить и притеснять рабочий народ Финляндии.

Финские буржуи купаются по горло в крови финских рабочих. Но они дрожат, как бы рабочий народ снова не восстал против их власти. Германского царя больше нет. Финские буржуи ползают теперь на животе перед английскими, французскими и американскими буржуями. Они лижут сапоги английских генералов. Они вымаливают у них помощь против финских рабочих. Финские буржуи продались английским и французским мироедам – капиталистам. Финские белогвардейцы – цепные собаки английских, французских и американских буржуев.

Для английских буржуев Красный Петроград – бельмо на глазу. Петроград – первый город, в котором трудящиеся сбросили иго капиталистов и помещиков. Вслед за петроградскими рабочими стали подыматься трудящиеся в других городах и странах. Петроград – главная крепость трудового народа. Английские разбойники хотят во что бы то ни стало взять Красную народную крепость – Петроград.

Но английские войска не хотят идти в поход на Петроград. Ни один английский солдат не хочет войны с Советской Россией. Английские буржуи спускают с цепи своих наймитов – воинских белогвардейцев. Английские генералы командуют финским генералам: «Взять Красный Петроград!»

Уже много времени финские белогвардейцы держат свои банды на нашей границе. Уже много времени они обстреливают по границе наши передовые цепи. Уже давно Красный Петроград находится под угрозой.

Пора кончать с финскими буржуями! Пора раз и навсегда отбить у них охоту вступать на Советскую землю.

Мы не хотим войны. Мы не будем стрелять первыми. Но если хоть один финский белый солдат переступит нашу границу – горе финским буржуям. Они дорогой ценой заплатят за свой налет. Они ответят своими головами за все свои преступления и убийства. Мы отомстим им тогда за перебитых и замученных финских рабочих, за детей, убитых в Кронштадте, за все их зверства и насилие. Ни один финский буржуй не останется в живых. Ни один белогвардеец не получит пощады. Тогда – смерть убийцам. Тогда – горе финским буржуям.

Братья-башкиры! Станьте стеной на защиту Красного Петрограда, как скала у его стен. И будьте готовы в любое время двинуться беспощадным походом на финских разбойников. Будьте готовы к победоносной атаке на осиные гнезда финских белогвардейцев – Выборг и Гельсингфорс.

Финские белогвардейцы – родные братья русских белогвардейцев. Колчак, Деникин, Юденич и финские генералы – одна золотопогонная свора. Все они хотят одного: вернуть старые порядки, снова притеснять

рабочих и крестьян. Финские генералы говорят адмиралу Колчаку: «Мы будем давить финских рабочих, а ты души русских, украинских, татарских, башкирских рабочих и крестьян. Ты грабь в одном конце улицы, а мы будем грабить в другом конце».

Красная советская республика дала свободу башкирскому трудовому народу. Советская власть родилась в Петрограде, в Петрограде была в первый раз объявлена независимость угнетенных народов. Петроградские рабочие больше всех сделали, чтобы развязать веревки, которыми были связаны малые народы. Петроградские рабочие больше всех сделали, чтобы освободить тружеников-башкир.

Кто враг Советской России, тот враг башкирского трудового народа. Кто идет войной на петроградских рабочих, тот идет войной на башкирский трудовой народ. Кто хочет взять Красный Петроград, тот душит свободу трудящихся Башкирской советской республики.

Товарищи-башкиры! Вы показали образцы храбрости на Южном фронте. Вы показали свою силу генералу Деникину и его бандам. Покажите теперь финским буржуям, как тяжела рука трудового народа.

Привет славным бойцам Башкирской дивизии!
Да здравствует Красный Петроград!

Политический Отдел VII армии

1919 йылдың октябрь урталарына фронтта хәлдәр ҡатмарлаша төшә. Юденич армияһы ҡыҙылдарҙың 7-се армияһын ҡыҫырыҡлап Петроград янына килеп етә. Петроград нығытма районы (укрепрайон) коменданты Авровтың фарманы менән Юденичҡа ҡаршы һуғышҡа Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмө ойоштоҡолоп, фронтҡа оҙатыла. Башҡорт төркөмөнә Башҡорт дивизияһынан 3-сө кавалерия полкы (ике йәйәүле (360 штык) һәм ике атлы (240 ҡылыс) эскадрондар), Башҡорт уҡсы бригадаһынан 3-сө уҡсы полктың 3-сө батальоны (575 штык) һәм Башҡорт артдивизионы бүленә. Төркөмдөң командиры итеп Хәлил Әлишев, комиссары Ғәли Тереғолов һәм штаб начальнигы итеп Яҡуп Кәлмитов тәғәйенләнә. Төркөмдөң ғәскәрҙәрен 15 октябрь көнө Петроград нығытылған районы һәм башҡорт ғәскәрҙәре командалығы тантаналы рәүештә фронтҡа оҙата.

Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмөнә айырым һуғыш майҙаны (боевой участок) бирелә. Башҡорттар Юденич армияһы һөжүменең төп йүнәлешенә ҡуйыла. Төркөмдөң штабы Петроградтан йыраҡ түгел Пулково ҡалҡыулығында обсерваторияла урынлаша. Башҡорт төркөмө ғәскәрҙәре тәүҙә 7-се армияның 6-сы, артабан 2-се уҡсы дивизияһына буйһондорола.

Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмө 19 октябрҙә һөжүмгә күсергә тигән бойороҡ килә. Башҡорттар командованиеның һәр бер ҡушҡан фарманын теүәл үтәй. Әммә һөжүм ваҡытында күрше ғәскәрҙәрҙең артта тороп ҡалыуы, йә сигенеүе арҡаһында башҡорт полктарына йыш ҡына ҙур

юғалтыуҙар кисерергә тура килә. Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмө командиры Хәлил Әлишев үҙенең докладында бына нимә тип яҙа:

«22-го октября был получен приказ от Начдива 6-й стрелковой за № 0232, где вверенной мне группе было приказано занять фронт у отметки 35,2 исключительно Б. Карлино исключительно. Наступление начать в 7 часов утра и продолжать в течение часа. Во исполнение чего мною эти пункты были заняты и было оказано содействие продвижению 2-й дивизии, чтобы выйти на линию Б. Карлино и София, причем 3-м Кав. Башполком после упорного боя была занята дер. Хамиляйне, но опять-таки вследствие больших потерь из числа комсостава и красноармейцев удержаться в дер. Хамиляйне не удалось и под сильным ружейным, пулеметным артогнем противника отступил и занял исходное положение в дер. Венерязи. В деле были ранены командир эскадрона тов. ГОРЯЧЕВ, командир взвода 3-го Кав. Башполка тов. ЛОБУТОВ был сильно контужен, а красный офицер КАЛИРИН был ранен, причем было потеряно ранеными, убитыми и контужеными около 70 красноармейцев этого же полка. ***Во время всех этих операций правофланговые части от моей группы отставали в продвижении вперед, а потому частям вверенной мне группы приходилось часто попадать под фланговый и перекрестный огни противника, вследствие чего частям приходилось часто менять направлении своего наступления и рвать части то в одну, то в другую сторону, почему и терялась боеспособность частей, но благодаря тому, что умело вели операцию в частях, комсостав и красноармейцы точно исполняли их приказы, несмотря ни на какие усталости и мучения, вырывались из ворвавшихся пунктов, от противника».***

Шундай уҡ хәл 29 октябрь көнө тағы ҡабатлана, күрше полктың сигенеүе арҡаһында Башҡорт төркөмөнөң уң яҡ флангыһы асыҡ тороп ҡала: *«29-го октября на участке 6-й стр. дивизии Насквориць, Кипень и далее. Приказом по правому боевому участку за № 9 от 29.10. было мне приказано с 3-х часов утра перейти в решительное наступление и занять дер. Показенпурского, Новопудость, Б. Пудость, Мюлякьюля, держа связь вправо и влево, продолжать выступление в общем направлении на дер. М. Калпано. Во исполнение чего части 3-го стр. Башполка совместно с одним эскадроном 3-го Кав. Башполка и отд. эскадроном Петроградского Губревкома при 3-х орудиях должны были перейти с другими частями в решительное наступление на вышеуказанные дер. Остальные части 3-го Кав. Башполка составляли групповой резерв.* ***Части вверенной мне группы начали было продвигаться, но противник, перейдя в контрнаступление, сшиб с занимаемой позиции 6-й стр. полк, который действовал правее нас, и 6-й стр. полк под давлением противника отошел из дер. Иля-Пурского, но вверенные мне части не смутились отходом 6-го стр. полка и крепко удерживали занимаемую ими позицию, и ввиду отхода справа 6-го***

стр. полка и ввиду непродвижения слева 3-го стр. Петроградского полка вверенная мне группа, дабы не очутиться в мешке, не продвигалась вперед, ни на шаг не отступая, удерживала занимаемую позицию».

6-сы уксы полкы ташлап сигенгән ауылды иртәгеһенә башҡорттарға байтаҡ юғалтыуҙар менән яулап алырға тура килә: *«...части 2-го батальона 3-го стр. Башполка совместно с одним сводным эскадроном 3-го Кав. Башполка повели наступление на дер. Показенпурского и с боем заняли дер. Иля-Пурского, откуда 6-й стр. полк отошел 29-го октября, между прочим в этих боях было много потерь, которых тут же выяснить не удалось, и части, взяв Иля-Пурского, сдали таковое Коммунистическому отряду, а сами отошли на старые позиции».*

31 октябрь 6-сы уксы полкка ышанып, 3-сө Башҡорт полкының 3-сө батальоны һәләкәткә осрай: *«31-го октября с. г. приказом по правому боевому участку за № 11 приказано было к 8 часам утра сосредоточиться на хуторах, что юго-западнее от дер. Ново-Пурского, имея прочную связь с правым боевым участком, а противник продолжал все упорно сопротивляться нашему наступлению, особенно на участке 6-й дивизии, где он переходил в контрнаступление в направлении Кол. Кипень Ропша. Во исполнение этого приказа мною было приказано: один батальон 3-го стр. Башполка оставить в дер. Иля-Пурского в распоряжении командира 160-го стр. полка, а другой батальон оттянуть в резерв на хутор, что юго-западнее дер. Ново-Пурского, а также частям 3-го Кав. Башполка и 162-му стр. полку сосредоточиться, также установив со мною тесную связь, заняв хутора, резервные части приводились в порядок.* ***На этих хуторах строений никаких не было, а потому части были расположены на улицах, оттого противник значительными силами при сильном артиллерийском огне ворвался в прорыв со стороны Скворищ между дер. Иля-Пурского и Ново-Пурского, где должны были быть передовые части 6-го стр. полка, но последней там не оказалось, а противник, воспользовавшись этим случаем, внезапно нанес с тылу 3-му батальону удар, который был расположен у дер. Иля-Пурского, и на резерв 2-й роты 162-го стр. полка находящиеся в хуторах, что юго-западнее от дер. Ново-Пурского, были разбиты окончательно, был убит комиссар 3-го батальона 3-го стр. Башполка и командир 162-го стр. полка тов. БЕРЕЗИН был ранен. Ставя части в резерве, не было дано мне никаких указаний начальником моим тов. ГИРШФЕЛЬДОМ, на мой вопрос «что они должны делать?» отвечено было: «должны держать связь с передовыми частями». Цепи же впереди не было, почему и были потеряны части».***

Артабан Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмөн бер ғәскәрҙән икенсеһенә буйһондороп йөрөтәләр. Хәлил Әлишев былай тип дауам итә докладын: *«1-го ноября согласно приказа по правому боевому участку за*

№ 12 я оттянул части в резерв в М. Ивановку, придав 3-й Кав. Башполк в распоряжение командира 162-го стр. полка, который и действовал совместно со 160-м стр. полком.

2-го ноября было приказано мне резервные части передвинуть в дер. Ново-Пурское, что и было исполнено точно.

3-го ноября с.г., получив приказание от тов. ОДИНЦОВА телефонограмму за № 8, я оставил 3-й Кав. Башполк в подчинении тов. ГИРШФЕЛЬДА, сам со Штабом группы и с 3-м стр. Башполком перешел в Красное село в распоряжение начальника Красносельского участка тов. БЕЗЦОВА, куда в мое распоряжение уже влилась одна рота сводного Башкирского стрелкового полка и еще один 1-й батальон 3-го стр. Башполка. Но ввиду того, что БЕЗЦОВ сдал комбригу Запасной тов. БОГРАМОВУ, чтобы легче было произвести учет людей в полках, приказал 3-му стр. Башполку передвинуться в дер. Б. Тайцы, оставив в Красном селе одну роту Сводного Башкирского полка, а сам со Штабом перешел в дер. Новые места при ст. Тайцы, где части приводил в порядок».

9 ноябрҙә 7-се армияның фарманы буйынса, 3-сө Башҡорт кавалерия полкын 2-се дивизия командиры Одинцов ҡарамағында ҡалдырып, Х. Әлишев ҡалған ғәскәрҙәр менән Карел участкаһына юллана: *«...получил распоряжение по телефону от командира 7-й армии совместно со Штабом группы, ротой Сводного стр. Башполка и 3-м стр. Башполком отправиться на ст. Ливашево в распоряжение начальника Карельского участка. Откуда по распоряжению 7-й армии рота Сводного Башкирского стр. полка и Штаб группы были оттянуты в гор. Петроград, а 3-й стр. Башполк оставлен там, по прибытии в Петроград, где я расформировав Штаб группы, приступил к прямым своим обязанностям Комбрига Отдельной Кавалерийской Башкирской дивизии».*

Октябрҙең 20-ләрендә Петроградҡа Көньяҡ фронттан йыйылма кавалерия һәм уксы башҡорт полктары килеп етә. Был полктар Петроградтан 30–40 саҡрымдар тирәһендә, Колпино-Гатчина районында ҡыҙылдарҙың удар төркөмө составында һуғыша. Башҡорт командованиеһы уларҙы Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмөнә биреүҙе һорап, Троцкийға мөрәжәғәт итә. Реввоенсовет рәйесе мөмкинлек сығыу менән төркөм ҡарамағына күсерергә вәғәҙә итә.

6-сы уксы дивизия ҡарамағында ҡалған 3-сө Башҡорт кавалерия полкы сигенгән Юденич ғәскәрҙәрен ҡыуып, 14 ноябрь Ямбург ҡалаһын алыуҙа ҡатнаша. И. И. Слатин «Из боевого прошлого башкирского народа» тигән хеҙмәтендә 3-сө Башҡорт кавалерия полкының батырлығын былай тип тасуирлай: *«14 ноября с востока и юго-востока были прорваны сильно укрепленные позиции противника у г. Ямбурга, в 14 часов 20 мин. в город ворвался 15-й стрелковый полк. На городской окраине завязался бой. Это была последняя жестокая схватка. Первый эскадрон 3-го Башкирского кавполка под командой командира полка т. Грязнова в конном строю ворвался в*

город. Скачущие всадники-башкиры с обнаженными клинками в руках и с воинственными криками произвели на деморализованных белых солдат ошеломляющее впечатление. Многие белогвардейцы сразу бросали винтовки, иные срывали погоны и кидали их на землю, поднимая руки вверх...»

1919 йылдың декабрендә ҡыҙылдар Юденич армияһының ҡалдыҡтарын Нарва йылғаһының аръяғына, Эстонияға ҡыҫырыҡлап сығара. Артабан хәлһеҙләнгән 7-се армия ғәскәрҙәрен эстон армияһы үткәрмәй. Ғинуар башында Эстония менән солох төҙөлгәс, Башҡорт кавалерия полкы Петроградҡа, Башҡорт кавалерия дивизияһы ҡарамағына юллана. 23 ғинуар тантаналы рәүештә Петроградҡа барып инә.

Башҡорт ғәскәрҙәре Петроград өсөн һуғышта күпме юғалтыуҙар кисергән һуң? 1919 йылдың 20 декабрендә Зәки Вәлиди түбәндәге мәғлүмәттәр килтерә: *«В Петрограде во время моего пребывания, 1 декабря, было всего 8 295 человек во всей Башгруппе, потери, главным образом ранеными, насчитывались в боях под Петроградом 2 142 человека. Из того числа 3-й кавполк находится под Нарвой, 3-й стрелковый полк на Финляндской границе, а остальные в резерве. Прибыло пополнения со мной 130 чел., после меня 530. Итого в настоящее время на Петроградском фронте 8 938 человек».*

Петроград халҡы башҡорт ғәскәрҙәренең ҡаланы һаҡлауҙа һәм дошманды ҡыйратыуҙағы батырлығын юғары баһалай. Петроград советы башҡорт ғәскәрҙәре өсөн тантаналы йыйылыш үткәреп, рәхмәт йөҙөнән исемләп байраҡ бүләк итә. Башҡорт кавалерия дивизияһы комиссары Нуриәғзәм Таһировты Калинин ВЦИК исеменән ҡиммәтле эйәр менән бүләкләй, Башҡортостан хәрби комиссары урынбаҫары Әүхәҙи Ишмырҙинға исемләп ҡылыс тапшырыла. Башҡорт уҡсы бригадаһы комиссары Ғабдулла Ибраһимов, ҡайһы бер полк командирҙары, һалдаттар Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградлана.

Башҡорт ғәскәрҙәре Петроград өсөн иң ауыр мәлдә ҙур ярҙам күрһәтеүҙәрен билдәләп, яҙыусы Константин Федин былай тип яҙып сыға: *«В опаснейший для Столицы Советской Республики момент отдельные части башкирских войск проявили столько выдержки, отваги, стойкости, что положение было не только спасено, но опасность превратилась в победу...»*

Һуғыш тамамланмаҫ борон Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһының ҡайһы бер частары Рәсәй менән Финляндия сигенә күсерелә. Ә инде Юденич ҡыйратылғас, бригаданың полктары бөтөн Карел боғаҙы участкаһын биләп, сик буйын һаҡлай. Бында финдар башҡорт ғәскәрҙәренә атып, төрлө провокациялар яһай тора. Башҡорт уҡсы бригадаһының штаб начальнигы Заһит Гәрәев яҙыуынса, башҡорттар тиҙ арала финдарҙың арт һабағын уҡыта:

«На участке бригады одна из финских застав вела себя беспокойно и очень воинственно, беспричинно обстреливая наши посты и отдельных людей. Нам это надоело, но мы ничего не могли сделать, так как имели очень строгие указания насчет правил по-

ведения. Открывать огонь без крайней необходимости нам не разрешалось, а до этой крайности дело как будто бы не доходило. Но однажды случилось то, что мы никак не должны были допустить. Один из наших командиров батальонов по фамилии Авдеев (Петроград фронтында 3-сө Башҡорт уҡсы полкының 3-сө батальоны менән командалыҡ итә. – А. Я.*) по собственной инициативе решил наказать бесчинствующую финскую заставу. Ночью он с частью людей своего батальона напал на финскую заставу, разогнал ее и помещение сжег. Когда об этом стало известно, мы вызвали комбата Авдеева в штаб для выяснения причин этого чрезвычайного происшествия. Он все подтвердил и свои действия обосновал недостойным поведением финских пограничников. Финны, видимо чувствуя свою вину, случай этот огласке не придали».*

Бригаданың штаб начальнигы ҡыйыу комбат Авдеев үҙе тураһында ла яҙып үтә: *«Авдеев – башкирин по национальности, уроженец Башкирии. Я знал Авдеева еще по старой армии, где мы с ним были сослуживцами по полку. Он за боевые заслуги был призведен в старшие унтер-офицеры и награжден георгиевскими медалями и крестами чуть ли не всех степеней...»*

1920 йылдың февралендә Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы Петроградтан Новгород губернаһына Муравьев казармаларына күсерелә. Бында дивизияның ғәскәрҙәрен бер полкка туплап, 1920 йылдың майында Польша фронтындағы Муса Мортазиндың кавалерия бригадаһына ҡушалар. Дивизияның үҙе таратыла.

Польша менән һуғыш башланғас, фин сиктәрендә торған Башҡорт уксы бригадаһы Латвия сигенә күсерелә. 1921 йылдың апрелендә бригада Кавказдың Ҡара диңгеҙ яры буйына ебәрелә. 1921 йылдың июлендә өлкән йәштәге һалдаттарҙы демобилизациялау сәбәпле, Айырым Башҡорт уксы бригадаһы таратыла. Ә йәш һалдаттарҙы бер батальонға туплап, Урта Азияға, баҫмасыларға ҡаршы һуғышҡа ебәрәләр.

1919 йылда ҡыҙылдар яғында ойошторолған Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы һәм Айырым Башҡорт уксы бригадаларының тарихы ошо рәүешле тамамлана.

Комбриг Мортазин
һәм уның атлы бригадаһы

Граждандар һуғышы осоронда Кыҙыл Армия составында өс башҡорт ғәскәри берәмеге ойоштороло – Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы, Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы һәм Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы. Ошо ғәскәрҙәрҙең тәүге икәүһенән айырмалы рәүештә, өсөнсөһө күп архив документтарында Муса Мортазиндың кавалерия бригадаһы, тип телгә алына. Был Муса Мортазиндың сардар булараҡ тоткан урыны, абруйы тураһында һөйләй. Ошондай уҡ дәрәжәгә легендар комбриг Котовский ҙа лайыҡ була. Әйткәндәй, Мортазин менән Котовский 1920 йылда Польша фронтында иңгә-иң терәшеп, бергә һуғышып йөрөй.

Башҡорт ғәскәренең данын алыҫ тарафтарға тараткан сардар 1891 йылдың 20 февралендә элекке Ырымбур губернаһы Верхнеуральск өйәҙенең Күбәләк-Тиләү олоҫона ҡараған Көсөк ауылында (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Учалы районы Көсөк-Маяҡ ауылы) донъяға килә. Ауыл мәҙрәсәһендә белем ала. 1912 йылда 21 йәшлек егетте әрме хеҙмәтенә алалар. Уны Алыҫ Көнсығыштағы 9-сы Себер артиллерия бригадаһына ебәрәләр. 1913 йылда уҡыу командаһын тамамлап, Муса Мортазин бомбардир-наводчик (батша армияһы артиллерияһындағы ефрейтор) званиеһын ала.

Ике йыл хеҙмәт итеүенә, 1914 йылда Германия менән һуғыш башланып китә. 9-сы Себер артиллерия бригадаһы фронтка ебәрелә. Бомбардир Мортазин 1917 йылдың майына тиклем Көнсығыш, Румыния фронттарында немецтарға, австрийҙарға һәм румындарға ҡаршы һуғышып йөрөй. 1914 йылдың сентябрендә вице-фейерверкер (кесе унтер-офицер) званиеһын ала. 1916 йылдың июлендә каты алыштарҙың береһендә артиллерист Мортазиндың башы яралана. Яуҙарҙа күрһәткән ҡаһарманлыҡтары өсөн Мусаны унтер-офицер итеп үрләтәләр. Шулай итеп, Мортазин илдәге үҙгәрештәр осорон дары еҫен татыған һалдат булараҡ ҡаршылай.

1917 йылдың Февраль революцияһынан һуң фронтта һалдаттар араһында революцион агитация киң ҡолас йәйә. Был йәһәттән большевиктар, эсерҙар бик әүҙем була. Муса Мортазинға бигерәк тә коммунистарҙың агитацияһы ныҡ тәьсир итә. Уларҙың сәйәси ҡарашын яҡын күрә. Мосолман һалдаттары араһында абруй ҡаҙанған унтер-офицерҙы 1917 йылдың майында Мәскәүҙә үткән I Бөтә Рәсәй мосолмандары

съезына делегат итеп ебәрәләр. Ошо осорҙан башлап Муса Мортазин башы-аяғы менән сәйәси эшмәкәрлеккә сума.

Съездан һуң Мортазин тыуған яғына ҡайтып төшә. Был осорҙа башҡорттар араһында автономия өсөн хәрәкәт ҡолас йәйә. Сәйәси яҡтан өлгөргән фронтовик егет мөстәҡиллек яулау идеяһынан ситтә ҡалмай, әлбиттә. Халыҡ араһында абруй ҡаҙаныпы өлгөргән Мортазинды яҡташтары Ырымбурҙа үткән III Дөйөм Башҡорт ойоштороу ҡоролтайына делегат итеп һайлай.

1917 йылдың декабрендә Каруанһарай бинаһында үткән халыҡ йыйынында 15 ноябрҙә иғлан ителгән Башҡортостан автономияһы раҫлана, Башҡорт хөкүмәте ойошторола. *«Сәйәси яҡтан Ҡоролтай өс төркөмгә бүленде. З. Вәлидов менән Ш. Манатов етәкселек иткән беренсе төркөм башҡорт халҡының ниндәй ҙә булһа билдәле бер иҡтисади төркөмөнөң мәнфәғәттәрен түгел, ә башҡорттарҙың милли бойондороҡһоҙлоҡҡа дөйөм ынтылыштарын сағылдыра ине... Икенсе төркөм – фронттан ҡайтҡан һалдаттар һәм башҡорттарҙың хеҙмәтсән интеллигенцияһы – большевиктарға тартылды...»* – тип яҙа Мортазин үҙенең китабында. Ул ошо икенсе төркөмдә була. Ҡоролтайҙа күпселек тарафынан ҡабул ителгән ҡайһы бер ҡарарҙар менән (ер мәсьәләһе буйынса) килешмәһә лә, Мортазин Башҡортостандың тупраҡлы мөхтәриәтен ҡуш ҡуллап хуплай.

Ҡоролтайҙан һуң, 1918 йылдың ғинуарында инде, Муса Мортазин Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте эшмәкәрҙәре менән бер рәттән башҡорт делегацияһы составында Өфөлә үткән төрки-татарҙарҙың Милли мәжлесе йыйылышында ҡатнаша.

Бында башҡорттар Башҡортостан автономияһына ҡаршы сығыш яһаған татарҙар менән ҡыҙыу бәхәстәр алып бара. Ошо арала Ырымбурҙа Башҡорт хөкүмәте губерна мосолман комитеты тарафынан ҡулға алынып, төрмәгә ябыла. Башҡорт вәкилдәре Муса Мортазин, Хафиз Ҡушаев, Зекериә Айытбаев, Усман Ҡыуатов һәм Мөхәмәтхан Ҡулаев Ырымбурға ҡайтып, власты үҙ ҡулына алған Башҡортостандың ваҡытлы революцион советына бара. *«Хотя делегаты разъяснили цель их прибытия к Временному революционному совету... но в тот день они не смогли получить ясного ответа»*, – тип яҙа Зекериә Айытбаев. 1 март көнө делегаттар менән Ваҡытлы революцион советтың берлектәге йыйылышы була. Делегаттарҙың: «Ни өсөн Башҡорт хөкүмәте ҡулға алынған?» – тигән һорауына Ырымбур мосолман комитеты рәйесе Ғәли Шәмиғолов: *«Они получили от Дутова 60 тысяч рублей денег и 300 винтовок. А также Дутовым засланы в пределы Башкирии несколько офицеров и инструкторов. К тому же члены предпарламента работали рука об руку с Дутовым и хотели присоединить Башкирию к Юго-Восточному союзу»*, – тип аңлата. *«Делегаты, собравшиеся на Башкирский учредительный съезд, были все буржуи ...все их постановления, принятые на учредительном съезде, были буржуазными...»* – тип өҫтәй Бәхтегәрәй Шәфиев. Бер ни ҙә хәл итә алмағас, делегаттар таралыша. Һул ҡарашлы Мортазинды большевиктар

Ваҡытлы революцион советҡа эшкә саҡыра. Әммә улар Мортазинға бер аҙ шик менән ҡарай. *«Из вновь введенных (в конце марта) членов ревкома Муртазин иногда показывал себя левым, но только на словах; у нас было подозрение, что он — сторонник Валидова в ревкоме»,* — тип яҙа Башҡортостандың Ваҡытлы революцион советы рәйесе Ғабдулла Дәүләтшин.

Әммә Совет платформаһында Башҡортостан автономияһы идеяһы Татар-Башҡорт Совет Республикаһы өсөн сығыш яһаған татар эшмәкәрҙәренә бер ҙә оҡшап етмәй. 1918 йылдың 30 мартында Ғәли Шәмиғолов Ваҡытлы революцион советты ябып та ҡуя. Ошоноң менән Башҡортостан автономияһы өсөн көрәш бер нисә айға һүрелеп тора.

Башҡортостандың Ваҡытлы революцион советы таратылғас, Муса Мортазин тыуған яғына ҡайтып, Совет власы урынлаштырыу менән мәшғүл була. Тамъян-Ҡатай кантонында милиция ойоштора.

Ләкин большевиктарҙың тантанаһы оҙаҡҡа бармай. 1918 йылдың майында Чехословак корпусы Урал — Иҙел буйында Совет власын бер һуғыуҙа юҡҡа сығара. 1914 йылда урыҫ армияһы составында ойошторолған Чехословак корпусы (60 мең һалдат) 1917 йылға тиклем герман һуғышында немецтарға ҡаршы һуғыша. Власть большевиктар ҡулына күскәс, улар чехословактарҙан тиҙерәк ҡотолорға уйлай. Килешеү буйынса 60 меңлек корпус тимер юлы аша Алыҫ Көнсығышҡа барып, унан диңгеҙ юлы менән Францияға китергә тейеш була. Чехословактарҙың эшелондарға тейәлгән ғәскәрҙәре Пензанан алып Чита ҡалаһына юлда килә. 1918 йылдың майында большевиктар Чехословак корпусын ҡоралһыҙландырырға тигән әмер бирә. Быға ҡаршы тегеләре баш күтәрә һәм 1918 йылдың июненә Урал — Иҙел буйында власть большевиктарға ҡаршы көстәр ҡулына күсә.

Быға тиклем апрель башында ҡаһарман сардар, Зәки Вәлидиҙең яҡташы, арҡаҙашы Әмир Ҡарамышевтың партизан отряды атаман Дутовтың казактары менән берлектә Ырымбурға сапҡын яһап, Башҡорт хөкүмәте ағзаларын төрмәнән ҡотҡара. Май аҙағында Башҡорт хөкүмәте етәкселәре Силәбелә Чехословак корпусы командалығы менән осрашып, килешеп, башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороу эшенә тотона.

Июнь айында Башҡорт хөкүмәтенең хәрби бүлеге янында Башҡорт хәрби шураһы ойошторола (рәйесе Зәки Вәлиди). Ул Башҡорт ғәскәре штабы ролен үтәй. Хәрби шураның мобилизация планына ярашлы, 2 кавалерия һәм 7 пехота полкынан торған Башҡорт корпусын төҙөү ҡарала. Ошо планға ярашлы, Башҡортостандың төрлө кантондарында ғәскәр туплау эше башлана. Тамъян-Ҡатай кантонында Әмир Ҡарамышев етәкселегендә 5-се Башҡорт пехота һәм 1-се Башҡорт кавалерия полкы төҙөлә башлай. 1-се кавалерия полкы менән Ә. Ҡарамышев етәкселек итә, ә эскадрон командирҙары итеп атаман Анненковтың талабы буйынса казак офицерҙары ҡуйыла.

1-се Башҡорт кавалерия полкын ойоштороу эшенә Муса Мортазин да әүҙем ҡушыла. Яңы ойошторолоп ятҡан тәүге башҡорт кавалерия полкына Белоретта тупланған Блюхерҙың отрядтарына ҡаршы һуғы-

шырға тура килә. Был осорҙа, тарихсы Рөстәм Таймасов яҙыуынса, 1-се Башҡорт кавалерия полкында ни бары 100 кеше тирәһе була. Әмир Ҡарамышев етәкселек иткән 1-се полк Блюхер һәм Кашириндың йыйылма отрядтары менән Белорет, Верхнеуральск, хәҙерге Ишембай районы территорияһында аяуһыҙ һуғыша. *«Тәүге һуғышта уҡ казак офицерҙары (эскадрон командирҙары) сафтан сыҡҡас, полктың ҡалған өлөшө 1-се эскадронға ҡушылды. Эскадрондарҙы аяҡҡа баҫтырыу өсөн полк командиры (Ҡарамышевтың) бойороғо менән 1-се эскадронға командир итеп М. Мортазин, 2-се эскадронға корнет Эглер билдәләнде»*, – тип яҙа Мортазин.

1918 йылдың 7 авгусында полк командиры Әмир Ҡарамышев үлеп ҡала. Уның урынына Аҡ командование казак офицеры хорунжий Ганаганы ҡуя. Әммә сентябрь айында Башҡорт хәрби шураһы 1-се полкка командир итеп Әмир Ҡарамышевтың ҡустыһы прапорщик Мөхтәр Ҡарамышевты тәғәйенләй. Йәйге һуғыштарҙан һуң 1-се Башҡорт кавалерия полкы ялда тора. 1918 йылдың көҙөндә полкка ҡаһарман сардар Әмир Ҡарамышевтың исеме бирелә.

Ялда торған сағында Муса Мортазин тыуған яғы Тамъян-Ҡатай кантоны эшендә әүҙем ҡатнаша. Архив документтары ошо хаҡта һөйләй. Ул 1918 йылдың 15 ноябрендә уҙғарылған кантон думаһы йыйылышына саҡырыла. Бында Мортазин бер тауыштан йыйылыш президиумы рәйесе урынбаҫары итеп һайлана. Йыйылыштың тәүге көнөндә Мортазин башҡорт ғәскәрҙәре исеменән сәләм күндерә, большевиктарға ҡаршы һуғыш барышы тураһында һөйләп үтә. 17–19 ноябрҙәге ултырыштар Муса Мортазин рәйеслегендә үтә. Йыйылышта ҡатнашыусылар Мортазинға оло рәхмәтен белдерә: *«М. Муртазин, участвуя на собрании своею опытностью, как зам. пред. собрания оказал большое содействие думе, почему собрание выражает ему благодарность и просит его передать 1-му кавалерийскому полку от имени думы привет»*.

1918 йылдың декабренә Ҡыҙыл Армия ғәскәрҙәре Башҡортостан автономияһы (Бәләкәй Башҡортостан) сиктәренә килеп етә. Башҡорт ғәскәрҙәре Ырымбур менән Стәрлетамаҡ ҡалалары араһында ҡыҙылдарға ҡаршы фронт тота. Зәки Вәлиди фарманы менән бында Стәрлетамаҡ фронты ойошторола. Был осорҙа башҡорт уксы полктары Дутовтың ҡарамағында Аҡтүбә фронтында һуғыша, шуға күрә Стәрлетамаҡ фронтында бөтә ауырлыҡ 1-се Башҡорт кавалерия полкы һәм башҡорт ирекле отрядтарына төшә. *«На Стерлитамакском фронте действует 1-й кавалерийский имени Карамышева полк – 400 человек при 152 винтовках и 400 конях. Юрматинский отряд – 150 человек, Табынский отряд – 200 человек. Туда же двигается Кипчакский отряд – 160 человек, Джетировский отряд – 120 человек, Тамьян-Катаевский – 400 человек, Усерганский отряд – 180 человек. Бурзянский – 300 человек остается на охране Правительственных учреждений в Баймакском районе.*

Руководство Башкирским конным полком и отрядами Стерлитамакского района объединяется в руках командующего Башкир-

скими силами Стерлитамакского района, которым назначаю ротмистра Карамышева. Только эти части полуголодные, так как не имеют денег и без патронов, пулеметов и недокомплект оружия», – тип яҙа Зәки Вәлиди 30 декабрь көнө войсковой старшина Богдановка.

1-се Башҡорт кавалерия полкы менән ирекле отрядтар Колчак фронтының стратегик яҡтан мөһим урынында оборона тотоп тороуҙарына ҡарамаҫтан, аҡтар башҡорт ғәскәрҙәренә ҡорал менән ярҙам итергә теләмәй. Ауыр хәлдә булыуҙарына ҡарамаҫтан, 1-се Башҡорт кавалерия полкы һәм ирекле отрядтар ҡыҙылдар менән аяуһыҙ һуғыша. *«Богоявленский участок: полк Карамышева имеет стычки в районе Стерлитамака, но, не имея оружия и патронов, всегда бывает вынужден отступать на исходный пункт. Полк категорически требует винтовки, шашки, патроны и пулеметы, заявляя, что они, не получив их, далее не будут в состоянии оказывать абсолютно никакого сопротивления. Мелеузовский участок, 23 часа, 6 января: Зирган занят нашим отрядом, устанавливается телеграфная связь. Красные бежали при появлении дозоров. По рассказам жителей, у красных были два пулемета. По непроверенным сведениям, под Аллагуватовым идет бой полка Карамышева. Разведчики красных стали появляться поблизости Мелеуза»,* – тип хәбәр итә 1919 йылдың 7 ғинуарында Зәки Вәлидиҙең адъютанты подпоручик Әбдрәшитов Ырымбур ҡалаһына, Дутов армияһының штабына.

10 ғинуар көнө Зәки Вәлиди һуғыштарҙа үҙен яҡшы, ҡыйыу сардар итеп күрһәткән эскадрон командиры корнет Муса Мортазинды 1-се Башҡорт кавалерия полкы командиры итеп тәғәйенләй, Мөхтәр Ҡарамышев Башҡорт ғәскәрҙәренең баш интенданты вазифаһына күсерелә. Ошо уҡ осорҙа Вәлиди бойороғо буйынса, Дутов ҡулы аҫтында булған Башҡорт уҡсы полктары Аҡтүбә фронтынан ҡайта. 26 ғинуар бер урынға йыйылған ғәскәрҙәрҙән ҡабаттан Башҡорт корпусы тергеҙелә. Мортазиндың полкы 1-се Башҡорт дивизияһы составына инә. Архив мәғлүмәттәре буйынса, 1919 йылдың ғинуарында Мортазин полкының составы түбәндәгесә була:

«Состав 1-го кавалерийского полка четырехэскадронного состава.
Командир полка корнет Муртазин.
Вр. помощник командира полка штаб-ротмистр Ямбулатов.
Командир 1-го эскадрона поручик Измайлов.
Командир 2-го эскадрона прапорщик Муртазин.
Командир 3-го эскадрона поручик Ганера.
Командир 4-го эскадрона штаб-ротмистр Ямбулатов.
Около 350 сабель, 2 пулемета.
Солдат в полку:
1-й эскадрон – 80 чел.
2-й эскадрон – 80 чел.
3-й эскадрон – 70 чел.
4-й эскадрон – 105 чел. Всего 335 человек».

1919 йылдың 19–20 февралендә Башҡорт корпусы ҡыҙылдар яғына сыҡҡас, башҡорт полктарынан аҡтарға ҡаршы төркөм ойошторола. Ошо төркөмгә 1-се Башҡорт кавалерия полкы ла инә. Әммә оҙаҡламай 1-се Ҡыҙыл Армия командованиеһы башҡорт полктарын Пенза уҡсы дивизияһының тылына күсергә бойора. Фронт һыҙығында Муса Мортазиндың ғына полкы тороп ҡала. Ул ҡыҙылдарҙың Смоленск полкы менән бергә Тамъян-Катай кантонында аҡтарға ҡаршы фронт тота. Ләкин тиҙҙән башҡорт полктарын көсләп ҡоралһыҙландыралар, ҡаршылыҡ күрһәткәндәрен аталар, тигән хәбәр фронт һыҙығындағы Мортазин егеттәренә лә килеп етә. Ҡыҙыл Армияның яман ҡыланышына ҡаршылыҡ күрһәтеп, ҡайһы бер башҡорт частары (2-се Башҡорт кавалерия полкының эскадроны, 1-се Башҡорт уҡсы полкының батальоны) кире аҡтар яғына сыға. Йыйын әтрәгәләмдән торған Ҡыҙыл Армия һалдаттары башҡорттарҙан үс алырға тотона – ябай ауыл халҡын талай, ыҙа сиктерә башлай. Бер һүҙ менән әйткәндә, ҡоһорҙо ябай башҡорт халҡына төшөрә. Ошо мәлдә Муса Мортазиндың полкы башҡорттарҙың берҙән-бер яҡлаусыһы, терәге була. Тиҙҙән ярһыу сардарҙың түҙер әмәле ҡалмай.

«Башҡорт кавалерия полкы сигенергә теләмәһә лә, бригада командованиеһы уға тылға күсергә бойороҡ бирҙе, һәм, шул әмергә буйһоноп, полк 28 мартта Билал ауылына, Смоленск полкы торған тирәгә, барып урынлашты. Полкты смоленсылар хас дошман һымаҡ күреп ҡаршыланы. Башҡорт отряды бында уларҙың урындағы халыҡты йәберләүенең бик күп миҫалдарына шаһит булды. Тағы ҡотороноп конфискация үткәреүҙәр, контрибуция һалыуҙар башланды. Смоленсылар, бәйһеҙ шашынып, халыҡты ҡан илатты», – тип яҙа Муса Мортазин.

Түҙемлеге ҡалмаған Башҡорт кавалерия полкы 23 март көнө ҡыҙылдарҙы туҙҙырып, ҡоралһыҙландыра. Мортазин был турала бригада командованиеһына хәбәр итә. Ҡото алынған бригада штабы 40 саҡрым тылға – Кананикольскиға һыпыртыу яғын ҡарай. Башҡорт кавалерия полкы тарафынан ебәрелгән делегация атыла. Бер нисә көндән 20-се дивизияның 1-се бригадаһы частары, бергә тупланып, Башҡорт кавалерия полкына һөжүм башлай. Аҡ казактар фронт һыҙығының был яғында низағлашыу, хатта ҡоралды бәрелеш барыуын тиҙ генә һиҙеп ҡалып, башҡорт полкын үҙҙәре яғына сығарыу тураһында һөйләшеү өсөн Мортазинға делегация ебәрә. Ике ут эсендә ҡалған полк ирекһеҙҙән аҡтар яғына сығып китә.

Аҡтар 1-се полкты ҡыҙылдарға ҡаршы һуғышҡа индерергә тырыша, Стәрлетамаҡ яғына сигенгән ҡыҙылдарҙың юлын киҫергә бойора. Ләкин Мортазин төрлө һылтауҙар менән бойороҡтарын үтәүҙән баш тарта. Ул үҙ полкы менән Белорет ҡалаһына барып урынлаша. Бында аҡтар яғындағы башҡорт һалдаттарын эҙләп үҙ полкына туплай башлай. Муса Мортазин Белорет ҡалаһында апрелдең урталарынан алып майҙың аҙағына тиклем тора, йәғни үҙенең һалдаттарына ай ярым буйына ял итергә, полкты яңы яугирҙар менән тулыландырырға мөмкинлек ала.

1919 йылдың июнь башында улар Стәрлетамаҡ ҡалаһына күсә. Һамар ҡалаһында Көнсығыш фронттың Көньяҡ төркөмө штабында Башревкомдың вәкиле булып торған Муллайән Хәлиҡов: *«По сведениям помполитпреда Фахретдинова, двумя башкирскими отрядами Узбеков и Муртазин действуют против 20-й дивизии, всего тысяча штыков...»* — тип хәбәр итә Вәлидигә. Тимәк, аҡтар яғында Муса Мортазин бер үҙе генә түгел, февраль айында ҡыҙылдар яғына сыҡмай ҡалған башҡорт офицеры, поручик Шаһибәк Үзбәков менән бергә булған (аҙаҡ Ш. Үзбәков Урал казактары менән Ҡырымға китеп, Врангель армияһында хеҙмәт итә һәм 1920 йылда һәләк була).

Стәрлетамаҡта Мортазин полкы тағы 15 көн тирәһе әҙерлек үтә, һалдаттар һәм ҡоралдар менән тулыландырыла. Күпләп башҡорттар йәшәгән районда айырым фронт һыҙығында урынлашыуҙан файҙаланып, Мортазин үҙ полкына тағы күберәк һалдаттар тупларға мөмкинлек ала. Күрше казак частарындағы башҡорт һалдаттары Мортазиндың полкына күсә башлай. Ошо рәүешле 1919 йылдың июнендә ғәййәр сардар үҙенең полкын бригада кимәленә үҫтереп ебәрә.

«Июнь аҙағына бригаданы ойоштороуҙы тамамлап һәм йәйәүле дивизион да төҙөп алып, 4000 самаһы кешеле Башҡорт кавалерия бригадаһы 10 июлгә тиклем Ағиҙел буйында һаҡта торҙо, был тирәнән ҡыҙылдарҙың разведкаһын үткәрмәне», — тип яҙа Мортазин.

Сағыштырып ҡарағыҙ: ошо осорҙа ҡыҙылдар яғында Көньяҡ фронтта һуғышҡан Башҡорт кавалерия дивизияһының иҫәбе өс мең кешегә лә тулмай. Ә Муса Мортазин аҡтар яғында 4000 тирәһе кешенән торған бригада ойоштороуға өлгәшә. Ошоноң менән ул Колчак армияһы частарында һибелгән башҡорт һалдаттарының байтағын бер ғәскәргә туплауға өлгәшә.

Бригада кимәленә үҫеп еткән Мортазин полкы хәҙер аҡтарҙың фармандарын бөтөнләй һанға һуҡмай башлай. 1919 йылдың июлендә ҡыҙылдар һөжүмгә күскәс, уларға ҡаршы сығырға тип Колчак командованиеһы күпме генә бойороҡтар бирһә лә, Мортазин ҡыҙылдарға артыҡ ҡаршылыҡ күрһәтмәй сигенә, йә булмаһа бәрелештән тайпыла. Мортазиндың был ҡыланышынан асыуы ҡабарған 5-се корпус командиры Эллерс-Усов уны Әбйәлил ауылына, корпустың штабына саҡыра. 8 августа Мортазин, Әбйәлилгә барып, генерал менән низағлашып китә, револьверҙан уны яралай. Иртәгәһенә бригадаһы менән килеп баҫып, корпус штабының канцелярияһын, арсеналынан 3 000 винтовкаһын алып китә.

17 августа мөнәсәбәттәрҙе көйләү маҡсатында корпус командиры генерал Бакич Мортазинды үҙенә саҡыра. Әммә Башҡорт кавалерия бригадаһы 18 августа Березовка ауылы янында корпустың ике полкын туҙҙырып, штабын баҫып ала.

Ошо мәлдә Башревком ярҙамында (бригадаға Таһир Имаҡов килә) Муса Мортазин ҡыҙылдар яғына кире сығыу тураһында һөйләшеүҙәр башлай. 1919 йылдың февраль — март айҙарындағы ваҡиғаларҙан һуң ҡыҙылдарҙан артыҡ яҡшылыҡ көтмәгән комбриг Ҡыҙыл Армия яғына сығыу өсөн ҡәтғи шарттар ҡуя:

1) Башҡорт һалдаттарын һәм командирҙарын ҡоралһыҙландырмаҫҡа һәм атмаҫҡа;

2) Бригаданы ҡабул итеү өсөн башҡорт һәм совет командованиеһы вәкилдәре менән бергә ике-өс башҡорт совет полкын ҡуйырға, сөнки башҡорттар март айындағы атыуҙарҙан һуң рус командованиеһына ышанмай;

3) Полктарҙы Колчакка ҡаршы ебәреү мөмкинлеге булмаһа, уларҙы заводтарға һәм күсенеү пункттарына урынлаштырмаҫҡа, йә Верхнеуральскиға ебәрергә, йә Стәрлетамаҡта ҡалдырырға.

Ошо шарттар үтәлмәһә, бригаданы ҡаҙаҡ далаларына алып китәм, тип иҫкәртеп ҡуя ҡыҙылдарҙы Мортазин. 1919 йылдың башында Башҡорт корпусын ҡоралһыҙландырып хата яһағанын аңлаған Ҡыҙыл Армия командованиеһы (был хатаны улар 1919 йылдың мартында Колчак армияһы контрһөжүмгә күскән мәлдә, һуғышсан башҡорт ғәскәрҙәре ярҙамына мохтаж саҡта, яҡшы аңлай) Муса Мортазиндың шарттары менән риза була. Хәҙер инде ҡыҙылдар Башҡорт кавалерия бригадаһын үҙ файҙаһына ҡулланыуҙың әһәмиәтен бик яҡшы аңлай.

Мортазиндың ғәскәре ҡыҙылдар яғында Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы статусын ала. Йәғни команда составы, полктар үҙгәрешһеҙ ҡалдырыла. Зәки Вәлиди Мортазин бригадаһын башҡорт ғәскәрҙәре составына ҡушыу ниәтендә була. Ул яңы атлы бригаданы Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһының 2-се бригадаһы тип иғлан итә. Әммә 1-се армия командованиеһы үҙенсә эшләй, йәғни башҡорт ғәскәрҙәренең бер урынға тупланыуына юл ҡуймай.

1919 йылдың август аҙағында Мортазин бригадаһы ҡыҙылдарҙың 24-се уҡсы дивизияһы составында аҡтарҙың Көньяҡ армияһы частарын туҙҙыра. Адамский һәм Бриены ҡасабаларына (хәҙерге Ырымбур өлкәһенең көнсығышында) һөжүм итеп, Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы аҡтарҙың 300-гә яҡын һалдатын әсиргә ала, 20 ылауын ҡулға төшөрә.

«Һуғыштарҙа арыған бригада, ҡаршыһында дошмандың йүнле көсө булмағас, тылға, Башҡортостанға, Ишмөхәмәт — Туртөкөй төбәгенә ҡайтарылды, унан, резервтағы 1-се армия ҡарамағына бирелеп, Урал фронтына — Ырымбур — Ҡарғалы (Сәйет биҫтәһе) тирәһенә күсерелде.

Бында өс көн ял иткәс, бригада иң яҡшы хәрби составынан, айырыуса йәштәр араһынан, политработниктар һайлап алды һәм, 3 мең кешене 2 меңгә генә ҡалдырып, бер аҙ кейем-һалым алып, тулы әҙерлек хәленә килде», — тип яҙа Муса Мортазин. Ҡарғалыла торған сағында ҡыҙылдар (24-се дивизия) Башҡорт бригадаһында үҙҙәренең тәьҫирен нығытыу маҡсатында яңы политработниктар тәғәйенләй. Шуларҙың береһе — 24-се дивизияның сәйәси идаралығында агитатор булып йөрөгән Ғәли Камалов хәтирәләрендә (1956 йылда яҙған) бына нимә тип яҙа: *«В августе 1919 года из стана белых на сторону Советской власти перешла Башкирская кавалерийская бригада Мусы Муртазина. И я с несколькими товарищами был направлен*

в эту бригаду, которая находилась в то время в селе Каргалы, близ Оренбурга. Выехали туда сразу же по получении назначения, ибо дорога предстояла долгая и трудная. Настроение было мрачное, всех точила одна и та же мысль: что ждет нас в этой столь нашумевшей муртазинской бригаде. К концу вторых суток показалась деревня, и через несколько шагов мы услышали возглас: «Эй, кто идет?» Наш возчик остановил лошадей. Из-за кучи кизяка появился человек. Мы предъявили ему наши удостоверения. Кто-то из нас зажег спичку, и мы смогли разглядеть подошедшего человека. Это был невысокий, средних лет мужчина, одетый в несколько странную военную форму синего цвета. Как потом мы выяснили, это была японская военная одежда, которую носила почти вся бригада.

Проверив документы, постовой проводил нас к штабу. На крыльце нас встретил начальник штаба бригады Я. З. Рамеев. Поздоровавшись, вошли в штаб, где проходило совещание командиров. За огромным столом сидело около 20 человек. Большинство из них было одето в красноармейские гимнастерки и в казачьи брюки с лампасами. Внимание обращал на себя здоровый, высокий мужчина с узкими, живыми глазами, одетый в шлем, на котором была нашита звезда ярко-малинового цвета. Это и был командир бригады Муса Муртазин. Нас представили каждому из сидящих. Здесь были командир 1-го полка Усман Янбулатов, его заместитель Л. С. Эрадзе, командир 2-го полка Абдрахманов, начальник отдела снабжения бригады Ахмадей Муртазин и другие.

После знакомства заговорил на башкирском языке М. Муртазин. Приветствовав наше прибытие в бригаду, выразил надежду, что мы быстро найдем общий язык с командным составом бригады и поможем им в создании сознательной революционной дисциплины среди башкирских конников. Он ознакомил нас с состоянием бригады. Последняя готовилась к боям. Приводились в порядок оружие, снаряжение, конский состав (ковка лошадей) и т. д. Бригада представляла довольно внушительную силу: 1 800 сабель, один пеший дивизион, два орудия, 8 пулеметов. Основной контингент состоял из красноармейцев башкирской национальности восточных кантонов Башкирии».

1919 йылдың октябрь башында Башҡорт кавалерия бригадаһы Урал фронтына күсерелеп, ҡыҙылдарҙың 4-се армияһына буйһондорола. Бында Мортазин атлылары казак генералдары Толстой, Беловтарҙың армияларына ҡаршы һуғыша. Аҡтарҙы ҡыуып, Миргород, Аҡбулаҡ, Нефрашанка, Чунгай, Ҡормантай ауылдары янында ҡанлы һуғыштарҙа ҡатнаша. Бригада 1919 йылдың ноябрь – декабрендә Төркостан фронтының Урал-Гурьев операцияһында ҡатнаша. Ошо хәрби операция һөҙөмтәһендә аҡтарҙың Урал армияһы туҙҙырыла. Тар-мар ителгән ғәскәрҙәренең ҡалдыҡтары Гурьев ҡалаһына ҡаса.

Өҙләкһеҙ һуғыштар, һыуыҡтар, тиф сире арҡаһында Башҡорт кавалерия бригадаһы 1919 йылдың декабрь аҙағына бик ауыр хәлдә була. *«Декабрь аҙағында бригада Ҡарғалыға күсерелеп, яраларын төҙәтергә кереште. Ә яралылар күп ине... Медицина персоналының, дарыуҙарҙың, эшсе ҡулының етешмәүе бәкәлгә һуға. Һуғыштарҙа йөрөгәндә бригада тифлы халыҡ менән аралашмай булдыра алманы. Эпидемиянан йөҙәрләгән ҡыҙылармеец һәләк булды: яугирҙарыбыҙҙың 50–70 проценты тиф менән ауырыны. Уларҙы ебәрергә урын юҡ ине, үҙ тылыбыҙҙа топтоҡ.*

Башҡорт бригадаһы эпидемиянан һәм һуғыштарҙан ҙур юғалтыуҙар кисерҙе. 1-се армия инспекторы (Свешников) 30 декабрҙә армия штабының оператив бүлегенә биргән белдермәһендә былай тип яҙа (№ 60/с):

«Армия буйынса бирелгән приказ (№ 455) нигеҙендә, 5-се кавалерия дивизияһына ваҡытлыса буйһондоролған һәм 2-се бригадаға ҡушыласаҡ Мортазиндың Башҡорт кавалерия бригадаһы түбәндәге составта килде: командирҙар – 56, административ состав – 10, ҡылыслылар – 403, ҡоралһыҙ һыбайлылар – 77, строевой хеҙмәткә яраҡһыҙҙар – 249, аттар – 377, пулеметтар – 12, ылау – 124». Был донесениенан шул күренә: бригада үҙенең 60 процент самаһы составын юғалтҡан (Урал фронтында һуғыш операциялары башланған саҡта 2000 кеше бар ине)», – тип яҙа Муса Мортазин үҙенең китабында.

1-се армия командованиеһы 60% кешеһен юғалтҡан Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһын 5-се дивизияға ҡушып, айырым милли бригада булараҡ бөтөрөргә ҡарар итә. Аптырашта ҡалған Муса Мортазин хәлде аңлатып, Башҡортостандың хәрби комиссары Зәки Вәлидигә түбәндәге рапортын ебәрә:

БАШВОЕНКОМУ тов. ВАЛИДОВУ

№ 0999 / в **1919 года 29 декабря**

от Нач. брига Отд. Башк.

РАПОРТ

Доношу, что вверенная мне бригада до сего времени существовала как отдельная Башкирская бригада; На основании приказа тов. Троцкого и по личному Вашему приказу бригада не входила и не должна была войти в состав дивизии, в особенности русскую, а должна была составлять, отдельную Бригаду Башкирского войска; И поэтому приказом по 1-ой Революц. Армии она была отправлена для ликвидации Уральского фронта как отдельная единица и оперативные приказы и задачи давались ей как отдельной части, а также и выполнялись как отдельной частью Башкирского Советского войска. А теперь, когда бригада, несмотря на все недостатки, чувствуя острую нужду во всем, не получая

ни в чем и ни по каким отраслям и ни с какой стороны помощи, среди холода, голода, под пулями и снарядами неприятеля, организовала все, что требуется отдельной бригаде, исполнила честно и в точности возложенную на нее задачу, по необъяснимым причинам вливают ее в состав 5 кавал. дивизии. Если точнее выразить – разрушают то, что было создано трудами сознательных работников. И все эти труды идут насмарку. Не оценили наши труды, что слишком обидно для всего состава бригады. По влитии бригады в состав дивизии много работников – работников честных, добросовестных, остаются без должности, т. к. штат не отдельной бригады слишком мал и скуден, что же скажут и какими глазами посмотрят на меня эти работники, получив понижение без всяких на то причин?

Поэтому, не желая получить понижение и быть влитым в русскую дивизию, прошу Вашего ходатайства Пред. тов. Троцким и тов. Командиром фронта о разрешении оставить вверенную мне бригаду и пополнения, Отдельную Башкирскую и о переводе ее в Башкирскую дивизию или же оставить ее в временном подчинении 1-ой Армии, но как отдельную бригаду.

Начальник бригады Муртазин
Врид. военкомбрига Богуславский
Врид. наштабрига Сагитов

Зәки Вәлиди был мәсьәләне тиҙ арала Ленин һәм Троцкийға еткерә. Ләкин Төркостан фронты командующийы М. Фрунзе Башҡорт бригадаһын таратыу яғын ҡайыра:

«Ознакомившись с положением дела в кавалерийской бригаде Муртазина, включенной в состав 5-й кавдивизии, стало наиболее целесообразным эту бригаду расформировать. Ввиду удобства, связанного с отдачей приказа фронтом, прошу соответствующего распоряжения от Реввоенсовета Республики. Основание к расформированию есть», – тип яҙа ул Ленинға.

Фрунзе Башҡорт бригадаһын үҙ фарманы менән 5-се дивизияға ҡушһа ла, уны таратырға баҙнат итмәй. Реввоенсоветтың рөхсәтен һорай. Фрунзе Ленинға ебәргән телеграммаһын былай тип дауам итә: *«Башкирский ревком считает эту бригаду национальным формированием и ходатайствует перед центром об исключении ее из дивизии. Я же ответил, что бригада в состав башкирской армии включена быть не может, так как это превысит установленную соглашением для Башкирии норму»*. Бында һүҙ 1919 йылдың 20 мартындағы килешеү тураһында бара. Ул килешеү буйынса Башҡорт армияһы бер кавалерия дивизияһы һәм бер уҡсы бригадаһынан торорға тейеш була. Шуға күрә лә Фрунзе Мортазиндың кавалерия бригадаһын артыҡ һанай. Ул Башҡорт бригадаһын бөтөрөп, уның яугирҙары менән Петроградтағы башҡорт ғәскәрҙәрен тулыландырырға тәҡдим итә.

Ләкин Башҡортостан хәрби комиссары Зәки Вәлиди Троцкий менән Ленинды Мортазин бригадаһын таратмаҫҡа күндерә. Бригада 1919 йылдың декабренән алып 1920 йылдың апрель аҙағына тиклем Ырымбур янында, Ҡарғалыла тора, ял итә, сафтарын тулыландыра.

Большевиктар Башҡортостанға киң автономия хоҡуҡтары биреүгә ҡарамаҫтан, тәүҙән үк уның хәрби көстәрен ситтә тотоу сәйәсәтен алып бара. 1919 йылдың июнендә Саранскиҙан Башҡортостанға ҡайтырға торған башҡорт полктарын Троцкий Көньяҡ фронтҡа (Украинаға) оҙата Деникинға ҡаршы ебәрә. Көҙөн уның ҡалдыҡтарын Петроградҡа ташлай. Шулай уҡ 1919 йылдың йәйендә Бәләбәйҙә ойошторолған Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы Ленин менән Троцкийҙың бойороғо буйынса Петроградҡа оҙатыла. Шуға күрә Ҡыҙыл Армия командованиеһы Мортазин бригадаһын да нисек тә булһа Башҡортостандан йыраҡыраҡ ебәрергә уйлай. Сөнки Үҙәк совет власы Башҡортостандың автономия хоҡуҡтарын сикләү эшенә тотона.

Был йәһәттән урындағы большевиктар әүҙемлек күрһәтә. Мәскәүҙән ебәрелгән вәкил Сергеев Башревкомдың вәкәләттәренә тығыла башлай, асыҡтан-асыҡ башҡорт эшмәкәрҙәренә ҡаршылыҡ күрһәтә. Ошоноң һөҙөмтәһендә 1920 йылдың ғинуарында Башревком менән Башобком араһында конфликт сыға. Хөкүмәт рәйесе Харис Йомағолов обком тарафынан ҡуйылған БашЧК рәйесен һәм бер нисә провокаторҙарҙы ҡулға алырға бойора. Башревком Ырымбур янында торған Башҡорт кавалерия бригадаһына хәрби көс булараҡ өмөтөн бағлай. Әммә Башҡортостандағы хәлдәрҙе ишетеү менән Фрунзе бойороғо буйынса Муса Мортазинды Ырымбур ҡалаһына саҡыртып, һаҡ аҫтына алалар.

Өс айҙан Мортазиндың бригадаһын Башҡортостандан олаҡтырыуға бер сәбәп табыла. Ул да булһа Польша менән һуғыш. *«1920 йылдың 29 апрелендә Башҡорт бригадаһы Польша фронтына юл алды. Ул вагондарға Ташкент тимер юлының Ново-Сергиевка станцияһында тейәлде һәм 7 майҙа Бобровица станцияһына (Нежин ҡалаһы районына) килеп етте. Бригада составында 27-се, 28-се полктар һәм 800 кешелек йәйәүле дивизион, 200 ҡылыс һәм 600 ат, 15 пулемет бар ине»*, – тип яҙа Мортазин.

Бригада 9 майҙан 12-се армия составында поляктарға ҡаршы һуғыш башлай. 16 майҙа Мортазин бригадаһына Новгород губернаһынан 900 кешелек 1-се Башҡорт кавалерия полкы килеп ҡушыла (1-се кавполк Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы полктарынан ойоштороламыла, ә дивизияның үҙе таратыла). Бынан тыш, Стәрлетамаҡтан Башревком тарафынан бригадаға тағы 100 һалдат ебәрелә.

Шулай итеп, Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы өс полклы (1-се, 27-се, 28-се полктар) ғәскәри часҡа үҫеп етә. Бригада 12-се армияның 7-се кавдивизияһы составында Киев операцияһында әүҙем ҡатнаша. Ҡанлы яуҙар барышында байтаҡ ҡына юғалтыуҙар кисерә. Һуғышта күрһәткән ҡаһарманлыҡтары өсөн комбриг Мортазин алтын сәғәт, көмөш ҡылыс менән бүләкләнә, ике тапҡыр Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була (1920, 1921 йылдарҙа).

Реввоенсоветтың 524-се һанлы фарманында уның ҡаһарманлыҡтары тураһында былай тиелгән: «Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградлана ...Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһының командиры Муса Лут улы Мортазин иптәш, түбәндәге күрһәтелгән батырлығы өсөн: Айырым кавалерия комбригы Мортазин иптәштең башлап ебәреүе менән һәм ул үҙе уртаһында ҡайнаған хәлдә 1920 йылдың 5 февралендә дошман ҡулындағы Пилява ауылына сапҡын яһалды, шуның һөҙөмтәһендә киҫкен алыштарҙан һуң Пилява ауылы һәм утары баҫып алынды. Был яуҙа 196 әсир, 30 ат, 8 пулемет, 200 снаряд һәм 2 төҙөк орудие ҡулға төшөп, был ҡоралдарҙан шунда уҡ сигенеп барыусы дошман башына ут яуҙырылды. Шул уҡ көндә Горнастайполь ауылын алғанда Мортазин иптәш, үҙ артынан ҡыҙылармеецтарҙы әйҙәп, бер нисә тапҡыр көслө контратакаларҙы ҡаршыланы һәм, бөтә яҡтан да дошман яуы менән уратылып алынған килеш, үҙенең бәләкәй генә төркөмө менән дошманға ҡаршы һөжүмгә ташланды, уның сафтарын өҙөп һәм уны ҙур юғалтыуҙарға дусар итеп, дошмандың сафтарында паника булдырҙы. Ошоноң арҡаһында беҙҙең полктарға бергә тупланырға һәм хәл иткес һөжүмгә күсергә мөмкинлек тыуҙы. Һөжүм ваҡытында дошман бөтөнләй ҡыйратылып, Горнастайполь ауылында беҙҙең ғәскәр тулыһынса нығынды. Башында Мортазин иптәш торған бригада 18 июндә, Зарудье ауылы эргәһендә һуғыш операциялары алып барып һәм үҙенән көслөрәк дошманға ҡаршы бер нисә тапҡыр атакаға күсеп, Пинязевичи ауылына сапҡын яһаны, шуның менән дошман сафтарын ныҡ тарҡатып, 1-се Подполян полкының бер батальонын һәм бер һыбайлы эскадронын юҡ итте. Сапҡын ваҡытында 173 казак әсиргә төштө, 150 ат алынды.

20 июндә Башҡорт кавалерия бригадаһы, Мортазин иптәш етәкселегендә егерме сәғәтлек өҙлөкһөҙ һуғыштан һуң, Игнатополь ауылына һәм станцияһына бәреп керҙе. 21 июндә дошман 10 мең штык туплап, артиллерия, бронепоезд һәм кавалерия булышлығында яңынан бригада өҫтөнә ябырылды. Шул саҡ бригада һәм башҡа кавалерия частары ла ҡаушап ҡалғайны, ләкин Мортазин иптәштең ҡаһарманлығы, ҡыйыулығы һәм ташып торған көс-кеүәте арҡаһында шунда уҡ ҡабат ныҡлы тәртип урынлаштырылды. Урман һәм һаҙ араһынан кавбригадаға иркенләп һуғышырға мөмкин булмағанлыҡтан, барлыҡ частар артҡа күсерелде, ә артты ҡаплау өсөн туранан-тура Мортазин иптәш командалығында 28-се кавполк ҡалдырылды. Комсостав һәм ҡыҙылармеецтар араһындағы ҙур юғалтыуҙарға ла ҡарамаҫтан, полк һуғыша-һуғыша ашыҡмай ғына артҡа сигенде һәм, бригаданың башҡа частары менән бергә ҡушылып, Мортазин иптәш тарафынан яңынан һуғышҡа күтәрелде. Уның етәкселегендә үҙенән күп тапҡыр көслө дошман өҫтөнә һөжүмгә ташланып, полк һөжүмдә кире ҡаҡты, дошмандарҙан Игнатополь ауылын һәм станцияһын таҙартты, дошман ҡулына эләккән һәм яраланған ҡыҙылармеецтарҙы әсирлектән ҡотҡарҙы».

Киев операцияһында күрһәткән батырлыҡтары өсөн Мортазин бригадаһынан 1-се Башҡорт кавалерия полкы командиры Рамаҙан Шәрипов, уның ярҙамсыһы Василий Тихомиров, 27-се Башҡорт полкы коман-

диры ярҙамсыһы Әхмәҙей Зекеров, 27-се полктың 1-се эскадроны командиры Ғәббәс Рысҡолов, 4-се эскадрон командиры Шәмсетдин Ғафаров, 1-се эскадрон командиры ярҙамсыһы Хәлфетдин Фәттәхетдинов, 4-се эскадрондың взвод командиры Заһиҙулла Ҡаҙнабаев, 28-се Башҡорт полкы командиры ярҙамсыһы Фәттәх Ибраһимов, бригада комиссарының ярҙамсыһы Шәкир Әшрәпов, бригада штабы коменданты Ғиззәтулла Хаҡбирҙиндар Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә.

13 июлдә Муса Мортазин командалығында 12-се армияның атлы төркөмө ойошторола. Уның составында Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы, 25-се кавалерия бригадаһы, Дон-Кубан, Суров, 7-се Йыйылма һәм 59-сы кавалерия полктары була. 18 июндә атлы төркөм Стырь йылғаһы аша сыҡҡанда ҙур юғалтыуҙар кисерә. Ҡыҙыл кавалерия поляктарҙың позицияларын өҙә алмай, сөнки дошман Беренсе донъя һуғышынан ҡалған окоптарҙа ныҡынған була. 23 июнь атлы төркөм менән етәкселек Голиковка тапшырыла. Ә Мортазин атлы төркөм менән 24-се уҡсы дивизия араһында дошман тарафынан өҙөлгән фронтты ябыу өсөн ебәрелә. 5 август көнө Башҡорт бригадаһы атлы төркөм составында Ковель ҡалаһын алыуҙа ҡатнаша. Беренсе булып ҡалаға 27-се Башҡорт полкы һәм 25-се кавбригаданың 1-се полкы бәреп инә.

Был ваҡыт Башҡортостанда Зәки Вәлиди етәкселегендәге Башревком ВЦИК-тың декретына ҡаршы ризаһыҙлыҡ белдереп, эштән китә, Бөрйән-Түңгәүер кантонында башҡорттар советтарға ҡаршы баш күтәрә. Республикалағы ваҡиғалар тураһында фронтҡа хәбәр килеп етә. Хәлде ишетеү менән комбриг Мортазин, отпуск алып, 12 августа Башҡортостанға ҡайтып китә.

Ваҡытлыса командир итеп бригаданың комиссары Яҡуп Кәлмитов тәғәйенләнә. Яңы командир булдыҡһыҙ булып сыға. Шуға бер аҙҙан уны командалыҡтан алып, 12-се армияның махсус бүлегенә оҙаталар. Уның урынына 2-се Дон-Кубан полкы командиры Александр Горбатов ҡуйыла.

Ҡыҙыл Армия дошманды тиҙ ҡыуа. Ошо арҡала ғәскәрҙәрҙең ылау, тәьминәт бүлектәре уларҙың артынан өлгөрә алмай. Ғөмүмән, фронтта ғәскәрҙәрҙе аҙыҡ-түлек, һуғыш кәрәк-ярақтары менән тәьмин итеү эшендә ҙур ҡыйынлыҡтар барлыҡҡа килә. Бынан тыш бер туҡтауһыҙ һуғыш, юғалтыуҙар кисергән ғәскәрҙәр ныҡ хәлһеҙләнә.

28-се Башҡорт полкы командиры яугирҙарға әҙерәк кенә булһа ла ял һорап, бригада командалығына рапорт яҙа: *«Вверенный мне полк за 2 месяца боевой жизни теряет свою боевую способность ввиду того, что люди измучены, потеря в полку больше половины, старые бойцы все переранены или убиты...»* 17 августа 28-се полктың яугирҙары артабан хәрәкәт итеүҙән баш тарта. *«Люди просят дать им хотя бы передохнуть и поесть, потому что 2-е сутки ничего не имели во рту»*, — тип хәбәр итә полк командиры.

Бындай хәл 12-се армияның бөтә ғәскәрҙәрендә лә күҙәтелә. 13 августа командарм Көньяҡ-Көнбайыш фронттың штабына былай тип яҙа: *«Вследствие безостановочных боев, движения, плохого снабжения*

и пополнения дивизии, входящие в состав армии по своему состоянию требуют экстренных мер... Сведения о боесоставе далеко не соответствуют действительности, так, например, 7-я дивизия по официальным донесениям к 1-му августа имеет 2 317 бойцов, в действительности 11 августа по личному докладу начдива и комбригов в полках всего 30—40 штыков и вся дивизия насчитывает всего 700 штыков. Башкирская бригада — 300 сабель, 2-я кавбригада — 200 сабель».

30 августан Башҡорт кавалерия бригадаһы 12-се армияның һул флангыһында хәрәкәт итә. Оператив яҡтан 24-се уҡсы дивизия начальнигына буйһона. Ҡыҙыл Армия поляк ғәскәрҙәрен ҡыҫырыҡлап Варшаваға тиклем килеп етә. Әммә тиҙҙән, генерал Пилсудский өҫтәмә көстәр туплап, Ҡыҙыл Армия өҫтөнә ябырыла. 19 сентябрҙән беҙҙең ғәскәрҙәр сигенә башлай. Башҡорт кавбригадаһы, башҡа частарҙан айырмалы рәүештә, поляктар менән һуғыша-һуғыша, ойошҡанлыҡ менән сигенә. Башҡорт атлыларына 24-се уҡсы «тимер» дивизияның артын ҡаплап барыу бурысы йөкмәтелә.

1920 йылдың 18 октябрендә Польша менән солох төҙөлгәс, Башҡорт кавалерия бригадаһы поляктар менән бергә ҡыҙылдарға ҡаршы һуғышҡан С. В. Петлюраның украин армияһына ҡаршы ташлана. 15 ноябрь көнө бригаданың 28-се, 1-се полктары Литин ҡалаһын ала. 28 ноябрь Лезнево ауылы янында Петлюраның 150 һалдаты, 2 пулеметы, 10 ылауы башҡорт атлылары ҡулына төшә. 20 ноябрь Башҡорт бригадаһы дошмандың Кличины ауылында торған бер уҡсы дивизияһы һәм кавполкына һөжүм итә. Дошман башҡорттарҙы күҙ асҡыһыҙ ут менән ҡаршы ала. Шуға ҡарамаҫтан, беҙҙекеләр ауылға бәреп инә. Ҡаты һуғыш барышында дошмандың ғәскәрҙәре ҡыйратылып, ҡыуып таратыла. Петлюровсылар 150 кешеһен юғалта, 300 кеше әсиргә төшә. 6 орудие, 20 пулемет һәм дивизия штабы Башҡорт бригадаһының ҡулына төшә.

1920 йылдың август аҙағынан Башҡорт кавалерия бригадаһы менән етәкселек иткән Александр Горбатов үҙенең «Годы и войны» исемле автобиографик китабында башҡорт яугирҙарының ҡаһарманлығын юғары баһалай. Ул былай тип яҙа:

«Башкирской бригадой в годы войны было проведено много удачных боев против белогвардейцев и интервентов, и не только против войск Колчака и панско-помещичьей Польши, но также против петлюровских и других банд. Много башкир отдали свою жизнь за дело революции. Среди них было множество отважных, преданных Советской власти красноармейцев и командиров, которые всегда были готовы выполнить любой приказ и не щадили свою жизнь, отстаивая дело Ленина. К сожалению, я не вел тогда записей и забыл имена и фамилии многих отважных людей. Но некоторые имена врезались в мою память: это исключительно смелый, инициативный командир 27-го полка Файзулин Хусаметдин Шаранович (Хисаметдин Фәйзуллин. — А. Я.), командир 1-го кавполка Ашранов (Шәкир Әшрәпов. — А. Я.), неторопливый, расчетливый

и отважный, также пользовавшийся всеобщим уважением, командир полка Муртазин (Ибраһим Мортазин. – А. Я.*) погиб смертью храбрых еще до моего прибытия в бригаду, но был мне знаком так, как будто я с ним встречался, столько я слышал хорошего о нем от многих башкир; отважным воином был Гасапов Усман (Усман Ғайнанов. –* А. Я.*), волевой, честный и боевой командир. Отличной репутацией пользовались политработники – комиссар бригады Кузьминский, комиссары полка Кучаев и Комалов Гали. Вся бригада хорошо знала фамилии своих отважных командиров эскадронов Ишмуратова, Заянчурина (Ғәҙелша Ейәнсурин. –* А. Я.*), Казнобаева (Заһиҙулла Ҡаҙнабаев. –* А. Я.*) и Гафурова (Шәмсетдин Ғафаров. –* А. Я.*). А сколько еще было людей, фамилий которых я не могу припомнить!»*

1920 йылдың ноябрендә Петлюраның армияһын ҡыйратыуҙа ҙур ҡаһарманлыҡтар күрһәткән Башҡорт кавалерия бригадаһының командирҙары һәм яугирҙары тағы ла Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. Совет хөкүмәтенең юғары наградаһына комбриг Александр Горбатов, 1-се Башҡорт кавалерия полкынан 2-се эскадрон командиры Алексей Кудрявцев, атлы-пулемет взводы командиры Лоҡман Кучаев, 2-се эскадрондың старшинаһы Йыһанша Мәхмүтов, взвод командиры Зариф Фәхретдинов, полк адъютанты Леонид Пискунов, 1-се эскадрон старшинаһы Денис Белевич, взвод командиры ярҙамсыһы Абдулхалиҡ Миңлевәлиев, яугир Ғәметдин Ҡатаранов, бригада штабының ат ҡараусыһы (коноводы) Хәбибулла Ильясов, 27-се Башҡорт кавалерия полкы командиры Хисаметдин Фәйзуллин, 27-се полктың хәрби комиссары ярҙамсыһы Владимир Воробьев, 1-се эскадрон командиры Ғәҙелша Ейәнсурин, 2-се эскадрон командиры Трофим Фетисов, 4-се эскадрон командиры Кинйәбай Ишмөхәмәтов, 3-сө эскадрондың взвод командиры Шәмсетдин Яҡшыгилдин, взвод командирҙары Ҡ. Ҡаһарманов, Байғужа Иманғолов, 4-се эскадрон старшинаһы Усман Шәйәхмәтов, 1-се эскадрон командиры Хәлфетдин Фәттәхетдинов, 1-се эскадрон яугирҙары Шәрәфетдин Мөхтәров, Йәләлетдин Фәйезов, пулемет командаһы яугиры Рәхмәтулла Абдуллин, 2-се эскадрон яугирҙары Ҡиәметдин Ҡоҙаҡаев, Кәлимулла Ғатауллин лайыҡ була.

1920 йылдың авгусында Башҡортостанға ҡайтыу менән Муса Мортазин ихтилалды тиҙерәк артыҡ ҡорбандарһыҙ туҡтатыу өсөн бөтә көсөн һала. Яңы Башревкомға ышанмаған башҡорттар, Муса Мортазин ҡайтыу менән, уны үҙенең яҡлаусыһы итеп күрә. Абруйлы сардарҙың Башҡортостанға ҡайтыуы ихтилалдың тамамланыуына ҙур булышлыҡ итә.

1920 йылдың декабренән Мортазин республиканың Хәрби эштәр буйынса халыҡ комиссары булып эшләй. 1921 йылдың июнендә ул Автономиялы Башҡорт Совет Республикаһының етәксеһе – Башҡортостандың Үҙәк Башҡарма Комитеты (БашЦИК) рәйесе итеп тәғәйенләнә. Шулай итеп, Башҡортостан өсөн иң ауыр осорҙа, Граждандар һуғышынан һуң хужалығы тарҡалып, ҡот осҡос аслыҡ ялмаған республика менән етәкселек итергә тура килә сардар Мортазинға.

Киләһе йылына, йәғни 1922 йылда, Мортазин хәрби белем алыу маҡсатында Мәскәү Юғары хәрби-педагогика мәктәбенә уҡырға китә. 1924 йылда, хәрби мәктәпте тамамлап, Эшсе-Крәҫтиән Ҡыҙыл Армияһының М. В. Фрунзе исемендәге Хәрби академияһына уҡырға инә. 1927 йылда, академияны тамамлап, Ҡыҙыл Армияның Баш идаралығында резервта тора. Ошо йылда Мәскәүҙә «Башҡортостан һәм башҡорт ғәскәрҙәре Граждандар һуғышында» тип исемләнгән китабы баҫылып сыға.

1928 йылдың ғинуарынан 11-се кавалерия дивизияһының 3-сө бригадаһы командиры, 8-се кавалерия дивизияһының бригада командиры булып хеҙмәт итә. 1929 йылдың декабренән Мәскәүҙә Ҡыҙыл Армия Баш идаралығының Аттар составын яңыртыу буйынса идаралыҡ инструкторы, 1931 йылдан ошо идаралыҡтың 2-се секторы начальнигы урынбаҫары, артабан 4-се, 2-се секторы начальнигы булып хеҙмәт итә. 1935 йылдың февраленән Аттар составын яңыртыу буйынса бүлектең 2-се бүлексәһе начальнигы була. Ошо уҡ йылдың декабрендә Муса Мортазинға комбриг званиеһы бирелә.

Ҡаһарман сардар, легендар комбриг, башҡорт халҡының данлы улы Муса Мортазин 1937 йылда репрессиялана. 27 сентябрь көнө СССР Юғары Судының хәрби коллегияһы уны үлем язаһына хөкөм итә. Шул уҡ көндә атыла. 1956 йылдың 14 июлендә реабилитациялана.

Мортазин ойошторған һәм 1920 йылдың авгусына тиклем командалыҡ иткән Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы ҙур юғалтыуҙар кисереп, кешеһе аҙ ҡалғанлыҡтан, 1920 йылдың 10 декабрендә 12-се армия командующийының фарманы менән ике полклы итеп үҙгәртелә, уларға 1-се һәм 2-се Башҡорт полктары исеме бирелә.

1921 йылдың яҙында Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы айырым ғәскәри берәмек булараҡ бөтөрөлә. *«Командармдың фарманы менән Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы 12-се дивизия (Петросовет исемендәге сик буйы дивизияһы) начальнигына буйһондоролдо, уның бойороғо буйынса бригада айырым-айырым дүрт эскадрон итеп үҙгәртелеп, Польша – Румыния дәүләт сиген һаҡларға тейеш ине. Ошо фарманды үтәү маҡсатында бригада дүрт эскадронға бүленде, уларға 15-се, 16-сы, 17-се һәм 18-се Айырым Башҡорт сик буйы эскадроны тигән исемдәр бирелде. 15-се эскадрон Каменец-Подольск, 16-сыһы – Могилев-Подольск, 17-сеһе – Рыбинцы, 18-сеһе Тирасполь ҡалаларына урынлаштырылды»*, – тип яҙа үҙенең китабында Муса Мортазин.

1921 йылдың ноябрендә башҡорт эскадрондары сик буйынан алынып, 1-се атлы корпустың 2-се Червонный (Ҡыҙыл) казак дивизияһы ҡарамағына күсерелә. Бында 15-се, 16-сы, 17-се башҡорт эскадрондарынан 12-се Червонный казак полкы ойошторола, ә 18-се эскадрон шул уҡ дивизияның 7-се Червонный казак полкына ҡушыла.

1922 йылда Башҡортостан хөкүмәте (БашЦИК) 12-се полкты шефлыҡҡа ала. Ошо уҡ йылдың яҙынан полктың клубында айына бер тапҡыр башҡорт телендә стена гәзите сығарыла. 1922 йылдың көҙөндә 12-се полктан 200 башҡорт һалдаты, Польша һуғышында ҡатнашҡан

элекке Башҡорт кавалерия бригадаһы яугирҙары, демобилизациялана. Уларҙы 250 украин призывнигы алмаштыра.

1923 йылдың 12 ғинуарында Башҡортостан хөкүмәте 12-се Башҡорт полкына Ҡыҙыл орден байрағы бүләк итә. Байраҡты 2-се дивизияның командиры тапшыра. Байраҡ менән бергә Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитетының грамотаһы ла тапшырыла. Унда былай тиелә:

12-му Башкирскому полку Червонного Казачества

Центральный исполнительный Комитет Советской Башкирской Социалистической Республики, высоко оценивая подвиги красноармейцев, командного и политического состава 12-го Башкирского полка Червонного Казачества, совершенные им в боях на польском фронте и польско-румынской границе, одержав бесчисленный ряд блестящих побед над врагами трудящихся, от имени Башкирской Социалистической Советской Республики ДАРИТ ПОЛКУ КРАСНООРДЕНСКОЕ ЗНАМЯ.

Башкирский Центральный Исполнительный Комитет Советов надеется, что и в будущем 12-й Башкирский полк Червонного Казачества будет твердо стоять на защите прав пролетариата, завоеваний октябрьской революции, с честью, высоко будет держать Краснорденское знамя, заслуженное кровью лихих башкирских кавалеристов, в битвах с наймитами капитала и не запятнает его никакими, порочащими высокое звание воина-революционера, проступками.

Пусть подвиги старых кавалеристов-башкир, участников жестоких битв с врагами трудящихся, ободряют молодых казаков полка, и пусть заслуженное ими Краснорденское знамя служит символом новых подвигов казаков полка и новых побед над врагами пролетариата.

Председатель Башкирского Центрального Исполнительного Комитета ***Кушаев***

Члены Президиума ***Зубарев, Беляев***

Военный Комиссар Башкирской Социалистической Советской Республики ***Терегулов***

Секретарь ЦИКа ***Терегулов***

Һуңғараҡ полкка Башҡортостан хөкүмәтенең исеме, йәғни Башкирский ЦИК исеме бирелә һәм нумерацияһы 10-сы тип үҙгәртелә. Һуңыраҡ өҫтәп тағы Верхнеуральский исеме бирелә. Шулай итеп, ул 10-й кавалерийский Верхнеуральский Червонного казачества полк имени Башкирского ЦИК тип атала башлай. Полк составында башҡорт эскадроны ҡалдырыла. Эскадрон Башҡортостан призывниктары менән тулыландырылып тора.

Башҡортостан хөкүмәте үҙе шефлыҡҡа алған полкы менән тығыҙ бәйләнеш тота. 1930 йылда БашЦИК президиумы ағзаһы Дауытов Изяславль ҡалаһында торған 10-сы полктың хәле менән танышып ҡайта. Уның менән бергә полктың комиссары Радомский килеп, 1930 йылдың

3 июнендә БашЦИК-тың ултырышында доклад менән сығыш яһай. Хөкүмәт ағзалары Дауытов менән Радомскийҙың докладтарын тыңлағандан һуң 10-сы полк буйынса ҡарар ҡабул итә. Унда былай тиелә: «*...Принимая во внимание, что 10-й Кавполк, первоначально сформированный из бойцов башкирской национальности, имея особые заслуги, исторически связан с Башкирией, пополняется новобранцами из Башреспублики, имея в своем составе башкирский национальный эскадрон, БашЦИК признает необходимым усилить шефскую работу с привлечением к участию в шефстве широких трудящихся масс Башкирии...*

...Исходя из исторической связи 10-го полка с Башкирией, поддерживаемой со дня формирования полка, БашЦИК, учитывая необходимость создания благоприятных условий для массовой работы со стороны национальной республики в направлении воспитания национальных башкирских кадров, считает нахождение в количественном отношении башкир в составе полка в данное время недостаточным для массовой работы и поручает Теруправлению Округа БАССР войти с ходатайством по своему ведомству перед Реввоенсоветом СССР об увеличении разверстки новобранческого пополнения полку из Башкирии до 200 человек, направляя, вместе с тем, наиболее грамотных, по преимуществу из рабочих районов – Баймака и Белорецка, а также поручает Теруправлению Округа содействовать укомплектованию полка средним начсоставом, имея при этом в виду необходимость в ближайшее время дать полку трех командиров взвода из националов...»

Советтар Союзының ҡораллы көстәре составында авиация, танк, механизацияланған ғәскәрҙәр күбәйеү менән 1937 йылдың аҙағында – 1938 йылдың башында кавалерия ғәскәрҙәре байтаҡҡа ҡыҫҡартыла. 8 кавдивизия, 2 милли кавбригада һәм 7-се кавкорпустың идаралығы бөтөрөлә. Артабан 1-се кавалерия Червонный казак корпусы (1-се, 2-се кавдивизиялар), шул иҫәптән 2-се дивизияһы составында булған БашЦИК исемендәге 10-сы кавалерия Верхнеуральск Ҡыҙыл казак полкы таратыла. Тарҡатылған 1-се кавкорпус нигеҙендә 4-се кавалерия корпусы ойошторола (32-се, 34-се дивизиялар).

Ошоноң менән элекке Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһының тарихи күсәгилешлеген һаҡлап килгән, Башҡортостан менән тығыҙ бәйләнеш тотҡан полктың да тарихы тамамлана.

Йырлап килә Мортазиндың эскадрондары. Мөғәлләм Мирхәйҙәров хәтирәләре

Әбйәлил районы Асҡар ауылында йәшәүсе табип Марсель Мирхәйҙәровта атаһы – фольклорсы, сәсән Мөғәлләм Шәйхәттәр улы Мирхәйҙәровтың (1900–1974) хәтирәләре һаҡлана. Был хәтирәләр Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте, башҡорт ғәскәрҙәре тарихын өйрәнеүҙә ҡиммәтле сығанаҡ булып тора. Унда бигерәк тә легендар комбриг Муса Мортазиндың сардарлыҡ сифаттары асыҡ һүрәтләнгән. Асҡар ауылының 19 йәшлек егете Мөғәлләм Мирхәйҙәров Мортазиндың полкында ылаусы булып йөрөй. Шунда ул 1919 йылдың февраль аҙағы һәм март башындағы Асҡарҙа булып үткән ҡанлы бәрелештәрҙең шаһиты була. Әйткәндәй, был ваҡиғалар легендар комбригтың «Башҡортостан һәм башҡорт ғәскәрҙәре Граждандар һуғышында» исемле китабында ла бәйән ителә.

«Атайым был хәтирәләрҙе 1965 йылда яҙып ҡалдырған. Совет йылдарында районды «Осҡон» гәзитендә гел генә Смоленск полкын маҡтап яҙҙылар. Ә бына Муса Мортазин тураһында бер һүҙ ҙә яҙмай торғайнылар. Был хәтирәләр үҙенең дөрөҫлөгө менән ҡиммәтле», – тигән үҙенең хатында Марсель Мирхәйҙәров. Эйе, совет заманында маҡталып, ә ысынында ябай халыҡты талауҙан башҡа бер нәмәне белмәгән, аҡтар килһә, ҡурҡып ҡасып йөрөгән Смоленск полкы хаҡында хәҙер беҙ яҡшы беләбеҙ. Мөғәлләм Мирхәйҙәровтың иҫтәлектәре лә тап шул тарихи фактты тағы бер тапҡыр раҫлай. Икенсе яҡтан ул Муса Мортазиндың ҡурҡыу белмәҫ сардар ғына түгел, ә бик оҫта артиллерист булыуын да асыҡ һүрәтләгән. Китап уҡыусыларға ошо хәтирәләрҙең ҡыҫҡартылған вариантын тәҡдим итмәксемен:

«1919 йылдың 28 февраль көнө. Ҡар күптән яумағанлыҡтан, иртәлекисле әсе, сасҡау һыуыҡ тора. Көн урталарында ғына әҙ-мәҙ генә йылыраҡ ине. Ҡайһы бер төндәрҙә көнбайыштан көслө ел иҫеп торғас, йөрөш юлдар таҡырланған. Бараһы ерҙәргә бер ҡыйынлыҡһыҙ йөрөп ҡайтырға була ине. Яуған ҡарҙы ел тау итәктәренә, ҡыраз аҫтарына, һаҙлыҡтарға, ағаслы соҡорҙарға көрт итеп, ҡайһы бер урындарға ҡатырып та, йә өҫтән генә ҡатыра биреп, аҫтын ярмаландырып өйгән ине.

Яйыҡ йылғаһы буйында урынлашҡан казак ауылдары Николай батша яҡлы булып, артабан да илдә монархияның хөкөм һөрөүен теләйҙәр ине. Шуның өсөн дә ундағы казактар атаман Дутов, Беловтарҙы яҡлап, уларҙың отрядына ҡушылды. Ошо ауылдарҙың ир-егеттәре бөтә-

һе тиерлек адмирал Колчактың армияһында булды. Казактар Уралдың көнсығышында йәшәгән башҡорт ауылдарын баҫып торҙо.

1918 йылдың июнь айында атаман Анненков (аҡ генерал) отряды менән Асҡарға килеп, һуғышҡа кешеләр биреүҙе талап итеп, олоҫ старшинаһы алдында ультиматум ҡуйҙы. Йәштәрҙән 700–800 кешене туплап, Ҡурған, Ҡустанай яҡтарындағы ҡыҙыл партизандарға ҡаршы һуғышҡа алып китте. 1898, 1899, 1900 йылдарҙа тыуған күп кенә башҡорт йәштәре һуғышта ятып ҡалды. Бик һирәктәре генә тыуған ауылдарына имен-һау әйләнеп ҡайта алды. (Был ваҡиғаларҙы Муса Мортазин үҙенең китабында былай тип бәйән итә: *«1-се башҡорт кавалерия полкы 1918 йылдың июнендә ойошторола башланы. Кавалерия полкын комплектлау өсөн Тамъян-Ҡатай кантонының Күбәләк-Тиләү, Тамъян-Түңгәүер, Ҡатай һәм Туңғатар улыстары бүленде. Әммә Вәлидовтың 1-се Башҡорт кавалерия полкын төҙөү тураһында фарманы сыҡҡан көндәрҙә аҡ гвардеец Анненков беҙҙең полк кешеләр һәм аттар аласаҡ кантонға һөжүм итте. Кантонды баҫып алған Анненков Башҡорт кавалерия полкының команда составына тик рус казак офицерҙарының ғына ҡуйылыуын талап итте һәм теләгенә иреште. Тәүге һуғышта уҡ казак офицерҙары (эскадрон командирҙары) сафтан сыҡҡас, полктың иҫән ҡалған өлөшө 1-се эскадронға (полктың казактарға буйһонмаған өлөшө. – А. Я.) ҡушылды»*.

Асҡар ауылы олоҫ үҙәге булғас, бында ҡыҙылдар ҙа, аҡтар ҙа килеп китеп торҙолар. Тәү мәлдәрҙә һирәк-һаяҡ ҡына бәрелештәр булып торҙо. Ҡанлы һуғыштар булманы.

1919 йылдың 19 февралендә башҡорт халҡы ысынлап, үҙе теләп ҡыҙылдарға ҡушылды. Көнсығыштан һөжүм иткән, Уралға баҫып инеп килгән Колчак ғәскәрҙәрен туҡтатыу өсөн Асҡарға, Тамъян-Түңгәүер олоҫона, Башҡорт армияһы тарафынан Муса Мортазиндың кавалерия полкы һәм, уға ҡушып, Смоленск йәйәүле полкы ебәреләә. 28 февралдә Асҡарға Муса Мортазин полкы килә тигән хәбәр таралды. Төштән һуңыраҡ үргә ауыл осонан, Темәс яғы юлынан килгәндәре күренде. Муса Мортазиндың атлылары, «Эскадрон», «Күгәрсен», «Марш» көйҙәренә һалынған йырҙарҙы йырлап, тын ғына ултырған Асҡарҙы яңғыратып килеп инде.

Айырым-айырым булып дүрт эскадрон, улар артынса йөк тейәлгән аттар, ҡайһылары саналарға ултырған байтаҡ ҡына йәйәүле һалдаттарҙың килеүе күренде. Ауыл халҡы, бигерәк тә йәштәр, үҫмерҙәр уларҙың йырлашып килгән тауыштарына елкенеп, дәррәү ҡаршы алырға сыҡты. Барыһы ла бергәләп ул саҡтағы баҙар урынына, хәҙерге «Дежурка» һәм «Культ һәм йыһаз» магазиндары эргәһендә туҡталдылар. Муса Мортазин Смоленск полкы штабы менән Асҡарҙа ҡалды, ә атлылар Дауыт ауылында урынлашты. Ауыл старостаһы уларҙы һәр йортҡа бүлеп бирҙе. Ул саҡта Яйыҡ буйындағы казак ауылдары Колчак армияһы частары ҡулында ине. Аҡтар Урал эсенә һөжүм итергә әҙерлек алып барҙы. Шулай уҡ Белорет ҡалаһы улар ҡулында ине. Әүжән, Үҙән, Егәҙе,

Стәрле ҡалаһы яғына һөжүм итәләр ине. Колчак ғәскәре Баймаҡ, Темәскә ҡарап та баралар ине. Беҙҙең Асҡар ауылы ла фронт һыҙығында булды. Аҡтарҙың күҙәтеү (разведка) төркөмдәре Ҡоръятмаҫ тауы итәгендә йыш күренәләр ине. Яйыҡ буйындағы ауылдар казак отрядтары менән тулы. Улар, көр аттарында бараһы урындарға тиҙ генә елеп барып, ҡайһы берҙә һөжүм дә яһайҙар ине. Көндәр йылыныу менән казактарҙың һөжүме лә йышайҙы. Уларҙың Ташбулат, Таштимер, тауҙағы Мөхәмәт, Исхаҡ, Буранғол ауылдарына һөжүм итеүе күренә башланды.

Муса Мортазин һәм Смоленск полктарының ҡоралдары ошонан ғибәрәт ине: биш пулемет, ике өс дюймлы туп, дүрт эскадрон атлылар, винтовка менән ҡоралланған йәйәүле һалдаттар һәм хужалыҡ взводы. Снаряд һәм патрондар самалы ғына. Икенсе төндә үк, ятыр алдынан ҡупҡан ғауғаға ҡушылып, Мортазиндың бер эскадроны менән беҙҙә ятҡан пулеметсылар (Смоленск полкы) Салауат яғынан баҫып килгән казактарға ҡаршы китте. Улар иртәнсәк, таң атыуға, М. Мортазиндың полкынан берәүҙе юғалтып, береһе яраланып ҡайттылар. Беҙҙә ятҡан пулеметсылар: «Ой, казактар күп һәм көслө киләләр, белмәйем ни булыр, имен-һау ғына үҙ яғыбыҙға әйләнеп ҡайтҡанда бәхетле булыр инек, әлдә беҙ имен әйләнеп ҡайттыҡ», — тип үҙ-ара һөйләшәләр ине. Муса Мортазин полкының ике эскадроны Салауат ауылынан аҡтарҙы ҡыуып сығарғас та, ике взвод йәйәүле һалдаттарҙы оборона тоторға ҡалдыра.

Икенсе көн иртә менән туптар ултырған урында туп тауышы һәм ауылдың Магнитка ҡараған яғынан, Иҙәш йылғаһы яҡлап, пулемет тауышы ишетелде. Ауыл халҡы, йәштәр, үҫмерҙәр туп шаулап, дөрһөлдәп атҡан урынға йыйылды. Ҡоръятмаҫ тауы битендә улай ҙа, былай ҙа үткән кешеләр күренә. Күп тә үтмәй юл буйлап 12 һыбайлы күренде. Улар Иҙәш күперенә килеп етер-етмәҫтән ауыл осонда ултырған пулеметтан ут асылды. Улар пулемет уты аҫтында кирегә әйләнеп ҡастылар. Смоленск полкының артиллерия орудиеһы башлығы юл буйлап ҡасҡан әлеге атлыларға бер туптан ата башланы. Снарядтар казактарҙың тирә-яғына төшкөләп ярыла, улар ҡурҡа төшөп, аттарын йәнфарман ҡыуып тирә-яҡҡа таралышып, Ҡоръятмаҫ тауына сабалар, ҡасалар. Ҡыуыуға ҡарамаҫтан, ауыл йәштәре орудие янына йыйылышҡан. Мин дә унда бар инем. Муса Мортазин орудие эргәһенә килеп, теге командирҙан: «Ҡана, бир әле миңә бинокленде, — тип һорап алды ла, — ноль-ноль 92», — тип орудиеға наводка биреүе булды, атып ебәргән снаряд юлдан ҡасып барған 5–6 казактың бер яғына төшөп шартлап, бер казак шунда ҡолап ятып ҡалды. Юлдан юл ситләп ҡасҡандарҙың артынса бер-бер артлы снарядтар төшөп, казактарҙы ҡуян һымаҡ ҡасырға мәжбүр итте. Бар көскә аттарын ҡыуалап, Ҡоръятмаҫ тауына үрмәләй башланылар. Үренә мендем тигәндә генә снаряд тағы бер һыбайлыны атынан йыға һуҡты. Аты үлде, үҙе эләгә-йығыла мылтығын ҡулына тотоп, тау башына көскә күтәрелеп, ашаһына төшөп үлемдән ҡотолоп ҡалды. Муса Мортазиндың снарядтарҙы туп-тура аҡтарҙың өҫтөнә яуҙырыуын күреп, ауыл халҡы уны оҫта тупсы ла (артиллерист) икән, тип хайран ҡалып, үҙ-ара һөйләште. (Был ғәжәп түгел, сөнки Мортазин

1912–1914 йылдарҙа Алыҫ Көнсығышта артиллерия бригадаһында хеҙмәт итә. 1913 йылда өйрәнсектәр командаһында уҡып, бомбардир (наводчик) исемен ала. Беренсе донъя һуғышында, 1914 йылдың сентябренән 1917 йылдың майына тиклем 9-сы Себер уҡсылар артиллерия бригадаһында кесе фейерверкер (артиллериялағы кесе унтер-офицер чины) булып Көнбайыш һәм Румыния фронттарында утты-һыуҙы кисеп ҡайта. – *А. Я.*)

1-се Башҡорт полкының да, Смоленск полкының да көстәре тирәләге ауылдарға ебәрелмәне, һаҡлыҡта тотолдо. 4 март көнө иртә таң алдынан атыш башланды. Смоленск полкы һәм ауылдағы 60-лаған боевой дружина отрядтарына шул яҡ ауыл ситенән уларға ҡаршы мылтыҡтан, пулеметтан ата-ата, ауылға яҡын һаҙлыҡтан килгән казактар күренә. Бер өс дюймлы тупты Көләшә битләүенә ултыртып, ауылға ҡарап аталар. Асҡарҙа хәл ҡырҡыулаша башланы. Бер снаряд беҙҙең кәртәгә, икенсеһе мейес торбаһына килеп тейҙе. Мортазин Дауытҡа сапҡынсы ебәреп, ундағы 3-сө эскадронға казактарҙың артына сығып, Һыртан һаҙы, Йомаҡа яғынан һөжүм итергә бойороҡ бирә. Был һөжүмгә казактар ҡаршы тора алмай Иҙәш ҡусҡары яғына сигенеп, ҡасып ҡотолғандар.

Казактарҙың Белорет ҡалаһы яғынан килеп, Исхаҡ һәм Буранғол ауылдарын баҫып алғандары ишетелде. Муса Мортазин бер эскадрон менән Смоленск полкын Асҡарҙа ҡалдырып, өс эскадроны менән Буранғол, Исхаҡҡа китте. Ундағы казактарҙы ҡыуып сығарған арала, иртә менән, сәғәт 10-дарҙа аҡтарҙың 1200 кешелек ғәскәре тағы ла Асҡарҙы килеп баҫты. Мылтыҡ, пулемет тауыштары ишетелә, тағы ла, Көләшә битенә ултыртып, туптан ауылға ҡарай ата башланылар. Асҡарҙа ғауға күтәрелде, урамда ыҙғыш. Ауыл ситендә атыш бара, Ҡырҡтытау битендә мылтыҡ тотоп, атыша барған һалдаттар күренә.

Ауыл халҡының күберәге Алмас, Фәйез тауҙарының битендә, Таңатар йылғаһы менән быуа араһында йыйылған. Беҙ ике ылауҙа икешәр йәшник снаряд тейәп, Темәс юлына ҡарап барабыҙ. Подводчик һәм йәйәүле һалдаттар быуа тирәһенә тығылышҡан. Снарядтар беҙҙең ян-яҡҡа яуҙыра. Мортазиндың атлылары ылауҙағы һәм йәйәүле һалдаттарҙы, сигенгәндәрҙе: «Давайте, не отступать! На рассыпную!» – тип бер урындан икенсе урынға баралар. Взвод командиры Ғәббәс Рыҫҡолов ҡамсыһын болғап: «Ҡурҡмағыҙ! Кире боролоғоҙ!» – тип һөрән һала. Ләкин бер паникаға бирелгән һалдаттар сигенеүен, ҡасыуын дауам итә. Казактар ҡыҫа. Тегенән дә, бынан да аталар. Ҡайһы берәүҙәре өсҡә үк менеп килә. Шулай атыша-атыша барып сигенеп, һигеҙ саҡрымда ятҡан Ҡолҡас ауылына барып еттек.

Бер аҙ хәл алдыҡ. Хәҙер Ҡолҡасты үтеп, Ҡыҙыл аша сығып, юл буйлап Ҡыһыҡ тирмәненә ҡарап барабыҙ. Бер соҡор урында снарядтар тейәлгән йәшнигем төшөп китте лә, уны бер үҙем күтәрә алмайым. Һалдаттарҙың (Смоленск полкынан. – *А. Я.*) береһе лә ярҙамлашмай. Инәләм, ә улар миңә иғтибар ҙа итмәй, Ҡырҙас ауылы яғына барыуҙарын беләләр. Бер таныш атлы һалдат ҡына (Мортазин полкынан. – *А. Я.*)

снарядтарымды йәшнигемә һалышты. Бер аҙ барғас, алдағы йәйәүле һалдаттар, ак̡тар беҙҙе алдан килеп сығып к̡аманылар, тип, сананан төшөп, Ирәндек битенә үрелә башланы. Бер аҙҙан һуң: «Эй, не бойтесь, свои, Муртазинцы нас остановили», — тип беҙгә тауыш бирәләр. Һалдаттар алға к̡арай китә башлағайнылар, Мортазин атлылары: «Куда? Вернитесь обратно, в Аскарово, без всяких гвоздей!» — тип беҙҙе — ылауҙарҙы һәм һалдаттарҙы ла кире борҙолар. Күп тә тормай, юл ситләп Мортазиндың атлылары үтә башланы. Хәҙер беҙ казактарҙы Ас̡карҙан бәреп сығарабыҙ, тиҙәр. Ул арала эйәрсән офицерҙары менән Мортазин үҙе үтеп китте һәм уларҙың артынан Смоленск полк командирҙары штабы менән эйәрҙе. Мортазин: «Мы вот покажем как воюют, они еще не видали огненного боя», — ти. Хәҙер беҙ күрмәгәндәрен күрһәтәбеҙ, тип барыбыҙ ҙа улар артынан к̡алмай сабабыҙ.

Ас̡карға бер ни ҙә булмаған кеүек килеп индек. Ауылда ла, юлда ла бер казак күренмәй. Уларҙан елдәр иҫкән. Мортазин килгәнен белеп к̡алып, улар, уттан к̡урк̡кандай, тиҙерәк һыпыртыу яғын к̡арағандар. Беҙҙәге пулеметсылар тағы ла беҙгә килде. Мин дә атыма снарядтар тейәгән көйө кире боролдом. Пулеметсылар: «Ой-ой, злой, твердый, настоятельный командир. Страха и смерти не знает. На наших командиров как он нажал, плетка над ними так играет. Два-три раза ударил нашего командира, говорит: «Так, разве воюют, разве так отстаивают власть рабочих и крестьян», — тип һөйләшәләр. Атайым күтәрелеп, к̡упырайып китте: «Да мы его ни первый раз знаем. Он такой вояка. От него казаки как от бури боятся. Не раз он с ними воевал. Прошлым летом одного белого генерала чуть не поймал. Да его бы он убил бы, ладно, не попал», — тине. Белов генералды сак̡-сак̡ тотмай ғына к̡алғанын үҙем дә беләинем. Ул һары к̡ом төҫөндәге еңел машинала Иштк̡ол яғына к̡арап к̡ас̡канын үҙем күрҙем. (Был һуғыш тураһында Мортазин үҙе бына нимә тип яҙа: *«...дошман, Магнит тирәһенә ике кавалерия һәм бер пехота полкын туплап, 18 мартта көтмәгәндә 1-се Смоленск полкының Әбйәлил (Ас̡кар) ауылында торған ике батальонына һөжүм иткән. Ҙур юғалтыуҙарға тарыған батальондар, туптарын һәм һуғыш кәрәк-ярак̡тары тейәлгән ылауын к̡алдырып, дошмандың көслө к̡ыҫымы аҫтында Әбйәлилдән (Ас̡карҙан) К̡ырҙас ауылына сигенгән.*

Батальондарҙың сигенеүе шул тиклем тиҙ булған, хатта ул тура ла 1-се Баш̡к̡орт кавалерия полкы командирына (Мортазинға. — А. Я.*) хәбәр ҙә ебәрелмәне. Полк командиры был вак̡ытта бер эскадронды Так̡һыр — Дәүләтша, икенсеһен Иштк̡ол — Тупак̡ йүнәлешенә ебәреп, үҙенең төп көсө — бер туплы һәм алты пулеметлы ике эскадроны менән Рауилда тора ине. Баш̡к̡орт кавалерия полкының Смоленск полкы батальондарындағы делегаты, к̡ыйралыш вак̡ытында шунда булып, сак̡-сак̡ сығып ыс̡кына алған һәм, полк командирына килеп, хәлде һөйләп бирҙе. Полк командиры, әлеге шарттарҙы баһалап к̡арағандан һуң, полкка сигенергә ярамай, тигән к̡арарға килде, сөнки сигенеү к̡ыҙылдарҙың полкка булған*

шик-шөбһәһен арттырасаҡ ҡына ине. Шуға ла, ауыр юғалтыуҙар хаҡына булһа ла, уның аҡтарға һөжүм яһарға ҡыйыулығы етте һәм, бер эскадронды Таҡһыр—Дәүләтша һәм Ишҡол яғынан һөжүм итеүсе полктың флангыһын һаҡлау өсөн ҡалдырып, бер туплы өс эскадрондың һәм ылаусыларҙан, пехотанан, пулеметсыларҙан торған взводтың һөжүмен ойоштороҙо. Был һөжүмгә шундай бурыс ҡуйып эшләнелде... Һөжүм бөтә ерҙә лә бер ваҡытта башлана. Һөжүмдең көтөлмәгәндә булыуы тетрәткес тәьҫир итәсәк, ҡаушап төшкән казактар ҡаршылыҡ күрһәтә алмайынса, йөҙәрләгән үлектәрен һәм әсирҙәрен ҡалдырып, шулай уҡ әле генә Смоленск полкынан баҫып алған ылау менән артиллерияны ташлап, тиҙ генә һыпыртасаҡ. Ғәмәлдә шулай булып сыҡты ла. Тик ауылдан һөрөп сығарылғанға тиклем казактар үҙҙәренең ҡара эштәрен башҡарып өлгөргән инде. Башҡорттарҙы талағандар, бер нисәһен сығарып атҡандар. (Шуға ла ауыл халҡы полкты шатланып ҡаршыланы. — А. Я.)»

Асҡар ауылы 3—4 көнгә һаҡҡа алынды. Хәлил, Күсей, Ҡаҙмаш ауылдары алынды, тип хәбәр иттеләр. Ишҡолда аҡтар тора, тип сапҡын килеп әйтте. Иртәгеһен Мортазин полкы менән Гусевка, Ишҡол ауылдарына йүнәлде. Смоленск полкы Асҡарҙа оборонала ҡалды. Гусевканан аҡтар ҡасты, Ишҡолға һуңға ҡалғас, боролоп, Рауил ауылына туҡтап төн үткәрҙек. Таң атыуға Смоленск взводы килеп, Асҡарҙы тағы аҡтар алған, тип хәбәр итте. Мортазин Асҡарға ҡарай юл алды. Дошман снарядты етә алмаҫ, Асҡарҙан 2—2,5 саҡрым алыҫлыҡтағы Суҡ ерек (Ерек) йылғаһы эргәһендә туҡтап, ул Ғәббәс Рыҫҡоловҡа: «Һин эскадроның менән үҙ ауылыңа (Ярлыҡап ауылына) һөжүм ит. Ер һиңә таныш», — тине. Ә Фәттәх Ибраһимовҡа: «Ылаусылар менән анау түбәгә мен дә төш, мен дә төш. Көс ағыла, тип уйлаһындар», — тине. Ә Смоленск взводы командирына: «Ты, иди со своими бойцами вон, в сугроб и смотри. Махну плеткой вперед подымайся, махну назад ложись», — тип бойороҡтар бирҙе. Үҙе орудиеға яҡынлап, биноклен алды һәм наводка бирә башланы. Беҙҙең туптың утынан казактар һөрлөгөшөп ҡаса башланы. Шул ваҡытта Асҡарға Ғәббәс Рыҫҡолов эскадроны килеп инде. Һуңынан Асҡарҙың Дауыт ауылына киткән осонда аҡтарҙың 10—12-ләп аты, күп кенә офицер, һалдаттары юҡ ителеүе асыҡланды».

1919 йылдың февраль—март айҙарында үҙе шаһит булған бына ошондай шанлы йылдар ваҡиғалары хаҡында хәтирәләрен яҙып ҡалдырған Мөғәлләм Мирхәйҙәров. Үрҙәге хәтирәләрҙең авторы — Мөғәлләм Шәйхәттәр улы Мирхәйҙәровтың үҙе тураһында бер нисә һүҙ әйтеп үтке килә. Башҡорт халҡына «яҡты» тормош алып килгән большевиктар ғына маҡталып, Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте етәкселәренең исемен телгә алыу ҙа милләтселеккә һаналған осорҙа Муса Мортазин тураһында иҫтәлек яҙып ҡалдырыу ул ҙур батырлыҡ. Сөнки тап ошо осорҙа, 1963 йылда, тарихсы Билал Юлдашбаев Зәки Вәлиди етәкселегендәге Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтен һәм БАССР-ҙың төҙөлөү тарихын объектив яҡтыртырға тырышҡаны өсөн КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетында

һәм КПСС Үҙәк Комитеты пленумында тәнҡитләнә, һуңынан эшенән бушатыла.

Ошондай хәтирәләр яҙып ҡалдырыусылар күп булһа, тарихыбыҙ ҙа тулыраҡ, байыраҡ булыр ине. Әммә бындай яҙмалар бик һирәк шул, үкенескә ҡаршы. Үҙенең осоро кеүек, Мөғәлләм Мирхәйҙәровтың да тормошо һикәлтәле һәм ҡатмарлы була. Ул, Белорет педагогия техникумын тамамлап, 20-се йылдарҙа балалар уҡыта. Бынан тыш, ҡолас йәйеп, халыҡ ижадын йыя, тарихты өйрәнә. Әммә коллективизация башланып, нахаҡҡа кешеләрҙең малын тартып алып һөргөнгә ебәрелеүен күреп йәне әсей. Түҙмәй юғарыға, шулай уҡ гәзиттәргә хаттар яҙа. Оҙаҡламай үҙен дә төрмәгә ябып ҡуялар. Калининға яҙған хаты арҡаһында ғына ҡотола.

1932–1933 йылдарҙа «Башҡортостан» гәзите мөхәрририәтендә эшләп ала. 1937 йылдың декабрендә Мөғәлләм Шәйхәттәр улы репрессияға эләгә. 10 йыл буйы Углич төрмәһендә ултырып сыға. 1947 йылда тыуған ауылына ҡайтып төшә. 1974 йылдың мартында донъя ҡуйғанға тиклем буш ваҡыттарын ижад, халыҡ ижады өлгөләрен йыйыуға, тарих буйынса мәҡәләләр, иҫтәлектәр яҙыуға бағышлай. Яҡташтары араһында сәсән булараҡ та танылыу тапҡан М. Мирхәйҙәров бәйет һәм шиғырҙар ҙа ижад иткән. Төрмәлә ултырған сағында ҡайһы бер шиғырҙарына үҙе үк йырҙар яҙған булған.

Башҡорт армияһы сардарҙары

Ойошторола башлағандан уҡ милли хәрәкәт лидерҙары башҡорт ғәскәрҙәренә етәкселеккә башҡорт офицерҙарын ҡуйырға ынтыла. Башҡорт командирҙары етерлек кимәлдә булмағанға күрә, Башҡорт хәрби шураһы ғәскәргә татар офицерҙарын да йәлеп итә. Шуға ҡарамаҫтан, 1918 йылда Башҡорт армияһының (Башҡорт корпусының) командалыҡ өлөшөн башҡорт офицерҙары – Беренсе донъя һуғышында утты-һыуҙы кисеп, офицер званиеларына лайыҡ булып ҡайтҡан прапорщик, подпоручик, поручик, ротмистрҙар, штабс-капитандар тәшкил итә. Мәҫәлән, 1-се Башҡорт пехота полкы менән поручик Зәкир Туймаҡаев, 2-се Башҡорт пехота полкы менән – подпоручик Ғәбделхаҡ Ғәбитов, 3-сө Башҡорт пехота полкы менән – прапорщик Ғәлимйән Таған, 5-се Башҡорт пехота полкы менән – штабс-капитан Ҡазыхан Низаметдинов, 6-сы Башҡорт пехота полкы менән – поручик Сөләймән Ишмырҙин, 1-се Башҡорт кавалерия полкы менән – Әмир Ҡарамышев, артабан Мөхтәр Ҡарамышев, 2-се Башҡорт кавалерия полкы менән подпоручик Әхмәҙулла Бейешев етәкселек итә. 1918 йылдың сентябрендә башҡорт полктары 1-се һәм 2-се Башҡорт пехота дивизияларына берләштерелә. Беренсе дивизияға командир итеп башҡорт дворяндары нәҫеленән булған подполковник Шаһихәйҙәр Аҡсулпанов тәғәйенләнә. 2-се дивизияға подполковник Тереғолов ҡуйыла. Дивизиялар Айырым Башҡорт корпусына берләштерелгәс, корпустың командиры итеп батша армияһында хеҙмәт иткән генерал Хажиәхмәт Ишбулатов тәғәйенләнә.

Башҡорт армияһында милли хәрәкәт лидеры Зәки Вәлидиҙең яҡташтары, яҡын дуҫтары ағалы-ҡустылы башҡорт офицерҙары Әмир, Мөхтәр, Ғәни Ҡарамышевтар, Әүхәҙей һәм Сөләймән Ишмырҙиндар, Ибраһим Исхаҡов, Шаһибәк Үзбәков, Ғабдулла Ғәмбәровтар хеҙмәт итә.

Бынан тыш башҡорт дворяндары Сыртлановтар нәҫеленән Рәсәй Дәүләт думаһының депутаты Шаһихәйҙәр Сыртлановтың улы Йосоп Сыртланов, Силәбе башҡорттары араһындағы күренекле дин әһеле, ишан Ғәбиҙулла Ҡорбанғәлиевтең улы Һарун Ҡорбанғәлиев, батша армияһында хеҙмәт итеп полковник дәрәжәһенә еткән башҡорт офицеры Хәсән Әхмәров һәм башҡалар милли ғәскәрҙә тоғро хеҙмәт итә. Китап уҡыусылар иғтибарына Башҡорт армияһы менән етәкселек иткән офицер, сардарҙарҙың ҡыҫҡаса биографияһын тәҡдим итмәксемен (Комбриг Муса Мортазин хаҡында алдағы бүлектә яҙып үттем. Шуға ҡабатлап яҙыуҙың кәрәге юҡ, тип уйлайым).

Ғабдулла Иҙелбаев

Ғабдулла Сәфәрғәли улы Иҙелбаев – Башҡортостан автономияһының тәүге ғәскәренә етәкселек иткән башҡорт офицерҙарының береһе, ҡаһарман сардар. 1893 йылда Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙенең Бошман-Һыуын-Ҡараҡыпсаҡ олоҫо (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Күгәрсен районы) Теләүембәт ауылында тыуған.

Ҡазан мәҙрәсәһендә, артабан Ырымбур ҡалаһында 1-се ирҙәр гимназияһында белем ала. 1914 йылда Ҡазан университетының медицина факультетына уҡырға инә. Икенсе йылына, хоҡуҡ һөнәрен үҙ итеп, университеттың юридик факультетына күсә.

Ғ. Иҙелбаев гимназия йылдарында уҡ үҙ халҡының тормошон яҡшыртыу, уның киләсәге тураһында уйҙар менән янып йөрөй. *«Еще будучи в гимназии, Идельбаев любил выступать в качестве оратора. И жилка красноречия в нем проснулась, когда он впервые услыхал лекции на юридическом факультете. Он решил посвятить себя той науки, которая, по его мнению, вырвет родной народ из жадных рук всякого рода предпринимателей»*, – тип яҙа уның һабаҡташы.

Ләкин университетты тамамларға насип булмай. Уны хәрби хеҙмәткә саҡыралар. Прапорщик званиеһы биреп, Көньяҡ-көнсығыш фронтҡа ебәрәләр. Бында Иҙелбаев поручик дәрәжәһенә тиклем үрләй. 1917 йылдың йәйенән поручик Иҙелбаев Симферополь ҡалаһында хеҙмәт итә. Был осорҙа Башҡортостанда автономия өсөн милли хәрәкәт көсәйгәндән-көсәйә бара. Әйткәндәй, милли хәрәкәттең тәүге осоронда Ғабдулланың атаһы Сәфәрғәли Иҙелбаев та әүҙем ҡатнаша. 1917 йылдың июнь аҙағында Башҡорт халҡының иттифаҡи бюроһы ағзаһы итеп һайлана.

Башҡортостандан ситтә, хәрби хеҙмәттә йөрөүенә ҡарамаҫтан, Башҡорт үҙәк шураһы Ғабдулла Иҙелбаевты 1917 йылдың көҙөндә Ырымбур губернаһы башҡорттарынан Рәсәйҙең Ойоштороу йыйылышына (Учредительное собрание) депутатлыҡҡа кандидат итеп күрһәтә. Уның кандидатураһы халыҡтың хуплауын таба һәм илдең оло ҡорона депутат итеп һайлана. Ә декабрь айында үткән III Дөйөм Башҡорт ойоштороу ҡоролтайында Иҙелбаев Башҡортостан автономияһының Кесе ҡоролтайы составына индерелә.

Ғинуар башында Ырымбурҙан телеграмма алыу менән (унда Иҙелбаевтың Ойоштороу йыйылышы һәм Кесе ҡоролтай ағзаһы итеп һайланыуы тураһында хәбәр ителә) Иҙелбаев Симферополдән тыуған яғына юллана. Әммә тимер юлындағы боларыш арҡаһында Ырымбур ҡалаһына ғинуарҙың 17–18-ҙәрендә генә килеп етә. Килеп төшөү менән Бөрйән-Түңгәүер кантонындағы башҡорт отряды янына китә. Был ваҡытта прапорщик Ғимран Мағазов менән корнет Әмир Ҡарамышев етәкселегендә 400 тирәһе кешенән торған тәүге башҡорт отряды ойошторолған була. Отряд Таналыҡ-Баймаҡ заводында (хәҙерге Баймаҡ ҡалаһы) урынлаша. Башҡорт хөкүмәте поручик Иҙелбаевҡа ошо отряд менән командалыҡ итеү бурысын йөкмәтә.

Отряд III Ҡоролтайҙың ҡарарҙарына ярашлы, Бөрйән-Түңгәүер кантонындағы алтын яткылыктарын Башҡорт хөкүмәте ҡарамағына күсерергә тейеш була. Әммә отрядтың ҡоралы етерлек кимәлдә булмай. Шуға күрә башҡорт офицерҙары, ҡорал мәсьәләһен хәл итеүҙе һорап, Баймаҡ эшселәр Советына мөрәжәғәт итә. Ҡорал өсөн тейешле аҡсаһын да бирәләр. Баймаҡ Советы Орск ҡалаһынан ҡорал һатып алып килергә вәғәҙә бирә. Ләкин 4 февралдә (яңы стиль буйынса 16 февраль) Ырымбур губревкомы, Башҡорт хөкүмәтен төрмәгә ябып, тиҙҙән Баймаҡ советына башҡорт отрядын юҡ итергә бойора.

Бер нәмә лә белмәгән Әмир Ҡарамышев отрядтың бер өлөшө менән ҡорал алып килгән Баймаҡ советы большевиктарын ҡаршыларға сыға. Әммә тегеләр икенсе юлдан китеп, йәшерен рәүештә Баймаҡҡа ҡайта һәм башҡорттар өсөн тәғәйенләнгән ҡорал менән үҙ эшселәрен ҡоралландыра. Улар 16 февралдең төнөндә (2 март) Баймаҡта бер нәмә белмәй йоҡлап ятҡан башҡорт отрядын килеп баҫа. Башҡорт һалдаттарын ҡыуып таратып, командирҙары Ғабдулла Иҙелбаев, Ғимран Мағазов, прапорщик Усман Йәһүҙин, башҡорт отрядында хеҙмәт иткән биш поляк офицерын һәм дә Башҡорт хөкүмәте ағзаһы Хәбибулла Ғәбитовты ҡулға ала.

Иҙелбаевтың ауылында ҡунған Ҡарамышев, Баймаҡтағы хәл тураһында ишетеп, тирә-яҡ ауылдарҙан 2000 тирәһе башҡортто йыйып, Баймаҡты ҡамауға ала. Большевиктарҙан башҡорт офицерҙарын азат итеүҙе талап итә. Әммә ҡоро ҡул менән баштан-аяҡ ҡоралланған Баймаҡ эшселәренә ҡаршы һуғышҡа инергә баҙнат итмәй. Тиҙҙән Баймаҡҡа Ҡыҙыл гвардия полкы килеп етә. Ә башҡорттар Баймаҡтан сигенергә мәжбүр була.

Баймаҡ советы эшселәре бер нисә көн буйы, ҡыҙылдарҙың полкы килгәнсе, Ғабдулла Иҙелбаев менән Ғимран Мағазовты туҡмап, мыҫҡыллап һорау алалар. Ҡыҙылдарҙың полкы башҡорт офицерҙарын, улар менән бергә ике полякты атырға тигән ҡарар сығара. Хәбибулла Ғәбитов офицер булмауы арҡаһында ғына үлем язаһынан ҡотола. Уның хәтерләүенсә, 22 февраль (7 март) көнө, бөгөн һеҙҙе атасаҡтар, тип Баймаҡ эшселәре Иҙелбаев менән Мағазовтың кейемен һалдырып, уларға таушалып бөткән кейем бирәләр ҙә, атырға алып китәләр.

«Одетые в лохмотья, обутые в притащенные со свалки галоши, оставшиеся после грабежа, даже без чулков, с голыми ногами, торчащими из дырявых галош, стоят они на снегу. Разрывающая сердце, страшная была эта картина...

Начальник красных отдал команду на молебен. Наши дважды по четыре раза произнесли намаз. Поляки крестились. После молитвы Габдулла Идельбаев и Гимран Магазов, стоя на ногах, а поляки на коленях, вновь построились.

Габдулла Идельбаев сказал:

– Нас убиваете, но остается в живых еще два миллиона башкир. Вы не сможете заглушить нашу священную идею, пока не перебьете весь этот двухмилионный народ. Мы встречаем смерть со спокойной душой.

Затем последовал приказ начальника красных. Так как расстрельщики были пьяны, залпа не получилось, стрельба оказалось беспорядочной. Польские офицеры, не сразу скончавшиеся, шевелились. Габдулла и Гимран, какой-то силой, все еще стояли на ногах. Вот затихли польские офицеры. А наши все стоят. Наконец, сначала Гимран, а за ним Габдулла, медленно склоняясь назад, упали, героически и с открытой грудью встретив славную смерть», — тип яҙа Х. Ғәбитов.

Баймаҡтағы ҡанлы ваҡиғалар башҡорт халкында большевиктарға ҡаршы нәфрәт уята. 1918 йылдың июнендә Башҡорт хөкүмәте большевиктарға ҡаршы һуғыш иғлан итә. Ул башҡорт халкына яҙылған мөрәжәғәтендә: *«...Войска наши, которые были нами посланы для охраны интересов и спокойствия башкирского народа в различных кантонах и для укрепления законности и порядков в кантонах, они путем обмана и для измены распустили, уничтожили (разрушили).*

Начальников же наших войск, братьев наших Абдуллу Идельбаева и Гимрана Магазова, и вместе с ними еще шестнадцать человек, сделали своими жертвами и расстреляли. Предательское убийство родного любимого юриста Абдуллы Идельбаева, представляющего собой воплощение бьющей ключем у башкира отваги, силы, энергии, честности, искренности, надругание и издевательство над его телом за то лишь, что до последнего вдоха кричал: «Вам, угнетателям, не уничтожить автономии Башкирии, мы умрем, но народ вам убить не удастся!» И тут же выкрикивания перед плачущим и стонущим народом: «Вот вам автономия!» Все это еще в феврале наглядно показало, кто такие большевики...» — тип яҙа.

1918 йылдың йәйендә Бөрйән-Түңгәүер кантоны халҡы, Башҡортостан автономияһы өсөн ҡорбан булған ҡаһарман башҡорт офицерҙарының исемдәрен мәңгеләштереү мәсьәләһен күтәреп сыға. Улар Баймаҡта Иҙелбаев менән Мағазов исемендәге мәктәп төҙөргә ҡарар итә. Бының өсөн иғәнә йыйыу ойошторола. Ә Башҡорт хәрби шураһы 1918 йылдың көҙөндә 2-се Башҡорт кавалерия полкына Ғабдулла Иҙелбаевтың исемен бирә.

Әмир Ҡарамышев

Башҡорт күген яҡтырткан
Аҙ йондоҙҙарҙың бере ине.
Яу өҫтөнә атылһа,
Ҡуйға сапҡан бүре ине.

Ш. Бабич. «Ҡаһарман Әмир Ҡарамышев»

Әмир Батыргәрәй улы Ҡарамышев – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан башҡорт офицеры. Зәки Вәлидиҙең яҡташы, дуҫы һәм яҡын арҡаҙаштарының береһе.

Ә. Ҡарамышев 1893 йылдың 7 апрелендә Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙе Маҡар олоҫоноң Маҡар ауылында тыуған. Зәки Вәлиди

уның турала: *«Әмир – минең йәшлек дуҫым. Беҙҙән ете саҡрым алыҫлыҡтағы Маҡар ауылынан. Башҡорттарҙың боронғо күренекле нәҫеленән, XIX быуаттың беренсе яртыһында билдәле башҡорт офицеры Йософ майор Ҡарамышевтың ейәне»*, – тип яҙа.

Әмир Ҡарамышевтың нәҫел ептәре XVI быуатта йәшәгән Юрматы ырыуының түбә башлығы Ҡармыш-бабаға барып тоташа. 1553–1554 йылдарҙа уның, юрматыларҙың башлығы Тәтегәс бей менән бергә Ҡазанға барып, Иван батшаның наместнигынан үҙ ерҙәренә аҫабалыҡ хоҡуғын алып ҡайтҡан. Артабан да Ҡармыштың нәҫелдәре хәрби хеҙмәттә булып, дан-шөһрәт ҡаҙана. Әмирҙең ҡартатаһы Йософ Ҡарамышев, Ырымбур кадет корпусын тамамлап, оҙаҡ йылдар Башҡорт ғәскәрендә хеҙмәт итә. Майор дәрәжәһенә ирешә. Аҙаҡ Маҡар олоҫо старшинаһы булып тора. Йософтоң кесе улы Батыргәрәй (Әмирҙең атаһы) Ҡазандағы Уҡытыусылар семинарияһын тамамлап, мөғәллимлек юлын һайлай.

Әмир Батыргәрәй Ҡарамышевтың ғаиләһендә икенсе малай булып донъяға килә. Унан һуң Батыргәрәйҙең тағы Мөхтәр һәм Сөләймән исемле ике улы тыуа. Әмир Ҡарамышев ҡартатаһы кеүек үк хәрби хеҙмәт юлынан китә. Революцияға тиклем батша армияһында хеҙмәт итә. Әрмелә хәрби мәктәпте тамамлап, корнет чинын ала. Уның ҡустылары ла офицер була, милли хәрәкәттә ҡатнаша. Ағаһы Гәрәй Ҡарамышев – дәүләт эшмәкәре.

Әмир Ҡарамышев милли хәрәкәттең башынан уҡ әүҙем ҡатнаша. 1917 йылдың декабрендә Дөйөм Башҡорт ҡоролтайында Башҡорт хөкүмәте ойоштоpола. Зәки Вәлиди эске һәм хәрби эштәр бүлеген етәкләй. Уның ғәскәри эштәр буйынса ярҙамсыһы итеп Әмир Ҡарамышев тәғәйенләнә. Ҡоролтай башҡорт ғәскәрен ойоштороу тураһында ҡарар ҡабул итә. 1918 йылдың ғинуарында Әмир Ҡарамышев, Ғимран Мағазов, Ғабдулла Иҙелбаевтар тәүге башҡорт полкын төҙөү өсөн Бөрйән-Түңгәүер кантонына, Баймаҡҡа юллана. Бында улар Бөрйән олоҫо башҡорттарынан 300 кешенән торған отряд туплай. Әмир Ҡарамышев милли ғәскәр төҙөү эшенә бөтөн күңеле менән бирелгән сардар була. Хәбибулла Ғәбитов хәтерләүенсә, Ҡарамышев отрядҡа йәшел байраҡтар эшләтеп, үҙе сығарған «Ватан» йырын йырлатып йөрөр булған. Үҙе лә йырға, ҡурайға маһир ир-уҙаман була. *«Ҡарамыштың улдары сиктән тыш батыр һәм идеалист егеттәр булды»*, – тип яҙа Вәлиди.

Бында улар Баймаҡтың эшселәр советы менән бәйләнеш урынлаштыра. Баймаҡтар башҡорт отрядына Орскиҙан ҡорал алып килергә вәғәҙә итә. Ырымбурҙа Башҡорт хөкүмәте ҡулға алынғандан һуң, Баймаҡ большевиктарына башҡорт отрядын юҡ итергә тигән бойороҡ килә. Орскиҙан алып килгән ҡоралды йәшерен рәүештә үҙенең эшселәренә таратып, 16 февралдең төнөндә (яңы стиль буйынса 2 март) бер ни ҙә белмәй йоҡлап ятҡан башҡорт отрядын килеп баҫалар. Отрядтың командирҙары поручик Ғабдулла Иҙелбаев менән прапорщик Ғимран Мағазовтарҙы ҡулға алалар. Был төндә Әмир Ҡарамышев үҙенең һыбайлылары менән Иҙелбай ауылында ҡуна. Иртәгеһенә Баймаҡтағы хәлдәр тураһында ишетеп, тирә-яҡ ауылдарҙан халыҡ туплай башлай. Ике мең тирәһе

кеше менән Баймаҡты ҡамауға ала. Эшселәрҙән ҡулға алынған башҡорт офицерҙарын азат итеүҙе талап итә. Әммә Баймаҡҡа һөжүм итергә баҙнат итмәй, сөнки бының өсөн башҡорттарҙың ҡоралы булмай. Башҡорт отрядының аҡсаһына ҡоралланып алған эшселәргә ҡаршы ҡоро ҡул менән барып булмай бит инде. Икенсенән, Ырымбурҙа, большевиктар ҡулында ултырған Башҡорт хөкүмәте ағзалары тураһында уйлай корнет Ҡарамышев. *«...Уларҙың иң ҡурҡҡаны — төрмәлә ултырған хөкүмәт ағзаларын атып ҡуйырҙар тигән уй була»*, – тип яҙа Зәки Вәлиди хәтирәләрендә.

Оҙаҡламай Ырымбурҙан ебәрелгән ҡыҙылдарҙың полкы килеп, башҡорттарҙы сигенергә мәжбүр итә. Ҡыҙылдар Баймаҡтағы башҡорт офицерҙары Ғабдулла Иҙелбаев менән Ғимран Мағазов һәм улар менән бергә башҡорт отрядында хеҙмәт иткән бер нисә поляк офицерын ата.

Ошо ваҡиғаларҙан һуң Әмир Ҡарамышев, үҙенең отряды менән Бөрйән-Түңгәүер кантонының таулы-урман яғына китеп, ҡыҙылдарға ҡаршы партизан отрядтары ойоштороуға тотона. Тамъян-Ҡатай кантонында ла отрядтар ойошторола башлай. Ҡаһарман сардар Верхнеуральскиға сигенгән Дутов казактары менән бәйләнеш урынлаштыра.

Тәүәккәл офицер тау-урман араһында ғына боҫоп ятырға йыйынмай, төрмәләге Башҡорт хөкүмәте ағзаларын ҡотҡарыу яғын уйлай. 1918 йылдың 4 апреле төнөндә Ҡарамышев отряды казактар менән бергә Ырымбурға һөжүм итеүҙә ҡатнаша. Ҡыҙылдар көтмәгән арала ҡалаға бәреп инеп, отряд төрмәләге милли хәрәкәт етәкселәрен сығара. Әммә башҡорт һалдаттары төпкө камерала ултырған Вәлидигә генә барып етеп өлгөрмәйҙәр. Уның хәтерләүенсә, һалдаттар камераның асҡысын таба алмай кире сигенә. Ҡото алынған төрмә начальнигы, асҡысты табып, Вәлидиҙе үҙе асып сығара. Төрмәнән ҡотолоу менән Вәлиди Ырымбур янындағы Ҡарғалы ауылына юллана, унда Ҡарамышев отрядының бер һалдатын осратып, Әмиргә: «Ҡотолдом, Өфөгә килһен», – тип хәбәр ебәрә.

Шулай итеп, Әмир Ҡарамышев ойошторған һәм етәкселек иткән отряд казактар ярҙамында Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте етәкселеген азат итә. Кем белә, бәлки, хәлдәр ҡатмарлашып киткән осраҡта Башҡорт хөкүмәте ағзаларын большевиктар атҡан да булыр ине. 1918 йылдың йәйендә чехословак һәм башҡорт ғәскәрҙәре Екатеринбургка яҡынлашҡас, Николай II ғаиләһе менән бергә атҡандар бит.

Был осорҙа Әмир Ҡарамышев Зәки Вәлидигә милли хәрәкәт эшен юлға һалыуҙа ныҡлы терәк һәм ярҙамсы була. Өфөлә осрашып, кәңәшләшеп, улар йәшерен рәүештә милли хәрәкәт вәкилдәре менән бәйләнеш урынлаштыра башлай. Тәүҙә улар Тамъян-Катай кантонына юллана: *«Арҡадаштарыбыҙҙың береһен поезд менән Семипалатинск яғына, тәғәйенләнгән ике һалдатты Миәскә һәм Белоретҡа ебәргәндән һуң, беҙ Әмир менән 9 апрель кис иреү ҡарҙа санаға ултырып киттек. Иретә. Кубеһенсә төндә йөрөйбөҙ. Үткән 1917 йылдың сентябрендә өйөндә үҙем мосафир булған Ямалетдин Байышевты, Мәжит Ғафуриҙы күрҙек һәм Сабир хәҙрәт Хәсән улына килдек.*

Ул тау башҡорттары кейемен табып бирҙе, ат егеп, Ҡатай башҡорттары улысына ҡараған Шамов рудникына алып килде. Беҙ унан Тамъян-Катай кантонына Әхмәт ауылына китәсәкбеҙ. Әммә Хоҙайбирҙе ауылына етмәҫтән, ун саҡрымдар алыҫлыҡта, аттарыбыҙ бер йылғаның иреү боҙона баҫырға ҡурҡты. Беҙҙе алып килгән кешене аттары менән кире ҡайтарҙыҡ. Әмир ҡурай уйнауға маһир булды. Был юлы беҙ китеп барған урманда ҡурай күп ине. Дуҫым уларҙы киҫеп алып, тишек тишеп уйнай. Яҙғы йомшаҡ ҡарҙан бата-бата атлау беҙҙе йөҙәтте. Өс-дүрт сәғәт атлағас ҡына түбә башына сыҡтыҡ һәм алыҫтағы ауылды күрҙек. Ауылға барып еткәнсе тамам арыныҡ», – тип яҙа Зәки Вәлиди үҙенең иҫтәлектәрендә.

Артабан ике дуҫ Шығай ауылында ҡунып, Әхмәткә барып етә. Бында Зәки Вәлиди ике аҙнаға яҡын, апрель аҙағына тиклем, эшмәкәрлек итә, Юламан мулла ярҙамында төрлө документтар, мөрәжәғәттәр баҫып тарата. Шул осорҙа Әмир Ҡарамышев тырышлығы менән Тамъян, Түңгәүер, Ҡарағай-Ҡыпсаҡ һәм Бөрйән олоҫтарында партизан төркөмдәре ойошторола.

1918 йылдың майында Силәбе ҡалаһында Чехословак корпусы большевиктарға ҡаршы баш күтәрә. Чехословактар Силәбе ҡалаһында власты үҙ ҡулына ала. Зәки Вәлиди һәм милли хәрәкәттең башҡа етәкселәре большевиктарҙан азат ителгән ҡалаға туплана. 7 июндә Башҡорт хөкүмәтенең эшмәкәрлеге яңынан тергеҙелә. Оҙаҡламай хөкүмәт Башҡортостан автономияһының хәрби көстәрен ойоштороу эшенә тотона.

Әмир Ҡарамышев Тамъян-Ҡатай кантонында 1-се Башҡорт кавалерия һәм 5-се Башҡорт пехота полктарын ойоштороу менән мәшғүл була. Шулай уҡ бында Тамъян-Ҡатай ирекле отряды төҙөлә. Башҡорт Хәрби Шураһы фарманы менән корнет Ҡарамышев 1-се Башҡорт кавалерия полкы командиры итеп тәғәйенләнә. Был осорҙа Иҙел башында (Белоретта) ҡамауҙа ҡалған Блюхер менән Кашириндарҙың ҡыҙыл партизан отрядтары (10 меңдән ашыу кеше) Ҡыҙыл Армияға барып ҡушылыу өсөн Верхнеуральск ҡалаһы яғына юллана. Бында ҡыҙылдарға ҡаршы Верхнеуральск фронты булдырыла, фронттың башҡорт ғәскәрҙәре (1-се Башҡорт кавалерия һәм 5-се Башҡорт пехота полктары һәм Тамъян-Ҡатай ирекле отряды, йәмғеһе 2000 тирәһе яугир) менән етәкселек итеү Әмир Ҡарамышевҡа йөкмәтелә. Блюхерҙың отряды һан яғынан күпкә өҫтөнлөк итеүгә ҡарамаҫтан, башҡорт һәм казактарҙың көслө ҡаршылығына осрай. Верхнеуральск янында ҡаты бәрелештәр булып үтә. Блюхер Верхнеуральскиҙы ала алмай, Белоретҡа кире сигенә. *«Башҡорт батыры кавалерия корнеты Әмир Ҡарамышев үҙенең таулы башҡорт отряды менән Белорет янында большевиктарҙы ҡыйратып, күп кенә трофейҙар алған»*, – тип хәбәр итә «Башҡорт» гәзите ошо осорҙа. Ҡаһарман сардарға ротмистр званиеһы бирелә.

Хәҙер инде ҡыҙылдар Өфө яғына сығыу өсөн Белореттан Стәрлетамаҡҡа юллана. Әмир Ҡарамышев үҙенең полкын төньяҡҡа сигенгән ҡыҙылдарҙың артынан ҡыуа. Блюхерҙың йыйылма отряды был мәлдә

хәҙерге Ишембай районы Маҡар ауылына (Әмир Ҡарамышевтың тыуған ауылы) килеп етә. 8 июлдә Ҡарамышевтың полкы Көҙән менән Маҡар ауылдары араһында большевиктар менән ҡаты һуғышып ала. 11–12 июлдә Петровск ауылы янында тағы бер бәрелеш була. Зәки Вәлиди хәтерләүенсә, ҡыҙылдар, ҡоралдарын ташлап, Егән йылғаһы аша сығып ҡаса. Улар артабан Стәрлетамаҡ гарнизоны менән һуғыша, ҡалаға инә алмай Өфө яғына юллана. Ҡарамышев ҡыҙылдарҙың артынан ҡыуып, Еҙем буйында тағы ла бәрелешкә инә. Артабан блюхеровсылар Иглин станцияһы аша сығып, Ҡыҙыл Армияға барып ҡушыла.

Бер айҙан ашыу ҡаты һуғыштар һөҙөмтәһендә тамам һаулығы ҡаҡшаған сардар (уның үпкәһе шешеп ауырып йөрөгән була), Миәс ҡалаһының госпиталенә барып ята. 1918 йылдың 7 авгусында ошо госпиталдә Әмир Батыргәрәй улы Ҡарамышев вафат була. Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең башынан әүҙем ҡатнашҡан, иң ауыр осорҙа Башҡорт хөкүмәте ағзаларын үлемдән ҡотҡарып алып ҡалған, артабан милли хәрәкәтте тергеҙеүгә күп көс һалған, башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороуҙың башында торған батыр офицерҙың үлеме Башҡортостан автономияһы өсөн ҙур юғалтыу була.

Зәки Вәлиди ҡаһарман сардарҙы Ырымбурға алып килеп ерләргә бойора. 21 август Ҡарамышевтың кәүҙәһе поезд менән Ырымбурға килтерелә. Ошо айҡанлы Башҡорт хәрби шураһы махсус фарман сығара. Унда былай тиелә:

«На 22 сего августа назначаю похороны умершего при исполнении своего долга под Верхнеуральском доблестного сына Башкурдистана командующего добровольческим отрядом ротмистра Карамышева Амира Батыр-Гареевича. Для отдания воинских почестей умершему назначается одна рота от 1-го Башкирского полка при полном боевом вооружении и при полном количестве офицеров. Роте со своим оркестром прибыть к часовне к 12 часам и сопровождать тело до мечети Караван-Сарая, откуда по совершения обряда Джиназа сопровождать до мусульманского кладбища, где при опускании гроба в могилу роте дать семь салютационных залпов.

При выносе и погребении присутствовать Башкирскому Военному Совету и г.г. офицерам и классным чинам, свободным от служебного наряда, Штаба Корпуса и 1-го и 4-го Башкирских полков. За гробом следовать оседланной лошади, каковую выслать от 1-го Башкирского полка.

Командирам полков ознакомить вкратце г.г. офицеров и солдат с личностью ротмистра Карамышева».

Әмир Ҡарамышевтың кәүҙәһе 22 август көнө Башҡорт хөкүмәте, Башҡорт хәрби шураһы, Башҡорт үҙәк шураһы ағзалары, офицер һәм һалдаттар ҡатнашлығында ҙур хөрмәт менән Ырымбурҙың мосолман зыяратында ер ҡуйынына тапшырыла. *«Әмир Ҡарамыштың үлеме ғәскәребеҙ өсөн бик ҙур юғалтыу ине. Ул хаҡта Башҡортостандағы шағирҙарыбыҙ байтаҡ мәрҫиә яҙҙы. Шулар араһында Шәйехзада Бабичтың мәрҫиәһе һуңғы ваҡытҡа тиклем халыҡ араһында*

яттан уҡылып килеүен 1943 йылда Германияла әсир төшкән башҡорт һалдаттарынан белдем», — тип хәтерләй Зәки Вәлиди.

Ҡарамышевтың үлеме башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте өсөн ниндәй ҙур ҡайғы булғанын халҡыбыҙҙың бөйөк шағиры, азатлыҡ йырсыһы Шәйехзада Бабич үҙенең шиғырында асып һала. Был мәрҫиәне ул Әмирҙе ерләгән мәлдә, батырҙың ҡәберендә һөйләй:

Бөгөн беҙгә ни булған?
Күңелебеҙ ник ҡырылған?
Йөҙөбөҙҙә ник тағы
Үлгән хәсрәт терелгән?
Терелгәндең сәбәбе:
Бер аяулы ир үлгән!..
Ул аяулы кем ине?
— Әмир тигән ир ине.
Башҡорт күген яҡтыртҡан
Аҙ йондоҙҙоң бере ине.
Яу өҫтөнә атылһа,
Ҡуйға сапҡан бүре ине.
Ғәскәр йыйнап, баш булып,
Яҫтағаны таш булып,
Ут эсендә ут йотоп,
Нисә көндәр ас йөрөп,
Дошман яуын ҡырғанда
Күкрәгендә сир ине...
Шул сирендин үлгәндә
Етенсе август көнө ине.
Алдыбыҙҙа ниндәй тән?
Ҡәлбебеҙҙә ниндәй ғәм?
Түбәмеҙҙә әйләнеп
Осоп йөрөгән ниндәй йән?
— Алдыбыҙҙа ир тәне,
Ҡәлбебеҙҙә ил ғәме,
Алды тәҡдир арадин
Тағын да бер иркәне!..
Йәнен уның әйтәйем:
Йән түгел ул — намыҫтыр,
«Әмир» тигән бер исем —
«Намыҫ» тигән тауыштыр.
Йә Илаһым, Әмирҙе
Йәннәткә ҡауыштыр!
Әй, Әмирйән — ил өсөн
Һүнгән шәмдең бере һин!
Ҡара гүрҙе ағартып,
Ингән йәндең береһе һин!
Анаң һөтөң анаңсөн

Имгән йәндең бере һин,
Бәхетле һин – үлмәнең;
Ил күңелендә тере һин!..
Сәсәкләрдин һөйөнгән,
Шишмәләрҙә койонған,
Дошмандардин йән һаклап,
Тауға, ташка һыйынған.
Һин бер батыр ир инең
Илең өсөн көйөнгән...
Яткан ерҙән калкынған,
Намыҫ йөҙөн яктырткан,
Кая тауҙар башында
Януб торған кәндилдәй;
Каһарманлык аңкыткан,
Ғәйрәт берлән дан тоткан,
Үрҙән кырға һикереп,
Оса сапкан дөлдөлдәй,
Һин бер аҫыл ир инең
Ил бәхетенә ант иткән!..
Осто Әмир асманға,
Тағы байрам дошманға,
Тағы кайғы, тағы зар
Моңло Башкортостанға.
Көйөнһәк тә беҙ бында,
Рәхәттә ос һин унда!..
Беҙҙән сәләм ирештер
Ғабдулла һәм Ғимранға!..
Сәләм һеҙгә, өс корбан!
Әмир, Ғабдулла, Ғимран;
Йәнегеҙ фиҙа иттегеҙ
Башкортостан ғишкындан.
Өсәү бергә йөрөгөҙ,
Нур эсенә сумығыҙ!
Фәрештәләр ғәскәре
Төҙөп беҙгә килегеҙ!
Атланып аҡ пыраҡка,
Остоғоҙ һеҙ йыраҡка,
Калағыҙ тик йөрәктә
Мәңгелеккә үрнәккә...
Урынығыҙ түрҙән яһалһын,
Уңай булһын артығыҙ!
Мәңге рәхәт йәшәһен
Күп интеккән халкымыҙ!

Милли хәрәкәттең «Башҡорт», «Башҡорт тауышы» гәзиттәрен сығарыусы мөхәррир, шағир Хәбибулла Ғәбитов та ҡаһарман сардарҙың иҫтәлегенә мәрҫиә бағышлай:

Башҡорт арыҫланы
Әмир Ҡарамышевты юҡлап

Беҙгә ғәмле көн тыуҙы,
Уралда гөлдәр һулыны,
Хәсрәттән күңел тулды,
Әмир шаһит арыҫлан!
Беҙҙе ташлап һин киттең,
Үкһеҙ етем «ил» иттең,
Иртә китеп аранан,
Күҙ йәштәрен күл иттең.
Әмир шаһит арыҫлан!
Дошмандарҙы таптаның,
Бик ҙур эштәр башланың,
Шаһит булып арыҫлан,
Йомшаҡ тупраҡ яҫтандың,
Әмир шаһит арыҫлан!
Ҡаршы сығар алдыңдан
Абыҙ — Аҡай — Салауат,
Ҡарашһалар башҡортто,
Беҙҙән күп-күп сәләм әйт!
Әмир шаһит арыҫлан!
Башлаған эш туктамаҫ,
Инде башҡорт йоҡламаҫ,
Илдең изге теләген
Дошман яуы ташламаҫ.
Әмир шаһит арыҫлан!
Ҡанлы «тыу»ын күтәргән,
Илгә бурысын үтәгән,
Халкын һаҡлап дошмандан
Кан төкрөп йүтәлгән,
Әмир шаһит арыҫлан!
Әжәл килде ашығып,
Буйһондоң һин, баш ороп,
Ҡайғы-хәсрәт, үлемдән
Илең калды йәшегеп,
Әмир шаһит арыҫлан!
Хуш мәңгегә, батырым!
Башымда юк ғакылым.
Дошман кыуып сыңлаткан
Уралдың тау-такырын.
Әмир шаһит арыҫлан!

Моңло ҡәберең өҫтөндә,
Әмир, һине юкланым,
Ғаҡлым китеп башымдан,
Һөйләй алмай туҡтаным,
Әмир шаһит арыҫлан!
Рәһен булһын башҡортҡа
Иртә осҡан аҡ йәнең,
Маҡсатҡа беҙ етәрбеҙ,
Тыныс булһын пак йәнең,
Әмир шаһит арыҫлан!

Әлбиттә, ҡаһарман офицерҙың үлемен ғаиләһе ауыр кисерә. Әмир Ҡарамышевтың ҡатыны Мәрхәбә үлем түшәгендәге һөйөклө иренең янында моңланып ултырып йыр йырлаған, тиҙәр. Был йыр аҙаҡ, 1918 йылдың 20 авгусында, матбуғатта баҫылып сыға:

Ирмәк кенә тауҙың башҡайында,
Ана, ултыра яңғыҙ бер ҡайын.
Сит илдәргә килтереп, мәрхүм итеп,
Ҡалдыраһыңмы ғәзиз йәнкәйем?
Ирәмәл генә тауҙың, ай, баштары
Була микән, йәнем, еләкле?
Башҡорттарҙан тағы тыуыр микән
Һинең кеүек ғорур йөрәкле?!
Яңы ғына теккән кейемеңде
Башлап кейеп киттең һуғышҡа.
Һинең генә сығарған моңло көйөң
Ҡалды башҡорттарға һағышҡа.
Көлөп ҡарап, төртөп күрһәтәһең,
Күренәме әллә Йәннәт алдыңда?
Көлөп кенә үлмәк булаһыңмы,
Ғәзиз балаң илай янында.
Ҡаранаһың төрлө яҡтарға,
Һөйләнәһең, Кавказ, Кавказ, тип.
Йәш йөрәккәйем сыҙай алмай,
Ахыры, ҡалды ғүмерең аҙ, аҙ, тип.
Йыраҡ ҡалды һинең инәкәйең,
Һағыналыр улар барыһы ла,
Сыҙай ғына алмай, уф, уф, тиәм,
Йөрәккенәм бигерәк ярһый ҙа.
Туғандарың һине тилмереп көтә,
Ялан ерҙә һине – ҡыр ҡошо!
Һуңғы минуттарың килеп етте,
Ай-һай, Ғазраилдың ҡыр ҡошо!
Эй, Хоҙайым, бирсе миңә сабыр!
Сыҡты, сыҡты йәнең, йәнгенәң!

Айырылыр минут килеп етте,
Нисек кенә китәйем янындан?!

Бына шундай шиғырҙар менән хөрмәтләп, һуңғы юлға оҙата ҡаһарман офицер Әмир Ҡарамышевты көрәштәштәре. Башҡорт хөкүмәте Ырымбурҙың мосолман зыяратында ерләнгән батырҙың ҡәберенә таш яҙҙырып, маҙар төҙөп ҡуйыу буйынса ҡарар ҡабул итә. Был бурыс Әмирҙең ағаһы Гәрәй Ҡарамышевҡа йөкмәтелә.

Әмир Ҡарамышев үлгәндән һуң, уның урынына 1-се Башҡорт кавалерия полкы командиры итеп ҡустыһы прапорщик Мөхтәр Ҡарамышев тәғәйенләнә. 1918 йылдың октябрендә Башҡорт ғәскәри идаралығының фарманы менән 1-се Башҡорт кавалерия полкына ҡаһарман сардарҙың исеме бирелә. 1918 йылдың аҙағындағы – 1919 йылдың башындағы документтарҙа 1-се кавполк *«1-й Башкирский кавалерийский имени ротмистра Карамышева полк»*, тип телгә алына.

Әүхәҙи Ишмырҙин

Әүхәҙи Ғәләүетдин улы Ишмырҙин – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан башҡорт офицерҙарының береһе, Зәки Вәлидиҙең яҡын көрәштәше, ярҙамсыһы. Ул Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙе Аҙнай олоҫоноң (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Ишембай районы) Кинйәбулат ауылында тыуған.

Ергән ауылында 2 синыфлы Рус-башҡорт мәктәбендә уҡый. Артабан Ҡазан ҡалаһында Уҡытыусылар семинарияһын тамамлай. Беренсе донъя һуғышы башланыу менән Әүхәҙи Ишмырҙин әрмегә алына. Кесе офицерҙар әҙерләү хәрби мәктәбен тамамлап, прапорщик чинында фронтҡа ебәрелә. 1914 йылдан алып 1917 йылға тиклем Ишмырҙин герман һуғышында йөрөй. Фронтта күрһәткән батырлыҡтары өсөн дүрт тапҡыр Георгий тәреһе менән бүләкләнә, йәғни тулы кавалеры була. Подпоручик дәрәжәһен ала.

1917 йылда тыуған яғына ҡайтыу менән ул Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушылып китә. Әйткәндәй, милли хәрәкәттә Әүхәҙи Ишмырҙиндың ағаһы Ишбулды һәм ҡустыһы офицер Сөләймән дә әүҙем ҡатнаша (архив документтарынан күренеүенсә, рәсми ҡағыҙҙарҙа Әүхәҙи – «Ишмурзин I», ҡустыһы Сөләймән «Ишмурзин II» йөрөтөлгән). Ә. Ишмырҙин 1917 йылғы Башҡорт королтайҙарында ҡатнаша. Милли хәрәкәттең матбуғат органы «Башҡорт» гәзитендә әүҙем яҙыша.

1918 йылдың февралендә Ырымбурҙағы Башҡорт хөкүмәте большевиктар тарафынан ҡулға алынғас, Юрматы кантоны башҡорттары Әүхәҙи Ишмырҙин менән Гәрәй Ҡарамышевты Ырымбур ҡалаһына ебәрә. Әммә улар Башҡорт хөкүмәте ағзаларына ярҙам итә алмай. Ҡайтҡас, Ә. Ишмырҙин, Юрматы кантоны башҡорттары королтайын йыйып, Совет хөкүмәте рәйесе В. И. Ленинға былай тип телеграмма ебәрә: *«Кантональный съезд 250 представителей от 24 волостей Стерли-*

тамакского уезда, обсудив арест членов Башкирского предпарламента в Оренбурге, постановил: заявляем категорический протест против такой несправедливости. Обвинения ни на чем не основаны кроме нелепых слухов. Их оклеветали, сводя личные счеты. Быть контрреволюционерами они не могли. Платформа Башкурдистана [Совету] Народных Комиссаров известна по докладу комиссара Манатова. Заявляя протест, требуем немедленного освобождения и передачи их в распоряжение представителей от кантонств Башкурдистана, которые съезжаются в Оренбург и которые, если найдут их виновными, предадут народному революционному суду». Әммә башҡорт эшмәкәрҙәренең мөрәжәғәтенә Мәскәүҙә ҡолаҡ һалыусы булмай.

1918 йылдың 4 апрелендә Әмир Ҡарамышевтың партизан отрядтары, казактар менән бергә Ырымбурға һөжүм итеп, Башҡорт хөкүмәте ағзаларын төрмәнән азат итеүгә өлгәшә. Июнь башында хөкүмәт ағзалары Силәбе ҡалаһына йыйылып, үҙҙәренең эшмәкәрлеген яңынан йәйелдереп ебәрә. Комуч һәм Себер хөкүмәттәре ярҙамында башҡорттар ғәскәр ойоштора башлай. Был осорҙа Әүхәҙи Ишмырҙин Стәрлетамаҡ ҡалаһында Комуч армияһы сафтарында хеҙмәт итә. Стәрлетамаҡ өйәҙе башҡорттарынан мосолман ротаһы ойоштороп, ҡыҙылдарға ҡаршы һуғышып йөрөй.

Башҡортостан территорияһы большевиктарҙан азат ителгәс, ул Юрматы кантонының башҡарма рәйесе итеп тәғәйенләнә. Әммә был вазифала подпоручик Ишмырҙинға оҙаҡ эшләргә тура килмәй. Сентябрь аҙағында ул Ырымбурға Башҡорт хөкүмәте ҡарамағына саҡыртып алына. Зәки Вәлидиҙең өлкән адъютанты булып хеҙмәт итә. Уның урынына Юрматы кантоны етәксеһе итеп ҡустыһы Сөләймән Ишмырҙин тәғәйенләнә. Октябрь башында Зәки Вәлиди үҙенең көрәштәше Ә. Ишмырҙинды 6-сы Башҡорт уксы полкына командир итеп ҡуя.

1918 ноябрендә власты үҙ ҡулына алған адмирал Колчак Башҡорт корпусын тарҡатыуға өлгәшә. Артабан башҡорт ғәскәрҙәрен туранантура атаман Дутовҡа буйһондороғға бойора. Ләкин Башҡорт хөкүмәте уның фармандарына ҡолаҡ һалмай. Декабрь айында Зәки Вәлиди башҡорт полктарын бер урынға тупларға тигән йәшерен фарман ебәрә. Һөҙөмтәлә, ғинуар башында, 3-сө полктан тыш, бөтөн башҡорт полктары ла Башҡортостан территорияһында бер йоҙроҡҡа туплана. Вәлиди полктарҙы ике дивизиянан торған Башҡорт корпусына берләштерә һәм ғәскәрҙәр менән етәкселекте үҙ ҡулына ала. 1-се Башҡорт дивизияһы менән командалыҡ итеүҙе Әүхәҙи Ишмырҙинға йөкмәтә. Ошо уҡ мәлдә Башҡорт хөкүмәте советтар менән килешеүгә йүнәлеш ала. Һөҙөмтәлә, 1919 йылдың февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сығырға тигән фекергә килә. Зәки Вәлиди штабс-капитан Ишмырҙинға тағы ла ҙур бурыс йөкмәтә — Башҡорт ғәскәрҙәренең ҡыҙылдар яғына сығыуын тәьмин итеү. 1919 йылдың 18 февралендә Әүхәҙи

Ишмырҙин командалыҡ иткән 1-се дивизия полктары беренсе булып Ҡыҙыл Армия яғына сыға.

21 февраль Темәс ауылында I Бөтә Башҡорт хәрби съезында Ә. Ишмырҙин милли хәрәкәт етәкселәре Зәки Вәлиди, Мөхәмәтхан Ҡулаев, Юныс Бикбов һәм башҡалар менән бергә Башҡортостандың ваҡытлы революцион хөкүмәте – Башревком ағзаһы итеп һайлана. Республиканың хәрби комиссары Зәки Вәлиди большевиктар лидерҙары менән һөйләшеп, килешеү өсөн Мәскәүгә киткәс, Башревком хәрби комиссар бурысын ваҡытлыса Әүхәҙи Ишмырҙинға йөкмәтә. Артабан ул Вәлидиҙең урынбаҫары вазифаһын үтәй.

Республиканың хәрби комиссарына мөһим дәүләт, ғәскәри һәм хәрби эштәр буйынса командировкаларҙа күп йөрөргә тура килә. Ошо айҡанлы башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороу эше менән туранан-тура уның урынбаҫары Әүхәҙи Ишмырҙинға шөғөлләнергә, Башҡортостандың хәрби комиссары вазифаһын башҡарырға тура килә.

Апрель аҙағында Башревком Саранск ҡалаһына эвакуациялана. 27 апрелдә Вәлиди командировкаға китеп, үҙенең урынына тағы ла Ишмырҙинды ҡалдыра. 13 майҙа ҡайта ла, ун көн дә тормай, 21 майҙа Һамар ҡалаһына, Көнсығыш фронтҡа китә. 27 майҙа Һамарҙан ҡайтып, иртәгеһенә Мәскәүгә китә. 18 июндә Мәскәүҙән ҡайтып, 25 июндә Украинаға, Көньяҡ фронтҡа китә. Көньяҡ фронттан 15 июлдә ҡайта ла, иртәгеһенә Һамар һәм Бәләбәй ҡалаһына юллана. Һамарҙан 15 августа ҡайта. Тимәк, март, апрель айҙарында, 27 апрелдән 13 майға, 21–27 майҙа, 28 майҙан алып 18 июнгә, 25 июндән 15 июлгә, 16 июлдән 15 августа тиклем Әүхәҙи Ишмырҙин Зәки Вәлиди урынына Башҡорт Совет Республикаһының хәрби комиссары вазифаһын башҡара. Саранск ҡалаһында ике кавалерия һәм ике уҡсы полктарҙан торған Айырым Башҡорт бригадаһын ойоштороп, Көньяҡ фронтҡа оҙатыу эшен башҡара.

Артабан Бәләбәй ҡалаһында ойошторола башлаған Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы менән шөғөлләнә. 1919 йылдың 21 июлендә Һамар ҡалаһында булған Көнсығыш фронттағы Башревком вәкиле М. Халиҡовҡа: *«Говорил с Белебеем, пока в бригаду поступило лишь 530 человек; мобилизация идет почему-то туго, приму самые решительные меры. Взял на себя обязанность мобилизации Белебеевского, Стерлитамакского уездов, закончу к 1 августа. Сам буду разъезжать по волостям и в Стерлитамак...»* – тип хәбәр итә. Ишмырҙин, Бәләбәйгә килеп, бригаданы ойоштороу эшенә ныҡлап тотона. Бригада командиры Михович урынына башҡорт офицеры, элекке полковник Хәсән Әхмәровты тәғәйенләй. Бригаданың Штаб начальнигы Воронцов урынына Заһит Гәрәевте ҡуя. 1919 йылдың сентябрь башына Ишмырҙиндың тырышлығы менән Бәләбәй ҡалаһында Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы үҫеп сыға.

1919 йылдың сентябрендә Реввоенсовет рәйесе Троцкий башҡорт ғәскәрҙәрен Петроградҡа ебәрергә бойороҡ бирә. Тиҙ арала Бәләбәйҙән

Башҡорт уксы бригадаһы, 3-сө Башҡорт кавалерия полкы күсерелә. Көньяҡ фронттан Башҡорт кавалерия дивизияһының полктары килә. Деникинға ҡаршы һуғышта ауыр юғалтыуҙар кисергән, сафтары һирәгәйгән Башҡорт кавалерия дивизияһын тулыландырыу, һуғыш кәрәк-яраҡтары менән тәьмин итеү, башҡорт ғәскәрҙәрен Юденичҡа ҡаршы һуғышҡа әҙерләү бурысы алғы планға сыға.

«Постановление Реввоенсовета Республики от 7 октября за № 4848-ОП о новом переформировании башкирских частей в Петрограде нами в исполнение еще не приведено. Для разрешения этого вопроса прошу срочно выехать в Петроград товарища Валидова или Ишмурзина...» – тип хәбәр итә башҡорт ғәскәрҙәре эштәре буйынса махсус вәкил Хәлим Әмиров. Оҙаҡламай Әүхәҙи Ишмырҙин Петроградҡа килеп, Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмө частарын ойоштороу, тулыландырыу менән шөғөлләнә.

Совет хөкүмәте башҡорт ғәскәрҙәренең Юденич армияһын ҡыйратыуҙа күрһәткән батырлыҡтарын юғары баһалай. Башҡорт командирҙары һәм һалдаттарына Ҡыҙыл Байраҡ ордены һәм башҡа ҡиммәтле бүләктәр бирелә. РСФСР хөкүмәте Әүхәҙи Ишмырҙиндың хеҙмәттәрен дә баһалап үтә. Уға алтын хәрефтәр менән яҙылған ҡылыс бүләк итә.

Башҡортостанға ҡайтыу менән Ишмырҙин республиканың запас ғәскәри частарын ойоштороу менән мәшғүл була. Стәрлетамаҡта торған ғәскәрҙәр туранан-тура уға буйһона, гарнизон начальнигы вазифаһын үтәй. Ул саҡта Башревком урынлашҡан Стәрлетамаҡ ҡалаһы Өфө губернаһы ҡарамағында була. Өфө һәм Ырымбур губернаһы большевиктары Башҡортостан автономияһына ҡаршы ҙур ҡаршылыҡ күрһәтә, төрлө провокациялар эшләй. Ләкин улар Башҡорт республикаһының хәрби көстәренән шөрләңкерәй. 1919 йылдың сентябрендә булып үткән ваҡиғалар шул турала һөйләй. Сентябрь айында Көньяҡ фронттан, 1-се Башҡорт кавалерия полкынан делегат сифатында Зәйнуллин тигән һалдат Стәрлетамаҡҡа килә. Ул Деникинға ҡаршы һуғыштарҙағы батырлыҡтары өсөн Троцкийҙан бүләккә сәғәт алған ҡаһарман яугир, абруйлы һалдат була. Стәрлетамаҡ өйәҙе ЧК-һы өс башҡорт һалдатын, шул иҫәптән Зәйнуллинды, контрреволюцияла ғәйепләп, төрмәгә ябып ҡуя. Большевиктарҙың бындай башбаштаҡлығы, үҙҙәрен Стәрлетамаҡта хужа итеп тотоуҙары – Башҡорт республикаһын эшкә һанамауҙарын асыҡ күрһәтә. Зәки Вәлиди большевиктарға башҡорттарҙың кем икәнен тиҙ төшөндөрә. Уның бойороғо буйынса Ишмырҙиндың һалдаттары, 26 сентябрҙә Стәрлетамаҡ төрмәһен барып баҫып, ҡулға алынған башҡорттарҙы сығара. Был ваҡиға тураһында Өфө губревкомы рәйесе Эльцин Мәскәүгә бына нимә тип ошаҡлай: *«Только что прибыл нарочный из Стерлитамака с сообщением следующих фактов, подтвержденных документально: 26 сентября начальник гарнизона Башвоенкомата по Стерлитамаку Ишмурзин Первый командировал для Бисярова в Стерлитамакскую тюрьму с вооруженной силой 70 человек для*

освобождения арестованных, числящихся за Стерлитамакской Чека, Зайнуллина, Даутова, Надыршина, предписав в случае сопротивления агентов Чека арестовать их. Освобожденные обвиняются в контрреволюции, состоят сотрудниками Башвоенкомата. В ответ на эти незаконные действия в тот же день уполномоченным ревсовета укрепрайона Сидоровым был запрошен начальник гарнизона, им и предревкомом уезда Тереховым был запрошен политотдел Башреспублики с предупреждением ликвидировать незаконные действия. Ответа на запрос еще не последовало. Прибывший нарочный сообщает, что против отряда Чека выставлены пулеметы численностью одиннадцать. Башкирские части приведены в боевую готовность. По данным разведки, их численность в одном Стерлитамаке до 4 000 чел., вооруженных вполне. Нарочным сообщено ревкому. Наши указания – держаться тактично, не открывая активных действий, сообщая о незаконных действиях в губернский центр...»

Бына ошондай ҡатмарлы, ауыр осорҙа Әүхәҙи Ишмырҙин кәрәк урында көс менән Башҡорт автономияһының хоҡуҡтарын большевиктарға таныта, Башревком менән иҫәпләшергә мәжбүр итә.

Ләкин артабанғы айҙарҙа Башревкомға ҡаршы көрәшкә Мәскәүҙән Үҙәк власть эмиссарҙары, Башобком ҡушыла. Ике яҡ араһындағы ҡапма-ҡаршылыҡта Мәскәү коммунистарҙы яҡлап сыға. Ә инде 1920 йылдың майына Башҡортостандың хоҡуҡтарын бөтөнләй сикләргә була. Ошо маҡсатта 1920 йылдың 17 майында РСФСР СНК-һы һәм ВЦИК-тың декреты менән Башҡорт автономияһының хоҡуҡтары ҡырҡа сикләнә. Быға протест белдереп, Башревком эшен ташлап, Башҡортостандан сығып китә. Стәрлетамаҡта торған башҡорт һалдаттары Вәлиди ҡушыуы буйынса өйҙәренә таралыша башлай. Хәрби комиссариаттың һалдаттары Әүхәҙи Ишмырҙин менән китә. 1920 йылдың 30 июнендә П. Викман Мәскәүгә: *«Район национальной столицы Башкирии кишит вооруженными шайками. Вдобавок, к Темясово продвинуты приказом наркомвоена Ишмурзина отряды кавалерии и пехоты»*, – тип хәбәр итә.

Бөрйән-Түңгәүер кантонында кәңәшмә үткәргәндән һуң, башҡорт эшмәкәрҙәре, шул иҫәптән Әүхәҙи Ишмырҙин, көрәште дауам итеү өсөн Төркостанға сығып китә. *«Беҙҙең Башҡортостан ғәскәренән Әүхәҙи Ишмырҙин, ярҙамсым Ибраһим Исхаҡов, башҡа бер нисә офицерыбыҙ, полковник Һибәтулла Һөйөндөковтың яҡын офицерҙары менән бергә килеп, барыһы ла Бохараның хәрби ойошмаларында етәксе вазифалар алды»*, – тип яҙа Зәки Вәлиди үҙенең хәтирәләрендә.

Төркостанда Зәки Вәлиди һәм башҡа башҡорт эшмәкәрҙәре тарҡау баҫмасылар отрядтарын бергә туплап, большевиктарға ҡаршы ойошҡан рәүештә көрәшергә ниәт итә. Төрлө фронттарҙа һуғышып, утты-һыуҙы күп кискән башҡорт офицерҙары баҫмасыларҙы һуғышҡа өйрәтеү, ойоштороу эше менән мәшғүл була. Әүхәҙи Ишмырҙин Төркостанда ҡыҙылдар-

ға ҡаршы күп кенә һуғыштарҙа ҡатнаша. Милли хәрәкәт уңышһыҙлыкҡа осрағас, Вәлиди һәм уның көрәштәштәре, шул иҫәптән Әүхәҙи Ишмырҙин, Афғанстанға китергә кәңәшләшәләр. Әммә ҡаһарман сардар һәләкәткә осрай. *«Ташкентта саҡта хөкүмәт даирәләрендә эшләгән арҡадаштарыбыҙ аша беҙҙе бик ауыр ҡайғыға һалған тағы бер ваҡиғаны белдек. Был иһә дуҫым Әүхәҙиҙең ҡыҙылдар ҡулына әсир төшөүе ине. Ул ваҡиға хаҡында башҡа яҡтан бер ниндәй ҙә мәғлүмәт алмаһаҡ та, ысын булыуына ышандыҡ. Бер йылдан һуң Кабулда саҡта Әүхәҙиҙе Мәскәүҙә язалауҙарын ишеттек, ләкин эштең асылын, 1925 йылда Төркиәгә килгәс, йәғни өс йыл үткәндән һуң ғына, Әүхәҙи янында булған арҡадаштарынан белдек. Әүхәҙи һәм яҡындары 11 августа, Усматта хушлашып, минән айырылғандан һуң Мамур һәм Тураб бәктәр менән бергә Зомин һәм Уратүбә тауҙарында ҡыҙылдар менән һуғыша-һуғыша бер аҙна ваҡыт үткәргәндәр. Арҡадашы Һибәтулла әйтеүенсә, Әүхәҙи Зомин тимер юлы станцияһынан ун саҡрым төньяҡтағы Ҡуру Гөлдөрәүек исемле йәйләүҙә рустар менән бәрелештә әсир төшкән. Был көндәрҙә Әүхәҙиҙең рухы бик төшөнкө була. Шул уҡ Һибәтулланың хәбәренә ҡарағанда, бер кистә йәйләү аласығында ултырғандар, көн бик ямғырлы, томанлы булған. Әйәр муксаһындағы коньякты алып килеп, арҡадаштары менән эскән саҡта Әүхәҙи Пушкиндың ошо шиғырын һөйләгән:*

Буря мглою небо кроет,
Вихри снежные крутя.
Наша ветхая лачужка
И печальна, и темна.
Выпьем с горя, где же кружка,
Сердцу будет веселей.

Ул үҙе был тауҙарҙа оҙаҡ ҡалмай, Мача юлы менән Әнүәр Паша янына китергә, унда ла туҡталмай, Афғанстанға сығырға уйлаған икән. Мачаларҙың рәйесе Асрархан ғәскәре менән бергә килгән. Әүхәҙи был һуғышта ла күп егетлек күрһәткән, ләкин рустарҙың тап ҡаршыһына сыҡҡан бер урында аты ташҡа һөрөнөп йығылған һәм шунда уҡ янына ҡыҙыл һалдаттар ҙа килеп еткән. Әүхәҙи револьверы менән уларҙың бер нисәһен атып үлтергән, әммә ҡыҙылдар ҡулына эләккән. Шулай итеп, беҙҙең Башҡортостандың хөрмәтле хәрби нәзире, әсир төшөп, туҡмала-туҡмала, Зоминға, унан Ташкентҡа, артабан Мәскәүгә алып кителә».

Башҡортостан дәүләтселеге өсөн хәрәкәттә әүҙем ҡатнашҡан ҡаһарман башҡорт офицеры, милли хәрәкәт етәкселәренең береһе булған Әүхәҙи Ғәләүетдин улы Ишмырҙиндың ғүмере ошо рәүешле өҙөлә. Милли хәрәкәттә ҡатнашҡан туғандары Ишбулды һәм Сөләймән Ишмырҙиндарҙы 30-сы йылдар аҙағындағы Сталин репрессияһы һәләк итә.

Ғәлимйән Таған

Ғәлимйән Ғирфан улы Таған – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан башҡорт офицерҙарының береһе, Зәки Вәлидиҙең яҡын көрәштәше һәм дуҫы, ҡаһарман сардар. 1892 йылдың 1 ғинуарында Ырымбур губернаһы Силәбе өйәҙе Ҡатай олоҫоноң (хәҙер Ҡурған өлкәһе Әлмән районы) Тәңреғол ауылында тыуған. Ғәлимйән Таған тәүҙә ауыл мәҙрәсәһендә, артабан Рус-башҡорт мәктәбендә уҡый. Һуңынан Уҡытыусылар семинарияһын тамамлай һәм милли мәктәптәрҙә рус теле уҡытып йөрөй.

Беренсе донъя һуғышы башланыу менән Ғ. Таған хәрби хеҙмәткә алына. Уны, семинария бөткән уҡытыусы булараҡ, хәрби мәктәпкә ебәрәләр. Тифлис ҡалаһында хәрби мәктәпте тамамлағандан һуң, прапорщик чины алып, Кавказ фронтында хеҙмәт итә. 1917 йылда революциянан һуң тыуған яғына ҡайта.

Архив документтарынан, Зәки Вәлидиҙең хәтирәләренән күренеүенсә, Ғәлимйән Таған 1918 йылдың йәйендә Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушылып китә. Ләкин ул 1917 йылда башҡорт ҡоролтайҙарында, һис юғында, III Дөйөм Башҡорт ойоштороу ҡоролтайында ҡатнашҡан булыуы ла мөмкин.

1918 йылдың май аҙағында Чехословак корпусы большевиктарға ҡаршы баш күтәреп, Силәбе ҡалаһында власты үҙ ҡулына ала. Оҙаҡламай бында Башҡорт хөкүмәте үҙенең эшмәкәрлеген яңынан башлай. Чехтар ярҙамында башҡорт ғәскәрҙәре ойошторола башлай. Ошо эштә әүҙем ҡатнашҡан башҡорт офицерҙарының береһе – прапорщик Ғәлимйән Таған була. Зәки Вәлиди уны Силәбе халыҡ власы янындағы Башҡорт хөкүмәте вәкиле итеп тәғәйенләй. 12 июнь, башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороуҙағы идара органы булараҡ, хөкүмәттең Хәрби бүлеге мөдире Зәки Вәлиди етәкселегендә Башҡорт Хәрби Шураһы (һуңынан ул «Башҡорт ғәскәре штабы» тип аталып йөрөтөлә) булдырыла. Башҡорт офицерҙары подпоручик Ғ. Ғәбитов, прапорщик Ғ. Мөхәмәтйәровтар менән бергә Ғ. Таған да Хәрби шураның ағзаһы итеп һайлана.

Документтарҙан күренеүенсә, 1918 йылдың июлендә З. Вәлиди Ғ. Тағанды яңы ойошторола башлаған 5-се Башҡорт пехота полкына командир итеп тәғәйенләй. Әммә оҙаҡламай ул Златоуст өйәҙендә ойошторолоп ятҡан 3-сө Башҡорт пехота полкына, подполковник Тереғолов янына, ярҙамға ебәрелә. 1918 йылдың сентябрендә, Тереғолов 1-се Башҡорт пехота дивизияһы начальнигы итеп ҡуйылыу айҡанлы, 3-сө Башҡорт полк командиры бурысы прапорщик Тағанға йөкмәтелә.

3-сө полкка командир итеп тәғәйенләнгәнгә тиклем Ғәлимйән Таған тыуған яғына ҡайтып, үҙенең тыуған ауылы Тәңреғолда Ялан кантонының башҡармаһын ойоштороп, уның рәйесе булып тора.

1918 йылдың октябрендә Һамар хөкүмәтенең Халыҡ армияһын ҡыҙылдар ҡыҫа башлай. Армияның баш командующийы генерал Галкин Себер хөкүмәтенән башҡорт частарын ярҙамға ебәреүҙе үтенә. Оҙаҡламай Ғ. Тағандың полкы Һамар фронтына ташлана. Бында 3-сө Башҡорт

полкы В. Каппель корпусы составында ҡыҙылдарға ҡаршы ҡаты һуғыштарҙа ҡатнаша. Өфө яғына сигенгән Халыҡ армияһы ғәскәрҙәренең сигенеүен тәьмин итә.

Зәки Вәлиди үҙенең хәтирәләрендә «Өсөнсө полктың хәле» тип аталған бүлектә Ғәлимйән Таған етәкселек иткән 3-сө полктың хәрби хәрәкәттәре тураһында ентекле итеп яҙа: *«7 октябрҙә башҡорттар чехтар менән бергә Һамарҙы ҡалдырҙы. Бынан һуң полковник Таған етәкселегендәге полк, полковник Каппель частары менән берлектә, Бөгөлмә тирәһендәге Төпкилде ауылы янында ҡыҙылдарға ҡаршы бик ҡаты һуғышта ҡатнашты...*

...Туп-тура Мәскәүҙән ебәрелгән ҡыҙыл батальондар ҡыҫымы аҫтында французлар менән Каппель ғәскәрҙәре сигенде. Был хәлдә беҙҙең өсөнсө полк та Өфөгә, унан һуң Өфөнөң көнсығышына китергә мәжбүр булды».

1919 йылдың ғинуар башына Зәки Вәлиди башҡорт ғәскәрҙәренең бөтәһен тиерлек үҙенең ҡулы аҫтында туплауға өлгәшә. Полктар ике дивизиянан торған Башҡорт корпусына берләштерелә. Каппель корпусында йөрөгән 3-сө Башҡорт уҡсы полкы ғына ситтә тороп ҡала. Шулай ҙа корпус командалығы 18 февралгә тиклем 3-сө полктың башҡорт ғәскәрҙәренә килеп ҡушылырына өмөтөн өҙмәй. Хатта уны корпустың 2-се дивизияһына индерәсәк тип планлаштыра. *«В состав 2-й дивизии должны войти: 5-й Башкирский стрелковый полк, 6-й Башкирский стрелковый полк, 2-й Башкирский кавалерийский имени Абдуллы Идельбаева полк и 3-й Башкирский стрелковый полк, по прибытии его из Уфимского фронта»,* — тиелә.

Әммә аҡтар Ғәлимйән Тағандың полкына Башҡорт корпусына барып ҡушылырға мөмкинлек бирмәй. 18 февралдә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власына сыҡҡас, Колчак 3-сө Башҡорт полкын бөтөнләй таратырға бойора. *«Полктың бер өлөшө Ләмәҙ исемле рус ауылында — Таған, икенсе өлөшө Һатҡы заводында Һарун Ҡорбанғәлиев етәкселегендә булды һәм Колчактың ҡоралды тапшырырға ҡушҡан әмеренә буйһонмай, ике аҙна ҡаршылыҡ күрһәтте. Колчак ризыҡ яғын да ҡыҫты һәм һалдаттарға ауылдарына таралырға бойороҡ бирҙе. Таған менән Һарун Ҡорбанғәлиев, ҡалын ҡар яуған ҡыш айҙары булмаһа, Колчак әмерен тыңламай, төп башҡорт ғәскәрҙәренә килеп ҡушылыр инек, тип рапорт бирҙе»,* — тип яҙа Вәлиди. Ахыр сиктә 3-сө Башҡорт уҡсы полкы ҡорал һалырға мәжбүр була. 1919 йылдың 2 мартында Ғәлимйән Таған 3-сө полктың хәле тураһында аҡ генералдарҙың береһенә былай тип яҙа: *«Сообщаю Вам нижеследующие подробности последних событий: с Валидовым перешли к красным 1-й, 2-й, 3-й, 4-й и 5-й пехотные Башкирские полки. Остались на нашей стороне партизанские отряды (в которых было свыше 2 000 штыков) и наш полк (3-й башкирский), находящийся в корпусе генерала Каппеля, а потом переданный, очевидно с целью расформирования, в 6-ю Уральскую дивизию, т. к. Каппель не согласился бы сделать этого.*

Переход Валидова был удобным предлогом к выполнению намеченной цели, и наш 3-й полк был расформирован. Тяжелое впечатление осталось, когда отнимали у нас 27 пулеметов, добытых нами у красных, и также 7 походных кухонь и около 100 лошадей, необходимых для полка, это было еще до расформирования. При расформировании было у нас только 670 человек, т. к. мы во время боев, из-за слабости вооружения, потеряли около 1 200 человек. Из этих 670 остались в армии человек 120, а все остальные, близкие к своим домам, расходились в полном разочаровании».

1919 йылдың йәйендә Ғәлимйән Таған генерал Беловтың Көньяҡ армияһында хеҙмәт итә. Август айында ҡыҙылдар Колчак армияһын Башҡортостан территорияһынан ҡыҫырыҡлап сығара. Колчак армияһының төрлө частарындағы 2 меңдән ашыу башҡорт һалдаты менән бергә поручик Таған да көнсығышҡа сигенә. 1920 йылдың март башында башҡорттар Чита ҡалаһына килеп етә. Ғәлимйән Таған менән Ғәбделхай Ҡорбанғәлиев башҡорт һалдаттарын бер урынға туплау ниәте менән аҡ генералдар менән һөйләшеүҙәр башлай. 14 март Ҡорбанғәлиев атаман Семенов менән һөйләшеп, башҡорттарҙы уның ғәскәрҙәре сафында туплауға ризалыҡ ала. 16 апрелдә барон Унгерндың саҡырыуы буйынса Таған менән Ҡорбанғәлиев Даурияға барып, уның Азия дивизияһы составында башҡорт ротаһын ҡарап ҡайталар.

1920 йылдың 14 июнендә Чита ҡалаһында башҡорт вәкилдәренең кәңәшмәһе булып үтә. Унда Башҡортостандың 8 өйәҙенең вәкиле булараҡ 20 кеше ҡатнаша. Йыйылышта Башҡорттарҙың Рәсәйҙең Көнсығыш сигендәге хәрби-милли идараһын ойоштороу мәсьәләһе күтәрелә. Оҙаҡламай башҡорттар атаман Семенов ярҙамы менән был ниәтте тормошҡа ашыра. 1920 йылдың 22 июнендә Семенов үҙенең фарманы менән башҡорттарҙың хәрби-милли идараһын ойоштора. Ошоноң менән бер рәттән ул Аҡ армия сафтарында Башҡорт ғәскәрен төҙөүгә ризалыҡ бирә. Хәрби-милли идараның рәйесе итеп Ғ. Ҡорбанғәлиев тәғәйенләнә. Ә бына идаралыҡтың штаб начальнигы вазифаһына һәр генерал үҙ кешеһен ҡуйырға тырыша. *«27 июня приказом председателя военно-национального управления башкир Рос. Вост. Окр. за № 1 по Башкирскому войску было объявлено об открытии действий Военно-национального управления башкир Рос. Вост. Окр. в гор. Чите.*

Затем шли переговоры о назначении начальника штаба Управления и ввиду важности той роли, которую мог сыграть начштаб, все группировки и высокопоставленные лица обратили на это очень серьезное внимание и каждый из них старался провести своего кандидата. Штаб походного атамана стоял за то, чтобы назначен был офицер Генерального штаба. Заместитель атамана оренбургских казаков ген. Анисимов предлагал кандидатуру полковника Кручинина, начдив 1-й Уфимской ген. Бангерский предлагал из генерального штаба полковника Михайлова и много было других кандидатов, предлагаемых со стороны различных лиц из командного состава и штабов.

Но приказом председателя Военно-национального управления за № 1 по штабу Управления от 1 июля был допущен к временному исполнению должности начальника штаба Управления поручик Таганов», — тип яҙа «Башкиры в Забайкалье» тигән хеҙмәтендә Ғ. Таған.

Ошо рәүешле, 1920 йылдың июленән, поручик Таған Башҡорттарҙың хәрби-милли идараһы штабы начальнигы вазифаһын үтәй башлай. Оҙаҡламай уға подполковник званиеһы бирелә.

Ҡорбанғәлиев менән Таған Хәрби-милли идара биргән вәкәләттәрен файҙаланып, башҡорт яугирҙарын бер ғәскәргә тупларға тип, күпме генә тырышып ҡараһалар ҙа, улар ниәте тормошҡа ашмай. Атаман Семенов ыңғай ҡараһа ла, аҡ генералдар башҡорттарҙың берләшеүенә ҡырҡа ҡаршы сыға. 1920 йылдың ноябренә ҡыҙылдар Семенов ғәскәрҙәрен Манчжурияға бәреп сығара. Аҡ армия тамам тарҡала.

Ғәлимйән Таған Японияға сыға, һуңынан венгр шәрҡиәтселәре ярҙамында Венгрияға барып төпләнә. Бында ул Дербцен ҡалаһындағы аграр университетта белем алып сыға. Артабан Будапешта Франц Иосиф исемендәге университеттың иҡтисад факультетын тамамлап, «Совет Рәсәйе валютаһы» тигән темаға докторлыҡ диссертацияһын яҡлай. Шуға ҡарамаҫтан, этнография менән шөғөлләнеүен дауам итә. Һуңынан Мадьяр дәүләт этнография музейына эшкә күсә. 1945 йылда Совет ғәскәрҙәре Венгрияға килеп еткәнсе ошо музейҙың Ислам һәм төрки бүлеген етәкләй. Ошо осорҙа уның «Башҡорттоң тирмә йорттағы көнкүреше», «Башҡорттарҙа һәм ҡырғыҙҙарҙа ат ауырыуҙары һәм уны дауалау», «Башҡорттарҙа һәм ҡырғыҙҙарҙа ат ярыштары һәм байрамдары», «Башҡорттарҙа мал тамғалау ысулы», «Башҡорттарҙа һәм ҡырғыҙҙарҙа ат тәрбиәләү ысулдары», «Башҡорттарҙа һәм ҡырғыҙҙарҙа йөк ташыу һәм сәйәхәт итеү саралары» тигән фәнни мәҡәләләре баҫылып сыға.

1945 йылда Совет ғәскәрҙәре Венгрияға инеү менән, Ғәлимйән Таған Төркиәгә китергә тырышып ҡарай. Әммә виза ала алмағас, советтарҙан Германияға ҡасырға мәжбүр була. Гамбург ҡалаһына килеп урынлашып, университетҡа эшкә төшә. Ғ. Таған штаттан тыш төрки телдәре уҡытыусыһы булып эшләй. Һуғыштан һуңғы ауыр тормош, юҡлыҡ (тәүге осорҙа уға ҡасҡындар лагерҙарында йәшәргә тура килә) уның һаулығын тамам ҡаҡшата. Ғәлимйән Ғирфан улы Таған 1948 йылдың 28 июнендә Гамбургта вафат була.

Әхмәҙулла Бейешев

Әхмәҙулла Әлмөхәмәт улы Бейешев – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан башҡорт офицерҙарының береһе, һуңынан күренекле дәүләт эшмәкәре. 1896 йылдың 24 февралендә (икенсе сығанаҡтар буйынса 3 мартта) Ырымбур губернаһы Орск өйәҙе (хәҙерге

Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ районы) 5-се Үҫәргән олоҫоноң Иҙелбай ауылында тыуған.

Ырымбурҙа Уҡытыусылар семинарияһын тамамлай. 1916 йылда хәрби хеҙмәткә алынып, Беренсе донъя һуғышында ҡатнаша. 1917 йылда Чугуев хәрби училищеһын тамамлап, подпоручик званиеһын ала.

1917 йылдың декабрендә отпускыға ҡайтҡан подпоручик Бейешевте Башҡорт хөкүмәтенә эшкә саҡыралар. 1918 йылдың ғинуарында хөкүмәттең ҡушыуы буйынса Ә. Бейешев башҡорт офицерҙары Ғимран Мағазов, Әкрәм һәм Мөхтәр Ҡарамышевтар менән бергә автономияның хәрби көстәрен булдырыу маҡсатында, Бөрйән-Түңгәүер кантонына юллана. Бында улар тарафынан 400 кешелек башҡорт отряды ойоштоpола. Февраль айында Башҡорт хөкүмәте ҡулға алынып, Баймаҡтағы отряд ҡыйратылғас, подпоручик Бейешевкә йәшеренеп йөрөргә тура килә.

1918 йылдың июнендә Силәбелә барып урынлашҡан Башҡорт хөкүмәте регуляр ғәскәр менән бер рәттән урындарҙа ирекле отрядтар ойоштороу эшенә тотона. 1918 йылдың 1 июлендәге Башҡорт хәрби шураһының фарманында «урындарҙа тәртип урынлаштырыу һәм большевиктар менән көрәш алып барыу маҡсатында» айырым башҡорт отрядтарын ойошторорға, тиелә.

Әлбиттә, Граждандар һуғышы барған осорҙа Башҡортостан автономияһының урындағы власть органдары эшен тәьмин итеү, ябай халыҡты төрлө йәберләүҙәрҙән ҡурсалау өсөн ҡоралл көс ойоштороу көнүҙәк мәсьәләгә әүерелә. Милли хәрәкәт етәкселеге быны яҡшы аңлай. Сөнки ҡыҙылдар һәм монархистик рухтағы аҡтар ҙа Башҡортостан автономияһын танып бармай, кантондарҙа үҙ хөкөмөн ҡылырға тырыша. Шуға күрә лә был отрядтар Башҡортостан хөкүмәтенең Хәрби бүлегенә буйһондорола. Һуғыш тамамланғас, был отрядтар даими милицияға әүерелеп, Башҡортостан хөкүмәтенең Эске эштәр бүлеге ҡарамағына күсергә тейеш була.

Ирекле отрядтарҙы ойоштороу һәм уларҙың эшен көйләү өсөн Башҡорт хәрби шураһында Ирекле отрядтар бүлеге булдырыла. Ирекле отрядтарҙы ойоштороу эше подпоручик Әхмәҙулла Бейешевкә йөкмәтелә.

Силәбелә урынлашҡан Башҡорт хөкүмәте, ирекле отрядтар ойоштороу эшен яйға һалыу өсөн, Әхмәҙулла Бейешев менән Сәғит Мерәсовты Ырымбурға ебәрә. Бында улар Башҡорт хөкүмәтенең Ырымбур хәрби бүлеген ойоштороп, кантондарҙа отрядтар төҙөү эшенә тотона. Ирекле отрядтарҙы кантондарҙың идараһы янында ойоштороу ҡарала. *«Башҡорт хәрби бүлеге Әхмәт Бейешев менән Сәғит Мираҫовҡа, комсостав кадрҙары етәкселегендә кантондарға үҙ вәкилдәрен ебәреп, ирекле отрядтар ойошторорға ҡушты. Халыҡ бындай отрядтарҙың төҙөлөүен хуплап ҡаршы алды. Ирекләләр отрядҡа ҡоралдары, үҙ аттары менән килде һәм урындағы халыҡ иҫәбенә йәшәне»*, — тип яҙа үҙенең китабында Муса Мортазин. Архив документтарынан күренеүенсә, ысынлап та ирекле отрядтар ойоштороу ниәте кантондарҙағы халыҡтың хуплауын таба. 1918 йылдың июль — август

айҙарында Башҡорт хәрби шураһы һәр кантонға вәкилдәр ебәреп, әүҙем рәүештә отрядтар төҙөй башлай.

Әйткәндәй, ошондай отряд ойоштороу бурысы менән прапорщик А. Ғәлиев менән бергә мәшһүр йырсы Ғәзиз Әлмөхәмәтов та Ҡыпсаҡ кантонына, йәғни йырсының тыуған яғына, ебәрелә. Ошондай уҡ бурыс бөйөк шағир, азатлыҡ йырсыһы Шәйехзада Бабичҡа ла йөкмәтелә. Улар Сәйетгәрәй Мағазов менән Өфө губернаһында башҡорт отрядтары ойошторорға тейеш була. Уның ҡәләмдәше Ғәбделхай Иркәбаев Бөрйән-Түңгәүер кантонында отряд ойоштороуҙа ҡатнаша. Ирекле отрядтар ойоштороу өсөн хөкүмәт вәкилдәре менән бергә офицерҙар — инструкторҙар ебәрелә.

Һөҙөмтәлә, бер-ике ай эсендә Башҡортостандағы (ул ваҡытта ҡоролтай ҡарары буйынса автономияның урындағы власть органдары Бәләкәй Башҡортостан территорияһында ғына ойошторолған була) 13 кантонда ирекле отрядтар төҙөлә. Был отрядтарҙың һәр береһе шул кантондарҙың исеме менән аталып йөрөтөлә. Һәр бер отряд 150-нән алып 400-гә яҡын кешенән тора. Мәҫәлән, Табын ирекле отрядында 200 кеше, Дыуанда — 200 кеше, Арғаяшта — 200, Юрматыныҡында — 250 кеше, Ҡошсо кантонында ла 250 кешелек отряд төҙөлә. Көҙәй отрядында 100 кеше булһа, Үҫәргән һәм Туҡсоранда — 160-шар кеше иҫәпләнә. Бөрйән-Түңгәүер, Ҡыпсаҡ һәм Ялан (хәҙерге Ҡурған өлкәһе) кантондарындағы отрядтар 180-шәр кешенән тора. Иң ҙур отрядтар Ете ырыу менән Тамъян-Ҡатай кантондарында ойошторола. Бындағы отрядтар 300 кеше тәшкил итә. Башҡорт хәрби шураһы тарафынан ирекле отряд етәкселәре итеп, ғәҙәттә, офицерҙар һәм прапорщиктар ҡуйылған. Отряд етәксеһе янында ярҙамсыһы, өлкән һәм кесе инструкторҙар булған.

Был отрядтар тулыһынса халыҡ иҫәбенә ойошторолған һәм көн күргән, тип уйларға ярамай. Башҡорт хәрби шураһы тарафынан ирекле отрядтар аҡса, кейем-һалым (обмундирование) һәм башҡа кәрәк-яраҡтар менән тәьмин ителә. Ирекле отрядтарға урындағы халыҡтарҙан ярҙам алыу тыйылған, Хәрби шураның фарманында: *«Разрешается начальникам отрядов принимать всякого рода пожертвований, кроме денежных»*, — тиелә.

Шулай итеп, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә Башҡорт хөкүмәте ике пехота дивизияһы һәм бер кавалерия полкынан торған Башҡорт корпусы менән бер рәттән һәр кантонда ирекле отрядтар ойоштороуға өлгәшә. М. Мортазин, 1918 йылдың июненән октябренә тиклем был отрядтарҙың һаны 3,5 меңгә етте, тип билдәләй.

Был отрядтар Башҡортостан автономияһының урындағы власть органдарының эшен тәьмин итеү һәм ябай халыҡты талап йөрөгән ҡыҙыл отрядтарҙан ҡурсалау йәһәтенән ҙур әһәмиәткә эйә була. Был хаҡта Әхмәтзәки Вәлиди ҙә үҙенең хәтирәләрендә: *«Июлдә Әхмәт Бейешев етәкселегендә милиция ойоштора башланыҡ. Милиция тәшкиләте, мәмләкәт эсендәге большевик отрядтарын ҡыуып, тәртип урынлаштырыу менән шөғөлләнәсәк. Был тәшкиләт үҙ вазифаһын уңышлы башҡарҙы, большевиктарҙың һәр ерҙә ҡал-*

дырған йәшерен ойошмаларын табып, юҡ итте», – тип яҙа. Ошо отрядтар ярҙамында һуғыш барған осорҙа ла Ырымбурҙағы Башҡортостан хөкүмәте алыҫ ятҡан кантондары менән тығыҙ бәйләнештә була. Бер һүҙ менән әйткәндә, ирекле отрядтар хөкүмәткә ныҡлы терәк, тыл булып хеҙмәт итә.

Быңдай хәл Башҡортостан автономияһын танырға теләмәгән аҡ генералдарҙың алҡымына арҡыры торған ҡылсыҡ кеүек була. *«Башҡортостанда ҡеүәтле көс булып үҫә барған ирекләләр отрядтарынан шөрләп, Дутов уларҙы тарҡатыу, туҙҙырыу өсөн бөтәһен дә эшләп ҡараны: был отрядтарҙы фронтҡа ебәреүҙе талап итте, хәрәкәт итеүсе башҡорт частарын улар менән тулыландырыуға саҡырҙы. Быңың менән Дутов Башҡорт хөкүмәтен хәлһеҙләндерергә теләй ине»,* – тип яҙа М. Мортазин.

Хәрби-стратегик йәһәттәнме, әллә Дутовтың талабы менән ризалашыпмы, Башҡорт Хәрби Шураһы 1918 йылдың 7 октябрендәге фарманы менән Бөрйән-Түңгәүер, Үҫәргән, Ҡыпсаҡ, Етеырыу, Туҡ-Соран кантондарындағы отрядтарҙы 2-се Башҡорт ирекле кавалерия полкына туплауға бойора. Хәрби шураның Ирекле отрядтар бүлеге бөтөрөлә, уның етәксеһе Әхмәҙулла Бейешев полктың командиры итеп тәғәйенләнә. Полк командиры фарманы менән кантондарҙағы отрядтар 2-се полктың эскадрондары итеп үҙгәртелә, уларҙың етәкселәре эскадрон командирҙары булып китә. Башҡорт хәрби шураһы фарманы менән полкка Кесе ҡоролтай ағзаһы, 1918 йылдың февралендә Баймаҡта ҡыҙылдар тарафынан үлтерелгән ҡаһарман сардар, поручик Ғабдулла Иҙелбаевтың исеме бирелә.

Подпоручик Бейешев 2-се Башҡорт кавалерия полкы командиры сифатында 1918 йылдың декабренән 1919 йылдың февраленә тиклем ҡыҙылдарға ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнаша. Яуҙа күрһәткән ҡаһарманлыҡтары өсөн Әхмәҙулла Бейешевкә ротмистр званиеһы бирелә.

1919 йылдың февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡас, элекке ирекле отрядтар (милиция) етәксеһе Әхмәҙулла Бейешевкә шундай уҡ юҫыҡтағы бурыс йөкмәтелә. Уны БашЧК-ның (Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш комиссияһы) рәйесе итеп тәғәйенләйҙәр. Хәҙер уға Совет власының тәртип һаҡлау органдарын ойоштороорға кәрәк була. Әммә был вазифала ул оҙаҡ эшләп өлгөрмәй. 1919 йылдың май аҙағында уны 1-се армия хәрби революцион трибуналы янындағы Башревком вәкиле Таһир Имаҡов эргәһенә икенсе вәкил итеп ебәрелә. Бында улар ҡыҙылдарҙың урындағы халыҡты йәберләүенә сик ҡуйыу, башбаштаҡланған ҡыҙыл командирҙарҙың эшен армия етәкселегенә еткереү, яуаплылыҡҡа тарттырыу өсөн ебәрелә. Әммә бында Башревком вәкилдәренә ҡолаҡ һалып бармайҙар. *«Трибунал очень мало имеет касательства к делам башкир и о дипломатических отношениях. Между Башревкомом и Первой армией представления почти не имеют, а потому фактической пользы ревкому представительство при трибунале не приносит, хотя бы по делу т. Воробьева и др. Относительно дела Воробьева и др.*

известно, что трибунал армии не будет разбирать и судить, а только передаст материалы в высший трибунал, если этого захотят», — тип хәбәр итә Әхмәҙулла Бейешев Башҡортостандың хәрби комиссары Әхмәтзәки Вәлидовҡа.

Артабан Әхмәҙулла Бейешев 1919 йылдың июнь айында Дәүләт контроле халыҡ комиссары итеп тәғәйенләнә. 1920 йылдан Социаль тәьминәт һәм хеҙмәт комиссары вазифаһын башҡара. 1921 йылдың ғинуарынан Автономиялы Башҡорт Совет Республикаһы хөкүмәтенең башлығы — Халыҡ Комиссарҙары Советы (Башсовнарком) рәйесе булып китә. 1921 йылдың июленән ноябренә тиклем РКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитетының яуаплы сәркәтибе булып эшләй. Был осорҙа Әхмәҙулла Бейешев башҡорт теленең дәүләт теле булараҡ ғәмәлгә ашырыу эшенә күп көс һала. 1924 йылда ул Халыҡ мәғарифы комиссары, 1925 йылдан БАССР-ҙың финанс комиссары урынбаҫары вазифаһын үтәй.

Артабан Мәскәүгә эшкә алына. 1935 йылда И. В. Сталин исемендәге Бөтә Союз сәнәғәт академияһын тамамлай. Мәскәүҙәге М. В. Фрунзе исемендәге Үҙәк аэродромдың төҙөлөш начальнигы булып эшләй. Ҡулға алыныр алдынан Бөтә Союз промысла кооперацияһы советында консультант булып йөрөй.

Уны, территористик ойошмала ҡатнашыуҙа ғәйепләп, 1937 йылдың 20 июнендә ҡулға алалар. Өс ай төрмәлә тотҡандан һуң, 27 сентябрҙә СССР Юғары Советының хәрби коллегияһы ҡарары менән Әхмәҙулла Әлмөхәмәт улы Бейешев үлем язаһына хөкөм ителә. Хөкөм ҡарары шул көндә үк атҡарыла. Мәскәүҙең Донской зыяратында ерләнгән. 1957 йылдың 31 октябрендә шул уҡ хәрби коллегияның ҡарары менән реабилитациялана.

Харис Туймаҡаев

Харис Туймаҡаев — 1918 йылда Башҡорт армияһын ойоштороуҙа әүҙем ҡатнашҡан офицерҙарҙың береһе. Тыумышы менән Троицк ҡалаһынан. Зәки Вәлиди уны сығышы менән Башҡортостандың Күгәрсен районынан, тип яҙа.

Харис Туймаҡаев Беренсе донъя һуғышына алынып, унда хәрби мәктәп тамамлап, офицер чинын алып ҡайтҡан булһа кәрәк. 1918 йылдың майында Силәбе ҡалаһында большевиктар власы ҡолатылып, Чехословак корпусы ҡулына күскәндән һуң бында Силәбе башҡорттарынан Мосолман ирекле отряды ойошторола. Отряд менән поручик Х. Туймаҡаев етәкселек итә. Оҙаҡламай Силәбе ҡалаһында Башҡорт хөкүмәте милли ғәскәр төҙөү эшенә тотона. Әлеге Мосолман ирекле отряды нигеҙендә Башҡортостан автономияһының тәүге ғәскәри берәмеге — 1-се Башҡорт пехота полкы ойошторола. Уның командиры итеп поручик Туймаҡаев тәғәйенләнә.

1-се Башҡорт полкы 1918 йылдың июнь — июль айҙарында ҡыҙылдарға ҡаршы һуғышта ҡатнашып, аҡтар алдында үҙен һуғышсан милли

ғәскәр итеп таныта. Был, үҙ сиратында, Башҡорт хөкүмәтенә башҡорт ғәскәрен артабан үҫтерергә, яңы полктар ойоштороорға мөмкинлек бирә.

1918 йылдың август башында 1-се полк Башҡорт хөкүмәте менән бергә Ырымбурға килеп урынлаша. 11 августа Ырымбур хәрби округы ғәскәрҙәре командующийы Дутов башҡорт полкын килеп ҡарап китә. Башҡорт һалдаттары араһындағы тәртип һәм хәрби рухтың юғары кимәлдә булыуын күреп, ул һоҡланыуын йәшермәй. Полк командирына рәхмәтен белдереп, иртәгеһенә үк түбәндәге фарманды сығара:

ПРИКАЗ

по Оренбургскому военному округу № 107
12 августа 1918 г. гор. Оренбург
(по отделу генерал-квартирмейстера)

11 августа я посетил только что прибывший в г. Оренбург 1-й батальон 1-го Башкирскаго полка, расквартированный на Маячной горе, в лагере 2-го кадетскаго корпуса. В момент моего прибытия батальон обедал. Из всего виденнаго мною в батальоне, я вынес самое отрадное впечатление. Несмотря на праздник, все г.г. офицеры были при батальоне. Солдаты хорошо одеты, имели отличный воинский вид. На приветствие отвечали сноровисто и умело. Меня порадовала выправка и молодцеватость солдат Башкирскаго полка. Не оставляет желать лучшаго и внутренний распорядок в батальоне: помещения содержатся в чистоте, в канцелярии полный порядок, во всем чувствуется опытная и твердая рука командира полка, заботящагося о своей части в общем и в подробностях.

За все виденное считаю долгом благодарить командира полка поручика Туймакаева, начальника пулеметной команды поручика Жукова и всех г.г. офицеров этой молодой части. Так же сердечно благодарю и молодцев солдат.

Родина наша, раздираемая когтями врагов и призывающая истинных сынов своих к спасению ея, давно ждеть таких строевых частей, каким является только что осмотренный мной батальон славнаго Башкирскаго полка.

Я уверен, что часть эта послужит надежным кадром для нарождающихся новых Башкирских частей, а образцовая их служба, опирающаяся на сознательную дисциплину, веру в правое дело Свободы и Родины и победу над врагом, послужит примером для других частей Народной Армии, формирующихся в Оренбурге.

Да здравствует нарождающаяся Народная армия!

Да здравствует первый Башкирский полк!

Приказ этот прочесть во всех ротах, сотнях, батареях и командах.

Ошо уҡ осорҙа поручик Харис Туймаҡаев Башҡорт хәрби шураһы комиссияһы составында Башҡорт армияһы униформаһын эшләүҙә ҡатнаша. Милли униформа башҡорт ғәскәрҙәрендә 29 августа индерелә.

1918 йылдың 30 авгусында Х. Туймаҡаев Башҡорт хәрби шураһының Ирекле отрядтар бүлеге ҡарамағына күсерелә. *«Вместо поручика Туймакаева командиром 1-го Башкирского полка назначается подполковник Якубовский. Первому предписывается сдать полк, а второму принять и о сдаче и приеме донести Башкирскому военному совету...»* — тиелә фарманда.

Артабан уны Башҡорт хөкүмәтенең уполномоченныйы сифатында Үсәргән кантонына ебәрергә булалар. Бында Харис Туймаҡаев Усман Ҡыуатов менән Үсәргән кантоны идараһы эшен юлға һалыу менән шөғөлләнә. Башҡортостан автономияһының урындағы власть органдары яңы аяҡка баҫҡан осорҙа, улар кадрҙарға ҡытлыҡ кисерә. 16 октябрҙә Башҡорт хөкүмәтенә яҙған хатында вәкилдәр кантон идараһын белгестәр менән тәьмин итеү мәсьәләһен хәл итеүҙе һорап мөрәжәғәт итә. *«Для успешной работы просим все просьбы удовлетворять без задержки, в противном случае наше пребывание будет бесполезным»*, — тип хәбәр итә Туймаҡаев.

1918 йылдың ноябренән поручик Туймаҡаев Башҡорт ғәскәри идараһында махсус йомош буйынса обер-офицер булып хеҙмәт итә. Уға штабс-капитан званиеһы бирелә.

Артабан милли хәрәкәт документтарында уның исеме осрамай. Бәлки, 1919 йылдың февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡан мәлдә аҡтар яғында ҡалғандыр. Уның артабанғы яҙмышы билдәһеҙ.

Ғәбделхаҡ Ғәбитов

Ғәбделхаҡ Ғәбитов — 1918 йылда Башҡорт армияһын ойоштороу эшендә мөһим роль уйнаған башҡорт офицерҙарының береһе. Тыумышы менән Ырымбур губернаһы Троицк ҡалаһынан.

Атаһы мөғәллим була. Атаһынан етем ҡалып, йәмәғәт аҡсаһы иҫәбенә (бәлки, «Башҡорт стипендияһы»на белем алғандыр) уҡый. Беренсе донъя һуғышы башланғас, хәрби хеҙмәткә алына. Унда хәрби училище тамамлап, подпоручик чинында ҡайта.

1918 йылдың май аҙағында Силәбелә власть чехословактар ҡулына күскәс, 2 июндә Арғаяш кантонының Мәтәл ауылында подпоручик Ғәбделхаҡ Ғәбитов рәйеслегендә Башҡорт милли-азатлыҡ эшмәкәрҙәре съезға йыйыла. Съезд чехословактар менән һөйләшеү өсөн Ғ. Ғәбитов, С. Мерәсов һәм Н. Таһировтарҙы Силәбегә ебәрә. Башҡорт вәкилдәре чехословактар менән уртаҡ тел таба. Силәбенең Халыҡ власы комитетында Башҡорт шураһы ойошторола. Уның ағзалары итеп Ғ. Ғәбитов, С. Мерәсов, Н. Таһиров, Т. Ғисмәти, Ф. Сөләймәнов, Ғ. Мөхәмәтйәровтар һайлана.

Подпоручик Ғәбитов башҡорттар исеменән Чехословак корпусы командалығы менән милли ғәскәрен ойоштороу мәсьәләһе буйынса һөйләшеүҙәр башлай. Чехословактар башҡорттарға ҡорал менән ярҙам итергә

ризалаша. Һөҙөмтәлә, подпоручик Ғәбитов, Зәки Вәлиди Силәбегә килеп, Башҡорт хөкүмәте эше башланғансы ҙур эштәр башҡарып өлгөрә.

Зәки Вәлиди килгәс, Башҡорт армияһын ойоштороу эше менән шөғөлләнеүсе махсус орган — Башҡорт хәрби шураһы ойошторола. Хәрби шураны Вәлиди етәкләй, уның урынбаҫары итеп Ғ. Ғәбитов тәғәйенләнә. Ул Себер хөкүмәте менән бәйләнешкә инеп, башҡорт ғәскәрҙәрен ҡорал, хәрби кәрәк-яраҡтар менән тәьмин итеү буйынса Башҡорт хөкүмәте исеменән һөйләшеүҙәр башлай. Июль башында Башҡорт хөкүмәте уны киң вәкәләттәр менән Омскиға ебәрә. 1918 йылдың 2 июлендә Башҡорт хөкүмәтенең Хәрби бүлеге тарафынан бирелгән таныҡмала былай тиелгән: *«Предъявитель сего товарищ председателя Военного совета при военном отделе Правительства Башкирии подпоручик Абдул-Хак Габитов командируется для переговоров с Временным Сибирским правительством и командующим войсками Западной Сибири по вопросам организации и управления Башкирских войск».*

Подпоручик Ғәбитовтың Омскиҙағы һөйләшеүҙәре уңышлы тамамлана. Себер хөкүмәте милли ғәскәрҙәр төҙөү идеяһын өнәп бармаһа ла, Аҡ армияның айырым хәрби берәмеге булараҡ Башҡорт ғәскәрен ойоштороуға ризалыҡ бирә. Был Граждандар һуғышы барышында Башҡортостан автономияһының йәшәйәшен, киләсәген тәьмин иткән ҙур уңыш була. Ошоноң менән Ғәбделхаҡ Ғәбитов башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороуҙа баһалап бөткөһөҙ эш башҡарып сыға.

Себер хөкүмәтенең ярҙамы менән Башҡорт хәрби шураһы башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороу эшен йәйелдереп ебәрә. Июнь, июль, август айҙарында 1-се, 2-се, 3-сө, 4-се, 5-се Башҡорт пехота полктары һәм 1-се Башҡорт кавалерия полкы ойошторола. 24 июль подпоручик Ғәбитов 2-се Башҡорт пехота полкы командиры итеп тәғәйенләнә. 2-се полктың частары ҡыҙылдар менән һуғыштарҙа ҙур батырлыҡтар күрһәтә. Июль аҙағында Екатеринбург ҡалаһын азат итеүҙә ҡатнаша. Ҡала халҡы башҡорт полкына рәхмәт йөҙөнән «Доблестным освободителям — благодарный Екатеринбург» тигән яҙыу менән байраҡ бүләк итә.

1918 йылдың көҙөндә һаулығы насарайыу сәбәпле, Ғ. Ғәбитов хәрби хеҙмәттән китә. Уның исеме милли хәрәкәт документтарында башҡа осрамай. Подпоручик Ғәбделхаҡ Ғәбитовтың артабанғы яҙмышы билдәһеҙ.

Ибраһим Исхаҡов

Ибраһим Ейәнбай улы Исхаҡов — Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан башҡорт офицерҙарының береһе, Әхмәтзәки Вәлидиҙең яҡын көрәштәше. 1891 йылда Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙе (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Стәрлетамаҡ районы) Мырҙаш ауылында тыуған. 1913 йылда батша армияһына хеҙмәткә алынып (хәрби мәктәп тамамлаған, күрәһең), офицер дәрәжәһендә ҡайтып төшә.

1918 йылдың йәйендә Башҡорт армияһына хәрби хеҙмәткә саҡырыла. Штаб-ротмистр И. Исхаҡов Зәки Вәлидиҙең шәхси адъютанты һәм һаҡсыһы булып хеҙмәт итә. 1918 йылдың көҙөндә Вәлиди уны Айырым Башҡорт корпусының 2-се Башҡорт уҡсы полкы командиры итеп тәғәйенләй. Декабрь айына тиклем Исхаҡов үҙенең полкы менән Аҡтүбә фронтында ҡыҙылдарға ҡаршы һуғыша.

1918 йылдың 14 декабрендә Вәлиди Ибраһим Исхаҡов менән Нуриәғзәм Таһировҡа (2-се полктың муллаһы) йәшерен хат ебәрә. Унда фронтҡа һибелгән башҡорт полктарын Башҡортостан территорияһында бер урынға туплауға тигән йәшерен фарман бирә. Исхаҡовҡа ошо фарманды башҡорт ғәскәрҙәренә таратырға ҡуша. Декабрҙең аҙағына башҡорт полктары бер урынға йыйыла башлай. Ибраһим Исхаҡов та үҙенең полкын Аҡтүбә фронтынан Башҡортостанға алып килә.

Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре 1919 йылдың февралендә Совет власы яғына сыға. Ә май аҙағында Саранскиҙа Башҡорт корпусы частарынан ике уҡсы һәм ике кавалерия полктарынан торған Айырым Башҡорт бригадаһы ойошторола башлай. Ибраһим Исхаҡов бригаданың 2-се Башҡорт уҡсы полкы командиры итеп ҡуйыла.

1919 йылдың июнь башында Реввоенсовет рәйесе Троцкий Саранскиҙағы Башҡорт бригадаһын Деникинға ҡаршы Көньяҡ фронтҡа (Украинаға) ебәрә. Бында башҡорт полктары Деникиндың армияһына ҡаршы ҡанлы һуғыштарҙа ҡатнаша. Харьков янында айырыуса ҡаты һуғыштар булып үтә. Ҡыҙылдарҙың 14-се армияның частары тулыһынса тарҡалып, тәртипһеҙ рәүештә фронттан сигенгән шарттарҙа, Башҡорт бригадаһына яу яланында бик ауырға тура килә. Күп осраҡта күрше ҡыҙыл частар менән бәйләнештең булмауы, уларҙың сигенеүе арҡаһында башҡорт полктарына аҡтарҙың ҡамауында ҡалырға тура килә. Ошондай ҡамауҙарҙа ҡалып, Ибраһим Исхаҡовтың 2-се полкы айырыуса ҙур юғалтыуҙар кисерә. Полктың яртыһы тиерлек яу яланында ятып ҡала.

1919 йылдың июль башында Башҡортостандан өҫтәмә ғәскәрҙәр килеү менән бригада Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһына үҙгәртелә. Зәки Вәлиди Көньяҡ фронтҡа килеп, башҡорт ғәскәрҙәренең хәле менән таныша. *«4 июля я смотрел в эшелонах уже 2-й стрелковый Башкирский полк, который, несмотря на то, что терпел на фронте больше всех, сохраняет все достоинства башкирского войска, в этом полку я не заметил ничего кроме хорошего, за что приношу благодарность всем красноармейцам полка, командиру полка Исхакову и политкому Юлдашеву»,* – ти хәрби комиссар. Әммә артабанғы ауыр һуғыштар барышында дивизия тағы байтаҡ юғалтыуҙар кисерә. Ошоноң һөҙөмтәһендә, 14-се армия командалығы дивизияның ғәскәрҙәрен ике йыйылма полкка, Йыйылма Башҡорт уҡсы һәм кавалерия полктарына туплай. Исхаҡов етәкселек иткән 2-се полктың иҫән ҡалған яугирҙарын батальонға туплап, йыйылма полкка ҡушалар, ә Исхаҡов батальон командиры итеп ҡалдырыла.

Артабан ул Зәки Вәлидиҙең адъютанты булып йөрөй. 1919 йылдың көҙөндә Ибраһим Исхаҡов Петроград ҡалаһындағы Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһының 2-се полкына командир итеп тәғәйенләнә. Юденич ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнаша. Яуҙа ҡаты яралана. Петроградты һаҡлауҙа күрһәткән батырлыҡтары өсөн ҡаһарман сардар РСФСР-ҙың юғары наградаһы — Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә.

Ибраһим Исхаҡов 1920 йылдың февралендә республикаға ҡайта. Март айында Үсәргән кантонындағы коммунистар Башревкомға ҡаршы фетнә ҡора. Съезд үткәреп, кантондағы власты үҙ ҡулына ала, Башҡортостан автономияһына ҡаршы сығыш яһай. Исхаҡов Башревком комиссияһы составында (Х. Әмиров, С. Ишмырҙиндар менән бергә) Үсәргән кантонындағы килеп сыҡҡан хәлде тикшереүҙә ҡатнаша. Комиссия ағзалары һалдаттар менән барып, тиҙ арала тәртип урынлаштыра. Ғәйеплеләрҙе ҡулға алып, кантонда Башҡортостан автономияһы властын тергеҙә. Фетнәнең башында торған кантондың коммунистар ойошмаһы ҡыуып таратыла. Март аҙағынан Исхаҡов Үсәргән кантонының хәрби комиссары булып хеҙмәт итә.

1920 йылдың майында ул Башҡортостандың Хәрби эштәр буйынса комиссары урынбаҫары Әүхәҙи Ишмырҙиндың ярҙамсыһы итеп тәғәйенләнә. Әммә оҙаҡламай, 1920 йылдың 19 майында, Үҙәк совет власы үҙенең декреты менән Башҡортостандың автономияһын сикләй. Зәки Вәлиди көрәште Төркостанда дауам итергә ҡарар итә. *«Мин Мәскәүҙән киткәс, ышаныслы офицерҙарымдың өсөһөнә Төркостан хәрәкәтенә ҡушылыу планымды астым. Шуларҙан адъютантым Ибраһим Исхаҡовҡа Масальскийҙың «Төркостан өлкәһе» исемле әҫәрен биреп, уны ентекле өйрәнергә ҡушҡас, ул: «Ниңә?» — тип һораны. «Бәлки, бер аҙҙан, шунда китербеҙ», — тигәс: «Өйрәнермен», — тип яуап бирҙе»*, — тип яҙа Вәлиди.

1920 йылдың июнендә Зәки Вәлидиҙең көрәштәштәре — Башревком ағзалары, офицерҙар уның планына ярашлы Төркостанға китә. *«Беҙҙең Башҡортостан ғәскәренән Әүхәҙи Ишмырҙин, ярҙамсым Ибраһим Исхаҡов, башҡа бер нисә офицерыбыҙ, полковник Һибәтулла Һөйөндөковтың яҡын офицерҙары менән бергә килеп, барыһы ла Бохараның хәрби ойошмаларында етәксе вазифалар алды»*, — тип яҙа Вәлиди. Артабан Ибраһим Исхаҡов Кермана ҡалаһында хәрби мәктәп ойоштороп, курсанттарҙы уҡытыу менән мәшғүл була. Баҫмасылар яғында ҡыҙылдарға ҡаршы алыштарҙа ҡатнаша. 1921 йылдың апрелендә Ибраһим Исхаҡов Бохара әмире яҡлы булған баҫмасылар тарафынан үлтерелә. *«Беҙҙең йәмғиәт (Төркостан милли берлеге. —* А. Я.*) исеменән бирелгән бойороҡто үтәп, Бохара хәрби мәктәбе уҡыусыларынан 40 офицерыбыҙ, Ибраһим Исхаҡ менән бергә баҫмасыларға ҡушылыу өсөн Нурата яғына китеп барышлай Ҡаһһар мулла етәкселегендәге әмир яҡлыларҙың һөжүменә дусар булды. Бер өлөшө, шул иҫәптән 3 башҡорт, үлтерелеп, икенсе өлөшө әсир ителде...»* — тип яҙа Вәлиди.

Ғәзиз халҡының бәхетле киләсәге өсөн күпме ауырлыҡтар кисергән, күпме утты-һыуҙы кискән ҡаһарман сардарҙың ярһыу йөрәге алыҫ Төркостан далаһында тибеүҙән туҡтай.

Сөләймән Ишмырҙин

Сөләймән Ғәләүетдин улы Ишмырҙин – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан башҡорт офицерҙарының береһе. 1893 йылдың 5 июнендә Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙе Аҙнай олоҫоноң Кинйәбулат ауылында тыуған. Зәки Вәлидиҙең яҡын көрәштәше, ярҙамсыһы. Әүхәҙи Ишмырҙиндың ҡустыһы.

1905 йылда Ергән ауылындағы ике синыфлы мәктәпте, 1913 йылда Ҡазан ҡалаһындағы Уҡытыусылар семинарияһын тамамлай. Ҡазандан ҡайтҡас, бер йыл мөғәллимлек итә. 1914 йылдың октябрендә Сөләймән Ишмырҙинды хәрби хеҙмәткә алалар. Һамар ҡалаһында торған 28-се сапер батальонына билдәләнә. 1915 йылдың 31 мартынан 1917 йылдың ғинуар башына тиклем Көньяҡ-Көнбайыш фронтта йөрөй. 1917 йылдың ғинуарында белемле егетте Житомир ҡалаһындағы Көньяҡ-Көнбайыш фронттың 1-се прапорщиктар әҙерләү мәктәбенә ебәрәләр. Ярты йыл уҡығандан һуң, 1917 йылдың 15 июнендә С. Ишмырҙин прапорщик чинында 283-сө запас пехота полкына тәғәйенләнә. Бында ул полктың 3-сө ротаһы командиры, полк суды рәйесе вазифаларын үтәй. Подпоручик дәрәжәһенә үҫә. 1918 йылдың апрелендә армиянан демобилизацияланғас, Стәрлетамаҡ өйәҙ ревтрибуналы ағзаһы булып тора.

1918 йылдың июнендә Башҡортостан территорияһы большевиктарға ҡаршы көстәр ҡулына күскәс, Стәрлетамаҡ өйәҙендәге бер төркөм фронтовик башҡорт офицерҙары Шаһибәк Үзбәков, Ибраһим Исхаҡов, Ғәбделбарый Ғәмбәровтар менән бергә подпоручик Сөләймән Ишмырҙин Өфөгә Халыҡ армияһына хеҙмәткә саҡырыла. Тиҙҙән, Башҡорт хәрби шураһының юллауы буйынса, башҡорт офицерҙары Башҡорт армияһы сафына күсә.

1918 йылдың сентябрендә Сөләймәнде Ырымбурға, Башҡорт хөкүмәте ҡарамағына күсерелгән Әүхәҙи Ишмырҙин урынына Юрматы кантоны рәйесе итеп тәғәйенләнә. Әммә бында уға оҙаҡ эшләргә тура килмәй. 1 октябрҙә Башҡорт хәрби шураһы үҙенең фарманы менән Сөләймән Ишмырҙинға 1-се Башҡорт уҡсы полкы менән командалыҡ итеү вазифаһын йөкмәтә. 1918 йылдың көҙөнән 1919 йылдың февраленә тиклем С. Ишмырҙин 1-се Башҡорт уҡсы полкы командиры сифатында ҡыҙылдарға ҡаршы һуғышып йөрөй. Уға штабс-капитан званиеһы бирелә. Әйткәндәй, 1926 йылда, Зәки Вәлидигә «буржуаз милләтсе» мөһөрө тағылып, элекке милли хәрәкәт эшмәкәрҙәре үҙҙәренең биографияһының аҡтарға бәйле өлөшөн күрһәтмәҫкә тырышҡан ваҡытта, Сөләймән Ишмырҙин үҙенең анкетаһында йәшермәйенсә: *«Состоял командиром полка в Национальной Башкирской армии, боровшейся в целях завоевания Автономии»*, – тип яҙып ҡуйған.

1919 йылдың 18 февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власына сыға. Әммә Ҡыҙыл Армия ғәскәрҙәре уларҙы ҡолас йәйеп ҡаршы алмай, ә, киреһенсә, Үҙәк совет власының бойороғона ҡарамайынса, башҡорттарҙан үс ала башлай. Башҡорт полктарын тылға күсереп, ҡоралһыҙландыралар. 1919 йылдың 3 мартында Ишмырҙин Темәс ауылындағы Башревкомға 1-се полктың хәле тураһында былай тип хәбәр итә: *«Сообщаю, что с полком прибыл в село Мелеуз, где жду распоряжения от начдива Первой Пензенской. Все имущество полка: обмундирование, обозы, мастерская и оркестр, – отобрал 1-й Смоленский полк. Мало того, дорогой у солдат и командного состава были отобраны собственные вещи. Приходилось терпеть оскорбления от красноармейцев и местных жителей. Считают нас все, и даже штаб Первой армии, пленными. Полное недоумение, разочарование. Как быть нам? От ревкома нашего никаких распоряжений не получаем. По приказу начдива Первой Пензенской, солдат мы должны распустить, оставив только добровольцев. Командный состав переходит в резерв чинов Первой армии. Солдаты требуют, чтобы полк 1-й существовал и их считали не добровольцами, а мобилизованными (ибо они мобилизованы), и сожалеют о том, зачем отступили с фронта в тыл, а не остались на фронте для активной борбы с казаками. Посылаю для выяснения настоящего нашего положения двух ротных делегатов. Жду распоряжений».* Әммә был мәлдә башҡорт ғәскәрҙәре менән Башревком түгел, ә 1-се армия идара итә. Ҡыҙылдар, Мәскәүҙән бойороҡ алыуға ҡарамаҫтан, Башҡорт корпусы ғәскәрҙәрен тулыһынса ҡоралһыҙландырып, таратырға тигән маҡсатта эш итә. Ике ай эсендә 6 полктан торған тулайым бер корпустың ҡалдыҡтары ғына тороп ҡала. Ҡыҙылдарҙың башбаштаҡлығына түҙә алмай, Сөләймән Ишмырҙин командалыҡ иткән 1-се полктың 2-се батальоны, 2-се Башҡорт кавалерия полкының 3-сө эскадроны, һуңыраҡ 1-се Башҡорт кавалерия полкы киренән аҡтар яғына сыға.

1919 йылдың май аҙағында Саранск ҡалаһында Башҡорт корпусынан ҡалған ғәскәрҙәрҙән 1-се, 2-се уҡсы һәм 1-се, 2-се кавалерия полктары ойошторола башлай. Улар Айырым Башҡорт бригадаһын тәшкил итергә тейеш була. 1-се Башҡорт уҡсы полкының командиры итеп Сөләймән Ишмырҙин тәғәйенләнә. Июнь башында әле ойошторолоп та бөтмәгән башҡорт полктарын Көньяҡ фронтҡа (Украинаға) ебәрергә, тигән Троцкийҙың фарманы килә. Башҡорттар Харьков ҡалаһында гарнизон хеҙмәтен үтәйәсәк һәм шунда ойошторолоп бөтөрҙәр, ти Реввоенсовет. 1919 йылдың 13 июнендә Харьковҡа килеп етеүгә, башҡорт ғәскәрҙәренә әҙерлекһеҙ, ҡоралһыҙ рәүештә Деникин армияһы менән ҡанлы һуғышҡа инергә тура килә. Полктарҙың дөйөм командалығы ла булмай, сөнки штаб ойоштороло кимәлендә була һәм ул Саранскиҙа тороп ҡала. Һуғыш шарттарында башҡорт полктарына тиҙ арала берҙәм идара органы – бригада штабын булдырырға тура килә. Сөләймән Ишмырҙинды бригада командиры итеп һайлайҙар. Харьков янында ике аҙна буйы барған ҡанлы яуҙарҙа Башҡорт бригадаһы ҙур батырлыҡтар күр-

һәтә. Деникинсылар башҡорттарҙың ныҡлы ғәскәр икәнен күреп, уларҙы флангынан урап үтеп, ҡамауға алырға тырыша. Бригада күрше ҡыҙыл частарҙың сигенеүе арҡаһында күп тапҡырҙар дошман ҡулсаһында тороп ҡала. Харьков ҡалаһының Оборона Советының аҡтарға һатылыуы арҡаһында (башҡорт полктары уның идараһында була), Башҡорт бригадаһы байтаҡ юғалтыуҙар кисерә.

Ҡыҙыл Армия частары, Деникин ғәскәре ҡыҫымына сыҙай алмай, паникаға бирелеп сигенә. Тиҙҙән Харьков ҡалаһын ҡалдырып китә. Харьковтан иң аҙаҡ Башҡорт бригадаһы полктары сыға. Тәүге эшелонда сығып, юлда ҡыҙылдар ташлап ҡасҡан, ҡорал һәм башҡа кәрәк-яраҡтарҙы алып, Сумы ҡалаһына килгән бригада штабын ҡыҙылдар ҡорал менән ҡаршылай. Сумы ЧК-һы бөтөн Башҡорт бригадаһы штабын, шул иҫәптән бригада командиры Сөләймән Ишмырҙинды ҡулға алып, бикләп ҡуя. Ҡыҙылдарҙың бындай оятһыҙ ҡыланышы арттағы эшелондар менән килеп еткән башҡорт яугирҙарын һуңғы сиккә еткерә. Эштең нимә менән бөтөрөн аңлаған ҡыҙылдар бригада штабын иреккә сығарырға мәжбүр була.

Июнь аҙағында Башҡорт бригадаһы Бахмач станцияһына ялға сығарыла. Бында Башҡортостандың хәрби комиссары Зәки Вәлиди килә. Ул башҡорт яугирҙарына рәхмәт белдерә һәм бригада командиры Сөләймән Ишмырҙиндың хеҙмәтен билдәләп үтә: *«Прибыв на Южный фронт, ознакомился с боевыми действиями 1-го и 2-го Стрелковых и 1-го и 2-го Кавалерийских Башкирских полков и их героическими подвигами при обороне Харькова. От имени Революционного Комитета Башкирской Советской Республики приношу благодарность всем красноармейцам-башкирам, принимавшим участие в этих тяжелых боях, вынесенных при крайне неблагоприятных условиях, которыми была обставлена оборона Харькова вообще. Особенно благодарю Командира 1-го Стрелкового Башкирского полка Ишмурзина II, временно исполнявшего обязанности командира Бригады, за умелое ведение операции с малым для войска ущербом».*

Бригада яңы килгән яугирҙар менән тулыландырыла һәм Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы тип үҙгәртелә. Дивизияның командиры итеп Ахлау Ахлов тәғәйенләнә, комиссары – Нуриәғзәм Таһиров. Зәки Вәлидиҙең бойороғо буйынса, Сөләймән Ишмырҙин Көньяҡ фронттан Хәрби комиссариат ҡарамағына күсерелә. Башҡортостанға ҡайтҡас, ойошторолоп ятҡан 3-сө Башҡорт кавалерия полкына командир итеп тәғәйенләнә.

1919 йылдың сентябрендә башҡорт ғәскәрҙәре, шул иҫәптән 3-сө Башҡорт кавалерия полкы, Петроградҡа ебәрелә. Ә Ишмырҙинға ғәскәрҙәрҙе аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеү бурысы йөкмәтелеп, Башсовнархозға күсерәләр. Бында ул хәрби әҙерләүҙәр бүлеген етәкләй. Сөләймән Ишмырҙин Көньяҡ фронттағы башҡорт һалдаттары араһында ҙур ихтирамға, хөрмәткә лайыҡ була. Улар Ишмырҙинды армияға ҡайтарыуҙы һорап, Башревкомға мөрәжәғәт итә. 1919 йылдың 16 сентябрендә Башревком: *«Довести до сведения военкомата о желании красно-*

армейцев видеть Ишмурзина II, в своих рядах», — тип ҡарар ҡабул итә. Әммә Сөләймән Ишмырҙинға ғәскәр сафтарында башҡа хеҙмәт итергә тура килмәй. Күптән түгел генә эвакуациянан ҡайтҡан Башҡортостан хөкүмәте (Башревком) автономияны ғәмәлгә ашырыу өсөн тәжрибәле башҡорт хеҙмәткәрҙәрен кантондарға ебәрә. Башҡортостан автономияһының урындағы власть органдары кантон революцион комитеттарын ойоштороу көнүҙәк мәсьәләгә әүерелә. 1919 йылдың көҙөндә С. Ишмырҙин Көҙәй кантревкомына эшкә ебәрелә.

1920 йылдың мартында Үҫәргән кантонында урыҫ коммунистары, законһыҙ рәүештә съезд үткәреп, яңы кантревком һайлай, республикаға ҡаршы агитация башлай. Башревком Хәлим Әмиров, Ибраһим Исхаҡов һәм Сөләймән Ишмырҙин составында комиссия төҙөп, Үҫәргән кантонына ебәрә. Вәлиди Ишмырҙинды Үҫәргән кантонының рәйесе итеп тәғәйенләй. Комиссия килеү менән фетнәселәрҙе ҡулға алып, урындағы комячейкаларҙы тарата. Кантонда Башҡортостан автономияһы власын тергеҙә. Тиҙҙән Ишмырҙин Табын кантоны рәйесе итеп тәғәйенләнә.

1920 йылдың көҙөнән ул Башҡортостандың аҙыҡ-түлек эштәре буйынса халыҡ комиссары вазифаһын үтәй, БашЦИК ағзаһы итеп һайлана. Әммә 1921 йылда Ишмырҙиндың баш осонда ҡара болоттар ҡуйыра башлай. Обком уның аҡтар яғында йөрөгәне өсөн партиянан сығара. Киләһе йылына, вазифауи енәйәттә ғәйепләп, республика ревтрибуналы уны 15 йылға иркенән мәхрүм итергә тигән хөкөм ҡарары сығара. Башҡорт эшмәкәрҙәре Мәскәүгә, Үҙәк власҡа мөрәжәғәт итеп, Сөләймән Ишмырҙинды оло бәләнән ҡотҡарып алып ҡала.

Артабан ул юғары вазифалар биләмәй, дәүләт эшенән ситләтелә. 1926 йылға тиклем Ишмырҙин Ленин исемендәге Өлкә тәжрибә мәктәбендә завхоз булып эшләй. Риф Мифтахов яҙыуынса, һуңынан ул Башглавполитпросвет бүлегендә эшләй. 1932 йылда Мәскәүгә «Союззолото» берекмәһенә эшкә күсерелә. 1937 йылда ҡулға алынып, һөргөндә үлеп ҡала.

Мөхтәр Ҡарамышев

Мөхтәр Батыргәрәй улы Ҡарамышев — Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан башҡорт офицерҙарының береһе, сардар. 1895 йылда Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙенең (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Ишембай районы) Маҡар ауылында тыуған. Милли хәрәкәт эшмәкәрҙәре Гәрәй һәм Әмир Ҡарамышевтарҙың ҡустыһы.

Тәүге белемде Маҡар ауылы мәктәбендә ала. 1906 йылда мөғәллим атаһы Орск ҡалаһына эшкә күсерелә, Мөхтәр бында училище тамамлай. Артабан педагогия курстарында белем ала. 1915 йылда хәрби хеҙмәткә алынып, фронтҡа эләгә. 1917 йылдың сентябренә тиклем 14-се драгун полкы составында һуғышта ҡатнаша. Яраланғас, уны бер айға ялға ҡайтарып ебәрәләр. Тиҙҙән инде илдә сәйәси хәлдәр ҡырҡа үҙгәреп китә. Октябрь аҙағында большевиктар власты үҙ ҡулына ала. Мөхтәр,

тыуған яғына ҡайтҡас, Иҫке Сәйет ауылы мәктәбе мөдире булып эшкә төшә. Был осорҙа Башҡортостан автономияһы өсөн милли хәрәкәт киң ҡолас ала. 1918 йылдың ғинуарында Юрматы кантонының беренсе ҡоролтайында М. Ҡарамышевты кантон башҡармаһына һайлайҙар. Әммә Ырымбурҙа Башҡорт хөкүмәте ҡулға алыныу менән, Башҡортостан автономияһының урындағы власть органдарының эше лә юҡҡа сыға.

1918 йылдың йәйендә прапорщик Ҡарамышев Башҡорт армияһы сафтарына хеҙмәткә алына. Июль айынан башҡорт ғәскәрҙәренең инспекторы булып хеҙмәт итә һәм шул уҡ ваҡытта ҡорал-боеприпас складыы етәксеһе вазифаһын башҡара. Йәғни ғәскәрҙәрҙе ҡорал менән тәьмин итеү менән шөғөлләнә. 1918 йылдың 27 авгусында Мөхтәр Ҡарамышевҡа Башҡорт Хәрби Шураһының артиллерия бүлеге мөдире бурысы йөкмәтелә. Хәрби шураның 28-се (§ 4) фарманында: *«Прапорщика Карамышева, назначенного приказом № 7, § 4 инспектором Башкирских войск и заведующим оружием, считать с того же числа на должности заведующего артиллерийским отделом ввиду неимения штатных должностей инспектора Башкирских войск и заведующего оружием и фактически ведением складом боевых припасов и оружием Башкирского военного совета»*, – тиелә.

1918 йылдың көҙөндә прапорщик Ҡарамышев мәрхүм ағаһы Әмир Ҡарамышев етәкселек иткән 1-се Башҡорт кавалерия полкына командир итеп тәғәйенләнә. Подпоручик званиеһы бирелә. 1-се полк менән ул 1919 йылдың ғинуарына тиклем командалыҡ итә. Ошо осор эсендә Ҡыҙыл Армия ғәскәрҙәренә ҡаршы ҡанлы яуҙарҙа ҡатнаша. Күрһәткән батырлыҡтары өсөн ротмистр итеп үрләтелә.

1918 йылдың декабрь аҙағында Мөхтәр Ҡарамышев Стәрлетамаҡ ҡалаһы янында Ҡыҙыл Армия частарына ҡаршы фронт тота. Ошо районда һуғышҡан бөтә ирекле башҡорт отрядтары М. Ҡарамышевтың ҡулы аҫтында туплана. Ул Стәрлетамаҡ фронты командующийы итеп тәғәйенләнә. Бында башҡорт ғәскәрҙәренә бик ауыр шарттарҙа һуғышырға тура килә. З. Вәлидиҙең 30 декабрҙә ғәскәри старшина Богдановҡа яҙған хатында асыҡ сағыла: *«На Стерлитамакском фронте действует 1-й кавалерийский имени Карамышева полк – 400 человек при 152 винтовках и 400 конях. Юрматынский отряд – 150 человек, Табынский отряд – 200 человек. Туда же двигается Кипчакский отряд – 160 человек, Джетировский отряд – 120 человек, Тамьян-Катаевский – 400 человек, Усерганский отряд – 180 человек. Бурзянский отряд – 300 человек остается на охране Правительственных учреждений в Баймакском районе.*

Руководство башкирским конным полком и отрядами в Стерлитамакском районе объединяется в руках командующего Башкирскими силами Стерлитамакского района, которым назначаю ротмистра Карамышева. Только эти части полуголодные, также не имеют денег и без патронов, пулеметов и недокомплект оружия», – тип хәбәр итә Зәки Вәлиди һәм ҡорал менән ярҙам итеүҙе һорай.

Аҡтарҙан ярҙам ала алмағас, Мөхтәр Ҡарамышев етәкселегендәге ғәскәрҙәр Стәрлетамаҡтан сигенергә мәжбүр була. 1919 йылдың ғинуар башында 1-се Башҡорт кавалерия полкы Башҡорт корпусына барып ҡушыла. 10 ғинуарҙа Зәки Вәлиди М. Ҡарамышевты башҡорт ғәскәрҙәренең баш интенданты итеп тәғәйенләй, ә 1-се Башҡорт кавалерия полкын Муса Мортазин етәкләй.

Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, 1919 йылдың мартында, Мөхтәр Ҡарамышев Башревкомдың аҙыҡ-түлек бүлеге мөдире, артабан Мораҡ ауылы һәм районы гарнизоны начальнигы булып хеҙмәт итә. Апрель айынан Хәрби эштәр буйынса халыҡ комиссариатында дөйөм эштәр бүлеге (общие части) начальнигы вазифаһында була.

1919 йылдың августында Башҡортостан автономияһы хөкүмәте (Башревком) Саранскиҙан ҡайтҡас, Мөхтәр Ҡарамышев Табын кантоны ревкомы рәйесе итеп тәғәйенләнә. 1919 йылдың декабрендә Тамъян-Ҡатай кантонына хәрби комиссар итеп күсерелә. Һаулығы ҡаҡшау сәбәпле 1920 йылдың ноябрендә Мөхтәр Ҡарамышев тыуған яғына ҡайта һәм уҡытыусы булып эшләй. Әммә тиҙҙән Юрматы кантонының ер эштәре бүлеге мөдире итеп эшкә алына. Унан инде Дыуан-Ҡошсо кантонының Совнархоз рәйесе итеп күсерелә. 1921 йылдың февралендә «Белрайлесконтора»ға комиссар итеп тәғәйенләнә. Октябрь айында Мөхтәр Ҡарамышевты Стәрлетамаҡҡа Башҡортостандың социаль тәьминәт халыҡ комиссариаты коллегияһына эшкә алалар.

Тап ошо осорҙа партия сафтарын таҙартыу эше киң ҡолас ала. 1921 йылдың 15 ноябрендә комиссия Мөхтәр Ҡарамышевтың элекке эшмәкәрлеген тикшереп, Башҡорт армияһында ҡыҙылдарға ҡаршы һуғышҡанын иҫкә төшөрөп: *«...исключить из партии как активного участника в борьбе против Советской власти и участника арестов коммунистов при Советской власти, как националиста, без права вступления...»* – тигән хөкөм сығара.

Мөхтәр Ҡарамышевтың артабанғы яҙмышы билдәһеҙ. Күп кенә Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте эшмәкәрҙәрен һәләк иткән 30-сы йылдар репрессияһы уны урап үтмәгәндер, күрәһең.

Ғариф Мөхәмәтйәров

Мөхәмәтғариф Закир улы Мөхәмәтйәров – Башҡорт армияһын ойоштороуҙа әүҙем ҡатнашҡан башҡорт офицерҙарының береһе, Зәки Вәлидиҙең көрәштәше, адъютанты. Тыумышы менән Ырымбур губернаһы Силәбе өйәҙенән (хәҙерге Силәбе өлкәһе). Күренекле башҡорт яҙыусыһы Хәй Мөхәмәтйәровтың (1911–1941) әҡрәбәһе. Әйткәндәй, уның атаһы Ғабдрафиҡ Мөхәмәтйәров та Силәбе башҡорттары араһында танылған милли эшмәкәр була. 1919–1920 йылдарҙа Арғаяш кантоны ревкомитеты рәйесе булып эшләй.

Ғариф Мөхәмәтйәров Силәбе ҡалаһында дүрт класлы училище тамамлай. Беренсе донъя һуғышы башланғас, хәрби хеҙмәткә алынып, унда хәрби мәктәптә уҡый. Прапорщик званиеһында тыуған яғына ҡайта.

1917 йылда Ғ. Мөхәмәтйәров Нуриәғзәм Таһиров менән бергә Силәбе өйәҙендә Башҡортостан автономияһы ҡарарҙарын тормошҡа ашырыу менән шөғөлләнә. Әммә бында большевиктарҙың тәьҫире лә ҙур була. 1918 йылдың ғинуарында большевиктар пропагандаһын тыңлап ҡайтҡан башҡорт фронтовиктары, Ҡорбанғәлиевтәр тәьҫирендә булған Арғаяш кантоны башҡармаһын таратып, башҡорт ҡоролтайҙарының ҡарарҙарын танымау тураһында ҡарар ҡабул итә. Арғаяшта Совет властын урынлаштыра.

Шуға ҡарамаҫтан, 27–30 ғинуарҙа үткән Арғаяш кантоны съезында кантон башҡарма комитетына Башҡортостан автономияһы яҡлылар: Нуриәғзәм Таһиров, Ғариф Мөхәмәтйәров, Ғәбделхәй Иркәбаевтар һайлана. 25 апрелдә үткән II Кантон съезында большевиктар менән милли хәрәкәт эшмәкәрҙәре араһында ер мәсьәләһе буйынса ҡыҙыу бәхәс тыуа. Н. Таһиров, Ғ. Мөхәмәтйәровтар Силәбе һәм Ҡыштым күскенселәренә башҡорт ерҙәрен бүлеп биреүгә ҡырҡа ҡаршы сыға. Силәбе ЧК-һы уларҙы, контрреволюцияла ғәйепләп, төрмәгә ябып ҡуя. Ләкин оҙаҡламай Силәбе ҡалаһы большевиктарға ҡаршы баш күтәргән Чехословак корпусы ҡулына күсә.

1918 йылдың 7 июнендә Силәбе ҡалаһында Зәки Вәлиди етәкселегендә Башҡорт хөкүмәте яңынан үҙенең эшмәкәрлеген йәйелдереп ебәрә. Башҡорт хөкүмәте, тәү сиратта, үҙенең хәрби көстәрен – Башҡорт милли армияһын ойоштороу эшенә тотона. Хәрби эштәр менән идара итеү өсөн 12 июндә Башҡорт хәрби шураһы ойошторола. Хәрби шураның ағзалары итеп Ғ. Таған, Т. Ғисмәтуллин, Ғ. Иркәбаевтар менән бергә прапорщик Ғариф Мөхәмәтйәров та һайлана.

1918 йылдың июнь – июль айҙарында Мөхәмәтйәров Башҡорт хөкүмәтенең хәрби бүлеге мөдире Зәки Вәлидиҙең сәркәтибе, артабан өлкән адъютанты булып хеҙмәт итә. Мобилизация эше менән шөғөлләнә. Ошо осорға ҡараған мөһим генә документтарҙа З. Вәлиди менән бергә уның ҡултамғаһы тора.

1918 йылдың авгусында аҡтар Арғаяш кантонынан сыҡҡан Башҡорт хәрби шураһы ағзалары менән ҡыҙыҡһына башлай. Силәбеләге Урал корпусы штабы 11 августа Ырымбурға, Башҡорт хәрби шураһына ебәргән телеграммаһында: «...состоят ли в Военном совете Тагиров, Мухамедьяров, Магасумов, Хакимов и были они в большевистском совете?» – тип төпсөнә. Ә инде прапорщик Мөхәмәтйәров Арғаяш кантонында күренеү менән, уны ҡулға алалар. *«Башкирский военный совет распорядился послать в Аргаяшский кантон, находящийся в его распоряжении, временно зачисленный ко 2-му Башкирскому полку конный отряд под начальством подпоручика Добринского и члена Военного совета прапорщика Мухамедьярова. Последнему были даны определенные секретные директивы о розыске дезертирующих солдат. Командир Уральского отдельного корпуса почему-то счел*

нужным вмешаться в это дело и послал казачий отряд для разоружения нашего.

Казачий отряд 19 августа исполнил поручение комкора и арестовал члена нашего Совета Мухамедьярова и подпоручика Добринского», — тип яҙа Зәки Вәлиди Себер хөкүмәтенең хәрби министрына һәм башҡорт вәкилдәрен ирекҡә сығарыуҙы һорай. Мөхәмәтйәровты оҙаҡламай сығарғандарҙыр, күрәһең, сөнки 1918 йылдың сентябрендә ул Башҡорт хәрби шураһы фарманы менән Арғаяш кантонының ирекле отряды начальнигы итеп тәғәйенләнә. Бында Башҡортостан автономияһы власына ҡаршылыҡ ҙур була. Бер яҡтан, Ҡорбанғәлиевтәр халыҡты Башҡорт хөкүмәтенә ҡаршы ҡотортһа, икенсе яҡтан, Арғаяш башҡорттары араһында большевиктарҙың тәьҫире көслө була. Октябрь айында Башҡорт хәрби шураһының Хәрби-тәфтиш комиссияһы, Арғаяштағы хәлдәрҙе тикшереп, Башҡортостан автономияһына ҡаршы эшләгәндәрҙе, 1918 йылдың башында Арғаяш кантон башҡармаһы рәйесен үлтереүҙә ҡатнашҡан кешеләрҙе ҡулға алырға, ҡайһыларын атырға тигән ҡәтғи бойороҡ бирә Ғариф Мөхәмәтйәровҡа.

1918 йылдың ноябренән прапорщик Мөхәмәтйәров 2-се Башҡорт уҡсы полкының ылау начальнигы булып хеҙмәт итә. Подпоручик званиеһын ала. 1919 йылдың ғинуарынан 2-се Башҡорт кавалерия полкында эскадрон менән етәкселек итә. 18 ғинуарҙа Нуҡай ауылында ҡыҙылдарға ҡаршы алышта күрһәткән батырлығы өсөн поручик дәрәжәһенә күтәрелә. Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, Башҡортостандың хәрби революцион хөкүмәте Башревкомға ағзалыҡҡа кандидат итеп һайлана. 1919 йылдың мартынан Башҡорт Совет Республикаһының хәрби эштәр буйынса комиссары Зәки Вәлидиҙең сәркәтибе вазифаһын үтәй. 1920 йылдың мартынан Арғаяш кантоны хәрби комиссары ярҙамсыһы, артабан кантондың аҙыҡ-түлек буйынса комиссары булып эшләй.

1920 йылдың июнендә үҙенең көрәштәштәре — Башревком ағзалары менән ҡуша Үҙәк властың май декретына ҡаршы ризаһыҙлыҡ белдереп, эшен ҡалдырып китә. Зәки Вәлиди большевиктарға ҡаршы көрәште дауам итеү өсөн Төркостанға юлланған мәлдә, Ҡаҙағстанда Ғ. Мөхәмәтйәров уның янында була. Вәлиди уны кире Башҡортостанға ҡайтарып ебәрә: *«Үҙем менән бергә бер һалдат бар. Янымдағы бәғзе әҫәрҙәремде, мылтыҡтарҙы атҡа артмаҡланыҡ. Ҡалған әйберҙәрҙе, илдең архивын Стәрлетамаҡтағы хөкүмәткә, төҙөлә башлаған Үҙәк музейға һәм китапханаға тапшырыу өсөн, адъютантым Ғариф Мөхәмәтйәровҡа бирҙем. Ул хәлде яҡшы белә ине...»* — тип яҙа Вәлиди.

Ғариф Мөхәмәтйәров тыуған яғына ҡайтып, артабан Арғаяш кантонында эшләй. 1927—1928 йылдарҙа ул Арғаяш кантон башҡарма комитеты рәйесе вазифаһында була. Уны, 1918 йылда Арғаяш кантонында большевиктарҙы эҙәрлекләүҙә ғәйепләп, 1929 йылда партия сафынан сығаралар. Ғариф Закир улы Мөхәмәтйәровтың артабанғы яҙмышы билдәһеҙ. Ләкин 30-сы йылдарҙың репрессия елдәре уға ҡағылмай үтмәгәндер.

Әбдрәшит Бикбауов

Әбдрәшит Ильяс улы Бикбауов — Башҡорт ғәскәрҙәре командующийы Зәки Вәлидиҙең адъютанты, көрәштәше. 1896 йылда Сембер губернаһының (хәҙерге Ульяновск өлкәһенең Иҫке Кулаткин районы) Зеленовка станцияһында тыуған.

Әбдрәшит Бикбауов 1918 йылда Башҡорт армияһы сафтарына алына. Каруанһарайҙың комендант командаһы начальнигы булып хеҙмәт итә. 1919 йылдың ғинуарында Зәки Вәлиди уны үҙенең адъютанты итеп тәғәйенләй. Ул 1919 йылдың февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәренең Совет власы яғына сығыуы менән бәйле ваҡиғаларҙа әүҙем ҡатнаша.

1919 йылдың 30 ғинуарында Муллаян Халиҡов Өфө большевиктары менән һөйләшеп ҡайта. Уның һөҙөмтәһе буйынса, Башҡорт хөкүмәте Советтар менән һөйләшеү өсөн Мөхәмәтхан Ҡулаев (хөкүмәт рәйесе), Муллаян Халиҡов һәм Әбдрәшит Бикбауовтарҙы ебәрергә ҡарар итә. Зәки Вәлиди үҙенең адъютанты Бикбауовҡа башҡорт ғәскәрҙәренең мәсьәләһе буйынса һөйләшеүҙәр алып барыу бурысын йөкмәтә.

1919 йылдың 18 февралендә, йәғни Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡан көндө, башҡорт делегацияһы Өфө ҡалаһында губревком, РКП(б)-ның Өфө обкомы, 5-се Ҡыҙыл Армияның реввоенсоветы һәм республиканың Реввоенсоветы, Милләттәр эштәре буйынса комиссариат вәкилдәре ҡатнашлығында кәңәшмә булып үтә. Һөйләшеүҙәр барышында Бикбауов: «Башҡортостандағы фронтты башҡорт ғәскәрҙәре үҙҙәре тоторға тейеш. Әгәр Совет власы ярҙам итһә, беҙ ғәскәрҙәребеҙҙе корпус кимәленә тиклем үҫтерәсәкбеҙ», — ти Ҡыҙыл Армия вәкилдәренә.

Артабан һөйләшеүҙәр Көнсығыш фронттың штабында, Сембер ҡалаһында дауам итә. 27 февралдә башҡорт делегацияһы Көнсығыш фронттың Реввоенсовет вәкилдәре менән Тәү килешеү (Предварительный договор) төҙөй. Уға Ҡулаев, Халиҡов һәм Бикбауовтар ҡул ҡуя. 1919 йылдың 7 мартында башҡорт делегацияһы Мәскәүгә килә. Тиҙҙән Мәскәүгә Зәки Вәлиди ҙә килеп етә. Башҡорт вәкилдәре менән Совет хөкүмәте етәкселәре араһында ун көн тирәһе һөйләшеүҙәр бара. Ошоноң һөҙөмтәһендә, 1919 йылдың 20 мартында тарихи актҡа — «Үҙәк совет власының Башҡорт хөкүмәте менән Башҡортостан Совет автономияһы тураһындағы Килешеү»гә ҡул ҡуйыла. Бер яҡтан, РСФСР хөкүмәте (СНК) рәйесе Ленин, ВЦИК рәйесе вазифаһын башҡарыусы Владимирский, Наркомнац Сталин һәм ВЦИК сәркәтибе Енукидзе ҡул ҡуйһа, икенсе яҡтан, килешеү процесын Өфөнән алып Мәскәүгә тиклем алып килеп еткергән башҡорт вәкилдәре — Ҡулаев, Халиҡов һәм Бикбауовтар имза һала.

Килешеүҙән һуң Әбдрәшит Бикбауов ВЦИК Президиумы янындағы Башҡортостан вәкиле Абдулла Әҙеһәмовтың хәрби эштәр буйынса урынбаҫары (Башҡорт армияһы буйынса вәкиле тип тә йөрөтөлә) итеп тәғәйенләнә. 1919—1920 йылдарҙа башҡорт ғәскәрҙәрен ҡорал һәм башҡа кәрәк-яраҡтар менән тәьмин итеү буйынса ҙур эш башҡара.

1921 йылда Башҡортостанға ҡайта, Башсовнархоз рәйесе Гәрәй Ҡарамышевтың урынбаҫары булып эшләй. 1923 йылда «Башторг» предприятиеһы идараһы рәйесе вазифаһын башҡара. 1924–1926 йылдарҙа Мәскәүҙә Башҡортостандың сауҙа вәкиллегендә экономист-консультант, Дәүләт сауҙаһы һәм БАССР-ҙы текстиль изделиелар менән тәьмин итеү бүлеге мөдире ярҙамсыһы булып эшләй, бер үк ваҡытта Плеханов исемендәге Халыҡ хужалығы институтында белем ала. 1930 йылдың ғинуарында «Солтанғәлиевщина»ла ғәйепләнеп, ҡулға алына һәм өс йылға иркенән мәхрүм ителеп, Карелияға лагерға оҙатыла. Артабан Алыҫ Көнсығышҡа күсерелә. Әбдрәшит Ильяс улы Бикбауов 1938 йылдың 12 сентябрендә вафат була.

Шаһибәк Үзбәков

Шаһибәк Үзбәков – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан башҡорт офицерҙарының береһе, Әхмәтзәки Вәлидиҙең яҡташы, остазы һәм дуҫы. Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙенең (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Ишембай районы) Әхмәр ауылында тыуған.

Стәрлетамаҡ ҡалаһында рус мәктәбен тамамлай, артабан Көҙән ауылында Зәки Вәлидиҙең атаһы Әхмәтшаһ мулланың мәҙрәсәһендә уҡыта. Ошо осорҙа (1901 йылдар тирәһендә) Шаһибәк Үзбәков З. Вәлидигә рус теленән һабаҡтар бирә. Артабан Үтәк мәҙрәсәһендә лә Зәки Вәлиди Ш. Үзбәков ҡулы аҫтында уҡый. *«Атайымдың мәҙрәсәһендә уҡытҡан Шаһибәк Үзбәков тә олатайымдың мәҙрәсәһенә күсте. Мин унан русса өйрәнеүемде дауам иттем...»* – тип яҙа Зәки Вәлиди үҙенең хәтирәләрендә.

Беренсе донъя һуғышы башланғас, Ш. Үзбәков хәрби хеҙмәткә алына. Бында ул хәрби мәктәп тамамлап, офицер званиеһын алып ҡайта.

1918 йылдың июнендә Шаһибәк Үзбәков яҡташтары, офицерҙар Ғәбделбарый Ғәмбәров һәм Сөләймән Ишмырҙин менән бергә Өфөгә Һамар хөкүмәтенең Халыҡ армияһына мобилизациялана. Артабан Башҡорт Хәрби Шураһының юллауы менән улар Башҡорт армияһы сафына күсерелә.

1918 йылдың 14 сентябрендә поручик Үзбәков Табын кантонының ирекле отряды начальнигы итеп тәғәйенләнә. Артабан ул Башҡорт ғәскәри идаралығында Зәки Вәлидиҙең өлкән адъютанты вазифаһын башҡара.

1918 йылдың ноябрендә хәлдәр ҡатмарлашып китә, Колчак үҙенең фарманы менән Башҡорт корпусын дивизия кимәленә ҡалдыра. Дивизияға командир итеп рус офицерын ҡуйҙырта. Зәки Вәлиди 14 декабрҙә фронттағы башҡорт офицерҙары һәм полк муллаларына яҙған йәшерен хатында башҡорт полктарын бер урында тупларға тигән бурыс ҡуя һәм дивизия менән етәкселекте Шаһибәк Үзбәковҡа тапшырырға ниәтләй. Хатта былай тиелә: *«...Не надо идти дальше, мотивируя это тем,*

что вы ждете 4-й и 5-й полки; когда они прибудут, опять не двигайтесь с места. Когда закончится сбор всех войск, я дам специальное распоряжение отступить... Однако если до моего распоряжения большевики начнут наступление, не оказывая больше сопротивления, необходимо отступать. Если начальник дивизии генерал Савич-Заболоцкий выйдет в отставку в Уфу, буду поручать Шайбеку Узбекову отступить с соответствующей дивизией».

Бер йоҙрокҡа тупланған башҡорт полктары 1919 йылдың ғинуарында Зәки Вәлидиҙең фарманы менән яңынан Башҡорт корпусына берләштерелә. Ғинуар аҙағында Башҡорт хөкүмәте большевиктар менән һөйләшеүҙәр башлай. Февраль башында Советтар яғына сығырға тигән ҡәтғи ҡарарға килә. Зәки Вәлиди был ҡарарҙы командирҙарға иғлан итә: *«Офицерҙарҙы йыйҙым. Күсергә теләмәүселәр булһа, мәжбүр итмәйем, ундайҙарҙы бер айлыҡ жалованиеларын, ат һәм ҡоралдарын биреп, үҙҙәре теләгән аҡ генералдарға ебәрәм, тинем,* — тип яҙа Вәлиди. — *Ныҡ яҡын күргән арҡадаштарымдан Шаһибәк Үзбәков, Гәни Ҡарамышев, Исмәғил Шәрипов һәм башҡа ҡайһы берәүҙәр рөхсәт алып китте... Шаһибәк менән йәш саҡтан дуҫ инек. Бик яҡшы, аҡыллы һәм ҡыйыу кеше булыу менән бергә үтә үҙ һүҙле ине. Яҡшы белемле офицер булғас, хәрби эштәр теорияһы менән шөғөлләнерме тип өмөт иткәйнем. Тиҫкәреләнде, унан да баш тартты...»*

Шаһибәк Үзбәков Колчак армияһында үҙенең полкы менән кире аҡтарға сыҡҡан Муса Мортазин менән бергә ҡыҙылдарға ҡаршы һуғыша. 1919 йылдың июнендә М. Халиҡов: *«По сведениям помполитпреда Фахретдинова, двумя башкирскими отрядами Узбеков и Муртазин действуют против 20-й дивизии, всего тысяча штыков...»* — тип Вәлидигә хәбәр итә. Август айында Колчак армияһы Башҡортостандан сигенә башлай. Мортазин үҙ бригадаһы менән ҡабат ҡыҙылдар яғына сыға. Зәки Вәлиди яҙыуынса, Шаһибәк Үзбәков, Урал казактары менән Украинаға китеп, генерал Врангель ғәскәрендә хеҙмәт итә. *«Аҙаҡ Ҡырымда яраланып, Истанбулға килеүе һәм шунда вафат булыуы хаҡында ишеттем»,* — ти Вәлиди.

Хәсән Әхмәров

Хәсән Нурый улы Әхмәров — Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан, революцияға тиклем батша армияһында полковник дәрәжәһенә күтәрелгән башҡорт офицеры. Ул 1866 йылда Ырымбур ҡалаһында тыуған.

Ҡалалағы Неплюев кадет корпусын (әйткәндәй, бында башҡорттоң күп кенә данлы улдары белем алып сыҡҡан) һәм хәрби училище тамамлай. Революцияға тиклем 49-сы Себер уҡсы бригадаһында полк

командиры булып хеҙмәт итә. Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә 1918 йылдың йәйендә ҡушыла.

Башҡорт хөкүмәте уны үҙенең уполномоченныйы итеп Үсәргән кантонына ебәрә. 1919 йылда Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, Һамар ҡалаһында урынлашҡан Көнсығыш фронттың Көньяҡ төркөмө штабындағы Башревком вәкиле Муллаян Халиҡовтың хәрби эштәр буйынса ярҙамсыһы итеп тәғәйенләнә. Бында ул башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороу һәм тәьмин итеү эштәре менән шөғөлләнә. Артабан Хәсән Әхмәров Башҡортостан хәрби эштәр комиссариатына тәьминәт бүлеге начальнигы ярҙамсыһы сифатында Саранск ҡалаһына күсерелә.

1919 йылдың йәйендә Башҡортостандың көнбайыш өлөшө аҡтарҙан азат ителгәс, Бәләбәй ҡалаһында Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһын ойоштороу эше башлана. Әхмәтзәки Вәлиди бригаданы ойоштороуҙы тәжрибәле полковник Әхмәровҡа йөкмәтә. *«Полковник Әхмәров, 5 июндә Бәләбәйгә килгәс тә, хәрби хеҙмәткә саҡырыу иғлан итеп, 3-сө һәм 4-се йәйәүле һәм 3-сө һыбайлы полктар ойоштора башлаған. Фрунзе ҡорал һәм башҡа кәрәк-яраҡтарҙы мул биргәйне...»* – тип яҙа Зәки Вәлиди «Башҡорттар тарихы» китабында.

1919 йылдың авгусына полковник Әхмәровтың тырышлығы менән Бәләбәйҙә өс полктан торған Башҡорт уҡсы бригадаһы һәм Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһының 3-сө полкы ойошторола. 17 августа Хәсән Әхмәров, Хәрби эштәр буйынса комиссариаттың фарманы менән, Башҡорт уҡсы бригадаһына командир итеп тәғәйенләнә. 1919 йылдың сентябрендә, Петроград фронтында Ҡыҙыл Армияның хәле хөртәйеү сәбәпле, Реввоенсовет рәйесе Троцкий Зәки Вәлидигә башҡорт ғәскәрҙәрен Петроградҡа ебәрергә бойора: *«Троцкий Бәләбәйҙә ойошторолған 3-сө һәм 4-се йәйәүле, 3-сө һыбайлы полктарҙы Петроградҡа һөжүм итеүсе генерал Юденичҡа ҡаршы ебәреүҙе талап итә. Мин ул ғәскәрҙе өйрәтеү, кәрәк-яраҡ менән тәьмин итеү эштәренең әле тамамланмауын әйтеп, полковник Әхмәровҡа хәҙергә ике батальонды бер-ике аҙна эсендә әҙерләргә әмер бирергә иттем. Бәләбәйҙәге полковникты телеграфҡа саҡыртып, хәлде аңлаттым. Ул хәҙергә хатта ике батальондың да әҙер түгеллеген белдерҙе. Мин быны иртәнсәк Троцкийға еткерҙем. Был иһә башҡорт ғәскәренең Юденичҡа ҡаршы һуғышта ҡатнашыуының башланғысы ине»,* – тип яҙа Вәлиди.

Тулыһынса ойошторолоп бөтмәүгә ҡарамаҫтан, Ленин менән Троцкийҙың бойороғона буйһоноп, 1919 йылдың 15 сентябрендә Башҡортостандың Хәрби эштәр буйынса комиссариаты башҡорт ғәскәрҙәрен Петроградҡа ебәреү тураһында фарман сығара. Унда былай тиелә: *«§ 2. Командиру Отдельной Башкирской Стрелковой Советской бригады тов. Ахмерову развернуть в Петрограде 1-й и 2-й Башкирские Стрелковые Советские полки, использовав для этой цели прибывающие пополнения из Запасного Стрелкового Башполка и изъяв*

из Сводного Башкирского полка всех служивших в 1-м и 2-м Башкирских Стрелковых Советских полках.

§ 4. Прибывающему в Петроград 3-му Башкирскому Стрелковому Советскому полку совместно с развертываемыми 1-м и 2-м Башкирскими Стрелковыми Советскими полками составить Отдельную Башкирскую Стрелковую Советскую бригаду».

Шулай итеп, полковник Әхмәров 1919 йылдың сентябрендә Петроградка килеп, Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы полктарын артабан ойоштороу эше менән мәшғүл була. Һөҙөмтәлә, 1919 йылдың октябрь аҙағында: *«Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһының (командиры Әхмәров иптәш): 1-се полкы — 36 комсоставтан, 1650 штыктан, 3 пулеметтан; 2-се полкы — 47 комсоставтан, 2160 штыктан, 2 пулеметтан; 3-сө полкы 25 комсоставтан, 950 штыктан, 7 пулеметтан тора ине»,* — тип яҙа үҙенең китабында Муса Мортазин.

1919 йылдың октябрендә Юденичҡа ҡаршы һуғышҡа Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһынан 3-сө полк ебәрелә. Ул Айырым башҡорт кавалерия дивизияһынан 3-сө кавалерия полкы һәм дә Айырым Башҡорт артиллерия дивизионы менән Петроград фронтының Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмөн тәшкил итә.

Юденич армияһы ҡыйратылғас, 1920 йылдың февралендә Хәсән Әхмәров Башҡорт уҡсы бригадаһын Хәлил Әлишевҡа тапшырып, Башҡортостанға ҡайта. Бында уға Зәки Вәлиди тағы ла яуаплы вазифа йөкмәтә. Уны Башҡорт республикаһының запас ғәскәрҙәре идаралығы начальнигы итеп тәғәйенләй. Полковник Әхмәровтың командалығында Башҡорт запас уҡсы полкы, Айырым Башҡорт уҡсы батальоны, Айырым Башҡорт запас кавалерия дивизионы, Айырым Башҡорт эскадроны, Айырым Башҡорт еңел батареяһы һәм башҡа частар, йәмғеһе 10 мең кешелек ғәскәр була. Уларҙы төрлө кәрәк-яраҡтар менән тәьмин итеү, өйрәтеп, әҙерләп һуғышҡа оҙатыу эштәре менән булыша.

1920 йылдың октябрендә республиканың запас ғәскәрҙәренең байтағы Көнбайыш фронтҡа оҙатыла, идаралыҡ бөтөрөлә. Полковник Хәсән Нурый улы Әхмәровтың артабанғы яҙмышы билдәһеҙ.

Хажиәхмәт Ишбулатов

Хажиәхмәт Исхаҡ улы Ишбулатов — Айырым Башҡорт корпусы командиры. 1851 йылдың 16 мартында Өфө губернаһы Өфө өйәҙенең (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Благовар районы) Өйҙөрәкбаш ауылында тыуған.

1866 йылда Ырымбурҙа Неплюев кадет корпусын тамамлай. Хәрби хеҙмәтте батальон суды рәйесе сифатында башлай. 1878 йылда штабс-капитан дәрәжәһен ала. 1892 йылдан Брест-Литовскиҙа хеҙмәт итә, артабан Ковель ҡалаһында полк менән командалыҡ итә. 1908 йылда генерал-майор дәрәжәһендә отставкаға сыға. Фиҙаҡәр хеҙмәте өсөн Изге Владимир, Изге Анна һәм Изге Станислав ордендары менән бүләкләнә.

Беренсе донъя һуғышы башланғас, 1915 йылда үҙ теләге менән хәрби хеҙмәткә бара. 1916 йылда Бәләбәй ҡалаһында 152-се полк менән командалыҡ итә. 1917 йылда Бәләбәй гарнизоны начальнигы итеп тәғәйенләнә. Февраль революцияһынан һуң, гарнизонда боларыш башланғас, хәрби хеҙмәтте ҡалдыра.

1918 йылдың йәйендә Силәбелә башҡорт полктары ойоштороло башлағас, Зәки Вәлиди генерал Ишбулатовҡа телеграмма ебәрә: *«Башкирский военный совет просит Вас в возможно скорейшее время прибыть в Челябинск, в военный совет, для принятия участия в организации башкирских войск и руководстве ими».* Генерал саҡырыуҙы ҙур теләк менән ҡабул итә. Июль айында Ишбулатов 1-се Башҡорт пехота дивизияһы командиры итеп тәғәйенләнә.

1918 йылдың сентябрендә башҡорт полктары Айырым корпуска берләштерелә. Айырым Башҡорт корпусының командиры итеп генерал Ишбулатов тәғәйенләнә. Башҡорт хәрби шураһының 7 сентябрҙәге фарманында былай тиелә: *«Согласно телеграммы Председателя Башкирского Военного Совета от 6 сентября за № 1226, прибывший в распоряжение Башкирского Военного Совета генерал-майор Ишбулатов назначается командиром Башкирского корпуса с 6 сентября с. г., коему теперь же приступить к исполнению обязанностей комнадира корпуса».*

Генерал Ишбулатовтың Ырымбурға килеүе Башҡорт корпусы һалдаттарына рух ныҡлығы өҫтәй. 14 сентябрҙә Ырымбурҙа 4-се Башҡорт полкы частары Орск фронтына оҙатыла. Генерал Ишбулатов уларҙы вокзалға тиклем оҙатып бара. Унығ сығышын һалдаттар «ура!» ҡысҡырып алҡышлай. 16 сентябрҙә Ишбулатов бөтөн башҡорт ғәскәрҙәрен изге Ҡорбан байрамы менән ҡотлап, телеграмма ебәрә. Унда былай тиелә: *«От души поздравляю вас с великим праздником Курбан-байрам. От чистого сердца желаю вам, воинам, отважно, не дрогнувшей рукой очистившим в боях нашу родину от врагов, кроме того, избавить наш народ от неописуемых, связанных с войной, хлопот и неудобств для спокойного и благополучного проведения праздника. Прошу Аллаха силы и помощи в наших святых делах по спасению от катастрофы нашей родины Башкурдистана и всей Российской республики...»*

Генерал Ишбулатов башҡорт милли ғәскәрҙәрен ойоштороу мәсьәләһендә бөтә күңеле менән бирелеп эшләй. Зәки Вәлиди менән бергә Һамар ҡалаһына барып Комуч (Һамар хөкүмәте) менән һөйләшеүҙәрҙә ҡатнаша. Генерал татар эшмәкәрҙәренең Башҡорт милли армияһы ойоштороло уына ҡаршы сығыуын ҡаты тәнҡитләй. Зәки Вәлиди үҙенең хәтирәләрендә ошо айҡанлы бер ваҡиғаны телгә алып үтә. *«Генерал Ишбулатов менән Һамар хөкүмәте офицерҙарына тәғәйенләнгән ҡунаҡханала урынлаштыҡ. Бер көн һалдаттар Ҡазан татарҙарының билдәле театр эшмәкәре Ғабдулла Ҡариевты, башҡорт ғәскәрен мыҫҡыл итә, тип яғалап алып инде.*

Мине бында офицерҙар араһында хәрби формала күргәс: «Ғәскәр ойоштороп, кеше үлтереүҙе һөнәргә әүерелдергәнһең. Мобилизация иғлан иткәнһең. Аллаһы Тәғәлә хаҡына ташла, урысҡа ҡалдыр был эште», — тигән етди һүҙҙәр әйтте. Ғәскәр сардарыбыҙ генерал Ишбулатов та эргәмдә ине. Быны үҙ һөнәрен кәмһетеү тип аңланы һәм бик ныҡ асыуланып, таныш булмаған Ғабдулла Ҡариевтан: «Һин Ваисовтарҙанмы?» — тип һораны. Ваисовтар Ҡазанда ғәскәри хеҙмәткә ҡаршы сыҡҡан бер даирә... Ҡариев: «Юҡ, түгелмен», — тине. Генерал уға: «Ул хәлдә һин ваисист түгел, пацифист икәнһең. Ҡазан татарҙары менән сыуаштар, быуаттар буйы урыҫ ҡулы аҫтында булып, ғәскәри идара эшен тик урыҫ эше, тип ҡарай. Был йөҙҙән күпселегегеҙ үҙ аллы милли ғәскәр һәм ерле өлкә автономияһы фекеренә ҡаршы. Тик дин, мәғариф эштәре менән шөғөлләнеү фекерендә. Әгәр һеҙҙе ғәскәргә алып, унда ошо өгөтөгөҙҙө дауам итһәгеҙ, мин һеҙҙе шунда уҡ төрмәгә ябыр инем», — тине. Мин Ҡариевҡа: «Башҡа бындай аҡылһыҙ һүҙ һөйләмәгеҙ, китергә мөмкин», — тинем. Ҡариев сығып киткәс, генерал миңә: «Үҙ аллы милли корпус ойоштороуҙы ғәскәрлек рухын һаҡлап ҡалған башҡорт һәм ҡаҙаҡ ҡабиләләре араһында башлауыбыҙ ғәйәт дөрөҫ булды. Унда бындай зарарлы, тарҡатҡыс фекерҙәр юҡ», — тине».

1918 йылдың сентябрь аҙағында Орск ҡалаһы ҡыҙылдарҙан азат ителә. Бында башҡорт ғәскәрҙәре ҙур батырлыҡ күрһәтә. Улар беренселәрҙән ҡалаға бәреп инә. Дутов башҡорттарҙы артыҡ маҡтап бармаһа ла, уның өлкән адъютанты подполковник Вагин башҡорт яугирҙарының батырлығына һоҡланыуын йәшермәй һәм Дутов исеменән генерал Ишбулатовҡа түбәндәге рәхмәт хатын ебәрә:

«Милостивый Государь,
Хаджи-Ахмет Искакович!

Командующий Войсками Округа, руководя действиями строевых частей Округа на Орском фронте, лично убедился в доблестной службе башкир, работающих рука об руку с казаками, грудью отстаивающими свободу не только казаков, но и всей России.

Таковые же местные отзывы о работе башкирских частей неоднократно получались и от командующих фронтами.

С чувством глубокого удовольствия передаю Вашему Превосходительству искреннюю благодарность Командующего Войсками Округа доблестным сынам Башкурдистана за их вызывающую общее удовлетворение службу на пользу дорогой нашей Родине».

Ошо мәлдә Һамар хөкүмәтенең Халыҡ армияһы (Башҡорт корпусы август – сентябрь айҙарында ошо армия составында була) фарманы менән Хажиәхмәт Ишбулатовҡа генерал-лейтенант званиеһы бирелә. Ләкин артабан аҡтарҙың башҡорт милли ғәскәренә ҡарата мөнәсәбәте

кире яҡҡа үҙгәрә. Колчак ваасҡа килеү менән Башҡорт корпусын дивизия итеп үҙгәртергә, башҡорт ғәскәрҙәрен туранан-тура үҙенең армияһы командирҙарына буйһондорорға фарман бирә. *«Корпус сардары генерал Ишбулатов, быңдай ҡатмарлы ваҡытта сардарҙың тәүәккәл булыуы шарт, мин үҙемде был сифатҡа эйә тип иҫәпләмәйем, ғәскәрҙең сардары итеп Вәлидовты тәғәйенләргә кәрәк, тип хөкүмәткә тәҡдим индерҙе. Хөкүмәт 22 ноябрҙә ғәскәр сардары вазифаһын миңә йөкмәтте»*, – тип яҙа Вәлиди.

1919 йылдың ғинуарында генерал Ишбулатов Башҡорт ғәскәри идаралығының начальнигы урынбаҫары итеп тәғәйенләнә. Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң Башҡорт республикаһының Хәрби эштәр буйынса комиссариатында хәрби етәксе (военный руководитель – хәрби комиссарҙың ярҙамсыһы), 1-се мобилизация комиссияһы рәйесе вазифаларын башҡара. Башҡорт ғәскәрҙәренә мобилизация үткәреү эше менән шөғөлләнә.

Генералдың улы Сәйетгәрәй (1904 йылғы) 1919 йылда Стәрлетамаҡта, Башревкомдың Эске эштәр комиссариатында эшләй, икенсе улы Рөстәм (1905 йылғы) 1923 йылда Башсовнаркомдың Эштәр идаралығында (Управление делами) эшләй. Хажиәхмәт Исхаҡ улы Ишбулатов 1921 йылда, 70 йәшендә, Стәрлетамаҡ ҡалаһында донъя ҡуя.

Шаһихәйҙәр Аҡсулпанов

Шаһихәйҙәр Ҡотлоғәлләм улы Аҡсулпанов – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә ҡатнашҡан офицерҙарҙың береһе, башҡорт дворяндары Аҡсулпановтар нәҫеленән, батша армияһының подполковнигы. 1868 йылда Өфө губернаһының Стәрлетамаҡ өйәҙе Тәлтем-Юрматы олоҫо Күсәрбай (Аҡсулпан) ауылында (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Стәрлетамаҡ районы) тыуған.

Аҡсулпановтар – борон-борондан башҡорт ғәскәрендә хеҙмәт иткән нәҫел. Ғәскәри старшина Күсәрбай Аҡсулпанов батша алдында күрһәткән хеҙмәттәре өсөн 1793 йылда дворянлыҡ ала. Кантон заманында 7-се Башҡорт кантоны менән етәкселек итә. Уның улы Аралбай, 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашып, батырлыҡтары өсөн Изге Анна ордены менән бүләкләнә. Икенсе улы Әхмәтшафиҡ йорт старшинаһы ярҙамсыһы булып хеҙмәт итә, Ырымбур линияһында сик буйы хеҙмәтендә йөрөй.

Шаһихәйҙәр Ҡотлоғәлләм улы ла ата-бабаларының юлын һайлай. Ҡайҙа хәрби белем алғанлығы билдәһеҙ. Ырымбурҙағы Неплюев кадет корпусын тамамлаған, буғай. Беренсе донъя һуғышында ҡатнаша. 1917 йылда подполковник Аҡсулпанов Киев хәрби округының артиллерия идаралығы начальнигы булып хеҙмәт итә.

Октябрь революцияһынан һуң тыуған яҡтарына ҡайта. 1917 йылдың декабрендә Ырымбурҙа үткән III Дөйөм Башҡорт ҡоролтайында Башҡортостан автономияһының Кесе ҡоролтайына (предпарламент) ағза итеп һайлана.

1918 йылдың июнендә Силәбе ҡалаһында Башҡорт хөкүмәте тергеҙелеп, Башҡорт армияһы ойоштороу эше башлана. Башҡорт хөкүмәте алдында, беренсе сиратта, милли ғәскәрҙе башҡорт офицерҙарын тәьмин итеү мәсьәләһе килеп баҫа. Революцияға тиклем батша армияһында хеҙмәт иткән, өлкән офицер дәрәжәһендәге (подполковник, полковник) башҡорттарҙы йәлеп итергә кәрәк була. Әммә ундайҙар башҡорттар араһында бик һирәк. Шуға күрә Башҡорт хөкүмәте уларҙың һәр береһен ғәскәргә саҡырыу өсөн вәкилдәр ебәрә. Шәйехзада Бабич иһә тыуған ауылы Күсәрбайҙа йәшәгән подполковник Аҡсулпанов менән һөйләшеп ҡайта. Өфөлә Һамар һәм Себер хөкүмәттәре менән һөйләшеүҙәр алып барған Зәки Вәлиди 1918 йылдың 17 июлендә Силәбеләге Башҡорт Хәрби Шураһы вәкиленә: *«Гильфанов и Бабич вернулись. Генерал Ишбулатов и полковник Акчулпанов согласились, будут в Уфе в субботу, — тип хәбәр итә. — У Султанова (һүҙ Искәндәр Солтанов хаҡында бара. —* А. Я.*) имеются братья-офицеры, один из них, кажется, Ибрагим, другой — его родственник. Кажется, Ибрагим Губайдуллин, должно быть, находится в деревне Мрясово Уршакминской волости. Еще есть офицеры Сыртлановы в Белебеевском уезде. Немедленно необходимо вызвать их в Уфу»,* — тип бойороҡ бирә.

1918 йылдың авгусына Башҡорт хөкүмәте бер кавалерия һәм биш пехота полкын ойоштороуға өлгәшә. Зәки Вәлиди, Һамар хөкүмәте менән һөйләшеп, башҡорт полктарын Айырым Башҡорт корпусына туплауға мөмкинлек ала. Комучтың Халыҡ армияһы командованиеһы менән килешеү нигеҙендә подполковник Аҡсулпанов Башҡорт корпусының 1-се пехота дивизияһына командир итеп тәғәйенләнә. Башҡорт хәрби шураһының 9 сентябрендәге 38-се фарманында: *«Согласно телеграммы № 868 от 7 августа Председателя Башкирского Военного Совета Валидова, управляющим военными делами Комитета Членов Учредительного Собрания утверждены в должности начальника 1-й пехотной Башкирской дивизии подполковник Акчулпанов и начальника 2-й пехотной Башкирской дивизии подполковник Бикмеев. Означенных лиц полагать в ожидании и до их прибытия и. д. начальников дивизии остаются назначенные ранее приказом Башкирского Военного Совета...»* — тиелә.

Башҡорт корпусының 1-се пехота дивизияһы штабы Силәбе ҡалаһында урынлаша. Уның составына 2-се, 3-сө һәм 5-се Башҡорт пехота полктары инә. Был ғәскәри частар Верхнеуральск өйәҙе һәм Силәбе ҡалаһында урынлашҡан була. Бер урында тупланмаған был полктар менән идара итеүе еңелдән булмай подполковник Аҡсулпановҡа. Шуға ҡарамаҫтан, сардар дивизия менән дә командалыҡ итергә һәм башҡорт офицерҙарын тәрбиәләүҙә ҡатнашырға лә өлгөрә. Ул Ырымбурҙа асылған Башҡорт прапорщиктар мәктәбендә уҡыта. Ошо хаҡта Зәки Вәлиди былай тип яҙа: *«Ырымбурҙа беҙ хәрби эштәр менән бергә мәғариф менән дә шөғөлләндек. Мөғәллим мәктәптәре, медсестра, телеграф, телефон курстары, хәрби мәктәп, ғәскәри курстар астыҡ.*

Башҡорттарҙан барлыҡ офицерҙар, унтер-офицерҙар уҡытыу эше менән шөғөлләнде. Батша ғәскәрендә хеҙмәт иткән башҡорт офицерҙарынан полковник Аҡсулпанов, Хәсән Әхмәров, Ғәлимйән Таған ҙур фиҙаҡәрлек күрһәтте».

1918 йылдың ноябрендә Колчак корпуска тупланған Башҡорт милли ғәскәрҙәрен таратырға ҡарар итә. Башҡорт корпусын 9-сы Башҡорт уҡсы дивизияһы итеп үҙгәртеү тураһында фарман сығара. Себер хөкүмәтенән аҡса, ҡорал һәм башҡа һуғыш кәрәк-яраҡтары алып торған Башҡорт хөкүмәте Колчактың фарманы менән ризалашырға мәжбүр була. Шулай итеп, Башҡорт корпусының ике дивизияһынан бер дивизия ойошторола.

1918 йылдың сентябренән 1920 йылдың авгусына тиклем Шаһихәйҙәр Аҡсулпановтың исеме Башҡорт хәрби шураһы, артабан Башҡорт хәрби комиссариаты, Башревком документтарында осрамай.

1920 йылдың 7 авгусында подполковник Аҡсулпанов Стәрлетамаҡта урынлашҡан Башҡорт республикаһының запас ғәскәрҙәре идаралағы начальнигы Хәсән Әхмәровтың ярҙамсыһы итеп тәғәйенләнә. Шуныһы ҡыҙыҡлы фарманда: *«Прибывшего при сношении Административно-мобилизационного отдела Башнарвоенкомата за № 02/ 23165 от 5 августа сего года бывшего заведующего общим делопроизводством Инспектора Артиллерии Народно-Революционной армии Дальне-Восточной Республики тов. АКЧУЛПАНОВА назначаю помощником начальника Запасных войск...»* – тиелә. Фармандан күренеүенсә, Шаһихәйҙәр Аҡсулпанов Алыҫ Көнсығыш Республикаһының Ҡыҙыл Армияһында хеҙмәт итеп йөрөгән булып сыға. Әммә ул яҡтарға ни рәүешле барып сыҡҡандыр, билдәһеҙ.

Подполковник Аҡсулпанов 10 мең тирәһе кешене тәшкил иткән башҡорт запас ғәскәрҙәрендә инспекция эше менән шөғөлләнә. Ғәскәрҙәрҙәге хәрби әҙерлек, тәртип, тәьминәт мәсьәләләрен тикшереп, Аллағыуат ауылында урынлашҡан Айырым Башҡорт запас уҡсы полкында булып ҡайта. 1920 йылдың октябрендә Башҡорт республикаһының запас ғәскәрҙәре идаралығы бөтөрөлә. Шаһихәйҙәр Аҡсулпановтың артабанғы яҙмышы билдәһеҙ. Отставкаға сығып, ауылына ҡайтҡандыр, күрәһең.

Башревком документтарында тағы бер Аҡсулпановтың исем-шәрифе телгә алына. Ул – Вәли Ҡотләхмәт улы Аҡсулпанов, Ш. Аҡсулпановтың ике туған ҡустыһы булһа кәрәк. 1889 йылда Стәрлетамаҡ өйәҙенең Күсәрбай ауылында тыуған. Алты йыл Верхне-Удинск ҡалаһында батша армияһының 19-сы Себер уҡсы полкында, артабан Силәбе ҡалаһында Ҡыҙыл Армияның 1-се запас полкының татар-башҡорт батальонында хеҙмәт итә. 1919 йылдың авгусында Башревком Саранск ҡалаһынан Стәрлетамаҡҡа ҡайтҡандан һуң, Вәли Аҡсулпанов Эске эштәр халыҡ комиссариатына эшкә алына. Артабанғы яҙмышы билдәһеҙ.

Ҡазыхан Низаметдинов

Ҡазыхан Низаметдин улы Низаметдинов 1892 йылдың 10 мартында Ырымбур губернаһы Верхнеуральск өйәҙенең (хәҙерге Башҡортостан Республикаһы Белорет районы) Заһит ауылында тыуған. Ике йәшендә атаһынан ҡала. Әсәһе һәм ағалары ҡулында үҫә. Ун йәше тулғас, Ҡазыханды Сермән ауылындағы Рус-башҡорт училищеһына уҡырға бирәләр. Училищены 1907 йылда тамамлап, Белорет заводындағы уҡытыусылар курсына инә. 1910 йылда уҡытыусылар курсын уңышлы тамамлап, Златоуст өйәҙендәге Нәсибаш ауылында уҡыта башлай. 1913 йылдың октябрендә Низаметдинов хәрби хеҙмәткә алына. Владивосток ҡалаһындағы император ғали йәнәптәренең 12-се Себер уҡсы полкына билдәләнә. Тиҙҙән белемле һалдат полктың Уҡыу командаһын тамамлап, унтер-офицер чинын алып сыға. 1915 йылдың сентябрендә Низаметдиновты Иркутск ҡалаһының 1-се прапорщиктар мәктәбенә ебәрәләр. 1916 йылдың ғинуарында мәктәпте бөтөү менән уны Ачинск ҡалаһында торған 13-сө Себер уҡсы полкына тәғәйенләйҙәр. Әммә оҙаҡламай прапорщик Низаметдинов Төньяҡ фронтҡа, 12-се армия составындағы 20-се Себер уҡсы полкына юллана. Бында ул тәүҙә 5-се ротаға кесе офицер итеп тәғәйенләнә, артабан шул ротаның командиры булып китә. Яуҙа күрһәткән батырлыҡтары өсөн 2-се дәрәжәләге Изге Станислав ордены менән бүләкләнә. 1916 йылдың сентябрендә подпоручик званиеһын ала. Октябрь – декабрь айҙарында Ҡ. Низаметдинов Рига ҡалаһында 12-се армияның офицерҙар курсында белем алып ҡайта. Декабрь аҙағында уны 20-се полктың 2-се батальоны командиры итеп тәғәйенләйҙәр. 1917 йылдың ғинуарынан подпоручик Низаметдинов Рига ҡалаһында 12-се армияның Дөйөм армия өлгөлө уҡыу командаһының 2-се ротаһы командиры вазифаһын башҡара. Февраль айында уны поручик итеп үрләтәләр. Тиҙҙән Өлгөлө уҡыу командаһы начальнигы ярҙамсыһы булып китә.

Февраль революцияһын поручик Низаметдинов Рига ҡалаһында ҡаршылай. Өлгөлө уҡыу командаһы һалдаттары уны 12-се армия һалдаттары башҡарма комитетына ағза итеп һайлайҙар, артабан ул 12-се армияның мосолман һалдаттары комитеты рәйесе вазифаһын башҡара. 1917 йылдың октябрендә Ҡазыхан Низаметдинов Төньяҡ фронт штабы янындағы Мосолман хәрби шураһы комиссары итеп һайлана. Артабан ул, Төньяҡ фронт ғәскәрҙәре менән идара итеү Советы ҡушыуы буйынса, Псков ҡалаһында мосолман полкын ойоштороу менән шөғөлләнә. 1918 йылдың ғинуарында Ҡазан ҡалаһында Мосолмандарҙың II хәрби съезында ҡатнаша. Февраль айында демобилизацияланғас, Ҡазан ҡалаһына килә. Бында ул Мосолман хәрби комиссариатында адъютант итеп хеҙмәткә алына. 1918 йылдың июлендә, чехословактар Ҡазанға һөжүм иткән мәлдә, Низаметдиновҡа Татар-башҡорт батальоны командиры вазифаһы йөкмәтелә. Ләкин уға советтарҙы яҡлап чехословактар менән һуғышырға тура килмәй. Тиф менән ауырып китеп госпиталгә ята. Ошо арала чехословактар Ҡазанды ала. Һауыҡҡас, Низаметдиновты Халыҡ армияһы штабына ебәрәләр, ә унан инде Ырымбур ҡалаһына Башҡорт хәрби шураһы

ҡарамағына оҙатыла. 30 август уны Ырымбур хәрби округының Сит милләттәр (Инородческий) бүлегендә Башҡорт хәрби шураһының өлкән адъютанты итеп ҡуялар. Ә инде 1918 йылдың октябрендә Ҡазыхан Низаметдинов 5-се Башҡорт уҡсы полкы командиры итеп тәғәйенләнә. 1918 йылдың ноябренән алып 1919 йылдың ғинуарына тиклем ул үҙенең полкы менән ҡыҙылдарға ҡаршы һуғышып йөрөй. Батырлыҡтары өсөн штабс-капитан званиеһын ала. 1919 йылдың ғинуарында, Советтар яғына сығыр алдынан, Зәки Вәлиди башҡорт ғәскәренә Колчак һәм Дутов ҡуйған офицерҙар урынына башҡорттарҙы тәғәйенләй. 1-се Башҡорт уҡсы дивизияһының штаб начальнигы итеп Ҡ. Низаметдиновты ҡуя. Февраль айында ул 1-се дивизия командиры Әүхәҙи Ишмырҙин менән дивизия полктарының ҡыҙылдар яғына сығыуы менән етәкселек итә.

Низаметдинов ҡыҙылдар яғына сыҡҡандан һуң, Стәрлетамаҡта ойошторолған 176-сы Башҡорт полкының мәктәп начальнигы вазифаһын үтәй. Апрель аҙағында ошо полк составында Саранск ҡалаһына килә. Бында ике уҡсы һәм ике кавалерия полктарынан торған Айырым Башҡорт бригадаһы ойошторола башлай. Июнь айында Низаметдинов бригада составында Көньяҡ фронтта Харьков ҡалаһын обороналауҙа ҡатнаша. Фронттан ҡайтҡас, 1919 йылдың көҙөндә Низаметдинов башҡорт ғәскәрҙәренең ат запасын ойоштороу менән шөғөлләнә. Ат запасы Юрматы кантонының Ермолаевка ауылында урынлаша. 1920 йылдың майында уны республиканың Хәрби эштәр буйынса халыҡ комиссариаты янындағы кесе командирҙар мәктәбе начальнигы итеп күсерелә. Артабан Башҡорт республикаһының запас ғәскәрҙәре идаралығында инспектор булып хеҙмәт итә, һуңынан Башҡорт территориаль полк округы начальнигы вазифаһын башҡара. 1921–1923 йылдарҙа Ҡ. Низаметдинов Башҡорт командалыҡ курстары менән етәкселек итә.

Ҡазыхан Низаметдинов 30-сы йылдар аҙағында «Башавтогужтрест» предприятиеһында юрисконсульт булып эшләй. 1937 йылдың 27 июлендә ҡулға алынып, Совет власына ҡаршы эшмәкәрлектә ғәйепләнеп, шул уҡ йылдың 8 декабрендә атыла. 1956 йылдың 16 июлендә аҡлана. Революцияға тиклем Заһит исеме менән өс ауыл йөрөтөлә, йәғни бер ауыл тип иҫәпләнә. Улар – Әҙекәй, Аҙналы һем Назыш ауылдары. Ҡ. Низаметдин ошо өс ауылдың ҡайһыһында тыуғандыр, билдәһеҙ.

Хәлил Әлишев

Хәлил Фәйзрахман улы Әлишев – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан офицерҙарҙың береһе, ҡаһарман сардар. 1892 йылда Ҡазан губернаһының (хәҙерге Татарстан Республикаһының Мөслим районы) Иҫке Әлмәт ауылында тыуған. Революцияға тиклем Беренсе донъя һуғышына алынып, унда хәрби мәктәп тамамлап, подпоручик званиеһын алып ҡайта.

1918 йылда йәйендә Хәлил Әлишев Башҡорт армияһы сафтарына алына. 23 август Башҡорт Хәрби Шураһы уны Туҡ-Соран кантонының

ирекле отрядына етәксе итеп тәғәйенләй. 1918 йылдың 7 октябрендә, Бөрйән-Түңгәүер, Үсәргән, Ҡыпсаҡ, Етеырыу һәм Туҡ-Соран кантондарындағы ирекле башҡорт отрядтары, йәғни Башҡортостандың көньяғындағы отрядтар бергә тупланып, 2-се Башҡорт ирекле кавалерия полкы ойошторола. Полктың командиры итеп Башҡорт хәрби шураһының Ирекле отрядтар бүлеге мөдире Әхмәҙулла Бейешев тәғәйенләнә. Ә Хәлил Әлишев үҙе етәкләгән Туҡ-Соран отряды менән ошо полктың 5-се эскадронын тәшкил итә.

1918 йылдың декабренән алып 1919 йылдың ғинуарына тиклем 2-се Башҡорт полкы составында ҡыҙылдарға ҡаршы һуғыша. Ошо мәлдә Х. Әлишев үҙен ҡыйыу, оҫта һәм тәүәккәл сардар итеп таныта. Ғинуар айында Башҡорт корпусы командующийы Зәки Вәлиди уны Стәрлетамаҡ фронтындағы башҡорт отрядтарының командиры итеп тәғәйенләй. Поручик Әлишев командалығындағы башҡорт ғәскәрҙәре 1919 йылдың 18 ғинуарында Нуҡай ауылында (ул ауыл хәҙерге Күгәрсен районына ҡарай) ҡыҙылдарҙың тулы бер полкын ҡыйрата. Был хәрби уңыш тураһында ул шул уҡ көндә баш сардар Зәки Вәлидигә хәбәр итә:

«Вчера предполагалось наступление в 16 часов на Бекичево и Тляумбетово с целью занять последних, но ввиду прибытия красных на Сатяково, что в 21 верстах южнее Мраково, и согласно Вашего распоряжения, я в 18 часов двинул свои отряды из Канакиза через Тангырово, Абсалямово и Сапыково на Нукаево, где остановились на ночлег красные в числе 500 человек, как потом выяснилось 1-го Восточного Кавалерийского полка. В 5 часов утра 18 января мною было атаковано с трех сторон селение Нукаево. Находящийся в нем 1-й Восточный Кавалерийский полк принял атаку и произошел сильный бой. С обеих сторон пулеметный и ружейный ураганный огонь продолжался около трех часов. В восемь часов было занято селение. Несмотря на такой отчаянный бой, вследствие удачного расположения сил, с моей стороны потери незначительны: двое убитых, трое раненых. Со стороны красных, как части пораженной, потери весьма большие, как людьми, так и военным снаряжением. Трофеи подсчитываются, для сведения посылаю опись посланным вещам командиру полка. Расстроившись, части красных отступали в беспорядке по направлению на Красную мечеть. После этого, вследствие усталости, измученности людей и лошадей, не стал преследовать красных до Красной мечети, и ничего не было известно о ней. Поэтому я вернулся в Увары.

По сведениям разведки, бежавшие красные из Нукаевой настолько были напуганы, что даже не останавливались в Красной мечети, а поехали прямо на Тляумбетово. Теперь высылаю в Красную мечеть пол-эскадрона для несения сторожевой службы, а завтра 19 января отправляюсь со штабом и с силами в Красную

мечеть. В числе трофеев имеется канцелярия 1-го Восточного Кавалерийского полка с 2-я пишущими машинами».

Нуҡай ауылындағы алышта күрһәткән ҡаһарманлыҡтары өсөн 21 ғинуар көнө Башҡорт ғәскәри идаралығы начальнигы үҙенең фарманы менән 13 офицерға яңы звание бирә, шул иҫәптән поручик Әлишев штаб-ротмистр дәрәжәһенә лайыҡ була. Артабан ул Ә. Бейеш урынына 2-се Башҡорт кавалерия полкы менән командалыҡ итә.

Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң Саранск ҡалаһында башҡорт полктарынан Айырым Башҡорт бригадаһы ойошторола. Хәлил Әлишев бригаданың 2-се Башҡорт кавалерия полкын етәкләй. Башҡорт бригадаһы составында ул 1919 йылдың июнь – сентябрь айҙарында Көньяҡ фронтта (Украинала) Деникин армияһына ҡаршы ҡанлы яуҙарҙа ҡатнаша. Дошман менән алыштарҙың береһендә 2-се Башҡорт кавалерия полкы командиры эргәһенә снаряд төшөп, көслө контузия ала. Уны иҫһеҙ көйөнсә яу яланынан алып сығалар.

Ҡанлы алыштар һөҙөмтәһендә, башҡорт полктары, шул иҫәптән 2-се кавалерия полкы, ҙур юғалтыуҙар кисерә. 14-се армия командованиеһы дүрт башҡорт полкын ике йыйылма полкка (кавалерия һәм уҡсы полкына) берләштерергә ҡарар итә. 1919 йылдың сентябрендә Хәлил Әлишев 2-се полктың иҫән ҡалған командалыҡ составы һәм штабы менән Петроградҡа килә. Зәки Вәлиди ҡаһарман сардарҙы Бәләбәйҙән килгән яңы 3-сө Башҡорт кавалерия полкына командир итеп тәғәйенләй. Хәрби эштәр буйынса комиссарҙың фарманында былай тиелә:

«Командир 3-го Башкирского Кавалерийского Советского полка ***Галамеев*** *назначается в распоряжение Начальника Отдельной Башкирской Кавалерийской Советской дивизии. На должность названного полка назначается командир бывшего Башкирского Кавалерийского Советского полка тов.* ***Алишев.***

Тов. ***Алишеву*** *прибывших вместе с ним в Петроград командный и прочий состав бывшего 2-го Башкирского Кавалерийского Советского полка: имущество, обоз, канцелярские принадлежности и прочее немедленно отправить в Стерлитамак в распоряжение Башвоенкома, откуда получат дальнейшее направление во 2-й Башкирский Кавалерийский Советский полк бригады* ***Муртазина****».*

Башҡорт ғәскәрҙәре Петроградта торған сағында, артабанғы формирование үтә, полктар, һалдаттар, комсостав тулыландырыла, яңы килгән һалдаттар һуғышҡа әҙерлек үтә. Октябрь уртаһына Юденич армияһы ҡыҙылдарҙы ҡыйратып, Петроград ҡалаһы янына килеп етә. Юденич армияһына ҡаршы башҡорт ғәскәрҙәре ебәрелә. Ошо айҡанлы Хәлил Әлишевкә тағы бер яуаплы бурыс йөкмәтелә:

«16 октября 1919 года согласно словесного приказания Начальника Отдельной Кавалерийской Башкирской дивизии тов. АХЛОВА и согласно удостоверения Коменданта Петрукрайона тов. АВРОВА от 15 октября сего года за № 343, я был назначен Начальником Башкирской группы. В состав этой группы входил 3-й Кавалерий-

ский Башкирский полк в составе: 2-х пеших — 360 штыков и 2-х конных эскадронов в числе 240 сабель. Командир полка тов. КАПЛАН, Политком тов. Абдрашитов и 3-й батальон 3-го стрелкового Башкирского полка в составе 575 штыков, командиром батальона тов. АБДЕЕВ и Политком тов. БУЛЯКОВ.

Для управления этой группой мною был сформирован Штаб группы: Начальником Штаба этой группы тов. КАЛЬМЕТЕВ, для поручений тов. ТЕРЕГУЛОВ и помощник Начальника Штаба тов. СМИРНОВ и политкомом был тов. АГИШЕВ», — тип яҙа үҙенең докладында Әлишев.

1919 йылдың октябренән 1920 йылдың ноябренә тиклем Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмө Юденич ғәскәрҙәрен ҡыйратыуҙа әүҙем ҡатнаша. Башҡорт яугирҙары ҙур батырлыҡтар күрһәтә. Һуғышсан башҡорт ғәскәрҙәре фронттың төп участкаһы — Пулков ҡалҡыулығында урынлаша. *«Пулковские высоты по своему географическому положению составляли самый важный стратегический пункт, имеющий решающее значение в судьбе Петроградского фронта. Противник для занятия этого пункта сосредоточил большие свои надежные силы пехоты (офицерские батальоны), кавалерии и легкую, тяжелую артиллерию.*

В течение нескольких дней продолжались ожесточенные бои за эти Пулковские высоты, башкиры, в боях знающие только одно: умереть или победить — напрягли все силы и выказали неописуемый героизм. Удалые, храбрые, смелые, дружные натиски башкир заставляли противника, грозного генерала Юденича, отказаться от плана занять преддверие Петрограда — Пулковские высоты», — тиелә бер архив документында.

Хәлил Әлишев та башҡорт яугирҙарының батырлығын билдәләп үтә: *«За все операции по защите города Петрограда, входящие в состав моей группы Башчасти (3-й Кав. Башполк и 3-й стр. Башполк) отличались своим геройством, мужеством, ни один командир и красноармеец этих полков не имели мысли о сдаче Петрограда»*, — тип яҙа ул үҙенең докладында.

Совет хөкүмәте Башҡорт ғәскәрҙәре Пе́троградты ҡурсалауҙа күрһәткән ҡаһарманлыҡтарын юғары баһалай. Байтаҡ һалдат һәм командирҙар, шул иҫәптән Хәлил Әлишев, РСФСР-ҙың юғары дәүләт наградаһы — Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. 1920 йылда Хәлил Әлишев Финляндия сигендә торған Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы менән командалыҡ итә.

30-сы йылдар аҙағында Хәлил Фәйзрахман улы Ленинград ҡалаһында Сварочный техникумының военругы булып эшләй.

1937 йылдың 7 июнендә НКВД органдары тарафынан ҡулға алына. Ярты йыл төрмәлә ултырғандан һуң ул 1937 йылдың 8 декабрендә НКВД Комиссияһы һәм СССР прокуратураһы ҡарары менән атыла.

Таһир Имаҡов

Таһир Ғилман улы Имаҡов – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан эшмәкәрҙәрҙең береһе, Зәки Вәлидиҙең яҡын көрәштәше. 1895 йылдың 26 октябрендә Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙенең (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Көйөргәҙе районы) Ҡансыра ауылында тыуған.

Ырымбурҙа «Хөсәйениә» мәҙрәсәһендә уҡый. 1914–1915 йылдарҙа Ырымбурҙа һәм Урта Азиялағы Джизак ҡалаларында эшләй. 1915 йылдың майында хәрби хеҙмәткә алынып, Беренсе донъя һуғышында ҡатнаша. Батша армияһында писарь булып хеҙмәт итә. Аҙаҡ Учебный командала уҡып, унтер-офицер званиеһын ала. Таһир Имаҡов 1917 йылдың Февраль революцияһын Ҡазан ҡалаһында ҡаршылай. Артабан Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушылып китә. 1917 йылда Башҡорт королтайҙары делегаты була.

1918 йылдың ғинуарында башҡорт делегацияһы составында Муса Мортазин, Хафиз Ҡушаев, Усман Ҡыуатов һәм Мөхәмәтхан Ҡулаевтар менән бергә Ҡазанда үткән II Бөтә Рәсәй мосолман хәрби съезында ҡатнаша. Февраль башында, Башҡорт хөкүмәтенең ҡулға алыныуын ишетеп, башҡорт вәкилдәре Ырымбурға ҡайта. Март айында Таһир Имаҡов Муса Мортазин менән бергә Башҡортостандың Ваҡытлы революцион советына ағза итеп һайлана. Әммә большевиктар яңы ағзаларға шикләнеп ҡарай. Бигерәк тә атаҡлы коммунист Бәхтегәрәй Шәфиев уларҙы өнәп бөтмәй. *«К ним (Имакову, Муртазину Мусе, Куватову Усману) Шафиев относился недоверчиво, осторожно»*, – тип яҙа Ваҡытлы совет рәйесе А. Дәүләтшин.

1918 йылдың апрелендә Таһир Имаҡов Милләттәр эштәре буйынса Халыҡ комиссариаты (комиссары Сталин) янындағы Үҙәк мосолман комиссариатының Башҡорт эштәре буйынса бүлеге мөдире итеп тәғәйенләнә. Артабан Өфө губкомы янындағы Татар-Башҡорт комиссариатында агитация һәм ойоштороу бүлеген етәкләй. 1918 йылдың июнь башында Өфө аҡтар ҡулына күсә.

Таһир Имаҡов ҡабат Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушылып китә. 1918 йылдың август айында ул Башҡорт хәрби шураһы ағзаһы Ғәбделхай Иркәбаев менән Бөрйән-Түңгәүер кантонында ирекле отряд ойоштороу менән мәшғүл була. Һуңынан Имаҡов Бөрйән-Түңгәүер отряды командиры булып хеҙмәт итә. Уға прапорщик званиеһы бирелә.

1918 йылдың октябрендә Бөрйән-Түңгәүер, Үҫәргән, Етеырыу, Ҡыпсаҡ, Туҡ-Соран кантоны отрядтары һәм Башҡорт хәрби шураһы янындағы махсус команда 2-се Башҡорт ирекле кавалерия полкына берләштерелә. Т. Имаҡов үҙенең отряды менән 2-се полктың 1-се эскадронын тәшкил итә. 1918 йылдың декабренән алып 1919 йылдың февраленә тиклем Таһир Имаҡов 2-се Башҡорт кавалерия полкы составында ҡыҙылдарға ҡаршы һуғышып йөрөй. Ҡаһарманлыҡтары өсөн подпоручик званиеһын ала.

Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, 1919 йылдың 21 февралендә Темәс ауылында үткән I Бөтә Башҡорт

хәрби съезын ойоштороуҙа әүҙем ҡатнаша. Съезд рәйесе урынбаҫары итеп һайлана. Оло йыйында Башҡортостан автономияһының революцион хөкүмәте – Башревком ойоштороло. Таһир Имаҡов милли хәрәкәт етәкселәре З. Вәлиди, Г. Ҡарамышев, Ю. Бикбов, М. Ҡулаев, А. Йәғәфәровтар менән бергә Башревкомға һайлана.

26 февралдә Эске эштәр һәм милләттәр эштәре буйынса комиссар Фәтих Төхвәтуллин Мәскәүгә ебәрелеү сәбәпле, уның бурыстары Таһир Имаҡовҡа йөкмәтелә. Был осорҙа Имаҡов Башҡортостандың ғәҙәттән тыш комиссияһын (БашЧК) ойоштороу мәсьәләләре менән мәшғүл була. БашЧК-ның проекты эшләй.

Саранск ҡалаһында Т. Имаҡов Башревком Президиумы ағзаһы итеп һайлана, Юстиция комиссары вазифаһын башҡара. 1919 йылдың майында Имаҡовты Башҡортостан территорияһында һуғышҡан 1-се армияның Ревтрибуналына Башревком вәкиле итеп ебәрәләр. Август айында Имаҡов Муса Мортазиндың бригадаһын ҡыҙылдар яғына сығарыу эше менән мәшғүл була. *«Бындағы ваҡиғалар тураһында ишетеп (Мортазинды аҡтар менән һуғыша башлауын ишетеп.* – А. Я.), *Башҡорт кавалерия бригадаһына Башревком ағзаһы Имаҡов иптәш килеп етте. Ул яугирҙарыбыҙҙы ҡыҙылдарҙың бригадаға яҡшы мөнәсәбәттә булыуына инандырҙы һәм комбриг Мортазинға ҡыҙылдарға ҡушылырға кәңәш бирҙе. Һөйләшеү ике көн буйы барҙы»,* – тип яҙа Муса Мортазин үҙенең китабында. Башҡорт кавалерия бригадаһы сыҡҡандан һуң, Зәки Вәлиди ни сәбәптәндер Мортазин урынына бригада командиры итеп Таһир Имаҡовты тәғәйенләргә ниәтләй. Әммә аҙаҡ: *«Бройдо (Көнсығыш фронттың Реввоенсовет вәкиле булһа кәрәк.* – А. Я.*) от имени фронта настаивал оставить Муртазина комбригом, я согласился»,* – тип хәбәр итә З. Вәлиди. Ә шулай ҙа 15 сентябрҙә республиканың хәрби комиссары үҙенең фарманы менән Таһир Имаҡовты Мортазин бригадаһының 2-се полкы командиры итеп раҫлай. Бының менән Зәки Вәлиди Мортазин бригадаһында үҙенең ышаныслы кешеһен ҡуйырға уйлаған, булһа кәрәк. Әммә Мортазин үҙенең китабында полк командиры булараҡ Имаҡовтың исемен бер ерҙә лә телгә алмай. Тимәк, уға бригадала хеҙмәт итергә тура килмәгән, күрәһең.

Артабан Таһир Имаҡовтың исеме 1920 йылдың ғинуарында Стәрлетамаҡта булып үткән ваҡиғаларында яңғырай. Архив документтарынан күренеүенсә, Т. Имаҡов 10 ғинуарҙан Зәки Вәлидиҙең (был ваҡытта ул Мәскәүҙә була) урынбаҫары Әүхәҙи Ишмырҙин тиф менән ауырып китеү сәбәпле, Башҡортостандың хәрби комиссары вазифаһын үҙ өҫтөнә ала. Ошо мәлдә Башревкомға ҡаршы фетнә әҙерләнеп ятылыуы асыҡлана (Башобком менән БашЧК ҡатнашлығында). Башревком рәйесе Йомағолов 12 ғинуар көнө БашЧК рәйесе Сөләймән Мырҙабулатовты эшенән алып, уның урынына Имаҡовты тәғәйенләй. 16 ғинуар көнө Йомағоловтың бойороғо буйынса Имаҡов һәм Эске эштәр комиссары Фәтих Төхвәтуллин А. Измайлов, Г. Шәмиғолов, С. Мостафин һәм Муценектарҙы ҡулға ала. Был эшкә оҙаҡламай Мәскәү ҡыҫыла, Йомағо-

ловты Үҙәккә саҡыртып алалар. Имаҡов урынына БашЧК рәйесе итеп Төхвәтуллин тәғәйенләнә.

1920 йылдың мартында Таһир Имаҡов Зәки Вәлиди урынына ваҡытлыса Башҡортостан хөкүмәте – Башревком рәйесе вазифаһын башҡара. Май айында Үҙәк совет хөкүмәте үҙенең декреты менән Башҡортостандың автономия хоҡуҡтарын ҡырҡа сикләгәс, Имаҡов Башревком ағзалары менән бергә эш ташлап сығып китә.

20–30-сы йылдарҙа юриспруденция буйынса белем алып, юрист һөнәрен үҙләштерә. 1935 йылда ул Башҡортостандан Ырымбур ҡалаһына күсеп китә. Бында Дәүләт банкыһында юрисконсульт булып эшләй.

1937 йылдың 4 апрелендә уны НКВД органдары ҡулға ала. Төрмәлә 7 ай буйына тотҡандан һуң, 14 ноябрҙә Т. Имаҡовты ҡаҙаҡтарҙың Алаш Урҙа милләтселек ойошмаһында ҡатнашыуҙа ғәйепләп, үлем язаһына хөкөм итәләр. Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте эшмәкәре Таһир Ғилман улы Имаҡов 1960 йылдың 9 сентябрендә реабилитациялана.

Усман Тереғолов

Усман Ниғмәтулла улы Тереғолов – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә, Башҡорт армияһын ойоштороуҙа әүҙем ҡатнашҡан татар офицерҙарының береһе. 1896 йылда Өфө губернаһы Бәләбәй өйәҙенең (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Благовар районы) Ҡарғалы ауылында тыуған. Хәлил Тереғоловтың ҡустыһы. Дворяндар нәҫеленән. Беренсе донъя һуғышы башланғас, хәрби хеҙмәткә алынып, Киев ҡалаһының хәрби училищеһын тамамлай. Уға прапорщик званиеһы бирелә. 1918 йылда Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушылып китә. Июнь айында Башҡорт хәрби шураһы ағзаһы итеп алына. 22 июндә Тамьян-Ҡатай кантонына башҡорт отрядтары ойоштороу өсөн ебәрелә. Бында ул Әмир Ҡарамышев һәм Муса Мортазин менән бергә Тамъян-Ҡатай ирекле отряды ойоштора. Ошо отрядтың командиры сифатында Верхнеуральск ҡалаһын Блюхерҙың ҡыҙыл отрядтарынан һаҡлап һуғыша. 7 август ҡаһарман сардар Ә. Ҡарамышев үлеп ҡалғас, уның урынына Верхнеуральск фронтындағы башҡорт ғәскәрҙәре менән етәкселек итә. Күрһәткән батырлыҡтары өсөн поручик званиеһын ала.

1919 йылдың ғинуар аҙағында Зәки Вәлиди уны 6-сы Башҡорт уҡсы полкына командир итеп тәғәйенләй. Ошо полк составында ҡыҙылдар яғына сыға. Май башында Саранск ҡалаһында Усман Тереғолов 1-се Башҡорт кавалерия полкы командиры итеп ҡуйыла. 1919 йылдың йәйендә Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы составында Көньяҡ фронтта (Украинала) генерал Деникиндың армияһына ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнаша. Аҙаҡ «Башкирские войска на Южном фронте» тип исемләнгән хәтирәләр яҙа.

1919 йылдың көҙөндә Петроград ҡалаһын Юденич ғәскәрҙәренән обороналауҙа ҡатнаша. 1920 йылдың башынан Үҙәк Башҡорт дезертирлыҡҡа ҡаршы комиссия рәйесе, артабан Башҡортостан милицияһының үҙәк идаралығы начальнигы булып хеҙмәт итә.

1921 йылда ОГПУ тарафынан ҡулға алына, төрмәгә ултыртыла. Унан ҡайтҡас, Ленинград ҡалаһындағы юл инженерҙары институтында (институт путей сообщения) уҡып сыға. 1936 йылда тағы ҡулға алына, 1940 йылда 8 йылға һөргөнгә ебәрелә. Усман Тереғолов 1943 йылдың 7 апрелендә Амур өлкәһенең Свободный ҡалаһында вафат була. 1989 йылда реабилитациялана.

Хәлил Тереғолов

Хәлилулла Ниғмәтйән улы Тереғолов 1890 йылдың 12 мартында Өфө губернаһы Бәләбәй өйәҙенең (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Благовар районы) Ҡарғалы ауылында тыуған. Усман Тереғоловтың ағаһы. 1910 йылда Ҡазан уҡытыусылар семинарияһында белем ала. 1916 йылда хеҙмәткә алынып, хәрби мәктәп тамамлай. Уға прапорщик званиеһы бирелә. 1918 йылдың йәйендә Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушылып китә. Июнь айында Зәки Вәлиди уны Башҡорт милли армияһы штабы – Башҡорт хәрби шураһының мобилизация бүлеге мөдире итеп тәғәйенләй. Ошо сифатта прапорщик Хәлил Тереғолов Башҡорт милли ғәскәрҙәрен ойоштороуҙа әүҙем ҡатнаша. Октябрь айында мобилизация бүлеге мөдире итеп подполковник Янишевский ҡуйыла, Х. Тереғолов уның ярҙамсыһы булып хеҙмәт итә.

Башҡорт ғәскәрҙәре ҡыҙылдар яғына сыҡҡандан һуң Тереғолов Стәрлетамаҡта Үҙәк Башҡорт дезертирлыҡҡа ҡаршы комиссия рәйесе булып эшләй. Һуңынан Ҡарғалыла уҡытыусы булып эшләй, 1931 йылда Дәүләкәнгә күсә. Хәлил Тереғолов 1937 йылдың 2 сентябрендә ҡулға алына, өс ай төрмәлә ултырғандан һуң 7 декабрҙә атыла. 1956 йылда реабилитациялана.

Солтангәрәй Бикмәев

Солтангәрәй Ғәтиәтулла улы Бикмәев батша армияһы подполковнигы. Беренсе донъя һуғышында ҡатнаша. 190-сы Очаков пехота полкы составында һуғыша. Яуҙа күрһәткән батырлыҡтары өсөн 1916 йылда 4-се дәрәжәләге Изге Георгий ордены менән бүләкләнә. 1917 йылда Өфө гарнизонында полк командиры булып хеҙмәт итә. 1918 йылдың йәйендә Башҡорт армияһы сафтарына алына. Башҡортостан автономияһы һәм Башҡорт милли армияһын ойоштороуҙы хуплаған Зәки Вәлидиҙең ышаныслы кешеһе булған, күрәһең, сөнки Зәки Вәлиди август айында Һамар хөкүмәте менән Айырым Башҡорт корпусын төҙөү тураһында һөйләшеп,

корпустың 2-се пехота дивизияһына командир итеп (алда ҡуйылған рус офицеры полковник Емельянов урынына) подполковник Бикмәевтең кандидатураһын тәҡдим итә. Һамар хөкүмәтенең Халыҡ армияһы командалығы быға ризалығын бирә. Ошо рәүешле Солтангәрәй Бикмәев 1918 йылдың 9 сентябрендә, Башҡорт хәрби шураһы фарманы менән, 2-се Башҡорт пехота дивизияһы командиры итеп тәғәйенләнә. Әммә уға ни сәбәптәндер был вазифаны башҡарырға тура килмәй. Артабан ул Ырымбур хәрби округы штабында Башҡорт хөкүмәтенең уполномоченныйы булып хеҙмәт итә. Башҡорт ғәскәрҙәрен төрлө кәрәк-яраҡтар менән тәьмин итеүгә әүҙем булышлыҡ итә. Полковник чинын ала. Октябрҙән Башҡорт ғәскәри идаралығы рәйесе урынбаҫары булып хеҙмәт итә. 1919 йылдың ғинуарында Зәки Вәлиди уны Башҡорт ғәскәрҙәре штабында үҙенең дежур обер-офицеры итеп тәғәйенләй. Февраль айында башҡорт ғәскәрҙәре ҡыҙылдар яғына сыҡҡан мәлдә аҡтар яғында ҡала.

1920 йылдың июненән Чита ҡалаһында Рәсәйҙең көнсығыш сиге казак ғәскәрҙәре атаманы генерал-лейтенант Семенов янында башҡорттарҙың Хәрби-милли идаралығы вәкиле булып хеҙмәт итә. 1920 йылдың көҙөндә Семеновтың армияһы ҡыйратылғас, полковник Бикмәев М. Ҡорбанғәлиев, Ғ. Таған менән Японияға сыға. Артабанғы яҙмышы билдәһеҙ.

Ҡасим Еникеев

Батша армияһының штабс-капитаны. 1918 йылдың йәйендә Башҡорт армияһы сафтарына күсә. 1918 йылдың йәйендә Ырымбурҙа 4-се Башҡорт пехота полкын ойоштороу менән етәкселек итә. Артабан ошо полктың командиры вазифаһында була. Подполковник званиеһын ала. 1918 йылдың икенсе яртыһында 1-се Башҡорт уҡсы дивизияһының ваҡытлыса начальнигы итеп тәғәйенләнә. Декабрь башында Башҡорт хөкүмәте ҡайһы бер казак етәкселәре менән Дутовты алып ташлау маҡсатында хәрби түңкәрелеш ойошторорға тырыша, ләкин килеп сыҡмай. Ҡазыхан Низаметдинов үҙенең автобиографияһында яҙыуынса, Ҡасим Еникеев Дутов яҡлы булып сыға һәм уға хәбәр итә. Шуға күрә Зәки Вәлиди уны вазифаһынан бушата. 1919 йылдың февралендә Еникеев аҡтар яғында ҡала. Артабанғы яҙмышы билдәһеҙ.

Полк муллалары һәм комиссарҙар

1918 йылда Башҡорт хөкүмәтенең Хәрби бүлеге башҡорт ғәскәрҙәрендә полк муллалары вазифаһын булдыра. Полк муллаларына дини йолаларҙы атҡарыуҙан тыш сәйәси комиссарҙар бурысы йөкмәтелә. Йәғни улар башҡорт һалдаттары араһында Башҡорт милли хәрәкәтенең идеологияһын үткәреү, Башҡорт хәрби шураһының фармандарын еткереү, бер һүҙ менән әйткәндә, Башҡорт хөкүмәтенең сәйәсәтен алып барыр-

ға тейеш була. Билдәле булыуынса, 1918 йылда башҡорт полктары Себер һәм Һамар хөкүмәттәренең ризалығы һәм матди ярҙамы менән ойошторола. Хәрби-оператив яҡтан башҡорт ғәскәрҙәре аҡтарға буйһондорола. Шуға күрә лә башҡорт ғәскәрҙәрендә полк муллалары институтын индереү эше еңелдән булмағандыр, күрәһең. Әммә башҡорт полктарына муллалар тәғәйенләүгә хоҡуҡи нигеҙ итеп казак частарындағы священниктар институты алына. Хәрби бүлек мөдире Зәки Вәлидиҙең 338-се фарманында былай тиелә: *«Духовные лица в Башкирских военных частях назначаются на тех же основаниях, на каких назначаются священники в казачьих частях, и получают жалование по штату, определяющему и жалование в размере отпускаемых священникам в казачьих частях».*

Был фарман 1918 йылдың август урталарына ҡарай. Әммә полктарға муллалар һуңыраҡ тәғәйенләнгәндәрҙер, күрәһең. Был хаҡта 1918 йылдың август айына ҡараған документтар осрамай. Ғөмүмән, ҡайһы башҡорт полкына кем мулла итеп ҡуйылған, уларҙың шәхесе тураһында тәғәйен генә мәғлүмәттәр юҡ. 1918 йылдың сентябрь урталарында милли хәрәкәт эшмәкәрҙәре Нуриәғзәм Таһиров, Фәтхелкадир Сөләймәнов һәм Сәйеттәрәй Мағазовтарҙың һалдаттар араһында аңлатыу эше алып барыу маҡсатында, мулла (асылда, сәйәси комиссар) итеп башҡорт полктарына ебәреүҙе һорап Зәки Вәлидигә мөрәжәғәт иткәнлеге билдәле.

1918 йылдың 1 октябрендә Башҡорт хәрби шураһы фарманы менән Нуриәғзәм Таһиров Аҡтүбә фронтында һуғышҡан 2-се Башҡорт уксы полкына мулла итеп тәғәйенләнә. Ә бына Ф. Сөләймәнов менән С. Мағазовтар хаҡында мәғлүмәт юҡ.

3 октябрь Башҡортостан Диниә назаратының мөдире (мөфтөйө) Сәғит Мерәсов Башҡорт хәрби шураһына ебәргән хатында:

«До сих пор, по не назначению полковых мулл в башкирские полки, сведений об убитых, раненых и пропавших без вести не получены. В последнее время, хотя муллы были назначены по полкам, но, по случаю трудности составления, сведения не исполнялись, поэтому необходимо назначить особого муллу, от которого можно было вытребовать всякие сведения», — тип яҙа. Ошоларҙан сығып, ул башҡорт ғәскәрҙәре өсөн дивизия йәки гарнизон муллаһын тәғәйенләүҙе кәрәк тип әйтә. Был вазифаға Башҡортостан Диниә назараты исеменән Хәбибулла Ғәбитовты тәкдим итә.

Башҡорт ғәскәри идаралығы рәйесе Зәки Вәлидиҙең ярҙамсыһы вазифаһын үтәүсе офицер Янышевскийҙан түбәндәге яуап килә: *«По приказанию Начальника Башкирского Войскового Управления сообщаю, что полковые муллы и муллы 1-й и 2-й дивизий назначены. Помимо их, никаких других назначений пока не требуется. Сведения об убитых и раненых командирами полков даются по команде строевому начальству и Воинским Начальникам для объявления родственникам, и в случае надобности таковые муллами могут быть получены через строевое начальство».*

Әлеге документтан күренеүенсә, 1918 йылдың октябрь башына Башҡорт корпусының ике дивизияһына һәм полктарына муллалар тәғәйен-

ләнгән булған. Бер айҙан, Башҡорт ғәскәри идараһы начальнигының 8 ноябрҙәге фарманында: *«...на полкового муллу 2-го Башкирского стрелкового полка Тагирова возлагаю исполнение обязанностей дивизионного муллы 1-й Башкирской стрелковой дивизии с 1-го октября с. г. с исполнением своих прямых обязанностей»*, — тиелгән.

Тимәк, Нуриәғзәм Таһиров 1918 йылдың октябренән дивизия һәм бер үк ваҡытта полк муллаһы вазифаларын башҡарған. Ошо уҡ фарман менән 5-се Башҡорт уҡсы полкынан 1-се Башҡорт кавалерия полкына күсерелгән Бәхтиәров фамилиялы мулла телгә алына.

1918 йылдың декабрь айына Башҡортостан хөкүмәте менән Колчак, Дутов араһында мөнәсәбәттәр ҡырҡыулаша. Сөнки Колчак милли хөкүмәтте бөтөрөргә, ә башҡорт полктарын Аҡ армия эсендә таратырға ҡуша. Зәки Вәлиди, ошо ҡатмарлы мәлдә, 1918 йылдың 14 декабрендә, йәшерен хат менән фронттағы полк муллалары Әбелхәйер мулла, Мөхәмәҙей мулла, Әбделнасир муллаға, дивизияһы муллаһы Нуриәғзәм Таһировҡа һәм офицер Ибраһим Исхаҡовҡа мөрәжәғәт итә. Унда милли хәрәкәт лидеры дөйөм сәйәси хәлде бәйән итә, фронттағы башҡорт полктарын Башҡортостанға туплау бурысын ҡуя. Муллалар Зәки Вәлиди ҡуйған бурысты теүәл үтәп сыға. Аҡ командованиеның ҡаршы булыуына ҡарамаҫтан, 1919 йылдың ғинуарына Башҡорт армияһының бөтә полктары ла (3-сө уҡсы полктан тыш) Башҡортостанға туплана.

Был, үҙ сиратында, 1919 йылдың февралендә, Башҡорт корпусына ойошҡан рәүештә ҡыҙылдар яғына сығырға мөмкинлек бирә. Апрель айында Саранский ҡалаһында элек Башҡорт корпусы ғәскәрҙәренән Ҡыҙыл Армияның Айырым Башҡорт бригадаһы ойошторола башлай. Ҡыҙылдар яғында элекке полк муллалары сәйәси комиссарҙар вазифаһын ала. Мәҫәлән, Хәлим Юлдашев хәрби комиссариат янындағы батальондың сәйәси комиссары итеп тәғәйенләнә. 1919 йылдың 18 майында Башвоенкоматтың түбәндәге фарманы донъя күрә:

«Ниже поименованных лиц допускаю к временному исполнению должностей политическими комиссарами при бригаде и полках впредь до утверждения их в этих должностях:
Тов. Амиров Халим — политкомиссар Отд. Башк. бригады;
Агишев Ахмадулла — политкомиссар 2-го стр. полка;
Буляков Абдулла — политкомиссар 1-го кав. полка;
Латыпов Нигамаджан — политкомиссар 2-го кав. полка;
Юлдашев Халим — политкомиссар Красного батальона при комиссариате».

1919 йылдың июлендә Башҡорт бригадаһы кавалерия дивизияһына әүерелгәндән һуң, Хәлим Әмиров урынына дивизия комиссары итеп, элекке Башҡорт корпусының дивизияһы муллаһы Нуриәғзәм Таһиров тәғәйенләнә. 2-се уҡсы полк комиссары Әхмәҙулла Ағишев дивизияның тәьминәт бүлеге комиссары итеп ҡуйыла. Х. Әмировҡа Башревкомдың башҡорт ғәскәрҙәрендәге махсус вәкиле бурысы йөкмәтелә.

«Троцкий беҙҙең ғәскәрҙәге эске тәртипкә хайран ҡала торғайны. Ғәскәри частарҙа тәртип тәьмин итеүсе полк «политкомиссарҙары» урынында беҙҙә элеккесә «полк муллаһы» барлығын

да ул белә ине. «Беҙ ҙә полктарға элеккесә поп тәғәйенләйекме икән әллә?» — тип шаяртып көлдө», — ти Зәки Вәлиди үҙенең хәтирәләрендә.

1919 йылдың йәйендә Бәләбәйҙә ойошторолған Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһына комиссар итеп Ғабдулла Ибраһимов ҡуйыла. Сентябрь айында Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы һәм уҡсы бригадаһы Юденичҡа ҡаршы Петроградҡа ташлана.

Октябрҙә Юденичҡа ҡаршы һуғышыу өсөн Айырым Башҡорт дивизияһы һәм бригадаһынан полктар бүленеп, Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмө ойоштороло (3-сө Башҡорт кавалерия полкы һәм 3-сө Башҡорт уҡсы полкының 3-сө батальоны). Төркөмдөң командиры Х. Әлишевтең докладынан күренеүенсә, уның комиссары итеп Әхмәҙулла Ағишев (һуңынан был вазифаны Ғәли Тереғолов биләй), 3-сө кавалерия полкының комиссары — Әбдрәшитов, ә 3-сө батальондың комиссары итеп Абдулла Бүләков тәғәйенләнгән.

Петроградта башҡорт ғәскәрҙәренең сәйәси бүлеге мөдире вазифаһын милли хәрәкәт эшмәкәре Һиҙиәт Сәғәҙиев башҡарған.

Шулай итеп, ҡыҙылдар яғына сыҡҡас, башҡорт ғәскәрҙәрендә полк һәм дивизия комиссарҙары вазифаһы элекке полк муллалары йәки милли хәрәкәт эшмәкәрҙәренә йөкмәтелә.

Был хәл Муса Мортазин етәкселек иткән Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһында ғына күҙәтелмәй, сөнки бригада ҡыҙылдар яғына 1919 йылдың авгусында ғына сыға. Баштан уҡ большевиктар тарафынан ҡаты контролгә алына. Улар бригадаға үҙ комиссарҙарын тәғәйенләй. Мәҫәлән, 1919 йыл Урал фронтында Башҡорт кавалерия бригадаһының комиссары Богуславский була. Артабан И. Беленький, Р. Гутман, Говицкий фамилиялы комиссарҙар булғанлығы билдәле. Уҡыусылар иғтибарына Башҡорт дивизияһының бер нисә комиссарының ҡыҫҡаса биографияһын тәҡдим итмәксемен.

Нуриәғзәм Таһиров

Нуриәғзәм Таһир улы Таһиров — Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте етәкселәренең береһе. Әйткәндәй, 2005 йылда миңә Н. Таһировтың улы Тойғон ағай Таһиров менән күрешеп әңгәләшеп ултырыу бәхете тейҙе. Нуриәғзәм Таһировтың тормошо тураһында байтаҡ мәғлүмәт алдым.

1888 йылдың 9 ғинуарында Ырымбур губернаһы Силәбе өйәҙенең (хәҙерге Силәбе өлкәһенең Арғаяш районы) Ҡужа (Ләүәш) ауылында тыуған. Атаһы Таһир мулла уны Мәтәл ауылындағы Рус-башҡорт мәктәбенә бирә. Һуңынан Мәүлит ауылы мәҙрәсәһендә уҡый. Артабан Троицкиҙағы атаҡлы «Рәсүлиә» мәҙрәсәһенә уҡырға инә. 1906 йылда илдәге революцион күтәрелеш тәьҫирендә, мәҙрәсә шәкерттәре митинг үткәрә. Митингыны ойоштороусыларҙың береһе булараҡ, полицияның эҙәрлекләүенән Силәбе ҡалаһына ҡаса. Артабан күскенселәр менән алыҫ Иркутскиға сығып китә. Күпмелер ваҡыттан Мансуров фамилияһын Басировҡа

үҙгәртеп, тыуған яҡтарына ҡайтып төшә. Артабан Ҡаҙағстанда мөғәллим булып йөрөй. 1908 йылда Өфөләге «Ғәлиә» мәҙрәсәһенә уҡырға инә.

1911 йылда, мәҙрәсәне тамамлағандан һуң Нуриәғзәм тыуған ауылына ҡайтып, унда атаһы ярҙамы менән йәҙит (яңыса ысул менән уҡытыу) мәктәбе аса. Төньяҡ-көнсығыш башҡорттары араһында билдәле ишан, йәҙитселеккә ҡаршы дин әһеле Ғәбиҙулла Ҡорбанғәлиев мосолман дине нигеҙҙәрен емерә, власҡа ҡаршы революцион идеялар тарата, тип Нуриәғзәмдең мәктәбен яптыра.

Ахырҙа, Н. Таһиров Силәбегә барып, уҡытыусы булып эшкә урынлаша. Әммә ишан уны бында ла һыйҙырмай. Ҡулға алыныуҙан ҡасып, Себер яҡтарына сығып китә. Өс йыл буйы, 1914 йылдан 1917 йылға тиклем, ситтә йөрөргә мәжбүр була.

1917 йылдың майында ғына Нуриәғзәм Таһиров тыуған яғына ҡайтып төшә. Тормоштоң әсеһен дә, сөсөһөн дә күреп өлгөргән, алдынғы ҡарашлы йәш мөғәллим яңы ойошоп килгән Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә, Башҡортостанға автономия яулау идеяһына бөтә күңеле менән бирелә. Ул июль айында Ырымбурҙа үткән I Башҡорт ҡоролтайына делегат итеп һайлана. Ҡоролтайҙан һуң Нуриәғзәм Таһиров Башҡорт мәркәз шураһына эшкә йәлеп ителә. Уны II Башҡорт ҡоролтайына әҙерлек эштәре менән тыуған яғына, Арғаяшҡа ебәрәләр. Бында ул ең һыҙғанып эшкә тотона.

1917 йылдың 25–29 августында Өфөлә үткән II Башҡорт ҡоролтайында уны милли хәрәкәт лидерҙары Шәриф Манатов, Зәки Вәлиди, Шәйехзада Бабич һәм Сәғит Мерәҫовтар менән бергә Башҡорт мәркәз шураһының яңы составына ағза итеп һайлайҙар. Өфөлә һәм Силәбелә шураның өлкә секретариаттарын булдыра. Силәбе секретариатының эшен алып барыу бурысы Нуриәғзәм Таһировҡа йөкмәтелә.

1917 йылдың 8–20 декабрендә үткән III Дөйөм Башҡорт ойоштороу ҡоролтайында Нуриәғзәм Таһиров Башҡортостан автономияһының Кесе ҡоролтайы (предпарламент) ағзаһы итеп һайлана. Ҡоролтай ваҡытында ул Шәйехзада Бабич, Хәбибулла Ғәбитовтар менән бергә, үҙ янына йәштәрҙе туплап, башҡорт мәҙәниәтен, әҙәбиәтен, телен күтәреүҙе маҡсат итеп ҡуйған «Тулҡын» исемле башҡорт йәштәренең әҙәби-ижади ойошмаһы төҙөй.

1918 йылдың ғинуар башында Башҡортостан автономияһына ҡаршы сығыш яһаусы Милли мәжлес (милли-мәҙәни автономия өсөн сығыш яһаған татарҙар ойошмаһы) менән һөйләшеүҙәр алып барыу өсөн башҡорт делегацияһы составында Н. Таһиров Өфөгә юллана. 5–11 ғинуарҙа Башҡортостан автономияһы вәкилдәре менән Милли мәжлестең берлектәге ултырыштарҙа ҡатнаша. Башҡорттар автономия мәнфәғәттәрен яҡлап сығыш яһай. Әммә улар Милли мәжлес менән бер фекергә килә алмай.

Бер үк ваҡытта хөкүмәт вәкилдәре ҡоролтайҙың ҡарарына ярашлы «Бәләкәй Башҡортостан» сиктәрендә 9 кантондан торған Башҡортостан автономияһын тормошҡа ашырыу эшенә тотона. Урындағы власть органдары кантон башҡармаларын ойоштора.

«Атайым төньяҡ-көнсығыш Башҡортостанда урынлашҡан Арғаяш, Дыуан-Ҡошсо һәм Ялан кантондарын ойоштороуҙа әүҙем ҡатнашҡан. 1918 йылдың 30 ғинуарында үткән Арғаяш кантонының съезында ул Ғәбделхәй Иркәбаев, Хафиз Ҡушаев, Ғариф Мөхәмәтйәровтар менән бергә кантон башҡарма комитетына һайланған булған, – тип һөйләй Нуриәғзәм Таһировтың улы Тойғон ағай Таһиров.

1918 йылдың 4 февралендә (яңыса 16 февраль) башҡорт халҡының үҙаллылығына йәне-тәне менән ҡаршы булған Мосолман хәрби-революцион комитеты Ырымбурҙағы Башҡорт хөкүмәте ағзаларын ҡулға алып, төрмәгә яба. Тойғон ағай һөйләүенсә, Н. Таһиров был ваҡытта кантондарҙа йөрөгән була. Ырымбурҙан хәбәр алыу менән Арғаяшҡа, үҙ яғына ҡайта. Уны кантон идараһы рәйесе итеп һайлайҙар. Зәки Вәлиди төрмәнән сығып Силәбегә килер алдынан был яҡтағы (Арғаяштың) йәш башҡорт зыялылары Башҡортостан автономияһын тергеҙеү өсөн ҙур эш алып бара. 1918 йылдың майында Силәбелә большевиктар ҡыйратылып, власть Чехословак корпусы ҡулына күскәс, Арғаяштағы башҡорттар, ҡоролтай йыйып, өс кешене чехословактарға вәкил итеп ебәрә.

Атайым, Сәғит Мерәҫов, Ғәбделхаҡ Ғәбитов чехословактар менән һөйләшә, улар башҡорттарға ярҙам итергә вәғәҙә бирә. Арғаяшта тиҙ арала ҡоролтай йыйылып, Силәбенең халыҡ власы эргәһендә Башҡорт шураһы (советы) булдырыу тураһында ҡарар ҡабул иткәндәр. Шураның ағзалары итеп Нуриәғзәм Таһиров, Сәғит Мерәҫов, Ғәбделхаҡ Ғәбитов, Тәки Ғисмәтуллин, Фәтхелҡадир Сөләймәнов һәм Ғариф Мөхәмәтйәровтар һайлана. Башҡорт шураһы ағзалары иртәгеһенә үк Силәбегә барып, тәү сиратта, ғәскәр туплау эшенә тотона. Шулай итеп, Башҡортостан хөкүмәте төрмәлә саҡта ла, милли хәрәкәттең эше һүнеп ҡалмай. Хөкүмәт бурыстарын Сәғит Мерәҫов, Нуриәғзәм Таһиров һәм Ғәбделхаҡ Ғәбитовтар үҙ иңенә һалған», – ти Тойғон Нуриәғзәм улы.

29 майҙа Силәбегә килгәс, Зәки Вәлиди Башҡорт хөкүмәтен тергеҙеү һәм дә чехословактар ярҙамында милли ғәскәр ойоштороу эшенә тотона. 1 июнь хөкүмәт исеменән мобилизация иғлан ителә. Таһиров Башҡорт хөкүмәтенең хәрби бүлегендә ойошторолған Башҡорт хәрби шураһы составына инә, йәғни тәүге башҡорт полктарын ойоштороу эшендә туранан-тура ҡатнаша. 1918 йылдың 13 июнендә Башҡорт хөкүмәтенең хәрби бүлеге төньяҡ-көнсығыш кантондарҙағы башҡорттарҙы милли армияға мобилизациялау тураһында 217-се фарман сығарһа, бер айҙан, 10 июлдә 288-се фарман менән дөйөм башҡорт халҡына мобилизация иғлан итә. Фарман Зәки Вәлиди, Сәғит Мерәҫов, Нуриәғзәм Таһировтар ҡултамғаһы менән тарала. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә башҡорт полктары ойошторолоп, улар ҡыҙылдарға ҡаршы һуғыштарҙа ҡаһарманлыҡ күрһәтеп тә өлгөрә. 2-се Башҡорт пехота полкының ике батальоны Екатеринбург ҡалаһын ҡыҙылдарҙан азат итеүҙә ҡатнаша. Ҡала халҡы башҡорт яугирҙарының хеҙмәтен юғары баһалай: ярым ай, йондоҙ менән биҙәлгән, «Доблестным освободителям – благодарный Екатеринбург» тип яҙылған, ебәктән тегелгән байраҡ бүләк итә. Бүләкте тапшырыу

тантанаһы 1918 йылдың 7 августында Силәбе ҡалаһында үтә. Тантанала Башҡорт хөкүмәте һәм Башҡорт хәрби шураһы исеменән һалдаттарҙы Нуриәғзәм Таһиров ҡотлай. Үҙенең сығышында борон милли-азатлыҡ көрәшенә күтәрелгән данлы ата-балаларыбыҙ — Салауат Юлаев, Ҡараһаҡалдарҙың батырлыҡтары хаҡында һөйләп үтә.

Н. Таһиров Башҡорт армияһында милли хәрәкәт идеяларын таратыу, милли идеологияны булдырыусы эшмәкәрҙәрҙең береһе була. 1918 йылдың 19 июнендә Башҡортостандың милли байрағы тураһындағы фарман аҫтында Башҡорт хөкүмәтенең урынбаҫары З. Вәлиди менән бергә, дөйөм эш буйынса сәркәтип булараҡ, уның фамилияһы ла тора. Артабан Нуриәғзәм Таһиров, тыуған яғына ҡайтып Арғаяш кантоны башҡармаһы рәйесе булып эшләй.

Ғәскәрҙәрҙә тәртип тотоу, һалдаттарҙың рухын күтәреү һәм, иң мөһиме, автономия өсөн көрәш тураһында аңлатыу эше алып барыу маҡсатында, Башҡорт армияһында полк муллалары институты индерелә. 1 октябрҙә Нуриәғзәм Таһиров 2-се Башҡорт пехота полкы муллаһы итеп тәғәйенләнә. Полк муллалары, дини йолаларҙы атҡарыуҙан тыш, сәйәси комиссарҙар ролен дә үтәй. Уларға большевиктарға ҡаршы һуғыштың маҡсатын, дөйөм сәйәси хәлде аңлатыу, хөкүмәттең фармандарын еткереү эше йөкмәтелә. 1918 йылдың 8 ноябрендә полк муллаһы Нуриәғзәм Таһировҡа тағы ла яуаплыраҡ вазифа йөкмәтелә — ул 1-се Башҡорт уҡсы дивизияһы муллаһы итеп тәғәйенләнә: *«...на полкового муллу 2-го Башкирского стрелкового полка Тагирова возлагаю исполнение обязанностей дивизионного муллы 1-й Башкирской стрелковой дивизии с 1-го октября с. г. с исполнением своих прямых обязанностей»*, — тиелә Зәки Вәлидиҙең фарманында.

Шулай итеп, Н. Таһировҡа 1918 йылдың көҙөндә башҡорт ғәскәрҙәрендә сәйәси-аңлатыу эше алып барыу бурысы һалына. Был ваҡытта Аҡтүбә фронты Башҡорт милли хәрәкәте өсөн ҙур сәйәси әһәмиәткә әүерелә. Тойғон Таһир улы:

«Башҡортостан хөкүмәте Ырымбурға ҡайтҡас, өс кеше, минең атайым, Фәтхелҡадир Сөләймәнов (Әбделҡадир Инан) һәм Сәйетгәрәй Мағазов (уларҙың бөтәһе лә мәҙрәсә тамамлаған, тимәк, бөтәһе лә мулла) беҙҙе ғәскәрҙәргә ебәрегеҙ, тип рапорт яҙғандар. Атайым Башҡорт хөкүмәте ҙур әһәмиәт биргән Аҡтүбә фронтына ебәрелә. Бында башҡорт ғәскәрҙәренә ҡыҙылдарҙы тармар итеп Төркостандың советтарға ҡаршы көстәре менән ҡушылырға тигән маҡсат ҡуйылған була. Ләкин советтар өҫтәмә көстәр ташлап беҙҙең ғәскәрҙәргә Төркостанға сығырға мөмкинлек бирмәгән», — тип һөйләне.

Тарихсы Марат Ҡолшәрипов билдәләүенсә, Орск янынан Ҡаҙағстан территорияһына сигенгән частар иҫәбенә Аҡтүбә фронтында ҡыҙылдарҙың хәле нығына. Икенсенән, Колчак генералдарының Башҡортостан автономияһын бөтөрөүгә йүнәлтелгән сәйәсәте башҡорт һалдаттарының рухын төшөрә.

1918 йылдың 18 ноябрендә адмирал Колчак власты үҙ ҡулына алып, үҙен «Рәсәйҙең юғары хакимы» тип иғлан итә. Башҡортостан автономияһының бөтөрөлөүен, башҡорт ғәскәрҙәренең тулыһынса үҙ генералдарына буйһондоролоуын талап итә. Әммә Башҡорт хөкүмәте был фарманға ҡолаҡ һалып бармай. Зәки Вәлиди башҡорт ғәскәрҙәре менән етәкселекте үҙ ҡулына ала һәм уларҙы бер урынға туплай башлай. Вәлидиҙең ышаныслы көрәштәштәре, И. Исхаҡов (полк командиры) менән Н. Таһиров, 2-се Башҡорт уҡсы полкын бер ҡыйынлыҡһыҙ Аҡбулаҡ фронтынан Башҡортостанға алып ҡайта.

Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, Нуриәғзәм Таһиров Башревкомға кандидат итеп һайлана. 1919 йылдың яҙында Ҡыҙыл Армия сигенеү айҡанлы, Башревком Саранскиға күсерелә. Һәм ошонда элеккеләре тәртипкә килтерелеп, яңы полктар ойошторола башлай. Улар Айырым Башҡорт бригадаһын тәшкил итә. *«Саранскиҙа гәскәри частарҙы тәртипкә килтереү эше тамамланмағайны әле. Шуға ҡарамаҫтан, Совет «Хәрби инҡилап шураһы» (Реввоенсовет, рәйесе Троцкий) 10 июндә был гәскәрҙәрҙең ойошторолғандарын Украина фронтында (Көньяҡ фронт.* — А. Я.*) һуғышҡан 14-се армия ҡарамағына ебәреү хаҡында миңә әмер бирҙе. Был гәскәрҙең әҙерлек эше тамамланмағанлыҡтан фронтҡа ебәреү ваҡытын бер ни тиклем кисектереү өсөн байтаҡ тырыштым. Ләкин Троцкийҙы, айырыуса уның урынбаҫары Вацетисты күндерә алманым, гәскәрҙәрҙе ебәрергә мәжбүр булдыҡ»*, — тип яҙа Зәки Вәлиди үҙенең хәтирәләрендә.

Шулай итеп, Башҡорт бригадаһы генерал Деникиндың армияһына ҡаршы һуғышҡа ебәрелә. 1919 йылдың июлендә Башҡортостандан килгән частар менән тулыландырылып, Көньяҡ фронттағы бригада Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы кимәленә үҫтерелә. Дивизияның сәйәси комиссары итеп Нуриәғзәм Таһиров тәғәйенләнә (дивизияның командиры А. Ахлов). Шулай итеп, аҡтар яғында полк муллаһы, артабан дивизия муллаһы вазифаһын үтәгән Н. Таһировҡа, хәҙер инде тағы ла шундай уҡ бурыс йөкмәтелә. Килешеү буйынса, башҡорт ғәскәрҙәре Колчакка ҡаршы һуғышыр урынға, алыҫ Украинала «революция ҡаҙаныштарын» яҡлап Совет власы өсөн ҡан ҡойорға мәжбүр була. Башҡорт дивизияһы фронттың иң ауыр ерҙәренә ташланып, байтаҡ юғалтыуҙар кисерә. Сәйәси комиссар булараҡ Нуриәғзәм Таһировҡа был һуғыштың маҡсаттарын һалдаттарға төшөндөрөү еңелдән булмағандыр, ахыры. Быны сәбәптәрен Башревком да башҡорт ғәскәрҙәренә аңлатырға тырышып, былай тип яҙа: *«...Переброска Вас на Юг явилась как бы испытанием, экзаменом революционности, верности башкир, и этот экзамен башкирские красноармейцы и весь башкирский народ в Вашем лице, товарищи, блестяще выдержал...»*

Әммә Совет власы алдында ауыр юғалтыуҙар аша «тоғролоҡҡа имтихан» тотҡан башҡорт ғәскәрҙәренең көрәштәре алда була әле. 1919 йылдың көҙөндә Совет етәкселеге революцияның бишеге — Петроградты Юденич ғәскәрҙәренән ҡурсалау тигән тағы бер яуаплы «имтихан»

йөкмәтә башҡорттарға. Шулай итеп, Нуриәғзәм Таһиров етәкселек иткән Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы бер һуғыштан икенсеһенә ташлана. Тыуған иленә ҡайтырға өмөт иткән һалдаттарҙың рухы бөтөнләй һүнеп ҡала. Икенсенән, большевиктар башҡорттарға автономия бирмәйәсәк тигән провокацион хәбәрҙәр таратыла. Ошо сәбәпле Харис Йомағолов дивизия комиссары Нуриәғзәм Таһировҡа былай тип яҙа:

«Дорогой тов. Тагиров Нур-Агзам!

Шлю Вам и всем тов. красн.-башкирам, находящимся в Петрограде, от имени Воен.-Рев.-Ком. Баш. Сов. Рес. горячий и сердечный привет!!!

Затем, тов. Нур-Агзам, сообщи, всем тов. башкирам-красн., как находящимся в настоящее время в Петрограде, так и вновь прибывающим с востока и юга в Петроград, следующее:

Президиум Всеросс. Центр. Исп. Ком. Сов. Раб. Крест. Красноар. и Казачих депутатов постановил назначить комиссию для решения вопроса о создании власти в Сов. Башкирии, в эту комиссию, по вызову Президиума ВЦИК, от имени Воен. Рев. Ком. Баш. Сов. Рес. в Моск. прибыл я (Юмагулов) и Ф. Тухватуллин. Эта комиссия устроила заседание 15 сентября, где была принята резолюция, которая является теперь постанов. ВЦИК и как таковая объявлена в «Известиях ВЦИК» за № 206 от 17 сентября...

Итак, тов. Нур-Агзам, наконец-то Башкирия стала автономной Крас. Сов. Башкирией.

Сообщи всем-всем красн.-башкирам!!! Пусть не поддаются провокации!!!

Нур-Агзам! По некоторым сведениям наших кр.-ар., в Белебее настраивались против нас, т. е. Ревкома и Б.С.Р. и против Советов, так прими меры, чтобы рассеять лживые, провокационные слухи кр.-ар. Прочти постановление ВЦИК, наши приказы и обращ.»

1919 йылдың сентябрендә Бәләбәйҙән Петроградҡа Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы, бер кавалерия полкы һәм Айырым Башҡорт артиллерия дивизионы килә. Башҡорт кавалерия дивизияһы менән бергә Петроградта 10 меңлек башҡорт ғәскәрҙәре туплана. Улар Петроград фронтының Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмөн тәшкил итә. Дивизия комиссары Нуриәғзәм Таһиров, башҡорт ғәскәрҙәрен башҡорт сәйәси кадрҙары менән тәьмин итеү буйынса ҙур эш башҡара. Уның юллауы буйынса, Мәскәүҙә Я. М. Свердлов исемендәге Коммунистик университетта уҡыған башҡорт курсанттары Петроградтағы башҡорт ғәскәрҙәрендә төрлө етәксе вазифаларына тәғәйенләнә. Мәҫәлән, Һиҙиәтулла Сәғәҙиев — Башҡорт кавалерия дивизияһының сәйәси бүлеге мөдире, Ғабдулла Ибраһимов Башҡорт уҡсы бригадаһы комиссары итеп ҡуйыла. Бынан тыш Н. Таһировтың тырышлығы менән Петроградта башҡорт ғәскәрҙәренең «Салауат» исемле гәзите сығарыла башлай.

Совет хөкүмәте, Юденич армияһын тар-мар итеүҙәге хеҙмәттәре өсөн, башҡорт яугирҙарын юғары баһалай. Күптәр төрлө ҡиммәтле бү-

ләктәр, алтын сәғәт, почетлы ҡорал, РСФСР-ҙың Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградлана. РСФСР Хөкүмәте Нуриәғзәм Таһировтың да хеҙмәттәрен айырым билдәләп үтә. Михаил Калинин уға, ВЦИК исеменән рәхмәт белдереп, ҡиммәтле эйәр бүләк итә. «Был эйәрҙе мин бик яҡшы хәтерләйем. Ялтырап торған һары күндән ине. Аҫтына һала торған күк төҫтәге түшәгенең мөйөштәренә көмөш йондоҙҙар һүрәтләнгән. Түшәк менән бергә эйәр бик тә матур күренә ине. Атайым ҡулға алынғандан һуң да ул эйәр беҙҙә һаҡланды. Эйәрҙе һатығыҙ, тип һорап килгән кавалерист командирҙар күп булды. Әммә әсәйем уны бер кемгә лә бирмәне. Тик матди хәлебеҙ ауырлашҡас ҡына, атайымдың был ҡомартҡыһын һатып ебәрергә мәжбүр булды. Ҡыҙыл Армия йортоноң (хәҙерге Офицерҙар йорто) фойеһында атайымдың ҙур портреты торҙо. Ул унда атҡа атланған килеш төшөрөлгән ине. Картина атайымды ҡулға алғандан һуң да оҙаҡ ҡына ваҡыт торҙо. Беҙ ағайым менән һәр ваҡыт инеп ҡарай торғайныҡ», – тип хәтерләй Тойғон Нуриәғзәм улы.

Н. Таһиров Петроградтан башҡорт ғәскәрҙәре менән фин сигенә күсерелә, һәм бында һыуыҡ тейҙереп ауырып китеү сәбәпле Башҡортостанға ҡайта. 1920 йылдың мартында Башревком ҡарары менән ул Арғаяш кантонының ревкомы рәйесе итеп раҫлана.

Ләкин 1920 йылдың майында Үҙәк совет власы Башҡортостандың автономия хоҡуҡтарын бөтөргән декретын сығара. Быға ҡаршы протест белдереп, башҡорт етәкселәре эштәрен ташлап сығып китә. «Атайым Урта Азияға китеп барғанда Ҡаҙағстанда ҡаты сирләй. Өс ай буйы ауырып ята. 1921 йылдың башында ғына Ташкентҡа бара. Бында ул Сәйетгәрәй Мағазов, Илдархан Мутиндар менән күрешә. Унан Бохара республикаһына бара. Уны урындағы мәғариф бүлегенә мөдир итеп тәғәйенләйҙәр. Тиҙҙән үҙ янына И. Мутинды ала. Шунан бер мәл Бохара янындағы бер ҡышлаҡта Зәки Вәлиди башҡорт эшмәкәрҙәрен йыя. Унда ул Совет власына ҡаршы көрәш өсөн көс туплау мәсьәләһен ҡуя. Уға хәҙер инде советтарға ҡаршылыҡ күрһәтеү файҙаһыҙ тип, күптәр ҡаршы төшә. Шуға ҡарамаҫтан, Зәки Вәлиди уларға бурыстар йөкмәтә. Өс кеше – атайым, С. Мағазов, И. Мутинға Ҡаҙағстанға барып ғәскәр туплау тигән бурыс ҡуйыла. Бының менән риза булмай улар. Атайым Ташкентҡа барып Харис Йомағолов менән бәйләнешкә инә. Х. Йомағолов Башҡортостанға ҡайтығыҙ, тип кәңәш итә. Шунан Илдархан Мутин менән атайым ҡайтып төшә», – тип һөйләй Тойғон ағай.

Нуриәғзәм Таһиров 1921 йылдың июнендә Стәрлетамаҡҡа килә. Советтарҙың II Бөтөн башҡорт съезында ҡатнаша. Республиканың Халыҡ мәғарифы комиссариаты коллегияһы ағзаһы итеп тәғәйенләнә. Артабан башҡорттарҙың көнкүрешен, тарихын, телен һәм мәҙәниәтен өйрәнеү буйынса йәмғиәт рәйесе (хәҙерге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының башланғысы) вазифаһын башҡара. 20-се йылдарҙа Нуриәғзәм Таһиров тел, мәғариф өлкәһендә уңышлы эшләй. Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ тормошҡа ашырыу, әҙәби телдең ҡанундарын, төрлө нормаларын билдәләү буйынса ҙур эш башҡара. 1924 йылда ул «Баш-

ҡортса эш йөрөтөү өсөн ҡулланма һәм үрнәктәр» исемле йыйынтыҡ төҙөп сығара. Шул уҡ йылды Хәбибулла Ғәбитов менән берлектә төҙөгән «Башҡортса яҙыу ҡоралы» тигән ҡулланмаһы донъя күрә. Бынан тыш халыҡтың һөйләү теле материалы нигеҙендә төҙөлгән «Башҡорт лөғәте» (1926 йыл) һәм ҡыҫҡа орфографик һүҙлек баҫтырып сығара. Башҡорт теленең тәүге грамматикаһы авторҙарының береһе була. Шулай итеп, Нуриәғзәм Таһиров Башҡортостан дәүләтселегенең, башҡорт халҡының яҡты киләсәге өсөн янып, бөтөн булмышы менән уға хеҙмәт итә.

«Зәки Вәлидиҙең Башҡортостанда ҡалған ҡатыны Нәфисә Өфөгә килеп йәшәгән, атайым, әсәйемдәр менән аралашҡан. Бер мәл ул йәшеренеп кенә Өфөнән Мәскәүгә китә. Сит илгә сығырға уйлай. Бында уның юҡлығын белгән ОГПУ, атайымды саҡыртып, Зәки Вәлидиҙең ҡатыны ҡайҙа, тип һорау ала. Атайым белмәгәс, ебәрәләр. Ул, Нәфисә ханымды ОГПУ эҙләй, тип үҙ таныштары араһында һөйләй. Ошо һүҙен бер кеше (осведомитель) ОГПУ-ға алып барып еткерә. Атайымды Башҡортостандан ҡыуалар. Ул Ҡазанда адвокат булып эшләй. Унан ҡайтҡас, 1927 йыл атайымды ОГПУ үҙенең осведомителе итергә тырыша. Ул һеҙгә ошаҡсы булып йөрөмәйем, тип тураһын бәреп әйтә. Уны тағы Башҡортостандан бер йылға ҡыуып ебәрәләр. Урта Азияла йәшәп, 1928 йылда ҡайтып төшә. Адвокат булып Главсудта эшләй. Әммә бер йылдан, 1929 йылдың йәйендә, атайымды ҡулға алдылар. Биш йәшлек кенә булһам да, атайымды ҡулға алғандарын яҡшы хәтерләйем. Иртә таң ине шикелле. Беҙҙең өйҙөң коридорында ҡараңғы ине. Әсәйем һеңлемде ҡулында тотҡан, ағайым баҫып тора. Ниндәйҙер сит кешеләр атайым менән бергә уның кабинетына инделәр. Күпмелер ваҡыт үткәс, теге кешеләр сығып, үҙҙәре менән ҡуша атайымды ла алып киттеләр. Китер алдынан атайым әсәйемә: «Әйшүк, һин балаларҙы йоҡларға һал. Бер яңылышлыҡ килеп сыҡҡандыр. Мин иртән таң атҡас ҡайтырмын», — тип сығып китте. Әсәйемдең исеме Ғәйшә. Атайым уны «Әйшүк» тип йөрөтә ине. Уны ОГПУ бинаһының подвалында тоттолар, хәҙерге Гоголь менән Коммунистик урамдарының мөйөшөндә булды. Ул бина әле лә тора. Аҙаҡ Гоголь урамының осондағы төрмәгә күсерҙеләр. Әсәйем мине төрмәнең ҡаршыһындағы йорттоң эскәмйәһендә ҡалдыра ине. Шул ерҙән мин атайыма ҡарап ултыра инем. Ул ултырған камераның тәҙрәләре асыҡ, атайым тәҙрә төбөндә ултыра. Янында радиоприемник, наушниктар менән. Яҙышҡан ҡағыҙҙары ята. Ул саҡта сәйәси тотҡондарға мөнәсәбәт башҡасараҡ, яҡшыраҡ булған, күрәһең. Әсәйем туҡтап һөйләшеп торорға ҡурҡа ине, шуға эргәнән былай-тегеләй үтеп кенә йөрөй. Әсәйем ағайым менән күп тапҡырҙар атайыма барып йөрөнөләр, әммә уларҙы индермәнеләр», — ти Тойғон ағай.

Нуриәғзәм Таһиров нахаҡҡа ғәйепләүҙәренә протест белдереп, аслыҡ иғлан итә. 11 көндән һуң аяҡтан йығылғас, уны камеранан төрмә дауаханаһына носилка менән алып сығалар. «Мине төрмәнең дауаханаһына, атайым янына индерҙеләр. Ул карауатта ята ине. Йөҙө ап-аҡ ине», — тип хәтерләй Тойғон Таһиров.

ОГПУ-ның коллегияһы Нуриәғзәм Таһировты төрмәгә ултыртырға тигән ҡарар сығара. Именлек органдарын тикшереүсе прокурор, Н. Таһиров советтарға ҡаршы пропаганда алып барған тип, был ҡарарҙы үлем язаһы менән, йәғни атырға тигән хөкөм ҡарары менән алмаштыра. «Әсәйем Сталинға хат яҙа. Ләкин уның хаты Башҡортостандан сыҡмай. Икенсе хатын таныштары аша Мәскәүгә ебәртә. Уныһы ла Башҡортостанға кире ҡайта. Архивта күрҙем ул хатты. Ахырҙа, әсәйем үҙе Мәскәүгә барып Калининды күрә. Атайымдың үлем язаһы ҡарары 10 йыл төрмә менән алмаштырыла. Нисектер Өфө төрмәһенән атайымдың ҡалын ҡулъяҙма дәфтәрен алып сыҡтылар. Ваҡ ҡына итеп ғәрәп хәрефтәре менән яҙылған ине. Ошо дәфтәрҙе 1937 йылда әсәйем менән еңгәм төндә аҙбарға инеп, һәр бер битен йыртып яндырҙылар. Унда нимә тураһында яҙылған булғандыр, белмәйем», – ти Тойғон ағай.

Күрәһең, Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте тарихы тураһындағы ҙур бер китап булғандыр. Н. Таһировты 1930 йылдың ғинуарында этап менән алып китәләр. Лагерҙарҙа 8 йыл буйы йөрөп ҡайта. 1938 йылдың көҙөндә Өфөгә килеп, күп тә тормай, тыуған яғы Арғаяшта була ла, Урта Азия яҡтарына сығып китә. «Мин иҫләүемсә, атайымдың Ҡырғыҙстандан бер-ике хаты килгәйне. Ул аҡса ла ебәргән, тип әйтә ине еңгәм. Шунан һуң хәбәр булманы», – тип хәтерләй Тойғон Нуриәғзәм улы.

Н. Таһировтың ғаиләһенә лә яҙмыштың ауыр өлөшө төшә. Ире төрмәгә киткәндән һуң, Ғәйшә Таһирова өс балаһы менән ҡала. Ун йыл тирәһе ҙур ҡыйынлыҡ менән Өфөлә көн итә улар. 1940 йылда сараһыҙлыҡтан Тажикстанға, һеңлеһе янына сығып китә. 1942 йылда 16 йәшлек ҡыҙы ауырып үлеп китә. Өлкән улы фронтта һәләк була. Өфөлә ҡалған улы Тойғон 1942 йылда әсәһе янына Тажикстанға бара. Бер айҙан һуғышҡа алып китәләр. Һуғыштан йөрөп ҡайтҡас, Тойғон Нуриәғзәм улы әсәһе янына китә. Тормоштоң ауырлыҡтары, иренең, ҡыҙының, өлкән улының үлемен кисергән Ғәйшә Таһирова 46 йәшендә генә вафат була. Тойғон Таһиров Тажикстанда ҡалып, ғүмер буйы тыуған яғынан ситтә йәшәй. Тик 1995 йылда, 71 йәшендә генә, Башҡортостанға ҡайтып төшә.

Нуриәғзәм Таһиров – Башҡорт милли хәрәкәте етәкселәренең береһе, Башҡортостанға үҙаллылыҡ яулау идеяһы менән янып йәшәгән, уны тормошҡа ашырыуҙа бик күп эштәр башҡарған. Ҡулына ҡорал алып та, ҡәләм менән дә Башҡортостан дәүләтселегенә өсөн көрәшкән. Ошо эшмәкәрлегенә өсөн унар йыл ғүмерен лагерҙарҙа үткәргән, ахырҙа, ҡорбан булған, һәйкәлгә лайыҡ шәхестәребеҙҙең береһе ул.

Хәлим Әмиров

Хәлим Насретдин улы Әмиров – Башҡортостан автономияһы өсөн көрәштә әүҙем ҡатнашҡан, төньяҡ-көнбайыш башҡорттарынан сыҡҡан милли хәрәкәт эшмәкәрҙәренең береһе. Ул 1894 йылда Өфө губернаһы Бөрө өйәҙенең Уран ырыуы башҡорттарына ҡараған Яңы Уртауыл ауылында (бөгөнгө Башҡортостан Республикаһының Яңауыл районы) тыуған.

Архив документтарынан күренеүенсә, Хәлим Әмиров Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә 1918 йылда ҡушылған. Әммә 1917 йылдағы Башҡорт ҡоролтайҙарында Бөрө өйәҙе башҡорттарынан делегат буларак ҡатнашыуы бик мөмкин. Х. Әмиров 1918 йылдың йәйендә Ырымбурҙа Башҡорт хөкүмәтенә эшкә алына. Уны хөкүмәттең мәғариф бүлеге мөдире урынбаҫары итеп тәғәйенләйҙәр. Башҡортостан автономияһының урындағы власть органдары – кантон башҡармалары янындағы мәғариф бүлектәрен ойоштороу менән шөғөлләнә.

1919 йылдың февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәренең Совет власы яғына сығыуы һәм артабан Башҡортостан автономияһының революцион хөкүмәтен ойоштороу ваҡиғаларында әүҙем ҡатнаша. 16 февралдә ул Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәренең Совет власы яғына сығыу тураһында фарманды иғлан итеү өсөн, Башҡорт корпусы штабынан особоуполномоченный сифатында Таналыҡ-Баймаҡ заводына (хәҙерге Баймаҡ ҡалаһы) ебәрелә. 21 февраль көнө Темәс ауылында үткән I Бөтә Башҡорт хәрби съезында ҡатнаша, делегаттар алдында сығыш яһай.

1919 йылдың мартында Х. Әмиров Башҡортостандың Халыҡ мәғарифы комиссариатының башҡарма органы – Коллегияһы ағзаһы итеп раҫлана. Әммә уға мәғариф өлкәһендә эшләргә насип булмай. 1919 йылдың яҙында аҡтар яғынан һөжүмгә күсеү сәбәпле, Башревком Темәс ауылынан Мораҡҡа, Иманғолға (хәҙерге Ырымбур өлкәһе), артабан Һамар ҡалаһына эвакуациялана. Май аҙағында Саранск ҡалаһына барып төпләнә.

Бында элекке башҡорт ғәскәрҙәренән ике кавалерия һәм ике уҡсы полктары ойошторола башлай. Полктар Айырым Башҡорт бригадаһына берләштерелә. Башҡорт республикаһының хәрби комиссары Зәки Вәлиди бригаданың сәйәси комиссары итеп Хәлим Әмировты тәғәйенләй. Башҡорт ғәскәрҙәре Көнсығыш фронтҡа барып, йәғни Башҡортостанға ҡайтып, Колчак армияһына ҡаршы һуғышырға тейеш була. Ләкин 1919 йылдың июнендә Украинала Ҡыҙыл Армияның хәле мөшкөлләнеү сәбәпле, Троцкий Саранскиҙағы башҡорт полктарын Көньяҡ фронтҡа, Деникин армияһына ҡаршы ебәрә.

Әле аҙағынаса ойошторолоп бөтмәгән, хәрби кәрәк-яраҡтар менән тейешенсә тәьмин ителмәгән башҡорт полктары Харьков ҡалаһына юллана. Хәлим Әмиров сәйәси комиссар һәм Башревкомдың особоуполномоченныйы сифатында ғәскәр менән китә. Бында башҡорт ғәскәрҙәре килеп төшөү менән генерал Деникиндың армияһы менән ҡаты һуғышҡа инә. Ҡыҙылдарҙың 14-се армияһы тулыһынса тарҡалып, тәртипһеҙ рәүештә сигенеүе, улар менән идара иткән Харьковтың Оборона Советының аҡтарға һатылыуы арҡаһында Башҡорт бригадаһына ауыр юғалтыуҙар кисерергә тура килә. Фронт тотҡан күрше ҡыҙыл частарҙың сигенеүе арҡаһында, күп осраҡта башҡорт ғәскәрҙәренә аҡтарҙың ҡамауында ҡала. Уның өҫтәүенә, Харьковтың аҡтар ҡулына күсеүендә башҡорттарҙы ғәйепләп, Оборона Советы Сумы ҡалаһында Башҡорт бригадаһының штабын, шул иҫәптән Х. Әмировты ҡулға ала. Бындай хәл башҡорт ғәскәрҙәрендә ҙур ризаһыҙлыҡ тыуҙыра. Башҡорт һалдат-

тары ҡулға ҡорал алып, командирҙарын ҡотҡарырға әҙер була. Быны күреп, Оборона Советы башҡорт командирҙарын ирекҡә сығарырға мәжбүр була. Бына ошондай һынауҙар аша үтергә тура килә Көньяҡ фронтта Башҡорт бригадаһы һәм уның комиссары Х. Әмировҡа.

1919 йылдың июль башында Көньяҡ фронтҡа хәрби комиссар Зәки Вәлиди килә. Бында яңы килгән һалдаттар командирҙар менән тулыландырылып, Башҡорт бригадаһы Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы тип үҙгәртелә. Ул дивизияның сәйәси комиссары итеп Нуриәғзәм Таһировты тәғәйенләй. Ә Хәлим Әмиров Саранскиға, Башревком ҡарамағына ҡайтарыла.

1919 йылдың сентябрендә Петроград фронтындағы Ҡыҙыл Армия ғәскәрҙәренең хәле мөшкөлләнә. Юденич армияһы, ҡыҙылдарҙы ҡыйрата барып, революцияның бишеге – Петроград ҡалаһына яҡынлаша. Ҡыҙыл Армияға ярҙамға тағы ла һуғышсан, дисциплиналы башҡорт ғәскәрҙәре кәрәк булып сыға. Ленин менән Троцкий бөтә башҡорт ғәскәрҙәрен тиҙ арала Петроградҡа ебәрергә тигән фарман бирә.

Сентябрь айында Бәләбәй ҡалаһынан өс полктан торған Айырым Башҡорт бригадаһы һәм тағы бер кавалерия полкы, артиллерия дивизионы, Көньяҡ фронттан Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы полктары Петроградҡа килә. Бында 10 меңдән ашыу башҡорт яугиры туплана. Улар Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмөн тәшкил итә.

Хәлим Әмиров Башҡорт республикаһының башҡорт ғәскәрҙәрендәге особоуполномоченныйы сифатында киң хоҡуҡтар менән Петроградҡа ебәрелә. Уға ғәскәрҙәрҙә сәйәси эш алып барыу, улар менән сәйәси яҡтан идара итеү һәм ойоштороу бурыстарын атҡарыу бурысы йөкмәтелә. Петроградҡа килеү менән Х. Әмиров башҡорт ғәскәрҙәрендәге сәйәси комиссарҙар составына иғтибарҙы йүнәлтә. Ул башҡорт ғәскәрҙәрен башҡорт комиссарҙары менән тулыландырыу мәсьәләһен алға ҡуя. Ошо айҡанлы Мәскәүҙә, ВЦИК янындағы Башҡорт республикаһы вәкиле Әбдрәшит Бикбауов 1919 йылдың 29 октябрендә Башҡортостандың Хәрби эштәр буйынса комиссариатына былай тип хәбәр итә: *«Настоящим сообщаю требование особоуполномоченного по делам башкирских частей в Петрограде т. Амирова о замене во вверенных ему башкирских частях ответственных работников небашкир башкирами-курсантами, необходимой для создания могущественной башкирской армии и для ее воспитания в зависимости (с учетом) бытовых и исторических особенностей нашего народа, а также подтверждаю его настойчивую просьбу об откомандировании в Петроград московских курсантов тт. Магасумова, Баталова, Абсалямова, Ишкаева и Дюкасова на полковые комиссарские должности и еще десять человек на менее ответственные должности...»* Ә. Бикбауов та Хәлим Әмировтың фекерен ҡеүәтләй: «Побывав в Петрограде, лично убедился, что удовлетворение просьбы Амирова крайне необходимо», – тип тамамлай ул үҙенең телеграммаһын.

Хәлим Әмиров Петроградтағы ғәскәрҙәр араһында Башҡорт автономияһы етәкселегенең сәйәсәтен алып барыусы, Башҡорт милли-азатлыҡ

хәрәкәте мәнфәғәтен алға һөргән, пропагандалаған эшмәкәрҙәрҙең береһе була. Мәҫәлән, Петроградта башҡорт ғәскәрҙәренең I Коммунистик конференцияһында «Башҡорт хәрәкәте» тигән доклад менән сығыш яһай. Трибунаға сығып: *«Мәскәүҙә йыйыласаҡ II Мосолман коммунистарының съезында мөһим мәсьәләләрҙең араһында, татар-башҡорт мәсьәләһе алдыбыҙҙа тора. Был мәсьәлә хаҡында беҙҙән вәкил булып барасаҡ иптәштәргә ҡыҫҡаса ғына материал булһын тигән уйы менән башҡорттарҙың был һуңғы 1917 йылдан башлап революцион хәрәкәттәре хаҡында һөйләмәксе булам»*, – тигән һүҙҙәр менән башлап Башҡортостан автономияһы өсөн көрәштең тарихына туҡталып китә, уның маҡсаттарын асып һала. Әйткәндәй, аҙаҡ Әмировтың был докладын, 1920 йылдың февралендә, Башҡорт ғәскәрҙәренең Совет власы яғына сығыуына бер йыл тулыу айҡанлы сығарылған «Бәхет көнө» исемле альбом-йыйынтығында баҫылып сыға.

Юденич армияһы тар-мар ителгәндән һуң, Башҡорт кавалерия дивизияһы Новгород губернаһына, ә Башҡорт уҡсы бригадаһы полктары Финляндия сигенә күсерелә. Х. Әмиров 1920 йылдың февралендә Башҡортостанға ҡайта. Бында ул Башҡортостан Халыҡ мәғарифы комиссариаты коллегияһы ағзаһы итеп, элекке вазифаһына тәғәйенләнә. Республикаға ҡайтҡас, Х. Әмировтың эшмәкәрлеге мәғариф өлкәһе менән генә сикләнмәй. Башревком уға тағы ла яуаплы бурыстар йөкмәтә.

1920 йылдың мартында Башҡортостан автономияһына ҡаршы булған кешеләрҙән торған РКП(б)-ның Үҫәргән кантоны комитеты (Ырымбур губкомының йәшерен бойороғо буйынса), Башревкомдың рөхсәтенән тыш, кантондың Советтар съезын үткәреп, яңынан кантревком һайлай. Съезд тураһында башҡорт ауылдарына әйтелмәй, делегаттар күпселек урыҫ ауылдарынан йыйыла. Әҙселекте тәшкил иткән башҡорт делегаттарын ҡорал менән ҡурҡытып, съезда Башҡортостанға ҡаршы ҡарарҙар ҡабул ителә, Башревкомға буйһонмаҫҡа саҡырған сығыштар була. Кантон башҡарма комитетына автономияға ҡаршы кешеләр һайлана. Кантон үҙәге Ейәнсура ауылына Чеботаревка исемле урыҫ ауылына күсерелә. Бер һүҙ менән әйткәндә, Үҫәргән кантонында власть фетнәселәр ҡулына күсә.

Башревком Үҫәргән кантонындағы ваҡиғалар тураһында хәбәр алыу менән Хәлим Әмиров, Сөләймән Ишмырҙин һәм Ибраһим Исхаҡовтарҙан торған махсус комиссия булдыра. Зәки Вәлиди комиссияның рәйесе итеп Х. Әмировты тәғәйенләй. Башревком комиссияһы һалдаттар менән Үҫәргән кантонына килеп төшә. Килеү менән Хәлим Әмиров тиҙ арала кантонда тәртип урынлаштыра, Башҡортостан автономияһы власын тергеҙә. Башревкомға буйһонмаған яңы кантревкомдың һәм канткомдың ағзаларын ҡулға ала. Коммунистарҙың берәүһе Ырымбурға ҡасып ҡотола.

«Башревком выслал в Усерганский кантон – Чеботаревку комиссию во главе с Амировым и двумя отрядами, первый (в сто человек) занял Чеботаревку, второй отряд, количество коего не выяснено, расположился в районе Чеботаревки. Комиссией арестованы коммунисты: Атанов, Ивашкин, Брозинский, Похлебаев и другие; разоружен военкомат; распущены коммунистические пар-

тии вплоть до ячеек...» – тип был хаҡта Рәсәй транспорт ЧК-һы рәйесе Данилевский Ленин менән Дзержинскийға ошаҡлай. Хәлим Әмировтың Үсәргән кантоны коммунистарының «арт һабаҡтарын уҡытыуын», ВЦИК-тың Башревком янындағы вәкиле Ф. Самойлов: «Последний крупный «подвиг» валидовцев», – тип баһалай.

25 мартта Башревком Үсәргән кантонына етәкселекте Х. Әмировтың үҙенә тапшыра, уны кантревком рәйесе итеп тәғәйенләй. Әммә уның Үсәргән кантонындағы коммунистарҙы ҡулға алыуы, РКП(б) ойошмаһын ҡыуып таратыуы Башобкомға оҡшамай. Май айында обком Әмировтың эшен тикшереү буйынса конфликт комиссияһын ойоштора. 16 майҙа комиссия Үсәргән кантоны коммунистарын аҡлап сығыш яһай, Әмировты бер йылға партиянан сығарырға ҡарар ҡыла. 18 майҙа үткән Башобком пленумы уны бер йылға бөтә яуаплы вазифаларҙан ситләтергә тәҡдим итә.

Ләкин Башревком коммунистарҙың ҡарарына әллә ни ҡолаҡ һалып бармай. Х. Әмировты Башглавпродукт рәйесе вазифаһына тәғәйенләй. 1921 йылдың август аҙағынан ул Башобкомдың Башҡортостан Ревтрибуналы янындағы Дәүләт ғәйепләүсеһе (Гособвинитель) урынбаҫары булып эшләй.

30-сы йылдарҙа Хәлим Әмиров Өфө мотор заводында (хәҙерге УМПО) плановик булып эшләй. 1936 йылдың 23 октябрендә ҡулға алынып, өс йылға иркенән мәхрүм ителә. Артабанғы яҙмышы билдәһеҙ. 1989 йылдың 12 ноябрендә реабилитациялана.

Ғабдулла Ибраһимов

Ғабдулла Ғәбделғәлләм улы Ибраһимов (псевдонимы Ибраһим Ҡыпсаҡ) – Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан эшмәкәрҙәрҙең береһе. 1895 йылда Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙенең Ҡараҡыпсаҡ олоҫона ҡараған Сапыҡ ауылында тыуған. Тәүҙә тыуған ауылында атаһы, указлы мулла Ғәбделғәлләмдең мәҙрәсәһендә белем ала. 1914 йылдан Ҡарғалы мәҙрәсәһендә, артабан Ырымбур ҡалаһында уҡый.

1918 йылда Башҡортостан автономияһының Ҡыпсаҡ кантон башҡармаһында сәркәтип булып эшләй. Ошо осорҙа Ырымбурҙа сыҡҡан Башҡорт милли хәрәкәтенең матбуғат органы – «Башҡортостан хөкүмәте теле» гәзитенә әүҙем яҙыша.

Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң һәләтле егетте Башревкомға инструктор-ойоштороусы итеп алалар. 1919 йылдың майында Ғабдулла Ибраһимов Мәскәүгә Я. М. Свердлов исемендәге Коммунистик университетҡа уҡырға ебәрелә. 1919 йылдың көҙөндә, Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы комиссары Нуриәғзәм Таһиров Мәскәү университетында уҡыусы башҡорт курсанттарын Петроградҡа, башҡорт ғәскәрҙәре ҡарамағына ебәреүҙе һорап мөрәжәғәт итә. Был осорҙа 10 меңдән ашыу яугирҙы тәшкил иткән Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмө тәжрибәле сәйәси эшмәкәрҙәргә ҙур ҡытлыҡ кисерә.

1919 йылдың октябрендә Коммунистик университетты тамамлаған, курсанттар Ибраһимов, Сәғәҙиев һәм Лотфуллиндар Петроградҡа килә. Сәғәҙиев Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһының сәйәси бүлеген етәкләһә, Ғабдулла Ибраһимов күптән түгел Бәләбәйҙән килгән Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһына (4 меңдән ашыу кеше) сәйәси комиссар итеп тәғәйенләнә. Һөҙөмтәлә Ғ. Ибраһимов Петроградтағы башҡорт ғәскәрҙәренең сәйәси етәкселәренең береһе булып китә.

Ибраһимов бында, ғәскәрҙәр араһында, Башҡорт автономияһы етәкселегенең сәйәси йүнәлешен алып бара, әүҙем яҙыша. Башҡорт кавалерия дивизияһы һәм Башҡорт уҡсы бригадаһының сәйәси бүлектәре 1920 йылдың февралендә, Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәренең Совет власы яғына сығыуының бер йыллығына бағышлап, «Бәхет көнө» исеме аҫтында альбом-йыйынтыҡ әҙерләп сығара. Был йыйынтыҡ милли хәрәкәттең пропагандистик баҫмаһы булараҡ, һалдаттар араһында таратыла. Комиссар Ибраһимов «Бәхет көнө» йыйынтығында «Башҡортостан хәрәкәте» тип исемләнгән мәҡәләһе менән сығыш яһай. Башҡорт һалдаттарына автономия өсөн көрәштең тарихын, Совет власы яғына сығыуҙың әһәмиәте хаҡында бәйән итә. *«Күп тотҡонлоҡта торған халыҡтың яҙмышы, яҡшы тормошо фәҡәт Совет власын урынлаштырғанда ғына мөмкин буласағына ышанып, бөтә Башҡортостан халҡы бөгөнгө көндө иң ҙур, иң хөрмәтле байрамдарҙан һанай. Петроградтағы башҡорт ғәскәрҙәре, бигерәк тә һәр һуғыштан, һәр бер фронттан яҡшы хәбәре булып, был байрамдың (бер йыллығы.—* А. Я.*) инҡилап мәркәзе Питерҙа тура килеүенән файҙаланып, яңыяңы өмөттәр менән яҡты киләсәкле Башҡортостандың йәшәүе фәҡәт Совет власы менән генә тәьмин ителәсәгенә ышанып, бөтөн көс, бөтөн ҡорбандарының шуға сарыф ителеүенә әһәмиәт бирә. Һәм бөтә иҙелгән халыҡтарҙың тормошоноң яҡшы юлға ҡуйылыуы хаҡына бирелгән ҡорбандарға ҡарамаҫтан, теләгән эштәребеҙҙе майҙанға ҡуйыуға ҡаршы булған бөтә революция дошмандары, элекке заман кешеләре башҡорт халҡын юлдан сығарырға, уны советтарға ҡаршы ҡуйырға бик күп тырышалар. Ошо маҡсат менән был көндәрҙә: «Советтар инде башҡорттарҙы бөтөнләй бөтөрәләр», — тип провокация тараталар, ялғанлайҙар. Иптәштәр, ул дошмандарҙың һүҙҙәре»,* — тип яҙа комиссар.

Юденич ғәскәрҙәре ҡыйратылған 1920 йылдың башында Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы Новгород губернаһына, ә Башҡорт уҡсы бригадаһы полктары Карел муйынына (Карельский перешеек) сик буйы хеҙмәтенә күсерелә. Ғабдулла Ибраһимовты Башҡортостанға ҡайтҡан Нуриәғзәм Таһировтың урынына кавалерия дивизияһы комиссары итеп тәғәйенләйҙәр. Петроградты обороналауҙа күрһәткән хеҙмәттәре өсөн уны юғары дәүләт наградаһы — РСФСР-ҙың Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләйҙәр (1921 йылда).

Комиссар Ибраһимов хәрби хеҙмәттән 1920 йылдың көҙөндә генә ҡайта. Ҡайтыу менән ул Башҡортостандың Социаль тәьминәт халыҡ комиссары вазифаһына тәғәйенләнә, 1921 йот йылында Ибраһимов

«Башпомгол» рәйесе урынбаçары булып эшләй. Граждандар һуғышынан һуң ас-яланғас ҡалған башҡорт халҡының хәлен яҡшыртыу, ҡот осҡос аслыҡтан ҡотҡарыу өсөн булған көсөн һалып эшләй.

Артабан РКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитетында бүлек мөдире вазифаһын биләй. 1923 йылда Ғабдулла Ибраһимов Ырымбурҙа, Каруанһарай бинаһында урынлашҡан Башҡорт педагогия техникумына директор итеп тәғәйенләнә. Ул етәкселек иткән осорҙа, техникумда башҡорт әҙәбиәтенең буласаҡ күп кенә эшмәкәрҙәре тәрбиәләнеп сыға.

Каруанһарай техникумында эшләгән осоронда Ғабдулла Ибраһимов үҙе лә әүҙем ижади эш менән мәшғүл була. 1925 йылда «Петроград өсөн көрәштә башҡорттар» исемле, хәтирәләр менән байытылған, документаль очеркы китап булып баçылып сыға.

1926 йылда Ғ. Ибраһимов Башпотребсоюз идараһы рәйесе итеп Өфөгә эшкә күсерелә, артабан Башҡортостандың Халыҡ мәғарифы комиссариатында эшләй. 1931 йылда Өфөнөң Комбайн моторҙары заводында (хәҙерге УМПО) бүлек начальнигы булып эшләй, һуңынан Белорет металлургия заводына директор урынбаçары итеп тәғәйенләнә. 1934 йылда ошо йүнәлештә юғары белем алыу маҡсатында Мәскәүгә И. В. Сталин исемендәге Бөтә Союз сәнәғәт академияһына уҡырға инә. 1937 йылда, Мәскәүҙә уҡып йөрөгән мәлендә Ғабдулла Ибраһимов репрессиялана.

Үҙ халҡының тоғро улы, милли-азатлыҡ хәрәкәте эшмәкәре, яҙыусы-әҙип Ғабдулла Ғәбделғәлләм улы Ибраһимовтың яҡты исеме 1957 йылда аҡлана.

Һиҙиәт Сәғәҙиев

Һиҙиәтулла Сибәғәтулла улы Сәғәҙиев — Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан эшмәкәрҙәрҙең береһе. 1887 йылда Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙенең Аҙнай олоçона ҡараған (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Ишембай районы) Тирмәнйылға ауылында тыуған. 1903—1911 йылдарҙа Ҡазан ҡалаһында «Мөхәмәҙиә» мәҙрәсәһендә белем ала. Мәҙрәсәне тамамлағас, тыуған яғына ҡайтып, революцияға тиклем Ергән ауылында уҡытып йөрөй.

1917 йылда Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә әүҙем ҡушылып китә. Юрматы кантон округы шураһының ағзаһы итеп һайлана. 1918 йылдың 15 ғинуарында Юрматы кантон округының съезында ҡатнаша. Унан һуң Һиҙиәтулла Сәғәҙиев Башҡорт үҙәк шураһы ағзаһы Муса Смаҡов менән Бәләбәй өйәҙенең Әлшәй станцияһында үтәсәк Мең кантоны округының съезына йүнәлә. Башҡортостан автономияһына йәне-тәне менән ҡаршы булған татар большевиктары ҡоралл ы көс килтереп, съезды ҡыуып тарата. Һ. Сәғәҙиев менән М. Смаҡов саҡ-саҡ ҡасып ҡотола. *«Араларында булып, һуңынан һөйләүселәр һүҙҙәренә ҡарағанда, улар Ғәбиҙулла Ибраһимов, Ғәбделнасир Ғабдулов, Шакир Мозафаров, Рябов (урыç офицеры), Юлмөхәмәт Арыçланбәков, Муса Смаҡов*

һәм Һиҙиәтулла Сәғәҙиевтәрҙе тотоп алырға ла, әгәр ҙә аҙ ғына ҡаршылыҡ күрһәтһәк, шул хәйлә менән атырға булған. Тик уларға эш ҡылырға ярҙамға Дәүләкәндән килергә тейеш булған ҡыҙылдарҙың һуңлауы сәбәпле, бер аҙ аптырашта ҡалғандар. Беҙҙең тере ҡалыуыбыҙға шул сәбәп булған», — тип яҙа үҙенең үлемдән ҡотолоуы хаҡында Һ. Сәғәҙиев.

1918 йылдың йәйендә, большевиктар власы ҡолатылып, Башҡорт хөкүмәте тергеҙелеү менән урындағы кантон органдары үҙ эшен яңынан башлай. Һиҙиәтулла Юрматы кантоны башҡармаһында эшкә тотона. Әммә 1918 йылдың декабренә фронт һыҙығы Юрматы кантоны ла килеп етә. Кантон территорияһы ҡыҙылдар менән башҡорт ғәскәрҙәре араһындағы ҡаты алыштар яланына әүерелә. Һ. Сәғәҙиев башҡорт ғәскәрҙәре сафына күсә. *«16 ғинуарҙа офицер Чанышев менән Һиҙиәт Сәғәҙиевте, ҡорал һәм һуғыш кәрәк-ярақтары һоратып чехтарға ебәрҙек. Чехтар, Колчак менән Дутовтың ҡаршы сығыуына ҡарамаҫтан, һорауыбыҙҙы ҡәнәғәтләндерҙе»*, — тип яҙа Зәки Вәлиди үҙенең хәтирәләрендә.

1919 йылдың 18 февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡандан һуң, Сәғәҙиев 21 февралдә Темәс ауылында үткән I Бөтә Башҡорт хәрби съезында ҡатнаша. Съезда сығыш яһап, делегаттарҙы Юрматы кантон башҡармаһы исеменән тәбрикләп үтә. Был оло йыйында Башҡортостандың Ваҡытлы революцион хөкүмәте — Башҡорт хәрби-революцион комитеты (Башревком) ойошторола.

Съездан һуң Сәғәҙиев Башревкомдың комендант командаһына хеҙмәткә тәғәйенләнә. 1919 йылдың майында Башревком республика өсөн башҡорт сәйәси кадрҙарын әҙерләү маҡсатынан 30 кешене, шул иҫәптән Һиҙиәтулла Сәғәҙиевте, Мәскәүгә Я. М. Свердлов исемендәге Коммунистик университетына курстарға ебәрә. Ул университеттың Үҙәк һәм урындағы идара факультетында белем ала. Ул осорҙа юғары уҡыу йортондағы курстар өс-дүрт ай менән генә сикләнә.

1919 йылдың көҙөндә Юденич армияһы Петроградҡа янай башлағас. Троцкийҙың фарманы буйынса башҡорт ғәскәрҙәре Петроградҡа күсерелә. Бында Башҡорт кавалерия дивизияһы һәм Башҡорт уҡсы бригадаһынан торған ун меңлек башҡорт ғәскәре туплана. Ғәскәрҙәрҙе тиҙ арала тәжрибәле башҡорт сәйәси комиссарҙар менән тәьмин итеү мәсьәләһе килеп баҫа. Башҡорт кавалерия дивизияһы комиссары Нуриәғзәм Таһиров, Мәскәү университетында уҡып йөрөгән башҡорт курсанттарының бер өлөшөн Петроградҡа ебәреүҙе һорап, Башревкомға мөрәжәғәт итә. Һиҙиәтулла Сәғәҙиев, Ғабдулла Ибраһимов һәм Хәйҙәр Лотфуллиндар Петроградҡа ебәрелә. Х. Лотфуллин — башҡорт ғәскәрҙәренең «Салауат» гәзитенә сәркәтип, Ғ. Ибраһимов — Башҡорт уҡсы бригадаһы комиссары, Һ. Сәғәҙиев Башҡорт кавалерия дивизияһының Сәйәси бүлеге мөдире итеп тәғәйенләнә.

Бөтә фронтта Ҡыҙыл Армия ғәскәрҙәре тәртипһеҙ сигенеп, Юденич армияһы Петроградҡа яҡынлашҡан осорҙа, башҡорт ғәскәрҙәрендә дош-

манға ҡаршы торорҙай тәртип, рух ныҡлығын тәьмин итеү бурысы Һ. Сәғәҙиевтең дә иңенә ята. Был бурысты Башҡорт кавалерия дивизияһының сәйәси бүлеге начальнигы намыҫ менән үтәп сыға. Башҡорт ғәскәрҙәре дошманды Петроградҡа үткәрмәй, ауыр юғалтыуҙар аша фронттағы хәлде кирегә үҙгәртергә ярҙам итә. Һ. Сәғәҙиев Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмө командиры Хәлил Әлишев менән башҡорт ғәскәрҙәренең Петроград фронтында күрһәткән батырлыҡтарын тасуирлап «Башҡорт инҡилабы тарихы» тигән хеҙмәт яҙа.

«Улар был әҫәрҙә ун бер мең башҡорт ғәскәренең Юденичты ҡурҡыта алыуы менән бергә, Советтарға ҡаршы даирәләрҙә симпатия ҡаҙанып, бер көн ҡоралдарын ҡыҙылдарға ҡаршы бороп, батшаны кире ҡайтарырға ярҙам итә алырҙар тигән өмөт уятыуҙары, икенсе яҡтан, ғәскәрҙә батырлыҡ Петроград фронтының терәге булған 7-се Ҡыҙыл Армия мөхитендә көнләшеү тойғоһо уятыуы хаҡында яҙған», – тип билдәләп үтә Зәки Вәлиди. Был хеҙмәт Башҡортостанда ташҡа баҫылмай ҡала, 1920 йыл уны Зәки Вәлиди эмиграцияға киткәндә, үҙе менән алып китә.

Юденич ғәскәре ҡыйратылғандан һуң, 1920 йылдың башында Башҡорт кавалерия дивизияһы Новгород губернаһына күсерелә. Һиҙиәтулла Сәғәҙиев Башҡорт уҡсы бригадаһына комиссар итеп тәғәйенләнеп, Петроградта ҡалдырыла. 1920 йылдың июнендә Мәскәүҙең Башҡортостан автономияһына ҡаршы сәйәсәтенә ризаһыҙлыҡ белдереп, Зәки Вәлиди етәкселегендәге Башҡорт хөкүмәте – Башревком ағзалары көрәште дауам итеү өсөн республиканы ташлап Төркостанға сығып китә.

Республиканың яңы етәкселеге Сәғәҙиевте Башҡортостанға ҡайтарырға була. БашЦИК рәйесе Мансырев 1920 йылдың 3 авгусында 7-се армияның сәйәси бүлегенә: *«Мы думаем Сагадеева отозвать, назначив комиссаром Башбригады вместо него тов. Титиева, который прибудет на фронт с добровольцами...»* – тип хәбәр итә. Ҡайтыу менән Һиҙиәт Сәғәҙиев Мәғариф комиссариаты коллегияһы ағзаһы итеп тәғәйенләнә. 1921 йылдың июленән РКП(б) Өлкә комитетында агитация һәм пропаганда бүлеген етәкләй. Шул йылдың декабрендә уны БАССР-ҙың Халыҡ мәғарифы комиссары итеп тәғәйенләйҙәр. Был юғары вазифала ике йыл эшләгәндән һуң, Башглавсудҡа эшкә күсә. 1926 йылда Башобкомда инструктор булып эшләп ала. 1926–1927 йылдарҙа Мәскәүҙә Юғары юридик курстарҙа белемен камиллаштырып ҡайтып, Башглавсуд коллегияһы ағзаһы сифатында – суд-хөкөм системаһында эшләүен дауам итә. Судта эшләгән осоронда, Сәғәҙиев хөкөмгә тарттырылған дуҫтарын, таныштарын – милли хәрәкәттә ҡатнашҡан кешеләрҙе яҡлап сығыш яһай. Ошо арҡала партияның Өлкә комитеты яғынан шелтәләр ала.

1929 йылдың мартында ул Башкустпромсоюзға эшкә күсә, артабан «Южураллес» тресында уҡыта. Ошо уҡ йылда уның яҡын дуҫы, Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте лидерҙарының береһе Нуриәғзәм Таһировты ҡулға алып, 10 йылға иркенән мәхрүм итәләр. Үҙенең баш

осонда ла ҡара болоттарҙың ҡуйырғанын аңлап, Һиҙиәтулла Сәғәҙиев Ҡырғыҙстанға сығып китә. Бында ул Тоҡмаҡ ҡалаһында Рабфак директоры булып эшкә төшә. Әммә оҙаҡламай 30-сы йылдарҙың ҡанлы репрессия дәүере етә. 1936 йылда ҡулға алып, Сәғәҙиевте Фрунзе (хәҙерге Бешкәк ҡалаһы) ҡалаһына төрмәгә ябып ҡуялар. Бер йылдан уны иреккә сығаралар, хатта эшенә ҡайтырға рөхсәт итәләр. Ләкин күп тә үтмәй, 1937 йылдың авгусында яңынан ҡулға алынып, Мәскәүгә оҙатыла.

Ике ай төрмәлә ултырғандан һуң, 1937 йылдың 9 октябрендә, СССР Юғары судының Хәрби Коллегияһы ҡарары буйынса Һиҙиәтулла Сәғәҙиев атыла. Сталин үлеп, уның шәхес культы фашланғас, 1957 йылда күп кенә репрессия ҡорбандары менән берлектә Һиҙиәтулла Сибәғәтулла улының да яҡты исеме аҡлана.

Мортазиндың ыласындары

Граждандар һуғышы осоронда Муса Мортазин етәкләгән Башҡорт кавалерия бригадаһы яугирҙары башҡа башҡорт частарына ҡарағанда күберәк хәрби наградаларға эйә була. Ошо бригадала утты-һыуҙы кисеп үткән башҡорт яугирҙары һуғыштан һуң үҙҙәрен һынатмай. Мортазин бригадаһында хеҙмәт иткәндәр араһынан күп кенә дәүләт, хужалыҡ һәм хәрби эшмәкәрҙәр үҫеп сыға. Фронттан ҡайтҡас, улар Башҡортостанда төрлө вазифалар биләй. Башҡортостан автономияны ҡорал менән яулап алғас, артабан улар, ең һыҙғанып, уның аяҡҡа баҫыуына, нығыныуына үҙ өлөшөн индерәләр. Шулар араһынан, эскадрон командирҙары Кинйәбай Ишмөхәмәтов менән Ғәҙелша Ейәнсурин дәүләт эшмәкәрҙәре кимәленә үҫеп етә. К. Ишмөхәмәтов Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау буйынса халыҡ комиссары булһа, Ғ. Ейәнсурин – коммуналь хужалыҡ буйынса комиссары вазифаһын башҡара.

Икенселәре хәрби кейемде фронттан ҡайтҡас та сисмәй. 27-се полктың 4-се эскадроны командиры Шәмсетдин Ғафаров ошо уҡ эскадронда взвод командиры булып хеҙмәт иткән Заһиҙулла Ҡаҙнабаев һуғыштан ҡайтҡас, милиция органдарында эшләй. 27-се полк командиры Хисаметдин Фәйзуллин Ҡыҙыл Армияла хеҙмәтен дауам итә, һуңынан Осоавиахимда (хәҙерге ДОСААФ) хәрби әҙерлек начальнигы булып эшләй. 27-се полктың 1-се эскадроны командиры Ғәббәс Рысҡолов БАССР-ҙың бер нисә районында район башҡарма комитеты рәйесе булып эшләй. 28-се полк командиры ярҙамсыһы Фәттәх Ибраһимов һуғыштан һуң Иркутск ҡалаһында тау институтында уҡып, тау инженеры булып эшләй. БАССР-ҙың почетлы таусыһы исеменә лайыҡ була. Әхмәҙей Мортазин, Хәлфетдин Фәттәхетдинов, Шәмсетдин Яҡшыгилдиндар тыуған яҡтарында ҡайтып олоҫ, ауыл советтары рәйестәре вазифаларын башҡара.

30-сы йылдарҙың Сталин репрессияһы елдәре Мортазиндың яуҙаштарын да урап үтмәй. Ш. Ш. Ғафаров, К. Х. Ишмөхәмәтов, Ғ. Д. Ейәнсу-

рин, З. М. Ҡаҙнабаев, Ә. Ф. Мортазин, Ф. Ә. Ибраһимов, Ғ. Ш. Рыҫҡолов, Х. Ш. Фәйзуллиндар нахаҡҡа ғәйепләнеп, үлем язаһына хөкөм ителә. Артабан уларҙың исемдәре, Муса Мортазиндыҡы кеүек үк, күп йылдар онотолоуға дусар ителде. Улар тураһында ныҡлап 90-сы йылдарҙан ғына яҙа башланылар. Бөгөнгө көндә ҡайһы берҙәренең исемдәре тыуған яҡтарында мәңгеләштерелгән. Әммә күптәренең исемдәре әлегә тиклем республика кимәлендә билдәһеҙ ҡала килә. Беҙҙең бурыс ошо батыр шәхестәрҙең исемдәрен халыҡ хәтерендә ҡалдырыу. Мин китап уҡыусылар иғтибарына Мортазиндың яуҙаштарының ҡыҫҡаса биографияһын тәҡдим итәм.

Ибраһим Мортазин

Ибраһим Ғаззали улы Мортазин Ырымбур губернаһы Верхнеуральск өйәҙе Күбәләк-Тиләү олоҫоноң (хәҙерге Учалы районы) Көсөк ауылында тыуған. Муса Мортазиндың өс туған ҡустыһы. Беренсе донъя һуғышына алынып, унтер-офицер дәрәжәһендә ҡайта. 1918 йылда ағаһы Муса Мортазин менән Тамъян-Ҡатай кантонында 1-се Башҡорт кавалерия полкын ойоштороуҙа ҡатнаша. Артабан ошо полк сафында хеҙмәт итә. Архив документтарында 1919 йылдың ғинуарында 1-се Башҡорт кавалерия полкының корнет Муса Мортазин менән бергә 2-се эскадрон командиры прапорщик Мортазин телгә алына (ЦАОО РБ. Ф. 9776. Оп. 2. Д. 9. Л. 112). Ул Ибраһим Мортазин булһа кәрәк. Башҡорт командованиеһы 1918 йылда милли армияны башҡорт командирҙары менән тулыландырыу маҡсатында Ырымбурҙа прапорщиктар курстары асып, элекке унтер-офицерҙарҙы уҡытып, прапорщик дәрәжәһенә күтәрә. Шулай уҡ улар яуҙа күрһәткән батырлыҡтары өсөн дә яңы званиеларға лайыҡ була. Мәҫәлән, герман һуғышынан кесе фейерверкер (артиллериялағы унтер-офицер дәрәжәһен) булып ҡайтҡан Муса Мортазин башҡорт ғәскәрендә корнет (кавалериялағы звание) чины ала.

Ибраһим Мортазин 1-се Башҡорт кавалерия полкы сафында 1919 йылдың февралендә ҡыҙылдар яғына сыға. Март аҙағында 1-се полк кире аҡтарға китә. Бында ул бригада кимәленә үҫеп етә һәм август аҙағында ҡабат ҡыҙылдар яғына сыға. И. Мортазин Башҡорт бригадаһы составында Урал фронтында казактарға ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнаша. Бригада 1919 йылдың декабренән алып 1920 йылдың апрель аҙағына тиклем Ырымбур ҡалаһы янындағы Ҡарғалы биҫтәһендә тора.

1920 йылда Польша фронтында Ибраһим Мортазин Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһының 28-се полкы менән командалыҡ итә. Фронтҡа килеү менән ул етәкселек иткән 28-се полк яуҙарҙа ҙур батырлыҡтар күрһәтә. Ибраһим Мортазин үҙен ҡурҡыу белмәҫ, оҫта командир итеп күрһәтә.

«Киевтан сигенеп барыусы дошман 14 июндә бөтә көсө менән Зарудье ауылына ташланды. Ауылда башҡорт частары тора ине.

Дошмандың 60-сы Краков пехота полкы иртә менән ҡапыл ғына көньяҡтан 27-се полк участкаһына бәреп инде лә полк штабын алды. Комбриг бригадаға ниндәй көстөң ябырылыуын асыҡлағас, полктарға Зарудьены алырға, дошманға ундағы күперҙе шартлатырға форсат ҡалдырмаҫҡа бойороҡ бирҙе.

28-се полк Ирша йылғаһының уң ярынан атакаланы. 1-се полк фронттан һөжүм итте һәм өс сәғәткә һуҙылған көслө һуғышынан һуң дошман ҡамауҙа ҡалды, уның бер өлөшө генә ҡулсаны йырып сыға алды; бер батальондың штабы, 18 пулеметы беҙҙең ҡулға күсте, 250 кешеһе тураҡланды, үҙебеҙҙең 27-се полк штабы ҡотҡарылды. Был һуғышта 28-се полк командиры И. Мортазин иптәштең сая батырлығын билдәләмәй мөмкин түгел», – тип яҙа Муса Мортазин үҙенең китабында.

Бригада Киевтан сигенеп барған дошмандың артынан ҡалмай ҡыуа. 21 июндә (22-һенә ҡаршы төндә) Башҡорт бригадаһы Игнатополь ауылын алып, шунда туҡтала. *«Таң алдынан дошман, ике полкы менән беҙҙе һул яҡтан уратып үтеп һәм Жерев йылғаһындағы күпергә барып етеп, көтмәгәндә Игнатополде ҡаманы һәм бригада штабына һөжүм итте. Һаҡта торған полк, дошман бронепоезы утына эләгеп, сигенгән, һәм полк менән штаб араһында бәйләнеш өҙөлгән. 28-се кавалерия полкы, штабтың комендант командаһы һәм батарея (ике туп) ҡамауҙа ҡалды. Бригада частары сая һуғыштарҙан һуң төньяҡ-көнсығыш йүнәлешендә ҡулсаны өҙөп сыға алды; 28-се полк бер нисә тапҡыр контратакаға ташланды һәм, ҙур юғалтыуҙар биреп, ҡоралдарын һаҡлап килеп сыҡты, бригада штабын да сығарыуға өлгәште. Юғалтыуҙар: 28-се полк командиры И. Мортазин, эскадрон командиры Андреев, 60 ҡыҙылармеец үлде, 27-се полк штабы юғалды. Һуғыштың уңышһыҙ бөтөуенең сәбәптәре: элемтәнең насарлығы, яҡшы карталарҙың булмауы, һаҙ ерҙең һыбайлы сафтарға һуғышырға ҡамасаулауы»,* – тип яҙа Муса Мортазин.

Шул уҡ көндө бригада полктары тәртипкә килеп, Игнатополь ауылын яңынан баҫып ала. Батырҙарса һәләк булған 28-се полк командиры Ибраһим Мортазинды ерләйҙәр.

Муса Мортазин «Башҡортостан һәм башҡорт ғәскәрҙәре Граждандар һуғышында» китабында «Башҡорт частарының Граждандар һуғышында ҡаһарманлыҡ күрһәткән яугирҙарының исемлеге»ндә, Ибраһим Мортазин Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнде, тип яҙа. Әммә «Список лиц, награжденных орденом Красного Знамени РСФСР и почетным революционным оружием» китабында (Мәскәү, 1926) уның исеме телгә алынмай. Ибраһим Мортазин тураһындағы мәғлүмәт был китапҡа ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында инмәй ҡалған, ахыры. Сөнки ул китапта Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы штабы начальнигы Заһит Гәрәевтең да исеме юҡ. Ләкин уның Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнеүе яҡшы билдәле.

Әхмәзей Мортазин

Әхмәзей Фәүәрис улы Мортазин 1883 йылда Ырымбур губернаһы Верхнеуральск өйәзе Күбәләк-Тиләү олоҫоноң (хәҙерге Учалы районы) Көсөк ауылында тыуған. Муса Мортазиндың ике туған ағаһы. Ауылда мәҙрәсә тамамлай. Батша армияһында хеҙмәт итеп ҡайта. Беренсе донъя һуғышы башланғас, уны тағы армияға алалар. Бында ул өлкән унтер-офицер званиеһын ала. 1917 йылда 42-се пехота дивизияһында хеҙмәт итә. Ошонда коммунистар партияһы сафына алына.

Хеҙмәттән ҡайтҡас Әхмәзей Мортазин Верхнеуральск өйәзе советы ағзаһы итеп һайлана. Күбәләк-Тиләү олоҫонда Совет власын урынлаштырыу менән шөғөлләнә. *«В 1918 году я служил в уездном совете в г. Верхнеуральске. В том же году я был делегирован уездным советом на съезд в Москву и во время следования в Москву под Уфой я был захвачен белыми, которыми и отправлен был в г. Верхнеуральск»*, – тип яҙа үҙе тураһында Ә. Мортазин.

Верхнеуральскиға китеп барышлай Ҡаҙаҡкол ауылында уны аҡтар яғында ойошторолоп ятҡан 1-се Башҡорт кавалерия полкына алып калалар. 1919 йылдан Муса Мортазиндың полкында йөрөй. 1919 йылдың авгусында, Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы ҡыҙылдар яғына сыҡҡан саҡта бригаданың тәьминәт бүлеге начальнигы, артабан 5-се (артабан 27-се) полктың хужалыҡ бүлеге начальнигы булып хеҙмәт итә. Бригада менән Урал, Польша фронттарында ҡатнаша.

Муса Мортазин үҙенең китабында яҙыуынса, Әхмәзей Мортазин Польша фронтында күрһәткән батырлыҡтары өсөн Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. Әммә «Список лиц, награжденных орденом Красного Знамени РСФСР и почетным революционным оружием» китабында (Мәскәү, 1926) уның исеме телгә алынмай. Ләкин был китапта тулы исемлек бирелгән тип әйтеп булмай.

Әхмәзей Мортазин фронттан ҡайтҡас, Күбәләк-Тиләү олоҫо башҡарма комитеты рәйесе итеп һайлана, һуңынан Арғаяш кантонында эшләй. 1921 йылда партия сафтарын таҙартыу эше башлана. 1921 йылдың ноябрендә РКП(б)-ның Тамъян-Ҡатай кантоны комитеты Әхмәзей Мортазиндың аҡтар яғында булыуын иҫкә төшөрә. «1. Преувеличение своего партийного стажа, т. е. в бытность у белых выдавал себя за коммуниста. 2. Был в Комсоставе у Колчака и генерала Анненкова, по личному заявлению Абаимова принимал участие в истреблении красных полков и целый ряд других заявлений обличающего в антисоветской работе», – тип Ә. Мортазинды партиянан сығаралар. Партиянан сығарған саҡта тартып алынған партбилеты Ә. Ф. Мортазиндың «Личное дело»һында һаҡлана (ЦАОО РБ. Ф. 22. Оп. 2. Д. 492). Уның 666387-се һанлы партия билетында бик тә ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр теркәлгән. «Были ли за границей и где» тигән графала: «в Японии и Китае», тип яҙылған.

Әхмәҙей Мортазин был илдәргә ҡасан һәм ни рәүешле барып йөрөгән булғандыр, билдәһеҙ.

Ул 30-сы йылдарҙың аҙағында Учалы алтын приискыларында эшләй. 1937 йылдың 24 авгусында Әхмәҙей Мортазин НКВД тарафынан ҡулға алына. Был ваҡытта инде Муса Мортазин да НКВД органдары ҡулы аҫтында була. Өс айҙан ашыу төрмәлә ултырғандан һуң 1937 йылдың 8 декабрендә Ә. Мортазин атыла. 1956 йылдың 16 июнендә реабилитациялана.

Дауыт Мортазин

Дауыт Лут улы Мортазин 1893 йылда Ырымбур губернаһы Верхнеуральск өйәҙе Күбәләк-Тиләү олоҫоноң (хәҙерге Учалы районы) Көсөк ауылында тыуған. Муса Мортазиндың бер туған ҡустыһы.

Башҡортостан Республикаһының ижтимағи ойошмаларының үҙәк дәүләт архивында һаҡланған партия билетынан (ЦАОО РБ. Ф. 22. Оп. 2. Д. 493) «Какие местности хорошо знаете?» тип исемләнгән графала: «Москва, Петроград, Харьков» тип күрһәткән Дауыт Мортазин. Тимәк, ул 1918 йылда аҡтар яғында Башҡорт армияһы сафында хеҙмәт итеп, 1919 йылдың февралендә башҡорт ғәскәрҙәре ҡыҙылдар яғына сыҡҡас, Башҡорт кавалерия дивизияһы составында Көньяҡ фронтта Деникин ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғышта ҡатнашҡан, булһа кәрәк. Башҡорт полктары 1919 йылдың июнендә тап Харьков янында генерал Деникиндың ғәскәренә ҡаршы ҡанлы яуҙарҙа ҡатнаша.

1919 йылдың көҙөндә Башҡорт кавалерия дивизияһы Петроград фронтында Юденичҡа ҡаршы ташлана. 1920 йылдың башында дивизия Новгород губернаһына күсерелеп, һуғыштан иҫән ҡалған яугирҙары бер полкка туплап, 1920 йылдың майында Польша фронтына Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһына оҙатыла.

Дауыт Мортазин тап ошо рәүешле ағаһы Муса Мортазиндың бригадаһына барып ҡушылғандыр, моғайын. Бәлки Мәскәү, Петроград, Харьков ҡалаларында революцияға тиклем әрме хеҙмәте ваҡытында булғандыр.

Нисек кенә булмаһын, 1920 йылда Дауыт Мортазин Польша фронтында Башҡорт кавалерия бригадаһының эскадрон командиры вазифаһында йөрөүе билдәле. Муса Мортазин үҙенең китабында Дауытты яуҙа күрһәткән батырлыҡтары өсөн Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнгән, тип яҙа. Әммә «Список лиц, награжденных орденом Красного Знамени РСФСР и почетным революционным оружием» исемле китапта (Мәскәү, 1926) Д. Л. Мортазиндың исеме телгә алынмай. Ләкин был китапта тулы исемлек бирелгән тип әйтеп булмай. Бәлки инмәй ҡалғандыр.

Дауыт Мортазин фронттан ҡайтҡас Күбәләк-Тиләү олоҫо башҡарма комитеты рәйесе булып эшләй. 1921 йылда партия сафтарын таҙартыу эше башлана. 1921 йылдың көҙөндә «Комиссия по очистке партии»

Дауыт Мортазиндың да эшенә тотона. Уны «организовывал ячейку, называемую кагармановскую, которая находилась в горах, производила грабежи. Состоял в рядах Колчака командиром» тип партиянан сығаралар. Д. Л. Мортазин 1926 йылда туберкулез менән ауырып вафат була.

Һарун Мортазин

Һарун Фәүәрис улы Мортазин 1893 йылда Ырымбур губернаһы Верхнеуральск өйәҙе Күбәләк-Тиләү олоҫоноң (хәҙерге Учалы районы) Көсөк ауылында тыуған. Әхмәҙей Мортазиндың бер туған, Муса Мортазиндың ике туған ҡустыһы.

Һарун Мортазин 1918 йылдан Әмир Ҡарамышев исемендәге 1-се Башҡорт кавалерия полкында хеҙмәт иткән булһа кәрәк. Артабан ошо полк составында ҡыҙылдар яғына сығып, 1919 йылдың март аҙағында Муса Мортазин менән кире аҡтарға китеп, август аҙағында Башҡорт кавалерия бригадаһы сафында ҡабат ҡыҙылдарға сыҡҡан, күрәһең.

1920 йылда ул Муса Мортазиндың кавалерия бригадаһында взвод командиры булып йөрөй. М. Мортазин үҙенең китабында яҙыуынса, Һарун Мортазин Польша фронтында күрһәткән батырлыҡтары өсөн Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнгән. Әммә «Список лиц, награжденных орденом Красного Знамени РСФСР и почетным революционным оружием» китабында (Мәскәү, 1926) Һ. Ф. Мортазиндың исеме телгә алынмай. Ләкин был китапта тулы исемлек бирелгән, тип әйтеп булмай.

Муса Мортазин Һарунды үҙенең китабында килтергән исемлектә «үлде», тип телгә ала. Әммә «Яу ҡырында һәләк булды», тип яҙмай. Тимәк, Һарун Мортазин Польша фронтынан иҫән ҡайтып, 1920–1927 йылдар тирәһендә донъя ҡуйған булып сыға.

Хисаметдин Фәйзуллин

Хисаметдин Шәрип улы Фәйзуллин 1890 йылда Ырымбур губернаһы Троицк өйәҙенең Атъетәр ауылында (хәҙерге Силәбе өлкәһенең Сыбаркүл районы) тыуған. Ата-әсәһе ярлы булыу сәбәпле, Хисаметдин йәштән Троицк ҡалаһына китеп, шунда ялланып эшләй. Ҡалалағы рус мәктәбенең өс синыфын тамамлауға өлгәшә. Шунда яҡшы ғына русса уҡырға һәм яҙырға өйрәнә.

Йәше тулғас, әрмегә алынып, Ырымбур казак полкында фуражир булып хеҙмәт итә. Граждандар һуғышы башланғас, башҡорт ғәскәренә мобилизациялана. 1919 йылдың февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре ҡыҙылдар яғына сыҡҡан мәлдә тиф менән ауырып китеп ятып ҡала. Һәм аҡтар Башҡортостандан киткәнсе йәшеренеп йөрөй. 1919 йылдың йәйендә Башҡорт хөкүмәте эвакуациянан ҡайтҡас, ҡабат башҡорт ғәскәрҙәренә алына.

Стәрлетамаҡ ҡалаһында (ул саҡта Башҡортостандың баш ҡалаһы) Башҡорт запас частарында хеҙмәт итә. 1920 йылдың йәйендә Хисаметдин Фәйзуллинды 100 һалдат менән Польша фронтында һуғышҡан Муса Мортазиндың атлы бригадаһына ебәрәләр. Уны Муса Мортазин 27-се кавалерия полкы командирының ярҙамсыһы итеп тәғәйенләй.

Ҡанлы яуҙарҙың береһендә полк командиры грузин Эрадзе һәләк булғас, уның урынына Хисаметдин Фәйзуллин 27-се Башҡорт кавалерия полкы менән командалыҡ итә башлай. 1920 йылдың көҙөндә поляктар менән һуғыш тамамланғас, Башҡорт кавалерия бригадаһы Семен Петлюраның ғәскәрен ҡыйратыуҙа ҡатнаша. Волочиск янындағы һуғышта күрһәткән батырлығы өсөн 27-се Башҡорт полкы командиры Хисаметдин Фәйзуллин Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була. Реввоенсоветтың 1921 йылдың 6 мартындағы 549-сы фарманында былай тиелә: **«2-се Башҡорт кавалерия полкының командиры Фәйзуллин Хисаметдин иптәш: уҙған йылдың 21 ноябрендә петлюрасылар менән Волочиск ҡалаһы янындағы һуғышта дошмандың ғәйәт көслө мылтыҡ, пулемет һәм артиллерия уты аҫтында үҙенең ҡыйыулығы менән бөтә ҡыҙылармеецтарҙы рухландырып, полк алдында барҙы.**

Йылға аша дошман үҙенең артиллерияһын күсереп ятҡан күпергә беренсе бәреп инеп, Фәйзуллин иптәш дошманды биш орудиеһын ташлап ҡасырға мәжбүр итте. Фәйзуллин иптәш үҙе бөтә кешеләргә батырлыҡ һәм оҫталыҡ өлгөһө булып торған был һуғышта беҙҙең тарафтан дошмандың 6 орудиеһы, 14 пулеметы, ылауҙары һәм ике йөҙләп кешеһе, шул иҫәптән петлюрасыларҙың 1-се уҡсы дивизияһы штабы әсиргә төштө».

Хисаметдин Фәйзуллин Польша фронтына барғас, Башҡорт кавалерия бригадаһында хеҙмәт иткән мәрйә ҡыҙына өйләнә. Ҡатыны Е. В. Фәйзуллина үҙенең хәтирәләрендә (1976 йыл) былай тип яҙа: «Он мне часто говорил: «Везло мне в бою, я ни разу не был ранен и ни одна атака не проходила без успеха в нашу пользу или мы брали трофеи, или же пленных. Мне рассказывал командир 1-го эскадрона тов. Зиянчурин Адильша, который со своим эскадроном первым за Файзуллиным бросался в атаку. С криком «за мной!» тов. Файзуллин бросался впереди полка с обнаженным клинком – он был невменяем – лицо его бледнело, глаза наливались кровью, он рубил врага направо и налево, а конь под ним почти стоял на задних ногах и издавал неистовое ржание».

1920 йылдың декабрендә сафтары һирәгәйгән өс полклы Башҡорт кавалерия бригадаһы ике полкка ҡалдырыла. Ошо мәлдән Х. Фәйзуллин 2-се Башҡорт кавалерия полкы менән командалыҡ итә. 1921 йылдың мартында Башҡорт кавалерия бригадаһы таратылып, уның частарынан 15-се, 16-сы, 17-се, 18-се Айырым Башҡорт эскадрондары ойошторола. Хисаметдин Фәйзуллин 17-се эскадрон командиры итеп тәғәйенләнә. 1921 йылдың ноябренә тиклем ул Румыния сигендә хеҙмәт итә. Артабан 15-се, 16-сы, 17-се эскадрондарҙан 8-се Червонный казак кавалерия полкы ойошторола, 18-се эскадрон 7-се Червонный казак кавалерия полкы

составына инә. 1921 йылдың көҙөнән Фәйзуллин 7-се полк командиры ярҙамсыһы булып хеҙмәт итә.

1926–1927 йылдарҙа, аҙаҡ данлыҡлы сардар булып киткән Жуков, Рокоссовскийҙар менән бер осорҙа, Ленинградта Юғары кавалерия мәктәбендә уҡый, һуңынан Куйбышев (Һамар) ҡалаһында Ҡыҙыл Армияның команда составы курстарын тамамлай. Ново-Черкасск ҡалаһында полк мәктәбе начальнигы булып хеҙмәт итә, артабан Башҡортостанға ҡайтып, БАССР-ҙың Осоавиахимында (хәҙерге РОСТО) хәрби әҙерлек начальнигы булып эшләй.

30-сы йылдарҙың Сталин репрессияһы уны ла урап үтмәй. 1937 йылдың 9 октябрендә ҡулға алына. Ярты йыл тирәһе төрмәлә ултырғандан һуң, 1938 йылдың 1 мартында атыла. 1957 йылдың 18 февралендә реабилитациялана.

Кинйәбай Ишмөхәмәтов

Кинйәбай Хәйретдин улы Ишмөхәмәтов 1894 йылда Ырымбур губернаһы Верхнеуральск өйәҙе Ҡатай олоҫоноң (хәҙерге Белорет районы) Сермән ауылында тыуған. 1911 йылда тыуған ауылында 2 синыфлы Рус-башҡорт училищеһын тамамлай. Уҡыуҙы тамамлағандан һуң, ағас ҡырҡып, заводтарға күмер ташыу менән шөғөлләнә.

1914 йылда әрмегә алынып Балашов ҡалаһындағы 106-сы запас батальонда хеҙмәтен башлай. Өс ай күнекмәләр үткәндән һуң марш роталары составында фронтҡа оҙатыла. 1915 йылда Карпат тауҙары янында урынлашҡан фронтка килеп 16-сы Финлянд уҡсы полкында хеҙмәт итә. 1917 йылдың ноябрендә отпуск алып тыуған яғына ҡайта. Илдә бола башланғас, әрмегә бармай өйҙә тороп ҡала.

1918 йылдың мартында Сермәндәге ҡыҙылдарҙың боевой дружинаһына яҙыла һәм июль айына тиклем Ҡыҙыл Гвардия сафында хеҙмәт итә. 1918 йылдың йәйендә Башҡортостанда власть аҡтар ҡулына күсә. *«Во время отступления Каширина мне не пришлось отступать, так как я был болен и находился в кошах. Когда белые заняли нашу деревню, то беспощадно стали расправляться с оставшимися большевиками. Стали сожать в тюрьмы и расстреливать. Когда стали белые приближаться в наши кочевки, то я скрылся в лесу, где прожил до октября месяца»*, – тип яҙа үҙенең автобиографияһында К. Ишмөхәмәтов.

Билдәле булыуынса, 1918 йылдың йәйендә Каширин, Блюхерҙың ҡыҙыл отрядтарына ҡаршы Башҡорт армияһы частары, атап әйткәндә, Әмир Ҡарамышев етәкселегендә 1-се Башҡорт кавалерия полкы (М. Мортазин ошо полкта эскадрон командиры булып хеҙмәт итә), 5-се Башҡорт уҡсы полкы һәм Тамъян-Ҡатай ирекле отряды ҡаршы һуғыша. Ошоно иҫәпкә алғанда, Кинйәбай Ишмөхәмәтов үҙ милләттәштәре менән һуғышырға ашҡынып тормағандыр һәм ҡыҙылдар менән китергә лә уйы булмағандыр, моғайын.

Үҙе яҙыуынса, ул 1918 йылдың көҙөндә тап Муса Мортазин хеҙмәт иткән 1-се Башҡорт кавалерия полкына яҙыла. Шулай итеп, 1919 йылдың февраленә тиклем К. Ишмөхәмәтов 1-се Башҡорт кавалерия полкында хеҙмәт итә. Тимәк, ҡыҙылдарҙың 1-се армия ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғыштарҙа туранан-тура ҡатнашҡан булып сыға. Сөнки 1-се полк 1918 йылдың декабренән Стәрлетамаҡ ҡалаһы ҡыҙылдарға ҡаршы аяуһыҙ бәрелештәрҙә ҡатнаша. Полк «Стәрлетамаҡ фронты башҡорт көстәре» хәрби оператив группаһында хәрәкәт итә.

«Когда красные стали приближаться к нашей деревне, я выпросился домой, чтобы в случае занятия нашей деревни красными присоединиться к ним. Но у нас еще стоял комендант белых и кулаки донесли, что я служил добровольцем у красных и до сего времени скрывался в лесу. Тогда комендант белогвардейский меня арестовал. Фронт был недалек от нас, в верстах 50-ти от деревни. В ночь 24 февраля я сумел убежать с целью перебраться через фронт к красным. 25 февраля перебежал через фронт белых к красным и поступил в Башкирский полк, который перешел целиком 19 февраля 1919 года», — тип яҙа Ишмөхәмәтов.

Март аҙағында Мортазиндың полкы 1-се кавалерия полкы ябай ауыл халҡын интектергән ҡыҙылдар менән уртаҡ тел таба алмай, кире аҡтар яғына сығып китә, уның менән бергә Кинйәбай Ишмөхәмәтов та аҡтар яғына киткән булып сыға. *«Прослужив три месяца, в мае месяце меня назначили помощником командира эскадрона, а 2 августа 1919 года назначен командиром эскадрона»,* — тип бәйән итә үҙенең хәрби хеҙмәт юлын К. Ишмөхәмәтов.

1919 йылдың август аҙағында бригада кимәленә үҫеп еткән Мортазин полкы ҡыҙылдар яғына ҡабат сыға. Артабан Ишмөхәмәтов Башҡорт кавалерия бригадаһы составында Урал фронтында (Ырымбур өлкәһе, Ҡаҙағстан территорияһы) аҡтарға ҡаршы һуғышып йөрөй.

28-се полктың эскадрон командиры сифатында Польша фронтында һуғыштарҙа ҡатнаша. 1920 йылдың ноябрендә Семен Петлюраның армияһын ҡыйратҡанда күрһәткән батырлыҡтары өсөн Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була. 1922 йылда Реввоенсоветтың 34-се фарманы менән бүләкләнә. Фарманда былай тиелгән: **«1920 йылдың 21 ноябрендә Гоноровка ауылы эргәһендә һуғышта дошманды ҡыуып барышлай уның сафын туҙҙырғаны һәм фельдшерын медикаменттары менән ҡуша санлетучкаһын әсиргә алып, уларҙы тылға илтереп тапшырғандан һуң да тағы ла дошманды эҙәрлекләүен дауам иткәне өсөн».**

1920 йылдың декабрендә Башҡорт кавалерия бригадаһы ике полкка ҡалдырылғас, 2-се Башҡорт кавалерия полкының 4-се эскадроны командиры итеп тәғәйенләнә. Башҡорт бригадаһы таратылғас, 1921 йылдың апреленән сентябренә тиклем Румыния сигендә Айырым башҡорт эскадронында хеҙмәт итә. Ошо мәлдә К. Ишмөхәмәтовты Башҡортостанға саҡыртып алып, республика хәрби комиссариатының комендант командаһы начальнигы итеп тәғәйенләйҙәр.

1922 йылдан Тамъян-Катай кантоны милицияһы начальнигы, 1923 йылдан кантондың финанс бүлегендә, 1924 йылдан социаль тәьминәт бүлеге, 1927 йылдан ер идаралығы начальнигы булып эшләй.

1928 йылда Кинйәбай Ишмөхәмәтов Тамъян-Ҡатай кантонының башҡарма комитеты рәйесе итеп ҡуйыла. 1931 йылдан Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау халыҡ комиссары вазифаһына тәғәйенләнә. Был вазифала уға оҙаҡ эшләргә насип булмай. 1937 йылдың 26 сентябрендә НКВД органдары тарафынан ҡулға алынып, 27 ноябрҙә атыла. 1956 йылда реабилитациялана.

Шәмсетдин Ғафаров

Шәмсетдин Шәйхетдин улы Ғафаров 1896 йылдың 15 авгусында Ырымбур губернаһы Верхнеуральск өйәҙенең (хәҙерге Баймаҡ районы) Ҡолсора ауылында тыуған. Темәс ауылында рус мәктәбен тамамлай. 1915 йылда Беренсе донъя һуғышына алына. Кавалерияла хеҙмәт итә. Вахмистр (хәҙергесә өлкән сержант дәрәжәһе) званиеһын ала. 1918 йылда һуғыштан ҡайтҡас, Башҡорт армияһына хеҙмәткә алына. Бында ул 1-се Башҡорт кавалерия полкында взвод командиры булып йөрөй. 1919 йылдың февралендә Башҡортостан хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыға. Муса Мортазин етәкселегендәге 1-се Башҡорт кавалерия полкында ҡыҙылдар (Смоленск полкы) менән бергә фронт тота. Һуғыша белмәһәләр ҙә, ябай башҡорт халҡын йәберләргә оҫтарған Смоленск полкы һалдаттарының башбаштаҡлығына тәҡәте ҡороған Муса Мортазин егеттәре, шул иҫәптән Ш. Ғафаров та, ҡыҙылдарҙы туҙҙырып, аҡтар яғына кире сығып китә. 1919 йылдың яҙы һәм йәйендә Муса Мортазин аҡтар яғындағы башҡорт һалдаттарын бергә туплап, үҙенең полкын бригада кимәленә үҫтерә. 1919 йылдың авгусында Мортазиндың Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы составында ҡыҙылдар яғына ҡабат сыға. 1919 йылдың көҙөндә Петроград фронтында һуғыша. 1920 йылдың майында Ш. Ғафаров хеҙмәт иткән 1-се Башҡорт кавалерия полкы Польша фронтындағы Башҡорт кавалерия бригадаһына ҡушыла. Бригаданың 27-се полкында 4-се эскадрон командиры сифатында поляктарға ҡаршы һуғыша. Күрһәткән батырлыҡтары өсөн М. В. Фрунзе ҡулынан исемле ҡылыс ала, ике тапҡыр Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. Реввоенсоветтың 57-се һанлы фарманында (1921 йылдың 17 феврале) былай тиелгән: «Утверждается присуждение... Реввоенсоветом 12-й армии ордена Красного знамени: ...Башкирских кавполков. 27-го... командиру 4-го эскадрона тов. Гафару Шамендину – за то, что 6 июня 1920 г., отправившись с эскадроном на поддержку 28-го кавполка и поведя наступление на дер. Пиняево, он бросился в конную атаку на противника, заставил его отступить и захватил неприятельское орудие французского образца...»

1921 йылдың 31 декабрендә Ш. Ғафаровтың икенсе тапҡыр орден менән бүләкләнеүе тураһында тағы бер фарман сыға: **«Утверждается присуждение... Реввоенсоветом Западного фронта ордена Красного знамени нижеименованным лицам за выдающуюся стойкость и доблесть, проявленные ими в период бывших наступательных боев на Варшаву и в последовавших затем арьергардных боях, а именно... по бывшей 12-й армии... командиру эскадрона 27-го Башкирского кавполка тов. Гафарову Шамендину...»**

Поляктар менән һуғыш бөткәндән һуң Ш. Ғафаров 27-се полктың хужалыҡ командаһы начальнигы була. 1920 йылдың декабренән 1921 йылдың мартына тиклем Киев хәрби округының 24-се уҡсы дивизияһы 2-се Башҡорт полкында взвод командиры булып хеҙмәт итә. 1921 йылда демобилизацияланып, тыуған яғына ҡайта. 1921–1923 йылдарҙа Йылайыр контонының хәрби комиссары ярҙамсыһы булып эшләй, 1923–1924 йылдарҙа Ҡазан хәрби-сәйәси мәктәбендә белем ала. 1923–1929 йылдарҙа Түбә ҡасабаһында (Баймаҡ районы) эшләй. 1929 йылдан 1-се Өфө ведомство милицияһының дивизион командиры, 1934 йылдан ведомство милицияһының айырым взводы командиры була. 1937 йылдың 17 октябрендә ҡулға алынып, контрреволюцион эшмәкәрлектә ғәйепләнеп, 8 декабрҙә атыла. 1956 йылда реабилитациялана.

Хәлфетдин Фәттәхетдинов

1892 йылда Ырымбур губернаһы Верхнеуральск өйәҙенең Салауат ауылында (хәҙерге Әбйәлил районы) тыуған. 1916 йылда Беренсе донъя һуғышына алына. Батша армияһында ул фельдфебель (хәҙергесә өлкән сержант) званиеһын ала, һуғышта взвод командиры була. Һуғыштан ҡайтҡас, 1918 йылда Башҡорт армияһына хеҙмәткә алына. Башҡорт корпусының 1-се кавалерия полкында йөрөй. 1919 йылдың февралендә Мортазин командалыҡ иткән 1-се Башҡорт кавалерия полкы составында ҡыҙылдар яғына сыға. Март аҙағында Мортазин менән ҡабат аҡтар яғына китә.

1919 йылдың августында Мортазиндың бригада кимәлендә үҫкән полкы менән тағы ҡыҙылдар яғына сыға. Тәүҙә Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһының 6-сы полкында, 1919 йылдың ноябренән 5-се кавалерия полкында (һуңынан ул 27-се полк тип атала) хеҙмәт итә. Бригада менән тәүҙә аҡтарға ҡаршы Урал фронтында (хәҙерге Ҡаҙағстан территорияһы), 1920 йылдың июненән Польша фронтында ҡатнаша.

Тәүҙә ул (1920 йылдың июненән) 27-се кавалерия полкының 1-се эскадроны командиры ярҙамсыһы булһа, артабан ошо эскадронға етәкселек итә. Поляктарҙы еңгәс, 1920 йылдың 1 ноябренән Киев хәрби округына ҡараған 24-се уҡсы дивизияһы составындағы 2-се Башҡорт кавалерия полкы 1-се эскадронының взвод командиры булып хеҙмәт итә. 1921 йылдың февраль-мартында ошо полктың хужалыҡ командаһы

начальнигы вазифаһын үтәй. Ошо йылда демобилизацияланып, ул тыуған яғына ҡайта. Польша фронтында күрһәткән батырлыҡтары өсөн Хәлфетдин Фәттәхетдинов ике тапҡыр (1921, 1922 йылдарҙа) Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә.

Реввоенсоветтың 1921 йылдың 17 февралендәге 57-се һанлы фарманында былай тиелгән: **«Утверждается присуждение... Реввоенсоветом 12-й армии ордена Красного знамени: Башкирских кавполков... 27-го помощнику командира 1-го эскадрона тов. Фаттахетдинову – за захват во главе трех красноармейцев у дер. Пиняево 6 июня 1920 г. 25 поляков, 2 автоматических винтовок и запасных частей...»**

Бер йылдан һуң, 1922 йылдың февралендә, Реввоенсоветтың 34-се һанлы фарман менән Х. Фәттәхетдинов икенсе тапҡыр орденға лайыҡ була: **«...Утверждается присуждение... Реввоенсоветом Киевского военного округа ордена Красного знамени: 2-го Башкирского кавалерийского полка... командиру взвода тов. Фаттахетдинову Хальфетдину – за отличие, оказанное в бою 21 ноября 1920 г. у дер. Клининцы...»**

Хәлфетдин Фәттәхетдиновты икенсе батырлығы өсөн полк командирының орденға тәҡдим итеп яҙған представлениеһында (1920 йылдың декабре) ентекле бәйән ителгән: **«...в бою 21 ноября 1920 г. ворвавшись в дер. Клининцы, бросился на противника, продолжавшего обстреливать картечью из одного орудия, и, кроме того, из двух пулеметов; подскакав к офицеру, не прекращавшему стрельбу из пулемета, зарубил его, оставшаяся орудийная и пулеметная прислуга сдалась Фаттахетдинову и подоспевшим красноармейцам. Результатом поступка Фаттахетдинова, увлекшего остальных красноармейцев, было взятие одного орудия, двух пулеметов и нескольких пленных противника...»**

1921 йылда Башҡортостанда ҡот оскос аслыҡ була. Хеҙмәттән ҡайтҡас та уҡ Хәлфетдин Фәттәхетдинов Тамъян-Ҡатай кантонында «Башпомгол»дың урындағы ойошмаһында эшләй. Артабан Салауат ауыл советы рәйесе урынбаҫары вазифаһын башҡара. 1930 йылдан Таштимер элемтә бүлексәһен етәкләй. 1938 йылда ауырып вафат була.

Ғәббәс Рыҫҡолов

Ғәббәс Шәйхислам улы Рыҫҡолов 1894 йылдың 4 мартында Ырымбур губернаһы Верхнеуральск өйәҙенең Ярлыҡап ауылында (хәҙерге Әбйәлил районы) тыуған. 1915 йылда Беренсе донъя һуғышына алына. Себер уҡсы дивизияһының 39-сы полкында хеҙмәт итә. Һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн Георгий тәреһе менән бүләкләнә. 1917 йылдың апрелендә Ғ. Рыҫҡолов 1-се Улан кавалерия полкына өлкән унтер-офицер итеп тәғәйенләнә.

1917 йылдың декабрендә фронттан ҡайта. 1918 йылдың февралендә Тамъян-Түңгәүер олоҫо ревкомы ағзаһы итеп һайлана. Верхнеуральскиҙа үткән Советтар съезында булып ҡайта. Советтар бойороғо буйынса Тамъян-Түңгәүер олоҫонда Ҡыҙыл Армияға аттар йыйыу менән шөғөлләнә. 1918 йылдың апрель башында Кашириндарҙың ҡыҙыл отрядына яҙыла. Уны пулемет командаһына тәғәйенләйҙәр. Әммә оҙаҡламай, Тирлән ауылы янында атаман Анненковтың полкына әсиргә эләгә. Казактар уны полктың ылауына хеҙмәткә ҡуша.

Ғ. Рыҫҡолов ҡасып тыуған яғына ҡайта һәм 28 июлдә Башҡорт армияһының 1-се кавалерия полкында хеҙмәткә алына. Тәүҙә отделение, артабан взвод командиры булып китә. 1919 йылдың ғинуарында эскадрон командиры итеп ҡуйыла. Февралдә башҡорт ғәскәрҙәре ҡыҙылдар яғына сыҡҡас, Муса Мортазин командалыҡ иткән 1-се Башҡорт полкы менән Әбйәлил районы территорияһында аҡтарға ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнаша. 1919 йылдың апрелендә Муса Мортазин менән кире аҡтар яғына сығып китә. Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы 1919 йылдың авгусында ҡыҙылдар яғына ҡабат сыҡҡас, Урал фронтында аҡтарға ҡаршы һуғыша. 1920 йылдың апрелендә бригада составында Польша фронтына китә. Бында ул 27-се Башҡорт кавалерия полкының 1-се эскадроны менән командалыҡ итә. 1920 йылдың 1 июнендә поляктарҙы ҡыуып, бригаданан беренсе булып үҙенең эскадроны менән Днепрҙы аша сыға.

Ғәббәс Рыҫҡолов Польша фронтында күрһәткән батырлыҡтары өсөн Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. Реввоенсоветтың фарманында (1921 йылдың 17 феврале, № 57): **«1920 йылдың 11 июнендә ул 5 ҡыҙылармеец менән Гезикевичи ауылында дошмандың 84-се Дон кавалерия полкының штабын полк командиры һәм эйәрләнгән аттары менән һаҡта торған 50 казагы менән ҡуша ҡулға алды»**, – тиелгән.

1921 йылдың февралендә Ғ. Рыҫҡолов Себерҙәге күтәрелештәрҙе баҫтырыу өсөн Барнаулға ебәрелә, артабан барон Унгерндың отрядтарын ҡыйратыуҙа ҡатнаша. 1923 йылдың ғинуарында тыуған яғына ҡайтҡас, ауыл советы рәйесе итеп һайлана, 1924 йылдан Тамъян-Түңгәүер олоҫо башҡарма комитеты рәйесе, 1931 йылдан Әбйәлил райсоветы рәйесе була. 1934 йылдан Учалы, Мәсетле райондарында райсовет рәйесе вазифаһын башҡара. 1935 йылда Аҡ армияла хеҙмәт итеүен йәшереп йөрөгән, тип партиянан сығаралар. Эшенән сығып тыуған яғында йәшәй. Ә инде 1937 йылда ҡулға алынып, Өфөгә оҙатыла. 8 декабрь атыла. 1956 йылда реабилитацияланған.

Шәмсетдин Яҡшыгилдин

Шәмсетдин Ғәләүетдин улы Яҡшыгилдин 1896 йылда Ырымбур губернаһы Орск өйәҙе 2-се Түңгәүер олоҫоноң Матрай (Мөхәмәтрәхим) ауылында (хәҙерге Йылайыр районы) тыуған. 1915 йылда Беренсе донъя һуғышына алына. 1918 йылдың апрелендә яраланып, авгусҡа тиклем госпиталдә ята. Унан тыуған яғына ҡайта. 1918 йылдың аҙағында Баш-

ҡорт армияһына хеҙмәткә алына. 1919 йылдың февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре Совет власы яғына сыҡҡас, Ш. Яҡшығилдин башҡорт полктары составында Саранск ҡалаһына оҙатыла. Бында ул Айырым Башҡорт бригадаһының (аҙаҡ бригада Башҡорт кавалерия дивизияһына үҙгәртелә) 2-се кавалерия полкында була. Ошо полк составында ул 1919 йылдың июнендә Көньяҡ фронтҡа (Украинаға), Деникин ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғышҡа оҙатыла. Деникин ғәскәрҙәренә ҡаршы ҡанлы һуғыштарҙа ҡатнашҡандан һуң, Шәмсетдин Яҡшығилдин 1919 йылдың сентябрендә Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы составында Петроград янына, Юденич армияһына ҡаршы һуғышҡа оҙатыла. Бында ул Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмө составына ингән 3-сө Башҡорт кавалерия полкында взвод менән етәкселек итә.

Петроградта башҡорт ғәскәрҙәрен театр, музейҙарға йөрөтәләр. Бер мәл башҡорт һалдаттары Петроградтың тарих музейына экскурсияға барғанда, Шәмсетдин Яҡшығилдиндың һабы алтын һәм көмөш менән биҙәлгән боронғо бер ҡылысҡа күҙе төшә. Хайран ҡалып ҡарап торған мәлдә музейҙың хеҙмәткәре килеп был ҡылыстың тарихын һөйләп бирә: рус-төрөк һуғышы ваҡытында ҡулға төшкән бер төрөк генералыныҡы икән. Башҡорт яугирының ныҡ ҡыҙыҡһыныуын күргән музей хеҙмәткәрҙәре, был зиннәтле ҡылысты бүләк итә. Дошмандарҙы ҡырып бөткәс, ҡылысты музейға ҡабат ҡайтарырһығыҙ, тиҙәр улар Шәмсетдингә. Әммә башҡорт яугирына был ҡылысты тиҙ арала ғына музейға ҡайтарып бирергә тура килмәй. 1920 йылда 1-се Башҡорт кавалерия составында Шәмсетдин Польша фронтына, Муса Мортазин етәкселек иткән Башҡорт кавалерия бригадаһына, оҙатыла.

Поляктарға ҡаршы һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн 2-се Башҡорт кавалерия полкы 3-сө эскадронының взвод командиры Шәмсетдин Яҡшығилдин 1921 йылда Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. Киев хәрби округы Реввоенсоветының 1921 йылдың 29 сентяберендәге фарманында былай тиелгән: **«3-сө эскадрондың взвод командиры Яҡшығилдин Шәмсетдин иптәш полк командиры һәм ике ҡыҙылармеец менән бергә Гоноровка ауылы янындағы быуаны баҫып алып, дошмандың биш орудиеһының, ылау һәм пехота частарының сигенеү юлын киҫкәне өсөн; ошоноң һөҙөмтәһендә дошмандың ошо частары бөтәһе лә беҙҙең ҡулға төштө»**. Орден менән бүләкләү тураһындағы фарман 1922 йылдың 7 февралендә РСФСР Реввоенсоветының 34-се һанлы фарманы менән раҫлана.

Шәмсетдин Яҡшығилдин демобилизацияланып, тыуған яғына ҡайтыр алдынан төрөк ҡылысын Петроград музейына тапшырығыҙ, тип Ҡыҙыл (Червонная) казак дивизияһына ҡалдырып китә.

Тыуған яғына ҡайтҡас, 1922 йылдың февралендә Матрай ауыл советының тәүге рәйесе итеп һайлана. Артабан, 30-сы йылдарҙа «Новый мир» колхозының рәйесе була. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша. Яраланып, 1943 йылда демобилизациялана. Ул 1973 йылда, 77 йәшендә донъя ҡуя.

Зaһиҙулла Ҡаҙнабаев

Зaһиҙулла Мортаза улы Ҡаҙнабаев 1897 йылда Ырымбур губернаһы Орск өйәҙе 2-се Түңгәүер олоҫоноң Балапан ауылында (хәҙерге Йылайыр районы) тыуған. 1918 йылда Башҡорт армияһында 1-се кавалерия полкында хеҙмәт итә. Башҡорт ғәскәрҙәре ҡыҙылдар яғына сыҡҡас, 1919 йылдың көҙөндә Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмө составында Петроградты һаҡлауҙа ҡатнашҡанлығы билдәле. Тимәк, 1919 йылдың йәйендә ул Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы менән Көньяҡ фронтҡа (Украинаға) Деникинға ҡаршы ебәрелгән. Унан башҡорт ғәскәрҙәре Петроградҡа ташлана. 1920 йылда Башҡорт дивизияһының Петроград һуғышынан иҫән ҡалған ғәскәрҙәрен бер полкка туплап, Польша фронтына, Мортазиндың атлы бригадаһын тулыландырырға ебәрәләр.

Зaһиҙулла Ҡаҙнабаев ошо рәүешле Польша фронтына, Мортазин бригадаһына барып эләккәндер, күрәһең. Бында ул 27-се Башҡорт кавалерия полкының Ш. Ғафаров етәкләгән 4-се эскадронында взвод командиры була. **1920 йылдың 6 июнендә Пиняево ауылы яу барышында З. Ҡаҙнабаев үҙенең взводы егеттәре менән флангынан һөжүм итеп, контратакаға күтәрелгән поляктарҙы пулеметтарын ташлап ҡасырға мәжбүр итә. Ошо батырлығы өсөн ул 1921 йылдың 17 февралендә Республика Реввоенсоветының 57-се һанлы фарманы менән Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була.**

Демобилизацияланып, тыуған яғына ҡайтҡас, 1922–1924 йылдарҙа Ҡаҙнабаев Йылайыр кантоны Түңгәүер олоҫоноң Сәлим ауыл советы рәйесе вазифаһын башҡара. 1925–1927 йылдарҙа Сибай мәғдәнлегендә өлкән милиционер булып эшләй. 1930 йылда Баймаҡ районы советы рәйесе итеп һайлана. 1932–1933 йылдарҙа ул Ленинградта милиция курстарында уҡып ҡайта. Артабан Ейәнсура районының милиция начальнигы итеп тәғәйенләнә. 1934 йылдан Баймаҡ районында төрлө яуаплы вазифалар (милиция начальнигы, ДОСААФ рәйесе һ. б.) башҡара.

1942 йылда ҡулға алына һәм милләтселектә, Совет власына ҡаршы ейәнәтселектә ғәйепләнеп, 10 йылға иркенән мәхрүм ителә. Зaһиҙулла Ҡаҙнабаев 1943 йылдың 27 майында Свердловск өлкәһендә төрмәлә вафат була.

Фәттәх Ибраһимов

Фәттәх Әҙелмырҙа улы Ибраһимов 1892 йылдың 22 мартында Ырымбур губернаһы Верхнеуральск өйәҙенең Әлмөхәмәт ауылында (хәҙерге Әбйәлил районы) тыуған. 1917 йылғы революцияға тиклемге биографияһы тураһында мәғлүмәттәр юҡ. 1918 йылда аҡтар яғында Башҡорт армияһы сафтарында, 1-се Башҡорт кавалерия полкында хеҙмәт иткән булһа кәрәк.

1920 йылда Польша фронтында ул Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһында 28-се кавалерия полкы командиры ярҙамсыһы вазифаһын-

да була. 1920 йылдың июнендә Киев операцияһы барышында ҡаһарманлыҡ күрһәтеп, Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була. 1921 йылдың 17 февралендә сыҡҡан Реввоенсоветтың 57-се һанлы фарманында былай тиелгән: **«1920 йылдың 5 июнендә Башҡорт кавалерия бригадаһы Пиняево ауылына һөжүм иткән ваҡытта ул бер эскадрон менән дошман батареяһының артына үтеп инеп, ҡапыл ябырылып, уларҙы ҡасырға мәжбүр итеп, кешеләре менән бергә ике орудиены, боеприпастары, 2 пулемет һәм ике ылауҙы ҡулға төшөрҙө»,** – тиелә. Ҡыҙыл Байраҡ ордены уға 1922 йылда тапшырыла.

Фронттан ҡайтҡас, 1922 йылға тиклем Бөрйән-Түңгәүер кантоны хәрби комиссары булып хеҙмәт итә. Артабан Иркутск ҡалаһында Себер тау институтында уҡып, тау инженеры һөнәрен үҙләштерә. Баҡырүҙәк һәм Ишбирҙе мәғдәнлектәрендә эшләй, артабан Түбә мәғдән идаралығының (рудоуправление) управляющийы вазифаһын башҡара. БАССР-ҙың почетлы таусыһы (горняк) исемен ала. 30-сы йылдар аҙағында поисковая партия начальнигы булып эшләй. Репрессия елдәре Фәттәх Ибраһимовты ла урап үтмәй, 1937 йылдың 21 августа ҡулға алына. Шул уҡ йылдың 8 декабрендә Өфөлә атыла. 1956 йылдың июлендә реабилитациялана.

Ғәҙелша Ейәнсурин

Ғәҙелша Дәүләт улы Ейәнсурин 1894 йылда Ырымбур губернаһының Ырымбур өйәҙе (хәҙерге Күгәрсен районы) Буҫтыбай ауылында тыуған. Сәйетҡол ауылында 2 синыфлы училищела уҡый. Артабан Ырымбур ҡалаһында Хөсәйеновтың типографияһында эшләй. 1916 йылда Беренсе донъя һуғышына алынып, уҡыу командаһына ебәрелә. Унтер-офицер званиеһы ала. Көнбайыш фронтта 104-се пехота полкының взвод командиры булып хеҙмәт итә. 1917 йылдың декабрендә фронттан ҡайтҡас, 2-се Ҡараҡыпсаҡ олоҫо идараһында делопроизводитель булып эшләй. Башҡортостан автономияһы төҙөлгәс, Ҡыпсаҡ кантоны идараһында эшләй.

1919 йылдың февралендә Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре советтар яғына сыҡҡас, Башревкомдың бойороғо буйынса Ҡыпсаҡ кантисполкомын ойоштороу менән шөғөлләнә. Әммә ауырып китеп, тыуған ауылына ҡайта, был осорҙа Башҡортостан территорияһын аҡтар баҫып ала. Колчак ғәскәренә хеҙмәткә алына. Белов корпусындағы кавалерия полкында хеҙмәт итә. 1919 йылдың авгусында Орск янында аҡтар сигенә башлағас, бер төркөм башҡорт һалдаттары менән ҡыҙылдар яғына сыға. Һалдаттарҙы төрлө частарға тараталар. Ғ. Ейәнсурин яңы ғына ҡыҙылдар яғына сыҡҡан Мортазин бригадаһына барып эләгә. Башҡорт кавалерия бригадаһында эскадрон командиры сифатында 1919 йылда Урал фронтында, 1920 йылда поляктарға ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнаша. 1920 йылдың декабренән 2-се Башҡорт кавалерия полкының эскадрон коман-

дирҙы итеп тәғәйенләнә. Польша фронтында күрһәткән батырлыҡтары өсөн 1922 йылда Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнә. Реввоенсоветтың 34-се һанлы (1922 йылдың 7 феврале) фарманында былай тиелгән: **«1-се эскадрон командиры Ейәнсурин Ғәҙелша иптәш – 1920 йылдың 14 ноябрендә Юзвин ауылы янында иптәштәрен үҙенең ҡыйыулығы менән рухландырып, үҙҙәрен уратып үтергә маташыусы дошманға ҡаршы алып киткәне һәм атып ятҡан бер пулеметты, ике пулеметсыны, йәнә биш әсир алғаны өсөн».**

1921 йылдың декабрендә Башвоенкомат тарафынан Стәрлетамаҡҡа саҡыртып алына һәм атлы конвой командаһының начальнигы итеп тәғәйенләнә, һуңынан БашЧК-ла эшләй. 1923 йылдың мартында Йылайыр кантонына милиция начальнигы урынбаҫары итеп ебәрелә, артабан Башглавсудтың Йылайыр кантонындағы вәкиле итеп тәғәйенләнә. 1925 йылда Тамъян-Катай кантонына, һуңынан Арғаяш кантонына күсерелә. 1928 йылдан Өфөлә, БАССР прокуроры ярҙамсыһы вазифаһын башҡара. 1934 йылдан БАССР-ҙың коммуналь хужалығы комиссары булып эшләй. 1937 йылдың 9 августында буржуаз-милләтселектә ғәйепләнеп, ҡулға алынып, атыла. 1956 йылда реабилитацияланған.

«Бәхет көнө»

Республиканың ижтимағи ойошмалар үҙәк архивында Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте, башҡорт ғәскәрҙәре тарихына бәйле, Башҡортостан автономияһы төҙөлгән осорға ҡараған бик тә ҡыҙыҡлы һәм ҡиммәтле бер документ һаҡлана. Ул – Башҡорт хөкүмәте һәм башҡорт ғәскәрҙәренең советтар яғына сығыуына бер йыл тулыу айҡанлы, 1920 йылдың ғинуарында Петроградта баҫтырып сығарылған «Бәхет көнө» исемле йыйынтыҡ-альбом. Ул осорҙа ҡулланылған иҫке төрки телендә яҙылған.

Башҡорт кавалерия дивизияһы Петроградҡа килеп төшөү менән уның сәйәси бүлеге «Салауат» тигән ғәскәри гәзит сығарыуҙы юлға һала. Уның мөхәррире итеп Ғабдулла Ғисмәти тәғәйенләнә. «Салауат» гәзитен сығарыуҙа Башҡорт кавалерия дивизияһының комиссары Нуриәғзәм Таһиров әүҙем ҡатнаша. Ул гәзиттең мөхәрририәт ағзаһы була, күп яҙыша. Фотоларҙан күренеүенсә, Петроградҡа килеп төшкән Башҡорт уҡсы бригадаһы яугирҙарын Башҡорт кавалерия дивизияһы сәйәси бүлеге «Салауат» гәзите менән ҡаршылаған булған.

1920 йылдың ғинуарында Башҡорт кавалерия дивизияһы һәм Башҡорт уҡсы бригадаһының сәйәси бүлектәре тарафынан Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәренең советтар яғына сығыуына бер йыл тулыуға ҡарата «Бәхет көнө» тип аталған күләмле генә йыйынтыҡ-альбом сыға. Был журнал нимәһе менән ҡыҙыҡлы һуң? Тәү сиратта, Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте етәксеһе Әхмәтзәки Вәлидиҙең һәм әлегә беҙгә аҙ билдәле булған башҡорт комиссарҙарының яҙмалары урын алған. Бынан тыш, альбомда ҡырҡтан ашыу башҡорт ғәскәрҙәренең фотоһүрәттәре баҫылған.

Журналдың тәүге өлөшөндә башҡорт һалдаттарына советтар яғына сығыуҙың әһәмиәтен аңлатҡан, башҡорт халҡына файҙаһы, Үҙәк властың Башҡорт автономияһына ярҙамы тураһында бәйән иткән Башҡорт дивизияһы һәм Башҡорт бригадаһы сәйәси бүлектәренең яҙмаһы урын алған. Был осорҙа ғәскәрҙәрҙә большевиктар башҡорттарға автономия бирмәйәсәк тигән һүҙҙәр, төрлө провокациялар күп булған. Быны архив документтары асыҡ һөйләй. Бына, мәҫәлән, Башревком рәйесе Харис Йомағолов Петроградҡа, 1919 йылдың 19 декабрендә Башҡорт кавалерия дивизияһы комиссары Н. Таһировҡа ебәргән хатында:

«...Нур-Агзам! По некоторым сведениям, наших красноармейцев в Белебее настраивали против нас, т.е. Ревкома и Б.С.Р. и против Советов, так прими меры, чтобы рассеять лживые, провокацион-

32-се һүрәт. Петроградҡа килгән Башҡорт уҡсы бригадаһы һалдаттарына вокзалда «Салауат» гәзите таратыла. 1919 йыл, сентябрь

33-сө һүрәт. 3-сө Башҡорт кавалерия полкы фронтҡа китер алдынан. 1919 йыл, октябрь

34-се һүрәт. Башҡорт кавалерия дивизияһының техник эскадроны Октябрь революцияһының ике йыллығына бағышланған парадта. Петроград. 1919 йыл, 7 ноябрь

35-се һүрәт. Башҡорт ғәскәрҙәре Революция ҡорбандары майҙанында смотр ваҡытында Көнбайыш фронттың инспекторы Розенберг һәм Петроград оборонаһы штабы ағзалары алдынан үтә. 1919 йыл, 28 ноябрь

36-сы һүрәт. Петроградты һаҡлауҙа күрһәткән ҡаһарманлыҡтары өсөн башҡорт ғәскәрҙәренә рәхмәт белдереп Петроград Советы тарафынан бүләк ителгән байраҡ. Башҡортостан Республикаһының Милли музейында һаҡлана



37-се һүрәт. Башҡорт кавалерия дивизияһының сәйәси бүлеге тарафынан сығарылған «Салауат» гәзите

38-се һүрәт. Алғы планда *(һулдан уңға)* Башҡорт кавалерия дивизияһы комиссары Н. Таһиров, дивизия начальнигы А. Ахлов, Башревком вәкиле Ф. Төхвәтуллин. Петроград. 1919 йыл, сентябрь

39-сы һүрәт. Башҡорт һалдаттары фронтҡа юллана. 1919 йыл

40-сы һүрәт. Башҡорт кавалерия полкының Петроградҡа килеп төшөү мәле. 1919 йыл, сентябрь

41-се һүрәт. 3-сө Башҡорт кавалерия полкы фронтҡа китер алдынан. Петроград. 1919 йыл, октябрь

42-се һүрәт. Башҡорт кавалерия дивизияһы комиссары Н. Таһиров *(уртала автомобилгә таянып тора)* Петроград нығытма районы вәкилдәре менән, 3-сө кавалерия полкын фронтҡа оҙатҡан мәлдә. Петроград. 1919 йыл, октябрь

43-сө һүрәт. Башҡорт кавалерия дивизияһы етәкселеге Муравьев казармаларында. Икенсе рәттә *(һулдан уңға ултыралар)*: *(дүртенсе)* – Ғабдулла Ибраһимов, *(етенсе)* – Фәтхи Әхмәҙуллин. 1920 йыл

44-се һүрәт. Рәссам Борис Пискуновтың «Переход Башкирских белых войск на сторону красных у д. Темясово 19 февраля 1919 года» исемле акварель картинаһы. 1930 йылда төшөрөлгән. М. В. Нестеров исемендәге Башҡорт Дәүләт һынлы музейы

45-се һүрәт. Октябрь революцияһының ике йыллығына бағышланған тантанала Башҡорт уҡсы бригадаһының сәйәси бүлеге. *(Беренсе рәттә һулдан уңға)*: *(беренсе)* – Ә. Ямалиев, *(икенсе)* – Ш. Мусин, *(өсөнсө)* – В. Ҡәҙермәтов, *(бишенсе)* – И. Байморатов; *(алда)* – Бикчәнтәев. Петроград. 1919 йыл, 7 ноябрь

46-сы һүрәт. Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәренең советтар яғына сығыуына бер йыл тулыуға арнап сығарылған «Бәхет көнө» йыйынтығынан. 1920 йыл

47-се һүрәт. Башҡорт ғәскәрҙәре Саранскиҙа. 1919 йыл

48-се һүрәт. Саранскиҙа бер төркөм башҡорт ғәскәре командирҙары. Беренсе рәттә *(уртала)* – Сөләймән Ишмырҙин (1-се Башҡорт уҡсы полкы командиры), икенсе рәттә *(һулдан уңға икенсе)* – Әүхәҙи Ишмырҙин

49-сы һүрәт. Башҡортостан хөкүмәте (Башревком) һәм башҡорт ғәскәрҙәре Саранск ҡалаһында эвакуацияла саҡта. Исмәғил Муһлиә (З. Вәлидиҙең адъютанты) менән Мәрйәм ханымдың туйы. Беренсе рәттә *(ерҙә ултыралар һулдан уңға)*: *(беренсе)* – Ғ. Тереғолов – хәрби табип, *(икенсе)* – Х. Тереғолов – офицер, *(өсөнсө)* – У. Тереғолов – 1-се Башҡорт кавалерия полкы командиры, *(уңдан беренсе)* – Й. Байышев – офицер, *(икенсе)* – Ғ. Тереғолов – офицер. Икенсе рәттә (*ултыралар һулдан уңға*): *(беренсе)* – С. Ишмырҙин – 1-се Башҡорт уҡсы полкы командиры, *(икенсе)* – Х. Әмиров – Айырым Башҡорт бригадаһы комиссары, *(уртала ҡылыс тотҡан)* – Х. Әлишев – 2-се Башҡорт кавалерия полкы командиры, уның уң яғында – И. Муһлиә һәм уның хәләл ефете Мәрйәм. Артҡы рәттә *(баҫып торалар һулдан уңға)*: *(икенсе)* – Ә. Ишмырҙин – Зәки Вәлидиҙең урынбаҫары, *(өсөнсө)* – Г. Ҡарамышев – Башсовнархоз рәйесе. 1919 йыл, май

50-се һүрәт. Башҡортостандың революцион хөкүмәте – Башревком. Беренсе рәттә *(һулдан уңға)*: А. Кречинский – Юстиция халыҡ комиссары вазифаһын башҡарыусы, А. Биркган – Башревком сәркәтибе, Г. Ҡарамышев – Башсовнархоз рәйесе, Ә. Ишмырҙин – республиканың хәрби комиссары Зәки Вәлидиҙең урынбаҫары, Х. Йомағолов – Башревком рәйесе, А. Йәғәфәров – Дәүләт контроле халыҡ комиссары, Ә. Бейешев – БашЧК рәйесе, артабан Дәүләт контроле, Социаль тәьминәт, Хеҙмәт комиссары, Ф. Төхвәтуллин – Эске эштәр халыҡ комиссары. Стәрлетамаҡ. 1919 – 1920 йылдар

51-се һүрәт. (Һулдан уңға): Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы штабы начальнигы Заһит Гәрәев, комиссары – Һиҙиәтулла Сәғәҙиев, командиры – Хәлил Әлишев. 1920 йыл

52-се һүрәт. Башҡорт кавалерия дивизияһы комиссары Нуриәғзәм Таһиров. 1919 йыл

53-сө һүрәт. Башҡорт армияһы офицеры, 1-се полк командиры Сөләймән Ишмырҙин

54-се һүрәт. Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһының командиры, ҡаһарман сардар Муса Мортазин

55-се һүрәт. Башҡорт кавалерия бригадаһы штабы. *(Һулдан уңға)*: бригада командиры М. Мортазин, штаб начальнигы Сәғитов, комиссар Богуславский. Урал фронты. 1919 йыл

56-сы һүрәт. Башҡорт кавалерия бригадаһы. Польша фронты. 1920 йыл

57-се һүрәт. Бригаданың бер төркөм яугирҙары. Беренсе рәттә *(уңда)* З. Ҡаҙнабаев. Польша фронты. 1920 йыл

58-се һүрәт. Башҡорт кавалерия бригадаһының ветерандары. 1923 йыл

59-сы һүрәт. Элекке Башҡорт кавалерия бригадаһының бер төркөм командирҙары. Беренсе рәттә *(һулдан уңға)*: Ә. Әхмәтов, Ш. Ғафаров, К. Ишмөхәмәтов, З. Ҡаҙнабаев, Сөләймәнов. Икенсе рәттә *(һулдан уңға)*: Ш. Яҡшығилдин, Т. Толомғужин, И. Фәсхетдинов, М. Латипов, Соловьев, Ғ. Аҡмәмбәтов

60-сы һүрәт. Башҡорт кавалерия бригадаһының взвод командиры Заһиҙулла Ҡаҙнабаев. Польша фронты. 1920 йыл

61-се һүрәт. Башҡорт кавалерия бригадаһының эскадрон командиры Шәмсетдин Ғафаров. Польша фронты. 1920 йыл

62-се һүрәт. Башҡорт кавалерия бригадаһының взвод командиры Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры Шәмсетдин Яҡшыгилдин

63-сө һүрәт. Башҡорт кавалерия бригадаһының тәьминәт бүлеге начальнигы Әхмәҙей Мортазин

ные слухи красноармейцев. Прочти постановление ВЦИК, наши приказы и обращения», — тип яҙа.

Сәйәси бүлектәрҙең агитацион мөрәжәғәттәренән һуң, Әхмәтзәки Вәлидиҙең **«Башҡорттарҙың боронғо ғәскәрҙәре хаҡында»** тип исемләнгән тарихи мәҡәләһе урын алған. Бында ул башҡорттоң хәрби тарихына ҡыҫҡаса байҡау яһаған һәм батша власының башҡорттарға ҡарата алып барған сәйәсәтенә баһа биргән. Зәки Вәлидиҙең был мәҡәләһендә ентекле тарихи һандар, мәғлүмәттәр килтергән. Шуныһы ҡыҙыҡлы, З. Вәлиди был теманы ҡасан өйрәнеп өлгөргән икән? 1917—1919 йылдарҙа тарих менән шөғөлләнеп ултырырға уның, ай-һай, ваҡыты булмағандыр. Тимәк, был теманы 1917 йылға тиклем өйрәнгән, күрәһең.

Зәки Вәлидиҙән һуң **Хәлим Әмировтың «Башҡорт хәрәкәте»** тигән мәҡәләһе килә. Унда: «Хәлим иптәш Әмировтың Петроградтағы башҡорт полктарындағы беренсе коммунистар конференцияһында һөйләгән «Башҡорт хәрәкәте» докладынан алынды», — тиелгән. Хәлим Әмиров — Башҡорт милли хәрәкәтенең иң ауыр осорҙарында, уның уртаһында ҡайнаған, ғәскәрҙәр менән бергә йөрөгән комиссарҙарҙың береһе. Әлеге йыйынтыҡта баҫылған докладында Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең тарихы бик ҡыҫҡа, әммә ентекле итеп бәйән ителгән. Ҡыҙылдар яғына сыҡҡандан һуң, 1919 йылдың февраль-март айҙарында, Башҡортостанда булып үткән фажиғәле ваҡиғаларҙы, Ҡыҙыл Армияның башбаштаҡлыҡтарын асыҡ яҙып үткән.

Артабан «Бәхет көнө» журналында **«Күсәрбай»** исемле хикәйә бирелгән. Хикәйәнең тәүге өлөшөндә Петроградҡа килгән башҡорт ғәскәрҙәренең митингыһы матур итеп тасуирланһа, икенсе өлөшөндә һүҙ ғәскәрҙәрҙең һуғышҡа әҙерлеге тураһында бара. Ә аҙаҡҡы бүлегендә полк командирының әмер йөрөтөүсеһе Күсәрбай исемле башҡорт һалдатының төндә дошман тылына разведкаға барыуы, уның батырлыҡтары хаҡында бәйән ителә. Әйткәндәй, журналист Мостафа Солтанов «Ватандаш» журналындағы (1998 йыл, № 2, «Көйөргәҙе яугирҙары», Мостафа Солтанов) мәҡәләһендә 1919 йылда Петроградта хеҙмәт иткән эскадрон командиры Ғәйнулла Күсәрбаевты телгә ала. Уның фамилияһының әлеге хикәйәгә бер бәйләнеше барҙыр, моғайын. Был әҙәби әҫәрҙең авторының исем-шәрифе лә бик үк асыҡ түгел. Хикәйәнең аҙағында «Фәтхи» тигән имза ғына ҡуйылған. Ғалим Миңлеғәле Нәҙерғоловтың фекеренсә, ул Фәтхелҡадир Сөләймәнов (эмиграцияла Абдулҡадир Инан) булырға тейеш. Фронттағы башҡорт ғәскәрҙәре эш буйынса революцион совет рәйесе Фәтхей Әхмәҙуллин булыуы ла ихтимал. Нисек кенә булмаһын, Граждандар һуғышы осорондағы башҡорт ғәскәрҙәре тураһында тәүге әҙәби әҫәр буларак, тарихсылар өсөн дә, әҙәбиәтселәр өсөн дә бик ҡыҙыҡлы был яҙма.

«Күсәрбай» хикәйәһенән һуң тағы бер күренекле милли-хәрәкәт эшмәкәре, Башҡорт уҡсы бригадаһының комиссары **Ғабдулла Ибраһимовтың «Башҡортостан хәрәкәте»** тигән мәҡәләһе урын алған. Артабан был журналда 1919 йылдың 23 мартында Үҙәк Совет власы

менән Башҡорт хөкүмәте араһында төҙөлгән Башҡортостан Совет Автономиялы Республикаһы ойоштороу тураһындағы килешеүҙең тулы тексы баҫылған. Шулай уҡ Башҡортостан автономияһына ҡаршы эшләмәҫкә, башҡорттарҙы йәберләмәҫкә тигән фарман менән Ҡыҙыл Армияға ебәрелгән Троцкийҙың телеграммаларының тексы бирелгән һәм аҙағында: «Иптәштәр! был юғарыла күрһәтелгән фармандар үҙҙәре өсөн үҙҙәре бик яҡшы һөйләйҙәр, улар үҙҙәреннән-үҙҙәре мәғлүм, уны аңғартып тораһы юҡ. Беҙ хитапнамә менән һәммә башҡорт халҡына мөрәжәғәт итәбеҙ: яҙылығыҙ Башҡорт Ҡыҙыл армияһына!

Хәҙер башҡорттарҙың үҙҙәренең советтар нигеҙендә төҙөлгән автономияһы бар – башҡорттарҙың күптән теләгән маҡсаты хасил булды. Ул автономияны һаҡлау өсөн Башҡорт армияһы төҙөлә. Бына шул Ҡыҙыл Башҡорт армияһына яҙылырға һеҙҙе саҡырам!

Йәшәһен Башҡортостан армияһы!

Советтар нигеҙендә төҙөлгән Автономиялы Башҡортостандың Хәрби революцион комитеты», – тигән Харис Йомағоловтың мөрәжәғәте менән тамамлана әлеге йыйынтыҡ.

«Бәхет көнө» журналының иҫке төркиҙән тәржемәһен, йәғни үрҙә телгә алған Башҡорт кавалерия дивизияһы һәм Башҡорт уҡсы бригадаһы мөрәжәғәттәре, Зәки Вәлидиҙең – «Башҡорттарҙың боронғо ғәскәре хаҡында», Хәлим Әмировтың – «Башҡорт хәрәкәте», Ғабдулла Ибраһимовтың – «Башҡортостан хәрәкәте» исемле яҙмалары һәм Фәтхиҙең «Күсәрбай» хикәйәһен тәҡдим итмәксемен. Тәржемә иткән саҡта оригинал текстарҙың стилистикаһы үҙгәртелмәне.

Бәхет көнө

Бөгөнгө ун һигеҙенсе февраль көнө – башҡорт халҡының яуыз байҙар ялсыларының алдауынан ҡотолған көнө.

Бөтһөн байҙарға ялсылыҡ итеү!
Йәшәһен халыҡтың иркенлектә йәшәүе!

Бөгөнгө ун һигеҙенсе февраль көнө – ярлы башҡорт халҡының үҙ файҙаһын аңлап, ярлыларҙың яҡлаусыһы – Советтар власы яғына сығып, ярлы меҫкен халыҡтарҙың азатлығы өсөн һуғышырға ант иткән көнө.

Йәшәһен ярлы халыҡтың берләшеүе!
Йәшәһен Советтар власы!

Бөгөн, 18-се февраль көнө – башҡорт халҡының яуыз Учредилка (Учредитель йыйылышы ағзалары Комитеты йәки Һамар хөкүмәте. – *А. Я.*), меньшевиктар, эсерҙар көслөгөнән ҡотолоп, хеҙмәт-эштең өҫтөнлөккә сығыуын раҫлаған коммунистарҙың сафына теҙелгән көндөр.

Йәшәһен коммунистар партияһы!
Йәшәһен коммунистар партияһының башлығы —
рухы иптәш Ленин!

Иптәштәр!

Башҡорт халҡының батша башбаштаҡлығынан ғына түгел, Учредилка ағзаларының, эсер-меньшевиктарҙың иблисләнеп (Иблис кеүек. — *А. Я.*) алдауынан ҡотолоуына нәҡ бер йыл тулды. Романов нәҫелдәренең мәсхәрәләүенә, башбаштаҡланыуына ҡаршы әллә нисә мәртәбә баш күтәргән башҡорт халҡы үҙенә азат тормошҡа ынтылыуы һәм иҙелгән халыҡтарға мәҙәни һәм иҡтисади хәлдәрен күтәреү юлында бөтә ҡеүәтен сарыф итеүгә мөмкинлек биреүсе мөстәкил йәшәүгә талпыныуы өсөн бик ныҡ язаланды. Башҡорт халҡы батша золомона ҡаршы етмештән артыҡ баш күтәрҙе, ләкин һәр береһендә ҙур һәләкәткә осраны, ләкин ул һис бер ваҡыт рухын һүндермәне — Романов нәҫеле батшаларының золомонан ҡотолоуға өмөтөн өҙмәне. Февраль революцияһы башҡорттар өсөн халыҡ тормошон яҡшыртырға мөмкинлек бирәсәк, күптән көтөлгән һәм халыҡтарҙың иҙелгән, коллоҡ хәленән ҡотолорға сәбәпсе булған саҡ кеүек күренде.

Ләкин ул саҡта хөкүмәт башында тороусы эсер-меньшевиктар оҙаҡ көттөрмәнеләр, үҙҙәренең ысын йөҙөн тиҙ астылар һәм башҡорттарҙың бара торған юлы улар менән бергә түгел икәнлеге асыҡланды.

Ләкин Учредилка ағзаларының иблисләнеп алдауына бирелеп киткән башҡорт халҡы Рәсәйҙең ысын революцион пролетариаты менән Октябрь революцияһының беренсе көндәренән үк берегеүгә мөмкинлек таба алманы. Учредилка ғәскәрҙәре менән ҡоршап алынған Башҡортостан Советтар Рәсәйенә әллә нисә мәртәбә вәкил күндерҙе. Ләкин ҡайһы берҙәре фронт аша сыҡҡанда тотолоп атылдылар, ҡайһы берҙәре фронт аша сыға алмай ҡалдылар. Ахыр, улар, 18 февраль 1919 йыл беҙҙең вәкилдәребеҙ, Советтар Рәсәйенә сығып Советтар власы вәкилдәре менән Башҡортостан автономияһы хаҡында килешеү төҙөй алдылар.

Ошо саҡтан башлап башҡорт штыктары ялған аҡ монархистарға ҡаршы әйләнделәр. Данлыҡлы, баһадир башҡорт ғәскәрҙәре Көньяҡ фронтта һәм Петроград янында аҡ монархистарға һәм контрреволюционерҙарға ҡаршы һуғышыуҙа Совет Рәсәйенең эшселәре һәм крәҫтиәндәре менән ысын-ысындан берлектәрен иҫбат иттеләр. Ошо саҡтан башлап башҡорт халҡы дәүләт тормошон Советтар ҡануңдары буйынса төҙөргә тотондо. Кантон, олоҫ һәм ауыл Советтары төҙөлдөләр һәм башҡорт халҡы күмәкләп эшкә сумды. Саботаж һәм ҡушылған эштәрҙе үтәүҙән баш тартыу һис ерҙә күренмәй.

Бер йыл эсендә Башҡортостан күп нәмә эшләргә өлгөрҙө: дәүләттә хәрби һәм башҡа хакимиәт урынлаштырылды. Ашау-эсеү, ауыл хужалығы, мәғариф органдары төҙөлдөләр, шаҡтай үк рәткә һалындылар.

Шулай итеп, башҡорт халҡының күп йылдар буйы көткән өмөтө Советтар власы тарафынан үтәлде. Бына шунлыҡтан бөтөн башҡорт хал-

ҡы, бер кеше кеүек, Советтар власы өсөн һуғыша, сөнки ул власть – үҙебеҙҙең власть.

Инде бөтә донъя контрреволюцияһын тар-мар килтереүгә һәм сит дәүләттәрҙәге аҡ монархистар ояһын төбө-тамырынан тибергә күп ҡалманы.

Иптәштәр! Ғәмәли революцион эште теүәлләп сығығыҙ! Шул саҡта, иптәштәр, һуғыш сафынан эш сафына күсербеҙ.

Эстония беҙҙең менән солох яһаны һәм башҡа ҡырҙағы дәүләттәр ҙә беҙҙең менән солох яһарға мәжбүр булырҙар, шанлы ҡыҙыл армияларҙың ныҡ тороуҙары һәм был дәүләттәрҙәге беҙҙең ҡәрҙәш эшсе һәм крәҫтиәндәрҙең баҫымсылыҡ итеүҙәре арҡаһында.

Бөтә донъя эшселәре инде аңланылар: яңғыҙ Советтар Рәсәйе генә бөтә әҙәм балаларына бәхет һәм изгелек килтерәләр һәм бөтә донъя ижтимағи революцияһына юл асылды, таҙартылды. Бына шунлыҡтан Халыҡ Комиссарҙары Советының ҡарары буйынса беҙҙең армияларҙың ҡайһы бер бүлемдәре һуғыш майҙанынан эш-хеҙмәткә күсәләр. Инде беҙҙең ҡыҙыл ғәскәрҙәр алдында ике фронт бар: емереклек фронты һәм аҡ монархистар фронты.

Беҙ ышанабыҙ, революция дошманы менән һуғыш яландарында үҙенә шан ҡаҙанған башҡорт иптәштәре емереклеккә ҡаршы көрәштә еңеү һәм бөйөк хеҙмәте менән үҙен зиннәтләрҙәр.

Советтар Рәсәйе яғына сығыуға йыл тулған бөгөнгө көн революция дошманы аҡ монархистар менән шулай уҡ даими ижтимағи тормош дошманы – емереклекте тамам еңгәнсә һуғышырға ысын-ысындан.

Йыл тулды

Байғураларҙың, генерал-жандармдарҙың төп терәге булған батша тәхете аҫты-өҫкә әйләнеү менән бөтә халыҡҡа шатлыҡ һәм һәр бер кәүемгә, һәр бер кешегә үҙе теләгәнсә торорға иркенлек килде, тиеп Рәсәйҙәге бөтә халыҡ шатланғайны. Ләкин шатлыҡтары бушҡа сыға яҙҙы. Генералдар, жандармдар урынына шуларҙың уҡ хеҙмәтен үтәүселәр, эсерҙар-меньшевиктар эш башына менеп ултырып, элекке байҙарҙың йырын йырларға тотонғайнылар.

Шул уҡ дөмөккән Николай кешеләре кеүек үк, халыҡҡа тегене биреү иртәрәк, быны бирергә ярамай, тиеп мығырларға тотонғайнылар. Гел рәхәттә һәм рәхәтте тик тыныс тороуҙа, тиеп уйлаусы уҡыған, аҡ ҡул (интеллигенция. – *А. Я.*) халыҡтар ҙа шул меньшевик-эсерҙарҙың көйөн раҫланы һәм шул турала революция выжданы алдында антыбыҙ менән танылһын!

Һуғыш сафтарында ныҡлыҡ һәм ҡурҡмаусылыҡ йәшәһен!
Күмәкләп төҙөү эше йәшәһен!
Бөтә яҡ ярлыларының тыныс хеҙмәте йәшәһен!
Йәшәһен бөтә донъя ярлыларының берләшеүе!

Йәшәһен Коммунистар партияһы!
Йәшәһен Өсөнсө Интернационал!
Йәшәһен бөтә донъя Советтар власы!
Йәшәһен Советтар Башҡортостаны!

Башҡорт кавалерия дивизияһы
һәм Башҡорт уҡсы бригадаһының
Сәйәси бүлектәре.

Көйләнеләр: шулай итеп, мең бәлә, миллион ҡорбан бәрәбәренә алынған эшсе-крәҫтиәндәрҙең хөрриәте көскә генә ҡәбергә күмелмәй ҡалды.

Петроград эшселәре булмаһа, бәлки, шулай булыр ҙа ине. Петроград эшселәренең ғәйрәте арҡаһында Октябрь революцияһы майҙанға килде. Рәсәйҙә йәшәүсе бөтә халыҡҡа тамам иркен рәүештә йәшәүҙәренә мөмкинлек килде. Элекке заман бюрократтары ғәҙәтенсә Учредилкафәлән тиеп торманылар: һәр кем азат йәшәү өсөн тыуған, шунлыҡтан уларҙың азатлыҡтарын раҫлау өсөн һүҙ бутҡаһы яһап маташыуҙың мәғәнәһе юҡ. «Һәр кемгә ирек, һәр кем үҙе теләгәнгә тора башлаһын»,— тигән лозунг — Октябрь революцияһының беренсе һүҙе.

Шул саҡтан башлап, Башҡортостан халҡы ла үҙе теләгәнсә йәшәй башлаған булһа ла, үҙәктән ҡасҡан аҡ монархистар, Учредилка ағзаларының ҡотортоуҙарына, алдауҙарына эйәреп, уларға ҡушылып Советтар власына ҡаршы һуғышырға тотонғайны. Икенсе төрлө әйткәндә, Хужа Насретдин кеүек, үҙе ултырған ботаҡты үҙе киҫергә керешкәйне, үҙенә үҙе ҡәбер ҡаҙырға тотонғайны. Шулай итеп, урынһыҙ ерҙә бик күп ҡорбандар, бик ҙур һәләкәт күрҙеләр. Ирҙән иман ҡотолмай, тигәндәй, һуң булһа ла былтыр, 18 февралдә, башҡорт ғәскәрҙәре советтар яғына сығып, иркен-мөстәҡил Башҡортостан төҙөү хаҡында килешеү төҙөнөләр.

Шул советтар яғына күсеүгә бөгөн саҡ бер йыл тулды. Бөгөнгө көн — башҡорт халҡының тарихында иң бөйөк, иң изге көндәренең береһе. Бөгөнгө көндә Башҡортостан халҡы үҙе кеүек ярлы һәм үҙ көнөн үҙе күреүсе Рәсәй эшселәре-крәҫтиәндәренә ҡаршы ҡорал күтәреп сыҡмаҫҡа һүҙ бирҙе. Бөгөнгө көн башҡорт халҡы байғураларға ҡоллоҡ итеүҙең харам икәнлегенә ныҡ төшөндө. Иң изге нәмә — хеҙмәт һәм үҙ көнөңдө үҙең күреү икәнлеге бөгөнгө көндә һәр бер башҡорт балаһының башына керҙе. Был көн — кеше ҡулы менән ут көрәүселәрҙең муйыны аҫҡа килтерелгән көн. Был көн башҡорт халҡының алдаусылар тоҙағынан ҡотолоуына бер йыл тулды. Ошо уҙған бер йыл эсендә башҡорт халҡы үҙ күҙе менән күреп ҡәнәғәт булды. Совет хөкүмәте һис бер ваҡытта ваҡ халыҡтарҙың үҙ теләктәренсә йәшәүенә ҡаршы килмәне. Бәлки, уларға һәр төрлө ярҙам да күрһәтелде: Ватандарын төҙөү өсөн нисә йөҙ миллион аҡсалар бирҙе, аң-белеме бар ышаныслы кешеләрен ҡуйҙы, өҫбаштарын кейендереү өсөн мануфактуралар һәр төрлө кейем-һалымдар бирҙе, ауыл хужалығын алып барыу өсөн һәр төрлө әсбаптар биргән кеүек, уҡыу-уҡытыу эштәре өсөн китаптар, ҡағыҙ-ҡәләмдәр һәм башҡа кәрәк-ярaҡтар ебәрҙе һәм ебәреп тора.

Бына шунлыктан башҡорт ярлы халкын яратыусы һәр бер кеше Совет власын ысын-ысындан яратып, уның өсөн бөтөн мал-йәнен ҡорбан итергә әҙер торасаҡтар. Петроград сафындағы башҡорт балалары үҙҙәренең баһадир һуғышыуҙары һәм ғилем-мәғариф алыуға ынтылыуҙары арҡаһында, бындағы эшселәр, крәҫтиәндәргә үҙҙәрен ысын иптәш итеп таныттылар, революцияның ысын юлбашсылары булған Петроград эшселәре-крәҫтиәндәре менән йән дуҫҡа әүерелделәр.

Шулай итеп, бөтөн донъя халкының ҡәрҙәшләнеү нигеҙе һалынғандан-һалына бара.

Күмәкләп төҙөү эше йәшәһен!
Бөтә яҡ ярлыларының тыныс хеҙмәте йәшәһен!
Йәшәһен бөтә донъя ярлыларының берләшеүе!
Йәшәһен Коммунистар партияһы!
Йәшәһен Өсөнсө Интернационал!
Йәшәһен бөтә донъя Советтар власы!
Йәшәһен Советтар Башҡортостаны!

Башҡорттарҙың боронғо ғәскәрҙәре хаҡында

Башҡорттоң ысын армия булып хеҙмәт итеүе 1798 йылдан башланған, ләкин башҡорт борон-борондан уҡ ғәскәри халыҡ булғанлыктан Рәсәй хөкүмәте ҡулына кереү менән үҙ ихтыярҙары менән уҡ ғәскәр хеҙмәтенә барған. Башҡорт ғәскәре хаҡында беренсе хәбәр 1608 йылда күренә. 1676 йыл бер меңләп башҡорт Ҡырым һуғышына барған һәм төрлө ваҡыттарҙа поляктарға ҡаршы барғандар. Ләкин был хеҙмәттәрҙең барыһына ла теләгән кешеләрҙең барыуы үҙ ихтыярында булған. 1754 йыл 14 марттан башлап, Рәсәй хөкүмәте башҡорттарҙан кәрәк сағында ғәскәр алыуға әмер сығарған һәм шул ваҡыттан башлап, 1797 йылға саҡлы линия хеҙмәттәренә (йәғни мәмләкәттең сиктәрендәге ҡәлғәләрҙә хеҙмәткә) барғандар. 1755 йыл хеҙмәттә 1969 кеше булған. 1754 йылға саҡлы хеҙмәттәре өсөн жалование алмағандар. Ҡылған эштәренә ҡарап награда ғына алғандар. Әммә 1754 йылдан 1797 йылға ҡәҙәр хеҙмәт итеүселәргә жалование, фураж һәм провиант бирелгән. Башҡорттарҙың 1798 йылға саҡлы иткән ғәскәри хеҙмәтен беренсе дәүер тип атарға була. Ул саҡта һәммә башҡорт ғәскәре тәртип эштәрендә үҙе теләгән формала (ихтыярҙа. – *А. Я.*) булған. Рәсәйҙең регуляр ғәскәре кеүек дөйөм ҡанундарға ҡарамаған. Хеҙмәткә теләп сыҡҡан кешеләр булһынмы, хөкүмәт әмере буйынса хеҙмәткә барғандар булһынмы, барыһы ла үҙҙәре теләгән кешене баш итеп һайлап ҡуйып, үҙҙәренсә эш күргәндәр. 1798 йылдан башлап 1863 йылдың 14 майына саҡлы башҡорттар ярым регуляр (иррегулярный) ғәскәрлек хеҙмәтенә мәжбүр ителгәндәр. Был хеҙмәт хәҙерге казактарҙың хеҙмәте кеүек булған. Башҡорттар менән бергә күрше торған мишәрҙәр ҙа был хеҙмәткә йәлеп ителгән. 1798 йыл башҡорттарҙан 4 513 кеше, мишәрҙәр 1 200 кеше

бирергә тейеш булған. 17 йәштән 46 йәшкә саҡлы кешеләр һәммәһе лә хеҙмәттә хисапланғандар. Тик эшкә ашмаған ҡарттар ғына хеҙмәттән ҡотолған. Барыһы дүрт өйгә бер һалдат тура килгән. Хеҙмәт өсөн айына бер һум жалование алғандар. Ләкин барлыҡ кейем, ат, эйәр-өпсөн, тамаҡ ашау – барыһы үҙ елкәләренә йөкләнгән. Әммә походҡа киткән саҡта, хеҙмәт иткән урындарынан йөҙ саҡрым киткәс, аттарына бесән, үҙҙәренә тамаҡ бирелгән. Һәр бер полктың тыуы (байрағы) булған. Кейемдәре аҡ яғалы күк буҫтау сәкмән, киң күк салбар, салбарҙа ҡыҙыл лампас булған. Баштарында аҡ йөндән (кейеҙҙән. – *А. Я.*) башлыҡ булған. Башлыҡ сите бөгөлөп юғары ҡалҡып торған һәм маңлайҙан аҫта һәм арттан йырыҡлы булған, ҡайыш-кәмәр һәм күн портупея, патрон сумкалары елкәнән уң яҡ ҡултыҡ аҫтына аҫылған булған. Итектәре йылҡы тиреһенән булған. Кәрәк-яраҡтары: мылтыҡ, һәр кешегә ике револьвер (пистолет), һөңгө, ҡылыс, уҡ-йәйә, ҡылыс үтмәҫкә тимер кейем булған. Ҡорал, кейемдәре яҡшы һәм бик ауыр булған. Башҡорт ғәскәре бигерәк ат өҫтөндә оҫта йөрөй. Һөңгө менән оҫта эш ҡыла, уҡ-мылтыҡтан бик мәргән атыу, һуғыш майҙанында береһе-береһен дошманға бирмәй берҙәм, батыр булыу менән шөһрәт алғандар.

Ғәскәрҙең өйҙәге төҙөлөшө кантондарға бүленгән булған. Башҡорттар 11 кантон, мишәрҙәр 5 кантон булған. Казак кантондарының өҫтөнән Войсковое управление һәм атамандары булған, әммә башҡорт, мишәрҙәрҙә ул булмаған. Сөнки Рәсәй хөкүмәте башҡорттарҙың барыһын бер ергә йыя торған идара яһауҙан ҡурҡҡан. Уларҙы бик ныҡ бүлеп тотҡан. Шундай уҡ һуғыш сафында башҡорт ғәскәре урыҫтарҙағы кеүек бригада, дивизиялар булып бергә йыйылырға рөхсәт булмаған, һәр полк үҙ башына, төрлө яҡҡа ҡуйылған. 1802 йыл башҡорт ғәскәренең һаны 5 519 кеше булған һәм бөтә ғәскәрҙәр ҙә фәҡәт мәмләкәттең сиген һаҡлау (линия) хеҙмәттәрендә тотолғандар. 1790 йылдан башлап башҡорт ерендәге типтәрҙәр ҙә хеҙмәткә алынғандар. Ләкин уларҙың үҙ самаларына полктары булмаған, улар барыһы ике полк булған. Шунан артыҡ алынмаған һәм «Уфимский казачий полк», тип аталған, офицерҙары Дон казактарынан булған һәм Ырымбур линия начальнигына буйһонғандар. Был ике полк типтәрҙәрҙең үҙҙәренән йыйылған аҡса менән тотолған. 1802 йыл һәр типтәр полкында 1 030 кеше ине. Әммә башҡортҡа килгәндә быларҙың начальниктары алда уҡ үҙҙәренән булып килгәнлектән, Рәсәй хөкүмәте ул ғәҙәтте боҙа алмаған, башҡорттарҙан командирҙар ҡуйылыр булған. Командирҙар казак ғәскәрендәге кеүек йөҙ башы, хорунжий, яһауыл тигән исемдәр менән йөрөтөлгәндәр. 1811 йылдан башҡорт ғәскәрҙәре сит мәмләкәттәр менән һуғышыу өсөн ебәрелә башлағандар. 1811 йыл сит хеҙмәт өсөн ике полк ебәрелгән, 1812 йыл Француз һуғышына ҡаратып башҡорттан егерме полк төҙөлә һәм 1813–1814 йылдарҙа Парижға, Наполеонға ҡаршы барғандар. Париж ҡалаһына тәү башлап барып кереүсе башҡорттар булған. Был һуғыштарҙа башҡорттар ғәжәп күп батырлыҡтар күрһәткәндәр. Ләкин Француз һуғышы бөтөп, ҡайтҡас та урыҫ башҡорт полктарын йәнә кәметкән. Мохтаж сағында башҡортҡа күп вәғәҙәләр, бүләктәр биреп, кеше итеп ҡарау, әммә мохтажлыҡ үткәс тә бөйөргә таянып, башҡортто

эшкә һанамау, уны йәберләү-ҡыҫыу урыҫтың ғәҙәте булған. 1822 йыл Ырымбур хәрби губернаторы башҡорттан 15 полк, мишәрҙәрҙән 3 полк яһайыҡ, тип проект керетһә лә, ул ғәмәлгә ашмаған. Башҡорттарҙан улай күп полктар төҙөмәй, линия хеҙмәттәренә ҡуйырға булғандар. 1828–1829 йыл Төрөк һуғышы башланып киткәс, башҡорт полктарын йәнә күбәйтеп үҫтермәк булғандар. Ләкин унда ла ни бары ике полк ҡына ебәргәндәр, башҡаларын линия хеҙмәтендә тотҡандар. 1830 йылдарҙа Башҡорт ғәскәрен бөтөрөү уйына кергәндәр, уларҙың былай ғәскәр булып тороуы Рәсәй өсөн хәүефле тигән уйға килгәндәр. Ырымбур губернаторҙары Сухтелен, Перовский (шул фекерҙе ҡеүәтләп ул саҡтағы батшаға ғариза биргәндәр һәм 1835 йыл ике типтәр полкы бераүгә ҡалдырылған һәм «1-се Ырымбур казачий полкы» тип аталған, 1844 йыл «Уфимский полк» тип кенә атала башлаған, ләкин 1845 йыл уны ла бөтөргәндәр. Башҡорт ғәскәрҙәрен дә, шулай итеп, әкренләп кәметергә булғандар, барыһын бер юлы бөтөрһәк, башҡорт ҡуҙғалыр тигәндәр. Ул саҡта Башҡортостанда урыҫ аҙ, әммә башкорт күп булғас, был хәүеф бигерәк тә көслө булған: 1825 йыл башҡорт һәм мишәрҙәр 345 493 йән, 1835 йыл башҡорттар менән мишәрҙәр (232 000), типтәрҙәр менән 333 000 йән ине, әммә урыҫтар бөтөн Ырымбур, Өфө яҡтарында барыһы 82 000 генә ине. Башҡорт ғәскәрен кәметеү, уның урынына урыҫ ғәскәрен күбәйтеүҙе ҡеүәтләп, Сухтелен 1832 йыл 1) биш мишәр кантонлығынан* бер полк ҡына яһау, 2) 9-сы, 2-се, 5-се кантондар, күбеһе казактарға яҡын башҡорт кантондарын һәм 4-се кантондың бер өлөшөн ғәскәр рәүешендә ҡалдырыу, 3) 4-се, 2-се, 5-се кантондарҙы Ырымбурға ҡаратыу, әммә үҙ ихтыярҙары менән Һарытау яғына күсеп киткән 9-сы кантон башҡорттарын** Уральский казачий войскоға ҡаратыу, 4) бүтән башҡорттарҙың бөтәһен дә ғәскәрлектән сығарып, әкренләп крәҫтиән хәленә төшөрөү кәрәк тип, дүрт бүлектән торған проект керетте һәм элекке Ырымбур губернаторы Эссен етәкселегендә махсус комиссия төҙөлөп, шуны ҡарап ҡабул иттеләр һәм шуларҙы үткәреү өсөн комиссия ошо сараларҙы ҡабул итте:

1) башҡорттарҙы алдап, йыуатып тотоу, уларҙың ғәскәрлектәре бөтөрөлмәгәндәй итеп күрһәтеү өсөн уларға Войсковое управление асыу, ләкин башында торған командир урыҫ генералы булһын (Каруанһарай һалынып, Башҡорт ғәскәри идараһы шунда яһалды);

2) башҡорттарҙы почта йөрөтөү хеҙмәтенән ҡотолдороу;

---

* Мишәрҙәрҙең кантондары Ырымбур губернаһы менән Һарытау губерналарында булған.

** Был башҡорттар электән башҡа башҡорттарҙан айырылыбыраҡ ситтә ҡалған халыҡ ине. Былар хәҙер Уральский ҡалаһынан түбәнерәк казачий араһына күсеп тороп бер ваҡыт казачий менән килешмәй Һарытау губернаһына күскәндәр. Улар аҙаҡтан Быҙаулыҡ өйәҙендәге Һеңрән башҡорттары менән бергә 9-сы кантонлыҡ булып торҙолар. Улар 1825 йылдарҙа барыһы 862 йән булған. Һуңғы заманда улар Уральский һәм Һарытау яғынан хәҙерге Һамар губернаһында Уральский область эсендә Кәмәлек һәм Ырғыҙ буйҙарында Имәлай һәм Күҙәбай исемендә ике олоҫ булып ултырғандар һәм Һамар губернаһы Николай (Пугачев) өйәҙенә ҡараған. Башҡорт ревкомының рәйесе Харис Йомағолов шул башҡорттарҙан. Һеңрән башҡорттары Быҙаулыҡ өйәҙенең Любим олоҫонда торалар. Уларҙан сыҡҡан хөкүмәт ағзаһы Яхъя Салихов.

3) кантондарҙы әкренләп хәрби хеҙмәттән сығарыу, эште улар ҡулынан алып өйәҙҙәргә биреү;

4) башҡорттарға ер һатырға ирек биреү, унда урыҫтарҙы ултыртырға мөмкинлек булһын;

5) кантондарҙы улыска бүлеү һәм был улыстарҙы башта дүрт исем менән йөрөтөү;

6) дүрт уҫал башҡорт полкын ситтә тотоу;

7) башҡорттарға етәкселек иткән түрә һәм башлыҡтарын әкренләп бөтөрөү;

8) башҡорттарҙы алдар өсөн әҙләп алтын-көмөш миҙалдар, аҡса, бүләктәр һәм бер аҙ пенсиялар биреү;

9) төрлө һылтауҙар менән кантондарҙы урындарынан алыштырыу.

Был эштәрҙе бик сер итеп тоторға булһалар ҙа, сер булып ҡала алманы. 1834 йыл башҡорттар, урыҫ беҙҙе крәҫтиән итеп ҡалдыра икән, тип фетнә ҡуптарҙы, ләкин фетнә ҙур көс менән баҫтырылды, һуғыш хәленә барып етмәне. Халыҡ араһында урыҫ суҡындыра икән, тип урыҫтың иген һалыу өсөн орлоҡ һаҡлауға мөгәзәй (склад. – *А. Я.*) һалыуға ҡушыуын да, Петровский әйтеүе буйынса, иген иктерергә тырышыуын да, бөтәһен дә бер яуызлыҡ тип ҡарап бик ғауғаланды. Ләкин урыҫ быға ҡараманы, үҙенең көсөнә таянып, комиссияның ҡарарын үткәрә башланы. Ғәскәр утыҙ процентҡа саҡлы кәметелде, башҡорт кантондары служилый һәм неслужилый тип икегә бүленде. Һуңғыларынан ғәскәр алмай башланылар. 1836 йыл 30 майҙа Временный штат управления Башкиро-мещеряцкого войска раҫланып, Башҡорт-мишәр ғәскәри идараһы асылды. Был идараның башында тороусы кеше Башҡорт ғәскәренең командующийы тип атала ине һәм дивизия командиры хоҡуғында ине. Уның канцелярияһы, адъютанттары булдырылды, кантон начальнигы һәм ярҙамсыһы өҫтөнә попечителдәр ҡуйылды, был попечителдәр штаб-офицерҙарҙан ине. Улар кантон начальниктары һәм йортауай старшиналарҙы тикшереп тора ине. «Кантондарҙа суд эштәрен тикшереп тороуҙа башҡорттарға ярҙам өсөн», тип стряпчийҙар ҡуйылды. 1840 йыл Башкиро-мещеряцкое управление тағы киң штаб менән раҫланды. Был идара башҡорт эшен махсус ҡарап тороу, башҡортто ҡоллоҡҡа алыуҙы тәртиплерәк юлға һалыу өсөн ҡоролған ине. Шул рәүештә башҡорт ғәскәре бөтөрөлөү юлына кергән булһа ла, һаман тиҙ бөтөрә алмай әкренләп кенә бөтөрөлдө. Ҡалғандары хеҙмәт итә бирҙеләр. 1839 йыл айырым башҡорт сотнялары Хиуа һуғышына барҙылар. Аҡмәсет һуғышына (башҡорт араһында ул «Һырдарья походы» тип мәшһүр (билдәле. – *А. Я.*) барҙылар. Был ваҡыттарҙа Башҡорт ғәскәренең башлығы Перовский ине. 1853 йылдан башлап 1856 йылға саҡлы ике башҡорт полкы Петербург янында Фин ҡултығында ҡарауыл хеҙмәттәрендә торҙолар һәм шул уҡ йылдарҙа Ҡырымда Севастополь һуғыштары башланып, Рәсәйҙең хәле йәнә ауырайып киткәс, йәнә башҡорттарҙың ғәскәрҙәрен күбәйтә башланылар. Севастополь һуғыштарында башҡорттар төрөктәргә ҡаршы һуғыштылар. Бында биш сотнялы дүрт башҡорт полкы һуғышты. Ләкин бына шул һуғыш мәлендә башҡорттоң бәхете

(яҙмышы. — *А. Я.*) хәл ҡылына. 1) Шул һуғыштарҙа башҡорттар төрөктәргә ҡаршы ихлас һуғыштылар. Ҡырымдағы нуғайҙар урыҫтың серҙәрен төрөккә әйтеп, төрөккә юл күрһәтеп, Ҡырымдан ҡыуалай башланылар. Башҡорттар ҙа шундай эштәрҙә шөбһәле булып, башҡорт ғәскәрен тотоу Рәсәй өсөн ысындан уҡ хәүефле икән тигән уй күбәйҙе. 2) Икенсенән, ул ваҡыттарҙа Төркостан тарафтары Рәсәй ҡулына кереп, Рәсәйҙең шәреҡ тарафында мосолман-типтәрҙәр күбәйеп киткәс, мосолманы күп ҡырғыҙ (Ҡаҙағстан. — *А. Я.*), Төркостанға сиктәш Башҡортостанда мосолман — Башҡорт ғәскәре тотоу хөкүмәт өсөн бик хәүефле күренде. 3) Шуның өҫтөнә, өсөнсөгә шул ваҡыт батша булған Александр Икенсе, ғөмүмән, инородецтарға ҡарата бик яман сәйәсәт тота башланы. 1855 йыл мишәрҙәрҙең ғәскәре бөтөнләй бөтөрөлдө һәм идараһы — «Управление Башкирского войска» тип аталып ҡалды. Шундай 1863 йыл 14 майҙа Александр Икенсе батша Башҡорт ғәскәрен бөтөнләй бөтөрҙө һәм башҡорттарҙы крәҫтиән хәленә ҡалдырып, идара итеү хаҡында «Положение о башкирах» тигән махсус закон сығарҙы, көнбайыштағы кантондар бөтөрөлдө. 1865 йыл 2 июль законы менән көнсығыштағы, Ырымбур яҡтарындағы кантондар ҙа бөтөрөлөп, башҡорт Эске эштәр министрлығына ҡаратылып, крәҫтиән хәленә ҡалды. Башҡорттоң «Әрме заманы» тигәне шунда бөттө. Бынан һуң да башҡорттарҙан 1882 йылға саҡлы Ырымбурҙа бер башҡорт полкы яһап тоттолар. Ләкин ул элекке урыҫ хөкүмәте күҙенә төшкәнерәк синыф: дворян, бай балаларынан ғына ғибәрәт булды, иғтибары булманы. Башҡорт үҙ ваҡытында һуғыштарҙа күрһәткән һөнәрҙәре менән французлар тарафынан «Төньяҡ һуғыш илаһы» («Северные амуры») исемен алды.

Был заман башҡорттоң иң бәхетле көндәре түгел ине, бәлки 1737 йыл башҡорттарҙың королтай-йыйындары бөтөрөлгәндән һуңғы дәүерҙәге иң ауыр... (һөйләмдең бер өлөшөн тәржемә итеп булманы. — *А. Я.*) ...хурлыкка төшөү ваҡыттарылыр. Башҡорттоң бәхетле саҡтары — 1737 йылдан элек үҙ башына мөхтәриәт (үҙ аллы. — *А. Я.*) торған ваҡыттары, Нуғай, Күсемдәр менән үткәргән замандарылыр. Ләкин шулай булғанда ла, әрме замандары, әрме заманының әүәлге йылдары Рәсәй ҡулы аҫтына кергән заманы эсендә башҡорттоң донъя араһына ҡатышып, ғәскәри тәрбиә алып, мәғрифәтле Европа ғилемен ала башлаған егеттәре, докторҙары (ғилемле кешеләре. — *А. Я.*) күбәйеп, күҙе асыла башлаған көндәрелер. Ул замандың ҡалдыҡтарынан башҡорт ауыҙындағы «Петровский», «Һыр», «Әрме», «Эскадрон», «Циолковский», «Ҡаһым түрә», «Йософ майор» һәм төрлө кантон көйҙәре тигән көйҙәр һаман халыҡтың йөрәгендә һаҡлана. Каруанһарайҙың бинаһы, Ипәк буйында Ғәбделсәләм ауылындағы казарма үә мастерской биналары, Стәрле өйәҙендә Суҡайлы буйында Башкирский конский запастың урындары — беҙҙең халыҡтың урыҫ ҡулында үткәргән ауыр көндәре араһында, нисек булһа ла яҡтыраҡ көндәрҙең ғәләмәттәре тип хәтерҙә тотолаларҙыр.

Әхмәтзәки.

Башҡорт хәрәкәте*

Мәскәүҙә йыйыласаҡ II мосолман коммунистарының съезында мөһим мәсьәләләр араһында, татар-башҡорт мәсьәләһе алдыбыҙҙа тора. Был мәсьәлә хаҡында беҙҙән вәкил булып барасаҡ иптәштәргә ҡыҫҡа ғына материал булһын уйы менән башҡорттарҙың был һуңғы 1917 йылдан башлап революцион хәрәкәттәре хаҡында һөйләмәксе булам.

Башҡорт халҡының элекке заманаларҙағы революцион хәрәкәттәренә һәм уларҙың тарихтарына ҡағылмайса, тик ошо һуңғы Рәсәйҙәге революцияла башҡорттарҙың ниндәй урын тотҡанлыҡтарын күрһәтеп уҙайым. 1917 йыл февралдә тыуған бөйөк Рәсәй революцияһының башынан уҡ башҡорт халҡының теләге милләттәргә ерле мөхтәриәт — территориальное самоопределение наций булды.

Революцияның әүәлге дәүерҙәрендәге булған Ваҡытлы хөкүмәттәр башҡорттарҙы ерле мөхтәриәтле азат бер халыҡ итеп танымаһалар ҙа, башҡорт халҡы үҙенең Өфөлә, Ырымбурҙа булған әүәлге дөйөм йыйылыштарында, башҡорт халҡына ҡағылышлы юғарылағы лозунгыны ғәмәлгә ҡуйыу өсөн Башҡортостан исемендәге айырым бер өлкә проектын ғәмәлгә ҡуйыуҙы алға сығарҙы һәм шул юлда хәрәкәт итәсәген асыҡтан-асыҡҡа белгертте.

Быуаттар буйына ирек өсөн ҡан түккән башҡорт халҡы быға са иҙелеп килгән милләттәр тәкдире хәл ҡылына торған был революцион дәүерҙә үҙенең яҙмышын хәл ҡылыу эшен башҡаларға тапшырмай, үҙе генә хәл ҡылырға тейеш икәнлеген бик асыҡ белә ине. Башҡалар кеүек иркен йәшәргә хаҡы булған башҡорт халҡы ла иркенлек алып ҡалыуға үә шул иркенлектең, кәрәк булһа, мәнфәғәттәрен һаҡларға тейеш икәнлеген һәр бер башҡорт белә ине һәм шул юлда хәрәкәт итә ине. Был беҙҙең өсөн берҙән-бер юл ине.

Башҡорт илендә төҙөлгән башҡорт төбәк шуралары үә уларҙың тармаҡтары ошо әҙерлек юлында күп кенә эштәр эшләнеләр, йәғни бер башҡа иҙелгән милләттәр кеүек Октябрь революцияһына ҡәҙәр хакимиәт һөргән Керенский һәм уны яһарға тырышҡан Учредительный Собраниеһынан: беҙгә ерле мөхтәриәт кәрәк, шуны бирмәҫһегеҙме, тиеп кенә тороуҙан башҡорт халҡы уҙғайны. Уның сәйәси күҙе башҡаларға ҡарағанда асығыраҡ ине.

Шуның өсөн дә башҡорт халҡы был дәүерҙә үҙенең ерле мөхтәриәтен ғәмәлгә ҡуйыу өсөн бөтә әҙерлектәрен күреп бөтөрҙө.

1917 йыл декабрь айында Ырымбурҙа булған Башҡорт ҡоролтайы ошо әҙерлекте кәтғи рәүештә тамамланы. Башҡорт халҡының теләге булған «Ерле мөхтәриәтен», ниһайәт, тормошҡа уҙҙырҙы.

Башҡорт иле «Хөр Башҡортостан» тиеп иғлан ҡылынды.

Ҡоролтай Ҙур һәм Кесе Башҡортостан проекттарының һуңғыһын ҡабул итте. Кесе Башҡортостанда идара өсөн хөкүмәт һайланды.

---

* Хәлим иптәш Әмировтың Петроградтағы башҡорт полктарындағы беренсе коммунистар конференцияһында һөйләнгән «Башҡорт хәрәкәте» докладынан алынды.

Эске идараһында Башҡортостан кантондар исемендәге 13 өлкәгә бүленде.

Башҡорт халҡының иркенлек донъяһына сығыу юлдары ҙур ҡатғи тарихи мөһим аҙымдар яһаған был Беренсе Башҡорт ҡоролтайы таралғандан һуң бер ай самаһы уҙғас булһа кәрәк, Ырымбурҙа һәм губернаның күп урындарында синфи көрәштән килеп сыҡҡан хөкүмәт көсө — Совет власына күсте, был яңы хөкүмәттең, бигерәк тә иҙелгән, тапалған милләттәрҙең хоҡуҡтарын һәм уларҙың тулы иркенлеген тәьмин ҡыла торған бер хөкүмәт икәнлеген белеп, яңы ғына эшкә тотонған Башҡорт хөкүмәте Ырымбур губерна Башҡарма Комитетына, башҡорт халҡын ерле мөхтәриәтле, ирекле тиеп Советтар хөкүмәте таныһанда, башҡорт халҡы советтар менән бергә барасаҡ, тиеп рәсми рәүештә иғлан ҡылды. Башҡорт халҡының был тәкдименә Ырымбур губерна Исполкомы, бәғзе бер иптәштәрҙең ҡотҡоһо менән Башҡорт хөкүмәтенең ағзаларын ҡулға алыу менән яуап бирҙе.

Башҡорт хөкүмәтенең ағзалары араһында Зәки иптәш Вәлиди ҙә ҡулға алынды. Үҙәктең (Мәскәүҙең. — *А. Я.*) ҡулға алынған Башҡорт хөкүмәтенең ағзаларын азат ҡылыу тураһында әмере булһа ла, азат ителмәнеләр. Иркенлек, азатлыҡ донъяһына сығыу өсөн быуаттар буйына ҡан түккән башҡорт халҡына, үҙенең хөкүмәте ағзаларының бигерәк тә Совет власы тарафынан ҡулға алыныуы һәм башҡорттарҙың был азатлыҡ хәрәкәте ошондай ҡыҙғаныс бер рәүешкә кереүе сикһеҙ ауыр тәьҫир итте. Бының өҫтөнә 1918 йыл март айында Баймаҡ заводында Башҡорт ҡыҙыл гвардияһы төҙөп йөрөгән башҡорттоң эшлекле, революцион егеттәренән Иҙелбаев, Мағазов һәм башҡаларҙың Ырымбурҙан ебәрелгән каратель отряды тарафынан атылыуҙары һәм башҡорт азатлығы өсөн эшләп йөрөгән башҡорт егеттәренең шул уҡ урыҫ Ҡыҙыл Гвардияһы тарафынан эҙәрлекләнеүе кеүек хәлдәр тәбиғи, башҡорт халҡының Совет власына ҡарата ыңғай мөнәсәбәт ҡаҙаныуына иң беренсе һәм ҙур кәртә булдылар.

1918 йылдың яҙында Дутов тарафынан Ырымбурға яһалған сапҡын һөжүмтәһендә төрмәләге Башҡорт хөкүмәте ағзаларының ҡайһы берҙәре сығарылды. Ҡайһы берҙәре тотҡонлоҡтан ҡастылар.

1918 йылдың яҙ баштарында Себерҙә башланған реакция көсәйеп барғанда, июнь көндәрендә Силәбегә ҡасып барып сыҡҡан Башҡорт хөкүмәте ағзаларынан Зәки иптәш Вәлиди яңынан Башҡорт хөкүмәтен тергеҙергә һәм ҡоралды ғәскәрен төҙөргә кереште. Башҡорт халҡының ҙур ниәте булған иркенлек, азатлыҡ донъяһына сығыу өсөн үткәндәге әсе тәжрибәләре — ҡоралды көстөң кәрәклеге фактын алға ҡуйҙы.

Шуның өсөн дә башҡорттоң ҡоралды көсө төҙөлә, был көстөң беренсе бурысы — башҡорттоң иреклегенә ҡаршы килеүселәргә ҡаршы тороу ине. Был ваҡыттарҙа Себерҙәге реакцияның иҙелгән халыҡтарға азатлыҡты тәьмин ҡылырҙан йыраҡ бер нәмә икәнен яңы төҙөлөп килә торған Башҡорт хөкүмәте яҡшы белгәнлектән, Башҡортостандың иреклеген тәьмин итеү юлдарына кереште һәм шул уҡ июнь айында Советтар хөкүмәтенә ике вәкил ебәрҙе. Башҡорт хөкүмәте август көндәрендә

Ырымбурға күсеп килгәс тә үк үҙенең сәйәси йөҙөн асты. Беренсе номерҙарынан «Башҡорт» гәзитендә Башҡорт хөкүмәте Учредительное Собрание Комитеты тарафынан яһалған бәғзе бер тәҡдимдәргә ҡаршы рәсми рәүештә, Башҡорт хөкүмәте Брестский договорҙы танымай уның менән шаярасаҡ түгел, тиеп тарихи яуабын бирҙе.

Бының артынан күп тә тормайынса, хөкүмәт тағын да советтарға вәкилдәрен ебәреү сараларын күрҙе. Был ебәрелгән вәкилдәребеҙҙең араһында Сәләх Аҙнағолов та бар ине. Был иптәш, өҫтөнә йөкләнгән эштәрҙе онотоп, фронтты уҙғас та Бәләбәйҙә комиссар булып ҡалды. Тәбиғи, бындай башҡорт пролетариатының ҡаны менән уйнаған кешеләр, киләсәктә бер яҡтан, башҡорт фәҡир-фоҡараһы ҡаршында, икенсе яҡтан, дөйөм ярлылар ҡаршында яуапҡа тарттырылырға тейештәр!

Көндән-көн нығып барған Башҡорт хөкүмәтенең вәкилдәре Учредительный Собраниеның Комитеттарында һәм Өфөләге Государственный Совещаниеларҙа иң һул ҡанаттарҙан булғанлыҡтары берәүгә лә йәшерен түгел.

Башҡорт хөкүмәте менән күрше булған реакцион Дутов һуңғы ваҡыттарҙа Башҡорт хөкүмәтенә иң ышанысһыҙ ҡарау менән ҡарай башланы. Дутовты уның штабын ҡулға алырға Башҡорт ғәскәри идараһы тарафынан әҙерлектәр күрелгәндән һуң, был йәшерен әҙерлегебеҙ Ғалимаев тигән офицер тарафынан Дутовҡа белгертелде. Башҡорт ғәскәрҙәре Дутов командаһынан революцион юл менән алынып Башҡорт иле эсенә һәм уның өлкәләренә ҡуйылғандан һуң Дутовтың ҡарашы, һис шикһеҙ, башҡорттарға ышанысһыҙ булды.

Зәки иптәш Башҡорт хөкүмәте тарафынан башҡорт ғәскәрҙәренең баш командующийы итеп билдәләнгәс, Дутов Зәки Вәлидиҙе атырға тиеп үҙенең ғәскәрҙәренә йәшерен бойороғон тараҡҡан. «Зәки ышанысһыҙ, советтар яҡлы кеше, уның менән эш ҡылырға ярамай, ул беҙҙең ҙур дошманыбыҙ», – тигән һүҙҙәр бойороктоң башында яҙылғайны.

Башҡорт хөкүмәте артыҡ ҡан түгеүҙе туҡтатырға тейешлелек хаҡында советтарға тағын да һүҙен ишеттерҙе. Өфөнән аҡтар сыҡҡанда Башҡорт хөкүмәте исеменән Советтар власы һәм уның ғәскәре командованиелары менән килешеү мәсьәләләрен тикшереү өсөн Муллаян Халиҡов иптәш ҡалдырылғайны.

Был иптәштең өҫтөнә төшкән эште дөрөҫ үтәүе башҡорт халҡының советтар яғына тиҙерәк күсеүенә ҙур сәбәпсе булды.

9 февралдә Ҡана заводында, Башҡорт хөкүмәтенең советтар яғына сығыуға йәшерен ҡарары булды. Был ҡарар 18 февраль сәғәт 10-да ғәмәлгә ҡуйылды. Башҡорт халҡы үҙенең хөкүмәте, бер корпус ҡоралы ғәскәре менән Башҡорт Совет республикаһы тиеп иғлан ҡылынды.

19–20 февралдә Темәстә булған Башҡорт ғәскәрҙәре съезы тарафынан ваҡытлы, 12 ағзанан ғибәрәт Ревкомитет (Башҡортостандың хәрби-революцион комитеты. – *А. Я.*) төҙөлдө. Яңы Башҡорт Совет республикаһының эштәрен алып барыу бурысы ошо комитетҡа тапшырылды.

Шулай итеп, юғарыла әйтеп уҙған ҙур ғына көрәш, ауырлыҡтарҙан һуң башҡорт халҡы ирекле донъяға сығыу юлында тағын да ҡәтғи бер аҙым яһаны.

Март баштарында Башҡорт хөкүмәте исеменән Мәскәүҙә рәсми рәүештә барған вәкилдәр менән Үҙәк совет республикаһы араһында килешеү төҙөлөп, һуңғыһы тарафынан Башҡорт иле ирекле Башҡорт Совет республикаһы тиеп иғлан ҡылынды.

Башҡорт ревкомы советтар яғына сыҡҡас та үҙенең 8–9 полклы ҡораллы ғәскәре менән революцияның төп дошмандары булған реакционер-монархист Дутов һәм Колчактарға ҡаршы һуғышырға теләгәнлеген һәм башҡа ҡыҙыл ғәскәрҙәр менән катнашып һуғышыу, беҙҙең уйыбыҙ, дошманды еңеүҙә, һис шикһеҙ, ҙур файҙалар килтерәсәкбеҙ, тип (башҡорт ғәскәрҙәренең советтар яғына сығыу менән 80 саҡрым киңлектә фронт асылғайны) урыҫ ҡыҙыл ғәскәрҙәре командованиеһына белдергән булһаҡ та, башҡорт фәҡир-фоҡараһының һүҙе ҡәберлектә аҙашҡан бисара юлсының тауышы шикелле ишетелмәне.

Ысын күңелдән башҡа ҡыҙыл ғәскәрҙәр менән бер сафта тороп революцияның дошмандарына ҡаршы һуғышырға теләгән башҡорт ҡаһармандарына ышаныс булманы, уларҙың йөрәктәренән сыҡкан һүҙәрен ишетергә теләүсе булманы. Ул ваҡытта Башҡорт илендә хәрәкәт иткән Пенза дивизияһының башлыҡтары, башҡорт ғәскәрҙәрен тылға күсереү һәм уларҙы ҡоралһыҙландырыу тураһында бойороҡ бирҙеләр. Әйтеүҙәренә ҡарағанда, бойороҡ биреүселәрҙең уйы — башҡорт ғәскәрҙәренә сәйәси аң-тәрбиә биреү ине. Стәрлетамаҡ ҡалаһына үә тирәһенә күсерелгән башҡорт ғәскәрҙәре, юғарыла әйтелгәнсә, сәйәси аң-тәрбиә алырға тейеш булһалар ҙа, эштәр киреһенсә килеп сыҡты.

Пенза дивизияның тылында башҡорт ғәскәрҙәрен «һеҙ пленныйҙар», тиеп ҡаршы алдылар, барғанда кейемдәре, аттары таланды, командирҙары туҡмалды, ауылда урамға сығарып сәстәренән һөйрәп ҡыйналылар. «Һеҙҙе атабыҙ», — тиеп урамға сығарып теҙеп мылтыҡтар төбәп көлдөләр, йәберләнеләр. Күп ваҡыттарҙа ашарға бирмәйенсә ас тоттолар. «Башҡорттарға ирекләк биреләсәк түгел, һеҙҙең башҡаларығыҙҙың барыһы ла ҡулға алынған», — тиеп, ғәскәрҙәр араһында асыҡтан-асыҡ һөйләй башланылар. Был ҡыҙғаныс хәлдәрҙе ишетеп Башҡорт ревкомы хәлдәр менән таныштырыу өсөн үҙенән кешеләр ебәрһә лә, уларҙы ғәскәрҙәребеҙгә керетмәнеләр. Бының өҫтөнә ябай башҡорт граждандары араһында ҡыҙғаныс хәлдәр береһе артынан береһе тыуа башланы. Һис гонаһы булмаған башҡорт ылаусылары, һис нәмәгә ҡатнашы булмаған ауылдың аңлыраҡ кешеләре, бөтә башҡорт халҡының иң ҡәҙерле кешеләренән шағиры Бабич, үткер ҡәләмле яҙыусыһы Иркәбаев үә башҡалар атылдылар.

Күп башҡорт ауылдарында Пенза дивизияның ҡыҙыл ғәскәрҙәре тарафынан күп кенә башҡорт ҡыҙҙары, ҡатындары, мөғәллимәләре көсләнде, мәсхәрә ителде. Башҡорт халҡының ирек, азатлыҡ донъяһына сығыуы ҡыҙғаныс булды. Ҡорбандарыбыҙ йөҙәрләп һанала. Шул уҡ ҡыҙыл ғәскәрҙәр башҡорт ауылдарынан үткәндә башҡорттоң тәҙрәһеҙ,

ишекһеҙ 10–15 йорттан ғибәрәт булған ауылдарына 100–200 меңләп контрибуциялар һалып, түләй алмағас, меҫкен ярлыларҙың аҡтыҡ икмәктәрен, аттарын алдылар. Быны тыйған Үҙәктең ҡәтғи әмерҙәре үтәлмәне. Таланыу, атылыу, иҙелеү һаман да хөкөм һөрҙө.

Бисара башҡорт халҡы, бигерәк тә уның ҡыҙыл ғәскәрҙәре советтар яғына сыҡҡас, күп ауырлыҡтар, иҙелеүҙәр күрҙеләр.

Беҙ ышанабыҙ: киләсәктә быға бәйле ғәйеплеләрҙе тарих беҙгә күрһәтәсәк. Һуғыш хәлдәренең бер аҙ беҙҙең өсөн сыуалып китеүе сәбәпле, Башҡорт ревкомы үҙенең иленән күсергә мәжбүр булды.

Май баштарында Башҡорт ревкомы, Үҙәктең күрһәтеүе буйынса, Пенза губернаһы Саранск ҡалаһына күсеп килде һәм ревком артынан уҡ советтар яғына сыҡҡан бер корпус ғәскәрҙәренең ҡыҙғаныс ҡалдыҡтары ла күсеп килде.

Саранскиҙа төҙөлә башлаған дүрт полк ҡыҙыл башҡорт ғәскәрҙәре 10 июндә Көньяҡҡа оҙатылдылар.

Көньяҡ фронтта дүрт ай һуғышып, үҙҙәренең элекке ҡаһарманлыҡтарын күрһәткән башҡорт ҡыҙыл ғәскәре пролетар революцияның усағы булған Петроградты һаҡларға Көньяҡ фронттан Төньяҡ-көнбайыш фронтҡа күсерелде.

Хәҙер Петроград фронтында башҡорттоң бер атлы дивизияһы һәм бер йәйәүле бригадаһы һуғыша.

КҮСӘРБАЙ

(Финляндия фронтында Башҡортостан ҡыҙыл ғәскәрҙәре)

I

Петроградтың бөтөн урамдары тын, ҡайҙалыр бер яҡҡа атлаған йәйәүле кешеләрҙең аяҡ тауышы һәм һирәк-һаяҡ ҡына ҡысҡырған командалар ишетелә.

Башҡорт иленең төҙөлөшөнә килһәк: хәҙер Башҡортостандың һәр ерҙә советтар төҙөлөп бөттө, идара эштәре рәткә һалынды, хәҙер башҡорт иле тынысланды. Быуаттар буйына иҙелгән башҡорт халҡы бер иркен һулыш алды.

Торған дежурында паровоздар тауышынан башҡа һис нәмә ишетелмәй. Бөтөн завод, фабрикалар эштән туҡтаған, һәр нәмәлә лә, һәр кемдә лә һалҡынлыҡ. Бөтөн халыҡ әллә ниндәйҙер бер инде. Бөтөн нәмәләр ҙә, халыҡтарҙың уйҙарын уртаҡлашҡан шикелле, тын ғына ҡалған. Һәр кем, һәр нәмә әллә ниндәйҙер бер ҡурҡыныс алдында.

Күп тә үтмәй, бер ҙур урамдың арғы башынан Питер халҡына яҡын музыка тауышы менән ҡатыш Питер халҡына ят, шулай ҙа һөйөклө әллә ниндәй сит һүҙҙәр менән йырланған тауыш менән бөтөн ҡаланы яңғыратып, тәртипле колонналар менән теҙелгән, «Берләшегеҙ, бөтөн донъя юҡһылдары!», «Йәшәһен, Өсөнсө Интернационал!», «Үлем бөтөн донъя буржуйҙарына!» тип матур буҫтауҙар менән яҙылған лозунгылары, ҙур ҡыҙыл байраҡтар күтәргән, бөтөн донъя буржуазияһына дәһшәт бирерлек бер күренештә Башҡорт йәйәүле бригадаһы, уның алдында оҙон уҡтарын күккә төҙләгән шәм шикелле байраҡтар күтәргән, күптән йөрөп өйрәнеп бөткән һалдаттарҙың, йөрөгәндә ҡулдарын сайҡаған шикелле, музыка яйына баштарын һелкеп килгән аттар менән, Башҡорт атлы дивизияһы алдан тәғәйен ҡылынып ҡуйылған ҡаланың ҙур бер майҙанына ҡарап килгәне күренде.

Ғәскәрҙәр майҙанға килеп етеүгә, халыҡ та һәр ҡайһыһына алдан әйтелеп ҡуйылған шикелле, ғәскәрҙәргә берәр генә урын ҡалдырып, бөтөн майҙанды ҡаплап алғайны. Бөтөн халыҡта ят бер тойғо, ят бер шатлыҡ, ят бер хис. Хас умарта ҡорто шикелле ҡайнай, арттағы рәт,

йырағырак калғандары алға керергә тырыша, алдағылары инде быларҙы карап бөттөм, тегеләрен карайым тигән шикелле артка сыға, икенсе якка барып карай.

Ғәскәрҙәр тын, әллә ниндәй бер ялкынлы хис менән бөтөнөһө майҙандың уртаһына куйылған минбәргә (трибуна) күҙ төбәп ниндәйҙер бер һүҙ ишетергә, бер бойорок алырға әҙерләнгән.

Бейек минбәрҙән «Иптәштәр!» — тиеп кыскырған, ғәскәрҙәр өсөн таныш, башка халыкка ят, яңы бер һүҙ бөтөн халыкты тынға калдыра.

«Иптәштәр!» һүҙенән һуң, халык бер аҙ тынғанын көтөп тороп, бер аҙ тынлыктан һуң шул «иптәштәр» һүҙен кабатлаған нисә айҙар ғәскәрҙәрҙең үҙҙәре менән юлбашсы булып йөрөгән иптәштәре һүҙгә керешеп: «Мин уйлайым, һеҙҙең һәр кайһығыҙ бында нимәгә килгәнде, нимәгә бында йыйылғанды бик якшы беләһегеҙ. Һәм беҙ илдәребеҙҙән киткән вакытта беҙгә әйтелгән: «Петроград куркыныс алдында! Батша ялсыһы, генерал Юденич бөтөн буржуа, поп балаларынан ғибәрәт, һатлык рус һәм фин офицеры калдыктары менән Петроградка һөжүм итә! Һеҙ шул капитал ялсыларын донъя йөҙөнән юғалтығыҙ, Петроградты һәм ундағы эшсе пролетариатты бөтөн завод, фабрикалары менән дошман, ак бандалар куркынысынан коткарығыҙ!» — тигән һүҙҙәр әле лә булһа колак төбөгөҙҙә яңғырап тора торғандыр. Бына беҙ үҙебеҙгә йөкмәтелгән шул бурысты үтәмәйсә, тимәк, Петроград каршында булған ак бандаларҙы һөрөп сығара алмайынса, беҙ бынан кайтырға тейеш түгелбеҙ!»

Иптәштең кыҙыу, ялкынлы һүҙҙәре бөтөн халыкты хәрәкәткә килтереп, һүҙе бөтөр-бөтмәҫтән: «Долой буржуазияны! Йотабыҙ беҙ уларҙы! Эшселәргә каршы торғандарға, беҙ бар вакытта (булған сакта. — *А. Я.*), юк уларға донъяла урын! Йәшәһен Совет власы! Йәшәһен эш! Ура!» тауыштары, музыка менән буталып, бөтөн каланы һелкетә, тетрәтә. Эшселәр, ярлылар шатлыктан, касып калған буржуйҙар куркыуҙан тетрәй, калтырай.

Ғәскәрҙәр менән бергә килгән һәм Питерҙың башында торған бик күп коммунистар, бер-бер артлы бик күп иптәштәр башкорттарҙың баһадирлыктарын, һуғышка оҫталыктарын, Совет хөкүмәтенә күп ярҙамдар итәсәген, халык, тоғролок, коммунизм нигеҙенә караған Совет хөкүмәтенә, уларҙың бөтөн хаклы теләктәрен үтәйәсәген һөйләгәндән һуң, тәү башлап «иптәштәр!» тиеп һүҙ башлаған иптәштең элеккенән дә тулы, шатлыклы, ғәйрәтле тауыш менән: «Митинг бөттө, таралырға мөмкин!» һүҙе ишетелеү менән кала халкы геү килеп куҙғалған арала, ғәскәрҙәргә кайтыу тарафына боролорға яһаған командалар ишетелә башланы.

Халык тарала. Һәр кемдә яңы шатлык, ят бер тойғо. Үҙ-ара һөйләшә, тағы әллә кемдәргә һөйләргә, алған тойғо-шатлығын әллә кемдәр менән уртаклашырға ашкына.

II

Бригаданың командиры һәм комиссары ҡушыуы буйынса бригадаға бирелгән бөтә участка полктарға бүленеп, һәр полк үҙенә тигән участканы дошман яҡын килеүҙән һаҡлар өсөн, юл буйҙарына, тау итәктәренә «ялан ҡарауылдары» ҡуйып, часовойҙарға «паролдәр» (үҙ кешеһе икәнде белеү өсөн һорала торған, электән тәғәйен киленгән бер нәмәнең исеме) биреп, һәр кешеһен урынлаштырып бөтөргән.

Һәр иптәшкә күп итеп патрон, яраланһа бәйләр өсөн марля — «аҡ кисиә», газдан һаҡланыр өсөн битлек — «маска», һәр взводҡа пулеметтар өләшелгән.

Бөтә донъяны тынлыҡ, ҡараңғылыҡ ала. Бына хәҙер-хәҙер бөтә донъяны тетрәтә торған пушка, пулемет, мылтыҡ тауыштары ишетелә башлап, бөтә донъя әллә ниндәй дәһшәт аҫтында ҡалыр төҫлө тора.

Ихтыярһыҙ ҡулдар мылтыҡты тағын да ҡыҫыбыраҡ тота, күҙҙәр дошман тарафына тағы ныҡлы, асығыраҡ ҡарарға, ҡолаҡтар ҙа саҡ ҡына ишетелгән, шыбырлаған тауышҡа ла әллә ниндәй мәғәнәләр биреп, йөрәк ярһыуынан дөп-дөп тибә башлай. Бына-бына хәҙер һуғыш башланыр төҫлө.

III

Күсәрбай полк башлығы янында әмер йөрөтөү өсөн тәғәйен ҡылынғайны. Күсәрбайҙарҙың полкы бер һыу буйына урынлаштырылып, һыуҙың арғы яғында күренмәҫлек шаҡтай йыраҡ ергә йәйелгән дошман ғәскәрҙәре күпме, көсө нисек, ниндәй ғәскәрҙәрҙән ғибәрәт икәнен Күсәрбай командирҙан ишеткән булһа ла ул шуларҙы үҙе беләһе, үҙ күҙе менән күрәһе килә.

Рота башлығына йомош менән барған ваҡытта, алдағы линияға яҡын килеүенән файҙаланып, Күсәрбай түҙмәй, һыу буйына әкрен генә сүгәләп, ята-ята барып бер ҡәҙәр ҡарап торғандан һуң, һыуҙың бер сығыштының елһеҙ һелкенеүенән шикләнеп, бында моғайын дошмандың наблюдательный посы барҙыр тиеп уйлап, тиҙ-тиҙ генә, ашыға-ашыға ҡайтып, командирға: «Ана икенсе взводтың полевой ҡарауылынан аҙ ғына уңдараҡ, һыуҙың арғы яғында, ярҙың бер ҡултыҡланып сығып торған еренә үҫкән тал тирәләрендә шик бар. Часовойҙар шул ергә ныҕыраҡ күҙ һалһындар ине», — ти ҙә үҙенең шул ергә барып, асыҡлап киләһе килгәндән, шул яҡҡа үҙен был төндә разведкаға ебәреүен командирҙан һораны.

Командирҙың: «Юҡ, Күсәрбай, унда сығып һин үҙ-үҙеңде генә һәләк итерһең. Унда бит бер кеше генә булмаҫ, һинең сығыуыңды һиҙеп ҡалһалар, үҙеңде ҡулға алып штыкка күтәрерҙәр. Беләһең бит, улар хәҙер башҡорттарға ниндәй асыулы», — тиеүенә ҡаршы Күсәрбай: «Юҡ, иптәш, эш бер минең турала ғына түгел бит, бер мин бөтөүҙән бөйөк

мөҡәддәс эш өсөн бер ни ҙә булмаҫ. Бөтһәм, революция өсөн йәнемде ҡорбан иткән тағы бер башҡорт ҡыҙылармеецы булған булырмын. Ихтимал, иҫән ҡалһам, минең разведканан ҙур файҙа булыр. Үҙемдең генә түгел, башҡа иптәштәремдең дә иҫән ҡалыуы менән бергә оборонаға ла ярҙам иткән булырмын. Иптәш командир, мин бармайынса түҙә алмайым, һин мине ебәр», – ти. Быҙың үткен разведчик икәнен командир күптән белгәнгә, уның оҫта аҡыл менән йөрөйәсәгенә ышанып, рөхсәт итеү менән янындағы башҡа һалдаттар ҙа уның менән беҙ ҙә барабыҙ, тиеп командирҙан һорай башлайҙар.

Ләкин, Күсәрбай: «Юҡ, һеҙ миңә кәрәкмәйһегеҙ, мин үҙем генә барам. Һеҙ унда йөрөй белмәйенсә, тауыш сығарып, һиҙҙереп, барыбыҙҙы һәләкәткә илтерһегеҙ», – тине лә китә лә башланы.

Күсәрбайҙың разведкаға китеүенә ярты сәғәт кенә үткән булһа ла, һуғыш ерендәге һәр минут – сәғәт шикелле тойолғанға командир һәм иптәш һалдаттары Күсәрбайҙың оҙаҡ килмәй тороуына аптырап, әллә дошман ҡулына төштө инде, тиеп борсола башланылар. Күп тә үтмәй, бөтә тынлыҡты ярып үлем алдында ғына ишетелә торған бер ҡыҙғаныс тауыш һыҙылып килеп ҡарауылда торған бөтөн башҡорт ғәскәрҙәренең ҡолағына ишетелде.

Тауыштың шул ҡәҙәр ауыр, ҡыҙғаныс булыуына бөтөнөһөнөң иҫе китеп, был тауыш кемдеке, ҡайҙан килгәнен дә аңлап, уйлап алманылар. Шуның артынан уҡ пулемет шатырланы, уның артынан орудие ҡушылды, мылтыҡ тауыштары ишетелә башланы. Тауыш хаҡындағы уйҙы баштан сығарып, һөжүм иткән дошманға ҡаршы тороу ваҡыты еткәнен һиҙеп, бөтөнөһө берҙәм дошманға ут асырға керештеләр.

Бына ике яҡтан да атыш, пулемет тауышы, орудие гөрһөлдәүе, өҙлөкһөҙ атылған мылтыҡ шартлауы донъяның аҫтын-өҫкә килтерә.

«Ура!» тауыштары ишетелә, атыш менән сикләнмәйенсә атакаға күтәрелеп, һыуҙың был яғына сыҡҡан бөтөн дошман ғәскәрен турап бөтәләр.

Унда аяҡһыҙ, бында ҡулһыҙ, ҡайһыһы үлек, ҡайһыһы тере, әҙерәк йәне бары аһылдап ята... ҡиәмәт...

Дошман беҙҙекеләргә ҡарағанда шаҡтай күп ине. Һыу аша сыҡҡан ваҡытта пулемет менән күбеһе туралған икән. Атака еңел тура килде. Аҙ ғына ваҡытта һыуҙың тирә яғына сыҡҡан дошмандың бер һалдаты ла ҡалмаған, барыһы ла туралып бөткәйне. Бер ситтә, һиҙмәҫтән, әкрен генә һул ҡулын ҡайыш менән муйынына аҫҡан кешенең, часовойға тап килеп, часовойҙың: «Стой! Кем һин?» – тип һорауы, «Мин, үҙебеҙҙеке», – тип әкрен генә биргән яуабынан быҙың Күсәрбай икәнен һиҙеп, яҡын тирәлә булған бөтә һалдаттар, Күсәрбайҙы һырып алып, землянкаға төшкәнсә, «эй, нисек ҡотолдоң, ниҙәр булды? Һөйлә иптәш», – тиеп бөтөнөһө быҙың хәле менән таныша, ҡайғыһын уртаҡлаша башланылар.

Шунда уҡ бер нисәүһе үҙҙәренең бинттары менән Күсәрбайҙың кинжал менән яраланған ике беләген дә бәйләргә керештеләр. Был да шул арала үҙенең ҡайҙа, нисек яраланғанын һөйләргә керешеүҙән элек иптәштәренә ҡарап: «Иптәштәр! бөтөнөгөҙ хәҙер һаҡ тороғоҙ! Аҡтарҙың

бандалары, бер ни ҡәҙәр фин һалдаттары менән нисек булһа ла бөгөн таң атҡансы был һыу буйын алып, һыуҙың был яғына, тау буйына артылырға тырышасаҡтар. Иптәш командир! Мин хәҙер һеҙгә, резервта (һаҡлыҡта) торған бөтөн көстө бер-ике саҡрымға үҙебеҙҙең позицияны нығытырға кәңәш итәм. Уларҙың һаны күп булмаһа мең ярым-ике меңдән артмаç, шулай ҙа улар бөгөн асыу менән бик нығ тырышасаҡтар, ныҡ әҙерләнмәһәк, зарар итеүҙәре бар. Инде уларҙың бөгөнгө һөжүмдәренә бирешмәçбеҙ, уларҙың артында запас көстәре юҡ. Беҙ уларҙы ҡыуып китә алырбыҙ. Уларҙы беҙ ҡыуа башлаһаҡ кәрәктәрен бирмәйенсә туҡтамабыҙ — быныһы шулай.

Ә минең ҡулға килһәк, иптәштәр, мин һеҙҙең яндан киткәс тә әкрен генә үҙебеҙҙең цепь ята торған һыу буйына барҙым да иң элек аяҡтарҙы сисеп, ҡараңғыла күҙҙе өйрәтер өсөн ергә ятып бик оҙаҡ ҡарандым, янымдағы кинжалдан башҡа бар нәмәләремде ташланым.

Теге яҡта ла беҙҙеке шикелле, цепь юҡмы икән тиеп ҡарандым да, туп-тура теге яҡ ярға, бер ҡыуаҡҡа ғына ҡарап аяҡ үрә генә йөҙөп, беләһегеҙ бит, иптәштәр, мин электән үк йөҙөргә оçта, яр ҡырына еттем тигәндә генә бер-ике кешенең әкрен генә һөйләшкән тауыштары ишетелә башланы. Һөйләүҙәренә ҡарағанда береһе урыç булһа кәрәк, бик таҙа урыçса һөйләй. Быныһы инде Петроградтың бер буржуй балаһы, офицерҙыр, юҡһа былар менән булмаç ине, тип уйлап ҡуйҙым. Бик асыуым килде. Икенсеһе фин булһа кәрәк, сөнки бер ҙә беҙҙәге урыçтар шикелле һөйләмәй.

Инде уларҙың һөйләшкән һүҙҙәренә килһәк, нәмәләр һөйләшкәне бик мәғлүм инде. Иптәштәр, минең сәстәрем үрә торҙо. Уларҙан ҡурҡып түгел, урыç офицерының һөйләгән һүҙҙәренә асыуым килеп.

Иптәштәр! белһәгеҙ ине, минең нисек асыуым килеүен. Уның: «Башҡорттарҙың донъя йөҙөндә береһен дә ҡалдырмаç кәрәк, урыç пролетариатына, урыç большевиктарына хәҙер шулар бик күп ярҙам бирә, уларҙы шуның өсөн сәйнәп бөтөрөргә кәрәк», — тигән һүҙҙәрен ишеткән ваҡытта — мм... (Күсәрбай тештәрен ҡыçып) шул урында үҙен сәйнәргә етешеп торҙом. Ул шул ҡәҙәр күп һөйләне. Һөйләй-һөйләй ҡайҙа торғанын да онотто шикелле. Уның һүҙҙәрен ишеткән һайын минең асыуым килеп, туҡта (үҙ-үҙемә), былар бит икәү генә. Мин быларҙың икеһен дә эш итә алам бит, тиеп йәшенеп торған ерҙән әкрен генә сығып, бер ҙә ҡыштырламайынса ғына быларҙың өçтөнә ынтылдым. Улар, хуштарын йыйғанса мин үткер кинжал менән финдең йөрәгенә ҡаҙағайным. Уның шуның менән эше лә бөттө тигәндә, шунда уҡ икенсеһенә ырғыным. Унда ла кинжал, миндә лә кинжал. Ҡулдарынан кинжалын ҡайырып алдым да, ыçҡына тигәндә генә елкәһенә батырҙым үҙ кинжалы менән. Бына инде шул ваҡытта ул бер ҡысҡырып ҡалды. Буржуй, мин тегене йыҡҡанда, йоҡлап тормаған бит. Минең беләккә берҙе кейҙереп алған, ярай әле һул беләккә эләккән. Мин ул ваҡытта һис нәмә һиҙмәгәйнем. Ну, үҙҙәрен дә эш иттем һуң, эттәрҙе. Ысын-ысынындан эт үлеме менән бөтөрҙөм». Иптәштәре бер ауыҙҙан әйтә: «Шулай кәрәк ул, буржуйҙарға, етәр инде, беҙҙең ҡанды күп эстеләр. Инде түләр

көндәре етте. Беҙ ҙә, иптәш, бирҙек кәрәктәрен. Яралыларын да йыйып алманылар. Уйнамаһындар беҙҙең Ҡыҙыл Армия менән! Уның эсендә башҡорттар барын да онотмаһындар!» — тинеләр.

Күсәрбай: «Юденич менән финдарҙың күрмәгәндәрен күрһәттек, француз менән инглиздарға ла бына шул кәрәк ине», — тине. Иптәштәре бер ауыҙҙан: «Совет хөкүмәтенә ҡаршы һуғышып булышһалар, уларына ла сират етер әле. Был ҡамсылар, был кинжалдар уларҙың ҡысыуын алыр». Шул саҡта Күсәрбайҙың «Иптәштәр! — тине һәлмәк тауышы, — беҙҙекеләр һөжүм башланы, әйҙәгеҙ киттек, бөтә буржуйҙарҙы ҡырып бөтмәйенсә туҡтамайыҡ!..»

Фәтхи

Башҡортостан хәрәкәте

Башҡортостан хәрәкәте башҡорт халҡының тарихы менән таныш булған кешегә башҡорт халҡының Февраль, Октябрь революцияларында ғына ҡуҙғалыуҙары түгел, бынан элек әллә нисә йылдар буйына, нисә йөҙ мең ҡорбандар, әллә ниндәй иҫ киткес фажиғәләр аҫтында ҡатын, бала-сағалары менән берлектә үҙҙәренең хоҡуҡтарын яҡларға тырышып залим, тиран батшаларға ҡаршы һуғышып йөрөгән дәүерҙәре иҫкә килә.

Ләкин ул ваҡыттарҙа, башҡа тарафтарҙа булмаған, фәҡәт яңғыҙ башҡорт революциялары ғына ҙур Рәсәйҙең әллә ниндәй оҫта сәйәсәттәре менән һүндерелгәйне.

Шулай ҙа революция орлоҡтарын һаҡлаған, революция эсендә тыуған, революция менән һуғарылған башҡорт халҡына Февраль революцияһы ҡом сәхрәләрендә һыуһаған кешегә эсергән һыу кеүек тойолдо. Февраль революцияһы тыуыу менән әллә ҡайҙарҙа, Урал тауҙары араларында Романовтарҙың сәйәсәттәре менән таратылған башҡорт халҡы бер йән, бер тән булып бөтөнөһө ойошто һәм үҙҙәренең йәберләнеп, тартып алынған хоҡуҡтарын һорау өсөн берәр ойошма төҙөргә, электән ҡалған революция орлоҡтарының үсеүенә, был дөйөм Февраль революцияһының ҙур форсат булғанлығын белеп, бергәләп хәрәкәт итергә булдылар.

Һөҙөмтәлә, Бөтә Башҡортостан ҡоролтайы йыйылып, һәр йәһәттән иң артта, иң ватылған, иң боҙолған, иң мәсхәрәләнгән башҡорт халҡы яңынан самодержавие дәүеренә ҡайтмаҫҡа, бәлки, нисек тә үҙ алдарына киләсәк тормошто тәьмин итерҙәй бер орлоҡ ҡалдырып, шуны үҫтереү сараһына бергәләп ныҡлыҡ менән килешергә булып, шул эшендә уларға юлбашсылыҡ итер өсөн үҙҙәре араһынан иң ышаныслы кешеләрҙән идара — «Башҡорт Мәркәз шураһы» төҙөп, бөтә мәсьәләне шуға йөкмәттеләр. Шулай итеп, башҡорт халҡы киләсәген тәьмин итергә, самодержавие ҡоллоғонан ҡотолорға бер нигеҙ ҡуйҙы.

Был ваҡыттарҙа (Октябрь революцияһына ҡәҙәр) бөтөн Рәсәй ҡара томан хәлендә булып, һәр бер халыҡтың нисек хәрәкәт иткәнлектәре

мәғлүм булмауы өҫтөнә, яңы ғына кисергән, батшалар дәүеренән мираҫ булып ҡалған, тар күңелләләрҙең иҙелгән халыҡтың тын алыуына ғәрләнеү, көнләшеү тигән эҙ дә бөтмәгәйне. Шуға күрә Башҡортостан хәрәкәтенә ҡараштар, фекерҙәр төрлөсә булды. Ләкин ысынында башҡорт халҡы Февраль революцияның уның Февраль революцияһы булғанлығы өсөн генә ҡатнашманы, бәлки, үҙе теләгәндәрен, үҙенең алға алған маҡсаттарын шундай ҙур форсат арҡаһында ғына майҙанға ҡуйыу мөмкинлеге булғаны менән генә ҡатнашты. Шуға күрә лә әллә нindәй «һыуға яҙылған» «Милли-мәҙәни мөхтәриәт», «Иҙел-Урал» кеүек башҡалар көйөнөң тауыштарына иҫтәре китмәүе, туранан-тура үҙ тормошон тәьмин итерҙәй «Ерле, иҡтисади мөхтәриәт» һорап майҙанға сыҡты. Февраль революцияһы һуңынан да идара буржуаз ҡулында булғанлыҡтан, башҡорт халҡы үҙенең ошо изге теләктәре арҡаһында әллә нindәй ауырлыҡтар, хурлыҡтар, ҡараңғы көндәр кисерҙе.

Ысынында һәр йәһәттән эттәр уратып алған хәйерсе күренеше тыуҙы, һәр форсаттан файҙаланып Башҡортостан хәрәкәтен насар итеп күрһәтергә тырыштылар.

Октябрь революцияһы тыуыуы менән дә Башҡортостан хәрәкәтенә ҡараш элеккесә ҡалды, бәлки, ҡаршы хәрәкәттәр ялған шикәйәт яҙыу дауам итте. Һөҙөмтәлә, шундай урынһыҙ шикәйәттәр яҙыу арҡаһында насар күрһәтелеп, Башҡортостанда күңелһеҙ «Февраль революцияһы», «Баймаҡ фажиғәһе» тыуҙы.

Ләкин, алтын серемәгән кеүек башҡорт халҡының зарығып-зарығып нисә йылдар буйына теләгән хаҡлы теләктәренең дә тормошҡа ашыуына, үҙҙәре кеүек иҙелгән халыҡтар яҡлаусыһы булған Совет власының иҙелгән башҡорт халҡын онотмаясағына ныҡ ышанды. Һөҙөмтәлә, Башҡортостанда 1919 йыл 18 февраль революцияһы майҙанға сыҡты. Был көн – тарихта, залимдар мәсхәрәһенә түҙә алмайынса башҡорт халҡының 78 мәртәбә баш күтәреп нисә йөҙ меңдәр ҡорбан биргән, туҙҙырылған, аҡтыҡ ҡандары ҡалғанға ҡәҙәрле, интегә-интегә зарығып теләгән теләктәренең, ниһайәт, майҙанға сыҡҡан көнө.

Был көн – төрлө ялған шикәйәт менән батшалар ваҡытында башҡорт халҡын ҡол итергә, революция ваҡытында бысраҡ яғырға тырышҡан яуыз дошмандарынан айырылған көн.

Был көн – ҡанһыҙ батша ялсыларының төрлө тоҙағынан, наҙанлыҡ пәрҙәһенән, наҙанлыҡ арҡаһында дәһшәт биргән урядник, стражниктар тауыштарынан, баярҙар, дворяндар, алпауыттар тоҙағынан ҡотолған көн.

Бөгөнгө көн – сылтырап аҡҡан йәмле-тәмле йылғалар, Урал тауҙарының ҡиммәтле байлыҡтары, хәтфә кеүек йәм-йәшел, йәмле, данлы ерҙәренең алпауыттар, баярҙар, банкирҙарҙың хәйләле ҡулдарынан ҡотолоуына, үҙ байлыҡтарынан, үҙ тормошонан үҙҙәре теләгәнсә файҙаланыу мөмкинлеге майҙанға сыҡҡан көн.

Бөгөнгө көн – батшаларҙың беренсе тоҙаҡтары булған наҙанлыҡ пәрҙәһе асылған көн, ватылған, иҙелгән ике халыҡтың бер-берейһе менән үбешеп күрешкән, мәңгелек ысын тормош юлдашы булырға вәғәҙә бирешкән көн.

Бына шул көндөң ысын хәҡиҡәтен аңлап, башҡорт халҡы үҙҙәре кеүек ярлы халыҡ менән ҡулға-ҡул тотоноп эшкә кереште. Советтарға төрлө тарафтан һөжүм иткән батша ялсыларына ҡаршы Рәсәйҙәге башҡа ярлы халыҡ рәтенән ярлы башҡорт штыктары ла терәлде. Көньяҡ тарафтан һөжүм иткән Деникинға бер атлы дивизия, бер йәйәүле бригадаһы дәһшәт һалды, Деникиндың ҡанын эсеп, революция үҙәге Петроградты һаҡларға килде. Бында, Юденич Петроград ҡапҡаһына керергә ашҡынғанда, башҡорт ғәскәрҙәренең штыктары күренгәс, нисек әйләнгәнен һиҙмәне. Төрлөсә һөжүмдәр яһап торған финдар, фин фронтына башҡорт ғәскәрҙәре барыу менән, һөжүмдән туҡталдылар.

Бер атлы Башҡорт бригадаһы Төркостан фронтында. Башҡортостан мәмләкәтенең эске эштәре ышанысла ҡулдарҙа булып, улар үҙ нәүбәттәрендә яҡшы ғына яңы эштәр эшләгән кеүек, башҡорт ғәскәрҙәре лә үҙҙәренә киң хоҡуҡ бирелгән Совет власын сит дошмандарҙан һаҡлау вазифаһына кәмселек килтермәйсә, хайран ҡалырлыҡ яңы батырлыҡтар эшләй улар. Бына шундай тарихта үҙ урынын, үҙ көсөн Октябрь революцияһында күрһәткән башҡорт ғәскәрҙәре башҡорт халҡының ирекле донъяға, бөтә донъя ижтимағи революцияһына сығыуына бер йыл тулыу айҡанлы байрам итә.

Күп тотҡонлоҡтарҙа торған халыҡтың яҙмышы, яҡшы тормошо фәҡәт Совет власын урынлаштырғанда ғына мөмкин буласағына ышанып, бөтә Башҡортостан халҡы бөгөнгө көндө иң ҙур, иң хөрмәтле байрамдарҙан һанай. Петроградтағы башҡорт ғәскәрҙәре, бигерәк тә, һәр һуғыштан, һәр бер фронттан яҡшы хәбәре булып, был байрамдың (бер йыллығы. – *А. Я.*) инҡилаб мәркәзе Питерҙа тура килеүенән файҙаланып, яңы-яңы өмөттәр менән яҡты киләсәкле Башҡортостандың йәшәүе фәҡәт Совет власы менән генә тәьмин ителәсәгенә ышанып, бөтөн көс, бөтөн ҡорбандарының шуға сарыф ителеүенә әһәмиәт бирә. Һәм бөтә иҙелгән халыҡтарҙың тормошоноң яҡшы юлға ҡуйылыуы хаҡына бирелгән ҡорбандарға ҡарамаҫтан, теләгән эштәребеҙҙе майҙанға ҡуйыуға ҡаршы булған бөтә революция дошмандары, элекке заман кешеләре башҡорт халҡын юлдан сығарырға, уны советтарға ҡаршы ҡуйырға бик күп тырышалар, ошо маҡсат менән был көндәрҙә «Советтар инде башҡорттарҙы бөтөнләй бөтөрәләр», – тип провокация тараталар, ялғанлайҙар. Иптәштәр! Ул дошмандарҙың һүҙҙәре.

Дөрөҫ көс сарыф ителеп, алға алған эштәргә ниндәй генә мәңгелек тимер ҡапҡалар ҡаршы булһа ла ул майҙанға сығарыласаҡ, бөтөн донъя ижтимағи революцияһына ҙур юл асыласаҡ. Башҡорт халҡының көткәне лә шул.

Йәшәһен, Өсөнсө Интернационал флағы аҫтында ойошҡан иҙелгән халыҡтар берлеге!

Йәшәһен, Рәсәй Совет хөкүмәте һәм Башҡортостан!

Ғабдулла Ибраһимов
(Ҡараҡыпсаҡ).

Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнгән башҡорт ғәскәрҙәре яугирҙары

Йәнен-тәнен аямай һуғышыуға, ҙур ҡаһарманлыҡтар күрһәтеүгә ҡарамаҫтан аҡтар яғында ла, ҡыҙылдар яғында ла башҡорт ғәскәрҙәренең хеҙмәтен күреп бармағандар. Мәҫәлән, 1918 йылда башҡорт полктары Екатеринбург, Орск ҡалаларын алыуҙа ҙур батырлыҡ күрһәтә. Рәхмәт йөҙөнән 2-се Башҡорт пехота полкына Екатеринбург халҡы исемләп байраҡ тапшыра. Шундай уҡ байраҡты Орск мосолмандары 4-се Башҡорт пехота полкы яугирҙарына бүләк иткәнлеге билдәле. Ә бына Аҡ командование тарафынан орден, миҙалдар менән бүләкләнеү тураһында бер ниндәй ҙә мәғлүмәт юҡ. Киреһенсә, аҡтар башҡорттарҙың һуғышта күрһәткән хеҙмәтен бөтөнләй күрмәҫкә тырышҡандар. Мәҫәлән, 1918 йылдың 25 авгусында Верхнеуральск фронтындағы башҡорт көстәренең командующийы Усман Тереғолов үҙенең рапортында:

«Воины-башкиры Верхнеуральского фронта, подчиняясь Комкору Уральскому, безропотно исполняли все приказы и приказания, не смотря на то, что они все голые, нагие, босые, голодные. Шли в бой почти с дубинами – негодными к стрельбе берданами, на поле сражения многие из раненых погибали без санитарной помощи, для башкир не отпускали ни одного индивидуального пакетика. Несмотря на все трудности, башкиры не опозорили имя воина-башкирина, смело и храбро прикладами отбивали атаки.

Комкор Уральский не хотел видеть героизм воинов-башкир и не услышал их голодный и измученный стон, на наши просьбы хлеба насущного даже не последовали .ответы.

Кровью измученных башкир удержал фронт, протянувшийся на несколько десятков верст, но, несмотря на это, из штаба Уральского Комкора бросают упреки и грязь в лицо воинов-башкир, называя их негодным и ненужным элементом.

Прошу от имени всех воинов-башкир Верхнеуральского фронта: зачем и почему гигантские труды башкир затоптаны в грязь?» – тип әсенеп Ырымбурға, Башҡортостан хөкүмәтенә яҙа.

1918 йылдың көҙөндә Орск фронтында шул уҡ хәл күҙәтелә. Дутов Орск ҡалаһын алыуҙы казактарҙың ғына хеҙмәте тип күрһәтә. Октябрь айында Ырымбурҙа булып киткән Өфө директорияһы вәкиле Н. Стариков ошо айҡанлы былай тип яҙа: *«Точно знаю, что башкиры сильно раздражены дутовским освещением боев на Орском фронте – Орск был взят почти исключительно башкирами (Казаки чай*

пили в это время, как говорят башкиры), а между тем честь взятия Орска Дутовым была приписана прежде всего доблестным казакам».

Георгий ордены менән башҡорт яугирын бүләкләү факты бер генә фарманда ғына осрап ҡала. Униһы ла Аҡ командование тарафынан түгел, ә Башҡорт ғәскәри идаралығы, йәғни Зәки Вәлиди фарманы менән тапшырылған. Унда: *«Рядового 4-го Башкирского полка Псенчина Зайнабетдина за его подвиг, выразившийся в выносе с поля битвы раненого офицера под пулеметным огнем, награждаю Георгиевским крестом VI степени»*, – тиелә.

Башҡорт ғәскәрҙәре ҡыҙылдар яғына сыҡҡас та шундай уҡ хәл күҙәтелә. 1919 йылдың йәйендә Башҡорт кавалерия дивизияһы Көньяҡ фронтта, Деникин армияһына ҡаршы ҡанлы һуғыштарҙа ҡатнаша. Иҫ китмәле батырлыҡтар күрһәтә, башҡорт яугирҙарының байтағы ошо яуҙарҙа башын һала. Шуға ҡарамаҫтан, Ҡыҙыл Армия командованиеһы Башҡорт кавалерия дивизияһын бер орден менән дә бүләкләмәй. Ҡыҙылдарҙың бөтөн армияһы (14-се армия) паникаға бирелеп ҡасҡан ваҡытта (Усман Тереғоловтың хәтирәләрен иҫкә төшөрөгөҙ), бер Башҡорт дивизияһының ғына батырлығын баһаларға теләмәгәндәр, әлбиттә. Икенсенән, йыл башында ғына аҡтар яғынан сыҡҡан башҡорт ғәскәрҙәренә большевиктарға тоғролоҡ имтиханы була. Ошо хаҡта Башревком ағзалары ла башҡорт яугирҙарына ебәргән хатында асыҡ аңлата: *«Переброска Вас на Юг явилась как бы испытанием, экзаменом революционности, верности башкир»*.

Был осраҡта ниндәйҙер баһаға, наградаға өмөт итеүе мөмкин түгел, әлбиттә. Шуға күрә лә, Көньяҡ фронтҡа килгән сағында, Башҡорт республикаһының хәрби комиссары Зәки Вәлиди дивизияға рәхмәт белдереп, батырлыҡ күрһәткән яугир Мәрҙән Хәлитовҡа исемләп көмөш сәғәт бүләк итә.

1919 йылдың август аҙағында ҡабат ҡыҙылдар яғына сыҡҡан Мортазин бригадаһын Урал фронтына ташлайҙар. Башҡорт атлылары үҙҙәренә һалынған бурысты теүәл үтәп сығалар. Күп кенә батырлыҡтар күрһәтәләр. Бригада һуғышта 60 процент самаһы составын юғалта. Муса Мортазин ҡайһы бер яугирҙарҙы Ҡыҙыл Байраҡ орденына тәҡдим итеп ҡарай, әммә наградалар бирелмәй. Сөнки Башҡорт кавалерия бригадаһы өсөн Урал фронты ул Совет власына тоғролоҡ имтиханы була.

1919 йылдың көҙөндә башҡорт ғәскәрҙәрен Петроград фронтына ебәрәләр. Бында инде башҡорт яугирҙары күрһәткән батырлыҡтары өсөн әҙме-күпме баһа ала. Башҡорт кавалерия дивизияһының комиссары Н. Таһировҡа эйәр, Башҡорт республикаһы хәрби комиссары урынбаҫары Ә. Ишмырҙинға ҡылыс бүләк ителә, Башҡорт уҡсы бригадаһы комиссары Ғ. Ибраһимовтың, Петроград фронтының Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмө командиры Х. Әлишевтең, 2-се Башҡорт уҡсы полкы командиры Н. Таһировтың, 3-сө Башҡорт кавалерия полкының йыйылма эскадроны командиры И. Малиновскийҙың һәм яугир Ғөзәйер Төхвәтуллиндың Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнеүе билдәле.

Башҡорт яугирҙары Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән тик 1920 йылда Польша фронтында күрһәткән батырлыҡтары өсөн бүләкләнә. Әммә, бында ла, орден менән бүләк тураһында фармандар бер-ике йылдан һуң ғына донъя күрә. 1920 йылда Башҡорт кавалерия бригадаһынан Ҡыҙыл Байраҡ орденын тик Муса Мортазин ғына ала. Бригаданың күп яугирҙары орден менән 1921 йылда бүләкләнә. Мәҫәлән, Реввоенсоветтың 57-се фарманы менән Польша фронтында күрһәткән батырлыҡтары өсөн байтаҡ башҡорт яугирҙары Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була. Орден менән бүләкләнеү тураһындағы мәғлүмәт Башҡортостанға 1922 йылдың йәйендә генә килә. БАССР-ҙың хәрби комиссары матбуғатта 10 кешегә РВСР-ҙан Ҡыҙыл Байраҡ ордендары ебәрелеүе тураһында яҙа:

«Военным комиссариатом БССР из Революционного военного совета Республики получены ордена Красного знамени бойцам польского фронта:

Бывшему командиру 1-го Башкирского кавполка т. Ашрапову, ныне состоящему на должности заведующего агитационно-пропагандического отдела Башобкома РКП(б). Орден № 12098. Приказ РВСР 1921 г. № 57.

Бывшему командиру 27-го Башкирского кавполка т. Шарипову, позднее состоявшему военкомом Яланского кантона и ныне работающему в Башобкомпомголе. Орден № 12091. Приказ РВСР 1921 г. № 57.

Бывшему помощнику комполка 27-го Башкирского кав. т. Зиннурову, состоящему последнее время на должности военного комиссара Тамьян-Катайского кантона и умершему от тифа в нынешнем году. Орден № 12092. Приказ РВСР 1921 г. № 57.

Бывшему коменданту штаба Башкавбригады т. Хакбердину, убитому бандитами в пути следования домой с фронта в Тамьян-Катайском кантоне. Орден № 120100. Приказ РВСР 1921 г. № 57.

Бывшему командиру 1-го эскадрона 27-го Башкавполка т. Шайхисламову, ныне находящемуся в Тамьян-Катайском кантоне. Орден № 12093. Приказ РВСР 1921 г. № 57.

Бывшему помощнику командира 1-го эскадрона 27-го Башкавполка т. Фаттахетдинову, ныне находящемуся в Тамьян-Катайском кантоне. Орден № 12095. Приказ РВСР 1921 г. № 57.

Бывшему командиру взвода 4-го эскадрона 27-го Башкавполка т. Казнабаеву, ныне находящемуся в Тамьян-Катайском кантоне. Орден № 12096. Приказ РВСР 1921 г. № 57.

Бывшему помощнику командира 28-го Башкавполка и бывшему военному комиссару Бурзян-Тангауровского кантона т. Ибрагимову. Орден № 12097. Приказ РВСР 1921 г. № 57.

Бывшему командиру 4-го эскадрона 27-го Башкавполка – ныне помощнику военного комиссара Бурзян-Тангауровского кантона – т. Гафарову. Тов. Гафаров уже удостаивается вторичным награждением орденом Красного знамени. Орден № 12094. Приказ РВСР 1921 г. № 57.

Орденом Красного знамени вышеуказанные товарищи награждаются за различные геройские подвиги на Польском фронте в боях против польских белогвардейских банд. Ордена будут вручены по принадлежности при торжественной обстановке.

Вечная память павшим героям – вечная слава героям живым».

Башҡорт кавалерия бригадаһының элекке яугирҙары артабан, 1922, 1925 йылдарҙа Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнәләр. 1922 йылда Хәлфетдин Фәттәхетдиновты икенсе тапҡыр Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләү тураһында фарман сыға. Әммә, ни сәбәптәндер, орден уға килеп етмәй. Улы яҙыуынса, Х. Фәттәхетдинов икенсе Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнеүе тураһында белмәй вафат була.

Муса Мортазиндың «*Башҡортостан һәм башҡорт ғәскәрҙәре Граждандар һуғышында*» (Өфө: Китап, 1994), *«Список лиц, награжденных орденом Красного Знамени РСФСР»* (Интернет селтәрендәге варианты) китаптары һәм башҡа документаль сығанаҡтарға таянып, РСФСР-ҙың Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнгән башҡорт ғәскәрҙәре яугирҙарының түбәндәге исемлеген төҙөнөм. Шулар араһында өс кеше – Муса Мортазин, Шәмсетдин Ғафаров, Хәлфетдин Фәттәхетдиновтар Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән ике тапҡыр бүләкләнгән. Шулай уҡ 27-се полк командиры Хисаметдин Фәйзуллин да Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән ике тапҡыр бүләкләнгән, тиелә биографияһында. Исемлек тулы түгел, әлбиттә. Шулай ҙа китап уҡыусылар өсөн ҡыҙыҡлы һәм файҙалы булыр, тип ышанам.

1. **Абдуллин Рәхмәтулла** – 27-се Башҡорт кавалерия полкының пулемет командаһы яугиры. Киев хәрби округы РВС-ның 2163-сө фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. РСФСР-ҙың Революцион хәрби советының (Реввоенсовет Республики, РВСР) 34-се фарманы менән 1922 йылда раҫланған. 2163-сө фарманда былай тиелә: *«Гоноровка ауылы янындағы һуғышта быуаны баҫып алып, үҙенең пулемет уты менән 175 дошман һалдатын бирелергә мәжбүр итте».*

2. **Айляров Казбек** – 28-се Башҡорт кавалерия полкы командиры. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

3. **Айытов Зөбәйҙулла** – 28-се Башҡорт кавалерия полкы политругы. 1921 йылда Киев хәрби округы РВС-ның 285-се фарманы менән бүләкләнгән. РВСР-ҙың 380-се фарманы менән 1925 йылда раҫланған. 285-се фарманда былай тиелә: «*...политрук Айытов Зөбәйҙулла һәм ҡыҙылармеец Ғәббәсов Ғәзим иптәштәр – Пилявы ауылы янындағы һуғышта үҙ ҡулдары менән дошмандың 2 орудиеһын һәм 2 пулеметын алғандары өсөн*».

4. **Андреев А.** – Бригаданың эскадрон командиры. Яуҙа һәләк булған. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

5. **Белевич Денис** – 28-се Башҡорт кавалерия полкының 1-се эскадроны старшинаһы. Киев хәрби округы РВС-ның 443-сө фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. РВСР-ҙың 4-се фарманы менән 1922 йылда

раҫланған. 443-сө фарманда былай тиелә: «*1-се эскадрон старшинаһы Белевич Денис, взвод командиры ярҙамсыһы Миңлевәлиев Әбделхалиҡ һәм кавалерист Ҡатаранов Ғәметдин иптәштәр: башҡорт кавалерия частары дошмандың ҡыҫымы аҫтында Литин ҡалаһынан сигенгән саҡта әлеге иптәштәр комбриг башлығында беренсе булып дошманға контрһөжүмгә ташландылар, дошмандың сафтарында паника тыуҙырҙылар, шуның менән беҙҙең частарға ойошҡан рәүештә сигенергә мөмкинлек бирҙеләр*».

6. **Беленький Иосиф** – бригаданың комиссары. Яуҙа һәләк булған. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

7. **Башев** – 27-се Башҡорт кавалерия полкы комиссары. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

8. **Воробьев Владимир Петрович** – 27-се Башҡорт кавалерия полкы хәрби комиссары ярҙамсыһы. РВСР-ҙың 34-се фарманы менән 1922 йылда бүләкләнгән.

9. **Годунов Борис** – бригаданың 2-се еңел артиллерия дивизионы батареяһының комиссары. РВСР-ҙың 57-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән.

10. **Горбатов Александр Васильевич** – бригаданың командиры. РВСР-ҙың 115-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән.

11. **Гофицкий Виктор Оскарович** – бригаданың комиссары. РВСР-ҙың 479-сы фарманы менән 1920 йылда бүләкләнгән.

12. **Гуляев Семен** – бригаданың 2-се еңел артиллерия дивизионының орудие начальнигы. РВСР-ҙың 57-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән.

13. **Гутман Р.** – бригаданың комиссары. Яуҙа һәләк булған. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

14. **Гәрәев Заһит Хажи улы** – Айырым Башҡорт уксы бригадаһы штабы начальнигы. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

14. **Ғайнанов Усман Ғайнан улы** – 28-се Башҡорт кавалерия полкы командиры. СССР Реввоенсоветының фарманы менән 1928 йылда бүләкләнгән.

15. **Ғатауллин Кәлимулла** – 27-се Башҡорт кавалерия полкының 2-се эскадроны яугиры. Киев хәрби округы РВС-ның 2163-сө фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. РВСР-ҙың 34-се фарманы менән 1922 йылда раҫланған. 2163-сө фарманда былай тиелә: «*Волочиск ҡалаһы янында-*

ғы һуғышта ул беренсе булып дошман орудиеһына ташланды һәм үҙе артынан иптәштәрен дә әйҙәне, һөҙөмтәлә беҙҙең тарафтан дошмандың өс орудиеһы алынды – бына шуның өсөн».

16. **Ғафаров Шәмсетдин Шәйхетдин улы** – 27-се Башҡорт кавалерия полкының 4-се эскадроны командиры. РВСР-ҙың 57-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. Фарманда былай тиелә: *«4-се эскадрон командиры Ғафаров Шәмсетдин иптәшкә: 1920 йылдың 6 июнендә ул эскадроны менән 28-се кавалерия полкына ярҙамға килеп һәм Пеняево ауылына һөжүм итеп, дошман өҫтөнә һыбай һөжүмгә ташланды, уны сигенергә мәжбүр итте һәм поляктарҙың француз өлгөһөндәге орудиеһын эләктерҙе».* Ш. Ш. Ғафаров РВСР-ҙың 353-сө фарманы менән 1921 йылдың 28 декабрендә икенсе тапҡыр бүләкләнгән.

17. **Ғиниәтуллин Әбүбәкир** – 28-се Башҡорт кавалерия полкы яугиры. 1921 йылда Киев хәрби округы РВС-ның 285-се фарманы менән бүләкләнгән. РВСР-ҙың 380-се фарманы менән 1925 йылда раҫланған. 285-се фарманда былай тиелә: *«Ҡыҙылармеец Ғиниәтуллин Әбүбәкир һәм Ҡәлейәнов Ҡунаҡбай иптәштәр – Зарудня ауылы янындағы һуғышта үҙ ҡулдары менән дошмандың ете пулеметын алған өсөн».*

18. **Ғиниәтуллин Хәбибулла** – 28-се Башҡорт кавалерия полкы яугиры. 1921 йылда Киев хәрби округы РВС-ның 285-се фарманы менән бүләкләнгән. РВСР-ҙың 380-се фарманы менән 1925 йылда раҫланған. 285-се фарманда былай тиелә: *«Ҡыҙылармеец Ғиниәтуллин Хәбибулла иптәш – Большая Верба ауылы эргәһендәге алышта дошмандың көслө уты аҫтынан үҙ полкының командиры Ғайнанов иптәште алып сыҡҡаны өсөн».*

19. **Ғөбәйҙуллин Ғариф** – бригаданың эскадрон командиры. Яуҙа һәләк булған. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

20. **Ғәббәсов Ғәзим** – 28-се Башҡорт кавалерия полкы яугиры. 1921 йылда Киев хәрби округы РВС-ның 285-се фарманы менән бүләкләнгән. РВСР-ҙың 380-се фарманы менән 1925 йылда раҫланған. 285-се фарманында былай тиелә: *«...политрук Айытов Зөбәйҙулла һәм ҡыҙылармеец Ғәббәсов Ғәзим иптәштәр – Пилявы ауылы янындағы һуғышта үҙ ҡулдары менән дошмандың 2 орудиеһын һәм 2 пулеметын алғандары өсөн».*

21. **Ғәйнуллин Г.** – бригаданың яугиры. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

22. **Дауытов Мозафар** – 28-се Башҡорт кавалерия полкы яугиры. 1921 йылда Киев хәрби округы РВС-ның 285-се фарманы менән бүләкләнгән. РВСР-ҙың 380-се фарманы менән 1925 йылда раҫланған. 285-се

фарманда былай тиелә: *«...старшина Солтанов Әхмәт һәм ҡыҙыл-армеец Дауытов Мозафар иптәштәр – уҙған йылдың 27 июнендә Зубковичи ауылы янындағы һуғышта яраланған полк командиры ярҙамсыһы Тихомиров иптәште ут аҫтынан алып сыҡҡандары өсөн».*

23. **Ейәнсурин Ғәҙелша Дәүләт улы** – 27-се кавалерия полкының 1-се эскадроны командиры. РВСР-ҙың 34-се фарманы менән 1922 йылда бүләкләнгән.

24. **Зекеров Әхмәҙей** – 27-се Башҡорт кавалерия полкы командиры ярҙамсыһы. РВСР-ҙың 57-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. Фарманда былай тиелә: *«...27-се полк командиры ярҙамсыһы Зекеров Әхмәҙей иптәшкә: 1920 йылдың 11 июнендә ул биш ҡыҙылармеец менән Гезикевичи ауылында полк командиры һәм эйәрләнгән аттары менән һаҡта торған 50 казағы менән ҡуша дошмандың 84-се Дон кавалерия полкының штабын ҡулға төшөрҙө».*

25. **Зиннуров** – 27-се Башҡорт кавалерия полкы командиры ярҙамсыһы. РВСР-ҙың 57-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. 1922 йылда вафат булған.

26. **Ибраһимов Ғабдулла Әбделғәлим улы** – Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы комиссары.

27. **Ибраһимов Фәттәх Әҙелмырҙа улы** – 28-се Башҡорт кавалерия полкы командиры ярҙамсыһы. РВСР-ҙың 57-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. Фарманда былай тиелә: *«28-се полк командиры ярҙамсыһы Ибраһимов Фәттәх иптәшкә: 1920 йылдың 5 июнендә Башҡорт бригадаһының Пиняево ауылына һөжүме ваҡытында ул бер эскадрон менән дошман батареяһының артына үтеп инде һәм дәррәү һөжүм менән уны мәсхәрәле ҡасырға мәжбүр итеп, әсирҙәр, шулай уҡ тупсылары һәм һаҡсылары менән ҡуша ике орудие яһау йәшниге, ике пулемет һәм хәрби мөлкәт тейәлгән ылауҙарҙы эләктерҙе».*

28. **Ибраһимов Ф.** – бригаданың йәйәүле дивизионы командиры. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

29. **Ильясов Ғәли** – бригаданың взвод комиссары. РВСР-ҙың 4-се фарманы менән 1922 йылда бүләкләнгән.

30. **Ильясов Хәбибулла** – бригада штабының ат ҡараусыһы (коновод). Киев хәрби округы РВС-ның 443-сө фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. РВСР-ҙың 4-се фарманы менән 1922 йылда раҫланған. 443-сө фарманда былай тиелә: *«Штаб коноводы Ильясов Хәбибулла иптәш: уҙған йылдың 21 ноябрендә Клининцы ауылы янындағы һуғышта*

ул беренселәрҙән булып ауылға ингән ерҙәге дошман пулеметы өҫтөнә һөжүмгә ташланды һәм пулемет тачанкаһын ҡыуып барышлай петлюрасы офицерын юҡ итеп, пулеметты ҡулға төшөрөргә булышлыҡ итте».

31. **Иманғолов Байғужа** – 27-се кавалерия полкының взвод командиры. Киев хәрби округы РВС-ның 2163-сө фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. РВСР-ҙың 34-се фарманы менән 1922 йылда раҫланған. 2163-сө фарманда былай тиелә: 1920 йылдың 14 ноябрендә Гоноровка ауылы янындағы һуғышта *«...бер иптәше менән дошман уты аҫтында ике петлюрасыны ҡыуып еткәне һәм уларҙы пулеметтары менән ҡуша әсир алғаны өсөн».*

32. **Исмәғилев Сәләх Хәйретдин улы** – бригада штабының комиссары. СССР Реввоенсоветының фарманы менән 1928 йылда бүләкләнгән.

33. **Исхаҡов Ибраһим Ейәнбай улы** – Айырым Башҡорт уксы бригадаһының 2-се полкы командиры.

34. **Ишмөхәмәтов Кинйәбай Хәйретдин улы** – 27-се кавалерия полкының 4-се эскадроны командиры. Киев хәрби округы РВС-ның 2163-сө фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. РВСР-ҙың 34-се фарманы менән 1922 йылда раҫланған. 2163-сө фарманда былай тиелә: 1920 йылдың 21 ноябрендә Гоноровка ауылы янындағы һуғышта *«...дошманды ҡыуып барышлай уның сафындағы һуғышсыларын туҙҙырғаны һәм фельдшере, медикаменттары менән ҡуша санлетучкаһын әсир алғаны, уларҙы тылға килтереп тапшырғандан һуң да тағы ла дошманды эҙәрлекләүен дауам иткәне өсөн».*

35. **Ҡаһарманов Касторанза** – 27-се кавалерия полкының взвод командиры. Киев хәрби округы РВС-ның 2163-сө фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. РВСР-ҙың 34-се фарманы менән 1922 йылда раҫланған. 2163-сө фарманда былай тиелә: 1920 йылдың 21 ноябрендә Гоноровка ауылы янындағы һуғышта *«...беҙҙең эскадронды аттарынан төшөп, уйһыулыҡҡа сүгергә мәжбүр иткән көслө пулемет уты аҫтында үҙенең пулеметын шул уйһыулыҡҡа алып сығып, мәргән уты менән дошман пулеметтарын тымырға мәжбүр иткәне һәм үҙебеҙҙең эскадрондарға һәләкәттән имен сығырға һәм башҡа частарға килеп ҡушылырға мөмкинлек биргәне өсөн».*

36. **Ҡаҙнабаев Заһиҙулла Мортаза улы** – 27-се кавалерия полкының 4-се эскадронының взвод командиры. РВСР-ҙың 57-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. Фарманда былай тиелә: *«1920 йылдың 6 июнендә Пиняево ауылы эргәһендә ул дошманға көслө флангы удары яһаны, уның башлаған контрһөжүмен кире ҡаҡты һәм төҙөк пулеметын ҡулға төшөрҙө».*

37. **Ҡатаранов Ғәметдин** – 28-се Башҡорт кавалерия полкы яугиры. Киев хәрби округы РВС-ның 443-сө фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. РВСР-ҙың 4-се фарманы менән 1922 йылда раҫланған. 443-сө фарманда былай тиелә: *«1-се эскадрон старшинаһы Белевич Денис, взвод командиры ярҙамсыһы Миңлевәлиев Әбделхалиҡ һәм кавалерист Ҡатаранов Ғәметдин иптәштәр: башҡорт кавалерия частары дошмандың ҡыҫымы аҫтында Литин ҡалаһынан сигенгән саҡта әлеге иптәштәр комбриг башлығында беренсе булып дошманға контрһөжүмгә ташландылар, сафтарында паника тыуҙырҙылар, шуның менән беҙҙең частарға ойошҡан рәүештә сигенергә мөмкинлек бирҙеләр».*

38. **Килмөхәмәтов** – бригаданың эскадрон командиры. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

39. **Коваленко** – 28-се Башҡорт кавалерия полкы командиры. Яуҙа һәләк булған. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

40. **Ҡәләмов** – 5-се (27-се) Башҡорт кавалерия полкының эскадрон командиры ярҙамсыһы.

41. **Ҡәләмов [Ваһап Ҡәләм улы]** – 5-се (27-се) Башҡорт кавалерия полкының эскадрон командиры. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

42. **Ҡәлейәнов Ҡунаҡбай** – 28-се Башҡорт кавалерия полкы яугиры. 1921 йылда Киев хәрби округы РВС-ның 285-се фарманы менән бүләкләнгән. РВСР-ҙың 380-се фарманы менән 1925 йылда раҫланған. 285-се фарманда былай тиелә: *«Ҡыҙылармеец Ғиниәтуллин Әбүбәкир һәм Ҡәлейәнов Ҡунаҡбай иптәштәр – Зарудня ауылы янындағы һуғышта үҙ ҡулдары менән дошмандың ете пулеметын алған өсөн».*

43. **Ҡоҙаҡаев Ҡыяметдин** – 27-се Башҡорт кавалерия полкының 2-се эскадроны яугиры. Киев хәрби округы РВС-ның 2163-сө фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. РВСР-ҙың 34-се фарманы менән 1922 йылда раҫланған.

44. **Колесов Константин** – бригаданың 2-се еңел артиллерия дивизионының пулемет начальнигы. РВСР-ҙың 57-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән.

45. **Кудрявцев Алексей Геннадиевич** – 28-се Башҡорт кавалерия полкының 2-се эскадроны командиры. Киев хәрби округы РВС-ның 443-сө фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. РВСР-ҙың 4-се фарманы менән 1922 йылда раҫланған. 443-сө фарманда былай тиелә: *«2-се эскадрон командиры Кудрявцев Алексей, атлы-пулемет взводы ко-*

мандиры Кучаев Лоҡман һәм 2-се эскадрон старшинаһы Мәхмүтов Йыһанша иптәштәр – түбәндәге батырлыҡтары өсөн:

1920 йылдың 12 ноябрендә 1-се Башҡорт кавалерия полкы частары дошманды Кулыга ауылынан ҡыуып сығарған һәм эҙәрлекләгән саҡта үрҙә телгә алынған иптәштәр, алдынғы разведкала булып һәм дошман менән беренсе булып осрашып, көтөлмәгән һөжүме менән улар сафында паника тыуҙырҙы һәм дошман пехотаһы менән кавалерияһын туҙрап таралырға, ә батареяһын беҙҙең сафтарға атыуҙан туҡтап, позицияһын ҡалдырырға мәжбүр итте.

Шул уҡ йылдың 13 ноябрендә, дошмандың күп тапҡыр көслөрәк кавалерияһы 1-се Башҡорт кавалерия полкын, Литиндан ҡыҫырыҡлап сығарып, тәртипһеҙ сигенергә мәжбүр иткәс, әлеге иптәштәр, үҙҙәре артынан ҡыҙылармеецтарҙы әйҙәп, бер нисә тапҡыр дошманға контрһөжүмгә ташландылар, шуның менән дошман сафтарында ҡаушау тыуҙырып, сигенеп барыусы полкка хәл алырға һәм йыйынып, тәртипле рәүештә сигенергә мөмкинлек бирҙе. Алыштарҙың беренһендә Кудрявцев иптәш атынан яҙып һәм револьверынан бөтә патрондарын атып бөтөп, дошмандың ҡылыстары аҫтында ҡаһармандарса һәләк булды».

46. **Кузнев Л.** – бригаданың пулемет командаһы начальнигы. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

47. **Кулаков Л.** – бригаданың яугиры. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

48. **Кучаев Лоҡман** – 28-се Башҡорт кавалерия полкының атлы-пулемет взводы командиры. Киев хәрби округы РВС-ның 443-сө фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. РВСР-ҙың 4-се фарманы менән 1922 йылда раҫланған. 443-сө фарманда былай тиелә: *«2-се эскадрон командиры Кудрявцев Алексей, атлы-пулемет взводы командиры Кучаев Лоҡман һәм 2-се эскадрон старшинаһы Мәхмүтов Йыһанша иптәштәр – түбәндәге батырлыҡтары өсөн:*

1920 йылдың 12 ноябрендә 1-се Башҡорт кавалерия полкы частары дошманды Кулыга ауылынан ҡыуып сығарған һәм эҙәрлекләгән саҡта үрҙә телгә алынған иптәштәр алдынғы разведкала булып һәм дошман менән беренсе булып осрашып, көтөлмәгән һөжүме менән улар сафында паника тыуҙырҙы һәм дошман пехотаһы менән кавалерияһын туҙрап таралырға, ә батареяһын беҙҙең сафтарға атыуҙан туҡтап, позицияһын ҡалдырырға мәжбүр итте.

Шул уҡ йылдың 13 ноябрендә, дошмандың күп тапҡыр көслөрәк кавалерияһы 1-се Башҡорт кавалерия полкын Литиндан ҡыҫырыҡлап сығарып, тәртипһеҙ сигенергә мәжбүр иткәс, әлеге иптәштәр, үҙҙәре артынан ҡыҙылармеецтарҙы әйҙәп, бер нисә тапҡыр дошманға контрһөжүмгә ташландылар, шуның менән дошман сафта-

рында ҡаушау тыуҙырып, сигенеп барыусы полкка хәл алырға һәм йыйынып, тәртипле рәүештә сигенергә мөмкинлек бирҙе.

Шул уҡ айҙа, беҙҙең полк сигенеп китеп барыусы Петлюра һәм Савинков бандаларын эҙәрлекләгәндә, Кучаев иптәш эҙәрлекләүселәрҙең алдында барып, дошман пулеметын дөмөктөрҙө һәм уның ылауында паника тыуҙырҙы, һөҙөмтәлә ылауҙың ҙур өлөшө беҙҙең ҡулға күсте.

Дошман атлылары контрһөжүмгә күсергә иткәс, һөжүм Кучаев иптәш килтереп еткерелгән пулемет уты менән баҫтырылды».

49. **Львов П.** – бригаданың политругы. Яуҙа һәләк булған. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

50. **Макаров М.** – бригаданың эскадрон командиры. Яуҙа һәләк булған. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

51. **Малиновский Иван Павлович** – Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмөнөң 3-сө Башҡорт кавалерия полкы командиры. РВСР-ҙың 147-се фарманы менән 1920 йылда бүләкләнгән.

52. **Миңлевәлиев Әбделхалиҡ** – 28-се Башҡорт кавалерия полкы командиры ярҙамсыһы. Киев хәрби округы РВС-ның 443-сө фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. РВСР-ҙың 4-се фарманы менән 1922 йылда раҫланған. 443-сө фарманда былай тиелә: *«1-се эскадрон старшинаһы Белевич Денис, взвод командиры ярҙамсыһы Миңлевәлиев Әбделхалиҡ һәм кавалерист Ҡатаранов Ғәметдин иптәштәр: башҡорт кавалерия частары дошмандың ҡыҫымы аҫтында Литин ҡалаһынан сигенгән саҡта әлеге иптәштәр комбриг башлығында беренсе булып дошманға контрһөжүмгә ташландылар, уны бәреп, сафтарында паника тыуҙырҙылар, шуның менән беҙҙең частарға ойошҡан рәүештә сигенергә мөмкинлек бирҙеләр».*

53. **Миронов Алексей** – бригаданың 2-се еңел артиллерия дивизионы орудиеһы командиры. РВСР-ҙың 57-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән.

54. **Мортазин Дауыт Лут улы** – бригаданың эскадрон командиры. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

55. **Мортазин Ибраһим Ғаззали улы** – 28-се Башҡорт кавалерия полкы командиры. Яуҙа һәләк булған. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

56. **Мортазин Муса Лут улы** – бригаданың командиры. РВСР-ҙың 524-се фарманы менән 1920 йылда һәм 353-сө фарманы менән 1921 йылда **ике тапҡыр бүләкләнгән.**

57. **Мортазин Һарун Фәүәрис улы** – бригаданың взвод командиры. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-зың фарманы билдәһез.

58. **Мортазин Әхмәзей Фәүәрис улы** – 5-се (27-се) Башҡорт кавалерия полкының хужалыҡ командаһы начальнигы. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-зың фарманы билдәһез.

59. **Мөхтәров Шәрәфетдин** – 27-се Башҡорт кавалерия полкының 1-се эскадроны яугиры. РВСР-зың 34-се фарманы менән 1922 йылда бүләкләнгән.

60. **Мостафин Сәфәр** – 28-се Башҡорт кавалерия полкының яугиры. 1921 йылда Киев хәрби округы РВС-ның 285-се фарманы менән бүләкләнгән. РВСР-зың 380-се фарманы менән 1925 йылда раҫланған. 285-се фарманда былай тиелә: *«Ҡызылармеец Мостафин Сәфәр иптәш – уҙған йылдың 5 июнендә Пилявы ауылы янында һуғышта дошмандың ике орудиеһын һәм ике пулеметын алыуҙа күрһәткән шәхси ҡаһарманлығы өсөн».*

61. **Мурсалов Х.** – бригаданың эскадрон комиссары. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-зың фарманы билдәһез.

62. **Мәхмүтов Йыһанша** – 28-се Башҡорт кавалерия полкының 2-се эскадроны старшинаһы. Киев хәрби округы РВС-ның 443-сө фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. РВСР-зың 4-се фарманы менән 1922 йылда раҫланған. 443-сө фарманда былай тиелә: *«2-се эскадрон командиры Кудрявцев Алексей, атлы-пулемет взводы командиры Кучаев Лоҡман һәм 2-се эскадрон старшинаһы Мәхмүтов Йыһанша иптәштәр – түбәндәге батырлыҡтары өсөн:*

1920 йылдың 12 ноябрендә 1-се Башҡорт кавалерия полкы частары дошманды Кулыга ауылынан ҡыуып сығарған һәм эҙәрлекләгән саҡта үрҙә телгә алынған иптәштәр алдынғы разведкала булып һәм дошман менән беренсе булып осрашып, көтөлмәгән һөжүме менән улар сафында паника тыуҙырҙы һәм дошман пехотаһы менән кавалерияһын туҙрап таралырға, ә батареяһын беҙҙең сафтарға атыуҙан туҡтап, позицияһын ҡалдырырға мәжбүр итте.

Шул уҡ йылдың 13 ноябрендә, дошмандың күп тапҡыр көслөрәк кавалерияһы 1-се Башҡорт кавалерия полкын Литиндан ҡыҫырыҡлап сығарып, тәртипһеҙ сигенергә мәжбүр иткәс, әлеге иптәштәр, үҙҙәре артынан ҡыҙылармеецтарҙы әйҙәп, бер нисә тапҡыр дошманға контрһөжүмгә ташландылар, шуның менән дошман сафтарында ҡаушау тыуҙырып, сигенеп барыусы полкка, хәл алырға һәм йыйынып, тәртипле рәүештә сигенергә мөмкинлек бирҙе».

63. **Павлов С.** – бригаданың эскадрон командиры. Яуҙа һәләк булған. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-зың фарманы билдәһез.

64. **Патенко М.** – 28-се Башҡорт кавалерия полкы командиры. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

65. **Панченко Д.** – 28-се Башҡорт кавалерия полкы командиры. Яуҙа һәләк булған. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

66. **Пискунов Леонид Григорьевич** – 28-се Башҡорт кавалерия полкының адъютанты. Киев хәрби округы РВС-ның 443-сө фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. РВСР-ҙың 4-се фарманы менән 1922 йылда раҫланған. 443-сө фарманда былай тиелә: *«Полк адъютанты Пискунов Леонид иптәш: уҙған йылдың 21 ноябрендә Клиницы янындағы һуғышта ғәйәт көслө пулемет уты аҫтында беренсе булып дошманға ташланды һәм уның атыусы пулеметын туҡтарға мәжбүр итте; уның артынан башҡа иптәштәре лә һөжүмгә ынтылып, дошмандың ышыҡлағыс ылауын, кавалерияһын туҙҙырҙы һәм орудиеларын, пулеметтарын, ылауҙарын ҡулға төшөрҙө; шул ыңғайҙа Пискунов иптәш үҙ ҡулы менән дошмандың винтовка һәм пулеметтар тейәлгән йөгөн баҫып алды».*

67. **Рәмиев Йәғәфәр Зәкир улы** – Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы штабы комиссары. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

68. **Рыҫҡолов (Шәйхисламов) Ғәббәс Шәйхелислам улы** – 27-се кавалерия полкының 1-се эскадроны командиры. РВСР-ҙың 57-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. Фарманда былай тиелә: *«1-се эскадрон командиры Шәйхисламов Ғәббәскә: 1920 йылдың 1 июнендә ул Днепр аша кисеп сыҡҡан 27-се кавполктың 1-се эскадронына поляктар һөжүмгә башлағанда, һыбайлылар сафында дошманға ташланып, үҙ артынан бөтә эскадронды әйҙәне, ғәйәр һыбай һөжүм менән ҡаршы поляктарҙың атып ятҡан бер пулеметын тартып алып, дошманды ҡасырға мәжбүр итте».*

69. **Садыҡов Х.** – Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы начальнигы адъютанты.

70. **Смирнов Павел** – бригаданың 2-се еңел артиллерия дивизионының 2-се батареяһы командиры. РВСР-ҙың 57-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән.

71. **Солтанов Ибраһим** – бригаданың эскадрон командиры. Яуҙа һәләк булған. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

72. **Солтанов Әхмәт** – 28-се Башҡорт кавалерия полкының старшинаһы. 1921 йылда Киев хәрби округы РВС-ның 285-се фарманы менән бүләкләнгән. РВСР-ҙың 380-се фарманы менән 1925 йылда раҫланған. 285-се фарманда былай тиелә: *«...старшина Солтанов Әхмәт һәм*

ҡыҙылармееҫ Дауытов Мозафар иптәштәр – уҙған йылдың 27 июнендә Зубковичи ауылы янындағы һуғышта яраланған полк командиры ярҙамсыһы Тихомиров иптәште ут аҫтынан алып сыҡҡаны өсөн».

73. **Соров Алексей Алексеевич** – 28-се Башҡорт кавалерия полкының хәрби комиссары. РВСР-ҙың 48-се фарманы менән 1922 йылда бүләкләнгән.

74. **Суфиянов Әбдрәхим** – бригаданың эскадрон командиры. Яуҙа һәләк булған. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

75. **Сөләймәнов** – бригаданың эскадрон командиры ярҙамсыһы. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

76. **Тереғолов Ғәли Усман улы** – 1-се Башҡорт кавалерия полкы комиссары, артабан бригада штабының комиссары. РВСР-ҙың 94-се фарманы менән 1923 йылда бүләкләнгән.

77. **Тихомиров Василий** – 1-се Башҡорт кавалерия полкы командирының ярҙамсыһы. РВСР-ҙың 57-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. Фарманда былай тиелә: *«Полк командиры ярҙамсыһы Тихомиров Василий иптәшкә: Фрузиновка һәм Пенязевичи ауылдары янындағы һуғыштарҙа ул беренсе булып дошман өҫтөнә һөжүмгә ташланды, үҙ артынан эскадронды әйҙәп, дошман һалдаттарын ҡоралдары менән ҡуша әсир төшөрҙө, шуның менән әлеге ауылдарҙың беҙҙең тарафтан тиҙерәк алыныуына булышлыҡ итте».*

78. **Төхвәтуллин Ғөзәйер** – Петроград фронтының Йыйылма Башҡорт уҡсы полкы яугиры.

79. **Фәхретдинов Зариф** – 1-се Башҡорт кавалерия полкының взвод командиры. Киев хәрби округы РВС-ның 443-сө фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. РВСР-ҙың 4-се фарманы менән 1922 йылда раҫланған. 443-сө фарманда былай тиелә: *«...взвод командиры Фәхретдинов Зариф иптәш дошмандың өҫтөн көстәре ҡыҫымында полктары Литин ҡалаһынан сигенгән саҡта ул, күп тапҡыр контрһөжүмгә ташланып, үҙенең ҡыйыулығы өлгөһөндә артынан взводын әйҙәне, шуның менән сигенеүҙе ойошҡан рәүештә башҡарырға булышлыҡ итте».*

80. **Фәйезов Йәләлетдин** – 27-се Башҡорт кавалерия полкының 1-се эскадроны яугиры. Киев хәрби округы РВС-ның 2163-сө фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. РВСР-ҙың 4-се фарманы менән 1922 йылда раҫланған. 2163-сө фарманда былай тиелә: *«1-се эскадрон ҡыҙылармееҫы Фәизов Йәләлетдин иптәш – Клининцы һәм Гоноровка ауылдары янындағы һуғышта ул дошмандың ғәрәсәтле пулемет*

уты аҫтында шул пулеметҡа ташланып, уны тартып алып, шунда уҡ дошман атлылары яғына борҙо һәм көслө пулемет уты менән уларҙы сигенергә мәжбүр итте; шул саҡ дошман үҙенең өс орудиеһын һаҙға батырып ҡасты – бына шуның өсөн».

81. **Фәйзуллин Хисаметдин Шәриф улы** – 27-се, аҙаҡ 2-се Башҡорт кавалерия полкының командиры. РВСР-ҙың 19-сы фарманы менән 1922 йылда бүләкләнгән.

82. **Фәхрәзетдинов Фәхрислам** – 28-се Башҡорт кавалерия полкының взвод командиры. 1921 йылда Киев хәрби округы РВС-ның 285-се фарманы менән бүләкләнгән. РВСР-ҙың 380-се фарманы менән 1925 йылда раҫланған. 285-се фарманда былай тиелә: *«...взвод командиры Фәхрәзетдинов Фәхрислам иптәш – Лезни ауылы янындағы һуғышта дошман һағына беренсе булып һөжүмгә ташланып, үҙ артынан бөтә ҡыҙылармеецтарҙы әйҙәгәне өсөн, шул арҡала әлеге ауылды алыуға булышлыҡ иткәне өсөн».*

83. **Фәттәхетдинов Хәлфетдин** – 27-се Башҡорт кавалерия полкының 1-се эскадроны взводы командиры. РВСР-ҙың 57-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. Фарманда былай тиелә: *«1-се эскадрон командирының ярҙамсыһы Фәттәхетдинов иптәшкә – 1920 йылдың 6 июнендә Пиняево ауылы эргәһендә өс ҡыҙылармеец менән 25 полякты, 2 автоматик винтовка һәм запас частарҙы ҡулға төшөргәне өсөн».* Ф. Хәлфетдинов РВСР-ҙың 34-се фарманы менән 1922 йылда икенсе тапҡыр бүләкләнгән.

84. **Фетисов Трофим Алексеевич** – 27-се Башҡорт кавалерия полкының 2-се эскадроны командиры. РВСР-ҙың 34-се фарманы менән 1922 йылда бүләкләнгән.

85. **Хаҡбирҙин Ғиззәтулла** – бригада штабы коменданты. РВСР-ҙың 57-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. Фронттан ҡайтып килгәндә Тамъян-Ҡатай кантонында үлтерелгән. Фарманда былай тиелә: *«1920 йылдың 13 июнендә Зарудье ауылы янындағы һуғышта ул комендант командаһы башында һуғыштың уңышын хәл иткән көслө флангы удары яһаны. Хаҡбирҙин иптәш бер үҙе бер нисә полякты тураҡлап, уларҙың төҙөк «Максим» пулеметын, дүрт атын һәм ылауҙарын тартып алды».*

86. **Шәрипов Рамаҙан Шәриф улы** – 1-се Башҡорт кавалерия полкы командиры. РВСР-ҙың 57-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. Фарманда былай тиелә: *«1-се полк командиры Шәрипов Рамаҙан иптәшкә – 1920 йылдың июнендә Богданы һәм Пенязевичи ауылдары янындағы һуғыштарҙа полк хәрәкәттәре менән ҡыйыу һәм оҫта етәкселек иткәне өсөн. Һөҙөмтәлә беҙҙең тарафтан әлеге*

ауылдар алынып, дошмандың әсирҙәре, пулеметтары, патронлы йәшниктәре һәм арбалары, аттары, ылауҙары ҡулға төштө».

87. **Шәйәхмәтов Усман** – 27-се Башҡорт кавалерия полкының 4-се эскадроны старшинаһы. РВСР-ҙың 34-се фарманы менән 1922 йылда бүләкләнгән.

88. **Эрадзе Л. С.** – 27-се Башҡорт кавалерия полкы командиры. Яуҙа һәләк булған. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

89. **Әбдрәхимов** – 28-се Башҡорт кавалерия полкы командиры ярҙамсыһы. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

90. **Әлишев Хәлил Фәйзрахман улы** – Петроград фронтының Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмө начальнигы. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

91. **Әхмәнабаев С.** – бригада яугиры. Яуҙа һәләк булған. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

92. **Әхтәмов** – бригаданың эскадрон командиры. Бүләкләнеү ваҡыты һәм РВСР-ҙың фарманы билдәһеҙ.

93. **Әшрәпов Шәкир Әшрәф улы** – бригада комиссары, артабан 1-се Башҡорт кавалерия полкының командиры. РВСР-ҙың 57-се фарманы менән 1921 йылда бүләкләнгән. Фарманда былай тиелә: *«Бригаданың әүәлге комиссар ярҙамсыһы, хәҙер 1-се Башҡорт кавалерия полкының командиры Әшрәпов Шәкир иптәшкә – ярым эскадрон башында дошман ҡулындағы Тетерев станцияһына яһаған сая сапҡыны өсөн. Был сапҡын ваҡытында, килеп еткән дошман поезының көслө пулемет һәм мылтыҡ утына ла ҡарамаҫтан, Тетерев йылғаһындағы тимер юл күпере һәм тимер юл полотноһы ҡыйратылды».*

89. **Яҡшыгилдин Шәмсетдин Ғәләүетдин улы** – 27-се Башҡорт кавалерия полкының 3-сө эскадронында взвод командиры. РВСР-ҙың 34-се фарманы менән 1922 йылда бүләкләнгән.

Ҡушымта

БАШҠОРТ АРМИЯҺЫ ТАРИХЫ ВАҠИҒАЛАР ХРОНОЛОГИЯҺЫ (1918 – 1922 йылдар)

1917 йыл

8–21 декабрь – Дөйөм Башҡорт ойоштороу ҡоролтайында Башҡортостан автономияһының хәрби көстәрен булдырыу тураһында ҡарар ҡабул ителә. Милли ғәскәрҙе мосолман частарындағы башҡорт һалдаттарынан ойоштороу ҡарала.

1918 йыл

Ғинуар – ҡоролтай ҡарарына ярашлы бер төркөм башҡорт офицерҙары (Ә. Ҡарамышев, Ғ. Иҙелбаев, Ғ. Мағазов һ. б.) башҡорт ғәскәрен ойоштороу маҡсатында Бөрйән олоҫона юллана. Баймаҡта 400 кешенән торған тәүге башҡорт отряды төҙөлә.
16 февраль – Ырымбурҙа Башҡорт хөкүмәте ағзалары большевиктар тарафынан төрмәгә ябыла.
22 февраль – Баймаҡта большевиктар тарафынан башҡорт офицерҙары Ғабдулла Иҙелбаев менән Ғимран Мағазовтар атыла, отряд таратыла.
Март-апрель – Бөрйән-Түңгәүер, Тамъян-Ҡатай кантондарында башҡорт партизан отрядтары ойошторола.
4 апрель – Әмир Ҡарамышевтың партизан отряды казактар менән берлектә Ырымбурға һөжүм итә һәм Башҡорт хөкүмәте ағзаларын төрмәнән ҡотҡара.
Май аҙағы – Силәбелә Чехословак корпусы большевиктарға ҡаршы баш күтәрә һәм власты үҙ ҡулына ала. Чехословактар ярҙамында Башҡорт милли хәрәкәте етәкселәре Башҡорт хөкүмәтенең эшмәкәрлеген яңынан йәйелдереп ебәрә.

Июнь

1 июнь – Башҡорт хөкүмәте башҡорт халҡына мөрәжәғәт сығара. Унда большевиктарға ҡаршы һуғыш өсөн Башҡорт армияһы ойоштороласағы тураһында хәбәр ителә.

12 июнь – Силәбе ҡалаһында Башҡорт хөкүмәтенең Хәрби бүлеге янында Башҡорт хәрби шураһы (ул Башҡорт ғәскәренең штабы тип тә атала) ойошторола.

13 июнь – 217-се фарман менән Арғаяш кантонында 1915–1918 йылдарҙа хеҙмәткә алынырға тейешле башҡорттарға мобилизация иғлан ителә.

14 июнь – Башҡорт хәрби шураһының 218-се фарманы менән 1-се Башҡорт пехота полкында милли символика һәм айырыу билдәләре индерелә.

14 июнь – 1-се Башҡорт пехота полкының бер батальоны (416 штык) ҡыҙылдарға ҡаршы һуғышҡа оҙатыла.

18 июнь – Башҡорт хәрби шураһы ҡыҫҡаса мобилизацион план ҡабул итә. Уның буйынса ете пехота, ике кавалерия полкы һәм бер артиллерия бригадаһынан торған Башҡорт корпусын ойоштороу ҡарала.

Июнь аҙағы – Тамъян-Ҡатай кантонында 1-се Башҡорт кавалерия полкы ойошторола. Уның нигеҙен Әмир Ҡарамышев 1918 йылдың башында уҡ туплаған партизан отряды тәшкил итә.

Июль

Июль айы – Златоуста 3-сө Башҡорт пехота полкы ойошторола. Уның командиры итеп подполковник Тереғолов ҡуйыла.

1 июль – большевик бандалары менән көрәшеү өсөн кантондарҙа ирекле башҡорт отрядтары ойоштора башлау тураһында Башҡорт хәрби шураһының 245-се фарманы сыға.

10 июль – Башҡорт хөкүмәтенең Ваҡытлы Себер хөкүмәте менән килешеүе нигеҙендә Башҡорт ғәскәре Аҡ армияның айырым ғәскәри берәмеге итеп танылa һәм уны ойоштороуҙа Себер хөкүмәте ҡорал, аҡса менән ярҙам итергә вәғәҙә итә.

10 июль – 288-се менән Ырымбур хәрби округы ғәскәрҙәренең командованиеһы һәм Башҡорт хөкүмәтенең Хәрби бүлеге башҡорт халҡына дөйөм мобилизация иғлан итә.

18 июль – Ырымбур ҡалаһында Ырымбур өйәҙе башҡорттарынан 4-се Башҡорт пехота полкы ойошторола башлай.

Июлдең 20-ләре – 1-се Башҡорт кавалерия полкы командиры Әмир Ҡарамышев Верхнеуральск фронтындағы башҡорт көстәренең командующийы итеп тәғәйенләнә.

20 июль – Ырымбур, Орск һәм Быҙаулыҡ өйәҙе башҡорттары 4-се Башҡорт пехота полкына мобилизациялана башлай.

24 июль – поручик Ғәбделхаҡ Ғәбитов 2-се Башҡорт пехота полкының командиры итеп тәғәйенләнә.

Июль аҙағы – 2-се Башҡорт пехота полкының батальоны Екатеринбург ҡалаһын ҡыҙылдарҙан азат итеүҙә ҡатнаша.

Август

Август башы – 5-се Башҡорт пехота полкы ойошторола башлай.

7 август – Миәс ҡалаһының госпиталендә 1-се Башҡорт кавалерия полкының командиры Әмир Ҡарамышев вафат була.
7 август – Екатеринбург ҡалаһын азат итеүҙә ҙур батырлыҡтар күрһәткән 2-се Башҡорт пехота полкына ҡала халҡы исеменән байраҡ бүләк ителә.
12 август – Әмир Ҡарамышевты Ырымбурға алып килеп, Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәре һуңғы юлға оҙаталар.
13 август – Башҡорт армияһы өсөн уртаҡ хәрби форма эшләү буйынса Башҡорт хәрби шураһының комиссияһы төҙөлә.
13 август – Башҡорт полктары 1-се һәм 2-се Башҡорт пехота дивизияларына берләштерелә. 1-се дивизияны – 2-се, 3-сө һәм 5-се Башҡорт пехота полктары, ә 2-се дивизияны – 1-се һәм 4-се Башҡорт пехота полктары тәшкил итә.
14 август – 3-сө Башҡорт пехота полкының командиры подполковник Тереғолов ваҡытлыса 1-се Башҡорт дивизияһының командиры итеп тәғәйенләнә.
15 август – прапорщик Ғәлимйән Таған 3-сө Башҡорт пехота полкының ваҡытлы командиры итеп тәғәйенләнә;
– подпоручик Әүхәҙи Ишмырҙин Юрматы ирекле отряды начальнигы итеп тәғәйенләнә.
16 август – Сәйетгәрәй Мағазов Силәбе, Верхнеуральск һәм Златоуст өйәҙҙәрендә башҡорт хәрби көстәрен ойоштороу буйынса Башҡорт хәрби шураһының особоуполномоченныйы итеп тәғәйенләнә.
17 август – Башҡорт хәрби шураһының 337-се фарманы менән 1900–1918 йылғы саҡырылыш башҡорт унтер-офицерҙарына мобилизация иғлан ителә.
18 август – офицерҙар Тереғолов, Ҡарамышев һәм Муһлиәнең инициативаһы менән Башҡортостан автономияһы өсөн һәләк булған, яраланған һалдаттарҙың ғаиләләренә ярҙам йөҙөнән иғанә йыйыу маҡсатында Каруанһарай баҡсаһында байрам ойоштороло. Өмә яһап, Каруанһарай баҡсаһы тәртипкә килтерелә.
27 август – прапорщик Дәүләтшин урынына Туҡ-Соран ирекле отряды начальнигы итеп подпоручик Хәлил Әлишев тәғәйенләнә.
28 август – Башҡорт хәрби шураһы 29-сы фарман менән Башҡорт армияһының яңы хәрби формаһын индерә.
30 август – Харис Туймаҡаев урынына 1-се Башҡорт пехота полкының командиры итеп подполковник Якубовский тәғәйенләнә.

Сентябрь

Сентябрь – 3-сө Башҡорт пехота полкы Һамар фронтына ебәрелә. Аҡтарҙың сигенеүен тәьмин итеп, бер туҡтауһыҙ ҡанлы һуғыштар алып бара.
6 сентябрь – Айырым Башҡорт корпусы ойоштороло. Уның составына 1-се һәм 2-се Башҡорт пехота дивизиялары һәм 1-се Башҡорт кавалерия полкы инә;

— генерал-майор Хажиәхмәт Ишбулатов Айырым башҡорт корпусы командиры итеп тәғәйенләнә.

9 сентябрь — 1-се Башҡорт пехота дивизияһының командиры итеп подполковник Шаһихәйҙәр Аҡсулпанов, 2-се Башҡорт пехота дивизияһыныҡы итеп подполковник Солтангәрәй Бикмәевте тәғәйенләү тураһында фарман сыға.

10 сентябрь — прапорщик Мөхтәр Ҡарамышев вафат булған ағаһы урынына 1-се Башҡорт кавалерия полкы командиры итеп тәғәйенләнә.

14 сентябрь — Башҡорт хөкүмәтенең комендант ротаһы командиры итеп подпоручик Тәхиулла Әлиев тәғәйенләнә;

— 4-се Башҡорт полкының 1-се батальоны Ырымбурҙан Орск фронтына юллана.

Сентябрҙың икенсе яртыһы — Ырымбур ҡалаһында Башҡорт прапорщиктар мәктәбе ойошторола. Мәктәпкә 71 курсант алына.

17 сентябрь — Айырым Башҡорт корпусының ойоштороолоуын Комуч (Һамар хөкүмәте) раҫлай. Башҡорт корпусына 1 мең мылтыҡ, 10 пулемет ебәрә.

23 сентябрь — Өфөлә Дәүләт Йыйылышы барған осорҙа 3-сө Башҡорт пехота полкының 1-се батальоны һалдаттары ҡарауыл хеҙмәтен үтәй.

28 сентябрь — 4-се Башҡорт пехота полкының 1-се батальоны Орск ҡалаһын алыуҙа ҡатнаша. Беренсе булып ҡалаға бәреп инә.

— Башҡорт хәрби шураһының фарманы менән Башҡорт армияһындағы чиновниктар һәм табиптарҙың форма проектын эшләү буйынса комиссия булдырыла.

Октябрь

Октябрь башы — 5-се Башҡорт пехота полкы Верхнеуральск өйәҙенән Ырымбурға күсерелә;

— Ырымбур өйәҙе башҡорттарынан 7-се Башҡорт пехота полкы ойошторола башлай.

1 октябрь — 2-се Башҡорт пехота полкы Силәбе ҡалаһынан Ырымбурға күсерелә.

2 октябрь — полковник Янышевский Башҡорт хәрби шураһының мобилизация бүлеге мөдире вазифаһын үтәүсе итеп тәғәйенләнә;

— подпоручик Әүхәҙи Ишмырҙин 6-сы Башҡорт пехота полкы командиры итеп тәғәйенләнә;

— подпоручик Шаһибәк Үзбәков Табын иреклe отряды начальнигы итеп тәғәйенләнә;

— подпоручик Сөләймән Ишмырҙин Юрматы иреклe отряды начальнигы итеп тәғәйенләнә;

— Башҡорт хәрби шураһының Иреклe отрядтар бүлеге янында 60 кешенән торған махсус команда булдырыла.

3 октябрь — Башҡорт хәрби шураһы янында Хәрби-уҡыу бүлеге асыла.

7 октябрь – Алты кантондағы ирекле башҡорт отрядтарынан 2-се Башҡорт ирекле кавалерия полкы ойошторола. Командиры итеп Әхмәҙулла Бейешев тәғәйенләнә.
14 октябрь – Башҡорт ғәскәри идаралығы (Башкирское Войсковое Управление) ойошторола, Башҡорт хәрби шураһының бөтөн эше ошо идаралыҡҡа тапшырыла (начальнигы Әхмәтзәки Вәлиди). Идаралыҡтың башлығы нойон тип атала. Ә Башҡорт хәрби шураһы кәңәшмә орган булараҡ ҡалдырыла.
16 октябрь – Аҡ армияның Юғары командованиеһы штабы начальнигы башҡорт ғәскәрҙәренә мобилизация туҡтатыу, уларҙы Дутовҡа буйһондороу, Башҡорт хәрби шураһы һәм Башҡорт корпусы финанслауҙы туҡтатыу тураһында фарман сығара.

Ноябрь

Ноябрь – Аҡ командование башҡорт ғәскәрҙәрен тәьмин итеүҙе сикләү сәбәпле, 7-се Башҡорт пехота полкы ойоштороу эше туҡтатыла.
8 ноябрь – 2-се Башҡорт пехота полкының муллаһы Нуриәғзәм Таһиров 1-се Башҡорт пехота дивизияһының муллаһы итеп тәғәйенләнә. 5-се Башҡорт пехота полкының муллаһы Бәхтиәров 1-се Башҡорт кавалерия полкына күсерелә.
10 ноябрь – Аҡ командованиеның ҡыҫымы аҫтында Зәки Вәлиди Башҡорт корпусын бөтөрөү, уның урынына 1-се Башҡорт дивизияһын ойоштороу тураһында фарман сығарырға мәжбүр була.
21 ноябрь – Башҡорт хөкүмәте Совет власы менән һөйләшеүҙәр башларға ҡарар итә.
Ноябрҙең аҙағы – 2-се, 4-се, 5-се Башҡорт пехота полктары һәм 2-се Башҡорт кавалерия полкы Аҡтүбә фронтында һуғыша.

Декабрь

Декабрь айы – Башҡорт ғәскәрҙәре Стәрлетамаҡ менән Ырымбур араһында ҡыҙылдарға ҡаршы һуғыш алып бара.
2 декабрь – Башҡорт хөкүмәте Комуч, Алаш Урҙа (Ҡаҙағстан) һәм ҡайһы бер казак етәкселәре менән Дутовты властан алып ташларға ниәт итә. Түңкәрелеште Ырымбурҙа торған башҡорт полктары атҡарырға тейеш була. Әммә татар офицеры Ғәлиев уларҙың бөтә планын Дутовҡа һата. Ошо сәбәпле түңкәрелеш килеп сыҡмай.
– Башҡорт хөкүмәте һәм полктары Ырымбурҙан китергә мәжбүр була.
29 декабрь – Зәки Вәлиди фарманы менән Стәрлетамаҡ районында урынлашҡан 1-се Башҡорт кавалерия полкы менән ирекле башҡорт отрядтар «Стәрлетамаҡ фронтының башҡорт көстәре» төркөмөнә берләштерелә. Уның командующийы итеп 1-се кавалерия полкы командиры ротмистр Мөхтәр Ҡарамышев тәғәйенләнә.

1919 йыл

Ғинуар

Ғинуар – Башҡорт хөкүмәте вәкилдәре Өфөлә большевиктар менән бәйләнешкә инә.

10 ғинуар – Мөхтәр Ҡарамышев Башҡорт ғәскәренең Баш интенданты итеп тәғәйенләнә;

– Муса Мортазин 1-се Башҡорт кавалерия полкының командиры итеп тәғәйенләнә.

17 ғинуар – Нуҡай ауылы эргәһендә башҡорт ғәскәрҙәре тарафынан ҡыҙылдарҙың 24-се дивизияһының 1-се Көнсығыш кавалерия полкы ҡыйратыла.

23 ғинуар – Башҡорт ғәскәри идаралығы начальнигы Зәки Вәлидиҙең фарманы менән Нуҡай ауылы янында һуғышта батырлыҡ күрһәткән 12 офицер яңы званиеға үрләтелә.

24 ғинуар – Зәки Вәлиди ваҡытлыса Башҡорт ғәскәрҙәре командующийы вазифаһына күсеүе тураһында фарман сығара;

– штаб-ротмистр Әүхәҙи Ишмырҙин 1-се Башҡорт дивизияһы начальнигы вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләнә;

– дивизия начальнигы генерал-майор Савич-Заболоцкий ваҡытлыса Башҡорт ғәскәрҙәре командующийы ярҙамсыһы итеп тәғәйенләнә;

– 5-се Башҡорт уҡсы полкының элекке командиры штабс-капитан Ҡазыхан Низаметдинов артиллерия ғәскәрҙәре инспекторы вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләнә;

– Башҡорт ғәскәри идаралығы начальнигы урынбаҫары подполковник Солтангәрәй Бикмәев Башҡорт ғәскәрҙәренең дежур штаб-офицеры итеп тәғәйенләнә;

– 4-се Башҡорт уҡсы полкының ваҡытлыса командиры итеп штаб-капитан Громаковский тәғәйенләнә;

– 5-се Башҡорт уҡсы полкы командиры ярҙамсыһы подполковник Цветков ошо полктың ваҡытлыса командиры итеп тәғәйенләнә;

– Стәрлетамаҡ фронты ғәскәрҙәре төркөмө командующийы поручик Ильяс Алкин Башҡорт ғәскәрҙәре штабының ваҡытлыса обер-квартирмейстеры итеп тәғәйенләнә.

26 ғинуар – Зәки Вәлидиҙең фарманы менән Башҡорт корпусы яңынан тергеҙелә.

Февраль

3 февраль – Ишбирҙе ауылы янында 2-се Башҡорт пехота полкы ҡыҙылдар менән 7 сәғәт буйына ҡаты һуғыша.

7 февраль – Идара итеү йәһәтенән уңайлы булһын өсөн Башҡорт ғәскәри идаралығы начальнигы фарманы менән башҡорт ғәскәрҙәре ике дивизияға туплана. 1-се дивизияға 1-се, 2-се, 4-се Башҡорт пехота

полктары һәм Әмир Ҡарамышев исемендәге 1-се Башҡорт кавалерия полкы инә. 2-се дивизияға 5-се, 6-сы Башҡорт пехота полктары, Ғабдулла Иҙелбаев исемендәге 2-се Башҡорт кавалерия полкы һәм Өфө фронтындағы 3-сө Башҡорт пехота полкы инә.

8 февраль – Башҡорт хөкүмәте большевиктар менән килешеү төҙөргә һәм Ҡыҙыл Армия менән һуғышты туҡтатырға ҡарар итә.

16 февраль – 18 февраль 10 сәғәттә башҡорт ғәскәрҙәренең Советтар яғына сығасағы тураһында фарман ҡабул ителә.

18 февраль – Башҡорт ғәскәрҙәре ҡыҙылдар яғына сыға башлай. Ике көн эсендә бөтә полктар сығып бөтә.

21 февраль – Темәс ауылында I Башҡорт хәрби съезы үтә. Унда Башҡортостандың Ваҡытлы Хәрби-Революцион Комитеты (Башревком) ойошторола. Башҡортостан территорияһындағы бөтөн власть Башревком ҡулына тапшырыла.

26 февраль – 4-се Башҡорт пехота полкы, 1-се, 2-се Башҡорт кавалерия полктарынан Хәлил Әлишев етәкселегендәге айырым төркөм ойошторола. Был ғәскәрҙәр Магнит һәм Ҡыҙыл ауылдары йүнәлешендә аҡтарға ҡаршы һөжүм итә.

Февраль-март – Ҡыҙылдар яғына сыҡҡан башҡорт полктары 1-се армияның тылына күсерелә, ә артабан ҡоралһыҙландырыла һәм күп өлөшө таратыла. Мортазин етәкселегендәге 1-се башҡорт кавалерия полкы ғына фронт һыҙығында ҡалдырыла.

Март

Март – Башҡорт полктарының ҡалдығынан Стәрлетамаҡта 176-сы Башҡорт полкы ойошторола башлай, артабан Тоцкиға күсерелә.

20 март – Мәскәүҙә Совет хөкүмәте менән Башҡорт хөкүмәте араһында Автономиялы Башҡорт Совет Республикаһын ойоштороу тураһында килешеү төҙөлә. Килешеүҙә бер кавалерия дивизияһы һәм бер уҡсы бригаданан торған Айырым Башҡорт Ҡыҙыл армияһын төҙөү ҡарала.

23 март – Муса Мортазиндың 1-се Башҡорт кавалерия полкы башҡорттарҙы йәберләгән ҡыҙылдарҙың Смоленск полкы һалдаттарын туҙҙырып, аҡтар яғына сығып китә.

Апрель

5 апрель – Реввоенсовет рәйесе Троцкий дүрт полктан торған бер кавалерия дивизияһы, өс полклы бер уҡсы бригадаһы, бер артиллерия дивизионы һәм гаубица батареяһынан торған Башҡорт армияһын ойоштороу тураһында бойороҡ сығара. Башҡорт армияһының командующийы итеп Башҡортостандың хәрби комиссары Зәки Вәлиди тәғәйенләнә. Армияны ойоштороу уға йөкмәтелә.

23 апрель – Элекке Башҡорт корпусына ингән полктарҙан 3 кавалерия полкы, 2 пехота полкы, 2 артиллерия дивизионы, 1 еңел артиллерия

дивизионы һәм бер атлы артиллерия дивизионы ойоштороу тураһында Башҡорт хәрби комиссариатының фарманы сыға.

29 апрель – Колчак армияһы һөжүмгә күсеү сәбәпле Башревком һәм башҡорт ғәскәрҙәре Саранск ҡалаһына эвакуациялана. Бында ике кавалерия һәм ике пехота полктарынан торған Айырым Башҡорт бригадаһы ойошторола башлай, артабан ул Башҡорт кавалерия дивизияһына әүерелә.

Май

Май – Саранск ҡалаһында 1-се, 2-се Башҡорт кавалерия полкы һәм 1-се, 2-се Башҡорт уҡсы полктары ойошторола. Полктар Айырым Башҡорт бригадаһын тәшкил итә.

19 май – Башҡорт Совет Республикаһының ВЦИК янындағы вәкиллеге Совет хөкүмәтенә Башҡорт армияһының идаралығын (штабын) ойоштороуҙы һорап мөрәжәғәт итә. Әммә Совет етәкселеге Айырым Башҡорт армияһын төҙөү планынан баш тарта.

Июнь

12 июнь – Саранскиҙағы Башҡорт бригадаһы Көньяҡ фронтҡа (Украинаға) оҙатыла. Харьков ҡалаһында гарнизон хеҙмәтенә тип ебәрелгән башҡорт полктарын, ысынында, һуғыштың уртаһына алып барып тығалар.

23 июнь – Башҡорт хәрби комиссариаты Көньяҡ фронттағы Башҡорт бригадаһын Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы итеп ойоштороу, Башҡортостандың актарҙан азат ителгән территорияһында 3-сө Башҡорт кавалерия полкы менән 3-сө Башҡорт уҡсы полктарын ойоштора башлау тураһында фарман бирә.

25 июнь – Зәки Вәлиди Көньяҡ фронтҡа башҡорт полктары янына китә. Ул фронтта Башҡорт кавалерия дивизияһының штабын булдырып, дивизияның командирын (А. Ахлов) һәм хәрби комиссарын (Н. Таһиров) тәғәйенләй.

Июль

Июль – Бәләбәй ҡалаһында Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы ойошторола башлай.

2 июль – Зәки Вәлиди үҙенең фарманында Көньяҡ фронтта һуғышҡан башҡорт ғәскәрҙәренең батырлығын билдәләп үтә. Бигерәк тә 1-се Башҡорт уҡсы полкы командиры Сөләймән Ишмырҙин менән 2-се Башҡорт уҡсы полкының командиры Ибраһим Исхаҡовҡа рәхмәт белдерә.

4 июль – Бахмач станцияһында (Украина) башҡорт полктарының митингыһы үтә.

5 июль – Көньяҡ фронттағы 1-се Башҡорт уҡсы полкының командиры Сөләймән Ишмырҙин Бәләбәйҙә ойошторолоп ятҡан Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһына күсерелә.

Август

Август – Көньяҡ фронттағы Башҡорт кавалерия дивизияһы ике йыйылма (кавалерия һәм уҡсы) полкка туплана.

17 август – Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһының командиры итеп Хәсән Әхмәров тәғәйенләнә.

25 август – 1919 йылдың яҙы һәм йәйе эсендә ике полклы Башҡорт кавалерия бригадаһы кимәленә үҫеп еткән Муса Мортазиндың ғәскәре кире ҡыҙылдар яғына сыға.

Сентябрь

Сентябрь – Ҡыҙылдар яғына сыҡҡан М. Мортазиндың кавалерия бригадаһы Урал фронтына аҡтарға ҡаршы һуғышҡа оҙатыла;

– Петроградта Башҡорт кавалерия дивизияһының сәйәси бүлеге «Салауат» тип аталған гәзит сығара башлай. Ул 3 көнгә бер баҫыла.

2 сентябрь – РСФСР Реввоенсоветы башҡорт ғәскәрҙәрен Петроградҡа тупларға ҡарар итә. Троцкий Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһын һәм Көньяҡтағы башҡорт йыйылма полктарын Петроградта ташларға тигән фарман бирә.

4 сентябрь – Бәләбәйҙәге Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы Петроградҡа ебәрелә.

14 сентябрь – Петроградта һәм Башҡортостанда башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороу буйынса Башҡорт хәрби комиссариатының фарманы сыға. Уның буйынса Петроградта Айырым Башҡорт кавалерия дивизия һәм Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы ойошторолоп бөтөргә тейеш була.

23 сентябрь – Башревком «Башҡорт Ҡыҙыл Армияһы көнөн» үткәреү тураһында ҡарар ҡабул итә.

Октябрь

Октябрь – Урал фронтында Муса Мортазиндың кавалерия бригадаһы ҡанлы һуғыштар алып бара. Был яуҙарҙа бригада үҙенең составының 60 процентын юғалта;

– Көньяҡ фронттан килгән Йыйылма Башҡорт уҡсы полкы Тосно районында аҡтарға ҡаршы һуғыша;

– Башҡорт кавалерия дивизияһы комиссары Н. Таһировтың юллауы буйынса, Мәскәүҙең Я. Свердлов исемендәге коммунистик университеты курсанттары Һиҙиәт Сәғәҙиев дивизияның сәйәси бүлеге мөдире, Ғабдулла Ибраһимов Башҡорт уҡсы бригадаһы комиссары итеп тәғәйенләнә;

– Петроград ҡалаһында 10 меңдән ашыу башҡорт ғәскәре туплана.

8 октябрь – Башҡорт ғәскәрҙәренә командирҙар әҙерләү маҡсатында 1-се Петроград пехота курстарында 200 кешелек һәм Петроград кавалерия курстарында 250 кешелек башҡорт бүлектәрен асыу тураһында Республика (РСФСР) Реввоенсоветының 1627-се фарманы сыға.

16 октябрь – Петроградта торған Башҡорт кавалерия дивизияһынан 3-сө кавалерия полкы, Башҡорт уҡсы бригадаһынан 3-сө уҡсы полкты айырып алып, Башҡорт артиллерия дивизионы менән берлектә фронтта Юденичҡа ҡаршы һуғышыу өсөн Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмө ойоштороло.

25 октябрь – Зәки Вәлидиҙең фарманы буйынса Стәрлетамаҡта Башҡорт хәрби комиссариаты янында Хәрби кәңәшмә булдырыла. Кәңәшмә һәр шәмбе үткәрелгән. Унда Башҡорт республикаһы менән хәрби йәһәттән идара итеү мәсьәләләре ҡаралған.

Ноябрь

9 ноябрь – Башҡорт төркөмөнөң 3-сө Башҡорт уҡсы полкы Карель фронтына күсерелә. Ә 3-сө Башҡорт кавалерия полкы 14 ноябрҙә Ҡыҙыл Армия Ямбург ҡалаһын алғансы фронтта һуғыша.

Декабрь

Декабрь – Петроградта башҡорт ғәскәрҙәренең тантаналы йыйылышы үтә. Унда Совет хөкүмәте исеменән башҡорт командирҙарына төрлө бүләктәр, наградалар тапшырыла. Әүхәҙи Ишмырҙинға ҡылыс, Нуриәғзәм Таһировҡа ҡиммәтле эйәр бүләк ителә. Башҡорт уҡсы бригадаһының комиссары Ғабдулла Ибраһимов Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була;

– фронттарҙағы башҡорт ғәскәрҙәре эштәре буйынса Революцион Совет ойоштороло. Уның рәйесе итеп Ахлау Ахлов тәғәйенләнә.

14 декабрь – Айырым саңғысылар батальонын ойоштороу тураһында Төркөстан фронты Башҡорт хәрби комиссариатына фарман бирә.

Декабрь аҙағы – Башҡорт кавалерия бригадаһы Ҡарғалы ауылына (Ырымбур янында) ялға ҡайтарыла. Бында ул 1920 йылдың апреленә тиклем тора.

1920 йыл

Ғинуар

Ғинуар – Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы Петроградтан Новгород губернаһына Муравьев казармаларына күсерелә. Бында улар артабан ойоштороломорға тейеш була.

Февраль

18 февраль – Петроградта Марс яланында башҡорт ғәскәрҙәренең Ҡыҙыл Армия яғына сығыуына бер йыл тулыу айҡанлы митинг булып үтә. Башҡорт ғәскәрҙәренә Петроград Советы исемләп байраҡ тапшыра;

– Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәренең ҡыҙылдар яғына сығыуының бер йыллығына арнап Петроградта «Бәхет көнө» тип исемләнгән йыйынтыҡ-альбом сығарыла.

28 февраль – Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы командиры Хәсән Әхмәров Башҡорт Совет Республикаһы запас ғәскәрҙәре идаралығының начальнигы итеп тәғәйенләнә.

Март

Март – Фронттарҙағы башҡорт ғәскәрҙәре эштәре буйынса Революцион Советтың рәйесе итеп Фәтхи Әхмәҙуллин тәғәйенләнә.
8 март – Сәйетгәрәй Мағазов Башҡорт республикаһы ғәскәрҙәренең Сәйәси-ағартыу идаралығы начальнигы итеп раҫлана.
13 март – Хәлил Тереғолов Үҙәк Башҡорт дезертирлыҡҡа ҡаршы комиссия рәйесе итеп тәғәйенләнә.
30 март – Ергән ауылында урынлашҡан Айырым Башҡорт запас уҡсы полкы Табын ауылына күсерелә;
– Ахлау Ахлов Стәрлетамаҡ нығытылған районы һәм гарнизоны начальнигы итеп тәғәйенләнә.

Апрель

29 апрель – Муса Мортазин етәкселек иткән Башҡорт кавалерия бригадаһы Польша фронтына оҙатыла.

Май

Май – Новгород губернаһына Муравьев казармаларында урынлаштырылған Башҡорт кавалерия дивизияһының өс полкынан икеһе таратылып, бер полк ойоштороала;
– РСФСР менән Финляндия сиген һаҡлаған Башҡорт уҡсы бригадаһын Латвия сигенә күсерәләр. Бригада Петроград хәрби округы ҡарамағында була.
4 май – Айырым Башҡорт запас уҡсы полкы Табын ауылынан Аллағыуат ауылына күсерелә.
17 май – Новгород губернаһында ойошторолған 1-се Башҡорт кавалерия полкы Польша фронтындағы Башҡорт кавалерия бригадаһына ҡушыла. Бригада 1-се, 28-се, 27-се полктарҙан тора.
26 май – Петроградта Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы полктарына Башҡорт республикаһы исеменән байраҡтар тапшырыла.

Июль

Июль – Муса Мортазин 12-се армияның Атлы төркөмө (төркөм Башҡорт кавбригадаһынан, 25-се кавбригаданан, 7-се кавполктан, 58-се кавполктан һәм 1-се Урал кавполкынан тора) командиры итеп тәғәйенләнә.
6 июль – Айырым Башҡорт уҡсы батальоны Польша фронтына һуғышҡа ебәрелә.

Август

12 август – Муса Мортазин Зәки Вәлиди хөкүмәте китеү сәбәпле Башҡортостанда башланған ихтилал тураһында ишетеп, отпускы алып ҡайтып китә. Бригада командиры итеп Якуп Кәлмитев тәғәйенләнә. Тиҙҙән бригада менән етәкселек А. Горбатовҡа тапшырыла.

Сентябрь

20 сентябрь – Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһының командиры итеп Әхмәтйән Тереғолов тәғәйенләнә.

Октябрь

9 октябрь – Башҡорт республикаһы запас ғәскәрҙәре идаралығын бөтөрөү тураһында Волга хәрби округының 214-се фарманы сыға.

Декабрь

10 декабрь – Башҡорт кавалерия бригадаһы ҙур юғалтыуҙар кисергәнлектән ике полкка ҡалдырыла. Полктарға 1-се, 2-се һандары бирелә.

1921 йыл

Февраль – Башҡорт кавалерия бригадаһы Киев хәрби округы командалығына буйһондорола;

– Петроград хәрби округы ҡарамағында Латвия сиген һаҡлаған Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы таратыла.

Март – Башҡорт кавалерия бригадаһы таратыла. РФСФР-ҙың Польша һәм Румыния менән сиген һаҡлау маҡсатында бригада айырым дүрт эскадронға бүленә.

Ноябрь – эскадрондар сик һаҡлауҙан алынып 2-се Черкассы дивизияһына беркетелә. Бында Червонный (Ҡыҙыл) казактарҙың 2-се дивизияһы составында 15, 16, 17-се башҡорт эскадрондарынан 12-се Черкассы полкы төҙөлә. 18-се башҡорт эскадроны шул уҡ дивизияның 7-се полкына ҡушыла.

1922 йыл

15 август – 12-се полкты БашЦИК шефлыҡҡа ала. Полк БашЦИК исемен йөрөтә башлай.

Октябрь – 12-се полк 8-се Черкассы полкы итеп үҙгәртелә. Полктан 200 башҡорт яугиры демобилизациялана. Улар урынына украиндар алына.

1923 йыл

12 ғинуар – БашЦИК 12-се (8-се) полкка элекке Башҡорт кавалерия бригадаһының батырлыҡтары өсөн Ҡыҙыл орден байрағы (Краснознаменское знамя) бүләк итә. Байраҡты 2-се дивизияның командалығы тапшыра.

1924 йыл

Апрель – 8-се Черкассы полкының башҡорт яугирҙары демобилизациялана. Ошоноң менән элекке Башҡорт кавалерия бригадаһының һуңғы яугирҙары тыуған яҡтарына ҡайтып төшә.

БАШҠОРТОСТАН АВТОНОМИЯҺЫНЫҢ ХӘРБИ УЧРЕЖДЕНИЕЛАРЫ

Башҡорт хәрби шураһы (Башҡорт ғәскәренең штабы)

(1918 йылдың 16 июненән 1919 йылдың 21 февраленә тиклем)

Рәйесе: **Әхмәтзәки Вәлиди.**
Урынбаҫары: поручик **Ғәбделхаҡ Ғәбитов.**
Адъютанттары:
поручик **Исмәғил Муһлиә,**
прапорщик **Ғариф Мөхәмәтйәров,**
прапорщик **Әбделбарый Өмөтбаев,**
поручик **Юнысов.**
Ағзалары:
Подпоручик **Ғәбделхаҡ Ғәбитов,**
Прапорщик **Ғәлимйән Таған,**
Прапорщик **Усман Тереғолов,**
Прапорщик **Ғариф Мөхәмәтйәров,**
Ротмистр **Әмир Ҡарамышев,**
Прапорщик **Мөхтәр Ҡарамышев,**
Поручик **Харис Туймаҡаев,**
Прапорщик **Станислав Бриц,**
Поручик **Исмәғил Муһлиә,**
Подполковник **Тереғолов,**
Прапорщик **Хәлил Тереғолов,**
Штабс-капитан **Ҡасим Еникеев,**
Прапорщик **Һарун Ҡорбанғәлиев,**
Талха Рәсүлев,
Мансур Мәғәсүмов,
Тәкиулла Ғисмәтуллин,
Ғәбделхай Иркәбаев,
Сәйетгәрәй Мағазов,
Искәндәр Солтанов.

Башҡорт хәрби шураһының бүлектәре

Строевой бүлек – Башҡорт хәрби шураһының төп бүлеге.
Мобилизация бүлеге – прапорщик **Хәлил Тереғолов,**
1 октябрҙән подполковник **Янышевский.**
Ирекле отрядтар бүлеге – подпоручик **Әхмәҙулла Бейешев.**
Артиллерия бүлеге – прапорщик **Мөхтәр Ҡарамышев.**
Хәрби-тәфтиш бүлеге – Искәндәр Солтанов.
Хужалыҡ бүлеге – ?
Интендант бүлеге – ?
Инженер бүлеге – ?

Башҡорт ғәскәри идаралығы

(1918 йылдың 1 октябренән
1919 йылдың 21 февраленә тиклем)

Нойон (начальник) – **Зәки Вәлиди.**
Нойон ярҙамсыһы – полковник **Янишевский,**
һуңынан полковник **Солтангәрәй Бикмәев.**
Нойондың шәхси адъютанты – подпоручик **Шаһибәк Үзбәков,**
һуңынан подпоручик **Әбдрәшитов.**
Йомош өсөн штаб-офицер – поручик **Харис Туймаҡаев.**
Башҡорт Хәрби Шураһы сәркәтибе – прапорщик **Ҡарамышев.**
Тәржемәсе, обер-офицер – **Сәйетгәрәй Мағазов.**

Административ бүлек начальнигы – ?
Хужалыҡ бүлеге – подполковник **Борисенко.**
Мобилизация бүлеге – полковник **Янишевский.**
Суд бүлеге – **Кричинский.**

БАШҠОРТОСТАН АВТОНОМИЯҺЫНЫҢ ҠОРАЛЛЫ КӨСТӘРЕ

Айырым Башҡорт корпусы

(составында 1-се һәм 2-се Башҡорт пехота дивизиялары,
21-се биттәге таблицаны ҡарағыҙ)

Башҡорт хөкүмәтенең комендант ротаһы
Командиры:
подпоручик **Тәхиулла Әлиев.**

Ярҙамсыһы:
подпоручик **Лотфурахман Мансуров.**

Башҡорт хәрби шураһы янындағы махсус команда
начальнигы: поручик Атланов.

Кантондарҙағы ирекле отрядтар

Арғаяш кантоны отряды (200 кеше)
командирҙары:
25 августан прапорщик **Ғариф Мөхәмәтйәров.**

Бөрйән-Түңгәүер кантоны отряды (180 кеше)
командирҙары:
прапорщик **Таһир Имаҡов.**
Ярҙамсыһы: **Ғәбделхәй Иркәбаев.**

Үҫәргән кантоны отряды (160 кеше)
командирҙары:
Усман Ҡыуатов, прапорщик **Ғабдулла Әмиров,**
23 августан ваҡытлыса прапорщик **Живицкий,**
1 сентябрҙән зауряд-прапорщик **Сәйетбатталов.**

Юрматы кантоны отряды (250 кеше)
командирҙары:
15 августан подпоручик **Әүхәҙи Ишмырҙин,**
1 октябрҙән подпоручик **Сөләймән Ишмырҙин.**

Тамъян-Ҡатай кантоны отряды (360 кеше)
командирҙары:
прапорщик **Усман Тереғолов.**

Етеырыу кантоны отряды (300 кеше)
командирҙары:
15 августан **Ғәбиҙулла Айҙаров.**

Ҡыпсаҡ кантоны отряды (180 кеше)
командирҙары:
Ғәзиз Әлмөхәмәтов,
июлдән прапорщик **Ғәлиев,**
23 августан прапорщик **Сөләймән Сыртланов.**

Туҡ-Соран кантоны отряды (160 кеше)
командирҙары:
14 августан ваҡытлыса прапорщик **Дәүләтшин,**
27 августан подпоручик **Хәлил Әлишев.**

Табын кантоны отряды (200 кеше)
командирҙары:
15 августан подпоручик **Шаһибәк Үзбәков.**
Ярҙамсыһы: прапорщик **Йәғәфәр Байышев.**

Дыуан кантоны отряды (225 кеше)
командирҙары билдәһеҙ.

Ҡошсо кантоны отряды (250 кеше)
командирҙары билдәһеҙ.

Ялан кантоны отряды (180 кеше)
командирҙары билдәһеҙ.

Көҙәй кантоны отряды (110 кеше)
командирҙары билдәһеҙ.

АВТОНОМИЯЛЫ БАШҠОРТ СОВЕТ РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ ХӘРБИ УЧРЕЖДЕНИЕЛАРЫ

Хәрби эштәр буйынса халыҡ комиссариаты (Башвоенкомат)

Хәрби комиссарҙар:
1919 йылдың февраленән **Зәки Вәлиди,**
1920 йылдың 26 июненән **Ахлау Ахлов.**

Хәрби комиссариаттың ҡарамағындағы учреждение һәм урындағы ғәскәрҙәре (1920 йылдың тәүге яртыһында)

1. Башҡорт республикаһының запас ғәскәрҙәре идаралығы (начальнигы полковник Хәсән Әхмәров).
2. Хәрби эштәр буйынса комиссариаттың идаралығы.
3. 11 кантон комиссариаттары.
4. Хәрби комиссариаттың комендант бүлеге.
5. Комендант командаһы (228 кеше).
6. Ҡарауыл командаһы (59 кеше).
7. Конвой командаһы (156 кеше).
8. Башҡорт запас уҡсы полкы (4203 кеше).
9. Айырым Башҡорт эскадроны (115 кеше).

10. Айырым Башҡорт еңел батареяһы (368 кеше).
11. Ат запасы (Конский запас), 62 кеше, аттар һаны 1300 баш.
12. Етеҙ почта эскадроны (Эскадрон летучей почты).
13. Айырым элемтә ротаһы (205 кеше, Етеҙ почта эскадроны менән бергә).
14. Айырым Башҡорт запас кавалерия дивизионы (594 кеше).
15. Айырым Башҡорт уҡсы батальоны (881 кеше).
16. Тыл ополчениеһы ротаһы.
17. Айырым уҡсы бригадаһының перевязка яһау отряды.
18. Һауығыусылар командаһы.
19. Комендант мунсалары идаралығы.
20. Саңғысылар батальоны.
21. 1-се Башҡорт территориаль пехота полкының кадры.
22. Ошо полктың мәктәбе.
23. Стәрлетамаҡ ҡалаһындағы йыйып оҙатыу пункты.
24. Ырымбур ҡалаһындағы йыйып оҙатыу пункты.
25. 153 олоҫ хәрби комиссариаттары.
26. Этап оҙатыу пункты.
27. Республиканың этап оҙатыу пункттары.
28. Кейем склады.
29. Отсрочкалар буйынса үҙәк комиссия.
30. Аҙыҡ-түлек магазины.
31. Ҡорал оҫтаханаһы.
32. Ырымбур ҡалаһында Каруанһарай коменданты идаралығы.
33. Башҡорт республикаһы комсостав әҙерләү курстары.
34. Артиллерия склады.
35. Хәрби-революцион трибунал.
36. Башҡорт хәрби-инженер дистанцияһы һәм уның ҡарамағындағы учреждениелар.
37. Дезертирлыҡҡа ҡаршы көрәш буйынса үҙәк комиссия һәм уның кантондарҙағы бүлектәре.

АВТОНОМИЯЛЫ БАШҠОРТ СОВЕТ РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ ҠОРАЛЛЫ КӨСТӘРЕ

Айырым Башҡорт бригадаһы

(1919 йылдың майынан июленә тиклем)

Командиры – **Сөләймән Ишмырҙин.**
Комиссары – **Хәлим Әмиров.**
Политбүлек начальнигы – **Зыя Ғимаҙиев.**

1-се Башҡорт уксы полкы.
Командиры – **Сөләймән Ишмырҙин.**
Комиссары – **Әхмәҙулла Ағишев.**

2-се Башҡорт уксы полкы.
Командиры – **Ибраһим Исхаҡов.**
Комиссары – **Абдулла Бүләков.**

1-се Башҡорт кавалерия полкы.
Командиры – **Усман Тереғолов.**
Комиссары – **Ғәббәс Ғабдразаҡов.**

2-се Башҡорт кавалерия полкы.
Командиры – **Хәлил Әлишев.**
Комиссары – **Ниғмәтйән Латипов.**

Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы

(1919 йылдың июленән 1920 йылдың июненә тиклем)

Начальниктары:
1919 йылдың июленән **Ахлау Ахлов.**
1920 йылдың февраленән **Яҡуп Кәлмитев.**
Комиссарҙары:
1919 йылдың июленән **Нуриәғзәм Таһиров,**
1920 йылдың башынан **Ғабдулла Ибраһимов.**
Штаб начальнигы – **Кудржицкий.**
Политбүлек начальниктары:
1919 йылдың сентябренән **Һиҙиәтулла Сәғәҙиев,**
1920 йылдың февраленән **Сафа Чанышев.**

1-се Башҡорт кавалерия полкы.
Командиры – **Рамаҙан Шәрипов.**
Комиссары – **Чанышев.**

2-се Башҡорт кавалерия полкы.
Командиры – **Хәлил Әлишев.**
Комиссары – ?

3-сө Башҡорт кавалерия полкы.
Командирҙары: **Каплан, Гагрин, Грязнов.**
Комиссары – **Әбдрәшитов.**

Айырым Башҡорт уҡсы бригадаһы

(1919 йылдың июленән 1921 йылдың майына тиклем)

Командирҙары:
1919 йылдың августынан **Хәсән Әхмәров,**
1920 йылдың февраленән **Хәлил Әлишев,**
1920 йылдың сентябренән **Әхмәтйән Тереғолов.**
Комиссарҙары:
1919 йылдың сентябренән **Ғабдулла Ибраһимов,**
1920 йылдың февраленән **Һиҙиәтулла Сәғәҙиев,**
1920 йылдың ноябренән **Титиев.**
Штаб начальнигы – **Заһит Гәрәев.**
Политбүлек начальнигы – **Мансуров.**

1-се Башҡорт уҡсы полкы.
Командиры – **Ниғмәтйән Таһиров.**
Комиссары – **Ивасов.**

2-се Башҡорт уҡсы полкы.
Командиры – **Ибраһим Исхаҡов.**
Комиссары билдәһеҙ.

3-сө Башҡорт уҡсы полкы.
Командиры билдәһеҙ.
Комиссары – **Уразов.**

Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы

(1919 йылдың июленән 1921 йылдың апреленә тиклем)

Командирҙары:
1919 йылдың июленән **Муса Мортазин,**
1920 йылдың 12–20 августы **Яҡуп Кәлмитев,**
1920 йылдың 20 августынан **Александр Горбатов.**
Комиссарҙары:
К. Богуславский, Р. Гутман, И. Беленький, В. Гофицкий.
Штаб начальниктары:
Сәғитов, Яҡуп Кәлмитев, Йәғәфәр Рәмиев, Ғәли Тереғолов.

1-се (1919 й. окт. **5-се**, 1920 й. майынан **27-се**)
Башҡорт кавалерия полкы.
Командирҙары:
Усман Ямбулатов, Казбек Айляров, Л. Эрадзе,

Хисаметдин Фәйзуллин.
Комиссарҙары – **Байышев, Н. Соров, Г. Кучаев.**

2-се (1919 й. окт. **6-сы**, 1920 й. майынан **28-се)**
Башҡорт кавалерия полкы.
Командирҙары:
Учаров, Әбдрәхимов, Ибраһим Мортазин, В. Тихомиров, Коваленко, Д. Панченко, Усман Ғайнанов, Потенко.
Комиссарҙары – **Хисмәтуллин.**

1-се Башҡорт кавалерия полкы.
(1920 йылдың июненән бригада составында)
Командиры – **Рамаҙан Шәрипов, Шәкир Әшрәпов.**
Комиссарҙары: **Ғәли Тереғолов.**

Петроград фронтындағы
Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмө

(1919 йылдың 15 октябренән 9 ноябренә тиклем)

Командиры: **Хәлил Әлишев.**
Комиссары: **Әхмәҙулла Агишев**, артабан **Ғәли Тереғолов.**
Штаб начальнигы: **Яҡуп Кәлмитев.**

3-сө Башҡорт кавалерия полкы
(составында 2 йәйәүле (360 штык) 2 атлы (240 ҡылыс) эскадрон)
Командиры: **Каплан.**
Комиссары: **Әбдрәшитов.**

3-сө Башҡорт уҡсы полкы
(3-сө батальон (575 штык)
Батальон командиры: **Әбдиев.**
Комиссар: **Бүләков.**

Айырым Башҡорт артиллерия дивизионы
Командиры билдәһеҙ.

ҠУЛЛАНЫЛҒАН СЫҒАНАҠТАР

Башҡортостан Республикаһының үҙәк тарих архивы фондтары

Р-395. Башкирское правительство.
Оп. 1. Д. 21. Л. 6.

Р-1201. Башкирский Военный Совет.
Оп. 2. Д. 1. Л. 3, 16, 20, Д. 2. Л. 3, 6, Д. 3. Л. 1, 2, 6, 20, 26, Д. 4. Л. 2, 15, Оп. 4. Д. 4. Л. 16.

Р-78. Оп. 1. Башкирское Войсковое Управление Правительства Башкирии.
Д. 1. Л. 1, 184, 185, Д. 17. Л. 2, 4, Д. 18. Л. 1.

Р-629. Оп. 1. Башкирское представительство при ВЦИК РСФСР.
Д. 2. Л. 32, 34, Д. 5. Л. 29, Д. 1242. Личное дело А. И. Бикбавова, Д. 1303. Л. 9–12, 15, 15 об., Д. 1306. Л. 104, 121, Д. 1371. 2, 2 об., 5.

Р-1780. Оп. 1. Народный комиссариат по военным делам Башкирской республики (Башнаркомвоендел).
Д. 9. Л. 5, 13, 32, Д. 10. Л. 64, Д. 11. Л. 49, 61, 65, 119, Д. 49. Л. 194.

Р-3168. Оп. 1. Управление запасных войск Башкирской республики.
Д. 2. Л. 58, Д. 6. Л. 163, Д. 9. Л. 4.

Р-1107. Оп. 1. Башкирский военно-революционный комитет (Башвоенревком).
Д. 2. Л. 44, Д. 7. Л. 2, Д. 10. Л. 13, 65, Д. 25. Л. 4, 21, 47, 56, Д. 30. Л. 40, 85, Д. 31. Л. 20, Д. 42. Л. 30, 31, Д. 76. Л. 44, Д. 107а. Л. 60, 60а, Д. 127. Л. 73, Д. 141. Л. 13, Д. 146. Л. 18, Д. 150. Л. 35, Д. 152. Л. 50.

Р-1736. Личный фонд Файзуллиной Е. В.
Оп. 1. Д. 4. Воспоминания о Файзуллине Х. Ш.

Р-394. Президиум Верховного Совета БАССР.
Оп. 1. Д. 233. Л. 25.

Р-933. Совет Министров БАССР.
Оп. 2. Д. 264, Д. 26. Личное дело А. А. Биишева.

Р-387. Министерство финансов БАССР.
Оп. 3. Д. 64. Л. 13, 13 об.

Башҡортостан Республикаһының үҙәк ижтимағи ойошмалар архивы фондтары

Ф. 9776. Оп. 2. Архив партархива.

Д. 3. Л. 31, 96, 116, Д. 4. Л. 77, 166, 170, Д. 8. Л. 27, 90, 99, 152, 155, 161, Д. 9. Л. 112.

Ф. 10287. Оп. 1. Коллекция документов по истории революционных событий и Гражданской войны в Башкирии.

Д. 94, Д. 116, Д. 163. Л. 1–3, Д. 278. Л. 10, 29.

Ф. 1832. Отдел по собиранию и изучению материалов по истории Компартии и Окт. Революции Башобкома ВКП(б) (Истпарт).

Оп. 2. Д. 84. Л. 1–18, Оп. 2. Д. 100. Л. 3–5, Оп. 2. Д. 112, Оп. 2. Д. 121. Л. 5, Оп. 2. Д. 130. Л. 3, Оп. 3. Д. 336. Л. 6, Оп. 4. Д. 291. Л. 1, Оп. 4. Д. 294. Л. 1, 3, 10–18.

Ф. 22. Оп. 2. Областной комитет РКП(б) Малой Башкирии. Д. 286, 287. Дело С. Г. Ишмурзина, Д. 289. Дело К. Х. Ишмухаметова, Д. 492. Дело А. Ф. Муртазина, Д. 493. Дело Д. Л. Муртазина, Д. 310. Дело М. Б. Карамышева, Д. 513. Дело К. Н. Низаметдинова.

ҒИЛМИ ӘҘӘБИӘТ ҺӘМ БАҪЫЛҒАН СЫҒАНАҠТАР

А. А. Валидов – организатор автономии Башкортостана. У истоков федерализма в России (1917–1920). Документы и материалы. Ч. 1 / Сост. Н. М. Хисматуллин, Р. Н. Бикметова, А. М. Галеева, Ю. Р. Сайранов. Уфа: Китап, 2005.

Асфандияров А. З. История сел и деревень Башкортостана. Кн. 5. Уфа: Китап, 1994.

Асфандияров А. З. Кантонное управление в Башкирии (1798–1865 гг.). Уфа: Китап, 2005.

Бабич Шәйехзада. Беҙ үҙебеҙ – башҡорттар. Өфө: Китап, 1995.

Башкирская энциклопедия. Т. 1–3. Уфа: Башкирская энциклопедия, 2005–2008.

Башкирские родословные. Уфа: Китап, 2002.

Башкирское войско в Польском походе 1771–1773 гг. Сб. документов. Уфа, 2009.

Башкиры в обороне Петрограда. Исторческие документы // Ватандаш. 1997. № 2.

Валиди Тоган А.-З., Инан А., Таган Г. Служение: Сборник трудов башкирских ученых-эмигрантов – лидеров национально-освободительного движения 1917–1920 годов / Сост. и пер. А. М. Юлдашбаев. Уфа: Китап, 2007.

Воинская слава башкирского народа. Книга-альбом / Авт.-сост. Ярмуллин А. Ш. Уфа: ДизайнПолиграфСервис, 2007.

Вәлиди Туған Ә. Ә. Хәтирәләр // Төрөксәнән тәржемә. Өфө: Китап, 1996.

18 февраля 1919 года (Материалы и документы по истории перехода Башкирии на сторону Советской власти). Уфа, 1923.

Ғабдулла Ибраһимов. Петроград өсөн көрәштә башҡорттар // Ватандаш. 1997. № 2.

Дерябин А. И. Гражданская война в России 1917–1922: Красная армия / А. И. Дерябин; Худож. Р. Паласиос-Фернандес. М.: ООО «Издательство АСТ»; ООО «Издательство Астрель», 2003.

За власть Советов. Воспоминания участников Октябрьской Революции и гражданской войны в Башкирии. Уфа, 1961.

Камалов Г. Ф. Отдельная Башкирская кавалерийская бригада на фронтах гражданской войны. Уфа, 1972.

Касимов С. Ф. Автономия Башкортостана: становление национальной государственности башкирского народа (1917–1925 гг.). Уфа: Китап, 1997.

Книга памяти жертв политических репрессий Республики Башкортостан. Т. 1, 3, 5. Уфа: Китап, 1997, 2001, 2005.

Кульшарипов М. М. Башкирское национальное движение (1917–1921 гг.). Уфа: Китап, 2000.

Мардамшин Р. Р. Башкирская чрезвычайная комиссия (Страницы истории). Уфа: Китап, 1999.

Мардамшин Р. Р. Из когорты борцов // Ватандаш. 1997. № 12.

Мифтахов Риф. Ишмырҙиндар яҙмышы // Башҡортостан. 1990 йыл, 22 декабрь.

Мортазин М. Л. Әҫәрҙәр / Төҙ. һәм руссанан тәрж. Д. Мәһәҙиев. Өфө: Китап, 1994.

Мостафа Солтанов. Көйөргәҙе яугирҙары // Ватандаш. 1998. № 2.

Насиров Рәүеф. Ҡылыс ҡында килешә. Тарихи очерктар. Публицистика. Өфө: Полиграфия комбинаты нәшриәте, 2000.

Насиров Рәүеф. Уҙамандарҙы эҙләйем. Өфө: Китап, 1997.

Насиров Р., Ҡотошев Р. Комиссар Сәғәҙиев // Ватандаш. 2000. № 6.

Народные комиссары и министры здравоохранения Башкирской АССР (Республики Башкортостан) / Сост. Киньябулатов А. У., Евсюков А. А., Зайнуллин Р. Т. Уфа, 2008.

Национально-государственное устройство Башкортостана (1917–1925 гг.). Документы и материалы: В 4 т. / Авт.-сост. Б. Х. Юлдашбаев. Т. 1–4. Уфа: Китап, 2002–2008.

Нәҙершин Ф. Таһир Имаҡов // Каруанһарай. 2006. № 19 (124).

Рахимов Р. Н. Башкирская конница в Крымской войне 1853–1856 гг. // Южный Урал: история, историография, источники. Межвузовский сборник научных работ. Вып. 1. Уфа, 2008. С. 105–115.

Сираев З. И. Башкирские национальные части Красной Армии в гражданскую войну // Октябрьская революция и рождение Советской Башкирии. Уфа, 1959.

Сираев З. И. Участие башкирских национальных частей Красной Армии в разгроме интервентов под Петроградом осенью 1919 г. Ученые записки // Башк. ун-т, 1957. Вып. 1. Серия ист. наук, № 1. С. 151–175.

Слатин И. Башкирский кавалерийский советский полк на Петроградском фронте // Военно-исторический сборник. Вып. 4. М., 1920.

Солтангәрәев Рәшит, Хамматов Яныбай, Ямалетдинов Мәүлит. Муса батыр. Повестар, роман. Өфө: Китап, 1992.

Список лиц, награжденных орденом Красного Знамени и почетным революционным оружием. М., 1926.

Сөләймәнов Р. С. Башҡорт халыҡ музыка сәнғәте. 2-се том. Өфө: Китап, 2002.

Тагиров Т. Суровая проза жизни. Уфа, 2004.

Таймасов Р. С. Участие башкир в Гражданской войне. Кн. 1. Уфа, 2009.

Трудный путь к правде / Сост. Г. Д. Иргалин, Н. П. Каменев. Уфа: Китап, 1997.

Туракаев И. Башкирские части в гражданскую войну. Уфа: Башкнига, 1929.

Улар тәүгеләр ине (Ҡаһармандар хаҡында документтар)// Ағиҙел. 1970. № 2.

Усманов А. Н. Башкирский народ в Отечественной войне 1812 года. Уфа, 1964.

Фархшатов М. Н. Галимджан Таган в эмиграции: Биографический очерк. Уфа, 2003.

Хакимов Р. Ш. Земля Аргаяшская: история и современность. Челябинск, 2005.

Экспедиция материалдары – 2003: Йылайыр районы. Өфө: БР ММ РУҒМҮ, 2006.

Әхмәтзәки Вәлиди Туған. Башҡорттар тарихы (автор ҡульъяҙмаһынан тәржемә). Тулыландырылған 2-се баҫмаһы. Өфө: Китап, 2005.

Ярмуллин А. Ш. Автономиялы Башҡортостан байрағы аҫтында. Өфө, 2009.

Ярмуллин А. Ш. Башкирская военная символика периода Гражданской войны // Проблемы востоковедения. 2010. № 3.

Ярмуллин А. Ш. Башҡорт ғәскәрҙәренең Петроградта нәшер ителгән «Бәхет көнө» журнал-альбомы // Ватандаш. 2007. № 1.

Ярмуллин А. Ш. Институт полковых мулл в башкирских войсках в годы Гражданской войны // Проблемы востоковедения. 2010. № 3.

Ярмуллин А. Ш. Комбриг М. Л. Муртазин и боевой путь Отдельной Башкирской кавалерийской бригады (к 120-летию со дня рождения) // Проблемы востоковедения. 2011. № 1.

www.stalin.memo.ru
www.lists.memo.ru

Китапта ҡулланылған иллюстрациялар Башҡортостан Республикаһының Милли музейы, 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы музейы, Башҡортостан Республикаһының Үҙәк тарих архивы, Башҡортостан Республикаһының Үҙәк ижтимағи берекмәләр архивы, Башҡортостан Республикаһының Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханаһы фондтарынан, шәхси архивтарҙан һәм интернеттан алынды.

Научно-публицистическое издание

ЯРМУЛЛИН Азат Шакирьянович

Из истории Башкирской армии

(на башкирском языке)

Мөхәррире *Ғәлимова А. Р.*
Биҙәлеш мөхәррире *Мөхтәруллин А. Р.*
Техник мөхәррире *Исхаҡова Г. Р.*
Корректорҙары *Саниева Л. Ф., Харрасов Ф. Н.*

Баҫырға ҡул ҡуйылды 05.05.12. Форматы 60 x 90 $^{1}/_{16}$. Офсет ҡағыҙы. Таймс гарнитураһы.
Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 17,5 + 2,0 вкл. Шартлы буяу отт. 26,0.
Иҫәп-баҫма таб. 18,20 + 1,98 вкл. Тиражы 2000 дана. Заказ 1.0040.12.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

Әҙер файлдарҙан баҫылды.

Башҡортостан Республикаһының
Өфө полиграфкомбинаты дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

Азат Шәкирйән улы Ярмуллин Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте, Граждандар һуғышы осорондағы башҡорт ғәскәрҙәре, ғөмүмән, башҡорттарҙың хәрби тарихын өйрәнә. "Воинская слава башкирского народа" (2007) һәм "Автономиялы Башҡортостан байрағы аҫтында" (2009) исемле китаптар авторы. Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премия лауреаты (2010). Әлеге көндә "Башҡортостан энциклопедияһы"нда эшләй.

Зәйнәб
Биишева
исемендәге
"КИТАП"
нәшриәте